# БАШҠОРТ ХАЛЫҠ ИЖАДЫ



**II**
**ТОМ**

# BASHKORT PEOPLE'S CREATIVE ACTIVITY

## LEGENDS

# БАШКИРСКОЕ НАРОДНОЕ ТВОРЧЕСТВО

## ПРЕДАНИЯ И ЛЕГЕНДЫ

# BASKURT HALIK FOLKLORU

## RIVAYET, EFSANE

УФА
«КИТАП»
1997

# БАШҠОРТ ХАЛЫҠ ИЖАДЫ

## РИҮӘЙӘТТӘР ЛЕГЕНДАЛАР

## II ТОМ

ӨФӨ
«ҠИТАП»
1997

ББҠ 82.3 Баш
Б 29

Мөхәрририәт: *Әхмәт Сөләймәнов* (баш мөхәррир), *Ҡәҙим Аралбаев, Рауил Бикбаев,* |*Наил Бикбулатов,*| *Салауат Галин, Нур Зарипов, Фәнүзә Нәҙершина, Зиннур Ураҡсин, Сабир Шәрипов, Ғайса Хөсәйенов*

Төҙөүсеһе, инеш мәҡәлә һәм аңлатмалар яҙыусы —**Фәнүзә Нәҙершина**

Яуаплы мөхәррирҙәре — |*Кирәй Мәргән*| менән *Әхмәт Сөләймәнов*

Нәшриәт мөхәррире — *Мәһиҙә Игебаева*

**Күсереп баҫҡанда томға һылтаныу мотлаҡ.**

Редакционная коллегия: *Ахмет Сулейманов* (главный редактор), *Кадим Аралбаев, Равиль Бикбаев,* |*Наиль Бикбулатов,*| *Салават Галин, Нур Зарипов, Фануза Надршина, Зиннур Ураксин, Сабир Шарипов, Гайса Хусаинов*

Составление, вступительная статья, комментарии — **Фанузы Надршиной**

Ответственные редактора — |*Кирэй Мэргэн*| и *Ахмет Сулейманов*

Редактор издательства — *Магида Игебаева*

**При перепечатке ссылка на том обязательна.**

Б 29 **Башҡорт халыҡ ижады:** Риүәйәттәр, легендалар. Икенсе том. — Өфө: «Китап», 1997. — 440 бит.

Был томға мифологик, этногенетик, топонимик, тарихи легенда, риүәйәттәр индс. Инеш мәҡәләлә уларҙың идея-тематик һәм художестволы үҙенсәлектәре асыла.

Б $\frac{4702110500-180}{М\ 121(03)-97}$ 59—97 ББҠ 82.3 Баш

ISBN 5-295-01572 (т. 2)
ISBN 5-295-01393-6

© Составление Надршиной Ф., 1997

## РИҮӘЙӘТ ҺӘМ ЛЕГЕНДАЛАР — ХАЛЫҠ ТАРИХЫ

Һәр халыҡтың ижадында кешелектең тарихи хәтерен мәңгеләштергән һәм шуның менән ифрат ҙур әһәмиәткә эйә булған жанрҙар бар. Риүәйәт, легенда һәм уларға яҡын башҡа хикәйәләр тап ана шундайҙарҙан. Бындай хикәйәләрҙең бәҫе, ижтимағи вазифаһы халыҡтың үҙе тарафынан ғәжәп тапҡыр рәүештә «тарих» тигән мәғәнәле атама менән әйтеп бирелгән. Фольклористикала уларға ҡарата йыш ҡына «тарихи проза» тигән термин ҡулланыла.

Башҡорт легендалары һәм төрлө ышаныуҙарға ҡоролған хикәйәләр хаҡындағы тәүге мәғлүмәттәр X быуатҡа ҡайтып ҡала. 922 йылда башҡорттар араһында булып киткән ғәрәп хәлифәте илсеһе Әхмәт Ибн-Фаҙлан яҙмаларында башҡорттарҙың мәжүси ышаныуҙары хаҡында ифрат ҡиммәтле мәғлүмәттәр бар. Бороңғо башҡорт ҡәбиләләренең ҡоштарға табыныуын дәлилләү ниәтендә сәйәхәтсе атаҡлы «Сыңрау торна» легендаһының ҡыҫҡаса йөкмәткеһен килтерә [1].

Риүәйәт һәм легендаларҙың үрнәктәрен урта быуаттарҙың үҙенсәлекле әҙәби-тарихи ҡомартҡыһы булған шәжәрәләрҙә осратырға мөмкин. Шәжәрәләрҙәге исемдәр теҙмәһе теге йәки был ырыу башлығы заманында булып үткән тарихи ваҡиғаларҙы, ҡәбилә-ырыу тормошон ҡушып һөйләү, шуларға бәйле рәүештә халыҡ телендә йөрөгән төрлө риүәйәт, легендаларҙы иҫкә алыуҙар менән аралашып киткеләгән. Мәҫәлән, XVI быуатта яҙыла башлаған Юрматы ырыуы шәжәрәһе туранан-тура мифологик легенданан башлана. Шәжәрәнең юрматылар тарихына ҡағылған төп тексы иһә халыҡ телендә йөрөй торған тарихи риүәйәттәргә бик яҡын тора [2].

---

[1] Ковалевский А. П. Книга Ахмеда Ибн-Фадлана о его путешествии на Волгу в 921—922 гг.: Статьи, переводы и комментарии. — Харьков, 1956. С. 131.

[2] Башкирские шежере / Сост., перевод текстов, введ. и коммент. Р. Г. Кузеева. — Уфа, 1960. С. 27—28.

Ҡыпсаҡ ҡәбиләһенең ҡарағай-ҡыпсаҡ ырыуы шәжәрәһе «Бабсаҡ менән Күсәк бей» исемле эпик ҡомартҡы йөкмәткеһен риүәйәт формаһында теркәп ҡалдырыуы менән иғтибарҙы йәлеп итә[3].

Ҡайһы бер шәжәрәләргә хатта төрки телендә һөйләшеүсе күп кенә халыҡтарға билдәле булған легендаларҙың фрагменттары, йәғни дөйөм төрки сюжеттар (әйтәйек, төрки халыҡтарының сығышы хаҡындағы риүәйәт һәм легендалар) килеп инә[4]. Революцияға тиклем башҡорт халҡының тарихы һәм мәҙәниәте менән ҡыҙыҡһынған ҡайһы бер ғалимдарҙың шәжәрәләрҙе «риүәйәт», «хроника», «тарихи яҙма» тип атауы[5] осраҡлы хәл түгел. Башҡорт шәжәрәләрен ентекләп өйрәнгән совет этнографы Р. Ғ. Кузеев генеалогия йылъяҙмаларында риүәйәт һәм легендаларҙың йыш осрауын һыҙыҡ өҫтөнә ала, уларҙы тарихи-этник процестарҙы өйрәнеүҙә мөһим сығанаҡ итеп ҡарай[6]. Ғ. Б. Хөсәйенов та башҡорт шәжәрәләренең ҡиммәтле тарихи-әҙәби ҡомартҡы булыуҙарын билдәләй[7].

Быуындан быуынға күсә килгән риүәйәт һәм легендаларҙа халыҡтың тарихы, тормош-көнкүреше, ғөрөф-ғәҙәттәре, аң үҫеше, эстетик ҡараштары сағылған. Шуға күрә лә фольклорҙың ғәйәт үҙенсәлекле был төрө элек-электән башҡорт халҡының тарихы менән ҡыҙыҡһынған ғалимдарҙың, сәйәхәтселәрҙең иғтибарын үҙенә тартҡан.

Ауыҙ-тел ижады әҫәрҙәренә мөһим тарихи-этнографик сығанаҡ итеп ҡарау йәһәтенән В. Н. Татищевтың эшмәкәрлеге иғтибарға лайыҡ. Башҡорттарҙың килеп сығышы, уларҙың артабанғы яҙмышы, рус дәүләтенә ҡушылыу тарихы кеүек мәсьәләләргә ҡағылғанда, В. Н. Татищев фәнни хеҙмәттәр менән бергә халыҡ риүәйәттәренә лә мөрәжәғәт итә[8].

Риүәйәт һәм легендалар Татищевтың замандашы, атаҡлы тарихсы П. И. Рычковтың да күҙ унынан ситтә ҡалмаған. Башҡортостандың тарихына, ер-һыу атамаларына бәйле күҙәтеүҙәрендә лә йыш ҡына халыҡ хикәйәләренә мөрәжәғәт иткән. Был хикәйәләрҙә сағылған ысынбарлыҡ менән уйҙырмалылыҡтың нисбәтенә ҡарап, Рычков фольклор прозаһының жанр төрҙәрен ярайһы уҡ аныҡ күҙаллай. Уның «предания», «сказания», «рассказ» тип ата-

[3] Шунда уҡ. 110—111-се б.

[4] Шунда уҡ. 93-сө б.

[5] Юматов В. Древние предания башкирцев Чубиминской волости // Оренбургские губернские ведомости, 1848. № 7; Лосиевский М. В. Былое Башкирии и башкир по легендам, преданиям и хроникам // Справочная книжка Уфимской губернии. — Уфа, 1883. Отд. V. С. 368—385; Назаров П. С. К этнографии башкир // Этнографическое обозрение. — М., 1890. № 1. Кн. 1. С. 166—171.

[6] Кузеев Р. Г. Башкирские шежере как исторический источник // Башкирские шежере. — Уфа, 1960. С. 9, 178, 185, 187.

[7] Хөсәйенов Ғ. Б. Заман. Әҙәбиәт. Әҙип. — Өфө, 1978. 90-сы бит.

[8] Татищев В. Н. История Российская. — М.; Л., Т. IV, 1964. С. 66; Т. VII, 1968. С. 402. В. Н. Татищевтың башҡорт фольклорын өйрәнеү өлкәһендәге хеҙмәттәре хаҡында ҡарағыҙ: Мәмбәтов М. Ә. XVIII быуатта башҡорт фольклорын йыйыу һәм өйрәнеү эшендәге тәүге аҙымдар // Әҙәбиәт. Фольклор. Әҙәби мираҫ. — Өфө, 1976. 118—130-сы б.

ған халыҡ әҫәрҙәре башлыса ысын тормош күренештәренә арналған риүәйәттәрҙән ғибәрәт. Шул уҡ ваҡытта, небылицы, поверие тигән атамалар иһә халыҡ фантазияһы, мифологияһы менән бәйле легендаларҙы аңлата[9]. Ошонан сығып, башҡорт фольклористикаһында ҡабул ителгән хәҙерге классификацияның нигеҙе асылда П. И. Рычков хеҙмәттәренә барып тоташа тиһәк тә хата булмаҫ.

XVIII быуаттың икенсе яртыһында Урал буйлап сәйәхәт иткән ғалимдарҙың юлъяҙмаларында ырыу атамаларына, ер-һыу исемдәренә бәйле риүәйәт һәм легендалар осрай. П. С. Паллас, мәҫәлән, башҡорттарҙың этник составы хаҡында ҡайһы бер мәғлүмәттәр менән бер ҡатарҙан Шайтан-Ҡөҙәй ырыуы тураһындағы халыҡ риүәйәтен телгә алып китә[10].

Академик И. И. Лепехин яҙмаларында Торатау, Йылантау һ. б. урындарға ҡарата халыҡ телендә йөрөгән риүәйәт, легендаларҙың йөкмәткеһе бирелә[11].

Шулай ҙа башҡорт халыҡ ижады менән ныҡлап ҡыҙыҡһыныу XIX быуатта башлана.

XIX быуаттың беренсе яртыһында шағир-декабрист П. М. Кудряшев, атаҡлы лексикограф В. И. Даль, крайҙы өйрәнеүсе В. С. Юматов һ. б. алдынғы ҡарашлы рус ғалимдарының башҡорт халҡының ғөрөф-ғәҙәттәренә, риүәйәт һәм легендаларына бағышланған махсус мәҡәләләре донъя күрә[12]. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, был мәҡәләләрҙә риүәйәт һәм легендаларҙың тулы текстары, уларҙың ҡайҙа, ҡасан, кемдән яҙылып алыныуы хаҡында тулы мәғлүмәттәр юҡ. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, рус ғалимдарының яҙмалары халыҡтың ул замандағы ижад репертуарында ниндәйерәк характерҙағы риүәйәт һәм легендалар йәшәүен бер ни тиклем күҙ алдына килтерергә мөмкинлек бирә.

Халҡыбыҙҙың космогоник ҡараштарын сағылдырған легендалар беҙҙә әле бик аҙ яҙып алынған. Ошо йәһәттән ҡарағанда ла, П. Кудряшевтың мәҡәләһе ҙур әһәмиәткә эйә. «Башҡорттарҙа, — ти ул, — донъя, ғәләм төҙөлөшө хаҡында ғәжәп һәм көлкөлө фекерҙәр йөрөй: улар уйлауынса, йондоҙҙар һауаға йыуан тимер сылбырҙар менән аҫылып ҡуйылған; ер ҙур өс балыҡ өҫтөндә тора, балыҡтарҙың береһе инде үлгән, шуға күрә ахырызаман яҡынлашып килә һ. б.»

---

[9] Рычков П. И. Топография Оренбургской губернии. Т. I. — Оренбург, 1887.

[10] Паллас П. С. Путешествие по разным провинциям Российского государства. Перевод с немецкого. В 3-х частях. Ч. II, кн. I. — СПб., 1786. С. 39.

[11] Лепехин И. И. Полное собрание ученых путешествий по России, издаваемое императорской Академией наук в 5-ти томах. Т. IV. — СПб., 1822. С. 36—64.

[12] Кудряшев П. М. Предрассудки и суеверия башкирцев // Отечественные записки. 1826, ч. 28. № 78. С. 65—82; № 79. С. 206—223; Даль В. И. Башкирская русалка / Москвитянин. 1843, № 1. С. 97—119; Юматов В. С. Древние предания башкирцев Чубиминской волости // Оренбургские губернские ведомости. 1848. № 7. С. 45—48; Его же. О названии башкирцев // Оренбургские губернские ведомости. 1847. № 24. С. 297—298.

В. И. Даль яҙмаларында ла, нигеҙҙә, мифологик йүнәлешле легендалар урын ала («Йылҡысыҡҡан күл», «Шүлгән», «Таш эт», «Тирмән тауы», «Һанайһары менән Шайтанһары»).

В. С. Юматов мәҡәләһендә иһә меңле ырыуы атамаһының килеп сығышы хаҡындағы этнонимик легенданан өҙөк килтерелә; Башҡортостанда йәшәгән Аҡһаҡ-Ҡилембәт менән Ҡаракилембәт исемле нуғай мырҙаларының үҙ-ара ыҙғышы тураһында, был ыҙғыштан башҡорттарҙың яфа сигеүе һәм рус батшаһы Иван Грозныйға мөрәжәғәт итеүҙәре кеүек тарихи ваҡиғаларҙы сағылдырған риүәйәттәр телгә алына. В. С. Юматовтың: «Мин риүәйәттәрҙе ҡыҫҡартып бирҙем. Ләкин улар башҡорттарҙа, ғөҙәттә, драматик формала йөрөй. Драматик форма хикәйәне хәтерҙә нығыраҡ һаҡлау өсөн уңайлы», — тигән юлдары иғтибарға лайыҡ.

XIX быуаттың икенсе яртыһында Рәсәйҙә революцион-демократик йүнәлештәге ижтимағи фекерҙең көсәйеүе һөҙөмтәһендә, фән һәм мәҙәниәт өлкәһендә тыуған активлыҡ Башҡортостан ерлегенә лә йоғонтоһоҙ ҡалманы. Алдынғы рус ғалимдарын башҡорт халҡының азатлыҡ өсөн алып барған көрәше, данлы тарихы, үҙенсәлекле тормош-көнкүреше, йыры һәм моңо ҡыҙыҡһындырҙы. М. В. Лоссиевский, Р. Г. Игнатьев, Ф. Д. Нефедовтарҙың Салауат темаһына мөрәжәғәт итеүе[13] осраҡлы хәл түгел, әлбиттә. Башҡорт халҡының милли батырына бағышланған мәҡәлә һәм очерктарында был яҙыусылар, тикшеренеүселәр тарихи документтар менән бергә ауыҙ-тел ижады әҫәрҙәренә, беренсе нәүбәттә риүәйәт һәм легендаларға, таянып эш иттеләр.

XIX б. аҙағы — XX б-ң башына тиклем башҡорт халыҡ ижады өлгөләрен ғилми нигеҙҙә яҙып алған ғалимдар араһынан С. Г. Рыбаков менән А. Г. Бессоновтарҙың эшмәкәрлеген айырыуса билдәләп үтергә кәрәк.

Үҙенең «Музыка и песни Уральских мусульман с очерком их быта» (СПб, 1897) тигән китабында С. Г. Рыбаков башҡорт халыҡ йырҙарының йөҙҙән ашыу үрнәген (ноталары менән) урынлаштырған. Шулар араһында «Ҡара юрға», «Сыңрау торна», «Буранбай», «Ынйыҡай менән Юлдыҡай» кеүек легендалы йырҙар ҙа бар. Ҡайһы бер йырҙарҙың («Ашҡаҙар», «Абдрахман», «Сибай» һ. б.) риүәйәттәре, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, бик ныҡ ҡыҫҡартып бирелгән. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, С. Рыбаков хеҙмәтенең әһәмиәте ҙур: уның буйынса башҡорт халҡының уҙған быуаттағы йыр репертуарын, күпселек йырҙарҙың көй + һүҙ + риүәйәт формаһында йәшәүен, йәғни уларҙың жанр үҙенсәлектәрен асыҡтан-асыҡ күҙ алдына баҫтырырға мөмкин.

А. Г. Бессонов XIX быуат аҙаҡтарында Өфө, Ырымбур губер-

---

[13] Нефедов Ф. Д. Движение среди башкир перед Пугачевским бунтом; Салават башкирский батыр // Русское богатство. 1880. № 10. С. 83—100; Лоссиевский М. В. Пугачевский бригадир Салават и Фариза // Волжско-Камское слово. 1882. 221; Игнатьев Р. Г. Башкир Салават Юлаев — пугачевский бригадир, певец и импровизатор // Известия общества археологии, истории и этнографии при Казанском университете. — Казань, 1893. Т. 9; Отд. изд. Казань, 1894.

наларының күп кенә өлөшөн, Силәбе, Исет провинцияларын йөрөп сығып, башҡорт фольклорының сәсмә жанрҙары буйынса бай материал туплаған. Уның үҙе үлгәндән һуң донъя күргән әкиәттәр йыйынтығында [14] тарихи йөкмәткеле бер нисә риүәйәт тә бирелгән («Башҡорт тарихы», «Йәноҙаҡ батыр» һ. б.).

XX быуаттың башында башҡорттарҙың рухи һәм матди культураһы менән ҡыҙыҡһыныусы рус ғалимдары араһында атаҡлы этнограф С. И. Руденконың хеҙмәттәре айырыуса ҙур әһәмиәткә эйә. «Башҡорттар» тигән монографияһында ла, айырым мәҡәләләрендә лә С. И. Руденко 1906—1907, 1912 йылдарҙа халыҡ теленән яҙып алынған күп кенә мифологик хикәйәләр һәм ырым-ышаныуҙарҙы телгә ала [15]. Материалдарының бер өлөшөн ул «Башҡорттарҙың әкиәт һәм риүәйәттәре» тигән исем менән 1908—1909 йылдарҙа француз телендә баҫтырып сығара [16].

Был осорҙа башҡорт риүәйәт һәм легендаларын яҙып алыуҙа Б. Юлыев, А. Әлимғолов кеүек халыҡтың үҙ араһынан сыҡҡан һәүәҫкәрҙәрҙең исемдәрен дә телгә алып китергә кәрәк [17].

Шулай итеп, Октябрь революцияһына тиклемге осорҙа уҡ халыҡ хикәйәләренең ҡайһы бер үрнәктәре яҙып алынған. Әммә был тарихи-этнографик материалдарҙы ҡеүәтләү рәүешендә килтерелгән риүәйәт һәм легендаларҙың күпселеге ҡыҫҡаса һөйләп сығылған йөкмәтке хәлендә, бәғзеләре әҙәби эшкәртелгән. Мәҫәлән, М. В. Лоссиевский менән Р. Г. Игнатьев тарафынан баҫтырып сығарылған «Шайтан себендәре» легендаһы [18] шундайҙарҙан.

Башҡорт халҡының ауыҙ-тел ижадын системалы рәүештә йыйыу һәм өйрәнеү тик Октябрь революцияһынан һуң ғына башланып китте. Был эштең башлаусылары һәм яйға һалыусылары булып ғилми ойошмалар, ижади союздар һәм юғары уҡыу йорттары торҙо.

Егерменсе, утыҙынсы йылдарҙа уҡ инде фольклорҙың айырым жанрҙары буйынса мәҡәләләр, йыйынтыҡтар бер-бер артлы донъя күрә килде. Риүәйәт һәм легендаларҙы яҙып алыу, баҫтырып сығарыу өлкәһендә лә байтаҡ ҡына эштәр башҡарылды. Был йәһәттән иң элек Мөхәмәтша Буранғоловтың эшмәкәрлеген күрһә-

---

[14] Башкирские народные сказки / Запись и перевод А. Г. Бессонова. Редакция, введение и примечания проф. Н. К. Дмитриева. Под общей редакцией акад. И. Ю. Крачковского. — Уфа, 1941.

[15] Руденко С. И. Башкиры: Историко-этнографические очерки. — М.; Л.: Изд. АН СССР, 1955. С. 314—327; Его же. Башкирские сказки и поверья // Археология и этнография Башкирии. Т. V. — Уфа, 1973. С. 17—31.

[16] Roudenko S. Traditions et contes Bachkirs // Revue de Traditions populairs. — Paris, XXIII, №№ 2—3; 1908, XXIX, №№ 4—6, 1909.

[17] Юлуев Б. Аждаха-змей в рассказах башкир // Этнографическое обозрение, 1892, № 2—3. С. 245—248; «Башкирские батыры Кабанбай и Узянбай // Этнографическое обозрение. 1899. № 3. С. 175—181; Алимгулов А. Башкирские мифологические рассказы // Вестник Оренбургского учебного округа. 1915. № 5. С. 210—213.

[18] Шайтановы мухи. Башкирская легенда. Публикация М. В. Лоссиевского и Р. Г. Игнатьева // Оренбургский листок. 1876. № 3.

тергә була. Октябрь революцияһына тиклем үк халыҡ ижады әҫәрҙәрен йыя башлаған һәүәҫкәр фольклорсы 1920-1930 йылдарҙа фольклор материалдарын артабан туплау һәм киң таныл дырыу тәңгәлендә айырыуса күп көс һалды. Ул яҙып алған ҡомартҡыларҙың бер өлөшө «Башҡортостан» гәзите, «Октябрь» (хәҙерге «Ағиҙел») журналы биттәрендә баҫылып сыҡты[19]. Башҡорт, шулай уҡ рус, телендә[20] нәшер ителгән тормош-көнкүреш риүәйттәре тарихи прозаның жанрҙар төҙөлөшө һәм сюжет репертуары тураһындағы мәғлүмәттәрҙе киңәйтте.

Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында башҡорт халыҡ ижадының ҡаһарман һәм илһөйәр йүнәлешле әҫәрҙәренә иғтибар көсәйә. Ә. Усманов тарафынан әҙерләнеп, матбуғатта сыҡҡан ике йыйынтыҡ[21], журналист Г. Үмәркәевтең Салауат хаҡындағы риүәйәт, легенда һәм йырҙарҙы яҙып алып, ғилми ойошмаға тапшырыуы[22] — бының асыҡ миҫалы булып тора.

СССР Фәндәр академияһының Башҡортостан филиалы (1951), Октябрҙең 40 йыллығы исемендәге Башҡорт дәүләт университеты асылыуы республикабыҙҙың мәҙәниәт тормошонда ҙур ваҡиға булды. Филиалға ҡараған Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының фольклор секторы башҡорт халыҡ ижадын йыйыу һәм өйрәнеү буйынса эҙмә-эҙлекле эш алып бара. 1950 йылдарҙа Институт ғалимдары быға тиклем тупланған материалды халыҡтың үҙенә ҡайтарып биреү буйынса һөҙөмтәле хеҙмәт күрһәттеләр[23].

Ҡирәй Мәргән, Салауат Галин, Мөхтәр Сәғитов, Әнүр Вахитов, Нур Зарипов, Ниғмәт Шоңҡаров, Риф Сөләймәнов һәм ошо юлдарҙың авторы тарафынан артабанғы осорҙа фольклор әҫәрҙәрен яҙып алыу ғилми кимәле яғынан юғарыраҡ баҫҡысҡа күтәрелде. Риүәйәт һәм легендалар тәңгәленә килгәндә, 1960 йылдарҙа был жанрҙарҙың төрлө тармаҡтарына үтеп инергә ынтылыш яһала: социаль йөкмәткеле әҫәрҙәрҙән тыш, мифологияға бәйле этнонимик характерҙағы легендалар, ер-һыу исемдәрен аңлатыусы

---

[19] Буранғолов М. «Үмер йәки Йыуасалы» көйөнөң хикәйәһе // Башҡортостан. 1926, 9 апрель; «Йәйләүлек» йәки «Зиләйлүк» // Башҡортостан, 1926, 21 май; «Шәүрә килен хикәйәһе» // Башҡортостан, 1926, 7 март; «Ғилмияза» // Октябрь, 1939. № 7. 36—38-се б.; «Ҡараһаҡал һәм ҡара ат көйө»нөң тарихы һәм йырҙары // Октябрь. 1939. № 8—9. 79—82-се б.; «Таштуғай» // Октябрь. 1939. № 4. — 19—23-сө б.

[20] Старков И. Асыликуль: Башкирская легенда // Огни Востока. 1926, № 2. С. 11; Шэврэ-килен // Башкирская легенда / Перевод с башкирского Сюнчелея. Художественная обработка Ив. Недолина // Огни Востока. 1926. № 3. С. 10—11; Последняя песнь: Башкирская легенда // Белорецкий рабочий. 1936. № 17, 22, 23, 24, 26, 27. Перепечатано в ж. «Народное творчество», 1937. № 6. С. 51—58.

[21] 1812 йылғы Ватан һуғышында Башҡорт атлылары: Легендалар һәм йырҙар / Төҙөүсеһе һәм баш мәҡәлә яҙыусы Ә. Усманов. — Өфө, 1944; Усманов Ә. Салауат батыр. — Өфө, 1945.

[22] Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө ғилми үҙәгенең архивы: ф. 3, оп. 12, д. 271. Артабан: ғилми архив.

[23] Башҡорт халыҡ ижады / Төҙөүсеһе, баш һүҙ һәм иҫкәрмәләр биреүсеһе Ә. И. Харисов. 1-се том. — Өфө, 1954; 2-се том. — Өфө, 1959; 3-сө том / Төҙөүсеһе, баш һүҙ һәм иҫкәрмәләр биреүсеһе Ә. Н. Ҡирәев. — Өфө, 1955

риүәйәт һәм легендалар яҙып алына (миҫалдарҙы китаптың текст һәм аңлатмалар бүлегенән табырға мөмкин).

Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында археографик экспедициялар ойоштороу мөһим бер күренешкә әйләнде. Тәүге экспедицияларҙың ғилми етәксеһе профессор Ғайса Хөсәйенов, мәҫәлән, иҫке ҡулъяҙмалар, шәжәрәләр менән бер рәттән әһәмиәтле тарихи риүәйәттәр алып ҡайтып, фольклорсылар ҡарамағына тапшырҙы. Топонимик экспедиция ағзалары Азат Ҡамалов менән Рәшит Шәкүров та был эшкә үҙ өлөштәрен индерҙе.

Этнографик экспедиция ағзалары ла (Р. Ғ. Ҡузеев, В. В. Сидоров) легенда һәм риүәйәттәрҙе иғтибарҙан ситтә ҡалдырманы. Ырыу-ҡәбилә тарихтарына бәйле күп һанлы легенда, риүәйәттәр, мәҫәлән, өҫтәмә материал рәүешендә Р. Ғ. Ҡузеевтың докторлыҡ диссертацияһына индерелеп, авторҙың күҙәтеүҙәрен киңәйтте, мөһим һығымталарын ҡеүәтләне[24]. В. В. Сидоров иһә Салауат Юлаев хаҡындағы риүәйәттәрҙе милли батырыбыҙҙың халыҡ хәтерендә һаҡланған биографияһы рәүешендә системаға килтерҙе[25].

Шулай уҡ фольклорҙың бәләкәй күләмдәге сәсмә әҫәрҙәрен йыйыу, баҫтырып сығарыу һәм өйрәнеү буйынса Башҡорт дәүләт университетының башҡорт һәм рус әҙәбиәте кафедралары айырыуса ҙур әүҙемлек күрһәтте. Марат Минһажетдинов, Кирәй Мәргән, Әхмәт Сөләймәнов тарафынан талиптар өсөн уҡыу ҡулланмаһы булараҡ әҙерләнгән «Башҡорт легендалары» (Өфө, 1969) исемле китап, асылда, бәләкәй күләмле сәсмә әҫәрҙәр буйынса заман талаптарынан сығып эшләнгән беренсе махсус хеҙмәт булды.

Легендаларҙың башҡа жанрҙарға мөнәсәбәте, тематик төркөмдәре, тарихи ерлеге кеүек мөһим мәсьәләләр буйынса был йыйынтыҡта етди күҙәтеүҙәр бар. Текстар өлөшөндә 131 легенда һәм риүәйәт урынлаштырылған.

Университет ғалимы Л. Г. Бараг әҙерләп сығарған йыйынтыҡтар[26] Башҡортостанда йәшәгән төрлө милләт кешеләренең ижад бәйләнештәрен өйрәнеү буйынса ҡыҙыҡлы материалдар туплаған. Был йыйынтыҡтарға ингән легенда һәм риүәйәттәрҙең ҙур ғына өлөшө башҡорт ауылдарында башҡорт информаторҙарынан яҙып алынған.

Риүәйәт һәм легендаларҙың айырым проблемаларын тикшереүгә бағышланған кандидатлыҡ диссертациялары ла Башҡорт дәү-

---

[24] Кузеев Р. Г. Происхождение башкирского народа (Этнический состав, история расселения). — М.: Наука, 1974.

[25] Сидоров В. В. О башкире-певце и бесстрашном бойце (Книга о Салавате Юлаеве). — Уфа, 1983. С. 69—104.

[26] Народные сказки, легенды, предания и были, записанные в Башкирии на русском языке в 1960—1966 гг. / Подбор текстов, ред. вступ. ст. и примеч. Л. Г. Барага. — Уфа, 1969; Сказки, легенды и предания Башкирии в новых записях на русском языке / Под ред. и с коммент. доктора исторических наук проф. Л. Г. Барага. — Уфа, 1975; Материалы и исследования по фольклору Башкирии и Урала. Вып. I. — Уфа: БГУ, 1974.

ләт университеты кафедраларында яҙылды [27]. Был диссертацияларҙың авторҙары Ә. М. Сөләймәнов менән Б. Ғ. Әхмәтшин үҙҙәренең эҙләнеү һөҙөмтәләрен матбуғатта ла яҡтырттылар [28]. Башҡорт топонимик риүәйәттәренең жанр үҙенсәлектәренә бағышланған мәҡәлә художестволылыҡ мәсьәләләрен алға ҡуйыу йәһәтенән айырыуса ҙур әһәмиәткә эйә.

Халыҡ ижады әҫәрҙәрен, шул иҫәптән риүәйәт, легендаларҙы, киң таныулдырыуҙа республика матбуғатының роле ифрат ҙур. «Ағиҙел», «Башҡортостан уҡытыусыһы», «Башҡортостан ҡыҙы» журналдары, «Башҡортостан» (элекке «Совет Башҡортостаны»), «Йәншишмә» («Башҡортостан пионеры») гәзиттәре биттәрендә фольклор материалдары, фольклорсы ғалимдарҙың һәм мәҙәниәт эшмәкәрҙәренең халыҡ ижады хаҡындағы мәҡәләләре баҫылып тора.

Планлы һәм системалы рәүештә материал туплау, уны өйрәнеү риүәйәт һәм легендаларҙы «Башҡорт халыҡ ижады» исемле күп томлыҡ эсендә донъяға сығарыу мөмкинлеген бирҙе [29].

1985, 1987 йылдарҙа башҡорт риүәйәт һәм легендалары рус телендә нәшер ителде [30]. Телгә алынған китаптарҙа системаға килтерелеп, ғилми аңлатма бирелгән ифрат бай материал халыҡ прозаһының жанрҙары, уларҙың йәшәү рәүеше, башҡарған функциялары хаҡында күп яҡлы мәғлүмәттәр туплаған мөһим сығанаҡ булып тора. Ошо юлдарҙың авторы тарафынан яҙылған монография [31] элегерәк күтәрелгән проблемаларҙы киңерәк һәм тәрәнерәк яҡтыртыу ниәтенән уйланылған хеҙмәт булды. Унда жанрҙарға мөмкин тиклем тулыраҡ характеристика бирергә тырышылды, саф формалар менән бер рәттән ҡатнаш формаларҙы, йәғни бер нисә жанрҙың һыҙаттарын туплаған әҫәрҙәрҙең тәбиғәтен ҡалҡыуыраҡ итеп күрһәтеү маҡсаты ҡуйылды. Хөрәфәти

---

[27] Ахметшин Б. Г. Предания, легенды и другие устные рассказы горнозаводской Башкирии: Автореф. дисс. ... канд. филол. наук. — Уфа, 1968; Сулейманов А. М. Исторические основы и идейно-эстетические функции топонимических легенд и преданий башкирского народа: Автореф. дисс. ... канд. филол. наук. — Уфа, 1972.

[28] Сөләймәнов Ә. Боронғо топонимик легендалар һәм риүәйәттәр // Әҙәбиәт. Фольклор. Әҙәби мираҫ. Беренсе китап. — Өфө: БДУ, 1975. 103—126-сы б. Шул уҡ авторҙыҡы: Башҡорт топонимик легенда, риүәйәттәренең ҡайһы бер жанр үҙенсәлектәре // Әҙәбиәт. Фольклор. Әҙәби мираҫ. Икенсе китап. — Өфө: БДУ, 90—110-сы б.; Әхмәтшин Б. Башҡорт таусыларының ҡайһы бер легендалары // Ағиҙел, 1968. № 1. 120-се б.; Шул уҡ авторҙыҡы Предания о башкирском восстании 1755 г. // Народ и революция в литературе и устном творчестве. — Уфа, 1967.

[29] Башҡорт халыҡ ижады: Риүәйәттәр, легендалар / Төҙөүсеһе, инеш мәҡәлә һәм аңлатмалар авторы Фәнүзә Нәҙершина. — Өфө, 1980. 414-се б.; Башҡорт халыҡ ижады: Әкиәттәр, риүәйәттәр, хәтирәләр, сәсәндәр ижады / Төҙөүселәре, инеш мәҡәлә һәм аңлатмалар авторҙары Нур Зарипов менән Әхмәт Сөләймәнов. — Өфө, 1982. 73—146, 391—401-се б.

[30] Башкирские предания и легенды / Сост., вступ. ст. и коммент. Ф. А. Надршиной. Перевод с башкирского Г. Г. Шафикова и Ф. А. Надршиной. — Уфа, 1985. С. 287; Башкирское народное творчество. Т. 2: Предания и легенды / Сост., вступ. ст. и коммент. Ф. А. Надршиной. — Уфа, 1987. С. 573.

[31] Нәҙершина Фәнүзә. Халыҡ хәтере. — Өфө, 1986. 189 б

хикәйә жанр булараҡ тәү башлап айырым тикшерелде. Халыҡ хикәйәләренең ысынбарлыҡҡа мөнәсәбәтен, ерлегән өйрәнеү тарихисағыштырма планда алып барылды.

Башҡорт халыҡ прозаһының бәләкәй жанрҙары — күп тармаҡлы һәм ҡатмарлы күренеш. XX быуаттың 30-сы йылдарынан алып һуңғы йылдарғаса әкиәт йәки көләмәстәр рәтенә инмәгән сәсмә әҫәрҙәрҙе беҙҙең фольклористикала, шулай уҡ көндәлек матбуғатта «легенда» тигән термин менән билдәләп йөрөттөләр. Әммә легенда исеме менән йөрөтөлгән күпселек әҫәрҙәр, төптәнерәк тикшереп ҡараһаң, йөкмәткеләре, хикәйәләү алымдары, стиль үҙенсәлектәре, художество кимәлдәре яғынан бер-береһенән ныҡҡына айырылып тора. Һуңғы йылдарҙа үткәрелгән махсус тикшеренеүҙәр сәсмә жанрҙарҙың тәбиғәтен өйрәнеү, уларҙың төрҙәрен билдәләү юлында ҡайһы бер асыҡлыҡтар индерергә мөмкинлек бирҙе. Фольклорсы Әхмәт Сөләймәнов, мәҫәлән, халыҡ хикәйәләренең фантастик уйҙырмаға ҡоролғандарын легенда, ә «бер ниндәй шаштырыуһыҙ, информация биргәндәрен» риүәйәт тип атау яғында[32]. Ләкин халыҡ телендә йөрөгән хикәйәләр был ике термин эсенә генә лә һыйып бөтмәй. Ауыҙ-тел ижадында һәр төрлө күсмә формалар йәшәгәнлеге лә билдәле. Сәсмә жанрҙар тәңгәлендә боронғо ырым-ышаныуҙарға ҡоролған хөрәфәти хикәйәләр, ябай хәбәр һөйләүҙе хәтерләтеүсе иҫтәлек-хикәйәләр, йәғни хәтирәләр, мәҫәлән, шундайҙарҙан.

Легенда һәм хөрәфәти хикәйәләрҙе, риүәйәт, хәтирәләрҙе, көләмәс һәм әкиәттәрҙән айырып, үҙ-ара яҡын жанрҙар төркөмөнә берләштереүсе төп билдә — функциялар берҙәмлеге. Тарих һөйләү, тормошта булған, айырым осраҡтарҙа хатта булмаған хәлваҡиғаларҙы ла булған хәл итеп һүрәтләргә ынтылыу — был жанрҙарҙың һәр ҡайһыһы өсөн дә хас күренеш. Әлбиттә, тарихилыҡ төрлө әҫәрҙәрҙә төрлөсә. Халыҡ хикәйәһенең бәләкәй жанрҙары бер-береһенән асылда шул тарихилыҡтың «миҡдары» һәм хикәйәләү ысулдарына ҡарап айырыла ла.

Тормошто, ваҡиға һәм шәхестәрҙе дөрөҫлөк күҙлегенән яҡтыртыуҙа риүәйәт жанры төп урынды алып тора. «Риүәйәт» һүҙе беҙгә ғәрәпсәнән ингән, ул хикәйә, версия мәғәнәһен бирә. Риүәйәттәрҙең күпселеге туранан-тура ниндәй ҙә булһа ижтимағи йәки көнкүреш әһәмиәтле хәл-ваҡиғаның, күренештең, фактың тарихын асыҡлауға нигеҙләнгән.

Әлбиттә, бында шуны ла оноторға ярамай: риүәйәт үҙенең төп маҡсаты менән тарихты, фактарҙы аңлатыуға йүнәлдерелгән булһа ла, ул тарихи документ түгел. Ауыҙ-тел ижады әҫәре булараҡ, риүәйәттәрҙә тарих халыҡ аңындағыса, халыҡ ҡарашында йәшәгәнсә яҡтыртыла.

Бынан тыш, телдән күсеп, оҙайлы йәшәү юлын үткәндә, әҫәрҙәге тарихи йөкмәткенең күп кенә яҡтары юғалырға, хатта бөтөнләй үҙгәрергә лә мөмкин. Фактар алмашыныу, анахронизм

[32] Сөләйманов Ә. М. Боронғо топонимик легендалар һәм риүәйәттәр // Әҙәбиәт. Фольклор. Әҙәби мираҫ. Беренсе китап. — Өфө, 1975. 104—105-се б.

күренештәре — риүәйәттәрҙә шаҡтай йыш осрай торған хәл. Миҫал өсөн аныҡ тарихи ваҡиғаға — 1773—1775 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр һуғышына — бәйле «Пугач менән Салауат юлы» исемле бер риүәйәтте генә алайыҡ. Был әҫәрҙә Салауат Юлаевтың дуҫы Кинйә һәм башҡа яуҙаштары менән Ҡазанға табан үтеп барышлай хәҙерге Саҡмағош районы ауылдарында туҡтап, ял итеп китеүе хаҡында һүҙ бара. Тарихи документтарҙан билдәле булыуынса, Емельян Пугачевтың Ҡазан яуында башҡорт яугирҙары менән Кинйә Арыҫланов ҡатнаша. Ә Уса ҡәлғәһен алғанда яраланған Салауат Юлаев иһә дауаланыу өсөн үҙ йортонда ҡала. Яралары бер аҙ уңалғас та, ул, янынан ғәскәр туплап, Бөрө ҡалаһын ала, Елдәк ҡәлғәһендә нығына. Ошо осорҙа, үҙенең ғәскәрҙәрен тулыландырыу ниәтендә, Салауат Саҡмағош, Дүртөйлө яҡтарына сапҡындар ебәргән булырға тейеш. Үрҙә телгә алынған риүәйәтте нәҡ шул хәл-ваҡиғаларҙың алыҫтағы бер шаңдауы һымаҡ ҡабул итергә кәрәктер ҙә. Сөнки үҙенең нигеҙе менән риүәйәт тарихи дөрөҫлөккә тап килә: Салауат ораны буйынса бөтә Башҡортостан халҡының яуға күтәрелеүе, башҡорт батырының абруйы, Пугачевтың Ҡазан яуында башҡорт яугирҙарының ҡатнашыуы — былар бөтәһе лә тарих фәне аңлатыуына тура килгән реаль факттар. Ә инде халыҡтың Саҡмағош ерҙәрендә Салауат эҙҙәрен күрергә теләүе һәм шул арҡала риүәйәткә поэтик шартлылыҡ элементтары килеп инеүе әҫәрҙең дөйөм йүнәлешенә, идеяһына зыян килтермәй.

Тормошта булған һәр күренеште, ваҡиғаны сағылдырыу риүәйәт жанрының маҡсатына инмәй. Үҙенең күңелен йә бөйөклөгө, йә түбәнлеге менән тетрәткән ваҡиға, хәл-әхүәлдәрҙе генә тарих, хикәйәт итеп һөйләй халыҡ. Ниндәйҙер яғы менән сер донъяһы булған күренештәр йә ҡәҙимге көнкүрештә бик ғәҙәти булмаған нәмәләр генә риүәйәтселәрҙең иғтибарына лайыҡ була. Һөйләүсе тарафынан да, тыңлаусылар яғынан да риүәйәттәргә оло ихтирам, ышаныс бар, уларға халыҡ тарихы, боронғоларҙан ҡалған һүҙ итеп ҡарау һиҙелә. Йыш ҡына риүәйәтсе үҙе һөйләгән ваҡиғаның, тарихтың дөрөҫлөгөнә, булған хәл икәнлегенә баҫым яһап, шуға ышандырырға тырыша. Бының өсөн ул хатта мөмкин булған осраҡта ваҡиғаның дәүерен, йылдарын күрһәтеп һөйләй («Сибай», «Ҡәшмәр тауы», «Шаһиттар ҡыраһы» һ. б.) йә «әлек ата-бабаларыбыҙ һөйләй торғайны» тигән формала һылтанма яһай.

Күпселек осраҡта риүәйәттәр, локаль характерҙа булып, теге йәки был урынға, ер-һыу атамаларына бәйле йәшәйҙәр йә айырым төбәктәргә бәйле хәл-ваҡиғаларҙы, күренештәрҙе сағылдырып, шул төбәктә айырыуса билдәле булып китә. Әйтәйек, «Антонташ», «Йылҡысыҡҡан күл» кеүек риүәйәттәр — Башҡортостандың Бөрйән районында, «Салауат ыҙаны», «Салауат ташы» һымаҡ риүәйәттәр Башҡортостандың Салауат, Ҡыйғы райондарында киң билдәле. Салауат хаҡында башҡа райондарҙа ла риүәйәттәр йәшәй, әммә уның үҙе тыуған яҡтарында улар күберәк.

Төҙөлөштәре, формалары яғынан риүәйәттәр төрлөсә. Бер төркөмөнөң сюжеты бик ябай. Уларҙа хикәйәләү — тормош көнкү-

рештәге ниндәй ҙә булһа бер ваҡиғаны, күренеште тасуирлауға ҡорола, һөйләүсе өсөн боронғоно, үҙе ишеткәнсә, үҙе белгәнсә, тыңлаусыға еткереү мөһим. Шуға күрә уны беренсе нәүбәттә факт ҡыҙыҡһындыра. Риүәйәт һөйләүсе әҫәрҙең формаһы хаҡында йырсы һәм ҡобайырсылар һымаҡ артыҡ уйлап тормай. Күп осраҡта быны һүҙ ыңғайында, яйы килгәндә, контекста һөйләй, йәғни борондан ҡалған «тарихты» иҫкә төшөрә, мәғлүмәт бирә.

Шуға ла риүәйәттәрҙең ҡануллашҡан даими текстары ла булмай. Риүәйәттең төҙөлөшө һөйләүсенең оҫталығына бәйләнгән. Уның стиле, нигеҙҙә, һөйләүсе телмәре менән тап килә. Был айырыуса ауыл тарихтарына, ер-һыу, тау-таш исемдәренә ҡараған топонимик риүәйәттәр миҫалында асыҡ күренә.

Сюжеты булмаған йә өҙөк сюжетлы текстар тик информацияға ғына ҡорола. Уларҙың төп маҡсаты мәғлүмәт биреү булғанлыҡтан, художестволыҡҡа ынтылыу бында һиҙелмәй («Салауат ғаиләһенең һәләкәте», «Салауат күпере», «Йәҙрәле һаҙ»). Шунлыҡтан бындай текстарҙы халыҡ-ара терминология практикаһында «хроникаттар» тип атау ҡабул ителгән.

Башҡорт риүәйәттәренең күпселеге фабулаттар, йәғни сюжетлы хикәйәләр. Һүрәтләнгән тормош күренештәренең, хәл-ваҡиғаларҙың характерына ҡарап, риүәйәт сюжеттары бер эпизодтан («Салауат менән Ҡараһаҡал», «Абласкин — Яуымбай») һәм бер нисә эпизодтан торорға мөмкин («Морҙағол», «Салауат менән Балтас» һ. б.). Күпте белгән ауыл ҡарттары, аҡһаҡалдар бер тарихты һөйләгәндә, шуға бәйләп, әллә ни тиклем башҡа мәғлүмәттәр биреп ташлаусан була. «Бөрйәндәр хан замандарында» тигән риүәйәт — шуның типик бер өлгөһө.

Башҡорт риүәйәттәренең геройҙары — тарихи шәхестәр (Салауат Юлаев, Емельян Пугачев, Кинйә Арыҫланов, Екатерина II, Перовский, Ҡараһаҡал, Аҡай...) йәки ҡылған эше менән башҡаларҙан айырылған башҡа күренекле кешеләр (изгелекле ҡасҡындар, түрәләр). Риүәйәттәрҙә шулай уҡ фажиғәле яҙмыш (урланған ҡыҙҙар, йәберһетелгән килендәр), батырлыҡ йәки берәй иҫтә ҡалырлыҡ эш эшләгән йәки ҡылыҡ күрһәткән ир-егет, ҡатын-ҡыҙ образы ла сағылыусан. Образдарҙың бирелеше туранан-тура риүәйәттең йөкмәткеһенә һәм һөйләүсенең шул персонажға булған мөнәсәбәтенә, фольклор традицияларын үҙләштерә алыу ҡеүәһенә, һүҙ оҫталығына бәйләнгән. Бер осраҡта һөйләүсе персонаждың ҡылығын, холоҡ һыҙаттарын, сығышын ярайһы уҡ ентекләп бирә («Салауат батыр», «Ҡаранай батыр һәм уның ярандары», «Ғилмияза»), икенсе осраҡта персонаждың исемен һәм ҡылған эштәрен әйтеп китеү менән генә сикләнә (Перовский, Екатерина II).

Ғөмүмән, геройҙы башҡарған эш-хәрәкәттәре аша кәүҙәләндереү — риүәйәттәргә хас бер үҙенсәлек тиергә мөмкин. Портретҡа ныҡ туҡталып тороу бында күҙәтелмәй. Бына, мәҫәлән, бер нисә өлгө:

«Айсыуаҡ — бик тә көслө, бик тә батыр була» («Айсыуаҡ мажаралары»); «Һаҡмар буйында мыҡты кәүҙәле, оҫта йырсы, сәсән телле Баязетдин исемле бер батыр йәшәгән, ти» («Баяс»);

«Бик уңған, төçкә сибәр бер ҡатын булған был» («Алтынсәс»).

Ҡайһы берҙә генә персонаждың һыны риүәйәттәрҙә традицион алымдарҙа киңерәк һүрәтләнә, көнсығыш романтик поэзияһы рухында күрһәтелә. Мәçәлән: «...Ҡыҙ шундай матур булған, хатта, Әй буйына һыуға төшкән сағында, йылға, ағыуынан туҡтап, уның һылыулығына хайран ҡалыр булған, ти. Ҡыҙҙың һылыулығына бөтә Әй буйы халыҡтары мәһайған.

Көнһылыу йырға ла бик шәп булған. Уның тауышын таң ҡалып тыңлар булғандар. Көнһылыу йырлай башлаһа, һандуғастар һайрауынан, елдәр иçеүенән, януарҙар үкереүенән туҡтағандар. Уны күргән егеттәр торған ерҙәрендә иçһеҙ булып ҡалғандар, ти» («Көнһылыу»).

Халыҡ хикәйәһенең икенсе бер төрө — легенда[33] ла, нигеҙҙә, ысынбарлыҡта булып үткән һәм булыуы ихтимал тип уйланылған хәл йәки тарихи ваҡиғаларға таянып ижад ителә. Тик риүәйәттәрҙән айырмалы рәүештә, унда фантастик уйҙырма, хыял элементтары киң урын ала. Башҡорт легендаларының бер өлөшө тотошлайы менән уйҙырмаға, ғәҙәттән тыш хәл һәм ваҡиғаларға ҡорола. Шуға ҡарамаçтан, уларға ла тарихилыҡ хас. Легендаларҙың тарихилығы уларҙағы поэтик уйҙырмаларҙың билдәле тарихи дәүерҙә барлыҡҡа килеүе менән бәйле. Космогоник, этногенетик һәм этнонимик легендаларҙың тарихи нигеҙен күп осраҡта шул поэтик уйҙырмаға ҡарап ҡына төçмөрләргә мөмкин. Мәçәлән, айҙағы таптарҙың барлыҡҡа килеүен аңлатыусы легендаларҙа реаллек шул есемдәрҙең ысынбарлыҡта булыуында, ә бар ситуациялар (айҙың көйәнтәле ҡыҙҙы үҙенә тартып алыуы һ. б.) — бөтәһе лә мөғжизә, поэтик уйҙырма. Ләкин ул — ҡоро фантазия тыуҙырған уйҙырма түгел, ә боронғо кешенең аң кимәленә, уның мифологик ҡараштарына бәйле тыуған уйҙырма. Шул ҡараштарҙы сағылдырыуы менән ул тарихи.

Сюжет төҙөлөшө, стиле яғынан легендалар ҙа, риүәйәттәр шикелле, бер төрлө түгел. Тотошлайы менән уйҙырманан торһа ла, айырым әçәрҙәр хикәйәләнеше менән риүәйәттән бер ни менән дә айырылмай. Мөғжизәле, уйҙырма ваҡиға нәҡ риүәйәтсә ҡәтғи, раçлау планында һөйләнә («Ҡош юлы», «Айыу тоҡомо»).

Икенсе бер төркөм сюжеттар уйҙырма ваҡиға һәм күренештәрҙе әкиәткә тартым стилдә һөйләп биреүҙәре менән айырыла. («Айҙағы ике януар», «Шайтан себендәре»).

Легендаларҙың геройҙары, тәбиғәт, ҡош-ҡорт, йәнлектәр менән бик еңел аралашып, һәр төрлө ғәҙәти булмаған мөнәсәбәттәргә инә ала. Аҙашҡан ырыуға бүренең йәшәр төйәк табып биреүе, кешенең шайтан менән ғаилә мөнәсәбәтенә инеүе — былар, әлбиттә, мөғжизәгә ҡоролған уйҙырма ваҡиғалар.

Легендаларҙа тәбиғәт күренештәре лә йәнле итеп тасуирлана. Бында йылғалар «һәйләшә», «бәхәсләшә», «ярыша», «көнләшә» («Ике Инйәрҙең бәхәсе», «Ҡалым», «Ағиҙел менән Яйыҡ», «Ағиҙел менән Ҡариҙел»), ай йәберһетелгән етем ҡыҙҙың һыҡтауҙарын

[33] Легенда — латин һүҙе, уҡылырға тейешле текст тигәнде аңлата.

«ишетә», уны «ҡыҙғана». Легендаларҙың геройҙары араһында әкиәт персонаждары (дейеү батшаһы, убыр әбейҙәр һ. б.), дини мифтарҙан килеп ингән иблес, фәрештәләр, пәйғәмбәрҙәр, хатта алланың үҙе лә бар («Туфан ҡалҡыу»[34], «Етегән йондоҙ — ете ҡыҙ», «Шайтан себендәре», «Толбуйҙар», «Зөһрә йондоҙ»).

Башҡорт халҡының риүәйәт, легендалары хаҡында һүҙ барғанда, түбәндәге үҙенсәлек һыҙыҡ өҫтөнә алыныпға тейеш. Тәбиғәте менән саф риүәйәт йәки саф легенда кәштәһенә индерерлек әҫәрҙәрҙән тыш, ике жанрҙың да һыҙаттарын берләштереүсе әҫәрҙәр — риүәйәт-легендалар байтаҡ («Йөрәктау», «Үткән ғүмер» һ. б.). Функцияларының уртаҡлығы, шулай уҡ жанр формаларының бик үк ҡанунлашып етмәгәнлеге бындай ҡатнаш күренештең яралыуына сәбәп булып тора.

Башҡорт фольклористикаһында йыр тарихтары тип йөрөтөлгән бер төркөм әҫәрҙәр бар. Уларҙың сюжет-композицион төҙөлөшө риүәйәт һәм йыр тексының органик бәйләнешенә нигеҙләнә. Ситуацияларҙың драматик көсөргәнешле мәле поэтик текст (йыр) аша, ә ваҡиғалар үҫеше, геройҙың шәхесенә, эшмәкәрлегенә ҡағылған деталдәр сәсмә формала бирелеүсән. Бындай әҫәрҙәрҙең йөкмәткеһен тәрәнәйтеүсе, тыңлаусыға тәьҫир итеү ҡеүәһен көсәйтеүсе йәнә бер компонент — к ө й шулай уҡ бик ҙур роль уйнай.

Йыр менән риүәйәттәрҙең, ә ҡайһы саҡта легендаларҙың органик берекмәһенән торған сюжеттарҙы йыр-риүәйәттәр, йыр-легендалар тип атарға ла булыр ине, сөнки йыр тарихы тигән атама ҡайһы бер осраҡта үҙен аҡлап бөтмәй. Халыҡ араһында йөрөгән сюжеттарҙың байтағы тик йыр тарихы ғына түгел, ә халыҡ тормошонан бер хикәйә, уларҙа йыр тексына ҡарағанда проза өлөшө өҫтөнлөк итә («Буранбай», «Бейеш», «Таштуғай» һ. б.).

Тамырҙары менән йыр-риүәйәт, йыр-легенда кеүек жанр төрҙәре быуаттар төпкөлөнә барып тоташа. «Сыңрау торна», «Ҡәкүк» йырҙарының, бейеүҙәренең, уларға бәйле легендаларҙың, йолаларҙың тарихи ерлеген өйрәнеү ошондай һығымтаға килтерә[35].

Йыр менән риүәйәттәрҙең органик берекмәһенән торған әҫәрҙәрҙең ысынбарлыҡҡа булған мөнәсәбәтен аныҡлау һәр әҫәрҙе тикшереү нигеҙендә алып барылырға тейеш. Конкрет ваҡиғаларға нигеҙләнһәләр ҙә, фольклор әҫәрҙәре, билдәле булыуынса, телдән телгә күсеп килә торғас, замандар үтеү менән нык ҡына үҙгәрештәргә дусар була. Факттар алмашыныу, анахронизм күренештәрен йыр-риүәйәт, йыр-легендаларҙа ла бик йыш осратырға мөмкин. Шуға ҡарамаҫтан, һүрәтләнгән ваҡиғаларҙың тарихи ерлеге, йыр-риүәйәттәрҙә, йыр-легендаларҙа ғәҙәттәге риүәйәт һәм легендаларға ҡарағанда, һәр төрлө үҙгәрештәрҙе аҡрыныраҡ ҡабул итә. Әйтәйек, «Таштуғай» һәм «Ғилмияза» кеүек атаҡлы әҫәрҙәрҙең сәсмә формалағы риүәйәт өлөшө төрлөсә вариантлаша. Ләкин тәрән мәғәнәле «Таштуғайҡай, һинең кәкүгең юҡ — үҙ Уралҡайыма

[34] Ғилми архив, ф. 3, оп. 65, д. 7, л. 145—148.

[35] Надршина Ф. А. Башкирские народные песни-предания // Истоки. — 1992. № 3.

ҡайтайым», йәки «Тыуған илкәйемә ҡайтыр ҙа инем, аяҡтарым талһа ла имгәкләп» кеүек юлдар тотороҡло һаҡлана. Әҫәрҙе тарихи күҙлектән тикшереү өсөн ул юлдарҙың әһәмиәте ҙур.

Әлбиттә, бынан бик күп йылдар элек ижад ителгән йыр-риүәйәттәр беҙҙең көндәргә төрлө сифатта килеп еткән: иҫ киткес төҙөк сюжетлы, хатта эпик ҡомартҡыларҙы хәтерләткән әҫәрҙәр менән бер рәттән («Икенсе әрме», «Ҡаһым түрә») йыр тарихы берике һөйләм менән генә еткерелгәндәрен дә осратырға мөмкин. Был инде, бер яҡтан, һүрәтләнгән ваҡиғаларҙың мөһимлегенә, бөгөнгө көн талаптарына рухи яңғырашлы булыуына бәйләнгән булһа, икенсе яҡтан, һөйләүсенең башҡарыу оҫталығына, тарихты тоя белеү һәләтенең кимәленә бәйләнгән.

Йыр-риүәйәттәрҙең тәьҫир итеү көсө һәм тәрбиәүи әһәмиәте ҙур. Халыҡ уларға элек-электән үҙенең яҙылмаған тарихы итеп ҡараған һәм, күңелендә һаҡлап, бер быуындан икенсе быуынға тапшыра килгән. Танып белеү әһәмиәтенән тыш, улар эстетик функция ла үтәй. Сағыштырып ҡараһаң, художестволылыҡ йәһәтенән йыр-риүәйәттәр һәм йыр-легендалар башҡа ғәҙәти риүәйәт, легендаларҙан айырылыбыраҡ тора. Драматик, лиро-драматик йыр тексы хикәйәләү өлөшөнөң дә шул тонға яҡынлашыуына күпмелер дәрәжәлә тәүшарт була. Башҡорт йыр-риүәйәттәре араһында хатта драма элементтары менән һуғарылған сюжеттар ҙа осрай («Сабира», «Ҡарасәс» һ. б.). Уларҙың йыр өлөшө диалогтарҙан тора, ә сәсмә өлөшө ремаркалар хеҙмәтен үтәй.

* * *

Риүәйәт, легендаларҙың тормошто һүрәтләү диапазоны шаҡтай киң. Уларҙа кешеләрҙең тирә-йүнде, тәбиғәт күренештәрен, тарихи ваҡиға һәм тормош-көнкүреш хәлдәрен аңлауы, донъяға ҡарашы, этик һәм эстетик идеалдары сағылған. Был күп тармаҡлы йөкмәтке, тәбиғи, билдәле бер система эсендә конкрет һәм тәрәнерәк асыла.

Хәҙерге фольклористикала халыҡ хикәйәләрен тематик төркөмдәргә бүлеп өйрәнеү киң урын алған. Материалдың күләме һәм йөкмәткеһенә, тәғәйенләнешенә ҡарап (әйтәйек, каталогтар өсөн бер система, йыйынтыҡтар өсөн — икенсерәк) тематик төркөмдәрҙе һәр фольклорсы үҙенсә билдәләй. В. П. Аникин, мәҫәлән, рус халыҡ риүәйәттәрен ике төркөмгә бүлеп ҡарай: топонимик һәм тарихи риүәйәттәр, В. К. Соколова алты төркөмгә бүлә: этиологик, топонимик, тарихи риүәйәттәр, айырым бер урын халҡы өсөн генә билдәле булған хикәйәләр, изгелекле ҡаҫҡындар, хазиналар хаҡындағы әҫәрҙәр[36]; литва ғалимы Б. Кербелите риүәйәттәрҙе

[36] Русское народное поэтическое творчество: Учебное пособие для филологических факультетов педагогических институтов / Под ред. проф. Н. И. Кравцова. — М., 1971. С. 130; Соколова В. К. О задачах и принципах составления указателя преданий // Всесоюзная научная сессия, посвященная итогам полевых археологических и этнографических исследований 1970 г.: Тезисы докладов. — Тбилиси, 1971. С. 132—133.

ике тармаҡҡа айырып өйрәнә: рельеф үҙенсәлектәре барлыҡҡа килеү хаҡындағы риүәйәттәр һәм ижтимағи йөкмәткеле хикәйәләр[37]. А. Анцелане, А. Ганаланян, Е. Вирсаладзе тикшеренеүҙәрендә[38] тематик төркөмдәр һаны өстән алып ун алтыға етә. Башҡорт фольклорсылары М. Минһажетдинов менән Ә. Сөләймәнов риүәйәт һәм легендаларҙы шулай уҡ уларҙың йөкмәткеләренә ҡарап төркөмләгәндәр: этнонимик һәм этногенетик легендалар; топонимик легендалар; тарихи легендалар; тормош-көнкүреш легендалары; әкиәт-легендалар[39].

Уҡыусы иғтибарына тәҡдим ителгән был китаптағы әҫәрҙәрҙе төркөмләүҙә, нигеҙҙә, беҙҙең фольклористикала ҡабул ителгән система ҡалдырылды. Өҫтәмә рәүештә «Боронғо ырым-ышаныуҙарға ҡоролған легендалар» тигән бүлек индерелде. Төркөмдәр эсендә үҙ-ара яҡын мотивлы сюжеттар бер тирәгәрәк тупланып, мөмкин булған урында хронология күҙлегенән үткәрелде. Шуны ла әйтергә кәрәк, күп һанлы һәм төрлө характерҙағы әҫәрҙәрҙе төркөмләүҙә абсолют теүәллекте көтөп булмай: бер үк риүәйәт йәки легендала йыш ҡына тарихи ваҡиғалар ҙа, көнкүреш хәлдәре лә, топонимик аңлатмалар ҙа һыйышып, бер-береһен тултырып, ҡеүәтләп килеүсән. Шуға күрә әҫәрҙе теге йәки был бүлеккә индергәндә, һәр осраҡта ундағы үҙәк йүнәлеште, төп мотивты асыҡлау мөһим.

Боронғо ырым-ышаныуҙарға ҡоролған легендалар башҡорт фольклоры репертуарында артыҡ күп түгел, дөрөҫөрәге, улар үҙ ваҡытында, тейешенсә иғтибар менән яҙып алынмаған. Шуға ҡарамаҫтан, материалдың булғаны ла халҡыбыҙҙың үткәндәге ҡараштарын, аң кимәлен, уның донъяны күҙаллауын сағылдырыуҙа ҡиммәтле мәғлүмәттәр бирә алырлыҡ.

Боронғо ышаныуҙар нигеҙендә тыуған легендалар үҙҙәре бер нисә тармаҡҡа айырыла: күк есемдәре, тәбиғәт күренештәре хаҡында легендалар, үҫемлектәр һәм тереклектәрҙең барлыҡҡа килеүен аңлатҡан легендалар, тәбиғәт «хужалары», төрлө «эйәләр» тураһындағы хикәйәләр. Был төр легендаларҙың һәр береһендә борон кешенең ысынбарлыҡты серле күс, мөғжизә рәүешендә күҙаллауы сағыла. Аң кимәленең үтә түбән булыуы, тәбиғәт стихиялары алдында көсһөҙлөк мифологик ҡараштарҙың формалашыуына алып килгән. Быны беҙ бигерәк тә күк есемдәре, тәбиғәт күренештәренең килеп сығыуын аңлатыуға ҡоролған легендаларҙа асыҡ күрәбеҙ. «Айҙағы ике януар» исемле мифологик легендала, мәҫәлән, ғәләмдәге хәрәкәт ғүмер буйы бер-береһен ҡыуып йөрөүсе ике йәнлек рәүешендә образлаштырылған. Кирәй Мәргән был сюжетты халыҡ аңында мифик көстәргә ҡаршы әүҙем күтә-

---

[37] Кербелите Б. Литовские народные предания. Автореф. дисс. ... канд. филол. наук.— Вильнюс, 1965.

[38] Латышские народные предания. Избранное / Сост. А. Анцелане.— Рига, 1962; Ганаланян А. Т. Армянские предания. Автореф. дисс. докт. филол. наук.— Ереван, 1970; Грузинские предания и легенды / Сост., перевод, предисл. и примеч. Е. Б. Вирсаладзе.— М.: Наука, 1973.

[39] Башҡорт легендалары. 16-сы б.

ҿелеш башланышын сағылдырған бик боронғо әҫәр итеп таный һәм уның ғилми ҡиммәтен юғары баһалай. Легенданың идеяһын асыҡлап, ул, мәҫәләнән, түбәндәгеләрҙе яҙа: «Бында, — ти ул, — тәбиғәт көстәренән бойондороҡло булған кешенең үҙ хәле сағыла... Тәбиғәттең «серле» көстәре тәүтормош шарттарында йәшәгән кешене шулай уҡ эҙәрләй, ҡыуа, ләкин кеше уға бирешмәҫкә, уны еткермәҫкә тырыша һәм, ниһәйәт, ул быға ирешә. Тимәк, был легенданың йөкмәткеһендә, ҡырағай халыҡ елкәһендә серле көс булып быуаттар буйы йәшәп килгән тәбиғәт күренештәре бойондороҡһоҙлоғонан ҡотолорға ынтылыу, уларҙы еңеп сығырға ынтылыу сағыла» [40].

Аҙаҡ килеп, әҫәрҙә иғтибарҙы йәлеп итә торған тағы бер нәмә бар: ул — айҙағы таптарҙың йәнлек образында һүрәтләнеүе, зооморфик ҡараштың сағылышы. Быны шулай уҡ кешеләрҙең йәшәү шарттары (оҙайлы дәүер һунарсылыҡ, малсылыҡ менән шөғөлләнеү) йоғонтоһонда тыуған үҙенсәлекле күренеш тип аңларға кәрәк.

Ай тураһындағы легендаларҙың икенсе бер төркөмөндә айҙағы таптар көйәнтәле ҡыҙ образында күҙ алдына килтерелә. Был сюжеттар өсөн, аңлашылыуынса, айҙы кешеләштереп, йәнләндереп һүрәтләү (антропоморфизм күренеше) хас.

«Ай менән Зөһрә» исемле легендала ай, йәберһетелгән үгәй ҡыҙҙың һыҡтауҙарын «ишетеп», ергә нурҙарын ебәрә, Зөһрә ҡыҙҙы үҙенә алып, уны ауыр, яфалы тормоштан ҡотҡара. Үгәй ҡыҙ мотивы — әлбиттә, һуңғараҡ, йәмғиәттә, һәр хәлдә, матриархат таралғас, кәмһетелгәндәр, йәберһетелгәндәр барлыҡҡа килгәс, тыуған мотив. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, әҫәр үҙенең нигеҙе, төп мотивы (айҙы йәнләндереп һүрәтләүе) менән бик боронғо. Ошоға оҡшаш мотивтарҙың донъя фольклорында киң билдәле булыуы — үҙе генә лә теге йәки был әҫәрҙең боронғолоғон иҫбатлаусы факт. Был йәһәттән ай тураһындағы легендалар ифрат ҡыҙыҡлы. Айға күтәрелгән ҡыҙ йәки ҡатын, айырым осраҡтарҙа һыуға барған малай образы төрлө географик киңлектәрҙә йәшәгән халыҡтарҙың ижадында осрай [41].

Йондоҙҙарҙың барлыҡҡа килеүен, йыһандағы хәрәкәтте төҫмөрләгән легендаларҙа шулай уҡ тәбиғәт менән кеше, йыһан менән ер тормошо араһындағы мөнәсәбәт үҙенсәлекле сағылыш таба. Айҙың ергә төшөүе, ер ҡыҙының күккә күтәрелеп, шунда йондоҙ булып ҡалыуы («Зөһрә йондоҙ») тәбиғәт кешеләштерелгән, ә йәмғиәт тәбиғәтләштерелгән дәүерҙәрҙең алыҫтағы бер яңғырашы булып ҡабул ителә.

Тимер ҡаҙыҡ янындағы ике йондоҙҙоң Һарат менән Буҙатҡа оҡшатылыуы, ә Етегәндең шул ике атты ҡыуып йөрөүсе ете бүре

---

[40] Кирәй Мәргән. Башҡорт халҡының эпик ҡомартҡылары. ... 36-сы б.

[41] Латышские народные предания. Избранное. — Рига, 1962. С. 16—17; Лоссиевский М. В. Башкирская легенда о месяце // Башкирия в русской литературе. Т. И. / Сост., авт. предисл. и коммент. М. Г. Рахимкулов. — Уфа, 1964. С. 105—106.

ҡиәфәтендә һүрәтләнеүе[42] — былар, бер яҡтан, кешенең йыһанды ер тормошона, ерҙәге йән эйәләренә яҡынлаштырып аңлауын сағылдырһа, икенсе яҡтан, изгеләштерелеп ҡаралған йәнлектәрҙең даирәһен төҫмөрләргә мөмкинлек бирә.

Йәшен йәшнәү, күк күкрәү, ғәрәсәтле дауыл һ. б. шуның кеүек тәбиғәт күренештәре кешеләргә афәт килтереүсе дәһшәтле көс тип баһаланған. Шуға күрә был көстәр халыҡ аңында зарарлы, ҡурҡынысллы мифик заттар — аждаһа-йыландар, шайтан, ен-бәрейҙәр образы аша сағылыш тапҡан[43].

Тирә-йүнде, тәбиғәт күренештәрен аңларға һәм аңлатырға тырышыу менән бер рәттән, кешеләр борон-борондан үҙҙәренең тәбиғәте, нәҫел-ырыуҙары, халыҡ булараҡ барлыҡҡа килеүҙәре хаҡында мәсьәләләр менән дә ҡыҙыҡһынған. Легенда һәм риүәйәттәрҙә **башҡорттарҙың килеп сығышы, ырыу-ҡәбиләләр тарихына бәйле** күп төрлө мәғлүмәттәр тупланған. Был мәғлүмәттәр бер осраҡта әкиәттәргә генә хас булған уйҙырма ваҡиғалар аша төҫмөрләнһә, икенсе осраҡта ысынбарлыҡҡа яҡынлаштырылып, реалистик планда, факттарҙы констатациялау рәүешендә яҡтыртыла. Уйҙырмалар, фантастика бигерәк тә халыҡтың йәки айырым ырыуҙарҙың килеп сығышы кеүек тарих төпкөлөнә ҡайтып ҡалған ҡатмарлы процестарҙы аңлатыуға ҡоролған риүәйәт, легендаларҙа киң урын ала.

Этногенетик мәсьәләләрҙең ни дәрәжәлә ҡатмарлы булыуын күҙ алдына килтереү өсөн, «башҡорт» этнонимын асыҡлау йүнәлешендә алып барылған махсус тикшеренеүҙәрҙе иҫкә алыу ғына ла етер ине. Билдәле булыуынса, был тәңгәлдә фәндә тиҫтәнән ашыу фараз бар. Халыҡ легендаларында башҡорт исеменең килеп сығышы нигеҙҙә ике вариантта аңлатыла: «баш-ҡорт» (ҡорт— боронғо төрки телдәрендә бүре мәғәнәһендә йөрөй) һәм «ҡор башы». Мотивтарының боронғолоғо яғынан тәүге версияны «раҫлаусы» легендалар айырыуса ҙур ҡыҙыҡһыныу уята. Бөрйән, Үҫәргән, Түңгәүер ырыуы башҡорттары араһында, йәғни Башҡортостандың көньяҡ-көнсығыш өлөшөндә, киң таралған был төркөмдә кеше аңындағы бик боронғо ҡараштар — бүрене изгеләштереү[44], тотемизм күренеше сағылған. Бүре легендаларҙа илдәренән китергә мәжбүр булған илһеҙ кешеләргә ил, төйәк табып биреүсе, ер ҡотон тойоусы изгелекле йән эйәһе итеп һүрәтләнә («Башҡорт һүҙе ҡайҙан килеп сыҡҡан?», «Ете ырыу» һ. б.).

Шуны ла әйтергә кәрәк, изгелекле хайуан ярҙамында яңы ер, төйәк табыу мотивы башҡорт фольклорына ғына хас күренеш түгел. Ул башҡа төрки халыҡтары ижадында, шулай уҡ боронғо венгр һәм Обь буйында йәшәгән угор ҡәбиләләренең фольклорын-

---

[42] Ғилми архив, ф. 3, оп. 63, д. 56, 24-се б.

[43] Юлуев Б. Аждаха-змей в рассказах башкир // Этнографическое обозрение, 1892, № 3; Руденко С. И. Башкирские сказки и поверья // Археология и этнография Башкирии. Т. V. — Уфа, 1973. С. 25—27.

[44] Башҡорттарҙың бүрегә табыныуҙары хаҡында тарихи-этнографик мәғлүмәттәрҙе ҡарағыҙ: Археология и этнография Башкирии. Т. IV. — Уфа, 1971. С. 224—228.

да ла сағыла. Сығышы менән Үҙәк Азия ерлегенә ҡараған был сюжеттың Көнбайыш Себер, Урал алды, Төньяҡ Кавказ территорияһына таралыуын профессор Р. F. Кузеев һундар дәүеренә, йәғни халыҡтарҙың бөйөк күсеү осорона ҡайтарып ҡалдыра [45].

Ҡыйын хәлдә ҡалған кешеләр төркөмөнә юл күрһәтеп килеүсе бүренең образынан тыш, башҡорт халыҡ легендаларында бүреәсә образы ла осрай («Бүреләр тоҡомо»). Һис шикһеҙ, был да бик боронғо легенда. Уның тамырҙары дөйөм төрки мифологияһына барып тоташа. Миҫал өсөн төрөктәрҙең ата-бабалары инә бүре менән һунн малайының никахынан яралған тигән легенданы [46] хәтергә төшөрөргә мөмкин.

Тимәк, «башҡорт» этнонимын аңлатыуға ҡоролған легендаларҙың нигеҙендә шулай уҡ поэтик уйҙырма ята. Ләкин ошо уйҙырма ваҡиғалар, мөғжизәле образдар аша ысынбарлыҡта булған ҡайһы бер күренештәрҙе, хәл-әхүәлдәрҙе төҫмөрләп була. Атап әйткәндә, дөйөм төрки ерлегендә тыуған сюжеттарҙың башҡорт халыҡ ижадында урын алыуы башҡорттарҙың Урта Азия, Себер халыҡтары менән боронғо этник һәм мәҙәни бәйләнештәрен сағылдырыусы үҙенсәлекле бер күрһәткес булып тора.

Башҡорт ырыу-ҡәбиләләренең Уралға мөғжизә арҡаһында күсеп килеүҙәре хаҡындағы легендалар араһында йәнә бер сюжет иғтибарҙы йәлеп итә. «Башҡорт ҡайҙан килгән?» тип аталған был әҫәр төрки телле халыҡтар донъяһына билдәле булған Ҡорҡотата образының башҡорт фольклоры ерлегендә йәшәүе менән әһәмиәтле.

Башҡорт легендаһының төп йөкмәткеһе ата-бабаларыбыҙҙың Ағиҙел буйына Ҡорҡот исемле башлыҡтары менән Алтай яғынан килеүҙәре хаҡында хикәйә ҡылыуға ҡайтып ҡала. Ҡорҡот-ата тураһындағы легендаларҙың асылын тәшкил иткән үҙәк мотив иһә (геройҙың үлемһеҙлек эҙләп, донъяның бер ситенән икенсе ситенә оҙаҡ ваҡыт күсеп йөрөүе һәм һәләкәте) башҡорт легендаһында күҙәтелмәй. Унда геройҙың исеме һәм сюжетты башҡа төрки халыҡтары легендаларына яҡынлаштырыусы айырым деталдәр генә бар: Ҡорҡоттоң өләң әйтеп, думбырала сиртеүе; кемдеңдер ҡәбер хаҡындағы иҫкәртеүе. Ләкин ошо деталдәр буйынса ла башҡорт риүәйәтенең Ҡорҡот тураһындағы ҡаҙаҡ легендаларына [47] яҡынлығын күрмәү мөмкин түгел. «Ҡитаб-и дәдәм Ҡоркут» эпосын һәм халыҡ легендаларын ентекләп тикшергән академик В. В. Бартольд Ҡорҡот-ата культы уғыҙҙарҙан ҡаҙаҡтарға ҡыпсаҡтар аша ингән тигән фекерҙә торған [48].

---

[45] Кузеев Р. Г. Древнебашкирские предания о нахождении новой родины и их северокавказские параллели // Всесоюзная научная сессия, посвященная итогам полевых археологических и этнографических исследований 1970 г. (Тезисы докладов.) — Тбилиси, 1971. С. 50.

[46] Бичурин Н. Я. (Иакинф). Собрание сведений о народах, обитавших в Средней Азии в древние времена. Т. 1. — М., 1950. С. 220.

[47] Ҡорҡот-ата хаҡындағы ҡаҙаҡ легендаларын ҡарағыҙ: Жирмунский В. М. Тюркский героический эпос. — Л.: Наука, 1974. С. 544—549.

[48] Шунда уҡ, 545-се б.

Этногенетик легенда һәм риүәйәттәрҙең икенсе бер төркөмөн айырым ыруу-ҡәбиләләр, аймаҡ-араларҙың килеп сығышы тураһындағы сюжеттар тәшкил итә. Боронғоға уҡталыу, теге йәки был нәҫел ебенең мөғжизәле башланышын һүрәтләү — был төр легендалар өсөн дә характерлы һыҙат.

Ошо йәһәттән айырыуса Гәйнә, Шайтан-Көҙәй ырыуҙары, шүрәле нәҫелдәре хаҡындағы легендалар ҡыҙыҡлы. Гәйнә ырыуы тураһындағы легендаларҙа, мәҫәлән («Гәйнә ырыуы», «Толбуйҙар», «Әйнә менән Гәйнә»), ваҡиғалар ер йөҙөндә әле ҡояш та, әҙәм заты ла булмаған дәүергә ҡайтарып ҡалдырылалар. Шул заманда Тол йылғаһы буйына боланға ултырып килеп сыҡҡан Гәйнә менән Әйнә ҡояшты аждаһа (икенсе осраҡта ерҙең хужаһы, ар затлы убыр әбей) ҡулынан ҡотҡарып, ергә тереклек бирәләр.

«Шайтан ырыуы» исеме менән бирелгән легендала бер Көҙәй башҡортоноң шайтанды хәйлә менән еңеп, уның йәш ҡатынына өйләнеүе — һөҙөмтәлә Шайтан-Көҙәй ырыуының таралыуы тураһында хикәйә ителә. Был әҫәрҙең тарихи ерлеген аныҡлау юлында Р. Ғ. Ҡузеевтең фекере иғтибарҙы йәлеп итә. Уның уйлауынса, Шайтан-Көҙәй этнонимы эсендә шайтан компоненты — һуңғараҡ ингән күренеш, һәм ул Көҙәй ырыуы башҡорттарының этник составына уғыр йәки башҡа этник төркөмдәрҙең килеп ҡатнашыуын сағылдырыуы менән әһәмиәтле[49].

Теге йәки был ырыу-ҡәбиләнең килеп сығышы тураһында, ғәҙәттә, шул ырыу вәкиле һөйләүсән. Шунлыҡтан күпселек осраҡтарҙа һөйләүсе үҙ ырыуының абруйлылығын, уның ябай ғына ырыу түгеллеген билдәләү ниәтендә лә ғәҙәти булмаған ситуацияларға мөрәжәғәт итеп, ваҡиғаларҙы бик боронғо замандарға ҡайтарып хикәйәләргә ынтыла булһа кәрәк. «Беҙ башҡорттоң төбө булабыҙ», «Беҙ төп башҡорттар» рәүешендәге йомғаҡлауҙарҙы нәҡ бына ошо ынтылыштың аныҡ бер күрһәткесе итеп аңларға кәрәктер.

Генеалогик хикәйәләр араһында уйҙырманан азат булған, факттарҙы реаль тонда һөйләүгә ҡоролғандары ла байтаҡ. Әйле һәм Табын ырыуҙары хаҡында А. Г. Бессонов яҙып алған риүәйәттәр («Башҡорттарҙың килеп сығышы», «Башҡорт тарихы», «Әйлеләр менән Табындар»), мәҫәлән, шундайҙарҙан. Бындай риүәйәттәрҙә айырым ырыуҙар, ара, йәки аймаҡтарҙың биләгән ерҙәре, ауылдары телгә алына, кешеләрҙең кәсебе, башҡа халыҡтар менән аралашыуы кеүек белешмәләр киң генә урын ала. Һөйләүсенең оҫталығына, уҡымышлылығына ҡарап, бындай сюжеттарға традицион мотивтар, уйҙырма элементтар ҙа килеп инергә мөмкин. Миҫал өсөн «Башҡорттарҙың килеп сығышы» исемле риүәйәттең тәүге өлөшөндәге убалар хаҡындағы мәғлүмәттәрҙе иҫкә алырға булыр ине.

Шулай итеп, этногенетик легенда һәм риүәйәттәрҙә халҡыбыҙҙың үҙ тарихына иғтибары, уны аңларға һәм һаҡларға тырышы-

[49] Кузеев Р. Г. Происхождение башкирского народа: Этнический состав, история расселения — М.: Наука, 1974. С. 211—212.

уы; ер-ил, туғанлыҡ кеүек изге, мөһим әхләҡи тойғоларҙың бик тәрәнгә барып тоташҡан тамырҙары һиҙемләнә.

Ер-һыу, тау-таш һ. б. урын атамаларына бәйле риүәйәт, легендалар (топонимик хикәйәләр) башҡорт халыҡ ижадында айырыуса киң урын ала. Уралдың гүзәл тәбиғәте элек-электән үҙе бер сер донъяһы булып, һәр ташы, һәр йылғаһы тарих һөйләр ҡомартҡы күренеп, халҡыбыҙҙың ижади фантазияһын уятҡан, күп һанлы поэтик әҫәрҙәр тыуҙырыуға сәбәпсе булған. Рельефтың тәбиғи үҙенсәлектәренән тыш, теге йәки был урында булып үткән иҫтәлекле ваҡиғалар ҙа кешеләр хәтерендә эҙһеҙ ҡалмаған: ошо ваҡиғаларға ҡарата халыҡ телендә күп һанлы һәм төрлө топонимик риүәйәт, легендалар тыуған. Бындай әҫәрҙәрҙе «топонимик риүәйәт» йәки «топонимик легенда» тип атау шартлы, әлбиттә.

Урын исемдәренә бәйле хикәйәләрҙең бер төркөмөн боронғо ышаныуҙар нигеҙендә тыуған әҫәрҙәр тәшкил итә. Бындай легендаларҙа тауҙың, йылға-күлдең һ. б. объекттарҙың, уның исеменең барлыҡҡа килеүе мөғжизәле ваҡиға, ғәҙәти булмаған хәл-әхүәлдәр аша аңлатыла. Уларға йыш ҡына эпос мотивтары ла, донъя яралыу хаҡындағы мифтарҙың һыҙаттары ла килеп инә.

Мәҫәлән, бейек йәки үҙенсәлекле формалы ҡайһы бер тауҙарҙың, ғәҙәттәгенән ҙур булған уба-ҡәберлектәрҙең барлыҡҡа килеүен аңлатыу ниәтендә, кешеләр әле боронғо анда уҡ тыуған Алпамышалар образына мөрәжәғәт иткәндәр («Мүсектау», «Алпа ҡомо — айырытау» һ. б.).

«Ике Инйәрҙең бәхәсе», «Ҡалым» кеүек легендаларҙа элекке анимистик ҡараштарҙың яңғырашы ишетелеү менән бергә, кеше һәм тәбиғәт араһындағы бәйләнештәрҙең яңы һыҙаттары билдәләнелә. Был әҫәрҙә кеше тәбиғәт күренештәренә, рельеф үҙенсәлектәренә аңлатма биреп кенә ҡалмай, уларға эстетик мөнәсәбәттә белдерә. Шуны ла әйтергә кәрәк, күпселек легендаларҙа боронғо мифологик ҡараштар бик алыҫлашҡан формала, һуңғы дәүерҙәргә хас булған ситуациялар юҫығында килеп еткән («Ҡалым»).

Топонимик легендалар араһында тотемистик ҡараш ҡалдыҡтары сағылған сюжеттар ҡыҙыҡһыныу уята. Бындай сюжеттарҙа теге йәки был урындың барлыҡҡа килеүе йәки уның атамаһының сығышы изгеләштерелгән мал, айырыуса йылҡы, образына бәйләп аңлатыла. Мәҫәлән, атаҡлы Шүлгән мәмерйәһе эргәһендәге бер күлдең исеме, бик борон һыу төбөнән йылҡы малы сыҡҡанга, «Йылҡысыҡҡан күл» тип йөрөтөлә. Ябай ғына сюжетлы был легендала ғәҙәти булмаған ваҡиғалар, ғәжәйеп архаик мотивтар урын ала.

Тәбиғәт «хужалары», һәр төрлө «эйәләрҙең» боронғо халыҡ аңы тыуҙырған мифик заттарҙың образдары булыуы хаҡында алда әйтелгәйне инде. «Йылҡысыҡҡан күл» әҫәрендә төп персонаждарҙың береһе — күл эйәһе. Кеше ҡулына килеп эләккән сәйер төҫтәге эт тә, һыу төбөнән сыҡҡан йылҡы өйөрө лә — шул күл эйәһенең милке. Легенда кеше менән «хужа» араһында ошо ми-

лек өсөн барған үҙенсәлекле алышты һүрәтләй. Был алыш, әлбиттә, әкиәт, эпос батыры менән аждаһалар, дейеүҙәр араһында йә йәшәү, йә үлем өсөн барған көсөргәнешле көрәш түгел, ул бында һөйләшеү нигеҙендә бара. Ләкин ирешелгән һөҙөмтәгә ҡарап (ҡул эйәһенең, үҙ этен ҡайтарыу өсөн, кешегә йылҡы өйөрө биреүе), был һөйләшеүҙең шаҡтай киҫкен булғанлығы аңлашыла.

Ошо ваҡиғалар аша йәмғиәт, аң үҫешендәге бик мөһим ижтимағи күренеш сағылғанлығына тикшеренеүселәр иғтибар иткәйнеләр инде. Һунар эте урынына кеше ҡулына йылҡы өйөрөнөң килеп инеүен Ҡирәй Мәргән «тәүтормош йәмғиәтендә үҫеште, һунарсылыҡтан мал эйәләштереүгә күсеүҙе сағылдыра торған мотив тип билдәләгәйне[50]. Артабан был фекер Әхмәт Сөләймәновтың мәҡәләләрендә ҡеүәтләнде[51].

Беҙҙең китапта бирелгән текста әһәмиәтле йәнә бер деталь бар: ул — «Йылҡысыҡҡан күл»дең ҡотло урын булыуын иҫкәртеү. Турапан-тура әйтелмәһә лә, был мотив легенданың башҡа варианттарынан да тоҫмаллана (күлдән сыҡҡан малдың бик үрсемле булыуы, бай улының нәҫелдәре таралыуы һ. б.). Йәғни урынды изгеләштереү — малды изгеләштереүгә, уны культ дәрәжәһенә күтәреү тенденцияһына бәйләнгән. Боронғо башҡорттарҙың аңында мал культы урын алыуы «Үгеҙһөҙгән күле», «Ҡариҙел», «Турат сағылы», «Ҡейәүташ» исемле легендалар миҫалында ла күрергә мөмкин. Бер-береһенә бик яҡын торған һуңғы ике сюжетта был мотив айырыуса асыҡ һыҙатлана.

Ҡуҙ тейеүҙән һәләк булған туры толпарын ерләгәс, легенда геройының (кейәү егетенең) ғаилә ҡороуҙан баш тартып, үҙ иленә ҡайтып китеүе — йылҡы малына ҡарата изгеләштерелгән мөнәсәбәтте сағылдырыусы образлы деталь булып тора («Турат сағылы»).

Теге йәки был топонимдың килеп сығышын тарихи ваҡиғалар күҙлегенән аңлатырға тырышҡан риүәйәт һәм легендалар халыҡ араһында шулай уҡ бик киң таралған. Сит ил баҫҡынсыларына ҡаршы көрәш, яу ҡайтарыу, төрлө һуғыш-болалар, унда ҡатнашып, батырлыҡ йәки зирәклек күрһәткән айырым шәхестәр исеменә бәйләп аңлатылған урындар күп кенә.

«Ҡанъятҡан баҫыуы» исемле риүәйәттә, мәҫәлән, башҡорттарҙың монгол иҙеүе аҫтында йәшәгән фажиғәле осоро ғәжәйеп образлы итеп әйтеп бирелгән: «Ергә ҡояш төшмәгән: уны хан сатыры ышыҡлаған».

Халыҡтың ыҙа сигеүе, күп хәсрәт күреүе һәм шул михнәттәргә сыҙай алмай яуға күтәрелеүе хаҡында һөйләгәндә лә риүәйәт һүҙгә һаранырак. Ике яҡ араһында алыштың көсөргәнеше тыңлаусыға баҫыу ҡыҙартып ятҡан ҡан образы аша еткерелә. Яу

---

[50] Ҡирәй Мәргән. Башҡорт халҡының эпик ҡомартҡылары, 37—38-се б.

[51] Сөләйманов Ә. М. Боронғо топонимик легендалар һәм риүәйәттәр. 112—115-се б.

картинаһы был образда шул тиклем асыҡ күҙаллана, хатта ваҡиғаны ентекләп һөйләүҙең кәрәге лә ҡалмаған төҫлө.

Ҡайһы бер топонимик риүәйәттәр социаль-ижтимағи, тормош-көнкүреш хәлдәре йоғонтоһонда тыуған. Рус баярҙары һәм заводчиктарының башҡорт ерҙәрендә үҙҙәрен саманан тыш иркен тотоуҙары, урындағы халыҡтың ғәҙелһеҙлеккә ҡаршы ниндәйҙер саралар ҡылырға тырышыи ҡарауы кеүек күренештәр хаҡында «Яҡтыкүл», «Мауыҙлы күл», «Дүнәнһуйған тау» һ. б. күп кенә риүәйәттәрҙә һөйләнә.

Синфи тигеҙһеҙлек, ярлы-ябағаның хоҡуҡһыҙлығы һөҙөмтәһендә тормошта әленән-әле булып торған фажиғәле ваҡиғалар тыуҙырған топонимик риүәйәт һәм легендалар байтаҡ («Инсебикәташ», «Сәлимәҡасҡанташ»).

Топонимик риүәйәт һәм легендалар араһында генеалогик хикәйәләргә яҡын торған үҙенсәлекле бер төркөм бар: ул — ауыл тарихы. Бындай риүәйәттәрҙә йыш ҡына теге йәки был ауыл исеменең килеп сығышын аңлатыу менән бергә шул ауылда йәшәгән нәҫелдәр, аймаҡ-аралар тураһында мәғлүмәттәр бирелә. Ата-малар бер осраҡта билдәле урынға тәү башлап килеп ултырған кеше (аҡһаҡал, батыр) исеменә бәйләп аңлатыла, икенсе осраҡта һәр төрлө иҫтәлекле ваҡиғаларға бәйләп һөйләнелә. Ваҡиғалар ҙың тематикаһы үрҙә тикшерелгән ер-һыу, тау-таш исемдәре хаҡындағы риүәйәттәрҙәгесә: тарихи-ижтимағи йәки көнкүреш характерындағы әҫәрҙәрҙе үҙ эсенә ала.

Яңы ергә килеп нигеҙ ҡороу мотивы иһә башлыса социаль-иҡтисади сәбәптәр (әйтәйек, урындың мал үрсетер, һунар өсөн уңайлы булыуы) менән аңлатыла. Ауыл тарихтарына бәйле ҡайһы бер риүәйәттәрҙә генеалогик легендаларға хас булған традицион мотив — мал өйөрө артынан килеп төйәкләнеү — үҙенсәлекле яңғыраш ала. («Яман менән Йомаш ауылдары», «Һаҡтау ауылы».)

Топонимик легенда һәм риүәйәтттәрҙең йөкмәткеләре бай, формалары ла бер төрлө түгел. Улар төрлө замандарҙа, төрлө ижтимағи, тормош-көнкүреш шарттарында тыуған ижад емеше итеп ҡабул ителә.

Башҡорт халыҡ хикәйәләренең мөһим бер тармағы — **тарихи риүәйәттәр**. Башта уҡ әйтелгәнсә, тарихилыҡ теге йәки был дәрәжәлә риүәйәт һәм легендаларҙың бөтәһендә лә бар. Әммә факт менән уйҙырманың үҙ-ара мөнәсәбәтенә ҡарап, ваҡиғаның конкрет-тарихи ерлеге төрлөсә күҙ алдына килтерелә ала.

Тарихи риүәйәттәр төркөмөнә, ғәҙәттә, реаль нигеҙе асыҡ билдәле риүәйәттәрҙе индереп йөрөтәләр. Уларҙың һүрәтләү объекты — тарихи ваҡиғалар һәм шул ваҡиғаларға бәйле булыуы менән танылған шәхестәр.

Тарихи риүәйәттәрҙең репертуары бай, тематикаһы күп төрлө. Дөйөмләштереберәк ҡарағанда, уларҙың йөкмәткеләрендә ҙур ике йүнәлеш айырым-асыҡ күҙгә ташлана:

1) тыуған ил һәм уны сит ил баҫҡынсыларынан һаҡлау мотивтарын сағылдырыусы риүәйәттәр;

2) социаль тигеҙһеҙлек, милли һәм синфи иҙеү; ирек һәм милли азатлыҡ өсөн көрәш идеяларын йөрөткән халыҡ хикәйәләре.

Тәүге төркөмдә сағылған ваҡиғаларҙың хронологик ҡоласы шаҡтай киң, тематик даирәһе иһә түбәндәгеләрҙән ғибәрәт: монгол яуы, нуғай мырҙаларының ҡыҫымы, ҡаҙаҡ, ҡалмыҡ барымталары; 1812 йылғы француз һуғышы һ. б.

Икенсе төркөмгә рус самодержавиеһының башҡорт ерҙәрен «һатып алыу» сәйәсәте, урындағы халыҡтың бөлгөнлөккә төшөүе, милли һәм синфи иҙелеүенең һөҙөмтәһе булараҡ күтәрелгән ихтилалдар һ. б. шуның кеүек ваҡиғалар хаҡындағы риүәйәттәр ҡарай.

Башҡорт ырыуҙарының Алтын Урҙа хандары ҡыҫымы аҫтында йәшәүен һүрәтләүсе тарихи риүәйәттәр һан яғынан артыҡ күп түгел. Әммә булғаны ла шул дәһшәтле замандың шаңдауын реаль һыҙаттарҙа күҙ алдына килтерергә мөмкинлек бирә. Улар монгол яуын үҙ юлында бөтә нәмәне ҡырып, яндырып килеүсе дәһшәтле, яуыз көс итеп һүрәтләй. Айырым башҡорт ырыуҙарының аяуһыҙ көрәшкә күтәрелеүе, тиңһеҙ алыштар, ҡан ҡойош һ. б. ваҡиғалар риүәйәттәрҙә аныҡ географик ерлектә, конкрет шәхестәр исеменә бәйләп яҡтыртыла («Биксура», «Бошман-Ҡыпсаҡ батыр»). Риүәйәттәрҙең ҡайһы берҙәре бейҙәрҙең Алтын Урҙа хандарына баш һалып, уларҙан оран һәм тамға алып ҡайтыуҙары хаҡында һөйләй. Теге йәки был ырыу вәкилдәренең монгол хандарына баш һалыуы риүәйәттәрҙә кире баһалана. Силәбе өлкәһенең Ҡараболаҡ ауылында яҙып алынған бер риүәйәттә Сыңғыҙхандан тамға алған Сырҙы аймағынан башҡа аймаҡтарҙың көлөүе хаҡындағы мәғлүмәт [52] — шуға дәлил. Көлөү бында баҫҡынсыларға бил-баш эйеү менән килешмәүҙе, патриотлыҡты хуп күреүҙе аңлатыусы художестволы алым хисабында. Ошо яҡтан был риүәйәткә «Бошман-Ҡыпсаҡ батыр» риүәйәте ауаздаш. Унда бүләк, мал-мөлкәткә алданып, хан ғәскәренә ҡушылып киткән ырыу төркөмдәре шелтәләнә, ә Бошман батырға, ғорур, үлем алдында ла теҙ сүкмәгән, азатлығын дәрәжәгә, байлыҡҡа алмаштырмағандарға мәдхиә уҡыла.

Алтын Урҙа емерелгәндән һуң, башҡорттарҙың Нуғай, Ҡазан, Себер ханлыҡтарының ҡыҫымы аҫтында ыҙа сиккән дәүере лә халыҡ ижадында сағылыш тапҡан. Шул замандың һулышын беҙҙең көндәргә килтереп еткереүе менән уҙған быуаттың уртаһында Мең ҡәбиләһе башҡорттарынан В. С. Юматов тарафынан яҙып алынған бер риүәйәт әһәмиәтле. Унда ҡатмарлы нуғай-башҡорт мөнәсәбәттәре генә түгел, нуғай мырҙаларының үҙ-ара бәрелештәре хаҡында ла тетрәткес юлдар бар: «...Килембәттәр (ике бер туған нуғай мырҙалары. — *Ф. Н.*) араһында ҡанҡойош һуғыш башланды; бик күп халыҡ ҡырылды. Хатта ер тетрәне, ер иңрәне...» [53]

Бола башҡорт ерендә була. Тимәк, «бик күп халыҡ ҡырылды» тигәнендә, иң әүәл тыныс башҡорт халҡы күҙ уңында тотола. Ҡа-

---

[52] Ғилми архив, ф. 3, оп. 26, д. 10, л. 59.
[53] Оренбургские губернские ведомости, 1848, № 7.

рымталашыу ваҡытында «ер тетрәне, ер инрәне» тип бушҡа ғына әйтелмәгән риүәйәттә. Башҡорт өсөн Күк (Күк тәңреһе) беренсе дәрәжәләге илаһ (Ибн-Фаҙланса, Раббы — божество) булһа, Ер йәки Ер-һыу — икенсе дәрәжәләге илаһ булған. Шуға күрә Ер иң әүәл шул башҡорттар өсөн тетрәй, улар өсөн инрәй. Башҡорт халҡының Нуғай мырҙаларынан күргән яфаһының ни тиклем ауыр икәнлеген бына шулай, хатта килер быуындар тетрәрлек итеп образлаштырған. Ике Килембәттең ыҙғышы — тарихи факт. Ул шәжәрәләрҙә лә сағылыш тапҡан. Шулай итеп, һүҙ барған риүәйәттә тарихи факт мифологик мотивтар менән һыйыштырыла. Һуңғыһы тәүгеһенең асылын еткереүгә булышҡан.

Әммә шуны ла әйтергә кәрәк, оҙаҡ ваҡытҡа һуҙылған тарихи, мәҙәни мөнәсәбәттәр башҡорттар менән нуғайҙарҙың рухи мәҙәниәтендә ҡайһы бер уртаҡ күренештәрҙең барлыҡҡа килеүенә лә сәбәпсе булған. Томға индерелгән «Ҡырҡ нуғай батыры», «Ҡарасай менән Ҡазанхан» риүәйәттәре нәҡ шул хаҡта һөйләй.

Тарихтан билдәле булыуынса, XVI—XVIII быуаттарҙа башҡорт-ҡаҙаҡ ырыуҙары араһында мөнәсәбәттәр ҡатмарлаша. Бер яҡтан, ике халыҡ араһындағы рухи яҡынлыҡ, ҡәрҙәшлек, дуҫлыҡ тойғоларының үҫеүе һәм шул нигеҙҙә уртаҡ ижад өлгөләре барлыҡҡа килеү, икенсе яҡтан, үҙ-ара үсләшеүгә, дошманлашыуға килтергән феодаль сапҡындар, барымта һәм ҡарымта күренештәре урын ала. Ошо хәл, тәбиғи, тарихи фольклорҙа сағылмай ҡалмаған: көньяҡ, көньяҡ-көнсығыш башҡорттарының ауыҙ-тел ижадында ҡаҙаҡ менән башҡорт барымталары хаҡында байтаҡ ҡына риүәйәт һәм легендалар осрай. Риүәйәттәр раҫлауынса, байлыҡ артынан ҡыуыу маҡсатында үткәрелгән феодаль яу сабыуҙар — ярлы-ябағаға бөлгөнлөк, ҡайғы-хәсрәт алып килеүсе яман күренеш. Шуға риүәйәттәрҙә был йоланы бөтөрөү теләге белдерелә. «Ыҫмаил менән Дауыт» риүәйәтендә аҡһаҡалдар ауыҙынан «Яуҙы ҡан ҡоймай кире борорға тырышығыҙ» тип әйттерелгән кәңәштә тәрән мәғәнә ята: уға кешелеклелек идеяһы һалынған. Ошо яҡтан «Ыҫмаил менән Дауыт»ҡа «Баяс батыр» риүәйәте яҡын. Был риүәйәт йәнә шуныһы менән әһәмиәтле: унда илде, ер-һыуҙы һаҡлауҙың изге тойғо, изге бурыс булыуы һыҙыҡ өҫтөнә алына. Башҡорт батыры Баяс, үҙенең яуға сығыуын һәм дошманына ҡул күтәреүен аҡлағандай итеп, ҡаҙаҡ батыры Алаҫтаймаға: «Әй, Алаҫтайма, малды һаҡлау — бер бурыс, илде һаҡлау — бер бурыс. Ҡабат килеп йөрөмә!» — ти.

Юғарыла билдәләнгән мотив һәм идеялар башҡорт ырыуҙарының ҡалмыҡ, татар феодалдары һөжүмдәрен ҡайтарыу хаҡындағы риүәйәттәрҙә лә күҙәтелә («Тәкәғашҡа», «Өмбәт батыр»).

Хәрби-патриотик тема айырыуса 1812 йылғы француз һуғышы хаҡындағы риүәйәт-легендаларҙа баҙыҡ һыҙатланыш ала. Уларҙағы патриотик йөкмәткe халыҡ тормошондағы һәм рухи мәҙәниәтендәге оло үҙгәрештәрҙе сағылдыра.

Башҡорт ырыуҙарының ике быуаттан ашыу Рәсәй дәүләте ҡарамағында йәшәүе, милли һәм ижтимағи аң үҫешенең юғарыраҡ баҫҡысҡа күтәрелеүе кеүек мөһим факторҙар халыҡ ижады әҫәр-

ҙәренә йоғонтоһоҙ ҡалманы, әлбиттә. Хәҙер инде риүәйәттең төп геройы булып айырым бер ырыу йәки төбәк батыры түгел, ә илең, Ватаның һаҡларға дәррәү күтәрелгән халыҡ массалары тора. Халыҡ массаларының роле, уның патриотик тойғоһо бигерәк тә «Икенсе әрме» әҫәрендә тәрән асыла. Рус батшаһының саҡырыуына ҡушылып, башҡорттарҙың француз яуына дәррәү күтәрелеүе риүәйәттә ҙур художество оҫталығы менән бирелгән. Һуғыш хәбәрен ишеткәс тә, «йәшен һуҡҡандай, һиҫкәнеп китеп, аяҡ өҫтө баҫҡан бөтә Урал халҡы», ир-егеттәрҙе оҙатырға йыйылған бисәсәсә, ҡарт-ҡоро, бала-саға, хушлашыу йәнле картина булып күҙ алдына баҫа.

Оҙатыусыларҙың яугирҙарға әйткән үтенестәре тәрән мәғәнәле, оло хис-тойғолар менән һуғарылған. Улар сәсән ауыҙынан түбәндәгесә әйтеп бирелгән:

> ...Атҡайҙарға менеп, һаҙаҡ алып,
> Яуға китер ирҙәр булдығыҙ.
> Һай, илкәйем,
> Илкәйемдең батыр иркәйе.
> Тәңкәләрҙәй төҫлө шылтырашып,
> Шат көлөшөп, еңеп ҡайтығыҙ!..

Әгәр «Икенсе әрме» башҡорт ғәскәрҙәренең «тау шишмәһендәй ғөжөлдәп, диңгеҙҙәй рус ғәскәренә барып ҡушылыуы» картинаһын һүрәтләһә, «Ҡаһым түрә» әҫәре халҡыбыҙҙың француз һуғышында күрһәткән батырлыҡтарын бәйән ҡыла. Айырым шәхестең ҡаһарманлығын данлау маҡсатында барлыҡҡа килгән был әҫәр объектив рәүештә заманының тарихи шарттарын сағылдыра: ваҡиғалар ағышына халыҡ массаларының хәл иткес йоғонто яһағанлығын һүрәтләй. Аҡһаҡалдарҙың йыйылып кәңәш-төңәш итеүҙәре, тирә-яҡҡа йәшен тиҙлегендә таралған оранды ишетеү менән күҙ асып йомғансы ғәскәр йыйылыуы һ. б. күренештәр шуға миҫал. Яугирҙарҙы яуға оҙатҡанда телгә килгән Уралтау образы айырыуса тәрән мәғәнәле: уның «һүҙе» ил, халыҡ һүҙе булып ҡабул ителә. Яуға китеүсе егеттәрҙең Урал һүҙенән рухланыуы, уларҙың тыуған ерҙән көс алыуы һыҙыҡ өҫтөнә алына. Австрия еренә инеү, Парижды алыу эпизодтарын һүрәтләгәндә лә халыҡтың батырлығы менән ғорурланыу үҙәк урынға ҡуйыла. Ә Ҡаһым түрә иһә шәхси батырлыҡ күрһәтеүсе генә түгел, ҡаһарман полководец, ил теләген бойомға ашырыусы ил батыры, юлбашсы сифатында күҙ алдына баҫа.

Әгәр ҙә «Ҡаһым түрә» исемендәге сюжеттарҙа халыҡ һәм уны етәкләгән ҡаһарман башлыҡтың батырлығы данланһа, «Абдрахман Аҡйегет», «Йәнһары батыр» риүәйәттәрендә шәхси батырлыҡты данлау, ыңғай геройҙы идеаллаштырыу мотивы өҫтөнлөк итә. Шуға ла һөйләүсе шәхестең эшмәкәрлегенә дөйөм баһа биреү менән генә сикләнмәй, ә уның характер һыҙаттарына баҫым яһап, образды күркәмләтеү ниәтендә гиперболик алымдар ҡуллана.

1812 йылғы Ватан һуғышында башҡорт халҡы ифрат көслө

патриотик тойғо кисерә. Унда хатта башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары ла ҡатнашҡан. «Ирәмәле» йыр-риүәйәте йәш ҡатындың яугир иренән ҡалышмай атҡа менеп, ҡорал алып француз яуына китеүен бәйән итһә, «Йәнтүрә хикәйәһе» шул һуғышта ҡатнашып, батырлыҡтары өсөн миҙал алған ҡыйыу, сая, тапҡыр аҡыллы башҡорт ҡатынының дөйөмләштерелгән образын һынландыра.

Үҙенең күңелен тетрәткән оло тарихи ваҡиғаны халыҡ, әлбиттә, үҙе аңлағанса бирә. Һәр осраҡта ла һөйләүсенең теләге, художестволы фантазияһы билдәле кимәлдә эҫәрҙең йөкмәткеһенә йоғонто яһамай ҡалмай. Быны беҙ башҡорттарҙың Наполеон яуында ҡатнашыуы тураһындағы риүәйәттәрҙә лә асыҡ күрәбеҙ. Улар Ватан һуғышы ваҡиғаларын сағылдырғанда, тарихи хәҡиҡәткә тоғро ҡалһалар ҙа, деталдәрҙә, айырым эпизодтарҙы тасуирлағанда, ижади уйҙырманы эшкә егәләр. Башҡорттарҙы күргәс, Наполеондың Мәскәүгә ут төртөп ҡасыуы, күрһәткән ҡаһарманлыҡтары өсөн башҡорттарға рус батшаһынан бүләк, мал-мөлкәт, ер тәҡдим ителеүе кеүек эпизодтар шундайҙар иҫәбенә инә. Был риүәйәттәрҙең ысынбарлыҡ фактарын теркәү менән генә мауыҡмай, уларҙы образлы еткерергә ынтылыуынан килә һәм халыҡ яуының маҡсатын, ошо ҙур яуҙа башҡорт халҡының индергән өлөшөн художество яғынан дөрөҫ дөйөмләштереү менән алдыра (һәр береһе биш йөҙ кешенән торған утыҙҙан ашыу атлы полк сафтарын оҙатыу, уларҙы тәьмин итеүсе тыл полктары ойоштороу — былар тарихи фактар).

Ил эсендәге ижтимағи тәртиптәр һәм уларға ҡарата халыҡтың мөнәсәбәтен белдергән эҫәрҙәр, алда әйтелгәненсә, тарихи риүәйәттәрҙең икенсе бер ҙур тармағын тәшкил итә. Был төркөмгә ингән халыҡ хикәйәләренең күпселеге беҙҙе Башҡортостандағы XVIII—XIX быуат ваҡиғалары эсенә алып инә һәм халҡыбыҙҙың милли, социаль иҙеүгә ҡаршы алып барған ауыр көрәш юлын сағылдыра.

Билдәле булыуынса, телгә алынған осорҙа башҡорттар өсөн иң киҫкен мәсьәләләрҙең береһе булып ер мәсьәләһе торған. Башҡорт еренә хәрби ҡәлғәләр төҙөү, тау заводтары һалыу һәр ҡасан урындағы халыҡты еренән ҡыҫырыҡлауҙарға, ҡаты иҙеү һәм йәберләүҙәргә килтергән. Ә инде башҡорт ерҙәрен «ирекле һатыу» тураһында 1736 йылда, бигерәк тә 1869 йылдың 10 февраленда, сыҡҡан ер закондарынан һуң, башҡорттарҙың бөлгөнлөккә төшөүе, аслыҡҡа, хәйерселеккә дусар булыуы айырыуса көсәйә. Халыҡ тормошоноң ошо фажиғәле мәлен сағылдырған риүәйәттәр һәм башҡа төр эҫәрҙәр ауыҙ-тел ижады ерлегендә ифрат күп.

Башҡорт ерҙәренә күҙ атыусылар Рәсәйҙән генә килмәгән. «Байымдың ер һатыуы», «Баярҙың ер алыуы» исемле риүәйәттәрҙә, мәҫәлән, рус баярҙары һәм сауҙагәрҙәренең халыҡты алдау, ҡурҡытыу һәм хәйлә юлы менән осһоҙ ғына хаҡҡа әллә ни тиклем ер һәм урмандарҙы тартып алыуҙары тураһында һөйләнә. «Үтәгән» риүәйәте иһә Ҡазан губернаһының Мамадыш өйәҙенән килгән Ишекәй менән Ишбирҙе тигән ике ағайҙың шулай уҡ хәйлә менән башҡорт ерҙәрен «һатып алып», ерле халыҡты һемәйтеүҙә-

ре, бөлгөнлөккә төшөрөүҙәре тураһында хикәйә итә. Бындай риүәйәттәрҙә ваҡиғалар төрлө урында, төрлө ваҡытта, төрлө кешеләр ҡатнашлығында, төрлө шарттарҙа бара. Әммә уларҙың күптәренең сюжеты бер уртаҡ мотивҡа — «үгеҙ тиреһе тиклем ер» мотивына нигеҙләнә. Тикшеренеүселәрҙең хаҡлы билдәләүенсә, бөтә донъя фольклорына киң билдәле булған ошо традицион мотив риүәйәттәргә «колонизацияның йыртҡыс характерын, рәхимһеҙ үҙенсәлеген биреүсе художестволы деталь булараҡ килеп ингән»[54].

Айырым риүәйәттәр башҡорт ерҙәрен талауҙың социаль һәм синфи асылын асыҡ яҡтыртыуҙары менән әһәмиәтле. Мәҫәлән, «Байҙарҙың заводсыларға ер һатыуҙары» тигән риүәйәттә халыҡ фекере менән иҫәпләшмәй, шәхси ихтыяждарын ҡәнәғәтләндереү менән мәшғүл булған башҡорт байҙарының «эшмәкәрлеге» шелтәләнә, уларға нәфрәт белдерелә: ер һатыу тик улар өсөн генә файҙалы булыуы һыҙыҡ өҫтөнә алына.

Тарихи риүәйәттәрҙән күренеүенсә, халыҡ ер талаусыларға, ер таратыусыларға нәфрәт белдереп кенә ҡалмаған, ә бәлки был социаль афәттән ҡотолоу юлдарын да эҙләгән. «Ер һатыу» риүәйәте бушлай тиерлек күп ер алырға теләгән баярҙың ҡомһоҙлоғо арҡаһында үлеп ҡалыуы хаҡында һөйләй. Был риүәйәтте халыҡтың шул социаль афәттән ҡотолоу тураһындағы тормошҡа ашмаҫ хыялының емеше тип баһаларға була. Әммә халыҡ асылында утопист булмаған. Шул нигеҙҙә ер талаусыларға, батша түрәләренең яуызлыҡҡа ҡаршы башҡорттарҙың ризаһыҙлығы һәм тарҡау көрәшкә күтәрелеүе хаҡында күп һанлы риүәйәттәр һәм легендалар ижад ителгән («Морҙағол», Брагин исеменә бәйле әҫәрҙәр).

Шулай ҙа башҡорт халҡының милли һәм социаль иҙеүгә ҡаршы булған киҫкен көрәше, азатлыҡҡа ынтылыу идеялары үҙенең юғары нөктәһен 1773—1775 йылдарҙағы ихтилал ваҡиғаларын сағылдырған риүәйәттәрҙә тапҡан. Был риүәйәттәрҙең иң ҙур күпселеге Крәҫтиәндәр һуғышының күренекле батыры Емельян Пугачев һәм уның тоғро яуҙашы Салауат Юлаев исеменә бәйле. Пугачевты башҡорт халҡы үҙ күреп Бүгәс батша, Бүгәс батыр тип атай. Салауатты уның менән тиң итеп күрә: «Бүгәсәү ҙә менән Салауат — Рәсәйҙең батыр егете», — ти.

Салауат тураһындағы халыҡ хикәйәләре тәрән социаль йөкмәткеле, демократик йүнәлешле булыуҙары менән айырылып торалар. Башҡорт ерҙәренең рәхимһеҙ таланыуы, түләп бөтөргөһөҙ яһаҡтар, халыҡтың икеләтә ҡыҫым аҫтында йәшәргә мәжбүр булыуы риүәйәттәрҙә ғәжәп көслө фашлана. Был йәһәттән бигерәк тә «Салауат», «Салауат батыр» риүәйәттәре айырылып тора. Һуңғы әҫәрҙә, мәҫәлән, тире ҙурлығындағы ер алыу һылтауы менән алдап алынған ергә Ҡырмаһаҡал батшаның хужа булыуы, хоҡуҡһыҙлыҡҡа дусар булған халыҡтың Салауатҡа мөрәжәғәт итеп, уға тылсымлы ҡылыс тапшырыуы, йәш батырҙың илгә ташлаған ораны юғары рухта, ҙур психологик көсөргәнешлек менән бирелә. Уларҙа герой менән халыҡ берҙәмлеге проблемаһы ла күтәрелә.

---

[54] Башҡорт легендалары, 33-сө б.

Риүәйәттең мәғәнәүи ҡиммәтен арттырған йәнә бер мөһим күренеш — хеҙмәтсән халыҡтар дуҫлығы һәм берҙәмлеге идеяһын һыҙыҡ өҫтөнә алыу. Милли һәм социаль иҙеүгә ҡаршы көрәштә рус хеҙмәтсән халҡы менән бергә сығыш яһауҙың зарур икәнен аңлай алыуы һәм халыҡҡа таянып эш итә белеүе Салауатты башҡа бик күп ихтилал етәкселәренән өҫтөн иткән һәм юғары тарихи шәхес дәрәжәһенә күтәргән.

Халыҡтар берҙәмлеге мәсьәләһе «Салауат телмәре» исемле риүәйәттә айырыуса яҡшы сағыла. Ә инде «Салауаттың Пугачев менән осрашыуы»[55], «Салауат менән Пугачевтың дуҫлашып китеүе» кеүек әҫәрҙәр — ике халыҡтың дуҫлашыуына, туғанлашыуына мәдхиә кеүек ҡабул ителә.

Салауат Юлаев етәкселегендәге дәһшәтле күтәрелештә халыҡ массаларының ролен асыусы риүәйәттәр ҙур әһәмиәткә эйә. Башҡортостандың Балтас районында Г. Үмәркәев яҙып алған материалдар араһында халыҡтың Салауат ғәскәренә ярҙамы, теләктәшлеге хаҡында ғәйәт ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр табырға була. Бигерәк тә Нөркә ауылы аҡһаҡалы, яуға үҙенең ике улын биргән Муса Ҡәҙермәтовтың исеме ҙур йылылыҡ менән телгә алына унда[56].

«Салауат менән Балтас» әҫәре шул замандың синфи мөнәсәбәттәрен яҡтыртыу йәһәтенән ҙур әһәмиәткә эйә. Был риүәйәт «Салауат приказы» кеүек әҫәрҙәр менән ауаздаш булып, батырҙың халыҡҡа яҡынлығын, уның хәрби һәм рухи етәксеһе икәнлеген кәүҙәләндерә.

Салауат Юлаев хаҡындағы риүәйәттәрҙә 1773—1775 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр һуғышының мөһим ваҡиғалары, батша тәхетен тетрәткән ошо күтәрелештә башҡорт халҡының уйнаған роле дөрөҫ яҡтыртыла. Әммә художество күренеше булараҡ, улар уйҙырманан да азат түгел. Факт һәм ваҡиғаларҙы бутау, төрлө осорға ҡарауы ихтимал булған күренештәрҙе бер ваҡиға һәм осорға ҡайтарып ҡалдырыу осраҡтары бында ла бар (әйтәйек, Салауат яуынан ҡалған һуғыш ҡоралдары, ҡәберлектәр хаҡындағы мәғлүмәттәр). Уйҙырмалылыҡ һыҙаттары айырыуса Салауаттың шәхси сифаттарын һүрәтләүгә бағышланған риүәйәттәрҙә күренә: батырҙың утта янмаҫ, һыуҙа батмаҫ бәһлеүән булыуы, ун һигеҙ-егерме бот тартҡан кәүҙәһе, типһә тимер өҙөрлөк көсө һ. б. Был, әлбиттә, аңлашыла торған хәл: егерме-егерме бер йәшендә төрлө милләттән меңәрләгән кешеләрҙе оло яуға күтәрә алырлыҡ рух көсө булған батыр һәм шағир образын халыҡ батыр идеалы итеп күтәрә, уның тарихи эшмәкәрлеген шәхси һәм граждандыҡ батырлығын эпик традициялар алымы менән һүрәтләй һәм быуындар хәтерендә мәңгеләштерә.

Халыҡтың милли һәм синфи иҙеүгә ҡаршы йүнәлтелгән азатлыҡ көрәше мотивтары изгелекле ҡаҫҡындар тураһындағы риүәйәттәрҙә лә ҙур ғына урын ала. Был төркөмсәгә ингән әҫәрҙең күңселеге шулай уҡ демократик идеялар менән һуғарылған. Ри-

[55] Исторический вестник, 1892, № 10. С. 167.
[56] Ғилми архив, ф. 3, оп. 12, д. 271, л. 73—77.

үәйәттәрҙә ҡасҡындар, үҙ мәнфәғәттәрен яҡлап, юл баҫып, малбайлыҡ талап йөрөүсе яуыз ҡараҡ булып түгел, ә үҙен, ярлы-ябағаны йәберһеткән бай һәм түрәләрҙән үс алып йөрөүсе изгелекле, батыр шәхес итеп һүрәтләнә («Ғәҙебәк Насир», «Бейеш батыр» һ. б.).

Тарихи риүәйәттәрҙә башҡорт халҡының социаль-ижтимағи тормошондағы иң характерлы, эре һәм иҫтәлекле хәл-ваҡиғалар художестволы сағылыш тапҡан.

Халыҡ хикәйәләренең ҙур бер өлөшөн **тормош-көнкүреш риүәйәттәре** тәшкил итә. Уларҙың нигеҙендә көндәлек тормоштағы күренештәрҙе, хәл-әхүәлдәрҙе тасуирлау, донъя, ғүмер тураһында уйланыу һәм шул ерлектә тыуған кисерештәр ята; башҡорт ырыу-ҡәбиләләренең хужалыҡ итеү формалары, феодаль-патриархаль ғаилә мөнәсәбәттәре, туй һәм байрамдары, ырыуара мөнәсәбәттәре яҡтыртыла. Тәбиғи, тормош-көнкүреш хикәйәләренә башҡа төр (тарихи, топонимик) риүәйәттәргә хас булған һыҙаттар ҙа килеп инә, ләкин улар әҫәргә фон биреүсе, икенсе пландағы ваҡиғалар рәүешендә күҙаллана, ә алғы планға иһә халыҡтың көнкүреше һәм шуға бәйле булған коллизиялар сығарыла.

Көнкүреш риүәйәттәрҙең иң ҙур күпселеге ғаилә мөнәсәбәттәре, ҡыҙ алыу, ҡыҙ биреү, ҡатын-ҡыҙ яҙмышы хаҡында. Айырым шәхестәрҙең тормошо аркылы йәмғиәттең социаль нигеҙҙәрен тасуирлау был төр риүәйәттәрҙең бөтәһе өсөн дә хас күренеш. Һүрәтләү объекты булып, ҡағиҙә рәүешендә, феодаль-патриархаль мөнәсәбәт һәм йолалар һөҙөмтәһендә килеп тыуған фажиғәле ваҡиғалар, хәл һәм күренештәр алына. Ҡыҙҙы, һөйгәненән айырып, үҙе яратмаған кешегә көсләп биреү, ә егеткә үҙе теләмәгән ҡыҙҙы йәрәшеү, ҡалым түләү, күп ҡатын алыу кеүек иҫке ғөрөф-ғәҙәттәр риүәйәт һәм легендаларҙа көсөргәнешле, йыш ҡына фажиғәле хәлдәр аша яҡтыртыла. «Таштуғай» — бындай төрҙәге әҫәрҙәрҙең классик өлгөһө. Ижтимағи тәртиптәр, йолалар ҡорбаны булып, алыҫ һәм ят ерҙә йәне һөймәгән ир менән көн иткән бәхетһеҙ Көнһылыу образы риүәйәттең иғтибар үҙәгенә ҡуйылған. Героиняның, милли йола һәм ҡанундарҙы аша атлап, ата йортона килгәндә һөйгәне Байғубәк менән осрашыуы, һуңғы һулышына тиклем мөхәббәтенә тоғро ҡалыуы һәм фажиғәле үлеме — объектив рәүештә социаль тәртиптәргә ҡаршы йүнәлдерелгән тарҡау, әммә киҫкен ризаһыҙлыҡ булараҡ ҡабул ителә.

Ҡатын-ҡыҙ яҙмышы тураһындағы риүәйәттәр араһында тормоштағы айырым фажиғәле ваҡиғаны тасуирлаусы әҫәрҙәр байтаҡ. «Ғилмияза», «Ғәйшә» шикелле риүәйәттәрҙә, мәҫәлән, ҡаҙаҡтар тарафынан урланып, сит ерҙә тыуған ерен, ата-әсәһен, нәҫелнәсәбен һағынып, ирекке сығыуҙан өмөтөн өҙмәй көн иткән башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының әсе яҙмышы һүрәтләнә. Ил-йорт, изге төйәк тойғоһо, йәғни граждандлыҡ мотивтарының үҙәккә ҡуйылыуы — был әҫәрҙәрҙең идея әһәмиәтен бермә-бер күтәреүсе һәм тыңлаусыға тәьҫир итеү ҡеүәһен арттырыусы мөһим күренеш булып тора. Күп йылдар буйы ғаилә тормошонда йәшәп, бала-саға үҫте-

реп, инде ғүмере үтеп барған ҡатындың сит ерҙе ерһенмәй, бөтә нәмәһен ташлап, үҙ иленә ҡасыу эпизодын тулҡынланмайынса уҡып йәки тыңлап булмай («Ғәйшә»).

Социаль мөнәсәбәттәр һәм синфи ҡаршылыҡ нигеҙендә барлыҡҡа килгән шәхес фажиғәһе айырыуса «Һуңғы йыр» («Байрамбикә»), «Аҫылкүл» әҫәрҙәрендә асыҡ сағыла. Батша чиновнигы Мавриндың һылыуҙарҙың һылыуы Байрамбикәне мәсхәрәләүе һәм шуға бәйле ваҡиғалар тәрән көсөргәнеш менән һуғарылған. Аллаяр мулланың мәкерлеген, ике йөҙлөлөгөн фашлау аша риүәйәттә дин әһелдәренә булған социаль мөнәсәбәт яҡтыртыла. Халыҡ өсөн уның илен-ерен талаған батша вәкилдәре лә, үҙ мәнфәғәтен ҡайғыртҡан килмешәк тә, намыҫын һатҡан «милли» дин әһелдәре лә — берҙәй үк дошман. Әҫәрҙең финалы беҙгә шул турала һөйләй. Асыуҙан ярһыған халыҡтың Маврин менән Аллаяр мулланы һөңгө осона алып, ҡая аҫтына ырғытыуы ойошҡан синфи килешмәүсәнлек рәүешендә ҡабул ителә. Ғәҙел булмаған ижтимағи тәртиптәргә, йола, ғөрөф-ғәҙәттәргә ризаһыҙлыҡ белдереү — тормош-көнкүреш риүәйәттәре өсөн ғөмүмән хас һыҙат. Бер-береһен һөйгән ике йәш йөрәктең, айырылып, мәсхәрәләнеп йәшәүҙән үлемде өҫтөн күреү мотивы һәр әҫәрҙә төрлөсә күҙгә ташлана. Тормош-көнкүреш риүәйәттәрендә иғтибарҙы йәлеп иткән тағы бер нәмә бар: ул — ҡатын-ҡыҙ образын идеаллаштырыу. Риүәйәт героинялары, ҡағиҙә булараҡ, саф күңелле, мөхәббәттәренә тоғро, көслө рухлы образдар.

Легенда һәм риүәйәттәрҙә башҡорттарҙың хужалыҡ тормошон, төрлө йола һәм байрамдарым сағылдырған мәғлүмәттәр ҙә киң урын ала. Был йәһәттән айырыуса «Ҡарасәс», «Мәхүбә», «Уралбай», «Тоҡан батыр», «Ҡинйәбай» әҫәрҙәре ҡыҙыҡлы.

Материалдарҙан күренеүенсә, фольклор прозаһының әкиәттән тыш жанрҙары быуаттар төпкөлөндә үк формалаша башлап, төрлө тарихи шарттар эсендә үҫешкән. Риүәйәт һәм легендаларҙың барлыҡҡа килеүе кешелек йәмғиәтендә донъяны танып белеү ихтыяжының тыуыуы менән бәйләнгән. Теге йәки был күренештең, хәл-ваҡиғаның асылын, килеп сығыу сәбәбен аңларға һәм аңлатырға тырышыу, йәғни этиологик мотив, — халыҡ хикәйәләренең нигеҙ ташы.

Тәбиғәт серҙәренә төшөнөү, донъяуи хәлдәргә баһа биреү мөмкинлеге кеше аңының үҫеш кимәле менән билдәләнә. Халҡыбыҙҙың аң эволюцияһын, күңел ынтылыштарын сағылдырыу яғынан риүәйәт һәм легендалар әһәмиәттәрен һис ҡасан да юғалтмай торған ҡиммәтле рухи хазина ул [57].

*Фәнүзә Нәҙершина*

---

[57] Риүәйәт, легенда һ. б. халыҡ хикәйәләре хаҡында тулыраҡ мәғлүмәттәрҙе ҡарағыҙ: Нәҙершина Фәнүзә. Халыҡ хәтере. — Өфө, 1986.

# БОРОНҒО ЫРЫМ-ЫШАНЫУҘАР НИГЕҘЕНДӘ БАРЛЫҠҠА КИЛГӘН ЛЕГЕНДА ҺӘМ РИУӘЙӘТТӘР





## 1. ИКЕ ҮРҘӘКТЕҢ УТРАУ ЯҺАҒАНЫ

Бик борон-борон бөтөн ер өҫтөн һыу ҡаплаған булған. Шул икһеҙ-сикһеҙ, ярһыҙ-ниһеҙ һыу өҫтөндә бер заман ике үрҙәк килеп сыҡҡан. Былар йөҙөп йөрөгән-йөрөгән, берәй ергә туҡталып йомортҡа һалырға урын эҙләгән. Ҡуш ҡул ҫыуындай ҙа ҡатыраҡ нәмә юҡ икән. Үрҙәктәр аптырап һыу төбөнә сумалар. Сумғыс үрҙәк булғандарҙыр инде. Төбөнә етепме — нисек, томшоҡтарына эләктереп ләм алып сығалар. Береһе алып сыҡҡан ләмде ҡанаты менән ҡыҫып ҡымтыбыраҡ тора, икенсе үрҙәк сумып алып ҡуша бара. Ләмдән бер ҡаты нәмә ойоша. Инә үрҙәк шуның өҫтөнә бер аҙ йөнөн йолҡоп һалып, үҙенсә оя эшләп, күкәй һалып, баҫырға ултыра.

Һыу өҫтөндә ләмдән эшләнгән ояла балалар сығара. Балалары үрсеп, тегеләр ҙә ләмдән оя эшләп, үҙҙәре бала баҫып сығаралар. Ҡатып киткән шул ләм йыйылып-йыйылып бер утрау кеүек нәмә килеп сыға. Үрҙәктәр ләм ташый-ташый утрау ҙурая, ләм ҡатлауы ҡалына. Яйлап теге һыу аҫтындағы ергә тоташа. Шулай һыу өҫтөндә ләмдән утрау нығына.

Бүтән үрҙәктәр икенсе ерҙә лә шулай ләмдән утрау яҫайҙар.

Ерҙе шулай үрҙәктәр томшоҡтары менән һыу төбөнән ләм ташып яҫағандар. Үрҙәк берләтәүендә ниңә ләм, ҡом-таш сыға тиһегеҙ? Ана шул борон-борондан һыу төбөнән ләм, ҡом-таш сығарыу ҡылығынан ҡалған ул. Ҡом-ташты йотҡолап та ебәргән, ул йейгән аҙығын бешерергә ярҙам иткән.

Шулай үрҙәктәр ләм ташып ер йөҙө килеп сыҡҡан [1].

## 2. ҮГЕҘ МӨГӨҘӨНДӘГЕ ЕР

Икһеҙ-сикһеҙ, төпһөҙ-ниһеҙ һыу менән тулған, ти, ғәләм. Һыу ҙа күк кеңә, ти. Хоҙай бер заман ерҙе яратҡан. Хоҙай ҡөҙрәте менән бер ҙур балыҡ яратылған. Балыҡ өҫтөнә өс ғәләмәт ҙур үгеҙ баҫтырған. Үгеҙ мөгөҙҙәренә ерҙе күтәрттереп ҡуйҙырған.

Һыу, һыу өҫтөндә ҙур балыҡ, балыҡ өҫтөндә — өс үгеҙ, алты үгеҙ мөгөҙөндә — ер булып сыға инде [1].

## 3. АЙ МЕНӘН УРАЛ ТАУҘАРЫНЫҢ БАРЛЫҠҠА КИЛГӘНЕ

Борон, бик борон, күктә ике ҡояш булған. Ике ҡояш алһыҙ-ялһыҙ яҡтыртҡан да яҡтыртҡан. Кешеләр бик ыҙаланған. Көн яҡтыһында йоҡлай алмаған бер бай:

— Кем дә кем шул ике ҡояштың береһен атып төшөрә, шуға ҡыҙымды бирәм, ярты байлығымды бирәм, — тигән, ти.

Ат еткән ергә ат саптырған, хат еткән ергә хат ебәргәндәр — байҙың оранын ишетмәгән кеше ҡалмаған. Шунан байның йәйләүенә уҡсы-мәргәндәр йыйыла башлаған. Күптәр атып ҡараған. Ҡояштарға бер ни булмаған.

— Һеҙҙең мәргән исемен күтәреп йөрөүегеҙ ҡороһон, — тип, уңмаған уҡсыларҙы бай борон ҡайтара торған. Иң ахырҙа Урал тигән батыр килгән, ти, көс һынамаға. Мөгөҙ йәйәһен алып, тарамыш керешен тағып, алмас уғын һалып, ҡолас киреп тартып тороп, ысҡындырған икән — зыңҡ итеп ҡалған. Шул тауышҡа тауҙар ишелеп төшкән, ағыр һыуҙар туҡтап ҡалған. Ул арала алмас уҡ күккә осҡан. Осоп күҙҙән юғалған — бер ҡояшҡа барып та тейгән — уны ҡап урталай ярып үтеп тә киткән.

— Ай!

— Ай! — тип ҡалған бар йәйләү халҡы.

Ярыҡ ҡояштың бер ярты һы күктә ҡалған, бер яртыһы ергә ҡолап төшкән дә хазинаға бай, ҙур тауға әүерелгән, ти. Ярылғас, был ҡояштың нуры ҡайтҡан. Шунан алып кешеләр төндә йоҡлап ял итергә, ҡояш яҡтыһында эшләү өсөн, көс тупларға ғәҙәтләнделәр, ти.

Уҡ тейгәндә: «Ай!» тип ҡысҡырғанға, күктәге ярты ҡояшты Ай тип йөрөтә башланылар, ти. Ҡояштың икенсе яртыһынан ярал-ған тауҙы мәргән егет хөрмәтенә Урал тауы тип йөрөтә башлағандар, ти [1].

## 4. ҠОШ ЮЛЫ

Бик борон булған был хәл. Ул саҡта әле йондоҙҙар ҙа, Ҡош Юлы ла булмаған. Ҡайҙандыр алыҫтан, көньяҡтан, Уралға, Һаҡмар [1], Ағиҙел буйҙарына торналар килеп йәйләр булған. Элек уларҙы Һиндостан тигән ерҙән килә тип һөйләй торғайнылар.

Бер йылды торналар теҙелешеп йылы яҡҡа осҡан мәлдә елдауыл ҡупҡан. Бала торналар аҙаша башлаған, ҡайһы берҙәре, арып, ергә төшөп ҡала барған. Шул саҡ оло торналар, ҡалғандарына юл күрһәтеү өсөн, ҡауырһындарын сәсеп киткәндәр. Был ҡауырһындар йондоҙға әйләнгән. Торналар осҡан юлда ана шулай йондоҙҙар хасил булған. Тороп ҡалған торналар ошо йондоҙҙарға ҡарап ҡайтыр булғандар. Ҡош Юлы тигәндәре ана шунан ҡалған ул [2].

## 5. АЙҘАҒЫ ИКЕ ЯНУАР

Борон был яҡта әҙәм заты булмаған. Тау-ташта кейек-йәнлек кенә йөрөгән. Шунан бер ҡарт килеп сыҡҡан. Кейек-йәнлектәр, аптырап:

— Ни өсөн килдең? — тип һорағандар.

Ҡарт әйткән:

— Сысҡанды бесәй тотор, сабаҡты суртан йотор, хайуанды хайуан ҡыуыр, бәндәне бәндә ҡырыр. Тыныс урын эҙләп килдем, — тигән.

Шул ерҙә оҙаҡ йылдар йәшәгән ул ҡарт.

Бер саҡ был йылғаға төшөп йыуынайым тиһә, һыуҙан бер бағры килеп сыҡҡан.

— Ағай, мине суртан йоторға уҡтала, — тигән. — Башымды ҡайҙа ҡуяйым? — тигән.

— Таулы-ташлы йылғаға күс, — тигән ҡарт, — һалҡынға суртан менмәç.

Бағры шулай эшләгән.

Икенсе бер ваҡыт тауға менһә, быныҡ ҡаршыһына бер һуйыр килеп сыҡҡан.

— Ҡайҙа барайым, ағай? — тигән был. — Мине бөркөт тибергә итә.

— Урманға ҡас, — тигән ҡарт. — Бөркөт тауҙа ғына оса ул.

Һуйыр шулай иткән. Урманға инеп, тыныслап йоҡлап киткән.

Өсөнсө бер ваҡыт туғай буйлап китеп барғанында, быға ике ҡоралай тап була.

— Ағай, — тиҙәр былар, — артыбыҙҙан бүре төштө. Ҡотҡар беҙҙе.

Ҡарт шунда быларға кәңәш бирә:

— Алмашлап сабығыҙ, — ти.

— Беребеҙ йүгергәндә, икенсебеҙ тороп ҡала бит, — тиҙәр былар.

— Улайһа, килегеҙ, — ти ҡарт, — мин бәйләп ебәрәйем һеҙҙе, — ти.

Шулай эшләй был ҡарт. Ҡоралайҙарҙың икеһен бергә килтереп, арҡаға-арҡа терәтеп, ҡушарлап бәйләй ҙә әйтә:

— Берегеҙ йүгергәндә, икенсегеҙ ял итә барыр, — ти, — арый башлаһағыҙ, һыртығыҙға әйләнеп китерһегеҙ.

Арттарынан төшкән бүре быларҙы ҡыуа килә, былар еткермәйҙәр. Бүре ҡыуа, былар һаман алмашлап йүгерә. Килә торғас, ҡоралайҙар тау башына менеп етәләр.

— Һикер икенсе тауға, — ти өçтәгеһе.

Йүгереп килгән ҡоралай тауға һикерәм тип айға һикерә лә ҡуя. Улар артынан килгән бүре лә һикерәйем тиһә, ай битенә барып төшә.

Быңа шунан ҡалған, ти, ул ай битендәге ике януар. Улар мәңге бер-береһен ҡыуышыр, ти. Тик ҡыуып барғаны һис тә етә алмай, ти. Ни өсөн тиһәң, алдағыһының аяғы һигеҙ: дүртеһе сап-

ҡанда, дүртеһе һыртында ял итә. Арый башланы иһә, һыртына әйләнә лә тағы саба [1]...

## 6. ЕТЕГӘН ЙОНДОҘ

Бик борон заманда ер ҡалаҡтай ғына, күк табаҡтай ғына булған. Әҙәм заты ишәйә барған, кейек-йәнлек заты күбәйә барған, ер әкренләп киңәйә барған; ер киңәйгәс, күк тә ҙурайған.

Ул саҡта бөтә халыҡ бер ҡаҙандан ашай икән. Бер Алып килеп сыҡҡан да ҡаҙанды күтәреп эскән. Ни эшләмәк кәрәк? Тотонғандар оло ҡаҙан яһарға. Ҡаҙаны булғас, сүмесе лә кәрәк. Ҡаҙанды ҡойғандар көмөштән, сүместе яһағандар алтындан.

Теге Алып килгән дә ҡаҙанды күтәреп ҡараған. «Яраған», — тип урынына ултыртҡан да сүместе ҡулына алған. «Быныһы бик еңел икән», — тип, һауаға сорғотоп, тотоп алайым тиһә, сүмес юҡ: әйләнеп-әйләнеп осҡан да йондоҙҙар араһына инеп боҫҡан.

Алып сүмесе әле лә бар. Ете йондоҙ булып ялтырай ул: сүместең төбө — дүрт йондоҙ, тотҡаһы — өс йондоҙ, йәмғеһе етәү. Үҙе һәр саҡ әйләнеп тора ул Алып сүмесе: кистән ауыҙы өҫтә була, иртәнгә һырт яғы өҫкә сыға [1].

## 7. ЕТЕГӘН ЙОНДОҘ — ЕТЕ ҠЫҘ

*(вариант)*

Элек бергәүҙең ете ҡыҙы булған. Етеһе лә матур, етеһе лә батыр икән. Ҡырға сыҡһалар, гел бергә йөрөйҙәр икән. Һоҡланмаған әҙәм заты ҡалмай, ти, быларға, ҡыҙыҡмаған йән эйәһе ҡалмай, ти.

Бер саҡ был ҡыҙҙар тауға сыҡҡандар. Дейеү батшаһы быларҙы күреп ҡалған да арттарынан төшкән. Былар етәкләшеп тау башына менеп киткәндәр. Дейеү баҫтыртып улар артынан килгән. Инде тотам, инде эләктерәм тигәндә, ҡыҙҙар берәм-берәм һикереп күккә ашҡандар. Етеһе ете урынға боҫҡандар. Айырылмаҫ өсөн бер-беренә яҡын торорға тырышҡандар. Шул ете ҡыҙ ете йондоҙ булып ялтырай башлаған. Аҙаҡ уларҙы Етегән йондоҙ тип атағандар [1].

## 8. ЗӨҺРӘ ЙОНДОҘ

Атабыҙ Әҙәм [1] менән инәбеҙ Һауаны [2] күктән ергә атҡас, ер өҫтөндә кешеләр ишәйеп йәшәй башлағас, күктә тороп ҡалған фәрештәләрҙең дә ергә төшкөһө килгән. Улар, хәйлә табып, алланы алдамаҡсы булғандар. «Ерҙә әҙәм яраттың, улар унда гонаһ ҡылалар, беҙҙе лә ергә төшөр, беҙ уларҙы хөкөм итербеҙ», — тигәндәр. Алла ике фәрештәгә Әҙәмдә булған нәфсене биреп, гонаһ

эштәр ҡылмаҫҡа һүҙҙәрен алып, береһен ҡазый, икенсеһен мөфтөй итеп, ергә төшөргән. Шунан былар хөкөм итеп йөрөй башлағандар.

Бер мәлде ирле-ҡатынлы берәүҙәр ҡазыйға хөкөмгә килгәндәр. Был ирҙең ҡатыны шул тиклем һылыу булған, ҡазый ирҙе генә хөкөм итеп, зинданға ултыртырға уйлаған, ә һылыу ҡатынды үҙенә алмаҡ булған. Мөфтөй ҙә ҡазый ҡарарын хуплағас, ирҙе зинданға ябып ҡуйғандар былар. Бына хәҙер былар үҙ-ара ҡатын өсөн талаша башлайҙар. Ҡатын да һәтти үк аҡыллы булған. Быларға шарт ҡуйған: «Беренсе шартым шул: миңә донъялағы иң матур йөҙөктө табып бирегеҙ, икенсе шартым — хәҙер хәмер эсегеҙ. Кем күп эсә — мин шуныҡы», — тигән.

Теге икәү осоп йөрөп, ҡатын һораған йөҙөктө табып килтереп, тегенең ҡамыш кеүек бармағына кейҙереп ҡуйғандар ҙа, кем уҙарҙан хәмер эсергә тотонғандар. Ҡатын был мауыҙҙарға ерәнеп ҡарап торған-торған да гәрлегенән илай башлаған. Быны күреп, ике фәрештә, күктән төшөп, ҡатынды күккә осороп алып киткән. Зөһрә үҙенең йөҙөгө менән күктә шул көндән бирле балҡып тора башлаған [3].

## 9. АЙ МЕНӘН ЗӨҺРӘ

Элек бер ҡыҙ булған. Бик йәшләй унын әсәһе үлеп киткән. Атаһы үгәй әсә апкилгән. Үгәй әсә ҡыҙға көн бирмәгән: ҡаҡҡан-һуҡҡан, туҡмаған, көсө етмәҫтәй ауыр эшкә ҡушҡан.

Бер көн кис үгәй әсә Зөһрәгә һыу ташырға ҡушҡан.

— Иртәнгә саҡлы ошо сапсаҡты тултырып ҡуй, — тигән. — Әгәр тултырмаһаң, башыңды өҙөрмөн! — тигән. Үҙе сапсаҡтың төбөн тишеп ҡуйған, ти.

Зөһрә ҡыҙ төнө буйы һыу ташыған. Сапсаҡта һыу бер ҙә артмаған. Ауыр көйәнтә күтәреп ҡулбаштары уйылған. Билдәре бөгөлөп төшкән. Тамам хәле бөтөп, килеп йығылған.

Донъя тыныс булған ул төндә. Шылт иткән тауыш та ишетелмәгән. Күк йөҙөндә бары ай ғына йөҙөп йөрөй икән. Зөһрә ҡыҙ шул саҡ айға ҡараған да әйткән:

— Әй, айғынам, исмаһам, һин белер инең хәлемде! — тигән. — Ҡотолдорор инең башымды, — тигән.

Ай һаман тыныс ҡала биргән.

Зөһрә ҡыҙ илап тағы ялбарған:

— Ал мине үҙеңә! — тигән.

Шул саҡ ай яҡтырып киткән. Нурын һуҙған да Зөһрә ҡыҙҙы үҙенә тартып алған. Ана шунан бирле ай битендә көйәнтәле ҡыҙ баҫып тора, ти [1].

## 10. ЗӨҺРӘ ЙОНДОҘ

*(вариант)*

Зөһрә исемле ҡыҙ бик йәшләй етем ҡалған. Уны гел ҡаҡҡылап та һуҡҡылап ҡына йөрәткәндәр. Үгәй әсәһе өйөнә лә индермәгән, ти. Ҡыҙ аяҡ аҫтында йоҡлап йөрөгән.

Бер саҡ уны ен-пәрейҙәр урлап киткән. Алып киткәндәр ҙә донъя һыйышлы сапсаҡҡа һыу ташырға ҡушҡандар.

— Таң атҡансы ошо сапсаҡты тултыр, — тигәндәр, — тултырмаһаң, йәнеңде алабыҙ! — тигәндәр.

Ҡыҙ ташыған да ташыған — сапсаҡ тулмаған. Таң һарыһы күренә башлағас та, ен-пәрейҙәр килеп еткән. Шул саҡ Зөһрә ҡыҙ күктәге айға ҡараған да һыҡтап әйткән:

— Әй, айғынам! Алһаңсы мине үҙ яныңа! — тигән. — Ошо хәшәрәттәргә йәнем әрәм була бит, — тигән.

Шул саҡ Ай күктән йүгереп төшкән дә Зөһрәне күтәреп алып менеп киткән. Алып менгән дә Зөһрәне янындағы бер буш урынға баҫтырып ҡуйған. Ай янындағы Зөһрә йондоҙ бына шунан тороп ҡалған, ти, ул [1].

## 11. АЙҘАҒЫ ҠЫҘ

Етем ҡыҙ булған. Үгәй инәһе ай яҡтыһында һыуға ебәргән. Илай-илай бара икән был. Үҙе:

«Ай, инәкәйем, алһана,
Ай инәкәйем, алһана», —

тип һамаҡлай, ти.

Ай менән йондоҙ төшөп, ҡыҙҙы ҡыҫып алып, һауаға күтәргәндәр. «Ана, айҙа көйәнтәле ҡыҙ бар», — тиҙәр ине элек [1].

## 12. ҠОЯШ НИҢӘ ЮҒАРЫ?

Элек күк тә, ҡояш та түбәнерәк булған. Бер ҡатын балаһының бысрағын, йыраҡҡа илтеп түгергә иренеп, ситәнгә ҡыҫтырған. Күк менән ҡояш ғәрләнеп, юғарыға менеп киткәндәр.

## 13. МӨСӘЛДЕҢ БАРЛЫҠҠА КИЛГӘНЕ

Мөсәлдең башланмышы — сысҡан йылы. Ни өсөн тиһәң, яңы йылды тәү башлап сысҡан күргән. Ер бит үгеҙ өҫтөндә тора, ә үгеҙ ҙур балыҡ өҫтөндә. Үгеҙ менән балыҡ бәхәсләшеп китә. Балыҡ:

— Беҙгә яңы йыл килә. Тәү башлап уны мин күрәсәкмен, — тигән.

— Юҡ, һинең өҫтөндә мин торам бит әле. Шулай булғас, яңы йылды иң элек мин күрәм, — ти икән үгеҙ.

Үгеҙ менән балыҡ бәхәсләшкән арала, сысҡан, тиҙ генә үрмәләп, үгеҙҙең мөгөҙөнә менеп алған да ҡысҡыра икән:

— Юҡҡа бәхәсләшмәгеҙ! Күрмәйһегеҙме ни: иң юғарыла мин торам? Ҡояш сыҡҡанын да, Йыл килгәнен дә иң элек мин күрәм.

Мөсәлдең башланышы — сысҡан йылы, тип, ана шуға әйтәләр. Ҡалған йылдарҙың исеме хайуандарҙың йылды күреү тәртибенән килә лер инде. Сысҡан йылынан һуң һыйыр (үгеҙ) йылы, унан: барыҫ (барс), ҡуян, аждаһа, йылан, йылҡы, ҡуй, маймыл, тауыҡ, эт, дуңғыҙ (суҫҡа) йылдары. 12 йыл үткәс, мөсәл йәнә ошо тәртиптә ҡабатланған [1].

## 14. УМЫРЗАЯ

Бик борон заманда булған был хәл. Тирә-яғын бейек-бейек тауҙар, йәшел урмандар уратып алған ерҙә Дегәнәк исемле уҫал хан йәшәгән. Ялсыларын иртәнге яҡтынан киске ҡараңғыға тиклем баш күтәртмәй, бил яҙҙыртмай эшләткән. Ә үҙе бөтә ғүмерен кәйеф-сафа эсендә үткәргән. Бөгөн күрше ханы уға ҡунаҡҡа килһә, иртәгеһенә үҙе барып һыйланған, ти.

Яҙғы сыуаҡ көндәрҙең береһендә донъяға өс бала килгән. Беренсеһе — Дегәнәк хандың малайы, икенсеһе — күрше хандың ҡыҙы, өсөнсөһө Дегәнәк хан ялсыһының ҡыҙы икән.

Дегәнәк ярһыу арғымаҡтарын еккән дә күрше ханлыҡҡа киткән. Былар ҡолаҡ тешләтеү йолаһы үткәрергә булғандар; балалар ҙурайғас, туй яһап, ҡоҙа булышырға һүҙ ҡуйышҡандар.

Йылдар үтеп торған. Хандың улы Ҡарай ҙа, ялсының ҡыҙы Умырзая ла үҫеп буйға еткән. Атаһы менән әсәһенең ҡартайғанын күреп, егәрле ҡыҙ Умырзая уларҙы ял иттермәксе булған. Аталары урынына үҙе ханға эшкә киткән. Ҡыйғас ҡара ҡашлы, ҡарағаттай ҡара күҙле, ҡара сәсле был ҡыҙға хандың улы Ҡарай бер күреүҙән ғашиҡ булған. Умырзая ла егетте бик оҡшатҡан.

Умырзая балиғ булып буйға етеүгә, атаһы менән әсәһе донъя ҡуйған. Ҡыҙҙың берҙән-бер күҙ терәгән өмөтө — хан улы Ҡарай ғына тороп ҡалған.

Ҡыҙ менән егет йәшерен генә тау башында осраша торған булғандар. Был хәбәр ханға барып еткән. Башта ул ышанмаған. Нисек инде хан һынлы хандың улы ялсы ҡыҙын ятаһын! Шулай ҙа, эште ҡабаландырыу өсөн, күрше ханға яусы ебәргән.

Ҡарай атаһының был эшен һиҙеп ҡалған да, ығы-зығы, туй башланғансы, Умырзаяһын алып сығып ҡасҡан.

Дегәнәк хан бер кис улы янына инһә, берәү ҙә юҡ, ти. Киткән хан һарайында ығы-зығы, тауыш... Эҙләйҙәр-эҙләйҙәр — Умырзая ла, Ҡарай ҙа юҡ. Хан бөтә вәзирҙәрен, сапҡынсыларын үҙ янына саҡырып алған да:

— Хәҙер үк оятһыҙҙарҙы табып, тотоп килтерегеҙ! — тип бойорған.

Өс көн, өс төн эҙләп, таба алмай, хәлдән тайып ҡайтып килгәндәр сапҡынсылар.

Түҙемен юғалтҡан хан үҙе юлға сыҡҡан... Алты көн, алты төн эҙләгән. Етенсе көндө, һыҙылып таң атып килгәндә, бер тау битләүенә хәл йыйырға ултырған был. Шул саҡ бының янына ҡарға килеп ҡунған да «ҡар! ҡар!» тип ҡысҡыра икән.

— Нимә ҡысҡыраһың? — тип һораған хан ҡарғанан.

— Ҡарға һин улар ҙы, — тигән ҡарға, — ата ҡарғышы төшә ул.

— Нимә тип ҡарғайым?

— Ҡар ҙа ҡар, туңып ҡал, тип ҡарға улыңды, — тигән ҡарға.

Хан шул һүҙҙәрҙе әйтеүе булған, улы Ҡарайҙың ҡарлы боҙ булып ҡатыуы булған, ти.

— Тағы ни тип ҡарғайым? — тип һорай хан ҡарғанан.

— Ҡар ҙа ҡар, ҡар артынан һин дә бар, тип ҡарға. Ҡар артынан бар ҙа ҡойолоп илап ҡал, тип ҡуй, — тигән ҡарға.

Элеккесә хан шул һүҙҙәрҙе әйтеүе булған — Умырзая моңайып ултырған бер сәскәгә әйләнгән дә ҡуйған.

Был сәскәне умырзая тип атағандар. Ана шуға ла ул йәй көнө түгел, ә ҡар иреп бөтөр-бөтмәҫтән сыға. Ҡар артынан килә тиҙәр уны, һөйгәне Ҡарайҙы күрергә ашыға икән, тиҙәр.

## 15. АЙЫУ ТОҠОМО

Борон тылсым ғилемен белгән бер егет биленә һәр ваҡыт хәнйәр тағып йөрөгән. Кеше араһында бер төрлө эсе бошоп, йәне көйөп китһә, ваҡыты-ваҡыты менән урман ситенә бара ла, хәнйәрен өшкөрөп, ергә ҡаҙай. Шунан теге айыу була ла ҡуя. Айыу булып, урманда йөрөй. Күңеле булғас, кире килеп, хәнйәрен тағы биленә таҡһа, яңынан кеше була.

Бер кеше бының айыу булып йөрөгәнен һиҙеп ҡала. Хаслыҡ уйлап (ул яман кеше булған инде, күрәһең), егеттең айыуға әйләнеп киткәнен ҡарап ҡына тора ла, хәнйәрен алып, һыу төбөнә ташлай. Теге егет килә. Хәнйәрен алып, биленә тағайым тиһә, хәнйәре юҡ. Эҙләй-эҙләй был, таба алмай. Шунан ул айыу булып ҡала. Ошонан киткән хәҙерге айыу тоҡомо.

## 16. ҠӘКҮК

Бик борон заманда Урал тауының көньяҡ битләүендә бер башҡорт ырыуы йәшәгән. Күрше ырыуҙар йыш ҡына был илгә һөжүм итер булғандар.

Бына бер мәл дошман ғәскәре яңы яу менән килгән. Илдең Ҡәкүк исемле батыры булған. Үҙенең батыр егеттәрен туплап, ул дошман яуына ҡаршы сыҡҡан. Китер алдынан ул бәләкәйҙән яратып йөрөгән һылыу ҡыҙ Ҡарағашҡа әйткән:

— Әгәр мин яуҙа ятып ҡалһам, аҡҡан ҡанымдан ҡып-ҡыҙыл сәскәләр шытып сығыр. Ул сәскәләр һиңә мәхәббәтемде хәтерләтеп торор. Тик шуны бел: үҙем ҡайталмаһам, исемем урап ҡайтыр, — тигән ул.

Ҡыҙ Кәкүкте көтөргә вәғәҙә биргән: «Өҫтөмә таш яуһа ла, һине бүтәнгә алмаштырмам», — тигән.

Бейеп торған дөлдөлдәргә атланып, егеттәр илдән сығып киткәндәр. Бер ни тиклем ер үткәс, ҡаршы килгән дошман яуы күренгән — ғәскәренең иҫәбе-һаны юҡ икән. Тиңһеҙ алыш башланған. Әле бер яҡ еңә икән, әле икенсе яҡ. Бер саҡ яу тынған, ҡараһалар, — яланда тере йән эйәһе ҡалмаған.

Был хәбәр Кәкүк батыр иленә ишетелгән. Бөтә ырыу яуҙа ауған уландары өсөн ҡан-йәш түккән. Тик Ҡарағаш ҡына был хәбәргә ышанмаған.

«Үлгән артынан үлеп булмай инде, һиңә йәшәргә кәрәк», — тип ҡыҙҙың ата-әсәһе уны, ай-вайына ла ҡарамай көсләп, беренсе һораҡҡан байға кейәүгә биргән.

Ҡарағаш һылыу яратмаған кешеһе менән йәшәргә теләмәгән. Ул ир булаһы бәндәне бысаҡ менән сәнсеп үлтереп ҡасырға булған. Тик уны тотоп алғандар ҙа зинданға япҡандар. Ҡыҙ зарығып илаған да илаған, Кәкүген ҡушып йырлаған. «Эй, ҡош булып осоп ҡына барһам ине яндарыңа!» — тип уйлаған.

Ҡыҙҙың теләге ҡабул булған: бер саҡ күҙ алдында бәләкәсәйә барған был. Ҡулдары урынына ҡанат үҫеп сыҡҡан. Ҡошҡа әйләнеп, тимер рәшәткәле зиндан тәҙрәһенән иреккә осоп киткән. Ағастан ағасҡа, сусаҡтан сусаҡҡа осоп ҡуныпи «кәк-күк, кәк-күк» тип һөйгәнен саҡыра икән был.

Бер нисә көн шулай зарығып саҡырғандан һуң, ул күҙ яуын алырлыҡ ҡыҙыл сәскәләрҙе тап итә лә Кәкүгенең үлеменә ышана.

Шунан инде ул үрләстән үрләскә, илдән илгә күсеп йөрөп, күбеһенсә үҙе кеүек яңғыҙ өйәңкегә йә аҡ ҡайынға ҡуныпи, күҙҙәре талғансы алыҫтарға ҡарап, моңһоу зар менән һөйгәненең исемен ҡабатлай башлаған. Йомортҡа һалһа ла, уны баҫып сығарырға һис түҙеме етмәй, һәр саҡ һөйгәнен эҙләй ти, ул. Сәскә атҡан мәлдә ул һаман моңайып, һөйгәнен саҡыра, сәскәләр һулығас, теленән дә яҙа хатта. Шуларҙы эҙләп, әллә ҡайҙарға осоп китә. Шулай йөрөй ҙә йөрөй.

Ана шулай гел генә: «кәк-күк», — тип саҡырып йөрөгән ҡошто халыҡ кәкүк ҡошо, ә теге ҡыҙыл сәскәләрҙе кәкүк сәскәһе тип атап алып киткән.

## 17. КӘКҮК

*(вариант)*

Кәкүк — һыу батшаһы улының исеме. Ер өҫтөнә сығып йөрөгәндә ул бер батшаның ҡыҙын ала. Бер аҙ торғас, был егет: «Мин ата-әсәмде күрәм», — тип һыу аҫтына төшә лә кире сыҡмай. Ҡыҙ, уны һағынып, илап, зарығып, һыу буйлап йөрөгән.

Бер ваҡыт ҡыҙ сәсен тарап ултырғанда теләк теләгән: «Ул килмәгәс, мин йә донъянан юҡ булһамсы, йә ҡош булып осоп китһәмсе», — тигән. Шул ерҙә ул ҡош булып осоп киткән. Уның сәсенең бер толомо үрелгән, икенсе яғы үрелмәй ҙә ҡалған. Шуға ла кәкүктең бер яҡ ҡанаты һалпы.

Ҡыҙҙың ғүмере һыу батшаһының улы Ҡәкүкте эҙләп, моңайып үтә. Шуның өсөн дә кәкүкте моңло ҡош тип атайҙар. Ул хәҙер ҙә «кәк-күк» тип егетте эҙләй икән.

## 18. ҠАРЛУҒАСТЫҢ ҠОЙРОҒО НИҢӘ АЙЫРЫ?

Борон, туфан ҡалҡып, донъяны һыу баҫа башлағас, Нух бәйғәмбәр ҙур бер кәмә төҙөп, уның эсенә һәр бер йән эйәһенән берәр пар зат ултыртҡан. Шунда сысҡан да булған. Ҡәмәне кимерә икән, ти, был. Кимерә торғас, кәмәнең төбән тишкән. Йылан быны күргән дә, үҙенең башын аша тығып, тишекте ҡаплаған.

Нух бәйғәмбәр йыланды ашатыр өсөн бик тәмле аҙыҡ эҙерләтергә уйлаған. «Ниндәй йән эйәһенең ҡаны иң тәмлеһе икән, шуны бел», — тип, серәкәйҙе осороп ебәргән. Серәкәй осоп йөрөп, бөтә йән эйәләренең ҡанын тәмләп йөрәй икән. «Ҡеше ҡаны иң тәмлеһе», — тип уйлап, бәйғәмбәр янына осоп килә.

Нух бәйғәмбәр:

— Ни нәмәнең ҡаны тәмле? — тип һорай.

Ҡарлуғас әҙәмде йәлләп, серәкәйҙең телен өҙгән. Шуға ла серәкәй безелдәп йөрөй. Йылан шул арала ҡарлуғастың ҡойроғон өҙөп ҡалған. Шуға асалы йөрөй ҡарлуғас [1].

## 19. БЕСӘЙҘЕ НИҢӘ УЯТЫРҒА ЯРАМАЙ?

Нух бәйғәмбәрҙең бесәйе булған, ти. Шулай бер саҡ бәйғәмбәр күрпәһен (тортонон) сисеп ташлаған икән, бесәй барған да бынын сабыуына ятып йоҡлап киткән. Нух бәйғәмбәр быны уятырға йәлләп, салғыйын ҡайсы менән киҫкән дә, тортонон алып ҡуйған.

Бесәй — изге йән эйәһе. Уны борсорға, уятырға ярамай (бәйғәмбәр һынлы бәйғәмбәр уятмаған).

Бесәйҙең ҡарғышы ярамай. Уның ҡара ҡарғышынан хатта боронғо бәйғәмбәрҙәр ҡурҡҡан.

Бер өйҙән икенсе өйгә күскәндә, бесәйҙе ҡалдырмайҙар. Ашағанда иң элек этенде туйҙыр, шунан бесәйҙе, аҙаҡ үҙең ашарһың, ти торғайнылар боронғолар.

## 20. СЫҢРАУ ТОРНА

Борон Урал арты башҡорттары илендә бик көслө батыр йәшәгән. Уның етәм тигән еренә еткерә ала торған күк толпары бул-

ған. Был ҡаһармандың көсөнә тиң булыр батыр, зирәклегенә, аҡыллылығына оҡшаш кеше булмаған, ти. Иленә килгән яуҙарҙы аяуһыҙ ҡырған, үҙ халҡын, ерен-һыуын дошманға бирмәгән. Тыуған иле өсөн йәнен ҡорбан итергә лә әҙер торған, ти, ул. Шундай бәһлеүән булыуы өҫтөнә ул шәп ҡурайсы ла, йырсы ла булған, ти. Ирәндеккә менеп ҡурай уйнаһа, тауышы тау буйлап ултырған ауылдарға гөрләп ишетелеп торған.

Был батыр өйләнеп оҙаҡ ғүмер иткәс, ҡатыны ҡурғаш кеүек ауыр кәүҙәле ул таба. Бала ай үҫәһен көн үҫә, йыл үҫәһен ай үҫә. «Атаһынан да батыр булыр был», — тип һоҡланыр булғандар быға.

Егет ҡорона еткәндә ул, ысынлап та, атаһына ҡарағанда ла көслөрәк, мәргәнерәк була. Атанан күргән уҡ юна, тигәндәй, шәп ҡурайсы булып та даны тарала.

Һау сағымда башлы-күҙле итеп ҡалайым, тип атаһы уға кәләш тә әйттерә. Күк толпарҙан тыуған күк дүнәнде бирә. Яҙҙың матур бер көнөндә йәш батыр ҡайны йортона китә. Ыҙмаға етер алдынан толпарын туғайға ебәрә был. Таң менән атын алырға тип барһа, ғәжәп моңло тауыш ишетеп, аптырап ҡала. Түҙмәй, йүгерә-атлай тауыш килгән яҡҡа китә. Яҡынлашып, күренмәй генә күҙәтә башлай. Ни күрһен, бер төркөм ваҡ ҡына күк торналар аҡлан уртаһында түңәрәкләнеп теҙелгән дә уйнайҙар. Урталарында яңғыҙ торна баҫып тора. Ул, ҡанаттарын ҡағып, моңло тауыш сығарып ҡысҡырыу менән, ҡалғандары, уға ҡушылып ҡысҡырып, ҡанат ҡағып, түңәрәк буйлап әйләнәләр. Егет торналарҙың сыңлап сыҡҡан моңло тауыштарын йотлоғоп тыңлай, йөрәгенә һеңгәнсе, отоп алғансы тыңлай. Шунан, онотолоп ҡуймаһын тип, ҡабатлай-ҡабатлай, тиҙ генә күк толпарын менә, уҡтай атылып, ҡайны йортона ҡайта. Аттан һикереп төшәү менән, ҡурайын алып, инде көй булып етешкән торна сыңрауын уйнап та ебәрә.

Халыҡ йыйыла. Олоһо ла, йәше лә, бала-саға ла ҡалмай. Бер аҡ һаҡаллы ҡарт:

— Былдай ғәжәп моңло көйҙө ҡайҙан өйрәндең, әллә үҙең сығарҙыңмы? — тип һорай.

— Юҡ, олатай, — ти егет, ишеткәнен-күргәндәрен һөйләп бирә. Халыҡ үҙ-ара геүләшеп китә, күңелдәренә шик-шөбһә төшөп, йорт-илгә бәлә-ҡаза килмәһә ярар ине, тип борсола башлайҙар.

— Был бит сыңрау торналар тауышы. Улар уйнаған ерҙә яу булыр, халыҡ ҡырылыр, тигән ата-олатайҙар, — ти аҡ һаҡаллы ҡарт.

Был һүҙҙәрҙе ишеткәс, батыр ашығыс рәүештә атаһы янына ҡайтып китә. Атаһына ҡайны йортонда күргән хәлдәрҙе түкмәй-сәсмәй һөйләп бирә.

— Дөрөҫ, улым, сыңрау торна уйнаған ерҙә яу булыр, илгә бөлгөнлөк килер, тигән боронғолар. Былдай яуҙарҙы атайың да күп күрҙе, — ти ҡарт батыр. — Хәҙер мин ҡартайҙым, көсөм дә ҡайтты, ҡоралдарымды һиңә тапшырам. Батыр бул, тоҡомға тап төшөрмә, илгә килгән дошманды аяуһыҙ ҡыр, илеңә, ырыуыңа

тоғро бул, шунда ғына бәхетле булырһың. Васыят был. Хәҙер ук иң ышаныслы кешеләрҙән ғәскәр тупла...

Йәш батыр, тирә-яҡҡа оран һалып, ғәскәр туплаған, яуға әҙерләнгән, ти. Ысынлап та, күп тә үтмәй, илде яу баҫа. Батыр егет уҡсылары менән уға ҡаршы сыҡҡан, дошмандарҙы, күҙ күреме ерҙән уҡ менән атып, аяуһыҙ ҡырған.

Яуҙы баҫтырғас, бер нисә көн буйы байрам булған. Егетте ил батыры итеп данлағандар. Шунан бирле сыңрау торналарҙың моңо, ҡурайға һалынып, «Сыңрау торна» исеме менән йөрөтөлә [1]. Ә яғаһында һуғыш барған күл Яугүл [2] булып ҡалған. Ул Баймаҡ районында, Сибайҙан 10—15 саҡрымда көньяҡта ята.

## 21. БАЛАҠАРҒА

Элек, барымта-ҡарымта замандарында, башҡорт араһында бер атаҡлы батыр йәшәгән. Ул үҙе ҡурайсы, йырсы, сәсән булған. Егет ҡорона кергәс, был үҙе һымаҡ данлы бер батырҙың ҡыҙына өйләнә. Татыу ғына донъя көтә башлайҙар былар.

Бер заман шулай тыныс ҡына йәшәп ятҡанда, ҡаҙаҡтар яу менән киләләр. Былар нисек кенә булһа ла башҡорт батырын ҡулға төшөрөп, ҡаҙаҡ батыры яһарға уйлайҙар икән. Тик был ниәттәре барып сыҡмай. Әлеге батыр егетте күреү менән, һырт биреп ҡасалар.

Көндәрҙең береһендә ҡаҙаҡтар башҡорт батырының тоҡомон ҡалдырыу ниәтенән тегенең йөклө ҡатынын урлап алып китәләр. Ырыу башлығы уны өсөнсө ҡатынлыҡҡа алып, үҙен бер айырым тирмәлә тота башлаған.

Башҡорт батыры һунарҙан ҡайтыуына — бисәкәй юҡ. Тиҙ генә баҡыр һөңгөһөн ала ла юлға сыға. Ҡаҙаҡ батыры йәшәгән йәйләүгә барып етә был. Һаҡлыҡ менән генә тирмә һайын тыңлап йөрөй торғас, бер аҡ тирмә эсендә әкрен генә илаған тауыш ишетә. Бәй, был минең ҡатыным даһа, йәһәтерәк тауыш бирәйем»,— тип шыбырлап ҡына өндәшә быға. Ҡатыны: «Ни күрһәм дә, ирем менән күрәйем», — ти ҙә, ғыр-ғыр йоҡлап ятҡан ҡаҙаҡ ҡуйынынан шым ғына ысҡынып, тирмә алдына сыға.

Шул уҡ төндө улар байтаҡ ҡына ер үтә. Икенсе төндө лә арыу ғына ер артта ҡала. Тик өсөнсө төнөндә ҡатын ауырып китеп, хәлдән тая. Былар бер ҡыуаҡлыҡҡа килеп етеп йәшеренәләр. Бер аҙҙан сабый ир бала донъяға килә. Арттарынан ҡыуып килгән һыбайлы ҡаҙаҡтар быларҙы күрмәй үтеп китәләр.

Бала тауышлана, илай. Әсәнең хәле ауырлаша. Баланы күтәреп барған килеш ҡасыу хәүефле. Ошо саҡ ир менән ҡатын ҡыуаҡлыҡта бер ҡарға ояһы күреп ҡалалар ҙа баланы шул ояға һалып ҡалдыралар. Үҙҙәре төн буйы китәләр, көн булһа, ҡыуаҡлыҡшырлыҡта боҫоп яталар икән, ти. Былар көс-хәл менән шулай килеп, Яйыҡ йылғаһын аша сығып өлгөрәләр. Ҡаҙаҡ ҡыуғынсылары йылғаға етеп бер аҙ ҡарап торалар ҙа кире әйләнеп ҡайтып

китәләр. Был ваҡытта Яйыҡ йылғаһы ике халыҡтың ер сиген айырып торған була.

Ир менән ҡатын ҙур мәшәҡәт күреп тыуған ауылдарына ҡайтып етә. Бер аҙ ваҡыт үтеп, йорт-ил тирәһе тыныслана башлағас та, балабыҙҙың һөйәк-һаяҡтарын булһа ла ерләп киләйек, тип сабыйҙарын ҡалдырған урынға килһәләр, ни күҙҙәре менән күрһендәр — балалары ағас ботағына тотоноп, баш осонда осоп йөрөгән ҡарғаларға ҡарап, талпынып ултыра, ти.

Ҡарғалар баланы ата-әсәһенә бирмәй маташҡандар. Нисек етте шулай сабыйҙы ҡулға алып, юлға сыҡҡас та, ҡарғалар уны ҡурсып, ҡарҡылдашып, хәтһеҙ ер оҙатып киләләр. Бала ла үрҙә осоп килгән ҡарғаларға ҡарап, ҡысҡыра-ҡысҡыра илап барған, ти.

Балаларының тере булыуына ғәжәпләнеп, ата-әсә берсә ҡыуанышҡан, берсә илашҡан. Ошо саҡ балаға «Балаҡарға» тип исем дә ҡушалар. Ауыр кисереш быларҙың күңеленә моң һалып, көй булып ағыла. Балаларын берсә әсә ҡулында, берсә ата ҡулында күтәреп, һамаҡлай-һамаҡлай ауылдарына ҡайтып инһәләр, бөтә халыҡ ғәжәпкә ҡала. «Балағыҙҙың исеме кем?» тигән һорауға «Балаҡарға» тип яуап бирәләр ҙә булып үткән хәлдәрҙе түкмәй-сәсмәй көй менән әйтеп бирәләр:

Балабыҙҙы ҡалдырабыҙ,
Ҡарғалар, һеҙ ҡарағыҙ, ҡарағыҙ!
Дошман беҙҙе ҡыуып килә,
Илгә ҡасып барабыҙ, барабыҙ.
 Эй... Тәрирә-тирә-тирәрәм дә,
 Тәрирә-тирә-тирәрәм, тирәрәм!

Эй, ҡарғалар, мең рәхмәт,
Үлмәгән бит балабыҙ, балабыҙ.
Бирегеҙсе балабыҙҙы.
Ҡулыбыҙға алабыҙ, алабыҙ!
 Эй... Тәрирә-тирә-тирәрәм дә,
 Тәрирә-тирә-тирәрәм, тирәрәм!

Балаҡайым, ғәзизкәйем,
Булғанһың бит, «Балаҡарға», «Балаҡарға»,
Атаң-әсәң ҡулындаһың,
Әйләнеп беҙгә ҡара, беҙгә ҡара.
 Эй... Тәрирә-тирә-тирәрәм дә,
 Тәрирә-тирә-тирәрәм, тирәрәм!

Ҡулдәй күҙ йәштәрен түктем,
Күҙ керпегем ҡаҡманым, ҡаҡманым,
Өмөтләнеп һине көттөм,
Күкрәк һөтөм һаҡланым, һаҡланым.
 Эй... Тәрирә-тирә-тирәрәм дә,
 Тәрирә-тирә-тирәрәм, тирәрәм! [1]

## 22. ШАЙТАН СЕБЕНДӘРЕ

Бер саҡ иблестең бөтә ярандары тамуҡ төпкөләнә йыйылғандар ҙа, хужабыҙ ни ҡушыр икән тип, өнһөҙ-тынһыҙ ҡалып, дер ҡалтырап торалар, ти. Ә иблес үҙе, ҡара уйҙарын уйлап, оҙон тырнаҡтарын сәйнәп, йылан һымаҡ ҡойроғо менән танауын ыҫ-ҡоромдан таҙартып ултыра икән. Гонаһлы бәндәләр тамуҡта янған мәлдә гел генә ыҫ-төтөн борҡолоп торғанлыҡтан, быларҙың танау тишектәренә ыҫ-ҡором ултыра икән. Иблес үҙе лә, шайтандары ла быға күнегеп бәткән, ти. Уларға был тамуҡ еҫе хатта төрлө хуш еҫтәрҙән дә татлыраҡ икән.

Тамуҡ төпкөләндәге был тынлыҡ әгәр ҙә мәгәр кешеләр йәшәгән ерҙә булһа, себен осҡан тауыш та ишетелмәй, тиергә булыр ине. Ә себендәр тамуҡҡа инә алмай, башҡа төрлө бөжәк кенә көн итә ала тамуҡта. Улары ла тамуҡтағы гүр һиллеген боҙорға ҡыймайынса ҡурҡышып, өнһөҙ-тынһыҙ ғына ултыралар икән.

Шул саҡ тышта осоп йөрөгән бер себен тамуҡ көмбәҙендәге ярыҡты күреп ҡала ла, бының аҫтында ниҙәр бар икән, тип шул ярыҡтың эсенә кереп китә. Тамуҡтың эсе бик эҫе булғанлыҡтан түҙалмай безелдәп әйләнә лә был туп-тура иблестең танау осона килеп ҡуна. Иблес шунда ырғып тора ла — шап был мәхлүккә! Шунан, ни, үлгән себенде әйләндереп-әйләндереп ҡарарға тотона.

Бөтә шайтандар ҙа шунда иркен һулап ҡуялар. Ә иблес үҙенең был бисара ҡорбанын оҙаҡ ҡына тикшереп ултыра тәрғас, ҡыҙығып киткән:

— Бик ҡотһоҙ нәмә икән дәһә был. Үҙе әрһеҙ ҙә булһа кәрәк. Миңә тап бына ошондай йән эйәһе кәрәк ине, хәҙер үҙем тыуҙырам мин уны: килтерегеҙ кәрәк-яраҡты.

Бөтә нәмә һә тигәнсе әҙер була: ҡоромо ла, көлө лә, күмере лә — бөтәһен дә уның алдына килтереп өйөп ҡуялар. Иблес шунда уҡ эшкә керешә. Шул тиклем килештереп эшләй был, хатта үҙ маһирлығына үҙе хайран ҡалып тора. Себендәрҙең йәне генә юҡ, ти. Шунан был үҙенең күректәй боғаҙағы менән бер өрөп ебәрһә, ни күҙе менән күрһен — әлеге үҙе яһаған себендәр үҙен һырып алып тешләргә тотоналар. Иблес, түҙә алмайынса, асыу менән үкереп ебәрә:

— Китегеҙ! Юғалығыҙ!

Тамуҡта ығы-зығы ҡуба: шайтандар ҙа, шайтан балалары ла ҡый-сый килешеп, ошо яңы яратылған себендәрҙе тамуҡтан ҡыуып сығарырға тотоналар.

Бына шунан бирле себендәр бөтә донъяға таралып, үрсегән һайын үрсеп, ер йөҙөн ҡаплап алғандар.

## 23. ЭЙӘЛЕ ҠҮЛ

Мәҡсүт[1] ауылынан өс саҡрым самаһы көнбайыш яҡлап элек бер күл булған, тиҙәр. Был күл эйәле булған икән, ти. Һәр көн иртәнсәк ҡояш сығыр алдынан күлдең эйәһе ҡыҙ сифатына кереп

йыуыныр булған. Күпме генә аңдыһалар ҙа, йота алмағандар. Шунан бер заман бер егет: «Беҙ уға һыңар итек һалайыҡ та аңдып ҡарайыҡ», — тигән.

Итек ырғыталар. Ғәҙәттәгесә, һыу эйәһе йыуынырға сыҡһа, итекте күреп ҡала. Тиҙ генә эләктереп ала ла аяғына кейергә тотона. Эй маташа, эй маташа, ти, был. Бер аяғын ҡуңысына тыҡһа, икенсе аяғына юҡ икән: икенсеһенә тыҡһа, беренсеһенә юҡ икән. Шулай күп маташа торғас, ике аяғын да бер ҡуңысҡа тығып, атлап китәйем тип тороп баҫһа, йығыла ла китә, йығыла ла китә, ти. Шул саҡ күмәкләп барып тотоп алалар быны. Тотоп алһалар ҙа, теге яман итеп сырылдай башлағас, ебәрмәй сара ҡалмай.

Ошо хәлдән һуң күлдең эйәһе ҡасҡан, күле ҡороған, тиҙәр.

## 24. ЙӨГӘМӘШ ТАУЫ

Борон заманда Йөгәмәш тауы бейек булған. Бер кем дә уның башына менеп етә алмаған.

Ә тау башындағы күлдә инә өйрәк менән ата өйрәк — күгәл ҡиәфәтендә тауҙың эйәләре йәшәгән. Иртә менән осоп китеп, кисен генә ҡайтып төшәләр ҙә төнө буйы тымыҡ күл өҫтөндә йөҙөп йөрөй икән былар. Мәргән һунарсылар уларҙы осоп барған саҡта атып ҡараһалар ҙа, береһе-бер уғын тейҙерә алмаған, ти.

Көндәрҙән бер көндө Ризуан исемле бик сая егет, үҙенең батырлығын күрһәтергә теләп, таңдан тороп тауға китә. Тик тауға күтәрелеүе үтә ҡыйын була: аяҡ аҫтында үлән сырмалып ята, үтеп сыҡҡыһыҙ ҡыуаҡ юлды ҡаплап тора, өҫтәүенә, күҙ асҡыһыҙ ҡаршы ел иҫә икән.

Шулай ҙа егет егетлеген итә: кискә табан ғына тау түбәһенә менеп етә. Ҡараһа — тау башында иҫ киткес зәп-зәңгәр күл йәйрәп ята. Хайран ҡала был. Шул арала аталы-инәле ике өйрәк ҡайтып төшә. Былар ҡыуаҡ араһында боҫоп торған кешене шәйләмәйҙәр. Егет шунда уғын инә өйрәккә атып ебәрә. Ә күгәле күккә осоп китә лә баш осонда биләндәп йөрөй башлай. Был шулай оҙаҡ өйөрөлә торғас, зарығыуҙан, асырғанып, ҡая ташҡа ташлана. Егет, атып алған табышын артмаҡлап, ҡайтырға сыға.

Ҡапыл шунда ҡара ҡойон ҡубып китә. Тау һелкенә башлай. Егеттең йөрәге жыу итеп ҡала. Артына әйләнеп ҡараһа, күл юҡҡа сыҡҡан. Нисек етте шулай өйрәкте өйөнә алып ҡайтып еткерә был. Йолҡоп ҡаҙанға һалһалар, өйрәк бешмәй ҙә ҡуя икән. Өс көн, өс төн буйы ҡайнаталар, ти, һаман бешмәй, ти, таш булып ҡата ла ҡуя, ти. Ахырҙа был ташты яланға сығарып ырғыталар.

Шулай итеп, тау эйәһеҙ тороп ҡала. Шунан бирле Йөгәмәш тауы сүккәндән сүгә барып, ер аҫтына бүҫелеп төшә,

## 25. АҠҠОШАТҠАН ТАУ

Элегерәк Ҡаҙырша ауылында Йыһангир исемле бер һунарсы егет булған. Берҙән-бер көндө, һунарға барған ваҡытында, ул Туҡмаҡ шишмәһе буйында ултырған пар аҡҡошто күрә. Ҡарап тора ла, матурлыҡтарына ҡыҙығып китеп, аҡҡоштоң береһенә атып ебәрә. Аҡҡошто атып ебәрә... Йүгереп барып, уны ҡулына алыу менән үҙе телһеҙ ҙә ҡала.

Шунан уның ғаиләһенә бәхетһеҙлек килә башлай. Ҡапыл ғына ауырып китеп, ҡатыны үлә. Күп тә үтмәй балалары гүр эйәһе була. Үҙенең да торор торлағы булмай, өйөн ташлап, кеше араһында бер аҙ йөрөй ҙә үлә.

Йыһангир аҡҡош атҡан бер тауҙы (ул Ҡаҙырша ауылы эргәһендә) әле лә Аҡҡошатҡан тау [1] тип йөрөтәләр.

## 26. ШҮРӘЛЕ ҠЫУАҒЫ

Элегерәк Әбнәфиҡ тигән ҡарттың йылҡы көтөүендәге өйөр айғыры һәр көн арып ҡайта икән. Ни эшләргә? Шунан Әбнәфиҡ ҡарт айғырҙың арҡаһына ыҫмала буяп ебәрә. Берҙән-бер көндө ни күҙҙәре менән күрһендәр: айғыр арҡаһына бер килбәтһеҙ нәмә йәбешеп ҡайтҡан, ти. Үҙе шарҡылдап көлә, ти, үҙе һамаҡлай, ти:

Көн дә, көн дә ат сабыш,
Бөгөн минең арт йәбеш, әһа-һай, иһа-һай!

Был шүрәле икән. Тегене тиҙ генә тотоп алып ябып ҡуйғандар. «Сығарығыҙ, зинһар! Зат затығыҙға теймәм!» — тип инәлә икән был.

Шунан шүрәлене сығарып ебәргәндәр. Шүрәле: «И мәтәләм и-һа-һа», — тип ҡысҡыра-ҡысҡыра Сербейен [1] күленә ҡасып юғалған, ти. Улар күберәк һыуҙа йәшәй икән. Күлдә ҡамыш аҫтында йорттары булған.

## 27. ЯРЫМТЫҠ

Ярымтыҡ атта йөрөргә ярата. Өйөрҙән иң яҡшы атты тотоп ала ла туйғансы атланып йөрөй.

Бер саҡ шулай берәүҙең атына эйәләшкән, ти, был. Һәр көн иртән теге ат ҡара тиргә батып ҡайта икән. Ни хәл итмәк кәрәк? Тота ла был атының арҡаһына ыҫмала буяп ебәрә [1]. Иртән тороп тышҡа сыҡһа, ни күҙе менән күрһен, атының арҡаһына йөнтәҫ бер ярымтыҡ йәбешеп ҡайтҡан, ти.

Шунан, ни, атының һыртынан һыҙырып төшөрә лә ярымтыҡты яра башлай. Теге телгә килеп әйтә:

— Ағаҡайым, үлтермә мине, берҙексәгә ҡалдыр инде! Башҡаса мин һинең атыңа-затыңа бармағым менән дә ҡағылмам! — ти.

— Ярай, — ти был әҙәм, — берҙексәгә ҡалдырам. Тик һин беҙҙең ауылды алда ни көтә, шуны әйтеп бир.

Ярымтыҡ шунда ауылдың киләсәген әйтеп биргән.

— Хәҙергеһе көндә ауылында ике өй, ике өйөндә дүрт итеп тә булыр. Ә инде алты өй булһын тиһәң, етенсеһен бурап та торма. Барыбер ҡотая алмаҫһың, — тигән.

Ана шул дөрөҫ булып сыҡҡан. Беҙгә саҡлы ла, беҙ белгәндән бирле лә ауылыбыҙҙың алты өйҙән артҡаны юҡ. Етенсе өйҙө һалып сыҡһалар ҙа, һис тә ҡотай алмағандар: йә өйө янып киткән, йә хужаһы үлеп киткән. Шуға күрә лә ауылыбыҙҙың алты өйҙән артҡанын күргән юҡ әле.

## 28. ТАУ СЕРЕ

Ҡыуандыҡ районының Подгорный ауылынан алыҫ түгел Яман соҡор тип йөрөтөлгән бер урын бар. Шул урында элек-электән тирә-яғы йырғаланып бөткән яңғыҙ бер ҡурған ҡалҡып тора. Уны ҡасан, кем өйгәндер, уныһын бер кем дә белмәй. Тик ҡарттар уны кеше ҡулы менән өйөлгән тип һөйләйҙәр.

Боронораҡ ул хәҙергегә ҡарағанда ҡалҡыуыраҡ та, текәрәк тә булған. Йырғысланып бөткән бите лә элек шыма ғына булған, тиҙәр. Ул ҡурғандың осло түбәһенә йылдың һәр миҙгелендә йә болот, йә томан һарылып ята. Уның түбәһе һирәк көндәрҙә генә асыла. Шундай көндәрҙә түбәһендә үҫкән бер өйкөм генә ҡыуағы таҡыр баштағы сәс өлтөгө һымаҡ булып күренгән. Һуңынан бер көслө дауыл сығып, ул ҡыуаҡты төбө-тамыры менән аҡтарып, йырынға алып ташлаған. Шунлыҡтан ҡурғандың түбәһе ус аяһындай яланғас булып ята.

Ейәнсура яғынан килгән Исмәғилев Хәбибулла тигән урман киҫеүсе бер ҡарт, был ҡурғанды барымтасылар өйгән, тип һөйгәйне миңә.

Бынан күп йылдар элек Яйыҡ ҡаласығында йәшәүсе казактар янына алтын менән кәсеп итеүсе кешеләр күсеп ултыра. Улар Урал тауҙарына барып алтын йыуалар ҙа ылау менән Яйыҡҡа ташыйҙар икән. Бына шул ылауҙарға йыш ҡына дала юлбаҫарҙары баҫышып, таланған алтынды ошо ҡурған өйөлгән урынға килтереп күмер булғандар.

Был хазина тауы үҫкән һайын үҫә барған. Ахырҙа түбәһе болоттарға олғашҡан бер тауға әйләнгән. Иҫәпһеҙ-хисапһыҙ хазина йыйылған бында.

Аҙаҡ, Ырымбур далаларына урыҫтар күсеп ултыра башлағас, был кәсепкә лә сик ҡуйылған. Барымтасыларҙың ҡайһыларын тотоп ҡырып бөтөргәндәр, ә ҡайһылары далаға ҡасып киткән, тиҙәр.

Ҡыуандыҡ яҡтарына яңы күсеп ултырған халыҡ был ҡурған аҫтында ниндәй хазина ятҡанын белмәй. Уға иғтибар итеүсе лә булмай. Тирә-яҡҡа ҡасып киткән барымтасылар был ҡурған се-

рен бер кемгә лә һөйләмәҫкә ант итешеп, берәй ваҡыт алтынды икенсе урынға күсереп ҡуйырға өмөтләнеп йөрөгән булалар.

Шулай итеп, байтаҡ ваҡыт үтә. Барымтасылар ҙа үлеп бөтә. Ә ҡурған, йәшерелгән хазинаны һаҡлап, һаман дала уртаһында өнһөҙ-тынһыҙ тора бирә. Бер көн килеп был ҡурғандың да сере асыла.

Бер саҡ шулай көҙ көнөндә ауылға ниндәйҙер бер мосафир килеп сыға. Был мосафир бер өйгә инеп, ҡунып сығырға һорай. Киске сәйҙе эсеп ултырғанда, ул нилектән быңдай бейек ҡурған булыуын төпсөнә башлай.

— Уның әллә берәй сере бармы, әллә берәй ҡарауыл тауы ғынамы ул? — тип һорай был. Хужалар, быны тел төбө ҡайҙа тартҡанын да шәйләмәйенсә:

— Уның нилектән икәнен кем белгән дә кем күргән инде? — тиҙәр. — Тора шунда борон-борондан. Ҡарауыл тауы ла түгел ул, — тип ҡуялар.

Төнөн был мосафир ҡарттың хәле ауырайып китә. Әжәле еткәнен һиҙенеп, өй хужаһын саҡырып ала ла үҙенең был яҡтарға ниндәй ниәт менән килгәнен һөйләп бирә.

— Мин ил ҡыҙырып йөрөгән берәҙәк бер дәрүиш кенә түгел. Бик алыҫтан, Әлхәссә[1] тигән шәһәрҙән килгән бер суфый дәрүиш булам мин. Бәләкәйҙән үк мине суфыйлыҡҡа бирҙеләр. Үҫеп еткәс, мине төрлө ғилемгә өйрәтеп, китаптар күсереп яҙырға ҡуштылар. Үҙ ғүмеремдә миңә бик күп китап күсерергә, бик күп китап уҡырға тура килде. Төндәр буйы мин боронғо аҡыл эйәләре яҙған китаптарҙы аҡтарҙым. Бер саҡ шулай минең ҡулға һарғайып бөткән иҫке бер яҙыу килеп эләкте. Ул яҙыуҙан мин һеҙҙең Ҡыуандыҡ тарафтарында йөрөгән барымтасылар хаҡында уҡып белдем. Улар урыҫ сауҙагәрҙәренән бик күп алтын талап алып, һеҙҙең Яман соҡор эргәһендәге ошо ҡурған аҫтына күмгәндәр икән...

Мине был суфый тормошо бер ҡасан да мөрхәтһендермәне. Унан мин үҙем өсөн бер ниндәй ҙә йән аҙығы тапманым. Һәр саҡ мин ғибәҙәтхананан ҡасып китергә уҡталдым. Тик минең, мәсет ҡомағындай, ил өҫтөндә ас-яланғас бер дәрүиш булып та йөрөйһөм килмәне. Көндәрҙән бер көн әлеге серле яҙыу ҡулыма килеп эләккәс, уйланым-уйланым да, минең өсөн күк ҡабаҡтары асылыу ошолор инде тип, бәхетемде ошо Яман соҡор ҡурғанынан килеп тапмаҡсы булдым.

Тәүәккәлләнем дә бына ошо сәфәргә сыҡтым. Был серҙе минән башҡа бер кем дә белмәһен тип, теге яҙыуҙы яндырып киттем. Әммә мораҙыма етәм тигәндә генә, бына, әжәлем тотоп алды. Күрәһең, бәхетемде табыр көн миңә насип булмағандыр. Хәҙер миндә алтын ҡайғыһы юҡ. Ул алтынды һин ҡаҙып ал, — тип һүҙен бөтөргән был мосафир.

Уны өнһөҙ-тынһыҙ тыңлап ултырған өй хужаһы:

— Бәлки, һин һаташаһыңдыр, изге ҡарт? — тигән. — Күҙгә терәлеп торған был тауҙа ни нәмә барын ғүмер баҡый беҙ белмә-

гәнде, бынан меңәр саҡрым ерҙә ятҡан ул Әлхәссәлә ҡайҙан белһендәр? — тигән. Дәрүиш ҡарт былай тип әйткән:

— Һинең һүҙҙәреңдә дөрөҫлөк тә юҡ түгел, — тигән. — Ул ҡурғандың серен бары тик барымтасылар ғына белгән бит. Ә улар хазинаны, аҙаҡ үҙҙәре генә килеп алырға тип, бер кемгә лә әйтмәҫ булғандар. Ҡайһы ҡайҙа һәләк булып, уларҙың тик береһе генә ҡотолоп ҡалған. Эҫе сүллектә сарсап, астан үлеп барғанда, ул: «Әгәр иҫән ҡалһам, бөтә ғүмеремде аллаға ғибәҙәт ҡылып ҡына үткәрер инем», — тип нәҙер әйткән. Үлемдән ҡотолоп, сүллектән сыҡҡас та, ул шулай Әлхәссә шәһәренә килеп, әйткән нәҙерендә торған. Бер ғибәҙәтханала китап күсереүсе булып киткән. Үлеренән алда ғына үҙенең тыуған илен хәтерләп, Һаҡмар, Яйыҡ буйҙарын һағынып, Яман соҡор ҡурғанындағы әлеге хазина хаҡында ла тәфсирләп яҙып ҡалдырған. Уның был ҡульяҙмаһы бына шулай минең ҡулға килеп эләкте. Әле һөйләгәнемсә, мин уны яндырып, үҙем һеҙҙең тарафҡа килеп сыҡтым. Бына хәҙер мин һинең өйөңдә инде, — тип аңлатып биргән. Шул төндә үк дәрүиш үҙе донъя ҡуйған.

Шунан һуң өй хужаһы ике улы менән ҡурғанды ҡаҙып ҡарарға була. Өс көн, өс төн буйы улар шулай, ҡара тир түгеп, ҡурған түбәһен аҡтаралар. Өсөнсө төнөндә ҡарҙау осо бер тимер һандыҡҡа барып тейә. Аталарының һандыҡ тотҡаһына тотоноуы була, шунда уҡ быларҙың баш осонда борғанаҡ болото пәйҙә булып, тауыҡ йомортҡаһы саҡлы боҙ яуа башлай. Боҙ хазина эйәләүселәрҙең ҡаҡ баштарын яра, арҡаларын, яурындарын күгәртеп бөтөрә. Былар, ауыртыуға сыҙай алмайынса, тау түбәһенән тәкмәсләп барып төшәләр. Төшкәс, баш ҡалҡытып ҡараһалар, борғанаҡ болотоноң эҙе лә юҡ, күктә бары йондоҙҙар ғына баҙырап тора икән.

Күгәргән ерҙәрен ыуғылап алалар ҙа былар тағы ҡурған түбәһенә менеп китәләр. Ҡарҙауҙарын ҡулға алыуҙары була, баш остарына ҡайҙандыр дала бөркөттәре ябырылып, быларҙы суҡырға, ҡанаттары менән туҡмаҡларға керешәләр. Күҙҙәре аҡ-ҡара күрмәй, ҡый-сыу килешеп, былар тағы тәкмәсләп барып төшәләр. Баш ҡалҡытып ҡараһалар, күк йөҙө әүәлгесә, ти. Дала бөркөттәренең шәүләһе лә юҡ, ти. Шунда ҡарттың уландары әйткән:

— Ҡуй, атай, кеше байлығына ҡул һалып йөрөмәйек. Был борғанаҡ менән бөркөттәр ҡарар еребеҙҙе лә ҡалдырманы. Ауыл халҡы әллә ни уйлар. Бәләһенән баш артыҡ, ҡайтайыҡ, — тип аталарын ҡайтырға әйҙәгәндәр.

Аталарына инде яртылаш ҡаҙылған хазина һандығын ҡалдырып ҡайтыу бик йәл була.

— Әйҙәгеҙ, балаҡайҙарым, ни күрһәк, шуны күрербеҙ. Бәхетебеҙҙе өсөнсө ҡат һынап ҡарайыҡ әле, — ти ҡарт уландарына. — Әгәр инде был юлы ла эш барып сыҡмаһа, хазинаһына ҡәһәр төшһөн! — сихырлы хазина булыр. Ундай хазина буш ҡул менән генә бирелмәҫ, — тигән. Уландары тағы елкәләрен тырнап, ҡабырғаларын һыйпаштырып алалар ҙа аталары артынан өсөнсө ҡат ҡурған түбәһенә менеп китәләр.

Аталары һандыҡ тотҡаһын эләктереп үҙенә тартыуы була, ср убылып китеп, һандыҡ әллә ниндәй төпһөҙ беҙ ҡойоға доңғорлап барып төшә. Ярай әле ҡарт һандығы-ние менән үҙе төшмәй, ситкә тайпылып өлгөрә.

Һандыҡ күренмәйме икән, тип ауыҙы өңөрәйеп ятҡан ҡойоға ҡараһалар, күҙҙәренә ҡан һауған үгеҙ һымаҡ, күҙҙәрен ағырайтып, ҡып-ҡыҙыл кикерекле бер имәнес ҙур йылан ажғырып тора, ти. Хазинасылар, шыр ебәреп, ҡайҙа баҫҡандарын да белмәй, тау аҫтына тағы тәкмәсләп барып төшәләр.

Аҙаҡ, иҫтәренә килеп, баш ҡалҡытып ҡараһалар, мәмерйә ауыҙынан ярты кәүҙәһен сығарған йылан, ҡанат һымаҡ тәпәйҙәрен лапырайта баҫып, күректәй ауыҙы менән тупраҡты умырып алып, теге бүҫелеп төшкән ерҙе тигеҙләп маташа икән.

Былар шулай ҡоттары осоп ҡайтып китәләр. Өс аҙна буйы телдән ҡалып яталар. Һуңынан үҙҙәренең нәҫел-нәсәбенә, ейәнейәнсәрҙәренә, бүлә-бүләсәрҙәренә, был тау һуҡмағына аяҡ та баҫаһы булмағыҙ, тип васыят әйтеп ҡалдыралар...

Был хәлдән һуң байтаҡ заман үткәс, ҡурған хазинаһын ҡаҙып, бәхеттәрен һынап ҡараусылар тағы табыла. Шундайҙарҙың береһе, туйҙа иҫереп алғас:

— Улдарым үҫеп етһә, ҡурғандағы ул алтын барыбер минең ҡулда буласаҡ, мин уның тылсымын беләм, — тип маҡтана.

Был Шомбай ҡартайып, уландары ла үҫеп еткәс, күрше-күләндәре унан:

— Һин, ҡорҙаш, теге Яман соҡор ҡурғанындағы хазина тылсымын онотманыңмы әле? — тип һорайҙар икән.

— Юҡ, мин ул тылсымды гүргә ингәнсе онотмаясаҡмын, — ти икән ҡарт.

— Ә һин, ҡорҙаш, улдарың үҫеп еткәс, ул хазинаны табырға һүҙ биргәнеңде оноттоңмо әллә? — тигәс, был:

— Әлләсе, уныһын бер ҙә иҫләмәйем бит әле, — ти икән.

Шунан һуң ҡорҙаштары йәш ваҡытта бының, бәхәсләшеп, ҡустыһының туйында биргән һүҙен иҫенә төшөрәләр.

Ҡарт, оятынан ни эшләргә лә белмәй, хазинаны, ысынлап та, эҙләп ҡарарға була. Көндәрҙән бер көндө, улдарын эйәртеп, был да теге ҡурғанға килә. Сәкмәндәрен сисеп ташлап, көрәктәре менән ерҙе ҡаҙый ҙа башлайҙар. Береһе бер һелтәнеү менән көрәгенең һабын һындыра, икенсеһенең көрәге уртаға ярылып сыға, өсөнсөһөнөң көрәге лә, һабы ла һына. Бер йөк көрәк-һап һындырһалар ҙа, эштәре һис кенә лә ырамай икән. Былар шулай арып арманһыҙ булып, хайран-вайран ҡалып, кеше күҙенә күренмәйек инде, тип, ҡараңғы төшкәс кенә ауыл артынан ҡайтып инәләр.

Бынан һуң да ҡурғанды күптәр ҡаҙып ҡарай. Бер бай киржак казагы тотош әртиле менән килеп, йәй буйы ҡаҙытһа ла, бер эш тә ҡыра алмай. Тау түбәһен көнө буйы ҡаҙыһалар ҙа, иртән тороуға ҡаҙыған соҡорҙары тап-таҡыр булып ята икән. Бай казак тау башына ҡарауыл ҡуйҙырып та, сихырсылар килтереп тә ҡарай. Бер ниндәй ҙә файҙаһы булмай. Әртиле, тырышып-тырма-

шып, хәлдән тайып бөтә. Ахырҙа ғәрлектәренән лас иттереп бер төкөрәләр ҙә һемәйеп ҡайтып китәләр.

Хазина табыр өсөн, бик ҙур баш кәрәк, ти. Ә ундай баш табылғансы, хазина, эйәһен көтөп, һаман да ята бирә, ти!

## 29. АҠТАУ ХАЗИНАҺЫ

Ҡасандыр бер ваҡыт ошо ерҙәрҙән яу үткән. Яу ваҡытында бер бай Байыш эргәһендәге тауға алты пар үгеҙ менән бик күп алтын-көмөш килтереп күмгән. Билдә итеп бер ҡарағасҡа тимер сөй ҡағып киткән.

Ишетеп ҡалып, эҙләй башлағандар был байлыҡты. Ағас сереп бөткән. Күптәр барып ҡаҙып ҡарағандар. Берәү ҙә тапмаған. Яуҙан һуң теге бай килеп, байлығын алып киткән дә тип һөйләйҙәр. Ҡай берәүҙәр: «Хазинаны табыу өсөн, шул тирәгә көл һибергә кәрәк. Көлдә ҡалған эҙгә ҡарап, ҡорбан салырға кәрәк. Шунһыҙ хазинаны табып булмай икән», — тигәндәр.

Ауылдың Хөснөтдин исемле муллаһы ҡустыһы менән көл һипкәндәр ҙә һарыҡ тояғы эҙен күргәндәр. Ҡорбанға һарыҡ салып, ерҙе ҡаҙый башлаһалар, кинәт ел-дауыл сығып китеп, быларҙың икеһен дә өйҙәре янына алып барып ташлаған, ти.

## 30. НУХ ҠАРТ ХАЗИНАҺЫ

Бынан бик күп йылдар элек был тирәләрҙә яу булып үткән. Һуғыш ваҡытында бик күп кеше һәләк булған, күптәрҙең байлыҡтарын талап киткәндәр. Ҡайһы берәүҙәр байлыҡтарын ер аҫтына күмеп ҡалдырған. Күмгән саҡта: «Был алтындарҙы ниндәй ҙә булһа бер хайуанды ҡорбан иткәндә генә алып булһын», — тип әйткәндәр, имеш. Бер нисә йыл үткәс, алтын күмгән урындар, янып, хазинаға әйләнә икән. Хазинаның эйәһе була, ти. Хазина эйәләре яратҡан кешеләренә йә өйрәк, йә һарыҡ, йә бесәй булып күренә. Алған кеше алтынын ваҡытында түләмәһә, хазина эйәһе уның өйөнә килеп һорай икән.

Беҙҙең ауылдан Нух бабайҙың мунсаһы урынында шундай хазина булған, тиҙәр. Уның эйәһе өйрәк булып күренә икән. Нух ҡарт бер өйрәген һуя ла хазина эйәһенән үтескә алтын алып тора икән. Алған алтынын ваҡытында түләй бара икән.

Бер ваҡыт ҡарт үтесен түләмәй башлаған. Хазина эйәһе кеше ҡиәфәтенә инеп килеп алтын һораған. Ҡарт түләмәгәс, уны ен булып килеп һуҡҡан, тиҙәр.

Нух ҡартты мин дә белеп ҡалам. Уның бер ҡулы менән бер аяғы йөрөмәй ине.

## 31. ШЫҒМАН ТАУЫ

Беҙҙең олатайҙар һөйләй торғайны әле: йәнәһе, Шығман тауында хазина бар, имеш. «Хазина, төрлө хайуан хәленә килеп, бәхетле кешегә күренгеләгән дә икән», — ти торғайнылар.

Бер ваҡыт ауылдың бер Фәтҡулла тигән тунһыҙ ғына кешеһе шул хазинаны төшөндә күргән. Иртән торған да төшөн һөйләргә Торай ишанга барған. Байлыҡ тигәндә күҙе уйнап торған ишанға етә ҡалған. «Фәтҡулла ҡустым, күрше-тирәнде йый ҙа хазина тауын барып ҡаҙығыҙ. Тик: «Йә хоҙай, йә хоҙай», — тип ҡаҙығыҙ, мин мәсеттә иман килтереп ултырырмын», — тигән.

Фәтҡулла үҙе кеүек әзмәүерҙәй ирҙәр менән хазина тауын ике көн буйы ҡаҙған. Өсөнсө көн көрәктәре, ысынлап та, бер ҡаты нәмәгә барып тейгән. Ишанға барып хәбәр иткәс: «Ай алла, балалар харап була икән, — тигән, — ана, ҡибланан болот сыҡты, был тикмәгә түгел, моғайын, аждаһа килер, хәҙер үк ҡайтһындар», — тип бойорған.

Фәтҡулла иптәштәрен эйәртеп ҡайтып киткән. Торай ишан теге тауҙы бер үҙе төнө буйы ҡаҙған. Таштан башҡа бер нәмә лә сыҡмаған. Шунан күп тә тормай, Торай ишан сирләп үлеп киткән. Үлер алдынан: «Фәтҡулла тәһәрәтһеҙ барып ҡына эште боҙҙо, хазина беҙҙеке була ине, йәлсемәгер», — тип ҡарғаған икән тип һөйләйҙәр.

## 32. ХАЗИНА

Ырымбур Ҡарғалыһы халҡы игенлеккә сыҡҡан. Селеклектә бер ут яна, ти. «Ут янған ерҙә хазина була», — тип, бер шәкерт әсәһенән хазинаны нисек ҡаҙып алырға һорай икән. Әсәһе: «Көсөң етмәç. Ут булып янғас, ала алмаçһың», — тигән. Шулай ҙа китапҡа ҡарап: «Ҡара тауыҡтың шаршамбы көн һалған йомортҡаһын алып, уға аҡ әтәс баçтырып сығар. Әтәсте ут янған ергә ебәр», — тигән.

Шәкерт биш-алты йомортҡа баçтыра. Бер аҡ әтәс себеше килеп сыға. Көҙ еткәс, шәкерт, аҡ әтәсте ут янған ергә ебәреп, шул ерҙе соҡой за соҡой. Әсәһе ергә көл һибергә ҡуша. «Көлгә ниндәй хайуан эҙе төшһә, шуны салырға кәрәк», — ти. Шәкерт көл һибә, ел-дауыл сығып, көлөн осортоп ала ла китә. Шәкерт күҙен асһа, йыйылған халыҡ шарҡылдап көлөп тора, ти. Шунан һуң шәкерт хазина эҙләүҙән туҡтай [1].

## 32а. ТИМЕРГӘ ТЕЛ КИЛГӘНЕ

Борон-борон заманда, күгәрә биреп, түбәләрен күккә сөйөп, күкрәген киреп ултырған Урал тауҙары араһында бер зирәк ҡарт йәшәгән, ти. Уның Исмәғил исемле улы булған. Уны тулыуға Исмәғил ҡарап туймаçлыҡ егет булған, ти. Уның күкрәген ҡаплау өсөн айыу күкрәге дәүмәлендәй тире кәрәк булған. Аталы-уллы былар сөкөрләшеп йәшәй биргәндәр.

Бер мәл ил өҫтөнә ҡоролоҡ килгән, ер өҫтө һарғайып кипкән, исмаһам, бер тамсы ямғыр яумаған. Ил ҡарттары йыйылышҡандар ҙа кәңәш ҡылғандар. «Ил өҫтөнә афәт килде, ҡорбан салырға кәрәк», — тигәндәр.

Исмәғилдең атаһы, биленә бысаҡ ҡыҫтырып, улын эйәртеп тауға киткән. Тауға барып еткәс: «Илгә һәйбәт тормош ҡайтһын өсөн, улым, һине ҡорбан итеп салырға булдым», — тигән.

Исмәғил ергә ауған. Ҡарт бысағын алған да улының муйынына һалған. Ҡүҙен асһа, ысын көсө менән ышҡыған бысаҡ ҡан да сығара алмаған. Ҡарт бысаҡты ташҡа ялтыратҡансы ҡайраһа ла, тимер бысаҡ үтмәгән. Аптырап, ҡарт бысағын эргәлә ятҡан ташҡа орған. Шул саҡ теге бысаҡ, ташты ярып, муйынына тиклем ҡаҙалған да ҡуйған. Ҡарт бысаҡты таштан һурып алған икән, тимер бысаҡ телгә килгән дә: «Сабыр ит, бәндә, ана һауанан ҡусҡар килә, шуны салырһың», — тигән.

Шунан һуң, ҡорбан итеп, мөгөҙлө хайуандарҙы сала башлағандар [1].

## 33. БАШҠОРТ БАЙРАМЫ

Донъя яратылғас та, кешеләр төрлө ерҙә ил ҡороп йәшәй башлағандар. Һәр илдең үҙенә бер тел бирелгән, үҙенсә кейем-һалым, аш-һыу тәғәйенләнгән. Кәрәк булған бөтә нәмәне өләшеп бөткәс, бер көн килеп хоҙай ер йөҙөндәге барлыҡ халыҡтарға хәбәр ебәрә: «Фәләнсә көндө байрам килеп алығыҙ».

Халыҡтар хоҙайға иң уңған кешеләрен һайлап ебәрәләр. Башҡорттан да берәү килә. Һәр береһенә бишәр байрам төшә. Алалар ҙа ҡайтырға сығалар.

Ҡайтҡанда башҡорттоң күсәре һынып китә. Ни эшләмәк кәрәк? Байрамды әрәм ҡалдырып булмай бит инде. Күршеләргә бирәм-бирәм тейәп ебәрә был. Ә үҙе арбаһын ташлап, һыбай ғына ҡайтып төшә.

Бөтә ерҙә байрам башлана. Күңел асыу, уйын-көлкө китә. Тик башҡорт илендә генә тауыш-тын юҡ. Халыҡ күңелһеҙ. Ни өсөн тиһәң — байрамдары юҡ. Ни эшләргә? Аптырашып, хоҙайға тағы теге кешене ебәрмәк булалар.

Ул килгәндә, хоҙай тынысланып йоҡларға ятҡан була. Әйләнеп тә ҡарамай, һораша башлай:

— Һин кем?

— Мин башҡорт иленән булам.

— Мин өләшәһе нәмәләрҙе өләшеп бөттөм. Ни кәрәк һиңә?

— Шулай ҙа шулай, хоҙайым, беҙҙең байрамыбыҙ юҡ. Ҡайтҡанда арбам ватылды ла башҡаларға тейәп ебәрҙем. Илдә күңелһеҙ. Байрам кәрәк ине беҙгә лә...

Хоҙай шул саҡ һикереп тора ла әйтә:

— Миндә байрам бөттө, — ти. — Әгәр байрам кәрәк булһа, ку-

---

[1] 1963 йылда хәҙерге Ишембай районының Ғүмәр ауылында Мөхмәтә Хәсәнованан (1888 йылғы) Т. Килмөхәмәтов яҙып алған. — БЛ, № 126.

наҡ саҡырығыҙ. Ҡилгән ҡунаҡ үҙе менән байрамын да алып киләр.

Шул көндән башлап башҡортта ҡунаҡ саҡырыу ғәҙәте урынлашып киткән. Ҡунаҡ килдеме — илгә байрам килә. *Ана шунан* ҡалған ул башҡорттоң ҡунаҡсыл ғәҙәте! [1]

## 34. АҠМАН-ТОҠМАН БУРАНЫ

Борон Баймаҡ йортона ҡайҙандыр Аҡман менән Тоҡман исемле ағалы-энеле ике кеше күсеп барып ултырған. Улар Талҡаҫ күле буйына утар һалып, шунда донъя көтә башлағандар.

Бер ваҡыт Аҡман менән Тоҡман бишенсе февраль көн кис Иҫәнғол [1] ауылынан ҡайтырға сыҡҡандар. Улар яртылыҡ юлға еткәс, күҙ асҡыһыҙ буран сыҡҡан. Аҡман менән Тоҡман юлда аҙашып, арманһыҙ булып, бер кәбән төбөнә хәл алырға ултырғандар. Ун икенсе февралдә буран туҡтаған.

Буран баҫылған көндө Табын йортонан килгән бер ҡарт иленә ҡайтып барышлай шул кәбән төбөнә барып сыҡҡан. Ҡараһа — ике әҙәм ҡосаҡлашып ултырған көйө өшөп үлгән. Ҡарт тиҙ генә Иҫәнғол ауылына барып хәлде һөйләгән: шулай-шулай, фәлән ерҙә кәбән төбөндә ике кеше өшөп үлгән.

Шунан аҙаҡ ил халҡы был буранды белһен өсөн Аҡман-Тоҡман бураны тип атағандар. Ә Табын йортонда ул буранды Шиһаҡа бураны тип йөрөтәләр. Ни өсөн тиһәң, теге Табын йортонан килгән ҡарт Шиһап исемле булған, уны кәмһетеп, Шиһаҡа тип йөрөтөр булғандар. Табын яҡтары ул буранды әле лә Шиһаҡа бураны тип йөрөтәләр.

## 35. АҠМАН-ТОҠМАН

*(вариант)*

Ағалы-ҡустылы Аҡман менән Тоҡман март айында юлға сыҡҡандар. Юлда хәтәр буранға осрайҙар былар, шул буранда аҙашып үләләр...

Алты көн үтеп киткәс кенә, аталары уларҙы табып ала. Ағайэнеһе, илай-илай, быулыға-быулыға:

— Аҡман-Тоҡман, алты көн,
Алтыһы ла ҡаты көн —
Ун ике көнгә бәйгеле, —

тип һамаҡлай икән.

Хәҙер мартта була торған алты көнлөк буранға «Аҡман-Тоҡман» бураны тип йөрөтәләр.

## 36. БИШҠУНАҠ БУРАНЫ

Элгәре заманда Иҫәнғол ауылының биш кешеһе Муллаҡай[1] ауылына ҡунаҡҡа барғандар. Бер нисә көн ҡунаҡ булғас, ҡайтырға сыҡҡандар. Юлда бик ҡаты буран күтәрелгән. Былар аҙашып, саҡ-саҡ үлмәй тороп ҡалғандар.

Шунан аҙаҡ ошо мартта була торған буранды Иҫәнғол ауылдары Бишҡунаҡ бураны тип атағандар.

# ЕР-ҺЫУ, ТАУ-ТАШ ҺӘМ БАШҠА УРЫН АТАМАЛАРЫНА БӘЙЛЕ РИҮӘЙӘТ, ЛЕГЕНДАЛАР





## 37. МҮСЕКТАУ

Борон-борон заманда Алпамыша тигән бик эре халыҡ йәшәгән. Урмандарҙы үлән урынына ғына тапап йөрөгәндәр улар, теләһә ниндәй эре ағасты тамыры менән ҡутарып йолҡоп ташлай торған булғандар.

Уларҙың уйнап йөрөгән бер малайы беҙҙең кешенең өс ат менән һабан һөрөп йөрөгәнен күреп, бөтә аттары, һабаны, кешеһение менән күтәреп, усына һалып өйөнә алып ҡайтҡан. Ҡайтҡас, атаһына: «Мин ҡырҙа йөрөгәндә бер ҡорт таптым, ерҙе ҡап-ҡара итеп йырып йөрөй», — тип һөйләп, теге һабансыны аттары-ние менән бергә иҙәнгә ебәргән. Шунан быға атаһы: «Юҡ, балам, был ҡорт түгел, был беҙҙең кеүек кеше. Һин быны рәнйетмә, ҡайҙан алғанһың, шул ергә апарып ебәр», — тип улын ҡыҙҙырған да икенсе ваҡыт уларға теймәҫкә ҡушҡан [1].

Ана шул алпамыша кешеләрҙең береһе ошо төбәктә йөрөгән сағында итегенең табанына һәм үксәһенә йәбешкән балсыҡты таҙартырға тотонған. Тап шул урында тау кеүек балсыҡ өйөлөп ҡалған. Ана шуны Мүсектау тип атағандар. Бик тә бейек ул тау, 70—100 саҡрымдан күренә. Әй [2] йылғаһының уң ярына терәлеп ултыра. Уның ҡаҡ түбәһендә бәләкәй генә күл бар.

## 38. АЛПА ҠОМО-АЙЫРЫТАУ

Бик борон заманда алпа (алып) тигән эре халыҡ йәшәгән. Шулар араһынан береһе был яҡҡа ырыу халҡын эҙләп сығып киткән. Талай йылдар эҙләп йөрөй торғас, хәҙерге Торсо ауылы еренә барып сыҡҡан. Оҙон юл үткәнгәлер инде, аяҡтары ауыртып киткән. Был ултырып хәл йыймаҡ булған. Шул ерҙә ҡынйырағын сисеп ебәрһә — ҡом тулған, ти, аяғы шуға ауыртҡан икән. Алпа ырыуының кешеһе ике ҡынйырағының да ҡомон ҡағып, үҙ юлына китә, ә ҡынйырағынан ҡойолған ҡом ике йәнәш тау булып тороп ҡала. Иҫәнбәт, Торсо, Аҡҡуҙ һәм Йәйләү тигән ауылдарҙың

боронғо йәйләүендә ҡалҡып сыҡҡан Алпа ҡомо-Айырытау ана шунан тороп ҡалған. Тауҙар икеһе лә тип-тиң булып ҡалҡып торалар [1].

## 39. АЛПАМЫША ҠӘБЕРЕ

Бынан бер илле саҡрым алыҫлыҡта, Төй буйында урынлашҡан Ҡашҡа менән Солтанбәк [1] ауылдары араһында, Алпамыша ҡәбере бар. Бик матур ғына таусыҡ булып, күл буйында ята. Дәү ҡәбер. Унда Алпамышаларҙың алты айлыҡ сабыйҙары күмелгән, тип һөйләйҙәр ине ололар.

## 40. ҺАНАЙҺАРЫ МЕНӘН ШАЙТАНҺАРЫ ТАУҘАРЫ

Дәү кешеләр — Алпамышалар булған элек. Бер Алпамышаның ел-дауыл кеүек етеҙ ҡатыны булған. Хатта шундай етеҙ ҡатын да иренә бер ыштанды ете көндә тегеп өлгөртә алмай, ти. «Елмен, дауылмын. Ете көндә бер ыштан, тағы ете көнлөк эше бар», — ти икән был. Ғәләмәт ҙур ыштан кәрәк булған инде. Алпамыша ботон киреп баҫһа, бер аяғы — Күктимерҙә, икенсеһе — Нарыҫтауҙа була, ти. Нарыҫтау менән Күктимер араһы — ун-унбиш саҡрым.

Ташлы ауылы янында ике тау бар: Шайтанһары менән Һанайһары. Ана шул тауҙарҙы Алпамышаның ҡынйырағынан ҡойолоп ҡалған ҡомдан барлыҡҡа килгән, тиҙәр ине боронғолар. Һанайһарыһы — изге тау. Ямғыр яумаһа, әбейҙәр шул тауҙың башына менеп, намаҙ уҡып, хәйер һалғандар. Шайтанһарыһын яратмайҙар.

Һанайһары тауынан тороп, Һанай исемле бер батыр шайтандар менән алышҡан. Уҡ атышҡандар. Тауҙарҙың исеме шунан ҡалған [2].

## 41. ҮКЕРТАШ

Бер кеше һыбайлап һунарҙан ҡайтып килгән. Шул саҡ тау өҫтөндә ятҡан аҡ таш, үкереп, быға ташланған да аты-туны менән бергә өҙгөләп ташлаған. Үҙенең дә башы ергә батҡан. Халыҡ йыланға оҡшап ятҡан аҡ ташты Үкерташ тип йөрөтә.

## 42. БАТЫР МЕНӘН АЙЫУ ТАШТАРЫ

Борон замандарҙа Уралда ҡурҡыу белмәҫ бер батыр йәшәгән.

— Минең беләктәрҙә бөйөк ғәйрәт бар, шуға мин үҙем теләгән бөтә нәмәне лә эшләй алам, — тип маҡтанған бер саҡ батыр.

— Тау эйәһе ишетеп ҡалһа, үҙенден кәрәгенде бирер әле, — тигәндәр уға ҡарттар.

— Юҡ, бер кемдән дә, бер нәмәнән дә ҡурҡмайым мин, — тип ысҡындырған батыр тағы.

Шул саҡ ер аҫтында геүләү тауыштары ишетелгән. Бер аҙ ваҡыт үткәс, батырға бик ҙур айыу тап булған. Былар көрәшә башлағандар. Көрәшә торғас, икеһе лә ергә батҡан. Айыуҙың ҡолаҡтары ғына күренеп тора, ти, ә батыр биленә тиклем батҡан, ти. Шул ерҙә былар икеһе лә ташҡа әйләнгәндәр. Был таштар әле булһа шунда торалар [1].

## 43. ЙЫЛҠЫСЫҠҠАН КҮЛ

Борон бер аусы башҡорттоң бик шәп һунар эте булған. Күктүш исемле. Унын тотмаған йәнлеге, ауламаған ҡошо булмаған.

Бер саҡ һунарҙа йөрөгәндә, урманда быларға бер егет осраған. Ул ошо Күктүшкә бик ҡыҙыҡҡан. Этте уға биреүен үтенгән, әжеренә күлдән йылҡы сығарырға вәғәҙә иткән. Бик быуынына төшкәс, аусы башҡорт күнгән, Күктүшен серле егеткә биргән. Егет эт менән күлгә төшөп киткән дә бер бейә алып сыҡҡан. Аусыны бейәгә атландырып былай тигән: «Һин алға ҡарай китә бир, бейә артынан күлдән йылҡы малы сығыр, тик артыңа әйләнеп ҡарама». Шулай тигән дә егет Күктүш менән әллә ҡайҙа ғәйеп тә булған.

Аусы бейәһенә атланып киткән. Бер аҙ барғас, ул артында ат кешнәгән тауыш, тояҡ тупылдауы, бейәләр сеңрәүе ишеткән. Күпмелер барғас, түҙмәгән, артына әйләнеп ҡараған. Ҡараһа, күлдән көтөү булып сығып килгән йылҡыларҙың яртыһы күлгә кире сумған. Ярға аяҡ баҫҡандары ғына тороп ҡалған.

Күлдән сыҡҡан был йылҡы үҙе сысҡан буй һыртлы ала төҫтәге тоҡом икән. Ала төҫ йылҡы тоҡомо ана шунан ҡалған. Был күлде аҙаҡ Йылҡысыҡҡан күл тип атағандар.

Күл үҙе хәҙер ҙә ҡараһыу төҫтә бер серле һыу булып ята. Ул йәй ҙә, яҙ ҙа, ҡыш та бер кимәлдә — артмай ҙа, кәмемәй ҙә. Күлдә балыҡ-фәлән юҡ.

Был күл йәнәшәһендә — Ығышмакүл. Унын уртаһында әлек бер ҡайын үҫеп ултыра ине күтерле утрауында. Ул утрау шул ҡайын менән бер яҡтан икенсе яҡҡа ығышыр, күсеп йөрөр ине. Шуға уны Ығышмакүл тиҙәр. Ҡайын хәҙер күтерле утрауы менән бер башта нығынып, тамырланып киткән. Был күлдең кимәле лә Йылҡысыҡҡан менән бер тигеҙ — артмай ҙа, кәмемәй ҙә. Уларҙың һыуы аҫтан тоташҡан [1].

## 44. ЙЫЛАН ҺӨЙРӘГӘН ҮҘӘГЕ

Мәҡсүт ауылынан көньяҡ-көнбайышта алты-ете саҡрым самаһы ялан, батҡаҡ үҙән бар. Элгәре шул батҡаҡлыҡта аждаһа-йылан [1] йәшәгән, тиҙәр. Берҙән-бер көндө күк күкрәп, йәшенле ям-

ғыр яуған. Шул ваҡытта бер бәләкәй ҡара болот килеп, йыланды күтәреп алып киткән.

Бына ошонан сығып, үҙәнен Йылан һөйрәгән үҙәге тип, йылғаһын Йылан һөйрәгән йылғаһы тип атай башлағандар.

## 45. ҠАРИҘЕЛ

Борон заманда ҡалын урманда, хәҙерге Ҡариҙелдең башында, йәшәгән, ти, бер батыр. Бик күпте күргән, күп ерҙәрҙә йөрөгән, ил гиҙгән, яу сапҡан батыр булған, ти, был. Иң һуңғы тапҡыр яуға барған сағында бик күп батырлыҡ күрһәткәне өсөн был егетте батша үҙе саҡыртып алған да әйткән, ти:

— Һин, егет, илде һаҡлап алып ҡалдың. Бының өсөн һиңә рәхмәт. Инде йәнеңә ни теләйһең, минең хазинанан шуны ал.

— Рәхмәт, — тип әйтте, ти, егет, — миңә бер төрлө лә байлыҡ кәрәкмәй. Һин, батшам, миңә ике төрлө нәмә бирһәң, шул етә.

— Рәхим ит, уланым, — тип әйтте, ти, батша, — ни теләһәң, шуны бирергә ризамын.

— Һин миңә, батша хәҙрәттәре, — тип әйтте, ти, — мөмкин булһа, азатлыҡ бир. Мин бер ситкә китәйем дә үлгәнсе иректә йәшәйем.

— Ярай, — тип әйтте, ти, батша, — уйлап ҡарарбыҙ, икенсе һорауың нимә?

— Икенсе үтенесем — ат. Миңә һин, батшам, алтын һарайыңдағы ҡара айғырыңды бир. Ғүмер буйы ситтә йәшәһәм, бер иптәшем булыр.

Батша бер аҙ уйға ҡалды, ти: егеттең ике үтенесе лә ауыр бит инде.

— Әйткән һүҙ — атҡан уҡ, батшам, ауыҙыңдан сыҡҡан һүҙеңде иҫеңә төшөр. — Шунан батша атты килтерергә әмер бирҙе, ти, егетте ирекле тип иғлан итте, ти.

Батыр егет, ҡара айғырҙы менеп, осҡан ҡоштай елеп, үҙенең тыуған иленә, Урал тауҙарына, ҡайтып килде, ти. Тегенең айғырына һоҡланмаған кеше ҡалманы, ти. Бик яман көнләшә лә башланылар, ти, бынан. Дуҫ бар, дошман бар, айғырға ҡул һалырға теләүселәр ҙә ишетелә башланы, ти. Шунан был батыр уйлай: «Минең иркем бар, менергә айғырым бар. Ни эшләп әле мин бында ятам?» Китте, ти, был сығып, йөрөнө, ти, ил гиҙеп, шунан бер тау итәгенә барып урынлашты, ти. Тауҙы умырып өң яһаны ла шунда йәшәй башланы, ти.

Ул арала инде ҡара айғырҙың даны бөтә илдәргә таралып өлгөргән була. Бөтә илдәрҙән ошо айғырҙы күрер өсөн сапҡындар килә икән, ти. Әллә ҡайһы илдәрҙән әллә ниндәй батшалар, айғыр өсөн әллә күпме бүләктәр бирмәк булып, әллә нисәмә кеше ебәрҙеләр, ти.

Шунан айғыр үҙе телгә килеп әйтте, ти:

— Эй, егетем, йоҡлап ятма, әйҙә китәйек. Беҙ икәү юлда булһаҡ, берәү ҙә мине һинән ала алмаҫ.

— Юҡ, — тип әйтте, ти, егет, — мин һине, айғырҡайым, былай ҙа кеше ҡулына бирмәм. Бына ошо тау эсенә йәшерермен.

Ул тауҙы тағы аҡтарып, айғырға урын яһап, өҫтөнән таш менән ябып бикләп тә ҡуйҙы, ти. Айғырға ҡыҙығыусылар бөтә ерҙе аҡтарып киләләр. Шул саҡ айғыр, моңайып, бер кешнәп ебәрә. Әллә ҡайҙарға киткән, ти, уның тауышы. Шунан быны инде белеп алып, йылғыр сапҡындар килеп тә етәләр. Теге батырҙы, аңдып тороп, тотоп алалар ҙа, айғыр ятҡан урынды табып, ташты аҡтара башлайҙар. Шунан айғыр, эште һиҙеп алып, ишектәге таш алынғанды көтөп тора ла атылып сыға ла ҡаса.

Тегенең тояҡ көсөнә тау ишелеп киткән дә, атылып шишмә килеп сыҡҡан. Айғыр урмандар, тауҙар аша әле бер яҡҡа, әле икенсе яҡҡа борола-борола саба икән, ә тауҙан бәреп сыҡҡан көслө һыу уның тояҡ эҙенән ҡалышмай ағып бара ла бара икән. Шунан ҡара айғыр сабып, Ағиҙел буйҙарына барып сыҡҡан да күҙҙән юғалған. Уның тураһында башҡа ишетеүсе лә, күреүсе лә булмаған. Ә һыу Ағиҙелгә барып ҡушылған да ағып киткән.

Бына шулай барлыҡҡа килгән, ти, Ҡариҙел йылғаһы [1].

## 46. АҒИҘЕЛ МЕНӘН ЯЙЫҠ

Яйыҡ, Һаҡмар, Ағиҙел, Ҡариҙел, Нөгөш, Оло Эйек, Кесе Эйек — бөтәһе лә бер яҡтаныраҡ сыҡҡандар. Улар борон һөйләшә лә белгәндәр, ти. Былар һүҙ ҡуйышҡандар: «Бөтәбеҙ ҙә бер яҡҡа ағып барайыҡ. Төшлөккә ҡарай ағып китһәк, берәй ерҙә тағы ҡушылырбыҙ». Шулайтып, Урал буйлап киткәндәр.

Яйыҡ яй ғына төшөп киткән. Яй барһа ла, юлында ҡаршылыҡ булмағас, үҙе бер яры юл алған.

Эйек менән Һаҡмарҙарҙың юлында арҡыры ятҡан тауҙар осраған. Шулай ҙа күп булмаған. Улар ҙа ялан ергә килеп сыҡҡандар. Шунан бергә килеп ҡушылғандар.

Ағиҙел менән Ҡариҙелдең юлында текә-текә тауҙар, ҡая таштар күп осрау сәбәпле, улар урау-урау юл үтеп, аҙаҡҡараҡ ҡалғандар. Артта ҡалғас, Ағиҙел тегеләргә ҡысҡыра икән.

— Эй, ҡайһы яҡҡа киттегеҙ һеҙ?

Эйек менән Һаҡмар тауыш бирергә итеп ҡараһалар ҙа, Яйыҡ уларҙы тыйған.

— Өндәшмәгеҙ, өндәшмәгеҙ. Беҙгә ҡушылмаһын. Китһен әйҙә үҙ юлы менән.

Ағиҙелгә тау-таш араһында бик күп йылғалар ҡушылған. Шуға уның һыуы ишәйгән, көсө күбәйгән. Яйыҡ шунан ҡурҡҡан. Был маҡтаныр, үҙ исемен тағыр, тип уйлаған.

Ағиҙел һаман киткән. Былар өндәшмәгәс, ул Көнгәк эргәһенән ҡырҡа боролоп, икенсе яҡҡа юл алған. Юл ыңғай башҡа йылғаларҙы ҡушып ала барған. Барған һайын көсәйеп, Ҡариҙелде юлдаш итеп алып, ул Ҡамаға барып юлыҡҡан, унан тағы ла көслөрәк Иҙелгә ҡушылып, Ҡаспийға барып төшкән. Шул ваҡытта ҡараһалар, Иҙел бик ҙур, Яйыҡ бәләкәй генә.

Шулайтып, көнләшеү арҡаһында Яйыҡ һай һыулы булып ҡалған. Унда караптар ҙа йөрөй алмаған. Ә Ағиҙелдә, Ағиҙелгә ҡушылған Ҡариҙелдә (Иҙел менән Кама һыуын әйтеп тораһы ла юҡ) пароходтар йөрөп тора. Улар йырҙарҙа ла гел маҡталып ҡына йырлана.

Ошо хикәйәне һөйләй ҙә боронғолар, көнләшергә ярамай, ти торғайнылар [1].

## 47. АҒИҘЕЛ МЕНӘН ҠАРИҘЕЛ

Бер ваҡыт Ағиҙел менән Ҡариҙел осрашҡандар ҙа иртә менән бергә юлға сығырға һөйләшеп ятҡандар. Иртәнсәк Ағиҙел уянып китһә — Ҡариҙелдең эҙе лә юҡ, ти. Шунан был Ҡариҙелде ҡыуып етәм тип, ҡаянан-ҡаяға һикергән. Әммә ҡыуып етә алмаған. Ҡире боролған да икенсе яҡҡа юл алған. Ана шуға күрә лә хәҙер Ағиҙелдең бер яғында ҡая булһа, икенсе яғында — туғай, бер яғында туғай булһа, икенсе яғында ҡая ҡалҡып тора.

## 48. ИКЕ ИНЙӘРҘЕҢ БӘХӘСЕ

Оло Инйәр менән Кесе Инйәр Ямантауҙан башлана ла Инйәр ауылы эргәһендә бергә килеп ҡушыла.

Имеш, улар, ҡайһыһына ҡайһы яҡҡа ағырға тип, бик оҙаҡ бәхәсләшкәс, былай тип һүҙ ҡуйышҡан: ҡайһыһы иртәрәк торһа, шул — уңға, ә һуңға ҡалғаны һулға ағып китергә тейеш була. Оло Инйәр иртәрәк килеп тора ла, Кесе Инйәр йоҡонан уянғансы, байтаҡ ҡына араны үтә һала. Кесеһе, йоҡоһонан торғас, ағайымдан тороп ҡалмайым тип, тура һыпырта...

Шуға күрә уны, ағаһынан тар булмаһа ла, Кесе Инйәр тип атайҙар. Тик ағаһы ҡустыһынан етеҙерәк аға.

## 49. ҠАЛЫМ

Ҡарт Урал бабайҙың Яйыҡ исемле батыр бер улы булған, ти. Ә Ирәмәл әбейҙең Ағиҙелкәй исемле уғата һылыу ҡыҙы булған, ти. Урал бабай үҙенең улына әлеге Ирәмәл әбейҙең ҡыҙы Ағиҙелкәйҙе әйттерергә булған, ти. Бик бай ҡалым түләгән. Яйыҡ [1] ярҙарындағы барлыҡ урманды биргән: ҡарағайҙарҙы, шыршыларҙы, имәндәрҙе, ҡайындарҙы. Ирәмәл [2] әбей шул ағастарҙы алған да Ағиҙелдең ярҙарын биҙәп тә ҡуйған.

Яйыҡтың быға хәтере ҡалған, Ағиҙелкәй матурайып китһә, мине һанға һуҡмаç, тип ул Хазар диңгеҙе [3] яғына олағып сыҡҡан да киткән, ти. Был хәлде Урал бабай белеп ҡалған да, ҡыҙ өсөн биргән ҡалым әрәм булмаһын, тип бик хафаланған, ти. Ярай, әгәр ҡыҙҙың ата-инәһе кейәү егетенән баш тартһа, ул саҡта боронғо

башҡорт йолаһы буйынса, биргән ҡалымды кире ҡайтарып алып була. Ә баш тартмаһа, эш харап.

Ағиҙелкәйҙең ата-инәләре кейәү егете Яйыҡтан баш тартмаған. Ағиҙелкәй Яйыҡты бик яратҡан. Мин Яйыҡты ғәфү итәм, тик ул кире әйләнеп ҡайтһын, тигән.

Яйыҡты Ағиҙелкәй янына ҡайтырға бик өгөтләп ҡарайҙар. Тик бер киткәс, Яйыҡ ғәрләнеп ҡайтмаған, Ағиҙелкәйгә күренергә оялған. Үҙе Ағиҙелкәйҙе һағынып йырлаған:

Йүгереп кенә йөрөп йыйыр инем,
Һыу буйҡайҙарында йыуа юҡ.
Йүгереп кенә ҡайтып китер инем,
Ҡайта ла ғына торған йола юҡ.

Ысынлап та, Яйыҡ буйҙарында шыршы, ҡарағай, ҡайындар түгел, йыуа ла үҫмәҫ булған, ти.

Шулай итеп, Ағиҙелкәй өсөн биргән ҡалым тороп ҡалған. Шунан бирле Яйыҡ ҡом бурандары һыҙғырып торған далалар үтә һаман Хазар диңгеҙенә ағып ята икән. Ә Ағиҙелкәйҙең ярҙары буйында мәңге йәшел шыршы-ҡарағайҙар, ҡайындар, ялбыр имәндәр, хушбуй еҫле йүкәләр үҫә икән...

## 50. ҠАРАГӨСӨК ТАУЫ

Бер ырыу башлығының балалары тормаған. Йыл һайын тыуып тора — тыуған бере үлеп тора икән.

Берҙән-бер көн бының ҡара сәсле бер улы тыуған. Ен-пәрей ҡағылмаһын тип, бай уға Ҡарагөсөк тигән исем ҡуштырған.

Ҡарагөсөк буйға етеп, башлы-күҙле булғас, һәр йәй һайын бына ошо тау итәгенә йәйләүгә сыҡҡан. Шуға күрә лә был тауҙы Ҡарагөсөк тауы тип атағандар.

## 51. ТУРАТ САҒЫЛЫ

Борон был тирәләр буш булған. Ер-һыу иркен. Ошо ерҙәрҙә ҡалмыҡтар йәйләп йөрөгән. Йылдар үтеү менән, ҡалмыҡтарҙың бер өлөшө ситкә сығып киткән. Күсеп киткән бер ҡалмыҡ байының улына ошо ерҙә тороп ҡалған берәүҙең ҡыҙын ҡоҙалағандар. Егет ҡыҙҙы килеп йәрәшкән, күргән дә иленә ҡайтып киткән. «Мине ҡара ҡаҙ килер ваҡытта көт», — тигән ул ҡыҙға.

Бер мәлде был ҡыҙ еңгәһе менән ултырғанда ҡапыл көлөп ебәргән. Еңгәһе: «Ниңә көләһең?» — тип һораһа, ҡыҙ әйтә икән: «Ҡара ҡаҙ ҡаңғылдағанын ишеттем. Кейәүем килә». Көн битенә ҡараһалар, ысынлап та, алыҫта аҡ сатыр күренә, ти. Егет килеп, тау аръяғында аҡ сатыр ҡороп ебәргән, ти. Еңгәләр, тороп, шунда уҡ аҡ сатырға табан юл алғандар. Егет алдан юлығып, уларға ҡаршы сыҡҡан. Сәләм биргән. Еңгәләренә бүләк өләшкән.

— Аҡ сатырында кем ятыр? — тигән еңгәләрҙең береһе, — әйҙә күрәйек әле.

— Унда бер кем дә юҡ, — тигән егет, — тик мин юҡта инергә ярамай. Килер булһағыҙ, алдан тауыш бирегеҙ.

Уны ҡыҙ янына алып килгәндәр. Кейәү хөрмәтенә табын йыйғандар, мәжлес ҡорғандар, ә балдыҙҙары кейәүҙең аҡ сатырын ҡарарға киткәндәр. Улар йәшеренеп, белгертмәй генә килгәндәр.

Сатыр эсендә егет менән килгән туры толпар тора икән. Был толпар ҡанатлы булған, шуға күрә егет уны, кеше күҙе тейеүҙән һаҡлап, көндөҙөн сатыр эсендә генә тотҡан.

Балдыҙҙары сатырға килеп ингәндә, туры толпар ҡанаттарын йәйеп ятҡан булған. Кеше килгәнен һиҙмәй ҡалған, ҡанаттарын йыя алмаған. Ҡыҙҙар аптырашып, һоҡланышып, күҙҙәрен ала алмай ҡарап торғандар. Шул ерҙә толпар ятып үлгән.

Егет ҡайғырған. Ерҙе соҡоп, атын ерләгән. Алтын эйәрен, уҡаланған йүгәнен, бөтә-бөтә нәмәһен туры атының ҡәберенә ҡуша һалған ул. Үҙе ҡайғырып илаған.

— Һәй, ниңә ҡайғыраһың, кейәү, — тигән ҡайныһы, — минеп ҡайтырға миндә ат табылмаҫ тиһеңме?

Бай бөтә йылҡыларын әлеге тауҙың итәгенә өйөртөп килтерергә ҡушҡан. Егет бөтәһен дә берәм-берәм барлап сыҡҡан, тик үҙенә лайыҡлы ат һайлай алмаған.

Бай әйткән:

— Эй, көтөүселәр, тағы ла сит башта йөрөп ҡалған йылҡы малы ҡалманымы?

Көтөүселәр әйткән:

— Ҡышты насар сыҡҡан мөҙөргән бер нисә тай-тулаҡ бар ине.

— Килтерегеҙ шуларын да.

Ҡышты арыҡлап сыҡҡан тай-тулаҡты алып килгәндәр. Ҡайны ҡарт кейәүенә бер йүгән тотторған да әйткән:

— Йылҡы араһына кер ҙә шул йүгәндең ауыҙлығын шылтырат, — тигән.

Кейәү ул әйткәнсә йүгәнен шылтыратҡан. Был тауышҡа баяғы алып килгән тай-тулаҡ араһынан ҡышҡы ала ябағаһын да һалмаған бер ҡола тай әйләнеп ҡараған [1]. Был ҡола тай егеткә һис тә оҡшамаған. Йүгәнде икенсе, өсөнсө тапҡыр шылтыратҡанда ла егеткә шул уҡ тай әйләнеп ҡараған.

— Төҫө килмәне инде, — тигән егет. — Ярай, бәхет ошолор. Тотоп алып тайҙы менгән.

— Ат килештеме? — тип һораған ҡайныһы.

— Төҫө оҡшамаһа ла, йөрөшө арыу күренә, — тип яуаплаған кейәү.

Шул саҡ ҡаршы яҡтан һыу аша ҡара күк ат менгән бер кеше үтеп бара икән.

Ҡарт ғәжәпкә ҡалған.

— Ни эшләп ул беҙгә һуғылмай үтеп бара? — тигән кейәүгә, — бар әле, ҡыуып ет тә белеп кенә кил.

Егет теге кешенең артынан китеп, оҙаҡ ҡына йөрөп ҡайтҡан.

— Йә, кейәү, ҡыуып еттеңме? — тигән ҡарт.

— Юҡ, ҡыуып та етә алманым, кем икәнен дә белә алманым, Ул Урал башын ашып китте инде, — тигән кейәүе.

— Эй-й, балам, — тигән ҡарт, — уға һин түгел, ата-олатаң етә алмаған, ул — үткән заман, уға бер кем етә алмай.

Ҡейәү көҙөн үҙ иленә ҡайтып китергә була. Уны юлға әҙерләйҙәр, халыҡ йыйыла. Оҙатыуға сығалар. Атына менгәс, егет кәләшенең сәс толомон төбөнән үк ҡырҡып, сәсен алып үҙенә тоттора ла әйтә:

— Мә, тот, сәсең быпа ошо ҡырҡылған толомоң буйы үҫкәс, мин ҡабат килермен. Шуға саҡлы минең килерҙе көтмә, — ти.

Шул китеүҙән егет ҡабат әйләнеп килмәгән.

Ана шул тигеҙ ерҙә ҡалҡып торған тауҙы ҡасандыр кейәү булып килгән егеттең туры толпар аты хөрмәтенә Турат сағылы тип атай башлағандар.

Тураттың зыяраты ла барлығы билдәле. Хәҙерге Иләс (Турат) [2] ауылынан көньяҡ-көнбайышҡа китһәң, Умын кисеүенең [3] бер яғында Өлкән Ҡурғы [4] тамағында, тау битләүендә зыяраттың баш осона ла, аяҡ осона ла таш ултыртылған.

Хәҙер инде был изге һаналған зыярат ер менән тигеҙләнеп, үләнгә ҡапланып бара.

## 52. ҠЕЙӘҮТАШ

Был бик борон заманда, бынан өс-дүрт быуындар элек, булған хәл. Борон кешеләр алыҫтан, туҡһан-йөҙ саҡрымдан барып, килен алыр булғандар.

Шулай бер заман бер Бөрйән байы йөҙ саҡрымдан килеп, Нуҡай [1] байының ҡыҙын әйттергән. Нуҡай байы йәйләүгә сыҡҡас, кейәү егет, шул йәйләүгә килеп, кейәүләп йөрөр булған. Ул замандарҙа арба-фәлән булмаған. Ҡатын-ҡыҙҙар ҙа, ирҙәр кеүек, һыбай йөрөгән.

Ҡейәү йәйләүгә һәр ваҡыт һыбай йөрөгән. Уның нисек килгәнен бер кем дә күрмәгән. Ҡейәү егет тау башынан үңдеге менән эйәрен генә тотоп төшөр булған.

Берҙән-бер ваҡыт ҡыҙҙың еңгәләре үҙ-ара: «Был кейәү шул тау башынан гел йәйәү төшә, атын бер ҙә күрһәтмәй, атын күрергә кәрәк ине», — тип һөйләшкәндәр ҙә, ҡыҙҙан: «Һин кейәүеңдең атын күргәнең бармы, ниндәй?» — тип һорағандар. Ҡыҙ еңгәләренә: «Юҡ, ул миңә нимәгә кәрәк?» — тигән. Еңгәләре шунда: «Һин һора әле, кейәү атын ҡайҙа ҡалдыра икән, беҙ күрер инек»,— тигәндәр. Ҡыҙ яҡын да килмәгән. «Ҡуй, миңә әйтмәҫ, һеҙгә әйтмәгәнде, ни эшләп миңә әйтһен инде», — тигән. Шунан еңгәләре уға былай тип өйрәткәндәр. «Ҡейәү килгәс тә, атының ҡайҙалығын һора, күргем килә, тип үтен. Әйтмәһә, шулмы һинең яратыуың? Былай булғас, һин мине яратмайһың, тип әйт», — тигәндәр.

Бер заман кейәү, элеккесә, үндеге менән эйәрен генә күтәреп, шул һырт буйынан килеп төшкән. Ҡейәү килгәс тә, ҡыҙ еңгәләре өйрәткәнсә эшләгән. Ахыр сиктә кейәү кәләшенә атын күрһәтергә булған. Ҡилеп төшкән тауына алып сығып киткән. Быларға еңгәләре лә эйәргән.

Типһенгә сыҡһалар, ҡарағайлыҡ араһында, йәшел сатыр эсендә, ҡанатын киреп, толпар тора, ти. (Ҡейәү егет толпарын кешегә күрһәтмәҫ өсөн, йәшел сатыр ҡороп, шунда ашарға ҡалдырып китә торған булған икән.) Былар юшап торған толпар өҫтөнә ҡапыл барып сыҡҡас, толпар ҡанатын йыйып өлгөрә алмаған. Ошонан башлап толпар ауырыған, оҙаҡ та үтмәҫтән ул үлгән. *Толпар* үлгәс, егет бик ныҡ ҡайғырған. Ҡайныһы өйөрөнөң иң яҡшы атын һайлатып биргән. Егет: «Минең толпарымды үлтереүҙә һин генә ғәйепле, хәҙер йөҙ саҡрымды мин нисек килеп йөрөйөм, башҡа килеп булмаҫ», — тигән дә, һолоғон ҡайтарып, кәләшенән баш тартҡан. Баяғы һырт буйлап сығып, толпарына иҫтәлек булһын тип, бейек итеп таш өйгән дә үҙ йортона ҡайтып киткән.

Шунан башлап ул урын Ҡейәүташ тип йөрөтөлә.

## 53. БӘЙҒӘМБӘР ТАШЫ

Йылайыр районы Ҡаҙырша ауылынан ике саҡрым алыҫлыҡта, Бирмәҫ йылғаһы буйында, бейек ҡая таш бар. Шул таштың итәгендә кеше аяғының эҙе бар. Береһе ҙур эҙ, береһе бәләкәй бала аяғының юлы. Бик эҫе ваҡытта, хатта таштар иреп ятҡан бер саҡта, Мөхәммәт бәйғәмбәр бер улы менән тау башынан шунда һикергән икән, тип һөйләйҙәр ауыл кешеләре.

Ул таш изге таш һанала. Юлдан үтеп йөрөүсе кешеләр, йәшеҡарты, шул таш эргәһендә туҡталып китәләр. Ҙур аяҡ эҙенә сәскә, еләк, муйыл, бик булмаһа, матурыраҡ таш киҫәге булһа ла һалып уҙалар. Икенсе аяғының эҙе ауылда, йылға буйында.

## 54. ЯРЫШТАУ

Дүртөйлө ауылы эргәһендә Ярыштау тигән тау бар. Башында әүлиә ҡәбере. Әүлиәне күтәреп алып барып, бик хөрмәтләп ҡуйғандар, тип һөйләй торғайнылар (тау бейек, унда менеү анһат түгел). Был әүлиә үҙе бәһлеүән булған. Әүлиә күмелгәнгә күрә Ярыштау изге урын булып иҫәпләнә. Эргәһенән үткәндә хәйер һалып үтә инек. Аҡсаһын уҡымышлы муллалар барып ала ине. Әле барып булмай ул тирәгә: итәгенән һыу ағып ята.

Балҡантауҙан Ярыштауға уҡ менән атышҡандар борон (аралары утыҙ саҡрым). Уҡ атышыуҙа ярышҡан өсөнмө, әллә башҡа ярыштар булғанғамылыр, тауға шундай исем бирелгән.

## 55. ТИМЕРБАЙ ТҮШЕ

Тимербай ҡарт әбейе менән бесән сабып ятҡан ваҡытта бер дыу бәрейе килә.

— Тимербай, Тимербай, әбейеңде миңә ебәр, килененең ауырый, апҡайтайым ҡунаҡҡа, — ти икән был. Эргәһендә килеһе булған. Шунан килеһен ат итеп, төйгөсөн ҡамсы итеп, алып ҡайтып киткән Тимербайҙың ҡарсығын. Әбейҙе бер ер өйгә алып бара. Килене бәпәйләп, бәпәйҙе таҙалап һалғас, әлеге әбейҙе әпкилеп ташлаған. Өс көндән һуң әбейҙе тағы алырға килгән. Был юлы балаларына исем ҡуштырырға тип алып киткәндәр. Йоланы атҡарғас:

— Әбей, нимә алаһың? — тигәндәр.

— Һорамайым, үҙегеҙҙең белгәнеңде бир, — тигән әбей.

— Ярай, һиңә ошо суйын һандыҡты бирәбеҙ. Ҡайтып еткәнсе артыңа ҡарама.

Әбей ҡарамаған. Дыу бәрейе килтереп ҡуйған быны. Ҡайтҡас һандыҡты асып ҡараһалар, эсе тулы алтын икән. Алтын үҙ ғүмеренә еткән. Дыу бәрейе менән Тимербай осрашҡан урынды Тимербай түше тип алып киткәндәр. Быны миңә әсәйем һөйләр булды.

## 56. ҠУРЫУҘЫ

Ҡурыуҙы — Байназар[1] ауылы тәңгәлендәге бейек тау исеме. Борон Ҡыпсаҡ ырыуы Бабсаҡ бей менән Бөрйән ырыуы Ҡарагөлөмбәт бей[2] яу тоталар. Ҡарагөлөмбәт бей Бабсаҡ бейҙе үлтерә, ҡыпсаҡтарҙы ҡыра. Бабсаҡтан ҡалған ул, ир ҡорона кергәс, атаһының ҡонон ала: килеп, Ҡарагөлөмбәтте үлтерә лә, тау башына мендереп, ҡаҙанға һалып ҡурған, имеш, тип һөйләйҙәр.

Ана шул ваҡиғанан һуң тауҙы Ҡурыуҙы тип атағандар. Элек ҡыпсаҡтар йыл һайын йәй көнө шунда сығып байрам иткәндәр, ырыу батырҙарын иҫкә алып, йыйын үткәргәндәр.

## 57. ҠАРАҺЫЙЫР ЯЛАНЫ

Бөрйән ырыуы батыры Ҡарагөлөмбәт Ҡыпсаҡ ырыуы батыры Бабсаҡ бейҙе үлтерә, илен талап, халҡын ҡырып, малын ҡыуып алып китә. Бабсаҡ бейҙән ҡалған Күсәкбей[1] исемле малай олатаһы Ураҙханға ҡайтып, ғәскәр йыйып, Ҡарагөлөмбәткә ҡаршы яуға сыға. Ул унын ғәскәрен ҡыйратып, үҙен Мәсем тауында бер яланда тотоп ала ла, ҡара һыйырға атландырып, үҙ иленә мәсхәрәләп алып ҡайтып китә. Ҡарагөлөмбәтте ҡара һыйырға атландырған яланды Ҡараһыйыр яланы тип атағандар. Ҡайтышлай туҡтап ял итеп киткән урындарға ла «ҡараһыйыр» атамаһы төшөп ҡалған. Ҡараһыйыр яланы Иҫке Усман[2] ауылы ерендә лә бар. Яңы Собханғол[3] менән Тимер[4] ауылдары араһында бер түбәне лә Ҡараһыйыр түбәһе тип йөрөтәләр.

## 58. АҠҺЫЙЫР ТАШЫ

«Атайсал» тигән бөрйән хикәйәтен ишеткәнегеҙ бармы? Бабсаҡ батырҙы үлтергән Ҡарағөлөмбәттән атаһының ҡоноп алған Күсәкбей хаҡында ул хикәйәт. Әнә шул хаҡта һөйләгәндә, Аҡһыйыр менән Ҡараһыйырҙы ла телгә алалар. Имеш, Күсәкбей атаһының үсен ҡайтарғас, уны башта аҡ һыйыр арҡаһына атландырып мәсхәрә итә. Ошо ер Аҡһыйыр тип аталып ҡала. Ә ҡара һыйырға атландырып, Ағиҙел кисеүен аша сыҡҡан ер Ҡараһыйыр тип йөрөтөлә. Ағиҙел кисеүендәге был Ҡараһыйыр ташы бик хәтәр таш, һалын уға һуғылһа, яҡшылыҡ көтмә — тарала ла китә. Шүлгәнташ мәмерйәһенән саҡ-саҡ түбәндәрәк ятҡан был мөгөҙлө аҡ таш ысынлап та һыйырға оҡшаған. Шуға күрә рустар ҙа уны Коровушка (Һыйырҡай) тип атап йөрөтә.

## 59. БЕЙ КИСЕҮЕ

Бей кисеүе — Байназар ауылынан түбәндәге кисеү. Элек бөрйән менән ҡыпсаҡтар яу тотҡандар. Шул яуҙа ҡыпсаҡ батыры Күсәк бей, бөрйәндәрҙе ҡыйратып, ырыу башы Ҡарағөлөмбәтте ҡулға алған да, мыҫҡыл йөҙөнән ҡара танаға мендереп, Байназарға ошо кисеү аша алып ҡайтҡан. Шунан бирле кисеүҙе Бейкисеүе тип йөрөтә башлағандар.

## 60. ҠАНЪЯТҠАН БАҪЫУЫ

Ҡасандыр Торатау[1] башында монгол ханы торған. Ергә ҡояш төшмәгән: уны хан сатыры ышыҡлаған. Халыҡ күп ыҙа сиккән, күп хәсрәт күргән, аҙаҡ килеп, түҙә алмай — яуға күтәрелгән.

Шул тирәләге баҫыуҙа булған ике яу бик ҡаты барған, үлән ҡыҙарған. Бына шунан һуң был баҫыуҙы Ҡанъятҡан баҫыуы тип йөрөтәләр.

## 61. ҠАНЛЫҠҮЛ

Ҡаракүл[1] тигән ерҙә ҡыҙ хан, Аҡташта[2] ир хан[3] йәшәгән була. Улар үҙ-ара һуғышалар. Был ике хан араһындағы һуғыш шундай ҡаты булған, хатта аҡҡан ҡан эркелеп, күлгә ағып төшә башлаған. Шул саҡ күл, ҡандан ерәнеп, өс көн, өс төн үкереп ята ла, сыҙамай, бөтөн балыҡтары менән осоп китеп, Аҡкүлгә[4] барып төшә. Күл төбөндә ләм генә ятып ҡалған, ти.

Күлдең ҡайҙа булғанын белмәҫтәр ине, ҡорола балыҡ, тәлмәрйен ятҡанын күреп ҡалғандар. Шулар буйынса юллап барһалар, Аҡкүлгә килеп сыҡҡандар.

Осоп киткән күлдең урынын Ҡанлыкүл тип йөрөтә башлағандар. Иҫке Ырныҡшы[5] менән яңыһы араһындағы яр шул күлдән тороп ҡалған ул[6].

## 62. ӘҮЛИӘ ТАУЫ

Бик борон булған был хәл. Дим, Өршәк буйының данлыҡлы бер батыры булған. Ул Мең ырыуҙары ғәскәре башында торған, яу ҡайтарып йөрөгән. Батыр иҫән саҡта Мең ырыуҙары тыныс йәшәгәндәр. Бер ваҡыт көнтыуыштан Урал аша артылып, бик ҙур яу килгән. Ул яу юлында осраған халыҡтарҙы, ырыуҙарҙы иҙеп-тапап, юҡ итеп, *байлығын талап килә икән*. Мең батыры: «Яйыҡты үткән дошман Димде үтә алмаҫ, Димде үткән — Яйыҡты үтә алмаҫ!» — тип әйткән, ти. Батыр, ғәскәр туплап, яуға ҡаршы сыҡҡан. Һуғыш бик ҡаты барған. Тау-яландар мәйет менән тулған. Дошман яуы сыҙамаған, төшлөк яҡҡа боролоп ҡасҡан. Ошо һуғышта данлыҡлы Мең батыры ҡаты яраланған була. Шул яранан ул үлеп ҡала. Батырҙы хөрмәт итеп, Өршәктең уң ярындағы бейек, кәбән кеүек тау башына мендереп, таш менән бурап күмәләр. Дошман ҡалдырып ҡасҡан малды бөлөп ҡалған ырыуҙарға ҡайтарып биргәндәр. Мең батыры күмелгән тау изге тауға әүерелгән. Аҙаҡ батырҙың үҙен әүлиә тип, ә ул ҡуйылған тауҙы Әүлиә тауы тип атай башлағандар. Әүлиә тауы башында ла, һуғыш үткән ошо ауыл тирә-йүнендә лә әле булһа ла баҡыр уҡ башаҡтары, һөңгөләр, ҡылыстар табылып тора. Ташлы ерендә лә ҡалҡыу урынды ҡаҙып, бик күп баҡыр ҡорамалдар таптылар. Күмергә эшләнгән бүрәнәләре лә бар ине [1].

## 63. АҘАН ТАШЫ

Аҡауаз [1] ауылына яҡын Ағиҙелдең һул ярында бик матур ҡая тау бар. Уны *Аҙан ташы* тип йөрөтәләр. Аҙан ташының тарихы шунан ғибәрәт: борон башҡорттарҙы, һун төрөктәреме шул, монголдармы шул, бик ҙур яу баҫҡан. Башҡорттар илен һаҡлап бик ҡаты һуғышһалар ҙа, дошман көсө күп булғанлыҡтан, еңелеүгә осрағандар. Яуҙа тарҡалған халыҡ урман эсенә, тау араларына боҫҡан. Бөрйән ырыуынан булған бер уҡымышлы батыр ҙа ошо тирәлә боҫоп йөрөгән икән. Ул, иҫән ҡалған халыҡты йыйып, яу ҡайтармаҡ булған. Был батыр бейек ҡая ташҡа менә лә иртә менән аҙан әйтә икән. Иртәнге тауыш алыҫҡа китеүсән, уның тауышын ишетеп, *ҡасҡан-боҫҡан халыҡ йыйыла башлаған*. Аҙан әйтеүсе батыр халыҡты ойоштороп, ғәскәр төҙөп, Башҡортостандың һәр тарафына сапҡын ебәреп, ҡуҙғалыш башларға өндәгән, ти. Бер ҡыш үткәндән һуң, башҡорттар көслө яуҙы ҡыйратып, илдән ҡыуып сығарғандар. Шунан бирле батыр аҙан әйткән тауҙы Аҙан ташы тип атап алып киткәндәр [2].

## 64. ҠАЛАТАУ

Оло Шаҙы ауылының осонда, Бөрө яҡлап, Ҡалатау тигән урын бар. Уның башында элек ике ҡарағай булған. Ҡала (Бөрө) күренгәнгә «Ҡалатау» [1] тигәндәр. Ҡалатауҙы монгол яуы заманында күҙәтеү урыны булған, тип һөйләйҙәр ине.

Ҡалатау — өйҙөртөлгән тау. Уны өйҙөрткәндә, түбәтәй менән балсыҡ килтергәндәр[2] икән, тип һөйләй торғайны атайым (ул 1883 йылғы ине).

Ҡалатауҙа яуҙар булған. Шуға ла окоп урындары күренә. Окоп урындары «Сәғетдин соҡоро»нда ла бар (Ҡалатауҙан уң яҡта бер-ике саҡрым алыҫлыҡта).

Хәҙерге ваҡытта Ҡалатауҙа 1941—1945 йылдарҙағы Ватан һуғышы ҡорбандарына ҡуйылған таҡтаташ бар. Тау — ҡорбандарҙы иҫкә алыу урыны.

## 65. ҮЛЕКЛЕКҮЛ

Сапай ауылынан өс саҡрым ерҙә Үлекле тип аталған күл бар. Борон ошо тирәләге башҡорттар еренә баҫҡынсылар килә. Бик ҡаты һуғыш була. Һәр ике яҡтан күп халыҡ ҡырыла. Яу ҡайтарылғас, иҫән ҡалғандар үлеп ҡалғандарҙы ерләп, таш ҡуйып китәләр. Ошо күмәкләп халыҡ ҡырылған урынды Үлеклекүл тип йөрөтә башлағандар.

## 66. ТЕЛӘҮ ҮҘӘГЕ

Элек бындағы башҡорт ырыуҙары менән ҡаҙаҡ ырыуҙары араһында бәрелеш булып торған. Шулай бер саҡ Теләү ырыуының батыры үҙенең бер иптәше менән ҡаҙаҡтарҙы көтөп ята икән. Ҡаҙаҡтар ҡаршы тауға килеп күренгәс, ҡараһа, алда килгән батыры тәненә селтәрле кейем кейгән, имеш.

— Бер атыуҙа ҡалайтып алырға инде быны? — тип, Теләү батыр иптәшенән кәңәш һораған.

— Уғындың башын ярып атып ҡара әле, — тигән тегеһе.

Теләү уғының башын саталап ярып тороп атып ебәргәс, ҡаҙаҡ батыры шунда уҡ атынан ҡолап төшкән.

— Ай-бай, истәктең батыры барҙыр бында, — тип, башлыҡтарын юғалтҡан ҡаҙаҡтар кире боролоп ҡасалар.

Шул Теләү батыр ятҡан үҙәкте хәҙер Теләү үҙәге тип йөрөтәләр[1].

## 67. ҠОЛКӨРӘШКӘН ТАУ

Данлыҡлы бер байҙың ҡыҙын кейәүгә биреп, тау итәгендә туй үткәреп яталар икән. Туй бик ҙур, һабантуй һымаҡ була: батырҙар, көрәшеп, көс һынашалар. Ҡаҙаҡ яғынан килгән бик ҡеүәтле бер батыр Темәстең бөтә батырҙарын да алып ташлағас, кантон башлығы оятынан ни эшләргә лә белмәй. Быны күреп торған бер ялсы ҡол[1], батырға ҡаршы сығып, көс һынашып ҡарарға рөхсәт һорай. Кантон башлығы бына көлөп кенә ҡуя. Шулай ҙа атҡа атланған ҡол, майҙан уртаһына сығып, ҡаҙаҡ батырын бер уратып

ҡарай ҙа, эйәренән һикереп төшөп, тегенең менән алыша ла башлай. Биленән ҡыҫып ала ла тегене күтәреп ергә ташлай. Кантон башлығы, шатлығы эсенә һыймай, ҡол янына йүгереп килә лә, яурынына елән ябып:

— Ҡыҙ һипеке, үҙеңде ирекке ебәрәм. Һин беҙҙең кантондың намыҫын һаҡлап ҡалдың, — ти.

Шул көндән алып был ерҙе Ҡолкөрәшкән тау тип йөрөтә башлайҙар.

## 68. ФАТИМА ТУҒАЙЫ

Имеш, Фатима тигән бер һылыу ҡыҙ булған. Йәштән етем ҡалып, кеше ҡулында әрһеҙләшеп үҫкән ул. Шул тирәләге башҡорт байының малын иртә яҙҙан ҡара көҙгә тиклем яңғыҙ үҙе көтөр булған. Батыр ҡыҙға малды һаҡлап бүреләр менән дә, ҡыҙ намыҫын һаҡлап, нәфселе бай малайҙары менән дә күп алышырға тура килгән.

Бер мәл көтөүгә сит ырыуҙан баҫҡынсылар килә. Улар көтөүҙе лә, һылыу ҡыҙҙы ла үҙҙәре менән алып китергә булалар. Фатима суҡмар менән ҡоралланып, алышҡа сыға. Алыш ҡаты була, саң-туҙан ҡалҡа, ер һелкенеп тора. Батыр ҡыҙҙың хәле бөтә башлай. Шулай ҙа үлгәнсе бирелмәй һуғыша. Яуыз дошмандар Фатиманы һалма кеүек тураҡлап, көтөүҙе эйҙәй башлайҙар. Ярҙамға һуңлап килгән егеттәр ҡыҙҙы үҙе һәләк булған тау итәгенә хөрмәтләп ерләйҙәр. Шунан алып исемһеҙ тау Фатима тауы тип йөрөтөлә башлай. Уның аҫтындағы ҙур туғайҙы ла хәҙерге йәштәр Фатима туғайы [1] тип атай.

## 69. БАТМАҒОШ ТУҒАЙЫ

Йылайыр буйында йәйләүҙә хәлле генә бер ҡарт йәшәгән. Уның Фатима исемле бер генә ҡыҙы булған. Фатима матур ҙа, батыр ҙа икән. Улы булмағас, атаһы уны һыбай йөрөргә лә, уҡһаҙаҡтан атырға ла өйрәткән.

Ҡарттың берҙән-бер көн өйөр айғыры һәм тиҫтәгә яҡын бейәһе юғала. Ҡарт эштең нимәлә икәнен һиҙенә. Тик юғалған мал артынан сығырға дәрт итә алмай. Атаһының хәлен аңлаған Фатима аттар артынан үҙе китергә була. Ҡарт эстән шомланһа ла, ризалаша, ҡыҙына кәңәш бирә: «Ҡараҡтар барыбер быңдай эҫе көндә күп юл үтә алмаҫ, берәй ерҙә һыу буйына туҡтарҙар. Атыңды арытма, барыбер ҡыуып етерһең. Барып тапҡас, атыңды урман эсендәрәк ҡалдыр ҙа, тәүҙә күҙәт. Ҡараҡтар йоҡоға киткәс, ипләп кенә барып, бәйҙәрен ҡырҡып сыҡ та айғырға атланып сап. Ә йылҡы малы эйәһен белә ул», — ти. Фатима көн төнгә ауышып, ҡараңғы төшкәс, үҙәк буйлап аттарға яҡынлаша. Ҡалғанын атаһы өйрәткәнсә эшләй.

Уны атаһы дүрт күҙ менән күтәп торған. Ат тояғы тауышы ишетелгәс кенә, күңеле тынысланған. Ул ҡыҙының йылғырлығына ҡыуанып: «Һай, Фатима, ҡошһоң да инде», — тигән.

Шунан бирле был туғайҙы Батмағош (Фатимағош) туғайы тип атағандар.

## 70. ТОЛПАРБАҪҠАН ТАШ

Ҡужай[1] ауылы янында Уй йылғаһы буйындағы бер ташта кәҙимге бер даға эҙе бар.

Тәкәғашҡа тигән батыр булған элек. Ул шул тиклем көслө, ғәйрәтле була: уҡ-йәйәһен күтәрергә башҡаларҙың көсө етмәгән.

Бер заман ҡаҙаҡтар менән алыш-һуғыш ваҡытында, Тәкәғашҡа ҡамауҙа ҡала. Бының толпары була. Тәкәғашҡа шул толпарына менә лә саба, артынан саң-туҙан ғына тороп ҡала. Ҡаҙаҡтар быны ҡыуа төшәләр. Тәкәғашҡа, Уй йылғаһына килеп еткәс, толпарына һуғып ебәрә. Шул саҡ толпар һикереп йылғаның икенсе яғындағы ташҡа килеп төшә. Ташта толпарҙың тояҡ урыны уйылып тороп ҡала. Был таш һаман да Толпарбаҫҡан таш тип йөрөтөлә. Уның эргәһенән үткәндә кешеләр тәңкә һалып китәләр.

## 71. АҠСАТҮБӘ

Элегерәк Айбағыш тигән бер батыр йәшәгән. Ул тирә-яҡта дан тотҡан мәргән һунарсы булған. Бер саҡ шулай йәйләүҙә ятҡанда быға хәбәр килтерәләр:

— Бөтә йылҡы малын барымталап ҡыуып алып киттеләр.

Айбағыш тиҙ генә үҙ егеттәрен йыя һалып, баҫҡынсылар артынан барып етә лә бөтәһен дә һә тигәнсе ҡырып һала. Аҡса исемле батырҙары ғына тороп ҡала. Аҡса батыр Айбағыштың каршыһына килә лә:

— Донъяла миңә ҡаршы торорҙай башҡа батыр юҡ әле, — тип ҡупырая.

Айбағыш быға ҡаршы әйтә:

— Йә йылҡы малын ҡайтараһың, йә йәнеңде бирәһең!

Шул саҡ Аҡса батыр, һаҙағынан уғын һурып, Айбағышҡа атып та ебәрә. Ә Айбағыш үҙенә табан осҡан уҡты яҫҡып ала ла, алтыға ярып, алтыһын да кире ата. Атылған бере Аҡса батырҙың кендегенә барып ҡаҙала. Был шунда уҡ йән бирер, ергә ауа.

Айбағыш дошманы Аҡса батырҙы Үрге Яйыҡ менән Истамғол[1] ауылдары араһындағы түбәләскә мендереп ерләй ҙә йылҡыларын кире әйҙәп ҡайтып китә. Ана шул замандан бирле был тау Аҡсатүбә тип йөрөтөлә.

## 72. ДӨЙӨМБӘТ ТАУЫ

Борон заманда башҡорттар менән ҡалмыҡтар араһында ҡаты бәрелештәр булғылап торған. Бына шул замандарҙа башҡорттарҙың башлығы Дөйөмбәт Сабаҡ тирәһендәге[1] көслө бәрелеш ваҡытында бик ҡаты яраланған. Башҡорттар артыҡ ауыр хәлдә ятҡан иптәшен ташламай, бик оҙаҡ күтәреп килгәндәр. Башҡа сара ҡалмағас, ахыр сиктә бер йылҡыны һуйып, уның тиреһенә төрөп, һаҡлыҡ менән генә бер тау башына менеп алып, ҡалмыҡтарҙы шунан күҙәтеп, яу ҡайтарған булғандар. Шунан һуң ул тауҙы Дөйөмбәт тауы тип йөрөтөп алып киткәндәр, ти.

## 73. ЫРҒЫҘ

Хәсән ауылында Яҡуп исемле кешенең бер генә ҡыҙы булған. Атаһы уны яратҡан, ҡыҙының малайҙар кеүек батыр йөрәкле булып үҫеүен теләгән.

Яҡуп үҙе бик яҡшы һунарсы, мәргән атыусы була. Ҡыҙын да ул үҙе кеүек ҡоралландыра, һунарға алып йөрөй, бәйгеләргә ат сабышына ебәрә.

Ул заманда күрше ҡәбиләләр араһында урман, мал йөрөтөү урыны, һыу өсөн ыҙғыш-талаш, һуғыштар булып торған. Был тирә башҡорттары күбеһенсә көтөүлек өсөн һуғышҡандар.

Ошондай һуғыштарҙың береһендә былар ҙа аталы-ҡыҙлы икәү ауылдаштары менән бергә яуға сыға. Ҡыҙ был яуҙа күп батырлыҡтар күрһәткән. Йән аямай һуғышып йөрөгәнендә, уның арҡаһына дошман уғы килеп ҡаҙала. Ҡыҙ һаман алға саба, һаман һуғыша, тамам хәле бөтә бынын, күҙ алды ҡараңғыланып китә. Әйләнеп ҡараһа, тирә-яғында бер кеше ҡалмаған. Батыр ҡыҙ эйәренә йығыла, ә һөйгән аты уны илепә алып ҡайта. Ҡыҙ үлә, аты хәлдән тая. Туҡтай. Ҡыҙ ҡолап төшә. Тоғро аты уны ташлап китмәй, шул тирәләге һаҙ үләндәрен ҡырып ашай-ашай ҙа, хужаһын торорға өндәп, уның янында ерҙе соҡой, сапсына икән. Шул саҡ тояҡ эҙенән һыу килеп сыҡҡан. Ат тояғы урынынан сыҡҡан һыу һалҡын шишмә булып, түбәнгә табан ер ярып ағып киткән[1].

Ҡыҙҙы сикһеҙ хөрмәтләп, шул урында ерләгәндәр. Уны: «Ир-ҡыҙ ине был!» — тип маҡтағандар. «Ир-ҡыҙ» ҡушаматы шунан ҡалған. Тора-бара шишмәне лә «Ир-ҡыҙ» һыуы тип йөрөтә башлағандар.

Йылдар үткән, Ир-ҡыҙ тураһында иҫтәлек онотолмаған. Ир-ҡыҙ йылғаһы ла, исемен әҙерәк кенә үҙгәртеп, Ырғыҙға әүерелгән.

Халыҡ үҙенең батыр Ир-ҡыҙын да, тулы һыулы матур Ырғыҙын да күңелендә һаҡлай.

# 74. ЫРҒЫҘ

*(вариант)*

Борон-борон замандарҙа Иҙел һыуы менән Яйыҡ һыуы араһында ҡалмыҡ ырыуы күсенеп йөрөгән. Был ырыуҙың башында хан торған. Бер саҡ ул шулай күсенеп йөрөй торғас, башҡорт йәйләүҙәре ятҡан Урал типһенендәге Урта һырт тәңгәленә хәтле килеп еткән.

Хандың Айстан тигән бик һылыу ҡыҙы була. Улдары булмай. Айстан бала сағынан уҡ төрлө ҡыйынлыҡтарға сыҙам, яу-сапҡындарға күнеккән бала булып үҫә. Бөтә кешене таң ҡалдырып, егеттәрҙең йөрәген яндырып, буйға үҫеп еткәс, атаһы уны кейәүгә бирергә була. Тик көтөлмәгән бәлә килеп сыға: кем генә һоратмаһын, ул бер кемгә лә ризалыҡ бирмәй, береһен дә ишһенмәй.

Хан быға бик ҡайғыра башлай. Айстан унан дүрт тарафҡа ла сапҡындар ебәртеп, бөтә батырҙарҙы саҡыртып, ҙур йыйын үткәреүен һорай.

— Кем дә кем мине еңә ала, шуныҡы булырмын, — ти.

Күп тә үтмәй, тирә-яҡтарҙан йыйынға йыйылалар. Ҡалмыҡ батырҙары ла, башҡорт батырҙары ла, нуғай батырҙары ла килә.

Кәрәлек йылғаһының Ырғыҙға ҡойған ерендә, бейек ҡаштаҡ башында, бай тирмәләр, иркен көймәләр, ебәк сатырҙар теҙелеп китә. Икһеҙ-сикһеҙ халыҡ йыйыла.

Ҡыҙ көҫәгән егеттәр йүгеректәрен сабыштыралар, аттан яҫҡышалар, уҡ атышалар, көрәшәләр. Нисек тә ҡыҙҙың күңелен яулап алырға тырышалар. Ә ҡыҙ уларға ҡарап та бирмәй, үҙ тирмәһендәге келәм өҫтөндә, муйынсаларын бөтөргөләп, бойоғоп тик ултыра икән.

Ә тирә-яҡ шау-гөр килә. Дала киңлегендә Ырғыҙ, Кәрәлек һыуҙары баш алған боронғо Урта һырт тауҙары суҡайып тора. Ә Айстан һаман моңайып тик ултыра. Тау итәгендәге тирмәһенән дә сыҡмай...

Ваҡыт шулай үтә тора. Ҡыҙ көҫәгән егеттәр бер-береһенән еңелеп, майҙандан сыға бара. Ахырҙа майҙан уртаһында өс батыр ғына тороп ҡала: береһе — ҡалмыҡ батыры, икенсеһе — башҡорт батыры, өсөнсөһө — нуғай батыры. Бәйгене ҡалмыҡ батыры башлап ебәрергә була.

Хандың йүгән дә теймәгән бер өйөр ҡырағай аттарын ҡыуып килтерәләр ҙә:

— Йәнегеҙ теләгәнен һайлап менегеҙ, — тиҙәр.

Ҡалмыҡ батыры менән Айстан өйөрҙән берәр йүгерек ҡороҡлап алалар ҙа, нуҡталап-эйәрләп, аттарына һикерешеп мәнәләр. Икеһенең дә аттары баҫҡан ерҙәрендә сыҙап та тора алмай, әле сапсынып, әле үрә ҡарғып, ажарҙарын сәсеп тора, ти. Һырттарындағы әлеге батырҙарҙы эйәрҙәренән алып ташламаҡсы булып, өйөрмә һымаҡ, тыбырсынып-ажғырып йөрөйҙәр. Аты үрәпсеп һикереүенә ҡалмыҡ батыры түҙә алмай, атының башы аша ҡылған-

лыҡҡа ҡаҙалып барып төшә. Ә Айстандың аты тыбырсынып йөрөй-йөрөй ҙә ҡапыл, уҡтай атылып, елеп сығып китә.

Икенсе көндө майҙанға башҡорт батыры сыға. Ул көндө бәйге шарты шулай була: кем дә кем сабып барған ыңғайға атҡан уғын мәрәйгә тейҙерә, шул еңеүсе һаналасаҡ. Башҡорт батыры дүрт уғын мәрәйҙең тап уртаһына тейҙерә, бишенсеһе саҡ ҡына яҙлығып, мәрәйҙән аша китә. Айстан биш уғының бишеһен дә сәпкә тейҙереп, тағы еңеүсе булып сыға.

Өсөнсө көн етә. Нуғай батыры, хур булырынан ҡурҡып, ҡамыш араһына боҫоп ҡала. Эҙләйҙәр-эҙләйҙәр — тапмайҙар тегене.

Бөтә кеше шау-гөр килеп байрам итә. Һаман Айстанды еңеүсе табылмай. Ҡыҙ көҫәп килгән егеттәр Айстанға асыу тотоп, үс алмаҡсы булалар.

Айстан ай яҡтыһында һыу төшөргә ярата икән. Шул төндө лә ул, ғәҙәте буйынса, Ырғыҙға килә. Ҡамыш араһында боҫоп ятҡан нуғай батыры төндә уның һыу төшкәнен күреп ҡалған була. Айстан аҡҡош һымаҡ йөҙөп-сумып, һыу сәсрәтеп туйғас, күкрәгенән һыуҙа килеш, айға ҡарап, йылмайып тора икән. Шул мәлде бер юлы өс урындан зыңлатып атылған өс уҡ ҡыҙҙың күкрәгенә килеп ҡаҙала. Айстан ҡысҡырып ебәрә лә, уҡтарҙы һурып алып, ярға ырғыта. Яраларынан ҡан аға, ҡыҙ һуштан яҙып йығыла.

Иртән, уҡтарынан танып, ҡан ҡойоусыларҙы тотоп килтерәләр ҙә, тәрән бер соҡорға ырғыталар. Бөтә ырыу аҡһаҡалдары йыйылып, кәңәш-төңәш итешәләр ҙә быларҙы Бохар иленә ҡоллоҡҡа һатып ебәрергә булалар. Был йәне ҡаралар шулай, нәҫел-ырыуҙарынан яҙып, сит илдә дөмөгөп бөтәләр. Ә хандың ир-ҡыҙы Айстанды бөтә өс ырыу кешеләре бергәләп бик ҙурлап, ҡәҙер-хөрмәт итеп ерләйҙәр. Ҡыҙҙы затлы кейемдәрен кейендереп, алтын беләҙектәре, ынйы муйынсалары, көмөш ҡылысы, баҡыр сулмәк һауыттары менән күмеп, ҡәбере өҫтөнә бейек таш ҡурған өйәләр. Ә икенсе ҡәбергә көмөш йүгәне, алтын эйәре менән бергә уның яратып менгән атын ерләп, был ҡәбер өҫтөнә лә оло бер таш ҡуялар.

Ҡайғыһынан ҡылған һымаҡ сәстәре ағарған хан, ҡыҙының ҡәбере менән һуңғы ҡабат хушлаша ла үҙ ырыуын был яҡтарҙан алыҫҡа, Иҙел менән Яйыҡ һыуы барып ҡойған диңгеҙ буйына, алып китә. Ә хан ҡыҙы һәләк булған йылғаны шул замандарҙан бирле батыр Айстан хөрмәтенә Ир-ҡыҙ (Ырғыҙ) йылғаһы тип атап йөрөтәләр [1].

## 75. ҠАЛМАҠ ЯТҠАН ЯЛАНЫ

Беҙҙең Йылайыр яҡтарында элек ҡалмаҡтар ҙа йәшәгән. Улар менән башҡорттар араһында татыулыҡ булмаған. Бер алышта ҡалмаҡтар еңеләләр ҙә ҡасыр алдынан урманға ут төртәләр. Бик күп урман янған. Шул урман урындарында башҡаса ағас үҫмәгән. Халыҡ уны Ағасҡороған яланы тип атаған. Ҡалмаҡтарҙың йәшәгән урынын әле булһа Ҡалмаҡ ятҡан яланы тип йөрөтәләр.

## 76. ҠЫРҒЫҘ АЙЫРЫҺЫ

Ғәлиәкбәрҙең көньяғында бер ҡурған бар. Шул тирәлә борон ҡырғыҙҙар менән бөрйәндәр һуғышҡан, тиҙәр. Бер оло яуҙан һуң күп кенә дошман ҡырылған. Шул яуҙа үлгән баҫҡынсыларҙы ерләргә бөрйәндәр тупраҡ бирмәгән. Ҡырғыҙҙар тупраҡты мәрке менән дөйәләргә артмаҡлап, үҙҙәренең яғынан килтерергә мәжбүр булғандар. Әлеге тупраҡты ташый торғас, шул түң — ҡурған барлыҡҡа килгән. Хәҙер уны Ҡырғыҙ айырыһы тип йөрөтәләр.

## 77. АҠЫН (АҠҠАШҠА) ТАУЫ

Был хәл бик борон булған. Ҡайҙандыр башҡорт еренә сит яу килгән. Күп ҡан ҡойолған. Башҡорттар, баш һалмай, сая һуғышҡандар. Яу менән һуғыш Мәҡсүт ауылы эргәһендә лә ҡаты булған. Башҡорттар араһынан Аҡын тигән ғәйрәтле батыр сыҡҡан. Ул дошманды аяуһыҙ ҡырған. Мәҡсүт ауылы ерендә Аҡҡашҡа менән Һиңгергиҙә исемле ике тау бар. Башҡорттар Аҡҡашҡа тауынан, ә дошмандар Һиңгергиҙә тауынан ҡара-ҡаршы уҡ менән атҡандар. Шул атыш ваҡытында башҡорт батыры Аҡын һәләк булған. Башҡорттар дошманды тар-мар итеп, үҙ ерҙәренән ҡыуып ебәргәндәр. Аҡын батырҙы шул тау башына хөрмәтләп күмгәндәр. Шунан бирле ул тауҙы Аҡын тауы тип тә, Аҡҡашҡа (Изге батыр) тауы тип тә йөрөтәләр.

## 78. ҠАРАСЙЫЛҒА

Яу ҡайтарып йөрөгән бер башҡорт батырының ҡатыны имсәк балаһы менән дошман ҡулына эләккән. Дошмандар уны уртаға ултыртып, түңәрәк булып йоҡларға ятҡандар. Улар йоҡоға талғас, ҡатын сабыйын ала ла ҡаса. Быны һиҙеп, арттарынан ҡыуа төшәләр. Ҡатын ауылға етә алмай хәлдән тайғас, балаһын йылға буйына ҡалдыра ла үҙе Тәхей тауына ҡарай юл тота. Бер ваҡыт ат кешнәгән һәм эйәр шыңғырлаған тауыш ишетелә. Теге ҡатын: «Ирем менгән ат кешнәүе түгелме һуң? Ни булһа ла булыр», — ти ҙә һыбайлыға тауыш бирә. Һыбайлы уның ире булып сыға.

— Ҡайҙа Ҡарасәс? — тип һорай ире.

— Уны йылға буйында ҡалдырып киттем.

Барып ҡараһалар, бала урынында булмай. Имгәкләй ҙә белмәгән бала үҙ аяғы менән ер буйы ер киткән, ти. Шатлыҡтың сиге булмай.

Шунан был йылғаны Ҡарасәс йылғаһын ҡыҫҡартып Ҡарасйылға тип йөрөтәләр.

## 79. ЯҠТЫКҮЛ

Борон Яҡтыкүлгә ҡараған тау биттәре тас ҡарағай урман булған.

Башҡорттар рус дәүләтенә ҡушылғас, бер ваҡыт күлдең ситенә генә рус баярҙары йорт һалдыра башлаған. Рөхсәтһеҙ-ниһеҙ ҡыланыуҙарына был тирәлә йәшәгән башҡорттарҙың асыуы килгән.

Берҙән-бер көндө башҡорттар: «Былай эстән генә янып йөрөүҙән ни файҙа, ер китә бит», — тип йыйылышып кәңәшләшкәндәр ҙә тегеләрҙе фиран туҙҙырғандар. Ҡасҡаны ҡасып ҡотолған. Ҡасып өлгөрә алмағандарын үлтереп бөтәләр ҙә өйҙәренә ут төртәләр. Янғын бик көслө була. Тау буйындағы ҡарағастар ҙа янып бөтәләр. Тауҙың түше ҡап-ҡара булып ҡала.

Аҙаҡтан күлдә балыҡсылап йөрөүселәр яр ситендә бер мунсаның ғына имен ҡалыуын күрәләр. Урыҫтарҙан күрмәксе, уны бания тип йөрөткәндәр. Күлдең исеме лә Банное озеро булып киткән.

Күлдең иҫке исеме лә бар. Уны элек Мауыҙлы күле тип йөрөткәндәр. Ни өсөн шулай аталған, берәү ҙә әйтә алмаған, Яҡтыкүл исеме һуңғы осорҙа ғына бирелгән [1].

## 80. МАУЫҘЛЫ КҮЛЕ

Яҡтыкүлде элек халыҡ Мауыҙлы күл тип йөрөтә ине. Ул күл борон ҡара урман менән уратылған булған. Күлдең эйәһе — ялмауыҙы булған. Был яман мәскәй күлде өйрөлтөп йөрөткән. Күлгә януар, ҡош-ҡорт килергә ҡурҡҡан. Һыу эсергә килгән береһен асыулы сағында йотоп алып торған. Хатта күл өҫләп һауанан осоп барған ҡошто ла тартып алған, тиҙәр. Шуға эйәле был күлде Мауыҙлы күл тип атағандар.

Урыҫтар Банное озеро тиҙәр. Бында элек ниндәйҙер яу ваҡытында бер урыҫ ғәскәре туҡталып, мунса һалып, йыуынып киткән. Мунсаһы тороп ҡалған. Шунан урыҫтар Банное озеро тип исем ҡушҡандар.

Хәҙер яңыса исем ҡуштылар: Яҡтыкүл тиҙәр. Унынһын күл һыуының тоноҡ булыуынан әйтәләрҙер инде. Күл һыуы бик тоноҡ, төбө үтә күренеп ята. Көндөҙ төбө лә яп-яҡты.

## 81. БИЛЛЕҒЫЛЫС

Биллеғылыстың исемен боронғо бер бейгә лә бәйләйҙәр. Уныһының дөрөҫлөгөнә ышанырға, бәлки, мөмкиндер. Бей Мораҙым аҡһаҡалдың [1] мең башы булған, тиҙәр бит. Бик мөмкин. Әммә мин үҙем Биллеғылысты «Белый ключ» тип атауға ҡаршымын: һүҙ оҡшағанға ғына әйтәләр булыр быныһын. Биллеғылыс хаҡында тағы бер легенда бар. Ҡарттар борон уны ҡылысҡа оҡшат-

ҡан. Ысынлап та, ҡарап торһаң, ул ҡылыс һымаҡ бөгөлөп ята, Өршәккә[2] табан. Сыҡҡан яғында уның биле бар — Ер күпер тип атала. Хикмәт бына шул Ер күпергә бәйле. Имеш, Бүгәс яуы ваҡытында, тип һөйләй торғайны ҡарттар, Салауатҡа йылға аша сығырға кәрәк була. Һыу ташҡан саҡ, тау йылғаһы тәгәрәп аға, таштарҙы онтай икән. Салауат ярға килеп етеүе була, йылға ерҙе өңөп инә лә, күпер яһап, икенсе яҡтан килеп сыға. Салауат, рәхмәт әйтеп, йылғаны сығып китә. Бына шулай уның бер тарихы.

## 82. ДҮНӘНҺУЙҒАН ТАУ

Ҡасандыр Власов тигән бер землемер Белорет заводына Дүнәнһуйған тау итәктәренән урман межалап алырға килгән.

Был шулай, ҡамсыһын һелтәп, һыбай йөрөй икән. Ҡамсыһын ҡайҙа һелтәһә, шунан межа ярып сығалар бының кешеләре. Бергә эйәреп йөрөгән башҡорттар, бының ҡамсыһының бик күп һелтәнгәнен күреп: «Һаман былай һелтәнеп йөрөһә, беҙ үҙебеҙ урманһыҙ, тауһыҙ ҡалабыҙ ҙаһа!» — тип баштарын сайҡаша башлағандар. «Инде был ҡамсыға нисек итеп ял бирергә», — тип уйлағандар.

Шул саҡ Мулкамал тигән бер ҡарт дүрт ҡышлар айғырын һуйып, землемерҙы ғарҡ иткәнсе һыйларға булған. «Ашап өйрәнмәгән йылҡы итенән эсе китеп ятһа, бик һелтәнеп йөрөй алмаҫ», — тигәндәрҙер инде. Шулай итеп, теге Власов, ысынлап та, тауҙың төшлөк яғы менән көнбайыш яғын межалай алмайынса, ҡайтып киткән. Аҫаба башҡорттарҙың урман-көтөүлектәре үҙҙәренә тороп ҡалған.

Бына шуға күрә лә хәҙер был тауҙы Дүнәнһуйған тау тип йөрөтәләр.

## 83. АНТОН ҠАЯҺЫ

Бынан бик күп йылдар элек ошо яҡтарға Антон тигән бер илгиҙәр килеп сыҡҡан. Берҙән-бер көн Ырғыҙлы[1] ауылынан алыҫ түгел тәрән упҡын соҡор эргәһенән үтеп барғанда бының фуражкаһы төшөп китә. Фуражкаһы артынан тәрән соҡорға төшөп китә лә был кире сыға алмай. Ер аҫтынан юл бар икән, шул юл менән бара ла бара. Бара торғас, Ағиҙел буйындағы ҡаяның таш ҡыуышына килеп сыға. Ҡыуышты Антон бик оҡшата, шунда тороп ҡала.

Был бейек ҡаяны халыҡ уның исеме менән Антон ҡаяһы тип йөрөтә башлаған. Антон үҙе Ҡотан ауылы кешеләренә ут, аҙыҡ өсөн килеп йөрөгән. Үтеп барыусы һалсыларға ҡая тишегенән икмәк, сабата үреп ташлар булған. Яҡын-тирә ауыл башҡорттары менән ул дуҫ йәшәгән. Берәү ҙә уны рәнйетмәгән. Антондың ҡая ҡыуышына инә торған бер нисә юлы булған, тик уны әлегә тиклем бер кем дә белгәне юҡ. Кәрәк-яраҡты ул мәмерйәгә, арҡан ишеп,

тәгәрмәс сығыр менән күтәртеп мендергән. Антон ҡаяһына ҡаршы Һарыҡосҡан ҡаяһында уның аҙыҡ һаҡлай торған мәмерйәһе булған. Мәмерйәлә тоҙланған, ҡаҡланған ите, балығы, оно-моно һаҡланған. Антон үҙе ҡая ҡыуышында байтаҡ йәшәгәндән һуң ҡайҙалыр китеп юғалған [1].

## 84. АНТОН ҠАЯҺЫ

*(вариант)*

Бөгәсәү ғәскәрҙәре еңелгәс, был яҡтарға Антон тигән бер казак ҡасып килеп сыҡҡан, уны эҙәрләйҙәр икән. Үҙе ҡаты яралы, ти, был...

Бер малай күреп ала ла уны ата-бабаларға ғына билдәле бер тау башындағы мәмерйәгә алып килә. Антон шунда тороп ҡала, был малай уға аҙыҡ-түлек килтерә. Тауыш-тын баҫылғансы, оҙон ҡыш сыҡҡансы, Антон шул мәмерйәлә йәшәй. Йылы яҙ айы килә. Антон тамам һауығып, үҙенең бәләкәй тоғро дуҫын күтәреп ала ла әйтә:

— Рәхмәт һиңә, брат, мин тағы килермен әле.

Шул китеүҙән ул юғала. Ана шул Антон йәшәгән мәмерйәне халыҡ Антон ҡаяһы тип йөрөтә [1].

## 85. МИТРОФАН ТАШЫ

Элек һыу ташҡан саҡтарҙа Ағиҙел буйлап Әүжәндән алып Өфөгәсә ҡайыҡ-баркалар менән суйын ташый торған булғандар. Һәр ҡайыҡҡа алтмышар-етмешәр тонна суйын тейәгәндәр. Ҡайыҡтарҙың оҙонлоғо егерме биш-утыҙ сажинға еткән. Ҡайыҡтар ағып тау йылғаһы буйлап тыныс аҡһын өсөн, уларҙың ҡойроғона туҡһан-йөҙ егерме ботлоҡ суйын батырғыстар (лоттар) аҫып ҡуйыр булғандар. Юҡһа улар ҡая таштарға ҡаҡлығып, ҡыйралып бөтәр ине. Был батырғыстарҙан тыш, һәр ҡайыҡҡа һикһәнешәр ботлоҡ саталы ырғаҡ-якорь ҙа эленгән. Һәр ҡайыҡты утыҙлап кешенән торған эшселәр командаһы оҙата барған. Ҡайыҡтар каруаны менән бергә Ағиҙел буйлап аҙыҡ тейәлгән йөк кәмәләре лә ағып барған.

Боронораҡ Ағиҙел буйында был ҡайыҡтарҙы имен-аман йөрөтөүсе бик оҫта ҡойроҡсолар — лоцмандар ҙа күп булған. Улар араһында бигерәк тә Митрофан исемле лоцман дан ҡаҙанған, тиҙәр. Шуға күрә Әүжән заводының хужаһы Демидов уға бер нисә мәртәбә ҡиммәтле бүләктәр ҙә биргеләгән.

Бер саҡ шулай Митрофан, бик маҡтанып китеп, Ағиҙел буйлап теләһә ниндәй барканы ла төшөрә алам, тип бәхәс тотҡан икән. Заводсыға килгән дә:

— Миңә суйын тейәлгән ҡырҡ сажинлы барка бирегеҙ, еренә илтеп еткерәсәкмен, — тигән был.

Шулай итеп, Әүжән-Петровск заводында ҡырҡ сажинлыҡ ҙур ҡайыҡ эшләйҙәр. Митрофан менән килешеү төҙөшөп, хужа үҙенең ошондай шартын ҡуя.

— Әгәр ҙә еренә илтеп еткерә алһаң, ҙур бүләк алырһың, ә инде ҡулыңдан килмәһә, язаһын алырһың, — ти.

Суйын тейәлгән былдай ҙур барканы иҫән-һау илтеп еткерә алырмы-юҡмы, тип башҡа лоцмандар ҙа бәхәскә инә.

Тәүәккәлләй ҙә китә Митрофан. Яман Шаршы тигән иң хәтәр һуңғы ҡаяға хәтле ҡайығы имен генә барып етә.

«Бына бит, һуңғы ҡая ла артта ҡалып бара, тиҙҙән инде иркен дала китәсәк», — тип шатлығы эсенә һыймай Митрофандың. Шунда ул, скрипкаһын алып, яратҡан көйөн һыҙҙырып ебәрә. Бөтәһе лә йылмайып уға ҡарай. Ҡапыл шул саҡ ҡойроҡ йүнәлешен юғалтып, ҡаты ағым ҡайыҡты ситкә ҡайыра. Митрофан уны зырлап ятҡан өйөрмәнән сығарырға өлгөрмәй ҡала — ҡайыҡ, бар көсөнә ташҡа һуғылып, селпәрәмә килә. Шулай ҙа Митрофандың үҙе менән кешеләрен ҡотҡарып алып ҡалалар.

Тик асыуы сығырынан сыҡҡан хужа ярҙамсыһы менән завод приказчиктары Митрофанды тотоп алып, ошо ҡая башына мендерәләр ҙә туҡмап үлтерәләр. Ә ҡая башында ҡәбер ҡаҙырлыҡ та ер булмай. Митрофандың ҡанға батҡан кәүҙәһен таш менән ураты күмәләр.

Был таш өйөмө хәҙер һыу өҫтөнән ун биш-егерме метр бейеклеккә күтәрелеп, сурайып сығып тора. Шунан бирле был Яман Шаршы ташын Митрофан ташы [1] тип йөрөтәләр.

Ағиҙел буйлап һуңғы ҡайыҡ каруаны Әүжәндән түбәнгә 1923 йылда оҙатыла. Уларҙың алтыһы Муйнаҡташ [2] эргәһендә һәбеп ҡалып, ҡыш буйынса шунда ултыра. 1924 йылғы ҙур яҙғы ташҡынында, уларҙы күтәреп, Сыртлан [3] ауылына саҡлым ағыҙалар. Унда еткәс, суйынын бушатып, артабан ат менән ташыйҙар.

Революциянан һуң юлға кәртә булып ятҡан Митрофан ташын шартлаталар. Унан тик Яман Шаршыға уң яҡ ярҙан тоташып ятҡан ҡая менән ошо хикәйәт кенә тороп ҡала.

## 86. МАКСИМ ТӨБӨ

Максим төбө — Мораҙым ауылының түбәнендә Ағиҙелдең һул яғындағы һыуҙан сығып торған таш исеме. Элек, Октябрь революцияһына тиклем, Белорет, Әүжән, Үҙән заводтарынан тимер, сөгөн, ҡорос иретеп, ҙур-ҙур баржаларға тейәп яҙлы-көҙлө һыу ташыуҙа Ағиҙелдән Табынға ташыр булғандар. Байназар ауылының бер ҡарты гелән лоцман булып баржа ағыҙып йөрөгән. Уны урыҫтар Максим ҡушаматы менән атап йөрөткәндәр, ти. Бына ошо Максим үҙе менән бергә башҡорт егеттәрен дә алып йөрөр булған. Берҙән-бер көндө Максим башҡорт егеттәренә: «Урыҫ заводчиктарына, купецтарына күпме генә хеҙмәт итһәк тә, йүнле эш хаҡы бирмәйҙәр. Уларҙы байытып, бил бөгөп йөрөмәйек әле, ташлап китәйек!» — тигән. Мораҙым ауылын үткәс, һыуҙан сығып тор-

ған ташты күреп, бер урыҫ түрәһе: «Бейте направо!» — тип ҡыҫҡырған. Шул ваҡыт Максим башҡорттарға ҡарап: «Урыҫ байының направоһы бөтмәҫ, һулға һуғығыҙ», — тип әйткән, ти. Егеттәрҙең һулға һуғыуы булған — баржа таш өҫтөнә менеп селпәрәмә килеп ватылған, ти. Максим тиҙ генә баржа хужаһын һыуға осора ла егеттәргә әйтә: «Алығыҙ! Бөтә байлыҡ һеҙҙеке!»

Шул ваҡыттан һуң әлеге баржа һуғылып онталған ташты Максим төбө тип йөрөтөр булғандар. Ул Максим бик уҫал да, тәүәккәл дә кеше булған тип һөйләйҙәр.

## 87. УҠТАУ (УҠЛЫ ҠАЯ)

Бынан Бүгәсәү ғәскәрҙәре үткән. Башҡорттар Бүгәсәү яҡлы булған. Әбей батша һалдаттары ҡыҫырыҡлап килә башлағас, башҡорттар Еҙем һыуы[1] буйындағы бер ҡаяның мәмерйәһендә йыйылышып, туп яһағандар. Тупты имән ҡыуышынан яһағандар ҙа хәҙерге Мағаш тауынан[2]. Табын баярҙарына ҡарай атҡандар. Иң тәүҙә сиркәүҙәренең башын осорғандар. Табындағылар бирешмәгән. Еңелгәс, башҡорттар әлеге мәмерйә ҡаяға ҡайтып, оҙаҡ ҡына донъя көткәндәр.

Шул ҡаяны Уҡлы ҡая тип йөрөтәләр. Әле лә кешеләр ул мәмерйәнән уҡтар тапҡылайҙар.

## 88. ХӘЛИЛ ҠӘБЕРЛЕГЕ

Элек башҡорттар араһында ер-һыу өсөн ырыу-ара һуғыштар бик йыш булған. Бигерәк тә Бөрйән менән Ҡыпсаҡтар араһында бәрелеш күп булған. Ыҙғыштан халыҡ ыҙа сиккән, ни эшләргә белмәй аптырап бөткән. Шул саҡ Хәлил исемле бер ҡарт әмәлен тапҡан: Хәлил ҡарт Бөрйән менән Ҡарағай-Ҡыпсаҡ араһына килеп ултырған. Оло кешене мәшәҡәтләргә ике яҡтан да баҙнат итмәгәндәр. Үлер алдынан Хәлил ҡарт әйткән: «Мине зыяратҡа ҡуймағыҙ, Бөрйән менән Ҡарағай-Ҡыпсаҡ араһындағы сиккә ҡуйығыҙ. Ике ырыу араһында сикте тотоп килдем, үлгәс тә тотоп ятырмын», — тип халыҡҡа васыят әйтеп ҡалдырған.

Хәлил ҡарттың васыятын халыҡ үтәй. Шунан һуң ике ырыу араһында һуғыштар ҙа туҡтай, ырыуҙар дуҫ булып йәшәй башлай.

Хәлил ҡәберлеге ана шунан ҡалған ул.

## 89. ДАУЛЫ ҠЫУАҠ

Ун ике ауылдың ере Мырҙағолдан[1] Төрөмбәткә[2] тиклем ятҡан, бик күп булған. Ер татырлы, әселе булған. Шуға дөйәне күп аҫрағандар. Тик ер һаҙамыҡ, үлән бейек, ҡуйы булғас, дөйәләр бата торған булған. Шуға ер бүлешкән саҡта Дөйәбатҡан[3] ауы-

ны янында биш йөҙ дисәтинәле урманды һәр ауыл үҙенә әләктерергә тырышҡан. Нәҫел-ырыу, ҡан ҡәрҙәш талашҡас, донъя уңамы ни, ана, хәҙер исеме генә тороп ҡалған да әҙерәк ҡыуаҡлыҡ бар. Шунан аҙаҡ уны Даулы ҡыуаҡ тип йөрөтәләр. Меркет меңе[4] үҙенең данын ана шулай юғалтҡан инде ул. Ә бит элек ун ике ауыл меркет үҙ ерен үр менән уратып, сигенә баҫана ҡағып ҡуйҡан, бер туғандай йәшәгән, ти.

## 90. ЙӘҘРӘЛЕ ҺАҘ

Ҡыйғынан йыраҡ түгел Муллаҡыуаҡ тигән һаҙ бар. Уны Йәҙрәле һаҙ тип йөрөтәләр. Был Бүгәсәү яуы заманынан тороп ҡалған. Салауат батыр үҙенең дошмандарын ҡыуып килтереп, ошо Мулла ҡыуаҡ һаҙына батырған. Салауат ғәскәре уҡ-һаҙаҡ, балтаһәнәк, суҡмар менән һуғышҡан. Әбей батша ғәскәре туп-мылтыҡтары менән һаҙға батып ҡырылған. Йәҙрә күп сыҡҡанға уны Йәҙрәле һаҙ тигәндәр.

## 91. ҠЫҘҘАР КҮЛЕ

Был тирәлә, Ҡариҙелгә ҡойған Йүрүҙән буйында, Бүгәс менән Салауат яуы ваҡытында шундай бер хәл була.

Көндәрҙән бер көндө, Елдәк ҡәлғәһенән[1] ҡайыҡ менән үрләп, Әсит[2] тигән башҡорт ауылына әбей батша казактары килеп туҡтай. Ауыл буйлап өй беренсә таралышҡас, былар ашап-эсеп алалар. Араларында ҡыйышыраҡ тейәгәндәре лә була. Ныҡ ҡына ҡыҙып алған ике казак Көсәмбәт тигән бер ҡарттың өйөнә инеп, был бик һылыу ҡыҙына бәйләнә башлай. Ҡыҙҙар менән кәмәлә йөрөп килмәксе булалар. Көсәмбәт ҡарт уйға ҡала. Тик былар һаман ай-вайына ҡуймағас, ҡарт риза була.

— Ярай, тик мин әбейемде лә алып сығайым инде, — ти быларға.

— Әйҙә,әбейең менән үҙең дә серләшерһең, — тип көлөшә был иҫеректәр.

Көсәмбәт ҡарт, әбейе менән ҡыҙҙарын кәмәгә ултыртып, үҙе ишкәк төбөнән урын ала. Тик әлеге ике иҫерек кәмәгә һикерергә генә иткәндә, был тиҙ генә кәмәһен ярҙан этә һалып, бар көсөнә ишкәген ишә башлай. Тегеләр кәмә артынса шаптыр-шоптор һыуға барып төшә.

Шулай итеп, Көсәмбәт ҡарт өй эсе менән ҡасып ҡотола. Кәмә менән Йүрүҙән тамағына хәтле үрләгәс, аҙаҡ Йүрүҙән үренә уңға ҡайыралар. Ә Йүрүҙән үрендәге Ташауыл, Иҙелбай, Мәхмүт, Күсә ауылдарын уҙғас, Мырҙалар Арҡауылы[3] тигән бер башҡорт ауылы бар. Ауылдың һыртында ғына ҙур бер һаҙлы күл ята. Көсәмбәт ҡарт үҙенең әбейе, ҡыҙҙары менән ошо һаҙлы күл буйына барып етә лә, талҡамыш араһында ҡыуыш ҡороп, яу-дау баҫылғансы шунда ҡасып йәшәй. Ҡыҙҙар, яҡындағы тау битенә сығып,

еләк йыйып төшә, Ҡөҫәмбәт ҡарт һунарға йөрөй, мурҙа һала. Аҙаҡ яу-дау баҫылғас ҡына, бөтәһе лә үҙҙәренең Әситенә ҡайтып китәләр.

Бына шул замандан бирле был һаҙлы күлде Әсе һаҙы йә Ҡыҙҙар күле тип, ә күл эргәһендәге еләк йыйған тауҙы Ҡыҙҙар тауы тип йөрөтәләр. Шунда ғына Ҡөҫәмбәт тауы менән Ҡөҫәмбәт йылғаһы ла бар [4].

## 92. АР ТАШЫ

Беҙҙән алыҫ түгел бер ҡая бар. Уны Ар ташы тип тә, Бүгәс ташы тип тә йөрөтәләр. Имеш, был таш аҫтында Бүгәс батша ҡоралдарын йәшергән. Ә ҡоралдары бик күп булған, тиҙәр.

Борон Ағиҙел хәҙерге йырҙаһынан аҡмай, башҡа урындан ағып ятҡан. Ошо иҫке йырҙа буйлап китһәң, Ар ташына барып сығаһың. Элек был тәңгәлдән Ағиҙелдә бүрәнәләрҙән юнып эшләнгән ҙур-ҙур баржалар — ҡайыҡ-кәмәләр йөҙөп йөрөгән. Уларға тимер, күмер, руда тейәп ағыҙыр булғандар.

Бүгәсәү яуы ваҡытында уға ҡаршы Әбей батша генералы Арский тигән берәү ғәскәре менән килеп, ошо Ағиҙел ярында бик ҡаты һуғыш булған, тиҙәр. Арскийҙы үлтереп, ошо ҡая башынан Иҙелгә ырғытҡандар, имеш. Шуға уны Ар ташы тип тә йөрөтәләр [1].

## 93. ЙӘРКӘЙ ТАУЫ

Һүрәндән [1] түбән бер саҡрым самаһы ерҙә Йәркәй тауы тигән урын бар. Хөкүмәткә ҡаршы аяҡланған Йәркәй исемле бер ҡасҡынды ошо тауҙағы өй шикелле генә таш эсендә ятҡанда тотоп алғандар. Йәркәй үҙе Быҙаулыҡ [2] яғынан килгән кеше булған.

Хөкүмәт бик ауыр һалым һалған халыҡҡа. Һалым йыйыусыларҙы Йәркәйҙәр туҡмап ҡайтарған. Ғәскәр килгәндә, Йәркәй ырыуы менән ҡасып киткән. Иҙел, Ашҡаҙар тирәһенән Эйеккә килгәндәр. Йәркәйҙе йәшереү ниәтендә исемен Буранбай тип алыштырғандар. Шуға күрә уны Буранбай ҙа, Йәркәй ҙә тип йөрөтәләр.

## 94. ҠӨМӘС ТАУЫ

Башҡорттар араһында байҙарҙы күрә алмаусы бер егет булған. Уны бай халыҡтар Себер ебәргән. Егет, Себерҙән ҡасып, Урал буйында йөрөгән.

Байҙарҙың көтөүселәре бының ҡасып йөрөүен белгәндәр, берәүгә лә әйтмәгәндәр. Уға ашарға алып барып торғандар.

Бер көндө үстәш кешеһе егеттең ҡасып ятҡанын белеп ҡала ла аңдый башлай. Быныц аңдып йөрөүен һиҙеп, көтөүселәр күмәстәрен көлгә күмеп ҡалдырыр булғандар. Ҡөтөүселәр ҡайтып киткәс, егет теге күмәстәрҙе алып ашай икән.

Ана шул егет йәшенеп ятҡан тауға Күмәс тип исем биргәндәр. Хәҙер ул Ҡөмәс тауы тип атала.

## 95. БАРҘЫМСА ТАУЫ. ҒӘЛЕ БАРҘЫМСАҺЫ

Беҙҙең ауылдан 12 саҡрым алыҫлыҡта Барҙымса тигән тау бар. Ул тауға менсәң, борон халыҡ тирә-яғын ҡарар булған. Ни өсөн тигәндә, унан бик күп ерҙәр күренеп ята: Ҡуянтау, Бикеш, Түбә, Мерәҫ, Байым...

Ҡыҙҙар, егеттәр уның башына һыбай менеп, ағас баштарына тәңкә таға торған булғандар. Тәңкәләр әлеге һуғыштан һуң да һаҡлана торғайны (Бөйөк Ватан һуғышынан һуң).

Хәҙер ҙә Барҙымсаға барып күңел асыу, тәбиғәт менән һоҡланыу дауам итә. Барҙымса тауы эргәһендә Ғәле Барҙымсаһы тигән тәпәшерәк урын бар. Унда Ғәле исемле ярлы кеше байҙарҙан ҡасып йәшәгән. Ул беҙҙең ауылдыҡы булған. Ошонда йәшәп, ҡай саҡ байҙарҙың атын-мөлкәтен урлап, ярлыларға тараткан. Ул үҙе бик матур йыраусы ла булған. Тауышы бик моңло һәм көслө булғанға күрә, ул йырлағанда тауышы ауылга ишетелеп торған.

Ғәле бик көслө кеше булған. Ҡаниикульскийҙа ул Алексей тигән бай менән бәхәсләшкән. «Әгәр һин минең өйөр айғырын алып китә алһаң, мин һиңә уны үҙем бүләк итәм», — тигән бай. Алексей таш кәртәгә айғырҙы бикләгән, төрлө яҡтан һаҡсылар ҡуйған. Ғәле ҡараңғы төндә килгән дә, бер урындан бының ташын һүтеп алып, таҡта һалған. Шунан шул таҡтаға айғырҙы һалып, бер үҙе һөйрәп алып сығып киткән. Өс көн үткәндән һуң теге айғырҙы менеп Алексей байға килгән. Ни эшләһен — теге айғырын быға бирергә мәжбүр булған. Тик бай быға бик нык үс тота башлаған. Аҙаҡтан икеһе бергә эсеп ултырғанда, араҡыға быяла ҡушып эсергән. Ғәле үлгән.

## 96. АТАНҒОЛ ЙЫЛҒАҺЫ

*(Атанғол уяһы)*

Атанғол тигән кеше Ҡолбаҡты[1] ауылыныҡы була. Инәнән тыуған берҙән-бер бала була ул. Ата тәрбиәһе күрмәй. Ир еткәс, бурлыҡ менән булаша. Гел генә эргә тирәләге урыҫ байҙарының йылҡы малына ҡул һалған, башҡа бер кемгә лә зыян килтермәгән. Ауылдаштарының малына һис тә теймәгән. Үҙе бик уҡымышлы булған, бик шәп ҡурайсы ла булған.

Ауылға килеп-китеп йөрөһә лә, Атанғол күберәк ҡырҙа көн иткән. Ҡолбаҡтыға килеп, түрәләр эҙләү яһайҙар, тик уны тота алмайҙар икән. Шунан килеп ауыл кешеләрен ҡурҡыталар.

Халыҡты ҡыҫа башлағанда, Атанғол тау башындағы мәмерйәһендә ятҡан була. Ауылға килгәс, үҙен эҙләүҙәрен ишетә. «Ми-

не килеп, тағы эҙләһәләр, йылға башында булырмын. Инде лә мин тотолһам, йылғаға Атанғол исеме бирерһегеҙ», — ти был.

Түрәләр тағы килеп, бик нык асыуланғандар. Атанғолдоң әйткән һүҙен еткергәс, ауыл ололарын бығаулап алалар. Был хәлде күргәс, ауылдан бер нисә кеше йәшерен генә тегенең янына барып әйтәләр: «Шулай-шулай, Атанғол. Ауылға ҡауға төштө. Беҙҙе әрәм итәһеңме, үҙең ҡайтып бирeләһеңме?» — тиҙәр.

Был тороп, ул-был итә лә төн ҡараңғыһында ауылға ҡарай юл ала. Күренмәй генә ҡайтып керә был. Әсәһе әйтә:

— Атанғол! Атанғол балам! Килдеңме? Ҡауға һалдың бит ауылға, балам.

Атанғол быға ҡаршы әйтә:

— Әсәй, энә әпкилдем — тыйманың, кәзә урланым — тыйманың, ат урланым — тыйманың. Хәҙер килеп, ошондай көнгә төштөм, ауылыма ҡауға һалдым. Минең өсөн яфа күреүсе булмаһын. Үҙ ғәйебем үҙемдә, үҙем китәм Себергә.

Барып түрәләргә күренеүе була, тегенең ҡулына бығау һалып та ҡуялар. Иртәгеһен тегене оҙаталар. Санаһы эргәһенә ауыл халҡы йыйыла.

Атанғол шунда әйтә:

— Минең ҡул-аяҡтан бығауҙарҙы алығыҙ. Халыҡ минең өсөн ыҙаланмаһын тип, үҙем ҡайттым. Ҡасмам. Ысҡындырығыҙ, халыҡҡа әйтер һүҙем бар, — ти.

Халыҡ та һорағас, бының бығауҙарын ысҡындырып, санаға ташлағандар. Атанғол шунда ауылдаштарына әйтә:

— Риза булып ҡалығыҙ, ыҙалаттым инде һеҙҙе, — ти. Сананың кузлаһына ултырып, ҡынынан ҡурайын ала ла моңло итеп уйнап ебәрә. Уйнап бөтә лә тағы әйтә:

— Мәгеҙ, ҡурайымды алығыҙ, иҫтәлегем итеп тотоғоҙ. Үлгәнсе, әсәйемә барып тороғоҙ. Бына, әйтер һүҙемде әйттем, — ти.

Атанғол дилбегәне үҙе тотоп сығып китә ауылдан. Шул китеүҙән хәбәрһеҙ юғала. Уның ҡайҙа китеп, ҡайҙарҙа йөрөүен белгән, ишеткән булмай. Атанғол йәшәгән ерҙәргә Атанғол уяһы, Атанғол йылғаһы исеме бирелгән [2].

## 97. ҺАНДЫҠТАШ ЙӘКИ ИСЛАМҒОЛ ҠУРАЙ ТАРТҠАН ТАШ

Ағиҙелдең уң ярында, Муйнаҡташ менән Аҙанташ араһында, һандыҡҡа оҡшап торған ҙур бер ҡая таш бар.

Ҡасандыр бер байҙың Исламғол тигән ялсыһы булған, тиҙәр. Бай бының эшенән ниндәйҙер бер ғәйеп-ғилла табып, бик ныҡ асыуланған да уға ҡаты яза бирергә булған. Аҙаҡ йәнә уйлап-уйлап торған да:

— Бар, — тигән, — әгәр ҙә бынау Һандыҡташ башына менеп, ҡурай уйнай алһаң, ғәйебеңде юйырһың, ә инде хәлеңдән килмәһә, минән яҡшылыҡ көтмә, ете ҡат тиреңде тунармын, — тигән.

Ярлы көнөң ялыныс, ти бит — ни хәл итһен инде Исламғол?

Киткән был Һандыҡташ аҫтына. Әҙәм аяғы баҫмаған ҡая башына менеп, ҡурайын уйнап ебәргән. Бөтә халыҡ хайран ҡалып тыңлаған. Аҙаҡ был ҡая ташҡа уның исемен ҡушып, Исламғол ҡурай тартҡан таш тип йөрөтөр булғандар. Ә байҙың исемен дә оноттандар.

## 98. ТУЙТҮБӘ

Борон Шәгәр йылғаһы буйында бик бай хан йәшәгән, ти. Был хандың һылыу бер ҡыҙы булған. Хан ҡапҡаһынан яусылар өҙөлмәгән — ҡыҙҙы һоратып килеүселәр күп булған... Шуның өсөн хан ярыш-бәйге ойоштороған булған. Шундай шарт ҡуйған: кем дә кем ауыл янындағы түбәнең башына алда сабып менә, шул егет минен кейәүем була, тип иғлан иткән.

Бәйгегә бөтә тирә-йүндән һөлөктәй егеттәр йыйылған, һәр береһенең аты сапсып, ярһып тора, ти. Бына бер саҡ бәйге башланған. Сабышып килеп, тауға менә башлағандар. Тик ҡайһыларының аты һөрлөгөп киткән, ҡайһылары үҙҙәре ат өҫтөнән ҡолап төшкән. Мөхәммәт исемле бер егет кенә тау башына менеп етеп, хан менән ҡыҙ ҡаршына килеп баҫҡан. Хан үҙенең һүҙендә торған: шул уҡ егетте кейәү тип иғлан иткән. Эште оҙаҡҡа һуҙмай, ошо түбәнең башында табын әҙерләтеп, туй үткәргән.

Шул туйҙан һуң был урынды Туйтүбә тип йөрөтә башлағандар.

## 99. ТУРАТАШ

Тураташ тигән тауҙың төньяҡ битләүендә элек Көлһәре тигән ауыл булған, унан түбәнерәк Көлһәре исемле йылға аҡҡан. Ул йылға һаман да бар, һыуы ғына ҡорой башлаған.

Ана шул Көлһәре ауылдарында бер ярлы ғына ғаилә йәшәгән, улдарына кәләште бай урындан әйттергәндәр. Был килен ҡайны-ҡәйнәһен бер ҙә һанға һуҡмаған. Ҡушҡан йомоштарын да илке-һалҡы ғына үтәгән.

Бер саҡ шулай ҡәйнәһе киленен Туратау аша һыуға ебәрә. Килене китә лә бик оҙаҡ йөрөй. Ҡәйнәһе көтә-көтә арып бөтә. Асыуы килеп: «Шул тау башында ғына таш булып ҡат инде, исмаһам», — тип ҡарғай. Килен һыуы менән тау башына менгәс кенә, тораташ булып ҡата ла ҡуя.

Ул таш оҙаҡ тора, шул биҙрәле, көйәнтәле кеше ҡиәфәтен юғалтмай. Һуңынан трактор менән ер һөрөү сыҡҡас, кешеләр был ташты емергәндәр. Тауҙы хәҙер Тураташ тип йөрөтәләр[1].

## 100. ҺАРЫБАШТАШ

Муйнаҡташтан бер саҡрымдай ары киткәндә, Ағиҙелдең уң яҡ ярында бер таш күренер. Уның тупаҡ түбәһен ерән һары мүк ҡаплағанға күрә, был ташты Һарыбашташ тип тә, Ерәнбаш тип тә йөрөтәләр.

Бынан бик күп замандар элек был таш тирәһендәге башҡорт ауылында ерән сәсле бер ҡыҙ бала тыуған, имеш. Башҡорттарҙа һары йәки ерән сәсле балалар бик һирәк тыуғанлыҡтан, мулла был баланы уйнаштан тыуған тип ҡарған, әсәһен ҙур гонаһ ҡылған тип ғәйепләй. Ә атаһына ҡыҙын ошо ҡая башына илтеп таштарға ҡуша. Мулланы тыңламай ни хәл итһен, атаһы үҙ ҡыҙын мәңгегә ошо ҡая башына ташлап ҡайта.

Бына ошонан ҡалған, имеш, ул Һарыбашташ.

## 101. ИНСЕБИКӘТАШ

Янһары ауылында өс бисәле бер бай йәшәгән. Шул уҡ ауылда бер ярлының Инсебикә исемле сибәр ҡыҙы үҫеп килә икән. Байҙың күҙе ҡыҙға төшкән. Бай — етмеш йәштәр тирәһендә, Инсебикәгә — бары ун өс йәш, ти. Етмәһә, ҡыҙҙың яратып йөрәгән егете булған. Инсебикәнең малға ҡыҙған атаһы ҡыҙын байға һата, уны дүртенсе бисәлеккә бирергә килешә.

Ҡыҙ ризалашмай. Ата-әсәһенән байға һатмауҙарын, һөйгән егетенә биреүен үтенеп һорай. Атаһы элекке һүҙенән ҡайтмағас, Инсебикә урманға ҡаса. Уны эҙләй сығалар. Килә-килә бер тауыш ишетәләр. Бер аҡланға килеп сыҡһалар, Ағиҙелдең иң бейек һәм текә ҡая башында аяҡтарын һалындырып ҡыҙҙары ултыра, үҙе моңланып йыр йырлай. Һүҙҙәрен дә асыҡ ишетәләр:

Ағиҙелдең ҡаялары бейек,
Ыласын ҡоштар унда оялай,
Ата-әсәм мине һатмаҡсылар
Ас тамаҡҡайҙары туя алмай.
Йәмле Ағиҙелкәй, яҡты донъя
Кемдәр өсөн генә ҡала икән,
Бәхетлеләр бармы-юҡмы икән,
Минең яҙмышҡайым ҡара икән...

Шулай тип йырлап бөтөр-бөтмәҫ сағында, Инсебикә янына етеп, тотоп ҡына алабыҙ тигәндә, ҡыҙ ҡапыл һикереп торған да текә ҡаянан Ағиҙел упҡынына һикергән. Шунан халыҡ был таш ҡаяны Инсебикәташ тип атап йөрөтә башлаған.

## 102. СӘЛИМӘҠАСҠАН ТАШ, ҠЕЙӘҮСАПҠАН ТАШ

Борон заманда Ғәҙелша ауылының бер бай кешеһе Ырымбур яғынан Сәлимә тигән тирә-яҡта дан тотҡан һылыу, аҡыллы ҡыҙҙы үҙенең аҡылға самалы улына кәләш итеп алып бирә. Сая ҡыҙ үҙенең ирен яратмай. Был байҙың иҫәпһеҙ-һанһыҙ йылҡылары араһында бик шәп йүгерек туры аты була. Сәлимәнең кейәүе гел ошо туры атҡа менеп йөрөгән. Элек башҡорт ҡыҙҙары ҡарағас һағыҙы сәйнәгәндәр. Сәлимә лә кейәүе менән яланға йөрөргә сыға, бер бейек ҡарағас янына килеп еткәс, ул кейәүенән ошо ҡарағас башынан һағыҙ алып биреүен һорай. Ҡейәүе: «Ҡарағас бейек, менә алмайым», — тигәс, Сәлимә уға туры атты килтереп, өҫтөнә баҫып менергә ҡуша. Ҡейәү ағас башына ботаҡтан-ботаҡҡа баҫып менеп еткәс, Сәлимә туры атҡа менеп ала ла Ырымбур яғына ҡасып китә. Ҡейәүе ҡысҡырып кеше йыйғансы, арыу уҡ ваҡыт үтә. Сәлимәнең ҡайныһы әйтә: «Туры атты бер ниндәй ҙә ат ҡыуып етә алмаҫ, етһә, ошо ала ат ҡыуып етер», — ти. Ҡейәү шул ала бейәгә атланып, Сәлимәне атаһы йортона яҡынлашып барғанда ҡыуып етә.

Халыҡ Сәлимә ҡасҡан ерҙәге ташты Сәлимәҡасҡан таш тип, кейәү ат менән сапҡан ерҙе Ҡейәүсапҡан таш тип йөрөтә [1]

## 103. ЙӨРӘКТАУ

Бынан бик күп йылдар элек ошо тауға яҡын ғына ауылдарҙың береһендә Айһылыу исемле бик сибәр бер ҡыҙ менән батырлығы яғынан тирә-яҡта тиңе булмаған Ханбулат исемле бер егет йәшәгән, ти. Бала саҡтан уҡ бергә уйнап, бергә үҫкәндәр, бер-береһен яратышҡандар. Ҡыҙ үҫеп буйға еткәс, уны һоратып, бик күп яусылар килгән. Ә ҡыҙ иһә ныҡ торған, береһенә лә сығырға ризалыҡ бирмәгән. Ауылдың иң һаран, иң ҡанһыҙ, иң үҫал, иң ғәрсел байы Типтеғол яусы ебәргәс, ҡыҙҙың атаһы Айһылыуҙың ҡаршылығын еңгән, уны Типтеғол байға бишенсе бисәлеккә бирергә риза булған.

Иртәгә туй тигән көндө ҡыҙҙы Ханбулат урлап ҡасҡан.

Типтеғол бай шашынып әйткән:

— Миңә, ара-тирәне ҡулымда бейетеп тотҡан Типтеғол бай һынлы байға, ҡаршы сығырға йөрөгән егет донъяға тыумаған әле. Был мөртәтте донъяла йәшәтһәм, исемем Типтеғол булмаҫ. Йөрәген һурып алам мин ул өтөктөң. Һурып алам да эткә ашатам. Әйттем — бөттө. Минең һүҙем бер булыр!

Ҡыҙ менән егет йәй буйы тау-таш араһында, урманда ҡасып йәшәгән. Ҡаты һыуыҡтар башланғас, улар, йәшеренеп, төндә генә ауылға ҡайтҡандар. Быны һиҙеп ҡалғас, Типтеғол кешеләр яллаған. Ҡараңғы бер төндө байҙың ҡуштандары Ханбулатты тотоп, ошо тауға алып килтергәндәр. Типтеғол бай, мал һуя торған ҙур үткер бысаҡ сығарып, аяғы-ҡулы бәйләнгән Ханбулаттың йөрәген

үҙе соҡоп алған. Уны эттәргә ташлауы булған, көтмәгәндә бөркөт килеп сығып, йөрәкте үҙенең төйәгенә — бейектәге тауҙар ҡуйынына күтәреп алып киткән.

Был енәйәтте бай тәрән сер итеп һаҡларға тырышҡан. Тик Айһылыуҙың йөрәген алдата алмаған. Айһылыу Ханбулатын эҙләп тапҡан. Уның өҫтөнә ятып, өс көн, өс төн илаған да:

— Һөйгән йәрем тере булмаһас, йөрәгем ниңә кәрәк миңә? Был йөрәкте һиңә бирәйем, Ханбулатым: минең өсөн дә үс алырһың, — тип, йөрәген һурып алып, Ханбулаттың күкрәгенә һалған. Үҙе шунда уҡ үлгән. Ханбулат терелгән, һөйгәненең үле кәүҙәһен күреп, бөтәһен дә аңлаған. Ә йөрәк, ҡыҙҙың йөрәге, үҙҙәрен йәберләүселәргә ҡарата нәфрәт уты менән дөрләп янған. Шул көндән һуң Ханбулат икеһе өсөн дә үс ала башлаған. Байҙар утарының көлөн күккә осорған ул, ә үҙҙәрен тотоп, үҙе йәшәгән ошо тауҙың иң бейек урынынан упҡынға ташлай барған.

Бына шуға күрә Йөрәктау[1] тип исем биргән халыҡ был тауға.

## 104. ӘЛЕМБИКӘ ЙЫЛҒАҺЫ

Элгәре Исҡужа халҡы Ирәнеш буйына[1] ла йәйләүгә сыға ине. Шул йәйләүгә сығыусылар араһында бер ҡарттың Әлембикә тигән ҡыҙы булған. Ҡыҙҙы йәштән үк йәрәшеп тә ҡуйғандар, ти. Ә Әлембикә үҙе үр яҡтан, Ирәнеш менән Йылайырҙың башланғыс яғынан, бер егет менән һөйләшә, осраша башлаған.

Бер көндө Әлембикә юҡ була. Халыҡ эҙләй, таба алмай. Ҡыҙ һыуға батҡан кеүек юҡ. Йөрөй торғас, үргә киткән бер ат эҙенә төшәләр. Эҙҙе ҡыуыусылар ҡаршы килгән бер әҙәмдән ҡыҙ тураһында һорашалар. Теге кеше уларға: «Күрҙем. Береһе бер өҙәңгегә, икенсеһе икенсе өҙәңгегә баҫып тотоношоп баралар, ә үҙҙәре урман яңғыратып көләләр», — тигән.

Эҙәрләүселәр аттарынан төшөп, кәңәшләшкәндәр ҙә бер-береһен яратҡан был икәүҙе айырыуҙы кәрәк тип тапмағандар. «Әйҙә, йәшәй бирһендәр, ризалыҡ алырҙар әле», — тигәндәр.

Шул ваҡыттан алып йәйләү ултырған урындағы бәләкәй шишмәне Әлембикә йылғаһы, ә ҡаршылағы тауҙы Әлембикә тауы тип атағандар.

## 105. ЙӘҮҺӘР ҠЫУАҒЫ

Элек ҡатын-ҡыҙҙар биттәрен ҡаплап йөрөр булғандар. Ауылда бер урта хәлле кешенең улы бик матур ҡатын алған. Йәй көнө бер үҙәк буйына күмәкләшеп бесән саба барғандар. Башҡалар һыу буйына ашарға төшкәндә, Йәүһәр килен һуңға ҡалып бара икән. Быны бер ҡәйнеше һиҙеп ҡалып, теге киленде күҙәтеп ятҡан. Килен, кешеләр китеү менән битендәге пәрҙәһен асып тороп, күкрәксәһенән ҡумыҙ алып уйнап ебәрмәһенме! Егет килендең ма-

турлығына ла, ошолай ҡыланышына ла шаҡ ҡатҡан. Йәүһәр үҙе ҡумыҙ тартып, үҙе бейей икән. Килен көн дә шулай ҡалын бейер булған, ҡәйнеше көн дә йәшенеп күҙәтеп ятҡан.

Бер ни тиклем ваҡыт үткәс, ҡәйнеше еңгәһенең ошо ҡылығын кешеләргә һөйләгән. Шунан һуң ул ҡыуаҡты Йәүһәр ҡыуағы тип атағандар.

## 106. СӘФӘРТУЙ ЯЛАНЫ

Бынан күп йылдар элек Һарай ауылында Сәфәрбикә исемле бик һылыу ҡыҙ йәшәгән. Ҡыҙҙар араһында етеҙлек, егеттәр араһында мәргәнлек буйынса уға етеүсе булмаған, ти. Сәфәрбикәне һоратып күп яҡтан яусылар килә торған булған. Тик атаһы ҡыҙын унын үҙенең ризалығынан башҡа бер кемгә лә бирергә теләмәгән.

Сәфәрбикә үҙе Сирмеш ырыуынан бер егетте ятҡан булған.

Көндәрҙән бер көндө егет Сәфәрбикәнең атаһына яусы ебәргән. Сәфәрбикә риза булғас, атаһы яусылар менән туй тураһында һөйләшеп килешкән.

Был ваҡытта йәмле йәй урталары булған. Сәфәрбикәләр ырыуы бейек тау итәгендәге ҙур матур яланда йәйләүҙә ятҡан булған. Туйҙы ошонда үткәрергә һөйләшкәндәр.

Туй көнө килеп еткән. Ике яҡтан да ҡунаҡтар бик күп булған.

Туйҙың икенсе көнөндә Сәфәрбикә атаһы көрәш, мәргәнлек буйынса ярыш иғлан иткән. Егеттәр мәргәнлек буйынса ярыша башлағас, Сәфәрбикә лә, уҡ-һаҙағын алып, ярышта ҡатнашырға булған. Шул ваҡытта ғына яҡындағы ағас башына ҡарсыға килеп ҡунған. «Анау ҡарсығаның ҡайһы еренә атып тейҙерәйем?» — тип һораған Сәфәрбикә. «Булдырһаң, суҡышына тейҙер», — тигәндәр бер тауыштан ҡунаҡтар. Сәфәрбикә атып ебәргән. Табындағылар йығылып төшкән ҡарсығаны барып ҡараһалар, уҡ ысынлап та унын суҡышына тейгән, ти.

Бөтә халыҡ Сәфәрбикәнең мәргәнлегенә һоҡланған, уны маҡтағандар. Быны күреп, Сәфәрбикәгә электән үс тотоп йөрөгән бер ҡыҙ бик көнләшкән. Ул, ике туҫтаҡ ҡымыҙ алып, Сәфәрбикәгә йырлап эсереп, уны үлтерергә булған. Сәфәрбикәгә биргән бер туҫтаҡ ҡымыҙға ул ағыу һалған. Ул ҡымыҙҙы эсеү менән бөгөлөп тә төшкән.

Ҡунаҡтар бик ҡайғырышҡан, уны күҙ тейеүҙән үлде, тип уйлағандар. Сәфәрбикәне туй үткәргән яланда ерләп, ҡунаҡтар оло ҡайғы менән таралышҡандар. Шул көндән башлап был яланды Сәфәртуй яланы, ә эргәләге тауҙы Сәфәртуй тауы тип йөрөтә башлағандар.

## 107. КИЛЕН ТАУЫ

Ҡатай ярында, Сысҡан[1] ауылын үтеп, Артылыш[2] тауын сыҡҡас, Килен тауы тип йөрөтөлгән бер суҡы бар. Уның башына ҡараһаң, башындан кәпәсең төшөп китерлек. Осонда өҫтәл киңлегендәй генә тигеҙ ере бар. Элек шул ҡая аҫтында һабан туйы була торған. Һәр кем үҙ һөнәрен күрһәткән: көрәшселәр көрәшкән, ҡурайсылар ҡурай уйнаған, йырсылар йырлаған, бейеүселәр бейегән, һыбайлылар сабышҡан.

Бер ҡыҙ осло ҡая башына үрелеп менгән дә бейеп кире төшкән. Унан башҡа был ҡаяға бер кем дә, ирмен тигән ирҙәр ҙә менә алмаған. Ҡыҙ төшкәс, уға төрлө бүләктәр биргәндәр. Ҡыҙ, шул ауылға килен булып төшкәс, был ҡаяны Киленбейегән тау тип, аҙағыраҡ Килен тауы тип кенә йөрөтә башлағандар.

## 108. ШӘКИРӘ ҺАҘАҠ АТҠАН ЙӘЙЛӘҮЕ

Шәкирә һаҙаҡ атҡан — уйһыуыраҡ бер ерҙең исеме ул.

Элекке замандарҙа йыл һайын ошо ергә беҙҙең олатай-бабайҙарыбыҙ йәйләүгә сыҡҡандар, бейә бәйләгәндәр, ҡымыҙ яһағандар, күңел асҡандар.

Бер саҡ мәргәнлек буйынса ярыш башланған. Эй атҡандар, эй атҡандар, бер генә ир ҙә уҡтан атып сәпкә тейҙерә алмаған. Был йәйләүҙә Шәкирә исемле үҙе уңған, үҙе бик сая килен булған. Ошо килен сәпкә тейҙерә алмай аҙаплапған ирҙәр эргәһенә килгән дә: «Мин дә атып ҡарайым әле», — тигән. Беренсе атыуҙа уҡ Шәкирә сәпкә тейҙерә.

Ошо көндән алып йәйләүҙе Шәкирә һаҙаҡ атҡан тип йөрөтә башлайҙар.

## 109. ЙӘНТАҪТАРЛАҒАН ТАМАҒЫ

Элек ҡыҙҙы алырға килгәндә, егет бер нисә иптәше (кейәү егеттәре) менән һыбай килә торған булған. Кейәү килеүгә, ҡыҙ ҙа иптәштәре менән атҡа атланып тора. Егеттәр яҡынлашыу менән, ҡыҙ атына һуғып, саптырып китә. Иптәш ҡыҙҙары ла унан ҡалышмай. Егет ҡыҙҙы ҡыуып етеп, йәренең башына таҫтар урарға тейеш була. Һәргәйҙән[1] өҫтә Ҡурғашлы менән Көмбәләкле тауы[2] араһындағы йылға тамағында уҙғарылған был йола. Йәнтаҫтарлаған тамағы шунан ҡалған.

## 110. ҠОҘАҒЫЙҮЛГӘН ЕР

Башҡорт халҡында элек ҡот алып ҡасыу тигән йола булған. Туй мәлендә егеттең тугандары ҡыҙ йортона барғанда, ҡыҙ яғынан булған ҡоҙалар юлға ҡаршы килеп торалар. Ҡоҙаларҙы кү-

рсү менән бүләк-ҡотто күрһәтеп тоталар ҙа алып ҡасалар. Ҡоҙалар ҡот алыу өсөн сабышалар. Ҡайһы ҡоҙа алдан барып етә, бүләк шуға була. Сабышҡан ваҡытта бер ҡарт ҡоҙағый арбанан ташлы урынға ҡолап төшә лә үлә. Шул ерҙе Ҡоҙағыйүлгән ер[2] тип атайҙар.

## 111. АБЫҘ ҮЛЕГЕ

Борон кешеләр Ибрайҙың урьяғында йәйләүҙә ятҡандар. Абыҙ исемле мулла бик күп ҡыҙҙарҙан көлгән була. Бөтә йәйләү халҡы уны яратмай башлай.

Бер көндө ҙур йыйын йыйып, мулланы ла саҡыралар. Бөтә халыҡ, үҙ урындарына ултырып, мулланы көтә. Мулла өсөн бер урын ҡалдыралар. Ергә балаҫ йәйелеп, өҫтөнә ҙур яҫтыҡ һалынған. балаҫ аҫтына ике метр тәрәнлегендә соҡор ҡаҙылған була. Ике кеше, ипләп кенә тотоп, мулланы килтерәләр. Яҫтыҡҡа ултыртыуҙары була, мулла соҡор эсенә төшөп тә китә. Шунан уны тереләй күмәләр.

Был урын хәҙер ҙә Абыҙ үлеге тип атала[1].

## 112. ҠЫҘҘАР ЮЛЫ

Инәләре ҡалаға киткәс, ауылдың ун ике ҡыҙы хөзөргә[1] сыҡмаҡсы булалар. Ун бер ҡыҙ бешеренер өсөн кәрәк нәмәләр алып килә, тик ун икенсеһе генә ит-май таба алмай: инәләре келәттәрен бикләп, ҡунаҡҡа киткән булалар. Әхирәттәре келәт мөйөшөн асып ҡыҙҙы ит-май алырға төшөрөп ебәрәләр. Тишеккә салғы ҡуйылған икән. Был ҡараңғыла уны-быны күрмәй, салғыға ҡырҡылған да ҡуйған, ти.

Ҡыҙҙар быны тиҙ генә сығарып алалар ҙа ҡурҡышып ҡырға алып китәләр.

Теге ҡыҙыҡай үлгән. Ҡыҙҙарҙы эҙләргә сыҡҡан ауыл халҡы килеп, бөтәһен дә тотоп алған.

Һуңынан ҡыҙҙарҙың ун берен дә Себергә оҙатҡандар. Киткән саҡтарында ҡыҙҙар шулай һамаҡлаған, ти:

Беҙ, беҙ, беҙ инек,
Беҙ ун ике ҡыҙ инек,
Беҙ хөзөргә йыйылдыҡ,
Келәткә төштөк, май урланыҡ,
Таң атҡансы юҡ булдыҡ.

Ун бер ҡыҙҙың Себер киткән юлын шул ваҡыттарҙан алып Ҡыҙҙар юлы тип йөрөтә башлағандар.

## 113. ҠАРАБЕЛГӘН ТУҒАЙЫ

Бер туғайҙа ғаиләһе менән бер ҡарт йәшәгән. Көҙ көнө берҙән-бер бейәһен һуйған да: «Ҡыш сығыр өсөн алты ай бар», — тип бейәнең итен алты өлөшкә бүлгән. «Һәр айҙың тағы утыҙар көнө бар бит әле», — тип һәр өлөштө тағы утыҙарға бүлеп, өлөштәрҙе һәр береһен айырым баулап элеп ҡуйған. Итте килененә көн һайын үҙе генә алып бирә икән был. Ҡалған өлөштәрҙе, һанап, барлап ҡына торор булған. Килендең туғандары килеп, иткә күҙ ташлай башлаһалар, килен әйтә икән: «Тейергә ярамай, ҡайныым ҡарап элгән», — ти икән.

Ҡарабелгән туғайының исеме шунан ҡалған.

## 114. СЫУАҠБАТҠАН ТАУ

Ике ауыл араһында бәләкәй генә бер тау бар. Уны Сыуаҡбатҡан тип йөрөтәләр. Тауҙың итәгенән сылтырап ҡына һыу сығып тора. Ағып килә-килә ул ҡойоға әйләнеп китә...

Ҡасандыр элек ошо яҡтарҙан бер ҡаҙаҡ ҡыҙы һыбай үтеп бара икән. Атын эсерергә тип, был ҡыҙ ошо ҡойоға төшкән. Абайламай, аты ҡойоға батҡан бынын. Ҡыҙ атын сығара алмай байтаҡ интеккән. Был хәлде сауҡалыҡ араһынан Хәйҙәр тигән бер ҡаскын күҙәтеп торған да ҡыҙ янына килеп әйткән:

— Мин һиңә атыңды сығарып бирермен, тик һин бының өсөн миңә нимә бирерһең?

Ҡыҙ аттың арҡаһында артмаҡлап ҡуйған һандыҡҡа күрһәтеп:

— Анау һандыҡты алырһың, — тигән. — Унда атанан улға, инәнән ҡыҙға етерлек хазина табырһың.

Атты сығарғас, ҡыҙ һандыҡты Хәйҙәр ҡаскынға биргән дә үҙ юлына киткән.

— Исемеңде әйтеп кит! — тип ҡысҡырған Хәйҙәр ҡаскын.

— Минең исемем — Сыуаҡ булыр, — тигән ҡыҙ.

Шунан бирле ошо тауҙың исемен Сыуаҡбатҡан тип йөрөтәләр.

Хәйҙәр ҡаскын ҡыҙ ҡалдырған һандыҡты тау башына күмеп киткән. Хәҙер ҙә Сыуаҡбатҡан тауында хазина бар, имеш, тиҙәр. Айлы төндә ялтырап күренә икән, тип һөйләйҙәр.

## 115. ТҮЙЕНБӘТ ТАУЫ

Был тауҙа Түйенбәт тигән кеше йәшәгән. Ул йылҡы үрсеткән, кейек аулаған, һунарсылыҡ менән шөғөлләнгән. Тау йәнлеккә бик бай булған. Бында, ҡамышлы урында йопар, ҡондоҙ, ҡама үрсегән, тиҙәр.

Шулай бер көн Түйенбәт ҡартҡа яҡташтары килеп һорау биргән:

— Нисек һин кейек-йәнлекте күп тотаһың?

Түйенбәт әйткән:

— Минең күҙем үткер, йыраҡтан күрәм.

Тегеләр әйткән:

— Улайһа, һынап ҡарайыҡ.

— Ярай, — тигән Түйенбәт, — ана, тегендә, бынан ун саҡрымла, йылға булыр. Шуны күрәһегеҙме?

— Күрәбеҙ, — тиҙәр тегеләр.

— Шул йылға буйында тағы нимә күрәһегеҙ?

— Ундамы? Унда бер ҡарасҡы бар, — тигәндәр тегеләр.

— Ҡарасҡы түгел, ул көсөк булыр, — тигән Түйенбәт, — ышанмаһағыҙ, барып ҡарағыҙ.

Барып ҡараһалар, ни күрһендәр, ҡара ҡолаҡлы аҡ көсөк булып сыҡҡан. Шуға күрә ул йылғаны Көсөк йылғаһы, һунар тотҡан тауҙы Түйенбәт тауы тип атағандар.

## 116. ТАҠЫЯ СУСАҠ

Ғәлиәкбәр ауылына ҡаршы ғына бер тау бар. Ул башҡа ҡырын ғына һалып кейгән таҡыя һымаҡ тора. Аҫтында күл дә бар. Унан аждаһа сыҡҡан, имеш, тиҙәр. Бирерәк һыҙылып ҡына Нөгөш аға.

Элегерәк шунда бер мәл Ҡажмөхәмәт тигән берәүҙең һыйырын айыу йыҡҡан. Халыҡ күмәкләшеп ҡыуа сыға, айыу ҡасып өлгәрә. Бер килгән еренә тағы килер, барыбер тоторбоҙ, тиҙәр. Бер ҡарт таҙғаҡ яһап, айыуҙы төнөн көтөп ята. Бер ваҡыт ҡапҡара нәмә яҡынлашып килә, ти. Борхота һуғып, был ҡарт һыҙма мылтыҡтан атып ебәрә. Мылтыҡ тауышын ауыл халҡы ишетеп ята. Иртәгеһенә ҡараһалар — атҡан нәмә айыу түгел, ҡара һыйыр булып сыға. Ките шунан ауыл буйлап мәрәкә һүҙ. Хатта таҡмаҡ сығарып та өлгөрәләр:

Һай, уңған да кеше икән,
Айыу атып йыҡҡан бит.
Айыу тип атҡаны
Һыйыр булып сыҡҡан бит.

## 117. АЙҒЫР ТАУЫ

Элек был Айғыр тауы һыртында гел йылҡы өйөрҙәре йөрөгән. Йылҡыларҙы өйөр башында йөрөгән бер айғыр көткән.

Бер заман был аҡланды уратып алған урманда янғын башланған. Тирә-яҡтан ялмап килгән ялҡындан ҡурҡып, өйөрҙәге аттар кешнәшеп-сырҡырашып бөтәһе бер юлы түбәндәге ярлауға табан эркелгәс, өйөр айғыры быларҙың юлына арҡыры төшөп, текә ярҙан йылғаға төшөрмәй сабып йөрөй башлаған. Һәр атты был урман үткәүеленән берәм-берәм генә үткәреп ебәрә икән. Шу-

лай итеп, бөтә өйөрҙө аръяҡ ярға сығарып бөтөүгә, бының үҙен ялҡын өтөп, тиреһе көйә башлағас ҡына һыуға һикереп төшкән. Тик йылғаны йөҙөп сығырлыҡ хәле ҡалмаған, айғыр шунда һыуға батып үлгән.

Шуға күрә был тау үҙе лә, йылғаһы ла Айғыр исемен йөрөтә. Аҙаҡ бындағы станцияны ла ошо батыр Айғыр исеме менән атайҙар.

## 118. МУЙНАҠТАШ

Ағиҙел буйлап түбән киткәндә, Аҡбута ауылынан һигеҙ саҡрым самаһында ғына уң яҡ ярҙа Муйнаҡташ тигән ҙур бер ҡая күренә. Аҡбута яғынан һалда ағып килгәндә, уның һыны, ысынлап та, эт ҡиәфәтендә һымаҡ. Был ҡая тәңгәлендә Ағиҙел киҫә боролоп китә лә, ошо боролманы үткәс, ап-аҡ булып ике ҙур таш бағана ҡалҡып сыға. Береһе уның ибәтәйһеҙ ҙур, ә икенсеһе уның ҡайтышыраҡ — орсоҡ ише ослайып барып бөтә. Олоһонон ос тәңгәленәнерәк аҡ һыҙат ҡаймалап алған. Аҡ муйын һымағыраҡ булып тора. Шуға ла ташты Муйыны аҡ таш тигәндәр. Муйыны аҡ булһа ла, элегерәк уға ҡайыҡ-һалдар йыш бәрелгәндә, бик аҡ булып күренмәгәндер.

Муйнаҡ тигән эт ҡушаматы ла бар уның. Был хаҡта былай тип һөйләйҙәр: имеш, ҡасандыр был тирәләге бер һунарсының Муйнаҡ тигән бик шәп эте булған. Бер саҡ шулай был эт бер боланды баҫтырып килә икән. Болан, ҡурҡыуынан ни эшләргә лә белмәй, ошо ҡаяға атылып менә. Ә эт, уның артынан сабып килеп, ярһыуынан туҡтай алмай, ҡая башынан Ағиҙелгә осоп барып төшә. Был ташты ана шул эт ҡушаматы менән Муйнаҡташ тип атағандар, имеш [1].

## 119. ТУҠ ЙЫЛҒАҺЫ

Асылыкүл тирәһендә йәшәгән башҡорттар, малдарына көтөүлек эҙләп, алыҫ ерҙәргә барып сығыр булғандар. Бер мәл шулай ошо яҡҡа килеп сыҡҡандар. Тау башына менеп ҡараһалар, тауҙың аҫтында туғай буйлап ҙур ғына йылға аға, ти. Йылға буйы бик яйлы күренгән. Ат эсерергә тип килһәләр, ул балыҡ — ҡара сытыр булып ҡымтып йөрөй, ти. Бөтә күренеше менән йылға юлсыларға бик оҡшаған. Һыуы тулы, балыҡлы, туғайы киң, үләнле, урманы ла бар. «Һәр нәмәгә лә бай, туҡ йылға икән был», — тип әйтешкәндәр ҙә былар йылғаға Туҡ йылғаһы тип исем биргәндәр.

Асылыкүлгә ҡайтып был турала һөйләгәс, ун туғыҙ йорт берләшеп, мал-тыуарҙарын Туҡ буйына ҡыуалар. Һуңынан Туҡ буйына бөтөнләйгә күсеп ултыралар. Шул йорттарҙың һәр береһенән Туҡ буйындағы башҡорт ауылдары барлыҡҡа килә.

## 120. КӘБӘНТАШ, ЙӘКИ БАЙЫШ ТАШЫ

Кесе Аҡбулат[1] ауылынан саҡ ҡына үрҙәрәк, Ағиҙелдең уң яҡ ярында, Кәбәнташ тигән бер аҡ ҡая ҡалҡып тора. Ошо бейек ҡая хаҡында Аҡбулат башҡорттары былай тип һөйләй торғайнылар: имеш, был тирәлә Байыш тигән арҙаҡлы бер кеше йәшәгән. Ул үҙенең бик намыҫлы булыуы менән абруй тотҡан. Үҙ һүҙендә ныҡ торғанға: «Байыштың әйткән һүҙе — атҡан уҡ», — тигәндәр. Ир һүҙенең ныҡлығын ошо бейек Кәбәнташ менән тиңләр булғандар.

Байыш үҙе үлгәс, ошо кәбәнгә оҡшаш ҡаяны Байыш ташы тип атап алып киткәндәр.

## 121. МОРАҘЫМ ЙЫЛҒАҺЫ

Элек был тирәлә Мораҙым батыр булған. Ул бөтә тирә-яҡҡа дан тотҡан.

Мораҙым атына йылғанан һыу эсергән. Йылға Мораҙым батырға оҡшаған. Һоҡланып, уның матурлығына ҡарап туя алмаған батыр.

— Һин, йылға, минең туғаным булырһың, — тигән Мораҙым.

Йылға, телгә килеп, әйткән:

— Ярай, батыр, һинең һеңлең булам, вәғәҙә, — тигән.

Мораҙым үҙе үлгән — һыуы мәңгегә уға тоғро булып ҡалған. Мораҙым һаман аға ла аға. Мораҙым батырҙың иҫтәлеген һаҡлап аға ул Мораҙым йылғаһы [1].

## 122. АСЫЛЫКҮЛ

Бынан бик күп йылдар элек был күл булмаған. Буранғол ауылы аша Асылы тигән йылға ағып ятҡан. Ул Сәрмәсәнгә ҡойған. Күл урынында Ташлытау ҡалҡып торған. Бөтә тирә-яҡ урман булған.

Бынан бер нисә йөҙ йыл элек, йәйге көндәрҙең береһендә, тау артынан ҡара болот ҡалҡҡан. Бик ныҡ күк күкрәгән, ямғыр ҡоя башлаған. Ямғыр шул хәтле ҡойған — Асылы йылғаһы ауылды баҫып киткән. Тағы күк күкрәгән. Бөтә ер һелкенеп киткән. Кешеләр аяҡтан йығылған, хайуандар үкергән.

Иртәгеһен ҡараһалар — Ташлытауҙың уртаһы убылған, шул урында ҙур күл барлыҡҡа килгән. Асылы йылғаһы ағышын бороп, шул күлгә ҡоя башлаған. Ана шуға был күлде Асылыкүл тип атағандар.

## 123. АСЫЛЫКҮЛ

*(вариант)*

Донъя ошо хәленә килгәндән бирле, Ҡарағас тауының уйһыулығына хәҙерге Бүжән, Шарлама, Бишҡайын һыуҙары ағып төшкән. Ағын һыу тауҙың уя-уя аҫтын тишеп, көнсығыш яғына килеп сыҡҡан. Шунда ҙур күл барлыҡҡа килгән. Күп замандар тауҙың аҫты ишелгән дә ишелгән, өҫтө күл аша һалынған оҙон күпер кеүек булып, бик оҙаҡ йылдар торған. Көслө һыу яр буйҙарын, тау аҫтарын ишә-ишә йылдан-йыл ҙурайған. Тау башы эре ҡарағас урманы менән ҡапланған булған.

Был тирәлә ауылдар булмаған. Тик Дим түбәһенән Ҡара Яҡуп, Ябалаҡлы яҡтарынан ошо ҙур күл буйына ҡош атырға, төрлө йәнлек ауларға Мөхәмәҙи, Фәйзулла, Мөхәммәт кеүек дәртле һунарсылар килеп сыҡҡан.

Берҙән-бер көн килеп (ҡарттар быны 1611 йылда булған тип һөйләй), ошо күпер кеүек тау һыу өҫтөнә ишелеп төшкән. Ҙур күлдең һыуы ташып-артып, көнсығыш ярҙан күтәрелеп, Өйҙөрәк йылғаһына ҡушылған. Ошо күл менән Өйҙөрәк йылғаһы араһындағы һыу юлын хәҙер Йырыбаҡҡан («йырып аҡҡан» тигәндән алынған) тип йөрөтәләр.

Ишелеп күлгә төшкән тауҙың көньяҡ ташлы ҡаяһы Ҡарағас яры, төньяҡ ҡаяһын Нора тип йөрөтәләр. Ҡыҙыл ярҙың битенә һибелгән кеүек ялтыр таштарын ҡояш яҡтыһына ялтыратып, нур сәсеп торғаны өсөн уны Нора тип йөрөткәндәр («нур»ҙан алынған, тиҙәр).

Урман ҡаплаған тау ишелгәс, ағастар һыу төбөнә батҡан. Шул эре ағас һөлдәләре тулҡын менән яр буйына әле һаман сыға. Күлдең барлыҡҡа килеүенә миллион йылдар барҙыр инде. Күл өҫтөнә тау ишелеүгә 360 йыл самаһы була, тип дөрөҫләй ҡулдан-ҡулға күсеп килгән ҡулъяҙмалар. Асылыкүлдең исеме лә ныҡ үҙгәртелгән: ул Асылы түгел, ә Аҫылкүл — бик матур күл тигән исемдә йөрөгән. Күл әсе һыулы түгел, ул бик сөсө, шифалы һыулы күл [1].

# ЫРЫУ-ҠӘБИЛӘ, АЙМАҠ-АРА АТАМАЛАРЫНА ҠАҒЫЛЫШЛЫ РИҮӘЙӘТ ҺӘМ ЛЕГЕНДАЛАР





## 124. «БАШҠОРТ» ҺҮҘЕ ҠАЙҘАН КИЛЕП СЫҠҠАН

Борон-борон заманда беҙҙең ата-бабаларыбыҙ, өйөр-өйөр мал көтөп, һунар итеп, бер урындан икенсе урынға күсеп йөрөгәндәр, ти. Бер ваҡыт улар, мал көтөр өсөн арыуыраҡ ер эҙләп, күсеп киткәндәр. Бик күп ер үткәс, былар бер көтөү бүрегә тап булғандар. Ошо көтөүҙе йөрөткән баш бүре көтөүснән айырылып сыҡҡан. Ул күсеп китеп барыусы каруан алдына төшкән дә юл башлап киткән. Беҙҙең ата-бабаларыбыҙ бүре артынан бара торғас, бик матур туғайлы йылғаларға, урманға, емеш-еләккә, йәнлеккә бай ергә килеп сыҡҡандар. Бындағы тауҙар, күккә олғашып, күҙ яуын алып торалар икән. Ошо ергә килеп еткәс, баш бүре туҡтаған. Ырыу ҡарттары бергә йыйылып: «Беҙ ошонан да матур ерҙе тапмабыҙ, бындай ер донъяла юҡ, ошонда ғүмер итәйек», — тигәндәр. Ошо матурлыҡҡа, байлыҡҡа тиңе булмаған ерҙә тирмә ҡороп, мал үрсетеп, һунар итеп йәшәй башлағандар. Шул ваҡыттан бирле ата-бабаларыбыҙ үҙҙәрен баш бүре артынан килгән кешеләр, йәғни «башҡорттар», тип йөрөтөр булғандар. Борон бүрене ҡорт тип йөрөткәндәр. «Баш ҡорт артынан килеүсе халыҡ» тип әйтеү — «баш бүре артынан килеүсе» тигәнгә тиң. «Башҡорт» һүҙе бына ошонан килеп сыҡҡан [1].

## 125. БАШҠОРТ ҠАЙҘАН КИЛЕП СЫҠҠАН

*(вариант)*

Башҡорт тоҡомо Төрөк яғынан килеп сыҡҡан [1]. Төрөктөң Гәрбәлә [2] тигән ҡалаһында бер туған дүрт ағай-эне йәшәгән. Бик татыу йәшәгәндәр былар, бик һынсыл булғандар. Бер саҡ оло ағалары төш күрә. Төшөндә уға бер кеше былай тип һөйләй: «Һеҙ бынан китегеҙ. Ни өсөн тигәндә, һеҙ бында йәшәй торған кешеләр

түгел, изге кешеләр, тотоғоҙ ҙа көнсығышҡа ҡарай китегеҙ, шунда рәхәтлек табырһығыҙ» [3].

Иртәнсәк тора ла был энеләренә төшөн һөйләй. Энеләре аптырап ҡала: «Ҡайҙа ул рәхәтлек? Ҡайһы яҡта ул көнсығыш тигән яҡ?» Береһе лә бер нәмә лә белмәй. Икенсе көн ағалары тағы ла төш күрә. Теге кеше тағы ҡабат килеп әйтә икән: «Малдарығыҙҙы әйҙәгеҙ ҙә ҡаланы ташлап сығығыҙ. Һеҙ юлға сыҡҡас та, юлығыҙҙа бер бүре пәйҙә булыр. Ул һеҙгә лә, малдарығыҙға ла теймәҫ, үҙ юлында булыр. Ана шул бүре туҡтағас, һеҙ ҙә туҡтағыҙ», — ти.

Иртән торғас, былар йыйылып юлға сығыр булалар, ҡуҙғалып киткәс тә, бер бүре тап була, былар ана шул бүренең артынан юл алалар. Көнсығыш яҡҡа килә торғас, бына ошо илгә (Башҡортостандың Күгәрсен районына) еткән дә әлеге бүре туҡтаған. Артынан эйәреп килгән дүрт ағай-эне лә туҡтап, ер һайлап, дүрт урынға ултырғандар. Дүрт ағай-эненең өс улы бар икән, улары ла үҙҙәренә урын алғандар. Шулай итеп, былар етеһе ете урында баш булып алғандар. Бына шунан башҡорт араһында «Ете ырыу» тигән һүҙ тороп ҡалған. Был ергә уларҙы ҡорт баш булып, эйәртеп алып килгәнлектән, ошо ете ырыуҙы «башҡорт» тип әйтер булғандар. Быңа ошо ете туғандан башҡорттар таралып киткәндәр.

## 126. «БАШҠОРТ» ҺҮҘЕНЕҢ КИЛЕП СЫҠҠАНЫ

*(вариант)*

Боронораҡ ошо урманлы, таулы ерҙәрҙә Ҡыпсаҡ ырыуынан сыҡҡан бер ҡарт менән ҡарсыҡ йәшәгән. Ул мәл донъялар һил булған. Күҙ күреме етмәҫ далаларҙа, ҡолағын ҡарпайтып, ҡылый күҙле ҡуян сапҡан, өйөр-өйөр булып боландар, тарпан аттар йөрөгән. Һыуҙа ҡондоҙ, балыҡ күп булған. Ә тауҙарҙа сибәр ҡыр кәзәләре, олпат айыуҙар, ҡыйғыр ҡоштар төйәк тапҡандар.

Бабай менән әбей, ҡымыҙ эсеп, ҡорт аҫрап, һунарға йөрөп йәшәп ятҡандар. Оҙаҡламай уларҙың бер улы тыуа. Ҡарттар малайҙы, айыу тиреһенә төрөп, балыҡ майы имеҙеп, бик шәп итеп тәрбиәләгәндәр. Малай тик ятмаған, тулай-тулай үҫеп, айыу тиреһенә һыя алмай башлаған. Үҫеп ир ҡорона ингән. Ата-әсәһе вафат булғас, егет башы һуҡҡан яҡҡа юл тота. Бер тау ҡуйынында ул бик матур ҡыҙ осрата. Улар бергә тора башлайҙар. Быларҙың балалары тыуа. Улары ла, үҫеп, буйға еткәс, өйләнеп ебәрә. Инде улдарының балалары була. Халыҡ ишәйеп, күбәйеп китә...

Йылдар үтә. Быларҙың тармағы ҙур бер нәҫел-ырыуға әйләнә. Бөтәһе бер ҡор булып йәшәйҙәр былар. Аталары ҡорҙоң башы була. Башҡорт һүҙе ана шул «ҡор башы»нан килеп сыҡҡан икән ул.

## 127. БАШҠОРТТАР ҠАЙҘАН КИЛГӘН

*(вариант)*

Башҡорттар Алтай яғынан [1] килгәндәр. Ҡорҡот [2] исемле башлыҡтары булған. Ул алға сығып йәшел үләнгә ятҡан да, думбыраһын сиртеп, өләң әйткән:

Мин — илсе, «кит» тимәгеҙ,
Минең ырыуға теймәгеҙ,
Тейгән кешене үлтерәм!

Уға ҡаршы бирәү әйткән:

— Һеҙгә алда ҡәбер ҡаҙылған, бармағыҙ, артҡа тайығыҙ, — тигән.

— Алда беҙгә рәхмәт, артта — ҡәһәр. Алға барабыҙ, — тип яуап биргән Ҡорҡот.

Шунан башҡорттар Ағиҙел буйҙарына урынлашҡандар.

## 128. БҮРЕЛЕ ЙЫЛҒАҺЫ

Башҡорттарҙа бер ырыу башлығы үлер алдынан ҡапҡа алдына бағауыл ҡуя. Әмер бирә: ҡапҡа янына килгән йән эйәһен тотоп үлтерергә лә шул ерҙә күмергә.

Бағауыл ҡапҡа янына сығып әҙерәк торғас, ырыу башының ейәне килеп сыға. Бала ҡапҡа янында уранғылай ҙа китеп бара. Бағауыл уны йәлләй, теймәй ҡала. Бала киткәс, бер эт килә. Әлеге бағауыл этте үлтереп ҡапҡа төбөнә күмә [1]. Был хәлде үҙе ырыу башлығына еткерә.

Шунан ырыу башлығы аҡтыҡ көсөн туплап әйтә:

— Әгәр баланы үлтереп күмһәң, был урында мин үлгәндән һуң да бер нәмә ҡалған булыр ине. Хәҙер ҡапҡа төбөндә эт ята. Шулай булғас, мин үлһәм, был урындан күсергә тура килер. Ҡәбер ҡаҙығанда, минең ҡәберемдән бер ҡорт сығыр, һеҙ ана шул ҡорт артынан эйәрегеҙ. Ул ҡайһы ерҙә юҡ булһа, шул ергә төйәк ҡороғоҙ, — тип әйтә лә үлә.

Ҡәберҙән бер ҡорт (бүре) сыға ла бер исемһеҙ йылға башланған ергә килеп юҡ була. Ошо йылға башланған ергә, урман араһына, башҡорттар нигеҙ ҡороп йәшәй башлайҙар. Шунан башлап йылғаға Бүреле тигән исем биргәндәр.

## 129. БҮРЕЛӘР ТОҠОМО

Беҙ — Бүреләр ырыуы. Элек Үҫәргән булғанбыҙ. Ата-бабайҙар күсеп-ҡунып йөрөгәндә, уларға бер инә бүре осраған. Бер һунарсы быны атайым тиһә, бүре телгә килеп әйткән: «Атма мине, ҡойроғомдан тотоп, ергә һуҡ». Һуҡһа, теге бик матур бер ҡыҙ булған. Һунарсы уны алып ҡайтҡан да тора башлаған. Үҫәргәндәр быға

риза булмаған, ҡыуып ебәргәндәр үҙен. Шунан һунарсы ситкә китеп, үҙе бер ғаилә яһап, балалары булып, ҙур бер ил ҡороп ебәргән[1]. Әсәләре бүренән булғас, уларҙы бүреләр тип йөрөткәндәр. Ырыуҙы башлап ебәргән әлеге һунарсыны баш бүре тип атағандар. Бына беҙ шул баш бүре тоҡомонан киләбеҙ инде.

## 130. БҮРЕЛӘР АРАҺЫ

Дим буйынан ун ике йортло кеше беҙҙең Ирәндек буйына күсеп ултыралар. Улар араһында Саптаръян ҡарттың Мораҙым исемле улы була. Властар һорағас, ҡарт уны Мәскәүгә уҡырға ебәрә. Мораҙым унда туғыҙ ай уҡығас, Ырымбурға хорунжай итеп ебәреләә. Унда ат менән хеҙмәт итә. Ул табипсылыҡҡа уҡыған була. Мораҙым хеҙмәттә саҡта атаһы Саптаръянды параліч һуға. Шул сәбәпле Мораҙымды юллап һалдаттан ҡайтаралар. Уның ордены, миҙалдары күп була. Был ауылда атаһының дошман кешеләре булып, Мораҙым ҡайтҡас та, улар, алты йорт кеше, икенсе ергә күсеп китәләр.

Мораҙым һәр ваҡыт көндәрен һунарҙа үткәрә. Уның эттәре һәм сөйөргә ыласыны була. Ул йыш ҡына бүреләр аулай. Ете улы була. Уландары ҙурайғас, барыһын да эйәртеп, һунарға йөрөр булған. Улар һунарға киткән ваҡытта:

— Ана, бүре, ете улын эйәртеп, һунарға китте, — тип ҡала торған булғандар. Шуға күрә «бүре ҡушаматы» тағылып ҡалған. Үҙе үлгәндән һуң уландарын да «бүреләр», йәки «бүреләр араһы» тип йөрөткәндәр.

## 131. АЛЫП ТОҠОМО

Бик борон Алып тигән ғәләмәт дәү батырҙар булған, имеш. Улар Мағаш ише вағыраҡ тауҙы бер генә ашатлап үтер булған, оҙон сылғый тирәктәрҙе, ыштан төбөн йырта тип, үлән шайы ла күрмәй, йолҡоп ташлар булғандар. Шул Алыптарҙың береһе ҡайҙапдыр яуҙан ҡайтҡас, ҡынйыраҡ күн ҡатаһына тулған балсыҡты ҡағып кейгән икән, шул балсыҡ өйөмөнән әлеге Алып тауҙары хасил булған да ҡуйған: ике ҡата балсығынан — ике тау. Шунан атлап ете аҙым ары киткән, баҫҡан бер эҙе ҙур-ҙур ете ялан булып уйылып ҡалған, ти. Шул ете оло ялан башҡорттарҙың аҙаҡ ете йәйләү төбәгенә әйләнгән. Башҡорттарҙың боронғо ырыу башы ла ана шул Алып батырҙарынан, шуларҙың бер улы Алпамышанан башланған, имеш, тиҙәр.

## 132. ЕТЕ ЫРЫУ

Беҙ ултырған ерҙән көньяҡта борон заманда төрөкмән, найман, тажик, нуғай тигән ил халыҡтары йәшәгән. Был илдәр үҙ-ара

һыйышмай, ер өсөн талашып йәшәгән. Шулар араһынан нуғай иле ҡалҡынып сыҡҡан да төньяҡҡа юл тотҡан. Юлда нуғайҙарға бер өйөр бүре осраған. Ил башлығы әйткән: «Бүре өйөрө ҡайҙа туҡтаһа, беҙ ҙә шунда төйәк ҡорорбоҙ». Бүре өйөрө бүленеп-бүленеп Урал урмандарына, Ағиҙел башына килеп туҡтағандар. Нуғай иле лә етегә айырылып, етс ырыу булып шул төбәккә таралған.

Тамъян менән Ҡатай ырыуҙары Ағиҙел башында ҡалған. Түбәнерәк Бөрйән ырыуы туҡтаған, тағы ла түбәнерәк Түнгәүер, Ағиҙел тамағында аҡ башҡорт ырыуы [1] туҡтаған. Әйек [2] буйында Ҡыпсаҡтар. беҙҙең ауыл ултырған урындарҙы Үҫәргән ырыуы биләгән.

Һуңғараҡ был ырыуҙарға ҡаҙаҡ барымтаһы башлана. Башҡорттар араһынан яу ҡайтарыр батырҙар сыға: Ҡесе Һүрәм [3] буйында — Сура батыр [4], Юлдашта [5] — Күк Ҡашҡа батыр, Муйнаҡта [6] — Ҡотор батыр [7].

Ҡотор батыр, күп кенә бәрелешкәндән һуң, йәшәгән төбәгенән күсеп китергә мәжбүр була. Ҡоторҙоң улы Муйнаҡ ҡарт дүрт улын да ҡартаталары йәшәгән ергә күсереп ултырта. Шунан инде Үрге Муйнаҡ, Урта Муйнаҡ, Түбәнге Муйнаҡ, Бәләкәй Муйнаҡ ауылдары барлыҡҡа килә.

Ҡотор күсеп киткәндә тау аша артылған юлды Күс юлы тип атайҙар. Был юл Саҙалы ауылынан алты саҡрым үрҙәрәк.

## 133. БАШҠОРТТАРҘЫҢ СЫҒЫШЫ

Уралдың был яғында йәшәгән башҡорттар Урал һыртының теге (көнбайыш) яғынан күсеп килгән. Башҡорттар килеп ултырғансы, бында берәй төрлө халыҡ йәшәгәндерме, юҡмы — уныһы билдәһеҙ.

Ҡиҙәгәс [1] күле буйының ике яғында уба тип йөрөтөлгән ике түбә ҡалҡып тора. Ошо убаларҙың ырҙын табағына оҡшап ятҡан урындарында ҡәберлектәре лә бар. Борон-борондан төньяҡтағы убаны Егет батша убаһы тип, ә көньяҡтағыһын Ҡыҙ батша убаһы тип йөрөтәләр. Имеш, был тирәлә улар икеһе батшалыҡ иткән була.

Әле кәләш тә йәрәшмәгән Егет батша Ҡыҙ батшаға: «Минә кейәүгә сығыр булһаң, кәләшлеккә алыр инем», — тигән икән, Ҡыҙ батша быға шундай шарт ҡуйған: «Былай ғына сыға алмайым, тәүҙә батырлығыңды күрһәт. Мин был түбәнән, ә һин анау түбәнән тороп, уҡ атышып ҡарайыҡ. Әгәр ҙә һин тейҙереп, мин иҫән ҡалһам, бөтә ғәскәрем менән һиңә сығырмын; ә инде яҙлыҡһаң, бөтә ғәскәрең менән һин миңә ҡол булырһың», — тигән ҡыҙ егеткә.

Былар шулай, икеһе ике түбәнән тороп, уҡ атыша башлайҙар. Башта егет ата. Уҡ ҡыҙҙың аяғын ғына сыйып китә. Шунан ҡыҙ атып ебәрә. Бының уғы егеттең йөрәгенә килеп тейә лә, егет шунда уҡ йән бирә.

Егет яғындағы майҙанда ултырған ҡарттар, был хәлде күргәс: «Ҡыҙ ҡоло булғансы, алышып үлгәнең артығыраҡ», — тип атыша

башлайҙар. Алышта ике яҡтан да бик күп кеше ҡырыла. Ахырҙа, Егет батша яғыныҡыларҙың иҫән ҡалғандары: «Былайтып ҡырылып бөткәнсе, Ҡыҙ батшаның ҡоло булайыҡ та ҡалайыҡ», — тип, Ҡыҙ батшаға баш һалалар.

Үлгәндәрҙең бөтәһен дә йыйып алып, яу ҡоралдары, кейемһалымдары менән бергә ике түбә башында ерләйҙәр.

Был хәлдән һуң Ҡыҙ батша бик күп ерҙәргә яу сабып, бик күп батшаларҙы үҙенә ҡол итә. Ахыр килеп, ул тағы бер йәш батшаны осрата. Был егет Ҡыҙ батшаға: «Һин байтаҡ халыҡты ҡырҙың, әйҙә, хәҙер минең менән алышып ҡара», — ти. Былар шулай һөйәк валлы айбалталарын болғап, ҡара-ҡаршы сабышып килгәндә, аттары бер-береһенә бәреләләр ҙә, икеһе ике яҡҡа сәсрәп барып төшәләр. Егет шунда уҡ һикереп тороп ҡыҙға уҡтала: «Ҡайһыһына ризаһың, йәнеңде бирәһеңме, малыңдымы? Йәнең йәл булһа, минең бисәм бул, йәл булмаһа, хәҙер йәнеңде алам!» — тип икенең берен һайларға ҡуша. Ҡыҙ, йәнен йәл күреп, ахырҙа быға кәләш булырға ризалыҡ бирә, ә ғәскәре егет ҡулына күсә.

Ана шул замандан тороп ҡалған был түбәләр. Беҙҙең тирәлә уларҙы түбә тип тә, уба тип тә йөрөтәләр. Бына ошо уба-түбәләр уҡ атышырға мәрәй булған, тиҙәр.

Ә бындағы халыҡтың ҡайһыһы шунда үлеп бөткән, ҡайһыһы ҡайҙа күсеп киткән. Шунан һуң был ерҙәргә Урал аръяғынан башҡорттар килеп ултырған.

Имеш, Әй йылғаһы буйында көн иткән Биксәнтәй исемле башҡорт ҡартының бер заман шулай малдары юғала. Шуларҙы эҙләргә ҡарт үҙенең улын сығарып ебәрә. Улы малдарҙы эҙләп йөрөй торғас, Урал һыртының был яғына килеп сыға. Малдарҙы табып, атаһына әйләнеп ҡайтҡас: «Унда бер ниндәй ғәскәр-фәлән дә юҡ, ере лә бик яҡшы, тигеҙ ер, әйҙә, атай, шул ергә күсеп ултырайыҡ!» — тип ҡыҫтай башлай. Ә бығаса Әйҙе башҡорттары: «Урал аръяғында ер ҙә юҡ, донъя шунда барып бөтә икән», — тип йөрөр булғандар. Биксәнтәй ҡарт: «Бәй, былай булғас, Урал аръяғында ла донъя бар икән дәһә!» — тип ҡуя. Шунан, уландарын йыйып алып, кәңәш-төңәш итешә лә был яҡҡа күсенеп ултыра [2]. Уның ун ике улы була. Ун икеһен дә ул башлы-күҙле иткәс, төрлөһө төрлө ерҙән урын һайлап, һәр береһе үҙ донъяһын ҡороп ебәрә.

Биксәнтәй ҡарт бик бай була: үҙенең мал-тыуары менән ул Урал һыртының көнтыуыш типһененән алып ҡаҙаҡтарҙың Аман-ҡарағай урманына [3] тиклем йәйелеп ятҡан аралыҡта күсенеп йөрөй. Ул шулай бер саҡты Аман-ҡарағай урманы тирәһендә йәйләүҙә ятҡанда, ҡаҙаҡтар бынан: «Ике ҡыҙынды беҙгә бир», — тип ныҡышa икән. Биксәнтәйҙең ике улы ҡыҙҙарын ҡаҙаҡҡа бирергә риза булмағас, быларҙың икеһен дә әсирлеккә эләктереп, ҡол итеп ҡуялар.

Бер ни тиклем ваҡыт үткәс, ҡаҙаҡтар, төрлө ярыш-бәйге уҙғармаҡ булып, ҙур йыйын йыялар. Был ике батырҙы шунда үгеҙ менән алышырға сығаралар. Ике туғандың кесеһе, майҙанға сығып, үгеҙҙең ике мөгөҙөнән эләктереп ала ла ҡайырып килтереп

сығара. Ике мөгөҙ ҙә быныҡ ҡулдарынан төшмәй торғас, ағаһы ҡустыһының ҡулдарынан һылап-һыйпап, мөгөҙҙө саҡ төшөрә. Был хәлде күргәс, ҡаҙаҡтар кәңәш-төңәш итешәләр ҙә: «Былар беҙҙең халыҡты үҙ яҡтарына ауҙарып ҡуймаһын», — тип ҡурҡыштарынан ике батырҙы ла кире ҡайтарып ебәрергә булалар.

*Шулай итеп, Биксәнтәй ҡарттың ун ике улынан* Әйҙе ырыуы тип йөрөтөлгән ун ике ауыл таралып китә: Мәтәле, Үләндс, Оло Ҡарағайкүл, Субраш ауылы, Собханғол ауылы, Ҡесекәй Ҡарағайкүл, Морат ауылы, Ҡомсүл ауылы, Оло Олтораҡ менән Ҡесекәй Олтораҡ ауылы, Бөтөк ауылы, Ҡужа ауылы[4]. Быларҙын бөтәһен дә әйҙеләр тип йөрөтәләр.

Әйҙеләрҙән алда был ерҙәргә Табын ырыуы килгән, әйҙеләр табындарҙың еренә ебәрелмеш кенә тип тә һөйләйҙәр. Ҡалай булһа ла булғандыр, тик әйҙеләрҙең дә, табындарҙың да һәр береһенең хәленә ҡарата үҙ ерҙәре үҙҙәренә етерлек бик мул булған. Шулай ҙа был яҡтағы алтын-көмөшлө, мәғҙән-тимерле, күлдәре күп ерҙәр табындарға ҡараған. Табындарҙың бында ҡасаныраҡ килеп ултырғаны билдәһеҙ.

Ә ҡатай менән бөрйәндәр — беҙҙән башҡа ырыуҙар, телдәре лә, ғөрөф-ғәҙәттәре лә беҙҙекенән айырылып тора; уларҙың һөйләшеүе, ғөрөф-ғәҙәте ҡырғыҙ-ҡаҙаҡҡа[5] тартымыраҡ. Улар ҡайҙан килеп сыҡҡандыр — уныһы беҙгә ҡараңғы...

## 134. БАЙЫУЛЫ ЫРЫУЫ

Элек бер батыр булған. Ул ҡуш йөрәкле булған. Шуға уны Ҡушлаҡ[1] батыр тип йөрөткәндәр. Ул һунар тотҡан, бик мәргән булған. Шүлгәнкүлдән[2] бөтә ҡош-ҡорт, кейек-йәнлекте атып бөткән дә был йоҡларға ятҡан. Шунан быға Шүлгәнкүлдең хужаһы килеп сыҡҡан. Әйткән: «Атма ҡош-ҡортто, ҡырма кейек-йәнлекте. Мин һиңә мал бирәм».

Ҡушлаҡ, риза булып, ҡулындағы ҡошон биргән. Шуға бәрәбәр күл эйәһе тегегә күлдән йылҡы малы сығарған[3]. Тик шуныһы үкенескә ҡалған: күлдән йылҡы малы сыҡҡанда, Ҡушлаҡ артына әйләнеп ҡараған, эркелешеп сығып килгән йылҡы малының яртыһы кире күлгә сумған. Сығып өлгөргәне Ҡушлаҡтыҡы булып ҡалған. Йылҡы малы күп сыҡҡан. Шуны тотам тип Ҡушлаҡ үҙе үлеп киткән. Уның бер улы ҡалған. Малы күп булғанға күрә уны бай улы (байыулы) тип атағандар. Байыулы ырыуы бына шунан башлана. Ул Бөрйән нәҫеленән, Шүлгәнкүлде шуға күрә Йылҡысыҡҡан күл тиҙәр.

## 135. ӘҘӘМ ТАРПАНЫ

Элек бында әҙәм заты булмаған. Көтөү-көтөү тарпан мал йөрөгән, өйөр-өйөр ҡырағай кейек-йәнлек йөрөгән.

Бер әҙәм килеп сыҡҡан да тарпан малды тоторға уҡталған.

Мал быға баш бирмәгән, ошо яҡҡа тартҡан. Теге әҙәм, мал артынан эйәреп, Туҡ буйына килеп сыҡҡан. Бәрәстауға[1] килеп еткәс, малды юғалтҡан. Аптырашта ҡалған был. Ҡайҙа барырға белмәй йөрөп ятһа, күрә: бер тай йөрөп ята. Тота был тайҙы, менеп атлана ла ҡамсыһы менән һуға. Шул саҡ тай бер һылыу ҡыҙға әйләнә. «Һуҡма минә, ағай, мин һинең яҙмышың», — ти был. Был тай — әҙәм тарпаны икән. Шунан былар Туҡ буйында ҡыуыш ҡороп тора башлағандар. Баштай ырыуы[2] бына шунан таралып киткән.

## 136. АЙЫУ АРАҺЫ

Беҙҙә айыу араһы күптән килә. Ул шулай килеп сыҡҡан: бер һунарсы айыу балаһы алып ҡайтҡан. Ҡайтһа: был айыу балаһы әҙәмсә һөйләшә, ти. Ғәжәпһенә был, һораша. Баҡтиһәң, теге төптә айыу балаһы түгел, әҙәм тарпаны икән. Үҫкән һайын был әҙәм затына оҡшай, ти. Үҙе бик ғәйрәтле, көслө булып киткән, ти. Кәләш эйттергәндә уға тиң таба алмағандар. Сыҙатмай үлтереп тик тора икән. Туҡ[1] буйында бер ҡыҙ булған. Ике тирмән ташын ике ҡултығына тығып йөрөр булған. Айыу батыр менән былар көс һынашып ҡарағандар. Икеһенең дә көсө бер булып сыҡҡан. Былар ир менән ҡатын булып тороп киткәндәр. Айыу араһы шунан таралған. Ул беҙҙең Бөрйәндә генә түгел, Үҫәргәндә лә бар. Бик таралған тоҡом ул.

## 137. ШАЙТАН ЫРЫУЫ

Бер башҡорт ҡарты шулай урманға һунарға китә. Шунда ул кеше ҡиәфәтендәге шайтанды осрата. Тәү күреүҙә уның шайтанмы. кешеме икәнен дә айырғыһыҙ икән. Шайтан быға:

— Әйҙә, киттек минең менән, — тигәс, ҡарт, уны-быны уйлап тормай, тота ла китә. Шул ике арала ҡараңғы ла төшөп өлгөрә. Шайтан тағы:

— Әйҙә, йоҡларға ятайыҡ, — тигәс, был да ҡарышып тормай. Яталар былар. Тик ҡарт, йоҡлаған кеше булып, шайтанды аңдып ята. Бер саҡ шайтан ауыҙынан ут сыҡҡанын күреп ҡала был. Шунда эштең ниҙә икәнен һиҙеп ала ла, тороп, сытыр-сатыр өйөп, сәкмәне менән ҡаплап ҡуя. Үҙе, бер яҡҡараҡ китеп, ни булыр икән, тип күҙәтә башлай.

Шайтан ауыҙынан сыҡҡан ут сәкмәнен ялмап алғас, ҡарт мылтығын тоҫҡап, шайтанға атып ебәрә. Шайтан һикереп тора ла, алдын-артын да ҡарамай, йүгереп сығып китә. Ҡарт быны бер тау ҡыуышына кереп киткәнсе күҙәтеп бара. Бер аҙ торғас, тау ҡыуышына керһә, ҡыуышта шайтандың ике бисәһе буҙлашып ултыра икән. Ҡарт был арҙан:

— Хужа өйҙәме? — тип һорағас, былар:

— Өйҙәлеген өйҙә лә, бик ҡаты ауырып ята шул, торғоҙорға ярамай, — тиҙәр.

— Улайһа, мин уны һауыҡтыра алам, әйҙә, күрһәтегеҙ, — тип ныҡыша ҡарт. Уны шайтан ятҡан ҡыуышҡа үткәреп ебәрәләр. Шайтан уны танымай ҙа, ти. Ҡарт уға баштан-аяҡ ҡарап ала ла:

— Мин һине һауыҡтыра алам. Тик һиңә бер шартым бар. Һауығыуың хаҡына йәш бисәнде миңә бирерһең, — ти.

Шайтан риза була. Ҡарт бының бисәләрен сығарып ебәрә лә үҙен быуып үлтерә. Аҙаҡ, бисәләр яғына сығып, олоһона:

— Хужаң йоҡоға китте. Ул әле бик оҙаҡ йоҡлар, үҙе тормайынса, уятырға ярамай, — ти ҙә, йәш бисәһен алып, ауылына ҡайтып китә.

Йәш бисә менән ҡарт бик татыу йәшәй. Тик ул берәй ергә сығып китер булһа, йәш бисә һәр саҡ бынан ҡасан ҡайтырын һорап ҡала икән.

Бер саҡ был көтмәгәндә генә ҡайтып керһә, бисәһе ҡулындағы йомарланған йөндө ҡарап ултыра икән. Был килеп кереү менән, бисәһе йомғаҡты һул яҡ ҡултыҡ аҫтына тығып ҡуя һала. Шунда ғына бисәһенең унан бер ҡасан да ҡултыҡ аҫтына ҡағылмауын һорағаны иҫенә төшә.

Йоҡларға яталар. Бисәһе йоҡлап киткәс, был уның ҡултыҡ аҫтын һәрмәп ҡараһа, ҡул һыйырҙай бер тишеге бар, имеш. Был шунда ҡулын тишеккә тығып ебәрә лә бисәһенең йөрәген һурып ала.

Бына шуға күрә лә шайтан бисәһенән таралған был Көҙәй ырыуын Шайтан-Көҙәй ырыуы [1] тип йөрөтәләр.

## 138. ШҮРӘЛЕ НӘҪЕЛЕ

Берәүҙең күк юрғаһы булған. Шул күк юрға көн дә тирләп ҡайта икән. Кис ап-арыу ғына сығып китә, иртәнгә янып-бешеп, тирләп ҡайта. Шунан ни эшләргә? Аңдып бара был, белмәк була. Аңдып торһа, күк юрғаны шүрәле шулай яфалай икән. Күк юрғаның ҡойроғона йәбешеп, һөйрәлеп килә лә, атты тирләтеп, тирен эсеп ләззәтләнә икән.

Шунан был әҙәм бер көндө күк юрғаһын ыҫмалаға буяп ебәрә. Шунан шүрәле күк юрғаға менеп атланған да ҡабаттан төшә алмаған. Йәбешеп, йәйләүгә ҡайтҡан. Теге әҙәм шүрәлене тартып төшөргән дә ярған да ярған. Яра торғас, шүрәле бер бисә төҫөнә ингән. Шунан теге әҙәм, хаҡ яҙғаны ошо икән, тип шул шүрәлене ҡатын итеп алған да ҡуйған [1]. Шул шүрәле бисәнән биш ул тыуған. Бына ошо биш улдың башы ошо ауылда. Беҙҙен Ҡинйәғол ауылын икенсе төрлө Бишул ауылы тиҙәр. Шул ауылда шүрәле нәҫеле лә бар. Бына мин үҙем шул шүрәле тип аталған нәҫелдән (инәй яҡлап), атай яҡлап ҡыпсаҡҡа ҡарайбыҙ. Ен-ҡыпсаҡ тип йөрөтәләр.

## 139. ЯРЫМТЫҠ АРАҺЫ

*(вариант)*

Күптән булған хәл был.

Беҙҙең бер ҡарт шулай урманға китә. Шунда ҡунып ҡалырға тура килә быға. Йоҡоға ғына киткән икән, кемдер сәсенән тартҡылай башлай. Күҙен асып ҡараһа, алдында бер ярымтыҡ (шүрәле) баҫып тора, ти. Ҡарт шунда уҡ уҡ-һаҙағын ала ла ярымтыҡҡа атып та ебәрә. Ә ярымтыҡ атҡан уҡты ҡулы менән эләктереп ала ла бөгөлә-һығыла:

— Йә, тағы ат, — ти икән.

Ҡарт бының хәйләһен һиҙеп ала: әгәр ҙә ул тағы бер атһа, ярымтыҡ тәүге уҡтан йәйә яһап, икенсеһе менән үҙен атып үлтерәсәк бит. Шунда ул ярымтыҡҡа:

— Ярай, мин һиңә ҡунаҡҡа ғына барырмын инде, — ти. Был ваҡытта ҡарт әле йәш була. Барһа, бының бер ҡыҙына күҙе төшөп, кәләшлеккә һорай. Ҡыҙ бик тә һылыу икән. Был шулай, ярымтыҡ ҡыҙын ауылына алып ҡайтып, йәш кәләш менән һинт дә мин донъя көтә башлай. Балалары ла була. Уларҙан тараған ярымтыҡ араһы Танып [1] ауылында әле лә бар.

## 140. БИРЕЛӘР АРАҺЫ

Олатай ҡарт Бабсаҡ бей [1] — Ҡыпсаҡ ырыуының батыры. Уның улы — Күсәк бей [2]. Күсәк бейҙән тыуған Тимер ҡарт булған. Тимер ҡарттан тыуған Ҡолҡаман, Ҡолҡамандан тыуған Түрмән ҡарт.

Бер ваҡыт Түрмән һунарға сығып китә. Бер тау төшкәс тә, һыңар саңғы эҙе күрә. Артынан бара был, абайлап ҡарай. Был заттың аяғы икәү булып сыға, ә ул үҙе Бире затынан икән. Бирене баҫтырып килеп етә, ә теге Бире болан һуйып торған була. Ҡурҡышынан боландың яртыһын Түрмәнгә бүлеп бирә был.

Көн кисәйеп китә. Ҡарағай ботағын яғалар ҙа, былар ошонда кисләргә булалар. Түрмән ит бешереп ашай. Йоҡларға яталар. Бире тимер шеште утҡа һала. Бире һорай: «Түрмән, һин ҡалайтып йоҡлайһың?» Түрмән әйтә: «Мин тыш-тыш итеп йоҡлайым, ә һин үҙең нисек йоҡлайһың?» — ти. «Мин йоҡлағанда ауыҙымдан ут сәсрәп, осҡондар боҙрап тора», — тигән Бире. Бире йоҡлап киткәс, Түрмән үҙенең урынына бер сөрөк киһкә килтереп һала ла Биренең йоҡлауын күҙәтә.

Бире һикереп тора ла:

— Түрмән ағай «тыш» итә, тимер шешем «пыш» итә, — тип һамаҡлай-һамаҡлай сөрөк киһкәне бешекләй. Шул саҡ Түрмән Бирене атып ебәрә. Ул яралана һәм тау тишегенә инеп китә.

Түрмән ҡырҡ ҡосаҡ сыра әҙерләй ҙә уның артынан инә. Тау тишегендә өс ҡыҙы менән бер әбей ултыра икән. Әбей Түрмәндән: «Һин ни эшләп килдең, ниндәй һөнәрең бар?» — тип һораған.

«Мин ауырыу кешеләрҙе йүнәлтәм», — тигән Түрмән. Әбей Түрмәнгә: «Ат башындай алтын бирермен, минең ирем ауырый, шуны дауала», — тигән. «Миңә үҙ ҡыҙыңдың береһен бирһәң, шәбәйтәм», — тигән Түрмән. Әбей риза була. «Минең дауам килешер булһа, ул аҡырыр ҙа баҡырыр, ә һеҙ ҡамасаулап йөрөмәгеҙ, уның янына килмәгеҙ», — тигән Түрмән. Түрмән Бирене сәнскеләп-бешекләп үлтерә. «Ул талып йоҡлай, үҙ күңһеҙ ҡарамағыҙ», — ти ҙә был ҡыҙҙарының береһен үҙе менән алып сығып китә.

Түрмән шул үҙе алып ҡайтҡан Бире ҡыҙы менән оҙаҡ ҡына ғүмер итә. Шул ҡатындан тугыҙ ул тыуа. Тимер ауылында йәшәгән кешеләр ана шул Бире нәсәбенән йәйелгәндәр. Шуға Тимерҙә йәшәүселәрҙе биреләр тип йөрөтәләр.

Ауылдың халҡы Ҡарағай-Ҡыпсаҡ ырыуына ҡарай.

## 141. ГӘЙНӘ ЫРЫУЫ

Гәйнә батыр булған. Ул бында болан[1] ултырып килеп сыҡҡан. Ул саҡта ер йөҙө бик һалҡын булған. Ни өсөн тигәндә, ул саҡта ҡояш булмаған. Толтау[2] артындағы аждаһа ҡулында булған ул ҡояш. Гәйнә батыр килгән дә, аждаһаны тураҡлап, ер аҫтынан ҡояшты сығарған. Болан мөгөҙөнә элеп, уны Тол[3] йылғаһының был яғына алып сыҡҡан. Ҡояш киткән күтәрелеп, Гәйнәгә әйткән: «Көн дә мине ошо ваҡытта күт», — тигән. Гәйнә ҡояшты көткән. Ҡояш һәр көн бер ваҡытта килә икән был ергә. Шулай һәр көн ҡояшты көтөп торғас, Гәйнә ошо ергә эйәләшеп киткән. Уны ташламаç булған. Төйәк ҡорған. Шунан Гәйнә ырыуы[4] таралған. Гәйнәләр башҡорттоң иң төбө була.

## 142. ТОЛБУЙҘАР

Элек был яҡҡа, болан егеп, ике ағай-эне килеп сыҡҡан. Береһе Әйнә исемле, икенсеһе — Гәйнә. Икеһенә ике болан, икеһе лә — аҡ болан. Килһәләр, был ерҙә бер зат та юҡ. Ҡуйы урман, үлән күп. Боландарын ебәрәләр ҙә ятып йоҡлайҙар. Иртән торһалар, боландары ҡайтып килгән. Тирләп-бешеп, янып, ҡарайып бөткәндәр. Икенсе көн былар боландарын ебәрәләр ҙә һағалап тормаҡ булалар.

Тәүҙә Әйнә китә боланы артынан. Китә-китә был, бер аҙ барғас күрә: урмандан оҙон сәсле бер йөнтәҫ әбей килеп сыға ла боланды тотоп атлана. Был — шул ерҙең хужаһы икән. Исеме уның Тулауа[1] булған, үҙе ар затынан[2], ти. Бик йәмһеҙ нәмә, ти, был, үҙе яланғас, ти, тәне йөнтәҫ, ти, ике имсәге ике яҡҡа һалынып төшкән, ти. Бер имсәген елкәһенә ташлаған, ти. Икенсеһен биленә ураған, ти, был. Боланға атланған да саба, ти. Әйнә, тегене күргәс, ҡурҡышынан ҡысҡырып ебәргән. Тулауа килгән дә: «Әһә, мине һағалап йөрөйһөңмө?» — тип Әйнәне сөйөп ташлаған. Шунан табанын тишеп, ҡанын һурған.

Әйнә әйләнеп ҡайтмаған, икенсе көн Гәйнә килгән. Килһә — шул уҡ хәл: ҡот осҡос әбей боланды ыҙалап йөрөй. Гәйнә быны һағалап тора ла ҡороҡ һала. Ҡороҡ менән болан башынан һөйрәп төшөрә лә, сәсен уратып алып, әбейҙе ҡамсы менән яра башлай. Бер тамыҙып ала был, ике тамыҙып ала. Әбей бер һылыу ҡыҙға әйләнеп китә.

— Ағаҡайым, ярма мине, — ти был, — мин һинең ҡатының булырмын.

Гәйнә тегене боҙоҡ эштәр артынан йөрөмәҫкә ант иттерә. Сәсенән тотоп болан мөгөҙөнә бәйләп, үҙенә алып ҡайта. Ана шулай итеп, Әйнәһе ҡала үлеп, Гәйнәһе ҡала тороп, ил ҡороп.

Тулауанан таралған булғанға элек был илде Тулауайҙар (Тулбуйҙар) тип йөрөткәндәр. Бына ошо Тол йылғаһын ике яҡлап ултырған ил була. Йәмғеһе алтмыш ауыл. Гәйнә тигәндәре лә шул була. Беҙ үҙебеҙ шул Гәйнәнеке. Ә тауыбыҙҙы Толтауы тиҙәр, йылғабыҙҙы Тол йылғаһы, тиҙәр.

## 143. ӘЙНӘ МЕНӘН ГӘЙНӘ

Элек ҡояш Тол аръяғында булған. Уны бер убырлы ҡарсыҡ урлаған булған. Урлап шунда, тау артында, ҡуйы урман араһында, бер мәмерйәгә йәшергән дә донъяға сығармай тик тота икән.

Шул саҡ боланға ултырып, Әйнә менән Гәйнә килеп сыҡҡан, һунар итеп йөрөй икән былар. Килә торғас, быларҙың боланы тыбырсына башлаған. Төшөп, абайлабыраҡ ҡараһалар, аяҡ аҫты шундай ҡыҙған, баҫып тормалы түгел, ти. Болан тибенә башлай. Ул тибенгән ерҙән генә ер ярыла, ут сығып китә[1]. Был мәмерйә түшеге икән. Теге ҡарсыҡ оло таш менән ҡаплап ҡуйған икән ул мәмерйәне. Әйнә менән Гәйнә ҡояшты ҙур болан тиреһенән эшләгән ҡуржынға һалалар ҙа Тол буйына алып китәләр. Был саҡ убыр өйҙә булмай ҡала. Йылға буйына килеп етеүгә, арттарынан убыр ҡарсыҡ ажғырып килә. Былар тиҙ генә ҡуржынды болан мөгөҙөнә эләләр ҙә, йөҙөп, Толдоң был яғына сығалар. Шулай ҡотолалар. Убыр Толдоң был яғына сыға алмай икән.

Толдоң был яғына сыҡҡас, былар иркенләп алып, ҡуржынды сисеп ебәрәләр. Ҡояш донъяға сығып китә.

Әйнә менән Гәйнә шунда Тол буйында тороп ҡала. Ил ҡоралар былар, мал аҫрайҙар. Быларҙан таралған халыҡты гәйнәләр тип йөрөткәндәр. Гәйнәне ҡайһы ерҙә Толбуйҙар тип тә әйтәләр.

## 144. ЮРМАТЫ ҠӘБИЛӘҺЕ

Бер ваҡыт һунарҙа йөрөгәндә Юрмый хандың берҙән-бер улы аҡҡош атып алайым тип уғын тоҫҡаған икән, теге аҡҡош бик сибәр бер ҡыҙға әйләнгән дә ҡуйған. Егет быға өйләнгән. Уларҙан үрсегән нәҫел Юрматы ҡәбиләһе булып ҙурайып киткән[1].

## 145. ЮРМАТЫ, ТӘЛТЕМ ЫРЫУҘАРЫ

Борон бер ҡарттың байтаҡ ҡына улдары булған. Ата кеше һунарға йөрөгән: айыуға ҡапҡан ҡуйған, һуҡыр сысҡан тотҡан. Ыжғыр бурандарҙа былар тирмә эсендә, аяҡтарына болан тиреһе түшәп, өҫтәренә айыу тиреһе ябынып көн күргәндәр.

Йылдар һыпырылып үткән. Малайҙар ҙа ҡолонсаҡ кеүек төрөмөк, атаһы кеүек сос булып үҫә биргәндәр. Атаһы улдарының ни менән булашҡандарына күҙ һалып йөрөр булған.

Иң оло өс улы һәр саҡ яланға сығып, ағас бысаҡ менән сиҙәмде телгеләйҙәр икән. Ә кесерәктәре атаһы көйләп биргән кескәй балта менән гел ағас юналар икән, ҡарағай сайырына буялып, ҡулдарына шырау ҡаҙатып ҡайталар икән.

Ҡарт ҡарсығы менән кәңәшләшә лә балаларҙы таратырға була. Ул иң кесе өс улын урманлыҡҡа алып килә лә:

— Һеҙ гел юнышаһығыҙ, әйҙә, солоҡ юнып, ҡорт аҫрағыҙ. Һеҙҙең атығыҙ * Юн булһын, — тигән.

Балалар шунда ҡалып, тормош ҡороп ебәргәндәр. Эре-эре ағас башына солоҡ юнғандар. Уларҙың балалары, шул тирәлә тормош ҡорған. *Ошо ырыу кешеләрен тора килә* Юнаты башҡорттары тип исемләгәндәр. Килә-килә шул Юнаты Юрматы [1] булып киткән.

Ә ҡалған улдарын бабай: «Былары талтымыраҡ, уңғанырак, әйҙә, иген үҫтерһендәр», — тип, Ашҡаҙар [2] менән Иҙел [3] араһындағы яланлыҡҡа урынлаштырған. Шунан уларҙың ырыуы Талтым тип исемләнгән. Талтым халыҡта Тәлтем [4] тип йөрөтөлә. Тәлтем башҡорто шунан ҡалған.

## 146. БӨРЙӘН НӘҪЕЛЕ

Борон Ағиҙелдең түбән яғында Ҡыпсаҡ башҡорттары йәшәгән. Ағиҙелдең үрге яғында Бөрйән башҡорттары көн иткән. Уларҙың батыры Ҡарабатыр исемле булған. Урал батыр, үҙ ғәскәре менән ике тау араһында ятып, Ҡыпсаҡ башҡорттарына яу ебәрмәйенсә, һаҡлап торған.

Берҙән-бер төндә, Урал батыр йоҡлаған саҡта, Ҡарабатыр килеп уны үлтергән. Урал батырҙың бисәһе тол ҡалған. Был бисә үҙе бик һылыу, үҙе йәш булған. Ҡарабатыр уны үҙенә бисә итеп алмаҡ булған. Тик бының башына ошондай уй төшкән: «Әгәр был ҡатын Урал батырҙан гөманлы булып ҡалған булһа, улы тыуасаҡ: ул малай үҫкәс, атаһы өсөн мине барыбер үлтерер. Был бисәнән һорашайым да сараһын күрәйем», — тип уйлаған был. Әлеге тол бисәне саҡыртҡан да был һораған: «Һин гөманлы * булып ҡалманыңмы?»

Теге бисә әйткән: «Юҡ, — тигән, — мин буйҙаҡ, — тигән, — ышанмаһаң, дәлилгә, ана, тана һыйырҙың эсен ярып ҡара, — тигән. — Әгәр ул быҙаулы булһа, мин дә гөманлы булырмын, — тигән, — әгәр ул ҡыҫыр булһа, мин гөманһыҙ», — тигән. Ҡарабатыр тотҡан да шул тана һыйырҙы һуйып ҡараған. Әмәлгә ҡалғандай,

тананың эсенән бер нәмә лә сыҡмаған. Шунан һуң Ҡарабатыр, был бисәнең гөманһыҙ икәненә ышанып, өйләнгән. Тыныс ҡына йәшәй башлаған.

Бер ваҡыт Ҡарабатырҙың бисәһенән ул тыуа. Малай бик теремек икән: ай үҫәһен көн үҫеп, йыл үҫәһен ай үҫеп, шунда уҡ егет булып та еткән был. Бер саҡ егетте бер әбей тотоп ала ла: «Улым, һинең атайың кем, беләһеңме? Белмәһәң, бел: атайың Ҡарабатыр түгел. Һинең атайың Урал батыр ине», — тип баяғы хәлде егеткә һөйләп бирә. Егет шунан атаһының ҡопон алмаҡ була. Килә лә был Ҡарабатыр ҡашына, әбей һөйләгән һүҙҙәрҙе әйтеп аңғарта ла бер һуғыуҙа йәнен ала. Шунан кәүҙәһен, ҡара һыйыр муйынына еп менән тағып, тау үренә һөйрәтеп сығарып ебәрә. Ҡарабатыр мәйете ҡалған шул тауҙы Ҡарабатыр тауы тип йөрөтә башлағандар.

Ҡарабатырҙы үлтергәс, Урал батырҙың улы, Ҡыпсаҡ нәҫеленән ғәскәр йыйып, Бөрйән менән һуғыша башлаған. Бөрйән иренә килеп, бөтәһен дә ҡырып бөтөргән. Ахыр сиктә бер генә ир йәнен тере ҡалдырған. Бына ошо бер ир йәненән йыйылған нәҫелде бер йән (Бөрйән) тип йөрөтә башлағандар [1].

## 147. ҠЫПСАҠТАР

Ҡыпсаҡтар элек бик күп булғандар. Беҙҙең яҡта ғына ла байғаҡ Ҡыпсаҡ ырыуы йәшәгән. Уларҙың һәр береһенең исеме булған: ҡарағай ҡыпсағы, һәүен ҡыпсағы, сәнкем ҡыпсағы, ҡара ҡыпсағы. Ҡыпсаҡ [1] ауылынан бире ун икеме, ун өсмө ауыл, ә Ирәндек аръяғында егерме икеме, егерме һигеҙме ауыл. Ҡарағай ҡыпсаҡ беҙҙеке, ә ҡарый ҡыпсаҡ Үҙәндеке [2], икенселәр түбәндәләр. Һәүен ҡыпсағы Нөгөш [3] буйында. Сәнкем ҡыпсағы Ырымбур яғында. Ҡарағай ҡыпсаҡтарының атаһы был яҡҡа килеп, һөйләшеп, ер алып килеп ултырған ырыу йәйергә. Шулай итеп, ҡыпсаҡтар был тирәгә килеп мәҡам тотҡандар *. Уларҙың ҡайҙан килеп, ҡасан ғүмер һөрә башлауҙарын асыҡ әйтә алмайым. Был хәл бик борон булған.

## 148. ҮҪӘРГӘНДӘР

Минең атайым — Байрамғол исеме — боронғоно, ырыу тарихтарын, ауыл тарихтарын күп белә торғайны. Бала сағымда, үҫкәсерәк унын ололор менән һөйләшеп ултырғандарында гел тыңлай инем. Күбеһе хәҙер онотолған. Беҙҙең ырыу — үҫәргәндәр тураһындағы һаман иҫемдә.

Үҫәргәндәр борон бик ҙур ырыу булған, ти ине атайым. Көньяҡ Урал, Һаҡмар, Яйыҡ, Илек буйҙарында ғүмер иткәндәр. Көнкүрештәре малсылыҡ, йылҡысылыҡ булған.

Үҫәргәндәрҙең бабаһы — Муйтән бей. Шыма тәнле булғанға уны Муйтән тигәндәр. Муй — үҫәргәндәр һөйләүендә — шыма ти-

гән һүҙ. Муйтән — шыма тәнле булып сыға ине. Әле лә беҙҙең яҡта, мәҫәлән, һөйәкте муйын бөткәнсе кимерә, тиҙәр. (Муйын бөткәнсе — шымартып бөткәнсе.) Муйтән бейҙән таралған үҫәргәндәргә бер заман монголдар ябырыла. Үҫәргәндәрҙең Яйыҡ буйлап, Һаҡмар буйлап үҙҙәренсә ныҡытмалары, яу ҡайтарыр постары була.

Монголдарҙы шул крепость кеүек ныҡытмаларында йәшеренеп ҡаршылайҙар. Яман ҡаты һуғыш була. Ике яҡтан да күп халыҡ ҡырыла. Ышыҡта булғас, оборонала Үҫәргәндәр әҙерәк ҡырыла.

Һаҡмар буйлап Һарыҡташ менән Ҡыуандыҡ[1] араһында бер һырт һуҙыла. Шул һырт буйлап яу бик ҡаты булған. Был һыртты Яутүбә, ти халыҡ. Шул замандағы яуҙан ҡалған исем.

Шундай ҡаты ныҡытылған бер нисә крепостной посты көскә алғас, монголдар туҡтап ҡала. Нишләргә? Ары һуғышырғамы был халыҡ менән? Уйлайҙар: быларҙы тигеҙ ерҙә, далала, еңеп сығырлыҡ түгел, ҡыҫмаҡлап ары китһәң — урман, тау. Унда быларҙы ҡыйратыу, еңеү еңелдән булмаҫ.

Хәл ҡылалар — ары урман, тауға үтмәҫкә. Яйыҡ буйлап көньяҡлап быларҙы ситтә ҡалдырып, көнбайышҡа үтергә.

Шулай Яйыҡ буйында Үҫәргәндәр ҡаты яу биргәндән һуң, монголдар Уралға үтмәй, Яйыҡ түбәнләп Болғар, Рус дәүләте яғына уҙалар яу менән. Болғарҙарҙы, рустарҙы еңгәс кенә, кире ҡайтып, башҡорттарҙы үҙҙәренә буйһондоралар. Үҫәргәндәр ҙә ҙур ырыу булһа ла, үҙҙәре генә еңерлек булмай, баш эйергә мәжбүр булалар.

Монголдар үҫәргәндәргә бик теймәй. Уларҙың ҡаты һуғышсы икәнен күреп, үҙ армияһына ылыҡтырырға тырыша. Бейҙәренә, ҙур түрәләренә дәрәжәләр, байлыҡ, үҙ ерҙәренә үҙҙәре хужа булыу хоҡуғы ҡалдырып, үҫәргәндәрҙән ғәскәр йыйҙырталар.

Шул ғәскәр менән бергәләп төньяҡҡа табан яуға сығалар. Рязань кенәзлеген барып баҫалар. Ока буйҙарында ер-тәбиғәт матурлығын, туғайҙар тулы мал утлар үлән күплеген, урманын оҡшатып, үҫәргәндәр шунда төпләнмәк булалар.

Үҫәргәндәр борон алыҫ яу сапһалар, бөтә бала-сағаларын, бисәләрен, мал-мөлкәтен арбаларға тейәп, дөйәләргә артмаҡлап бергә алып йөрөр булғандар. Был яҡтарға ла улар шул бар донъялары менән бергә килгәндәр. Ока буйҙарында йорт-ҡура ҡораштырып, тирмәләр ҡороп йәшәп тә киткәндәр.

Үҫәргәндәрҙең ырыу ағасы — мышар. Шуға үҫәргәндәрҙең яусыллығынан, даусыллығынан уларға былар мышар ҡанлылар тип тә әйткән бөтән ырыу, халыҡ.

Шул үҫәргәндәр — мышарҙарҙы аҙаҡ был тирә халыҡ «мышар ҡанлылар», «мышарҙар» тип исемләй башлаған. Мышар яйлап «мишәр» тигәнгә үҙгәргән. Хәҙерге Ҡасим мишәрҙәренең бер өлөшө — үҫәргән ырыуынан.

Үҫәргәндәрҙең хәҙерге һөйләшеүе менән мишәр теле араһы бик яҡын. Күп боронғо һүҙҙәр, йолалар уртаҡ. Мишәрҙәр «ғ» хәрефен төшөрөп ҡалдырып, «Ғайса» тимәй, «Айса» ти, «Ғәйшә» тимәй, «Әйшә» ти. Хәҙерге үҫәргәндәр ҙә шулай һөйләшә. Рәүеш-

кә — эсе серей башлаған ағас. Үҫәргән дә, мишәр ҙә шулай ти. Татарҙа ул һүҙ юҡ.

Һаҡмар, Яйыҡ, Илек буйында ҡалған үҫәргәндәр борон бик иркен йәшәгән. Йәйләүлек, ҡышлаулыҡ ерҙәре күп булған ишле мал-тыуар өсөн. Йәйгеһен йәйләүгә малдарҙы Яйыҡ, Һаҡмарҙан Илек аръяғына, Турғай далалары яғына ҡыуғандар. Уйыл, Тубыл, Турғай яҡтары хатта күп саҡ буш ятҡан. Ҡаҙаҡ менән башҡорт араһында әллә ни саҡлы нейтраль полоса булған. Ул ергә ҡаҙаҡтар ҙа, башҡорттар ҙа мал ҡыумаған. Быны элек «Дикое поле» тип йөрөткәндәр.

Бер заман ҡалмыҡтар көнсығыштан Алатау, Балхаш яҡтарында ҡаҙаҡтарҙы ҡыйратҡас, күп ҡаҙаҡ ырыуҙары көнсығышҡа, гәньяҡҡа ҡасҡан. Ҡаҙаҡтар ул ауыр заманды «ҡырғын заман» тиҙәр.

Шул ҡалмыҡтан ҡасҡандар башта «Дикое поле»ға килеп тулалар. Унан уҙып, Яйыҡ буйына килеп сығалар. Хатта башҡорттарҙы Уралға ҡыҫмаҡлай башлайҙар.

Был ҡаҙаҡтар ҡалмыҡ яуынан йортон-ерен ҡалдырып, күптәре ғаилә, мал-тыуарынан яҙып, ҡаҙаҡ-ҡасаҡ булып ҡасып киткәс, башҡорттоң малын, ерен талауҙан, ҡыҙҙарын, бисәләрен урлауҙан да буш ҡалмайҙар. Шулай ике арала барымта, ҡарымта китә. Йорт-ер баҫып, мал-тыуар әйҙәп китеш.

Яйлап башҡорт-ҡаҙаҡ татыулашып, туғанлашып, ҡоҙа-ҡоҙағый булышып та китә. Шуға беҙҙең яҡта үҫәргәндәр араһында ҡаҙаҡ аралары ла күп бит. Хәйбулла, Баймаҡ яғы ла шулай.

## 149. ТҮҢГӘҮЕР ҠӘБИЛӘҺЕ

Бик борон заманда Аҡ диңгеҙ буйының Мәкин тигән ҡалаһында бер хан йәшәгән. Был хандың Күләмәлек-Ҡурҡлыҡ исемле бик сибәр ҡыҙы булған. Атаһы уны кеше күҙенән йәшереп зинданға ябып ҡуйған. Бында ул ҡояш нурҙарынан гөмәнлы булған. Асыуы килгән хан ҡыҙын көмөш кәмәгә ултыртып, Арал диңгеҙенә ағыҙып ебәргән. Ҡәмәне бөрйән менән түңгәүерҙәрҙең ата-бабалары күреп ҡала. Яр буйында ҡарап торғанда уҡ, былар табышты үҙ-ара бүлешеп тә ҡуя: кәмә — бөрйән батырына, кәмә эсендәге кем — түңгәүер батырына буласаҡ. Ҡәмәне тотоп алһалар — уның эсендә хан ҡыҙы, ти. Түңгәүер батыры был сибәр ҡыҙҙы кәләш итеп ала [1]. Уларҙан аҙаҡ Түңгәүер ҡәбиләһе [2] тарала.

## 150. ТАБЫНДАР

Бик борон заманда табындар Алтайҙа йәшәгән. Табып исеме үҙе хатта Алтай тигәнде аңлата (?). Ҡасандыр уйғырҙар ҙа Алтайҙа торған. Беҙҙең ата-бабаларыбыҙ уйғыр булған. Бер ваҡыт табындарҙың рәйесе ырыуҙаштарын Алтайҙан Иртыш яғына алып киткән. Башлыҡтарының ҡыллы уйын ҡоралы булған. Иртыш тул-

ҡындары тауышына әсирләнеп, ул көй сығарған. Был көйҙө табындар әле лә йырлайҙар. Иртыш буйында халыҡ бик күбәйгәс, табындар Ағиҙел буйына күсеп килгән.

## 151. ӘЙЛЕЛӘР МЕНӘН ТАБЫНДАР

Әйлеләр бында табындарҙан элегерәк килгән. Уларҙың ҡайһылары аҫаба булып киткән, ҡайһылары ебәрелмеш булып ултырған. Был хәл шулай килеп сыҡҡан.

Ысынмылыр, түгелме, табындар Урал һыртының теге яғынан килгән, тип һөйләйҙәр; ҡара-табындар менән барын-табындар, имеш, бында Уй[1] йылғаһының башынан күсеп ултырған, тип тә әйтәләр. Ике яҡты ла — әйлеләрҙе лә, табындарҙы ла бер саҡ аҡ батша[2] үҙенә саҡырып ала. Бөтәһе ун ике кеше китә. Әйлеләр ебәргән кешеләр батшаға барған ерендә үлеп ҡала, ә табындыҡылар кире әйләнеп ҡайта. Аҡ батшанан улар, бөтә был ерҙәр һеҙҙеке, тигән ҡағыҙ алып ҡайта[3].

## 152. ӘЙЛЕЛӘР, МЫРҘАЛАР, ТЫРНАҠЛЫЛАР

Борон беҙҙе Һырдаръя башҡорттары тип йөрөтә торғайнылар. Беҙҙең ата-бабаларыбыҙ Һыр йылғаһы буйындағы Ҡайып тигән урында йәшәгән. Бер бик бай бабабыҙҙың күк аты менән бейәһе, Ғәҙелбаныу исемле сибәр ҡыҙы юғала бер замандан. Өс егет быларҙы эҙләргә сыҡҡан. Эҙ юллап килә торғас, Торғаяҡтан алыҫ булмаған бер урында ҡыҙҙы табалар. Йылҡыларҙың эҙе Уралға табан киткән була. Яйыҡты үтеп, Әй буйына килеп сығалар былар эҙ юллап. Тәбиғәттең матурлығына егеттәрҙең иҫе китә: ҡуйы урмандар, мул һыулы йылғалар, үҙәндәр. Был тирәлә кешеләр булмаған. Егеттәр бер йылғаны Әй, икенсеһен — Үҙән, улар араһындағы тауҙы Ҡөҙрәттау тип атаған. Бер бәләкәйерәк йылға буйында улар үҙҙәренең аттарын да табып ала. Һырдаръя буйына ҡайтҡас, үҙҙәре күргән хозур ерҙәр тураһында һоҡланып һөйләп биргәндәр. Шунан Һырдаръя башҡорттары Уралға күсеп килгән. Күсеп килеүселәр араһында Мырҙабәк, Имса, Тумса исемле арҙаҡлы кешеләр була. Мырҙабәк — мырҙаларҙың[1], Имса — тырнаҡлыларҙың, уның энеһе Тумса — әйлеләрҙең ата-бабаһы.

## 153. УРМАН-КӨҘӘЙҘӘР

Беҙҙең ата-бабабыҙ Урман исемле булған. Уның атаһы — Күкән, олатаһы — Күкбүре. Урман үҙенең ырыуы менән Уралдан алыҫ Ҡысындыҡ тигән урында күсеп йөрөгән. Бер ваҡыт унда ҙур яу башланған. Урман Ҡалман тигән ҡарт менән бергәләп Минзәлә йылғаһы[1] буйына күсеп килгән. Ул ерҙә улар оҙаҡ ҡына йәшәгән.

Бер саҡ Ҡыҙрас исемле башҡорт Ҡазанға китеп барышлай, Урман ырыуының аҡ тирмәләрен күреп, быларға ҡунаҡҡа төшкән. «Минең ырыуҙаштарым алыҫ Уралда йәшәй», — тигән Ҡыҙрас Урманга. Күп тә үтмәй Урман үҙенең ырыуы менән Асылыкүлгә, ә унан Эҫем буйына күсеп ултырған.

## 154. ТАМЪЯН ЫРЫУЫ

Тамъяндар был яҡта ике төбәктә: Иҙел башында, Нөгөш[1] буйында йәшәй. Беҙҙең яҡта Тамъян ырыуы ауылдары: Ҡаһарман, Хәмит, Ырсыҡай, Хөсәйен. Бер аҙ ҡатыш Аҙнаҡол. Унан Әбйәлил ягының бер өлөшө.

Тамъяндарҙы бик борон Алтай ягынан күсеп килгән, тиҙәр. Тамъян бей башлыҡтары булған. Исеме шунан ҡалған.

Тамъян бей менән Төмән бей ҙә күскән. Уны бик бәһлеүән булған, тиҙәр. Үҙе ғәскәр башы икән. Борон был яҡтарҙа һуғыштар булған. Ниндәйҙәрҙер, әйтә алмайбыҙ.

Ырыу башы Тамъян да бик батыр кеше булған. Шул хәтле ырыуҙы туплап тотоп торған. Һәйбәт ерҙәрҙе үҙ ырыуына ныгытып ҡала алған. Шуға борон Тамъянды маҡтап йырауҙар йырҙар сығарған, тиңһеҙ батыр, аҡыллы аҡһаҡал, ырыу башы, ырыу ҡото итеп маҡтаған.

Ҡазанды урыҫ батшаһы алғас[2], шул аҡ бей батшаға барып ерҙәрҙе ялғатып ҡайтыу эшен Шәғәли Шаҡманға ҡушҡандар аҡһаҡалдар. Шәғәли Шаҡман — Шәйғәле аҡһаҡал улы.

Ололар һөйләүенән, Мәскәүгә Үҫәргәндән Бикбау кенәз, Ҡыпсаҡтан Ҡара Ҡужаҡ, Бөрйәндән Иҫке бей, Тамъяндан шул Шәғәли Шаҡман барған[3]. Шәғәли Шаҡман ҡәбере зыяратыбыҙҙа әле лә ҡәҙерләп һаҡлана. Ҡәбере үтә дәү, унын яҡшы атын да күмгәндәр, тиҙәр.

Шәғәли Шаҡмандан ете быуын килә. Тәүгеһе — Ҡаһарман батыр. Ул ошо ауылыбыҙҙы нигеҙләгән. Ауылдың исеме шул батырҙан ҡалған. Беҙҙекеләр элек тау эсендәге иҫке ҡышлауҙа йәшәгән. «Тыранса ҡыуыш» тигән ерҙәребеҙ йәйләү ерҙәре булған. Ҡаһарман батыр ошо урынға ултырғас, ил йомошо менәнме, нисек, Мәскәүгә барған икән. Нишләптер, унан Ҡаһармандың ярты сәсен алып ҡайтарғандар.

Тамъяндарҙың күп ерҙәре аҙаҡ урыҫ заводсыларына һатыла. Шунан бүтән халыҡ килеп ултыра.

## 155. ҠУБӘЛӘК-ТЕЛӘҮ ЫРЫУЫ

Күбәләк менән Теләү бер туған ағай-эне булған. Улар, атаәсәләре үлгәс, бик алыҫтан, Алтай тауҙары яғынан килеп, ошо Урал буйҙарына төпләнгәндәр. Ҡәләш алып, донъя көтөп нәҫелырыуҙары үрсеп киткән. Хәҙер Күбәләк нәҫеленән таралған ырыу — 19 ауыл. Теләүҙән таралғаны — 22 ауыл. Табындар менән бик дуҫ-иш, ырыуҙаш булып киткәндәр.

Борон был ырыуҙың шәжәрәһен оло ҡарттар яҙып барған булғандар. Тик ул шәжәрә юғалған. Элек ололар һөйләүе буйынса, шулары ғына иҫтә ҡалған: Иван Грозный батша Ҡазанды алғас, Ҡыбәләк-Теләү ырыуы башҡорттары батшаның үҙен барып күрмәк булғандар. Был яҡтан — Шәғәли Шаҡман аҡһаҡал [1], Юрматы ырыуынан — Аҙнай, бөрйәндәрҙән — Иҫке бей. Былар бергәләшеп Ҡазан ҡалаһына барғандар. Бүләк итеп иң яҡшы, шәп йәнлек тиреләрен, башҡорт балын алғандар. Еткәндәр Ҡазанға, тапҡандар батшаны.

Урал тауҙарынан башҡорт илселәре, оло аҡһаҡалдар килгән, тип батшаға әйткәндәр. Ҡиммәтле йәнлек тиреләре, башҡорт балы бүләк иткәс, батшаның күңеле булған. Был илселәр үҙҙәренең хәлен, аҡ батшаға тоғро булырға, хеҙмәт итергә теләктәрен әйткәндәр. Батша быға тағы ныҡыраҡ ҡыуанған. Шунан батша: «Һеҙҙе ни менән бүләкләйем?» — тип һораған.

Илселәр: «Беҙгә ата-бабаларыбыҙ биләгән, ғүмер һөргән ерҙәрҙе ырыуҙарыбыҙға беркетегеҙ. Ер-һыуыбыҙға яттар теймәһен ине», — тигәндәр.

Батша уйлап-уйлап торған да: «Ярай, хуш, һеҙҙең теләктәрҙе ҡабул иттем. Шартым шул: мин, аҡ батша, һеҙҙе үҙемдең ирекле ҡолдарым итеп ҡабул итәм, ата-бабаларығыҙ биләгән ерҙәрҙе ырыуҙарығыҙға беркетәм. Ә һеҙ миңә тоғро хеҙмәт итегеҙ, илем бүләге тип, йыл да әлегеләй йәнлек тиреләре, башҡорт балы килтереп тороғоҙ», — тигән. Илсе ҡарттар шатланып риза булғандар. Батша фарман сығарып, ергә грамоталар биргән. Шәғәле Шаҡман һорағанса, Ҡыбәләк-теләү ырыуына Йыйыҡ башы Ялпаҡтауҙан алып Тораташҡаса ерҙәр тейгән. Аҙнай Ашҡаҙар, Стәрле буйҙарын үҙ ырыуына яҙҙыртҡан. Батша Шәғәли Шаҡманға кенәзлек, Аҙнайға старосталыҡ биргән. Башҡорттоң ерҙәре шунан ныҡ ғынып ҡалған, ере-һыуы күп, иркен булған. Аҙаҡ ҡына ул йә юҡ хаҡҡа һатылып, йә көсләп алып әрәм-шәрәм булып бөткән.

Байым ауылын Байым ҡарт нигеҙләгән. Ул башта Иҙел башында ерҙәр биләгән. Йылҡы аҫраған, һунар иткән, солоҡ тотҡан. Шунан ул ерҙәрен рус байҙары алдап, хәйләләп ҡулдарына төшөргән. Байым ҡарт даулашып ҡарап эш сығара алмағас, ошо яҡҡа күсеп ултырған. Ауылдың нигеҙләнеүенә 250 йылдар тирәһе.

## 156. ҠЫБӘЛӘК-ТЕЛӘҮ НӘҪЕЛЕНЕҢ СЫҒЫШЫ

Элек Сығырлы тигән ауылда бер хан йәшәгән. Ошо уҡ ауылда Баймөхәмәт тигән һунарсы булған. Ҡарттың булған әбейе, ике улы. Береһе — Айбағыш, береһе — Ҡөнбағыш исемле.

Бер көн ҡарт һунарға сығып китә лә бер төлкөгә осрай. Төлкөнө уҡ менән атып ебәрә. Төлкө йығыла. Бабай барып ҡараһа, был — төлкө түгел, хандың бурҙайы икән. Был бурҙай шундай шәп була — кешеһеҙ һунар итеп йөрөй. Ҡарт, ҡурҡып, этте күмә лә ҡайтып китә. Ҡайтҡас, әбейе уның кәйефһеҙ икәнен күреп һорай:

— Һинә ни булды, ниңә күңелһеҙһең? — ти. Бабай хәлде һөйләп бирә. Улар ҡурҡыуға төшәләр. Бабай уйлай-уйлай ҙа әйтә:

— Минең бында йәшәүҙең рәте китте, — ти. — Мине барыбер берәй нәмә эшләтерҙәр, бынан мин китәйем, — ти. — Балалар, үҫкәс, бәлки, мине эҙләрҙәр. Мин көн тыуышына ҡарап юл алам. Ҡайҙа ҡош, мал биҙрәгән, шул ергә барһындар, — ти.

Бабай шулайтып сығып киткән. Ҡуйы урманға барып еткән. Урманда бер йән эйәһе лә күренмәгән. Тик тау башында бер ҡарт намаҙ уҡып ултыра икән, ти. Уҡып бөткәс, бабай уға сәләм биргән. Ҡарт бабайҙан:

— Һин кем? Ҡайҙан киләһең? — тип һораған.

— Илгә илбеҙ, яуға яубыҙ, — тип яуап биргән бабай. — Һин үҙең кем булаһың?

Ҡарт әйткән:

— Мин аллаға табынып, әүлиә булып йәшәйем. Ирәмәл әүлиәмен.

Былар бергә йәшәй башлағандар. Бер аҙҙан ҡарт үлеп киткән. Бабай уны тау башына күмеп, баш осона таш ҡуйған. Үҙе шенсе яҡҡа сығып киткән, ти. Тағы бейек тау янына килеп еткән, ти, был. Етһә — тау башында бер ҡарт намаҙ уҡып ултыра икән.

— Һин кем? — тип һорай икән бабай бынан.

Ҡарт:

— Мин Йәмәл әүлиәмен, — тигән. Былар тағы бергә йәшәп киткәндәр. Ҡарт бер аҙҙан донъя ҡуйған. Бабай уның баш осона таш килтереп, «Йәмәл әүлиә» тип яҙып ҡуйған. Ирәмәл әүлиәне күмгән тау Ирәмәлтау тип аталған. Йәмәл әүлиәне күмгән тауҙы тәүҙә Йәмәл тауы тип йөрөткәндәр. Хәҙер Ямантау тиҙәр.

Бабай, был тирәлә һунарҙың рәте киткәс, Миндәк[1] тауына килгән. Миһле[2] күле әле ул ваҡытта булмаған. Унда батҡаҡлыҡ, тумар булған. Бабай шунда 15 йылдар тирәһе йәшәй.

Бабайҙан тороп ҡалған улдар үҫеп етеп, бик ҡыйыу һунарсы булып киткәндәр, ти. Бер көн улар әсәһенән: «Әсәй, беҙҙең атай булғандыр бит инде? Ул ҡайҙа?» — тип һорай ҡуялар.

Әсәһе бөтәһен дә һөйләп бирә. «Ә хан ниндәй ҡарар сығарған?» — тип һорағандар улдары.

— Үлтерергә тигән ҡарар сығарҙылар, — тигән әсәһе.

— Ә атай нисә йәштә ине?

— Ҡырҡ-илле йәштәрҙә, — ти әсәһе.

— Хәҙер нисә йыл үтте? — тип һорағандар улдары.

— Ун биш йыл тирәһе, — тигән әсәһе.

— Эҙләп китәйек, — тигәндәр егеттәр, — уның өйрәтеп ҡалдырған эҙҙәренән барһаҡ, бәлки, табырбыҙ.

Шунан, уҡ-һаҙаҡ алып, Урал буйына киткәндәр, ти, былар. Ирәмәл тауына килеп етһәләр, бында бер йән эйәһе лә юҡ, ти. Ташты күрәләр ҙә яҙыуҙы уҡыйҙар. Шунан тағы ары, ҡош биҙрәгән ергә табан киткәндәр. Йәмәлтауға килеп сығалар. Ундағы ташты күреп уҡыйҙар ҙа тағы ары китәләр. Бара торғас, Миһле күле урынына килеп сыҡҡандар, ти, былар. Йөрөй-йөрөй бер кеше

эҙенә тап булғандар. Шул эҙ менән һаҙҙан килеп сыҡҡас, тау битендә ҡайын төбөндә бераүҙең йоҡлап ятҡанын күргәндәр. Янында уҡ һаҙағы, йәйәләре һөйәүле тора икән, ти. Егеттәрҙең өлкәне әйткән:

— Уҡ-һаҙаҡты алайыҡ, юғиһә ул, уянып, беҙҙе атып ҡуйыр, — ти. Уҡ-һаҙағын, йәйәһен алалар ҙа бабайҙың асыҡ яурынына тәмәүесыҡ менән атып ебәрәләр. Бабай ырғып килеп тора ла уҡты бирмәй. Ә йәйәһе юҡ. Егеттәрҙән:

— Һеҙ илме, яумы? — тип һорай.

— Беҙгә илгә — ил, яуға — яу, — тигәндәр егеттәр. Улар Сығырҙы тигән илдән икәнлектәрен әйтеп, аталарын эҙләп йөрөгәндәрен һөйләп биргәндәр.

Бабай эштең ниҙә икәнлеген аңлап алған инде. Ул егеттәрҙең исемдәрен һорай. Егеттәр әйткән:

— Беребеҙ — Айбағыш, беребеҙ — Көнбағыш, — тигәндәр.

— Инәйегеҙ тереме? — тип һораған ҡарт.

— Тере, — тигәндәр егеттәр.

— Атайығыҙҙың исеме кем?

— Баймөхәмәт.

Бабай, илап, балаларын ҡосаҡлап алған. Үҙенең ҡыуышына алып килгән быларҙы.

Бабай: «Хан минең турала ни ҡарар итте?» — тип һораған. Егеттәр әйткәс, ул ҡайта алмаҫын әйткән. Шунан улдары ҡайтып, инәйҙәрен алып килгәндәр. Бабай бер аҙҙан һуң үлеп тә киткән.

Малайҙар көн дә һунарға йөрөй, әбей яңғыҙ ҡала икән, ти. Бер көндө был ергә үткенсе ҡарт килеп сыҡҡан. Әбей менән килешеп, былар бергә тора башлағандар. Ә малайҙар был турала белмәгән. Бер көн килеп, әбейҙең малайы тыуған бит. Малайҙы былар тәүҙә йәшереп кенә аҫрағандар. Бала үҫә төшкәс, әбей менән бабай кәңәш иткәндәр ҙә был хәлде әйтергә булғандар. Шунан әбей берҙән-бер көндө малайҙарына бөтә хәлде һөйләп биргән.

Егеттәр шатланып китә. «Ниңә элегерәк әйтмәнегеҙ, беҙгә иптәш булыр ул», — тигәндәр. Күп тә тормай бабай үлеп киткән. Малайға исем ҡушырға кәрәк була. Ни эшләргә? Малайҙар ҡарап ултыралар-ултыралар ҙа: «Был бала күбәләк кеүек кенә бит, Күбәләк тип ҡушайыҡ», — тигәндәр.

Күбәләк үҫеп буйға еткән. Быларға иш булған. Былар шунда төйәк ҡороп, донъя көткәндәр. Күбәләктән таралғандар «күбәләктәр» тип аталған. «Теләү» тигән һүҙ «түләү» тигәндән килеп сыҡҡан. Түләүе булған ҡарттың улдарынан таралған халыҡ менән күбәләктәрҙе бергә Күбәләк-Теләү тип йөрөтә башлағандар.

## 157. МӘМБӘТ

Бороп иштәктәр * һәм ҡаҙаҡтар бер-береһенә барымта менән яу саба торған булғандар. Бер заман шулай Бөрйән батыры Ялан Йомаш үҙенең яҡындары менән Ҡустанай далаларына [1] Ту-

былғы тигән ергә яу сапҡан. Ул ерҙәр ҡаҙаҡтарҙың атаҡлыһы Алсын Арғындың йәйләүҙәре булған. Иштәктәр килеп, бер энерҙә Арғындың бер өйөр йылҡыһын ҡыуып алып киткәндәр. Өйөр йылҡы араһында Арғындың ун-ун ике йәшлек икс улы ла ҡуша киткән.

Был малайҙарҙың берсһен Үҫәргәндең Һабыр ҡарты үҙенә етенсе ул итеп алып ҡайтҡан. Ҡаҙаҡ балаһын алыуының сәбәбе шул: Һабыр төндә уянып тышҡа сыҡһа, ни күҙе менән күрһен, бәрәс өйөнөң сыуал артында бер нәмә яҡтыра икән. Яҡын барып ҡараһа, әлеге ҡаҙаҡ балаһы өҫтө тулы нур хәлдә яҡтырып ята икән. Аптыраған Һабыр, ғәжәпләнгән. Үҙ-үҙенә ышанмай, таңға сығып ҡатыны менән ҡарағандар. Был юлыһы ла ҡаҙаҡтан әсир итеп алып килтерелгән малай яҡтырып, өҫтө нурланып ята икән. Һабыр, был бер бик өлөшлө бала икән, тип уны үҙенә алмаҡ була.

Шул саҡ Ялан Йомаш үҙ ғәскәренә бүләк өләшә, һәр кемгә табышынан өлөш сығара. Һабыр унан бер ни ҙә алмайынса, тик әлеге малайҙы биреүен һорай. Һабыр ҡаҙаҡ малайын өйөнә алып ҡайта, ил ҡарттарын йыйып, балаға Мәмбәт тип исем ҡуштыра. Һабырҙың алты улы араһында Мәмбәт тә үҫеп ир ҡорона инә.

Бер саҡ Һабыр Мәмбәтте Урман Ямашына сапҡын итеп ебәрә. Урман Ямашының һылыу ғына бер ҡыҙы була. Ул бер егетте лә үҙһенмәй ултырған икән. Мәмбәтте күргәс тә, уға күҙе төшә. Мәмбәт тә ҡыҙҙың һүҙен йыға алмаған. Ҡайтып, хәлде Һабырға һөйләгән. Һабыр ҡыҙҙы Мәмбәткә алып биреүҙе хуп күргән. Урман Ямашының ҡыҙын һоратып яусылар ебәргән. Шунан һуң ҡыҙҙы алып та ҡайтҡан. Һабырҙың башҡа улдары Мәмбәтте көнләй, «килмешәк ҡаҙаҡ» тип ситләтә башлайҙар. Бисәһенә Мәмбәт: «Әйҙә, һинең иленә, атайыңдар янына барайыҡ», — тигән. Ҡатыны килешмәгән: «Мин һинең арттан илемә кире ҡайтыр өсөн бында килмәнем», — тигән. Шунан Мәмбәт үҙ иленә — Ҡустанай далаларына — ҡайтыр өсөн Һабырҙан кәңәш һәм фатиха һорай. Һабыр уға риза була. Мәмбәткә бик шәптән өс ат ераттырып, кейем-һалым артып, юллыҡ ҡурҙаҡ ҡурып биреп, иленә ҡайтарып ебәрә. Мәмбәт ҡатыны, бала-сағаһы менән бер Тирәкле[2] тигән ауыл янында апаһы өйөндә ялға туҡтай. Шунда ҡышлай. Яҙ еткәс, тағы юлға сыға, әкренләп үҙ йортона ҡайтып та етә.

Мәмбәт, ҡаҙаҡтарға ҡайтҡас, насар ғәҙәт ҡыуа башлай: харам үлгән малды дөрөҫ тип таба. «Үлеүе яңы, күреүем яңы», — ти икән дә был малдың харам икәненә лә ҡарамай, ашай бирә икән. Бер ике-өс ай шулай йәшәй был. Берҙән-бер көндө ул үҙ аҡылына килеп: «Ҡуй, былай ярамаҫ. Балалар харам ашап, харам үлерҙәр. Кире башҡортома ҡайтайым ғуй», — тип ҡарар ҡыла. Һәм тағы ла яһанып-тейәнеп юлға сыға. Юл ыңғайында әлеге апаһына килеп төшә. Бында тап шул мәлде ҡаҙаҡтарҙың ярыш — туйҙары булып ята икән. Мәмбәттең апаһы үҙ ҡулында көс, милек тотҡан байбисә булған. Ул Мәмбәткә әйткән: «Әгәр ҡайтыр булһаң, яҡшы аттар минең ҡулда. Һин ҡас!» — тигән. Мәмбәткә юллыҡ ҡурҙаҡ ҡурып, әйберҙәрен төйнәп, яҡшы арғымаҡтарға атландырып, ҡайтарып ебәрә. Мәмбәттең юҡлығын һиҙеп ҡалып,

ҡаҙаҡтар ҡыуа төшәләр. Арттан ҡурҡыныс етеүен һиҙеп, Мәмбәт хәйлә ҡора: ул ҡасҡан ҡола ялан тигеҙлектә бер күл була, бөтә әйбере-ние, аттары менән шул күлдең ҡуйы ҡамышлығына инеп йәшеренә. Ә ҡыуып килеүсе ярһыған ҡаҙаҡтар күлдең эсенә төшәргә баҙнат итмәйҙәр, ул яҡтан да, был яҡтан да үткеләйҙәр, тик Мәмбәтте таба алмайҙар.

Мәмбәт иҫән-һау ҡотолоп, кире үҙе йәштән өйрәнгән башҡорт иленә, урманлы-таулы, сағыллы-сауҡалы еренә ҡайтып етә. Дала яғынан килеп Яйыҡты аша сығып, йәйге бер матур таңда Таналыҡ[3] йылғаһын кисеп сыға. Йылғаны кисеп сыҡҡан урында таң атҡанға был урынды Таңатар тип исемләй. Мәмбәт был яҡтарға ҡайтҡас та, Өлкән тауға менеп тора. Шул ерҙә ҡасандыр ятып ҡалған ҡамсыһын да табып ала. Таналыҡ буйын, ошо Өлкән тауҙы төйәк итеп йәшәй. Бирлекүл янында туғайҙа йәйләүҙә ята. Тик ул яңғыҙы ғына тыныс йәшәй алмай, Һабыр ҡартҡа китә. Ә был саҡта инде Һабыр ҡарт үлгән була. Ҡарт үлгәнсе Мәмбәтте онотмаған икән, яҡшы хеҙмәте өсөн тип ул Мәмбәткә васыят итеп 20 баш йылҡы ҡалдырған була. Мәмбәт йылҡыларҙы алып, Һабыр ауылынан алыҫ түгел ерҙә тора башлай. Ҡатын-балаларын да күсереп, яҡшы донъя көтөп китә. Йылдан-йыл байыға башлай. Иркен туғайҙарҙа, ҡурпылы тибендәрҙә уның өйөр йылҡылары тиҙ генә мандып, ишәйеп китә. Уның ҡапыл байығыуын күреп, эргәләге бөрйәндәр көнсөләй башлайҙар: «Был аҙғын ҡаҙаҡты үлтерергә кәрәк!» — тип теш ҡайрайҙар. Мәмбәттең башҡорттар араһында торған бер дуҫы сабып килеп хәбәр һала: «Аң бул, иштәктәр һине алдағы өс көн эсендә үлтерергә киләсәктәр», — ти. Мәмбәт ҡоралға тотонмай. Йәһәт кенә бейә бәйләтә, ҡымыҙ бештерә, иң һимеҙ байталды һуйып, ит әҙерләй. Тирмәһе алдына оҙон итеп арҡан тарта, йәнә ҡатынын иҫкәртә: «Беҙгә кем генә килмәһен, барыһының да атын бәйләп, үҙен һый-хөрмәткә керет, яҡты йөҙ күрһәт», — ти. Бына бер көн башҡорт атлылары Мәмбәт тирмәһе янына килеп туҡтайҙар. Мәмбәт уларҙың һәммәһен дә ҡунаҡтай әҙерләп ҡаршы ала, ҡымыҙ эсерә, һимеҙ ит менән һыйлай. Башҡорттар ҡәнәғәт булалар. Аранан бер ҡарт: «Аш ташты иретә. Былай булғас, Мәмбәт тере ҡалды инде», — ти. Улар бер ниндәй ҙә яуызлыҡ ҡылмай ҡайтып китәләр. Шулай ҙа Мәмбәт тынысланмай. Ҡан-ҡәрҙәшлекһеҙ башҡорттар менән тигеҙ, татыу көн булмаясағын ул аңлай. Сәсән телле берәй башҡорт менән туғанлашырға ҡарар ҡыла. Верхний Уралға барып, шул яҡтың Яхия тигән сәсәндең ҡыҙына никахлана. Бына Яхия сәсән ҡыҙы Һыйлыҡайҙан Иҫәнғол исемле ир бала тыуа. Иҫәнғол ун йәшкә еткәс, ата-әсәһе уны Яхия сәсәнгә ҡунаҡҡа алып бара. Сәсән ҡарт әллә ҡаҙаҡтан булған улды үҙһенмәй, әллә уның тапҡырлығын, зирәклеген һынар өсөнмө, ҡунаҡтар йыйылып бөткәс, былай ти: «Елкә — аш булыр тиһеңме, ейән — ул иш булыр тиһеңме?» Шул саҡ ишек төбөндә торған Иҫәнғол, уртаға инеп: «Эй ата! Аш булыр елкә ҡаҙанында төшкәне юҡ икән, иш булыр ейән ул ишегендән ингәне юҡ икән», — ти. Ҡарт быңдай яуапты ишеткәс, бик ҡәнәғәт була, ҡыуанысынан ейәнен ҡосаҡлап ала: «Ай, балам, минең сәсәнле-

гем һиңә тейгән икән», — ти. Ошонан һуң инде Мәмбәт тә иркенләп йәшәй, ҡурҡыныс тоймай. Улы Иҫәнғолдо русса уҡытырға бер Степан тигән урыҫты яллай. Был уҡымышлы урыҫҡа Мәмбәт Өлкән тау аҫтынан бер күл бирә: «Бына һиңә күлем, балығын аҡа, бына һиңә улым, уҡымышлы яһа!» — ти Мәмбәт Степанға. Ошонан бирле был күлдә урындағы халыҡ Степан күле тип йөрөтә башлай.

Иҫәнғол бала саҡтан уҡ бик зирәк, отҡор һәм зиһенле була. Степан уны белемле итеп кенә ҡалмай, үткер ҡарашлы егет итеп тә тәрбиә бирә. Иҫәнғол, ысындан да, башлы егет булып сыға. Уҡып әҙәм булғас, ул башҡорттарҙың ун ике кантоны өҫтөнән түрә булып китә. Хәҙерге Иҫәнғол ауылында ул ғәскәр тотоп торған. Башҡорттарҙы һалдат хеҙмәтенә яҙ алып, көҙ ҡайтара торған булған. Батша хөкүмәте был яҡтарҙа көсәйгәс, Иҫәнғол атаһына: «Ер ал инде», — ти. Мәмбәт ҡарт, ер һорап, губернаторға бара. Губернатор уға эт тиреһенә яҙып, рөхсәт ҡағыҙы бирә: «Һөйгән ереңде һайлап ал», — ти. Мәмбәт ҡарт Таналыҡ буйына — үҙенең тәүге төйәге булған ергә килә.

Мәмбәт оҙаҡ ҡына ҡарап тора ла әйтә:

— Йылғаһының балығы бар, туғайының йыуаһы бар, тауының ташы бар, еренең ашы бар. Егәре булған ир-егет йотлоҡта ла йүгәнсе тотоп ҡалмаҫ!

Ошонда ул төпләнеп киткән. Ул нигеҙ һалған ауыл уның хөрмәтенә Мәмбәт тип исемләнгән, тауы ла Мәмбәт тауы тип йөрөтөлә.

## 158. БИРЕСБАШТАР АРАҺЫ

Беҙҙең яҡҡа йыш ҡына ҡаҙаҡтар сапҡын яһап торған. Бына шундай бәрелештәрҙең береһе хәҙерге Орск ҡалаһы урынында тауҙа (түңдә) булған. Был түбәне һуңынан ҡаҙаҡтар Намаҙ түбә тип атағандар.

Бер саҡ илгә яу килгән. Яуға ҡаршы башҡорттарҙың Баҡтыбай исемле мыҡты кәүҙәле, киң яурынлы, бөркөт ҡарашлы, көслө бер батыры алышҡа сыҡҡан. Баҡтыбай алыштың иң ҡыҙған урынында булған. Шуға күрә ҡаҙаҡтар уны айырып алып һуғышҡандар. Ете ерҙән башы яраланғас, Баҡтыбай ергә ауған. Шулай итеп, башҡорттар еңелгәндәр. Тик бер нисә генә кеше ҡасып ҡотола алған. Бер аҙ барғас, берәүһе әйтә:

— Ни эшләп һуң әле беҙ Баҡтыбайҙы унда ҡалдырҙыҡ, исмаһам, алып ҡайтып ерләйек, — ти.

Былар кире барғандар. Барһалар, ҡаҙаҡтар киткән, ә башы ете ерҙән яраланған Баҡтыбай ҡанһырап ята, ти. Уны атҡа арҡыры һалып, ҡайтыр яҡҡа боролғандар. Бер аҙ киткәс, төшөп, ял итеп алырға булғандар былар. Төшһәләр — Баҡтыбай әле үлмәгән, ти, һулышы бар икән. Тиҙ генә бер тайҙы һуя һалып, ҡарынына Баҡтыбайҙың башын урайҙар, үҙен тиреһенә төрәләр. Был ерҙе шунан башлап Ҡарын ейгән[1] тип атағандар. Бер аҙ ваҡыттан

һун Баҡтыбай терелә. Шунан башлап, Баҡтыбайҙы ҡаҙаҡтар биресбаш[2] тип атағандар. Тора-бара был исем Баҡтыбайҙың балаларына ла күскән. Баҡтыбайҙың ейәндәре — Юлдашбайҙарға ла был исем мираҫ булып тороп ҡалған. Хәҙер ярты Аҡъяр тиерлек Юлдашбайҙар. Юлдашбайҙарҙы — биресбаштар араһы, тиҙәр.

## 159. ҠАҘАҠТАР АРАҺЫ

Бынан ике-өс йөҙ йылдар элек беҙҙең башҡорт иленә барымта менән килгән ҡаҙаҡ яуы Төлкөбай исемле бик матур, мыҡты кәүҙәле ун ике йәштәрендәге бер малайҙы алып китәләр. Атаһы уны атта йөрөргә, уҡ атырға, йырларға өйрәткән була.

Ҡаҙаҡ илендә Төлкөбай бер ҡаҙаҡ байының көтөүсе ярҙамсыһы булып йөрөй. Ә был ҡаҙаҡтың малы сикһеҙ күп була.

Көн артынан көн үтә, йыл артынан йыл үтә. Төлкөбай матур, таҙа егет булып үҫеп етә. Күрше тирмәлә йәшәгән Тайтул тигән ҡыҙға ғашиҡ була.

Төлкөбай байға тоғро хеҙмәт итә. Уның өйөрөнән бер генә мал да юғалмай. Бай егеткә ҡырын күҙ менән ҡарамай. Төлкөбайҙы ризалаштырып, үҙенә ул итеп алырға теләй, башлы-күҙле итергә уйлай. Бер көн бай уны үҙ янына саҡырып ала ла:

— Эй, Төлкөбай, һин миңә тоғро хеҙмәт иттең, мин һине башлы-күҙле итергә уйлайым ғуй. Берәй танып, күҙең төшөп йөрөгән ҡыҙ булһа, әйт, — ти. — Төлкөбай быға бик шатлана.

— Бар минең яратҡан ҡыҙым, ул Тайтул, — ти.

Күп тә үтмәй, туй була. Төлкөбай менән Тайтул бергә тора башлайҙар. Быларҙың бер улы була. Уға Рәсүл тип исем бирәләр. Икенсе улдары донъяға килгәс, уға Ҡотдос тип ҡушалар.

Берҙән-бер көндө кис, кеше күрмәгән арала Төлкөбай күрәҙә әбейгә бара. Уның алдына бер турһыҡ ҡымыҙ ҡуя ла:

— Инәй, иң тәүҙә һин миңә шуны әйт: Яйыҡ йылғаһы ҡайһы яҡта? Уға юлды нисек табырға? Унан һуң шуны әйт: минең бәхет йондоҙом асылғанмы, юҡмы? Асылмаһа, ҡасан асыла? — тип һорай.

Күрәҙәсе әбей былай тип яуап бирә:

— Яйыҡ йылғаһына сығыу өсөн, ҡояш байышы яғына барырға кәрәк. Ә һинең бәхет йондоҙоң әле асылмаған.

Төлкөбай әбейгә рәхмәт әйтә лә:

— Һин, инәй, көн һайын ноҡот * һалып тор, минең бәхет йондоҙом асылған көндө миңә хәбәр итерһең, — тип сығып китә.

Көндәрҙән бер көндө әбей Төлкөбайҙы үҙ янына саҡырып ала ла былай ти:

— Һинең бәхет йондоҙоң ҙур байрам көндө асыла. Шул көндө тәүәккәлләмәһәң, һуң булыр, — ти.

Көткән байрам килеп етә. Был байрам байҙың өлкән ҡыҙынын туй көнө була. Көндөҙҙән үк бик күп ҡунаҡтар йыйыла башлай. Тирмәләр тирәһе бай ҡунаҡтарҙың эйәрләнгән, эйәрләнмәгән ат-

ары менән тула. Ҡис була. Мәжлес ҡыҙа. Төлкөбай тирмәһенә ҡайта ла, улдарын һөйөп, бисәһенә әйтә:

— Тайтул, һиңә рәхмәт. Мин үҙ илемә ҡайтырға булдым.

Тайтулы күҙ йәштәрен һөртә-һөртә яуап ҡайтара:

— Һин ҡайҙа китһәң дә, мин һинән ҡалмайым. Ни күрһәк тә, бергә күрәйек, беҙҙе лә ал, — ти.

Ҡунаҡтар, хужалар йоҡлап киткәс, Төлкөбай һаҡ ҡына тирмә ҡашында бәйҙә торған аттар янына килә лә барыһының да өҙәңге ҡайыштарын ҡыйып сыға.

Таң яҡтылығында инде Төлкөбай иптәштәре менән йәйләүҙән байтаҡ китеп өлгөргән була.

Йәйләү бик һуң уяна. Төлкөбайҙың ҡасыуын да һуң ғына белеп ҡалалар. Шунда уҡ ҡасҡындар артынан ҡыуғын ебәрелә. Ҡасҡындар йән-фарман сабып, Яйыҡҡа килеп сығалар. Төлкөбай иптәштәре менән, йылға янында бер аҙ һуғышып, ҡаҙаҡтарҙы тотоп тора. Ҡатындар, бала-саға йылғаны сығып бөткәс, егеттәр үҙҙәре йөҙөп сыға. Ҡыуғын Яйыҡтың аръяғында, ҡасҡындар бирьягында туҡтайҙар. Шул ваҡыт ҡыуғын башлығы Төлкөбайға былай тип һөрәнләй:

— Эй, Төлкөбай, әгәр шул ерҙән тороп беренсе уғынды минең ҡанъяғама тейҙерһәң, мин һиңә бер зыян да эшләмәй, кире боролам.

Төлкөбай янын ала килеп, бөтә көсөнә тартып атып ебәрә. Уҡ тегенең ҡанъяғаһына барып сәнселә. Быны күреп хайран ҡалған бай ҡысҡыра:

— Эй, Төлкөбай, һинең иткән хеҙмәтеңә мин риза булайым, алған малыңа һин дә риза бул, — тип бата уҡый * ҙа кире борола.

Ҡасҡындар малды бүлешеп алалар ҙа һәр береһе, үҙҙәренең туғандарын эҙләп, таралышалар.

Төлкөбай үҙенең ҡатыны, ике улы менән үҙ йәйләүен бик оҙаҡ эҙләй, табалмай. Был ваҡытта инде ҡыш та яҡынлаша. Төлкөбай ырыуҙаштарын табалмағас, йәтешле урын һайлай ҙа ғаиләһе менән шунда килеп ултыра. Бында төрлө ерҙән күсеп килгән башҡорттар була. Шул урынды Ҡаҙаҡ араһы [1] тип атағандар.

## 160. ҠАЛМАҠ ЫРЫУЫ

Бик боронғо бер яуҙа була был. Ситтәр килеп баҫа ла, был тирәләге халыҡ ҡасып бөтә. Шунан, йыйылып, әлеге сит яуҙы ҡыуалар. Халыҡ бик ярһып килә. Сит халыҡ яуы тырым-тыраҡай сығып ҡаса. Улар киткәс, ҡараһалар, ағас ботағында бер бишек эленеп ҡалған. Баланы алып ҡайтып үҫтерәләр. Ул ҡалмаҡ булып сыға. Был тирәләге Ҡалмаҡ ырыуы [1] ошо ҡыҙҙан таралып китә.

## 161. МАМЫТ

Борон ошо Юлдыбай ауылында башҡорттоң бер Бүкәт тигән батыры[1] йәшәгән. Ул Батыйхан ғәскәрҙәре менән бик ныҡ көрәшеп йөрөгән.

Бер заман Бүкәт яуҙан Мамыт исемле бер әсир малай алып ҡайта. Был малай ҡалмаҡҡа оҡшап торғанға, уны «ҡалмаҡ» тип тә йөрөткәндәр. Бүкәт үҙе һәр ваҡыт яуҙа йөрөгәс, баланы тәрбиәләргә ҡулы етмәй. Шуға ул Мамытты Үләй исемле башҡорт батырына тапшыра. Тегеһе малайҙы бик ныҡ тәрбиәләй, хатта бер аҙ уҡыта ла.

Ул заман беҙҙең ырыу Түңгәүер ырыуы менән аралашып йәшәгән. Мамыт шул Түңгәүер ырыуының башлығы итеlә.

Мамыттан бер бала тыуа. Уға Ҡалмаҡ тип исем бирәләр. Ҡалмаҡтан Ҡашҡар, Раим, Баязит исемле балалар тыуа.

## 162. ЙОМРАН АРАҺЫ

Бер заман баҫҡынсылар килеп, беҙҙең илдең малдарын, ҡатындарын ҡыуып алып китәләр. Шунда беҙҙең өләсәй ҙә әләгә. Ул ғөманлы булған. Күп тә тормай, ҡасып ҡайтып китә. Юлда ир бала тыуа. Ашатыр нәмәһе булмағас, әсәһе балаға йомран тотоп, шуның майын ашатҡан. Шуға теге баланан ҡалған нәҫелде йомрандар[1] тигәндәр. Ә юлда табылған ир балаға Юламан исеме биргәндәр. Хәҙерге йомрандар араһы Юламановтар шуның нәҫеленән килә.

Йомрандар сумарт * булған. Шуға улар хаҡында «йомрандың ярты баш ҡорто булһа, кеше саҡыра» тигәндәр. Юламан йыры ла бар.

## 163. СЫСҠАНДАР МЕНӘН ТУБАЛДАР

Был хәл әле Пугачев менән Салауат яуына тиклем үк булған.

Оло Инйәр буйындағы Күҙйылға тамағы эргәһенә Әрепҡол һунарсы килеп ултыра, ә унан ары өс саҡрымдай ғына Майғашлы ағып ятҡан ерҙә уның бер туған энеһе Ғәҙелша килеп төйәкләнә. Был ике араны ла Сысҡандар араһы тип йөрөтәләр. Хәҙерге Әрепҡол менән Ғәҙелша ауылдарының халҡы бөтәһе лә ошо ике бер туғандан таралған тоҡом.

Салауат яуы баҫтырылғас, яуҙа ҡатнашыусыларҙың бөтәһе лә, Сермән ауылынан ҡасып китеп, ошо урман араһында ятҡан Әрепҡол ауылына килеп төйәкләнгән, тиҙәр. Был ҡасҡындарҙың бөтәһен дә Тубалдар тип йөрөтәләр. Сысҡандар менән Тубалдар, йыш ҡына бола ҡуптарып, ыҙғышып торғандар.

Тубалдар араһында йәйләүгә сыҡҡан саҡта элек-электән аттарын күгәүен-фәләндән былайтып һаҡлар булғандар: аттарының

арҡаһына төрлө серек-сөрөк һалынған тубалдар аҫып ҡуялар ҙа шул серек-сөрөктәре төтөн быҫҡытып йөрөй, себен-күгәүен ҡунмай икән. Бер саҡ шулай бер ала бейәнең силәк-тубалы янып киткән дә тиреһенә ут ҡапҡан был бейә, нишләргә лә белмәй, урлеҡырлы сабып йөрөй икән. Бейәһен тота алмай, йүгереп йөрөгән хужаһы:

— Аҡылың булһа, һыуға һикер, ала бейә! — тип һөрәнләй ти.

Ала бейәһенең аҡылы еткәндерме-юҡмы, әммә хужаһына тубал ҡушаматы мәңгегә тағылып ҡалған. Шунан бирле был ҡушамат әле һаман быуындан-быуынға күсә килә.

Әрепҡолдоң ейәне Заһретдин беҙҙең яҡтарҙа, урыҫтан күрмәксе, заводҡа күмер үртәп кәсеп иткән тәүге башҡорт булған. Күмерҙе, кәбән һымаҡ ағас өйөп, ер менән ҡаплап үртәгәндәр ҙә Лапышты заводына ташығандар. Заһретдиндең улы Фәхретдин дә, уның улы Шәмсетдин дә шулай күмер үртәгәндәр. Шәмсетдине минең атайым була инде.

## 164. ИҪӘН БАБАНЫҢ ТАНЫП БУЙЫНА КҮСЕП КИЛГӘНЕ

Беҙҙең ата-бабабыҙ Иҫән ҡарт Ыҡ буйында һунар итеп көн күргән. Ул һунарға уландары менән йыш ҡына Танып буйына ла барып сығыр булған: ул тирә йәнлек, ҡош-ҡортҡа бик бай булған тип һөйләйҙәр.

Бер ваҡыт Иҫән баба урманда таҙ ырыуының аҡһаҡалы Таҙ бабаны осраҡҡан. Былар дуҫлашып киткән. Таҙ баба Иҫән бабаны Танып буйына күсеп килергә саҡырған. «Бергәләп һунарға, балыҡҡа йөрөрбөҙ», — тигән ул. Иҫән баба дуҫының һүҙен йыҡмай күсеп килә. Уның улдары Таҙ бабаның ҡыҙҙарына өйләнә. Таҙ баба ирәктеләргә Ҡуйы урман менән ҡапланған, ҡошло-йәнлекле икһеҙ-сикһеҙ ерҙәренән бирнәгә ҙур биләмә бүлеп биргән.

## 165. БАШҠОРТ ТАРИХЫ

Бер башҡорттоң Барын менән Табын тигән ике улы була. Туңғатар волосына ҡараған Туңғатар, Ҡарт Муйнаҡ, Балбыҡ, Ҡорама, Ҡәрим, Һөләймән, Һөйөндөк, Ҡөсөк, Мулдаш, Мулдаҡай, Илсеғол, Байрамғол, Ҡомай ауылдары ошо Барын ырыуынан килә. Ә Табын ырыуына Түләк, Малай-Муйнаҡ, Ҡинжекәй, Әпсәләм ауылдары ҡарай.

Ә Ҡыуаҡандар беҙҙең ергә аҙаҡ килеп ултырған ебәрелмеш ырыу (припущенниктар). Улар бында Залтауыс аръяғынан үҙҙәренең Ҡыуаш (Ҡатау?) [1] менән Һатҡы [2] буйҙарындағы ерҙәрен Лубинин тигән алпауытҡа һатҡас ҡына килеп ултырғандар. Ҡыуаҡан ырыуына Шәрип, Ялсығол, Яҙнаш, Ҡажыр, Байрамғол

ауылдары ҡарай. Әйле ырыуы беҙҙә бары Көсөк ауылында ғына. Улары ла ни бары утыҙ душ ҡына.

Борон башҡорт ерендә йылҡы малы ла, һыйыр малы ла бик күп булған, ә һарыҡ инде ер ҡаплап йөрөгән. Етен-тарма сәскәндәр. Етен талҡып, еп иләгәндәр. Аяҡҡа сарыҡ кейгәндәр. Урман өҫкә ауып торған. Бигерәк тә ҡайын, ҡарағас, ҡарағай шәп үҫкән.

Әле башҡорттар йәшәгән был ерҙәр — борон-борондан уҡ башҡорт ерҙәре. Башҡорт халҡы күп яуҙарҙа ҡатышып килгәс, французлдарҙы ла Мәскәүҙән ҡыуып сығарғас, беҙҙең батшабыҙ: «Һеҙ минән ни һораһағыҙ, мин һеҙгә шуны бирәм», — тигән. Беҙҙең яҡтың дүрт волосы батшаға илселәр ебәреп, улар уға: «Беҙгә әле үҙебеҙ йәшәгән ерҙе үҙебеҙгә яҙ, ыштубы ла сит әҙәмдәр бында морон тығып йөрөрлөк булмаһын», — тигәндәр.

Был дүрт волость тигәнем шулар була инде: Барын-Табын, Тиләү-Табын, Тамъян-Табын, Кәлсер-Табын. Батша был дүрт волосҡа ошо ерҙәрҙе биргән: ер сиктәре Оло Ҡыҙыл [3] тамағынан алып Оло Ҡыҙыл буйлатып Урал һыртына барып сыҡҡан, шунан Урал һырты буйлатып Ағиҙелгә барып төшкән дә унан ары — Әй йылғаһына сығып, Әй йылғаһы буйлатып Миәс [4] йылғаһына барып еткән, унан Миәс заводына ете саҡрым етмәҫтән, аҫҡа боролоп, Миәс йылғаһы түбәненә буйлатып, Арғужа [5] күленәсә барып еткән, Арғужа күленән Тинес [6] йылғаһына сыҡҡан, Тинес буйлатып Тубыл [7] йылғаһына саҡлы барған да, Тубылды аша сығып, Йебеләй [8] татырлауығына саҡлы һуҙылған, унан ары Урҡас [9] күленә төшөп, Оло Ҡыҙыл тамағына кире әйләнеп ҡайтҡан. Бына ошо сиктәр эсендәге ерҙәр беҙҙең ер булыр.

Борон башҡорт менән ҡаҙаҡ үҙ-ара тынышмаҫ булған бит: ҡаҙаҡтар, башҡорт еренә барымтаға сабып, башҡорттарҙың күп мал-тыуарын әйҙәп алып китер булғандар; башҡорттар ҙа ҡул ҡаушырып ятмаған, ҡаҙаҡ еренә барымтаға барып, үҙҙәренең дә күп малын ҡыуып алып ҡайтҡандар. Ҡаҙаҡ яғынан да, башҡорт яғынан да бик күп халыҡ ҡырылған. Шуға күрә башҡорт яғынан Таймаҫ тархан батшанан ике арала сик һыҙығын төҙөүҙе һораған. Ҡаҙаҡтар ҙа был яҡҡа, башҡорт еренә, сығып йөрөмәһен, шулай уҡ башҡорттар ҙа ул яҡҡа, ҡаҙаҡ еренә, сығып йөрөмәһен тип, сик һыҙығы төҙөлгән. Шунан, сик һыҙығы төҙөлгәс инде, башҡорттарҙы ла линия хеҙмәтенә ебәрә башлағандар.

Быға аса башҡорттарҙың үҙҙәренең хәрби хеҙмәт кейеме булмаған, Перовский [10] башҡорттарға үҙҙәренә айырым кейем — ҡара мундир тегергә әмер бирә. Бынан һуң генерал Неплюев [11] мундирҙы ҡыҙылдан, салбарҙы ҡаранан тектерергә ҡуша. Ә башҡа кейергә бөрйәндәр кейеп йөрөй торған ҡалпаҡ-кәпәс шәкелен алырға булалар.

Бер заман Таймаҫ тарханға бер нисә типтәр килеп, үгеҙ тиреһендәй [12] генә һорай. Таймаҫ тархан былар һораған тиклем ер бирергә риза була. Тегеләр үгеҙ тиреһен ҡылдай итеп кенә телгеләйҙәр ҙә әллә ни саҡлым ерҙе уратып та алалар. Таймаҫ тархандың быға ғәрлеге килеп, был урындан тиҙерәк тая һала.

# АУЫЛ ТАРИХТАРЫ



## 166. БИШУЛ

Аҙау, Ҡыҙыл, Әйтмәмбәт ауылдары урынына тәү башлап Аҙау, Ҡыҙыл, Әйтмәмбәт исемле кешеләр килеп ултырған. Улар өсөһө лә бер туған — ағай-эне булған. Иң олоһо — Аҙау ҡарт.

Йылдар үтеү менән Аҙау ҡарт, уландарына мал биреп, башҡа сығарған. Бер улы Бишул ауылына килеп ултырған. Ауыл ул ваҡытта Бишул тип йөрөтөлмәгән әле. Ауылдың Бишул тип атала башлауына сәбәбе булған.

Аҙауҙың улы йылҡы үрсеткән. Иртәле-кисле ул малын ялан кәртәлә тотҡан. Иртәнсәк тороуға бер аҫау айғыры төнгөлөктән ҡара тиргә батып ҡайта икән. «Төндә кеше менеп йөрөй, ахырыһы», — тип уйлап, бер көндө ат арҡаһына ыҫмала буяп ебәрә был. Иртән тороп ҡараһа, ат өҫтөндә матур ғына шүрәле ҡыҙы ултыра, ти. Ҡыҙҙы үҙенә кәләш итеп ала был. Уларҙың бер-бер артлы биш улдары тыуа.

Мунса яҡҡан көндәре был ҡатын һәр ваҡыт иренән алда барып, яңғыҙы ғына йыуыныр булған, иренә мунсаға керерҙән элек тауыш итергә ҡушҡан.

Шулай бер көндө ире: «Был нәмә эшләй икән яңғыҙы?» — тип, тауыш итмәй-нитмәй мунсаға барып ингән. Барып инһә, ҡатыны, түбә ҡапҡасын алып, башын ҡарап ултыра, ти. Ирен күреп тә ҡалған, йығылып үлеп тә киткән. Ир биш бала менән тороп ҡалған.

Уландарҙың бишеһе лә үҫеп еткән. Ауылды Бишул тип йөрөтә башлағандар.

## 167. ЯМАШ МЕНӘН ЙОМАШ АУЫЛДАРЫ

Элек-элек заманда Һаҡмар буйында Бөрйән ырыуының Арыҫланғәле тигән ҡарты йәшәгән. Арыҫланғәле үҙенең бөтә ғүмерен айыу-бүре аулап, йәнлек ҡыуып үткәргән. Үҙе ҡартая башлағас,

һөнәрен улдары Ямаш менән Йомашҡа өйрәтеп, суҡмар менән һыҙмаһын тоҙаҡ менән ҡапҡанға алмаштырып, ҡуян менән ҡама шикелле вағыраҡ йәнлектәргә генә йөрөй башлаған.

Ямаш менән Йомаш һунарға икешәр ат менеп йөрөр булғандар. Ике атын менеп китәләр, икәүһе эйәрле көйө арттарынан эйәреп бара.

Көндәрҙең бер көнөндә, шулай бүре ҡыуып барғанда, улар бер аҡланда аттарын алмаштыралар. Тик алмашҡан аттар өйгә ҡайтмаған. Иртәгеһен Ямаш менән Йомаш таңдан уҡ тороп эҙләргә сығып китәләр. Урманға инеүҙәре була, яңы ғына Урал тартып үткән бүре эҙе күренә. Ямаш менән Йомаш, аттарын онотоп, эҙҙе ҡыуа китәләр. Аттарға икенсе, өсөнсө, дүртенсе көндәрҙә лә барып булмай, оҙайлы бурандар башлана. Алтынсы көндә бер аҡланға килеп сығалар, аттар һаман юҡ. Шулай ҡыш үтеп китә, йәй килә. Бесән ваҡытында Ямаш бер йылға буйына тейәк алырға төшә. Көтмәгәндә уға ат бышҡырған тауыш ишетелә. Барһа, әлеге ҡыш ҡалдырып киткән ике ат эйәрле көйө туғайҙа ашап йөрөйҙәр, ти. Аттарын алып ҡайтып, хәлде атаһына һөйләп бирә. Атаһы был хәлгә ғәжәпләнә. Күп кенә уйлап ултырғас, улына әйтә: «Улым, инде һинең йәшең еткән, өйләнә дә шул аттар ҡышлаған йылға буйына күсеп ултыр, һинең бәхетең шул ҡотло йылға буйында булырға тейеш», — ти. Көҙгә Ямашты өйләндереп, әлеге аттар ҡышлаған йылға буйына күсереп тә ултыртҡандар. Шунан һуң был йылғаны Ҡышлау бар тип атап йөрөткәндәр. Һуңынан ул атама Ҡышлауар булып киткән. Аттар ҡыш буйы тибендә йөрөп сыҡҡан яланды Типкес яланы тип атағандар, ә төшөп һыу эскән урынды Типкес шишмәһе тип йөрөткәндәр. Аттары тәүҙә арып килеп еткән бәләкәй яланды Атйетәр яланы тип, шишмәһен Атйетәр шишмәһе тип йөрөткәндәр. Был ер, ысындан да, ҡотло булып сыҡҡан. Ямаштың малдары көтөү-көтөү булып үрсеп киткән. Ямаштың яҡындары Ҡышлауар йылғаһы буйына урынлашҡандар. Ҙур ауыл барлыҡҡа килгән. Атйетәр һәм Типкес һыуҙары Ҡышлауарға ҡоя. Ауылды иң беренсе булып килеп ултырыусыһы хөрмәтенә Ямаш тип атағандар.

Йомаш та өйләнгәс ошо уҡ йылға буйына күсергә теләгән икән. Ләкин атаһы рөхсәт итмәгән: «Ҡеше бәхете һиңә булмаҫ, улым, — тигән, — үҙ бәхетеңде үҙең эҙлә. Ҡышлауар йылғаһының Һаҡмарға ҡойған урынына бар ҙа түбәнгә, һыу ағышы буйлап кит. Һаҡмарға ҡойған һәр йылғаның һыуын эсеп ҡара, үҙең ҡайһыһын оҡшатһаң, шул йылға буйына күсеп ултырырһың», — тигән. Йомаш атаһы ҡушҡанса эшләй. Әйләнеп ҡайтҡас, атаһына һамаҡлап әйтә:

Һаҡмар буйлап түбәнгә
Утыҙ сама ер үттем.
Аттан төшөп тубыҡлап,
Өс йылғанан һыу эстем.
Дүртенсеһенә еткәс,

Атымдан һикереп төштөм,
Шул яланды иш иттем,
Шул туғайҙы хуш иттем.

Атаһы улын шунда күсерергә риза булған. Был йылға ла ҡотло булып сыҡҡан. Бер-ике йыл үтеүгә малдары ишәйеп, көтөү-көтөү булып киткән, ти. Йылға буйында тағы ауыл барлыҡҡа килгән, ти. Йомаш ҡарт үҙе иҫән саҡта йылғаны Кеүәҫле тип йөрөткән, һуңынан уны Кеүәшле тип атағандар. Шул замандан алып ауылды Йомаш [1] тип йөрөтәләр икән.

## 168. ҺАҠТАУ АУЫЛЫ

Ҡасандыр, бынан күп йылдар элек, Туҡсоран [1] буйындағы Ҡунаҡбай [2] тигән ауылдың бер өйөр йылҡыһы юғала. Йылҡы өйөрө тауҙан-тауға тибенләп китеп, ошо яҡҡа — Урал артына килеп сыға. Йылҡы өйөрөн икенсе йылы ошо яҡтағы бер тауҙа табалар. Йылҡылар кәмеү түгел, ҡолонлап, ишәйеп торған була. Өйөрҙө табыусылар ҡайтып һөйләйҙәр. Ауыл ҡарттары был тауҙы: «Һаҡлы тау икән, бик хәйерле тау икән», — тип килеп ҡарағандар. Урын оҡшаған. Күңелдәренә ятышлы был тау битләсенә күсеп ултырғандар.

Күсеп килеүселәр тәүҙә тәртипһеҙ ултырғандар: бер нисә өй Олотау аҫтындағы Аҡатау йылғаһы тамағында, ҡайһы берҙәре Урта түндә [3] йәки Сәйфулла түңендә ултырған. Әбей батшаның [4] указынан һуң ғына бер ауыл булып ойошҡандар. Өйҙәрен ауыл урынындағы ҡарағайҙан бурағандар. Иң тәүҙә Ҡәнзәфәр тигән мулла башлап ултырғанға, был ауылды Ҡәнзәфәр тип тә, шулай уҡ Һаҡлытау атамаһынан килеп сыҡҡан «Һаҡтау» исеме менән дә йөрөткәндәр. Ул ҙур ауыл булып китә. Йәй көндәре Маҡан [5] яғына йәйләүгә сыҡҡандар. Күрәһең, ялан яғынан килгән кешеләр яланды яҡшыраҡ күргән, күңеле яланға тартҡан.

## 169. ҺЫНТАШ

Беҙҙең Ишмөхәмәт ауылының икенсе исеме — Һынташ. Борон замандарҙа ошо ауыл урынында бер дәү һынташ булған, тиҙәр. Уның һыны кешегә оҡшашыраҡ булған: башы, ҡулдары, биле беленеп торған. Күрәһең, уны шулай итеп юнғандар. Ташында тамғаларға оҡшаған ниндәйҙер яҙыуҙар ҙа бар ине, тиҙәр.

Ул бер арҙаҡлы, изге әҙәмдең ҡәберенә ҡуйылған. Һынташ төнөн яҡтырып торор булған, тиҙәр. Кешеләр уны шуға изге таш тип иҫәпләгән. Ул таш бынан йөҙ-йөҙ илле йылдар элек кенә имен ине әле, тиҙәр ҡарттар. Бер саҡ ул, нисектер, ярылыпмылыр төшкән. Шунан һуң уның төнөн баҙлап торор ҡөҙрәте лә бөткән, ти. Үҙе лә әллә ҡайҙа юҡ булған [1].

Бына шул таштан ҡалған беҙҙең ауылдың исеме.

Беҙ үҙебеҙ ҡаҙаҡ нәҫеле — чурбайҙар. Беҙҙең ата-бабайҙар ҡаҙаҡтан айырылып, Уҡлы Ҡарағайға килеп ултырғандар. Шунан һуң ергә нигеҙләнгәндәр. Башҡорттар менән аралашып, үҙебеҙ ҙә, телебеҙ ҙә башҡорт булып киткәнбеҙ. Ауылда Юрматы башҡорт ырыуы нәҫелдәре күп.

## 170. ЭТИМГӘН

Элек бер ҡатындың балаһы тормаған. Балаң була ҡалһа, эт һөтөнән ауыҙландыр, тигәндәр уға.

Күпмелер ваҡыт үткәс, бала тыуған был ҡатындан. Бер көсөкләгән этте табып, сабыйын имеҙгән бит теге. Шул бала йәшәп киткән.

Ауылдың исеме шунан ҡалған. Хәҙер уны Әпсәләм ауылы тип йөрөтәләр. Ҡайһы саҡ Бәләкәй ауыл тип тә әйтәләр. Ә ысын, төп исеме Этимгән[1] була.

## 171. УЧАЛЫ

Борон был яҡтарҙа ауыл булғанмы-юҡмы — уныһын әйтә алмайым.

Бер саҡ башҡорт ерҙәренә Аҡһаҡ Тимер[1] тигән бер хан килеп сыҡҡан. Килгән дә башҡорттарҙан үҙенә бер ҡыҙ һораған. Ырыу эсенән берәүҙең ҡыҙын бирергә булғандар, мәһәрләшеп, ризалашып, хан үҙ иленә ҡайтып киткән. Бер аҙҙан ҡыҙҙы алырға килгән. Хан ҡыҙҙы алам тип килһә, башҡорттар баш тартҡандар. Ҡыҙҙы бирмәгәндәр. Хан быға бик асыуланған. Үс алыу өсөн ошо ерҙәге бөтә башҡорт ырыуҙарын туҙҙырып, йәйләүҙәрен яндырып киткән. Халыҡ бөлөп ҡалған. Әммә теге хандың яуызлығын онота алмаған, уны ҡәһәрләп һөйләй торған булған. Һуңынан ошо ерҙе халыҡ Үс алды тип йөрөтә башлаған. Учалы һүҙе ана шунан ҡалған.

## 172. ҺАРТ НАУРУЗ АУЫЛЫ

Еҙем һыуының Ағиҙелгә ҡушылған урынында Һарт Науруз ауылы бар. Уның тарихы былай.

Элгәре Ҡәлсер исемле бер ҡарт Бохара яғынан ҡайтҡан кешеләргә ошо ерҙәрҙән урын күрһәткән. Был кешеләрҙең ҡарт-ҡоролары үҙ-ара һәр саҡ һарт телендә һөйләшер булғандар. Шуға күрә уларҙы башҡорттар һарт тип йөрөткән.

Һарттар ауыл ҡорғанда, Науруз тигән бер кеше быларға бик ныҡ ярҙам итеп йөрөгән. Ауылдың Һарт Науруз[1] тип аталыуы ана шул Науруз исеменә бәйле.

Һарттар әйбәт кенә йәшәп алып киткән. Тик ҡышҡы һалҡын-

дар ғына уларҙың бәгеренә тейгән. Шуға зарланып, бер һарт ҡарты былай тип йырлаған, ти:

Сәхрәләргә сығып йөрөр инем —
Йөрөп булмай тәрән был ҡарҙа.
Ебәк сапан кейеп йөрөр инем,
Ебәк сапан ҡалған Бохарҙа.

## 173. ҺАРТ ӘПТЕРӘШ АУЫЛЫ

Бохарала ике һарт (үзбәк) егете булған. Был егеттәрҙең береһе Мондоших, икенсеһе Толоших исемле булған. Улар: «Бохара динде дөрөҫ алып бармай», — тип, хан менән низағлашҡан. Бер заман былар, ғәскәр туплап, ханға ҡаршы яу асҡандар. Хан Бессарабияға ҡасҡан. Ул унда ғәскәр йыйып, күпмелер ваҡыт үткәс, Бохараға ҡайтҡан да ике егеттең яуын баҫтырған. Был ике егет Ҡаҙағстанға барып, Алатай хан йортонда һыйыныр урын тапҡандар. Егеттәр бик уҡымышлы булған.

Бер саҡ Бохаранан Алатай ханлығына ғәскәр килгән. Алатай хан ике егетте мал биреп һатып алған да үҙ иректәренә сығарып ебәргән. Тегеләр Уралға килгәндәр. Мондоших менән Толоших, өйләнеп, шунда йәшәй башлағандар. Толошихтан бала булмаған, ә Мондошихтан зат таралған. Мондошихтың Мостай исемле улы булған. Ауылға Мостай тип исем бирелгән. Мостай ауылы Магнитогорскиҙан алты километр алыҫлыҡта ята. Ошо Мостай ауылынан Әптерәш ауылына килгәндәр. Һарт нәҫелдәре булғанға, ауылды Һарт Әптерәш тип алып киткәндәр.

## 174. МӘМБӘТ АУЫЛЫ ТАРИХЫ

Борон замандарҙа башҡорт менән ҡаҙаҡ, башҡорттарҙың үҙ ырыуҙары араһында барымта-ҡарымта сапҡындары була торған булған. Шундай бәрелештәрҙең береһендә башҡорт ырыуҙары ҙур бәләгә юлығалар. Бик күп мал-мөлкәттәрен юғалталар. Шунан килеп башҡорт ырыуы Йәнтүрә батыр етәкселегендә ҡаҙаҡ ырыуына ҡарымтаға бара. Был юлы ҡаҙаҡ ырыуы еңелә, башҡорттар ырыуы бик күп мал-тыуар ҡыуып, байлыҡтарын алып ҡайталар. Мал менән бергә бер бәләкәс ҡаҙаҡ малайын да алып киләләр. Малайҙы Йәнтүрә батыр үҙенә ала. Йәнтүрәнең Һабыр исемле кешегә бурысы бар икән. Һабыр мал урынына ошо ҡаҙаҡ малайын һораған.

— Мин риза, — тигән Йәнтүрә батыр.

Иртәгеһен Һабыр ҡаҙаҡ малайы Мәмбәтте үҙе менән алып киткән. Шул көндән башлап, Мәмбәт Һабыр бабай ҡулында тәрбиәләнгән, егет булып үҫкән. Бер саҡ ауыл балалары тегенән: «Һин килмешәк», — тип көлгәндәр. Мәмбәт ҡайтып Һабыр ҡартҡа һорау биргән:

— Мине ҡайҙан алдығыҙ?

Һабыр ҡарт дөрөҫөн әйтмәй булдыра алмаған.

— Һин ҡаҙаҡ балаһы, тыуған ерең — ҡаҙаҡ далаһы.

— Миңә эйәрләгән ат бир. Мин үҙ тыуған йортомдо ҡайтып күрәйем, — тип үтенгән Мәмбәт.

Бер нисә көндән һуң Мәмбәт үҙенең тыуған ерендә булған. Ҡаҙаҡтар уны йылы ҡаршы алғандар, һый-хөрмәт күрһәткәндәр, үҙ кешеһе итергә тырышҡандар. Шулай ҙа Мәмбәт үҙенең тыуған еренә ерһенмәгән. Ул тиҙерәк үҫкән еренә ҡайтырға тырышҡан, тик ҡаҙаҡтар уны ебәрергә теләмәгәндәр. Ат-эйәрен йәшереп ҡуйғандар, һәр аҙымын күҙәткәндәр.

Шулай зарығып йөрөгән мәлендә уға бер еңгә тап килгән. Егеткә аҡыл өйрәткән:

— Беҙҙең тирмә янында эйәрле өс ат тора. Һин шуларҙың өсөһөн дә ысҡындыр, береһенә атланып сап, ҡалғандары үҙҙәре эйәрерҙәр, алмашлап атланып сабырһың, — тигән [1].

Мәмбәт теге аттарҙың береһенә атланып сапҡан. Йәйләүҙә саң-томан күтәрелгән. Ҡаҙаҡтар быны белеп ҡалып, ҡасҡын артынан төшкәндәр. Өс көн, өс төн Мәмбәт аттан-атҡа атланып, үҫкән еренә, башҡорттар араһына, сапҡан. Ҡаҙаҡтар уның артынан етә алмағас, кире боролғандар. Мәмбәт иҫән-һау Һабыр янына килеп ингән. «Рәхмәт рөхсәтеңә», — тигән ул, түбәнселек менән баш эйеп.

Мәмбәттең бөтөнләй үҙ янында ҡаласағын белгәс, Һабыр бабай уны өйләндерергә булған, мал-тыуар, ер бирергә булған. Икәүләп, ҡулайлы урын эҙләп киткәндәр. Эҙләй торғас, хәҙерге Мәмбәт ауылы тирәһенә килеп сыҡҡандар. Ошо ерҙәр уларҙың күңелен уяҡан. «Беҙҙең ырыу был ерҙә тиҙ үрсер, йылғаһы бар, урманы бар, малға бесәне бар», — тигәндәр. Мәмбәт шунда оя ҡорған.

Мәмбәттең өс улы булған. Уларҙан нәҫел-ырыу таралып киткән.

Мәмбәт ауылынан ике утар бүленеп сыға. Хәҙерге көндә улар ҙур ауыл (Сәғит, Таңатар ауылдары).

## 175. ҒӘЛЕКӘЙ АУЫЛЫ

Был ауыл ҡаҙаҡ менән башҡорттар насар мөнәсәбәттә булған ваҡытта барлыҡҡа килгән. Ҡаҙаҡтар башҡорттарҙың малдарын ҡыуып алып киткәндәр, ҡатын-ҡыҙҙарын ҡоллоҡҡа төшөргәндәр. Шул осор ҡаҙаҡта Ғәлекәй тигән бала була. Ҡаҙаҡта үҫә, тәрбиәләнә. Егет үҫеп еткәс, ҡаҙаҡтың аҡһаҡалдары шик тота: «Был балаға үҙ араларынан кәләш алып биреп, иленә ҡайтарайыҡ. Үҫкәс, үс алыр», — тип уйлағандар ҙа, кәләш алып биреп, көтөү-көтөү мал биреп, иленә ҡайтармаҡсы булғандар. Шунан Ғәлекәйҙән: «Ҡайҙа апарайыҡ?» — тип һорағандар. Ул: «Урал яғына, ҙур йылғаға бер йылға ҡойор, — ти, — шунан тауҙан бәләкәй генә йылға ҡойор, уның тамағында бер ҡарағас ултырыр. Уның дүрт яҡҡа дүрт бо-

тағы йәйелеп торор. Шунда минең илем булыр, шунда алып барығыҙ», — тип яуаплаған.

Ҡайтҡас, Ғәлекәй шунда нигеҙ ҡороп ебәрә.

## 176. ҠЫУАТ АУЫЛЫ ТАРИХЫ

Был ауыл сама менән 200 йыл элек булған. Ул саҡта хәҙерге кеүек тупланған ауылдар булмаған. Шулай бер йыл йәй көнө ҡаҙаҡтар башҡорттарҙың бер өйөр йылҡыһын әйҙәп, ауырға ҡалған бер йәш кенә киленде урлап алып китәләр. Бер аҙ йәшәгәс, был ҡатындан бер ул тыуа. Уға Ҡыуатай тигән исем бирәләр. Ҡыуатай үҫә, ҙурая. Уны ҡаҙаҡ балалары «истәк» тип үсекләр булғандар. Бала быға бик ғәрләнеп үҫә. Ир-егет булғас, был турала әсәһенә әйтә, ниңә улай тиҙәр, ти. Әсәһе уға ҡаҙаҡтар уны урлап алып китеүен, атаһының Һаҡмар буйы башҡорто булыуын әйтә. Ҡыуатай уйға ҡала, әсәһенә, илгә ҡайтайыҡ, ти башлай. Әсәһе риза була. Бер көн егет әсәһе менән бергә бер өйөр йылҡыны әйҙәп, ҡасып ҡайтып китә. Хәҙерге Орск ҡалаһынан ҡырҡ илле саҡрым үрҙә Яйыҡ аша сығалар. Ошо кисеү әле лә Ҡыуат кисеүе тип атала. Таң быға ошо ерҙә Ҡыуатай артынан ҡыуғын килеп етә. Егеттең үгәй атаһы бик кешелекле ҡаҙаҡ була, ул Ҡыуатайҙың үҙ тыуған иленә ҡайтыуын ғәйеп күрмәй. Уға ризалыҡ, фатиха биреп, әйҙәгән малдарын да кире алмай, ҡайтарып ебәрә. Егет атаһы төйәк иткән Һаҡмар буйына килеп, хәҙерге Ҡыуат ауылына нигеҙ һала [1]. Был ауыл Юлдыбайға ете саҡрым үрҙә, Әбделкәрим [2] ауылы янында.

## 177. ТАУЛЫҠАЙ АУЫЛЫ

Борон, ырыу-ара ыҙғыш заманында, тау араһынан бер ир бала табып алалар. (Яу ваҡытында ни сәбәп менәндер ташлап киткәндәр, имеш.) Шуны Ҡаратуҡай тигән ҡарт тәрбиәләп үҫтерә. Малай бик мыҡты ғына булып үҫеп етә. Зирәк, телсән була ул. Халыҡ тупланып, ауыл булып ойошоу ваҡытында егет ошо үҙен табып алған тау араһына ултыра. Шуның хөрмәтенә ауылға Таулыҡай тигән исем биргәндәр [1]. Ауыл 1849 йылда башлап һалынған. Унда Ҡаратуҡай исемле урам да бар.

## 178. ҮРГЕ ҺӘМ ТҮБӘНГЕ ЯЙЫҠБАЙ АУЫЛДАРЫНЫҢ ТАРИХЫ

Рәсәй батшалығына буйһоноуҙан алдағы йылдарҙа башҡорт һәм ҡаҙаҡ ырыуҙары үҙ-ара тыныс йәшәмәгәндәр. Һәр ваҡыт улар араһында ҡанлы һуғыш булып торған. Ҡаҙаҡ батырҙары бигерәк

гә башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарын, батырҙарҙың ҡатындарын алып китер булғандар. Быны улар үҙҙәрендә башҡорт батыры тоҡомон күбәйтеү ниәтенән шулай иткәндәр. Ҡайһы ваҡыттарҙа талап, бөтә малын, мөлкәтен алып китер булғандар. Барымта һуғыштарынан яфа сиккән Яйыҡ буйы башҡорттары Ҡыҙыл йылғаһы, Урал, Ирәндек тауы буйындағы тыныс урындарға күсеп китеп мәҡам тота башлайҙар. Бына ошо ваҡыт Көрәй батыр үҙенең ете улы, башҡа туғандары менән Ҡыҙыл буйындағы Нуғай ауылынан бүленеп сығып китеп, хәҙерге йәшәгән урынға килеп, мәҡам тота башлай. Көрәй батыр ҡырҡ урынды һайлап килеп, һуңғы ултырған хәҙерге урынын иң тыныс урын тип тапҡан. Шуға күрә лә Көрәй: «Ҡырҡ урынға көл түктем», — тигән. Ҡырҡынсы урыны Эмәндек булған. Улар уға «Именлек» тип исем биргәндәр. Именлек «Әмәндек»кә әйләнгән. Йылдар үтеү менән улар Әмәндек буйлап ике ауыл булып ултырғандар, шуға күрә был ике ауылдың исемдәре Үрге Яйыҡбай-Нуғай һәм Түбәнге Яйыҡбай-Нуғай булып киткән. Яйыҡбай исеме Көрәйҙең иң батыр улы Яйыҡбай хөрмәтенә ҡушылған.

## 179. НИҒӘМӘТ, НУҒАЙ, ФӘЙЗУЛЛА АУЫЛДАРЫ

Яйыҡ буйына ҡаҙаҡтар килеп ултырғас, башҡорттар менән ҡаҙаҡтар араһында ыҙғыштар булып торған. Бер-береһенең малын ҡыуып алып китһенме, ҡыҙҙарын урлаһынмы... Бигерәк тә ҡаҙаҡтар башҡорт ҡатындарына ҡыҙығыр булғандар. Малдарын, урланған ҡатын-ҡыҙҙарын ҡайтарыр өсөн башҡорттар, барымта һуғыштарына йөрөгәндәр. Ошо һуғыштарҙа башҡорттан: Сура батыр, Иҫәнбәт батыр, Темәс батыр, Апай батырҙар ҡаһарманлыҡ күрһәткән.

Шунан һуң һуңыраҡ Ҡыҙыл буйына рустар килеп ултырған. Башҡорттар үҙҙәре ултырған ерҙәрҙән күсергә мәжбүр булғандар. Көрәй батыр үҙ ырыуы менән бер тау буйына килеп урынлашҡан. Ул тауҙы Көрәй тауы, тиҙәр. Апай батыр Нуғайға килеп ултыра. Ул атта яҡшы йөрөгән, батыр һуғышсы ла булған. Апай батыр үлгәс, уны бер тау башына күмәләр. Ул урынды Апай тауы, тиҙәр. Тауҙың башында мәмерйә бар. Уның эсенә 12 метрҙан ары китеп булмай: таш араһы ҡыҫыла башлай. Мәмерйәнең ары һуҙылғаны, тәрән, ҡапыл төшөп киткәнлеге беленеп тора. Уның икенсе осо Суҡташҡа сыға. Суҡташ тауы эргәһенән Әмәндек йылғаһы аға. Апай ырыуынан Үрге һәм Түбәнге Нуғай ауылдары барлыҡҡа килә. Нуғайҙан Ниғәмәт тигән кеше килеп, ауыл төҙөй башлаған. Ауылға башлап килеп ултырған кешенең исемен биргәндәр [1]. Элек Ниғәмәт ауылы эргәһендә Исхаҡ ауылы бар ине. Хәҙер юҡ инде: күсеп бөттөләр. Фәйзулла ауылы аҡтар менән ҡыҙылдар һуғышы ваҡытында төҙөлә башлай [2].

## 180. УБАЛАР АУЫЛЫ

Убалар ауылы ултырған ерҙә элек ҡалмыҡтар йәшәгән: быны раҫлаусы 8—9 урында землянкә бар. Убалар шул ҡалмыҡтарҙан ҡалған исем. Ауылдың эргәһенән генә Арғынйәш [1] тигән йылға аға. Ул күҙ йәше кеүек атылып сыға.

Ҡатайҙарҙың Сысҡан ауылы [2] егете Ҡылысбай батыр беҙҙең яҡтарҙа ла йөрөгән. Ете саҡрымдан уның йырҙарын тыңлап, Әүҙәрҙәк [3] тауы итәгендә ятҡан беҙҙең Осҡонло [4] ауылы ҡатындары, һыйыр һауғанда, имсәктәрҙе яңылыш тартып, һөттө ергә һауып ултырыр булғандар. Ҡылысбайҙың йырын әле лә йырлайҙар:

Урал тауҡайында йөрөгән, эй, йылҡы малын
Һайлап-һайлап мендем һәйбәтен.
Ир тигән ирҙәрҙең гәҙәтен шунан белерһең,
Һис һөйләмәҫ булыр кеше ғәйбәтен.

## 181. РӘСҮЛ АУЫЛЫ

Рәсүл ауылы ултырған урын элек буш дала, урыны-урыны менән һаҙлыҡ булған. Был урындарға күсеп килгәнгә тиклем Рәсүл дархан [1] өйөр-өйөр малына уңайлы урын эҙләп күсеп йөрөгән. Хәҙерге Рәсүл ерҙәренә килеп сыҡҡас, төйәк тартҡан. Рәсүл ауылын икегә бүлеп, Ҡандыбулаҡ йылғаһы аға. Рәсүл дархан йылғаның һул яҡ ярында, түбә итәгендә тирмә ҡорған.

Бер йылды Рәсүлдең тирмәһе алдына ҡалмыҡтар килеп туҡтай. Рәсүл дархандың яҡшы-яҡшы аттарын күреп, ҡалмыҡтарҙың береһе бишектәге Тайсын исемле малайын өс ҡырыҡмышҡа * алмашып китә. Рәсүл дархандың үҙенең дә балалары була. Етеп килгән малайы атаһының был ҡылығы менән килешеп етмәй. Хатта: «Был ят енес, бер ҡасан да беҙҙең затҡа имеплек килтермәйәсәк», — тип, ҡалмыҡ малайын үлтерергә ниәтләгән.

Тайсынды туҙ бишектә аҫырайҙар.

Бер көндө Рәсүл дархандың әлеге улы, уҡ-һаҙағын алып, һунар һылтауы менән түбә башына менә. Бишектә ятҡан баланы атыр өсөн бер уҡ һайлап ала ла төҙәп тороп атып ебәрә. Уҡ бишектәге балаға теймәй, бишек янындағы тәгәрмәстең көпсәген яра килеп тейә. Был малай бик мәргән атыусы һаналған, 200—300 метр йыраҡлыҡтан ата торған булған. Был юлы 150—200 метрҙан да тейҙерә алмай. Үҙе лә ғәжәпкә ҡала. «Үлеүсенең үлеме етмәһә, үлтереүсенең ҡулы етмәй», — тип, ул ҡабаттан атмай.

Тайсын үҫә, егет ҡорона тула. Рәсүл дарханды үҙ атаһы кеүек күрә. Рәсүл дархан, Тайсынға үҙ ырыуынан ҡыҙ бирип, Ҡандыбулаҡ йылғаһының көнбайыш яғына сығара.

Шулай итеп, Ҡандыбулаҡтың һул яғындағы ауылды Рәсүл тип, уң яғындағыһын Тайсын тип йөрөтә башлайҙар.

Аҙаҡтан ауылды ике исемдә йөрөтөү бөтә. Йә Рәсүл, йә Тайсын ғына тиҙәр. Хәҙер ауылдың рәсми исеме — Рәсүл. Ҡарттар Тайсын тип йөрөтә.

## 182. ҠАШҠАР

Элек яу менән килгән ҡалмаҡтар ҡасып киткәс, уларҙың бер ир балаһы тороп ҡалған[1].

Иртән таңда шул бала ялан буйлап: «Әкә-әкә» *, — тип илап йөрөй икән. Ауылдың бер кешеһе баланы алып ҡайтҡан, аҫырап, ир еткергән. Тәүҙә уның исеме булмаған. Уны Әкәү тип йөрөткәнһәр. Һуңынан бер уйға килгәндәр: «Ата-бабаларының тыуған иле Кашғар[2], балаға ла Ҡашҡар исемен бирәйек», — тиешкәндәр. Шунан Ҡашҡар тип йөрөткәндәр.

Берҙән-бер көндө батша хөкүмәте тарафынан бер ҡағыҙ килеп төшкән. Унда бер кешене вәкил итеп ебәреүҙәрен һорағандар.

Ауыл ҡарттары, йыйылышып, кәңәш итәләр: «Бында берәй хикмәт барҙыр», — тип әлеге Ҡашҡарҙы вәкил итеп ебәрәләр. Тейешле урынға барғас, был егеткә «һин бер нисә ауылға хужа булаһың» тигән ҡағыҙ тоттороп ҡайтаралар.

Бына ошо ҡалмаҡ малайы табылған йылғаны Әкәү йылғаһы[3] тип, ул баш булып ҡалған ауылды Ҡашҡар ауылы тип йөрөтәләр. Ауылдағы Ҡашҡаровтар — ҡалмаҡтар тигән ара ла шунан килеп сыҡҡан, тиҙәр.

## 183. БАТЫР АУЫЛЫ

Ҡасандыр бер-береһенә дошман ике ҡәбилә йәшәгән. Бер саҡ береһе икенсеһенә яу менән килгән, тегеләр урманға ҡасҡан. Бер өйҙә генә сабый бала бишектә йоҡлап ҡалған: баланың әсәһе һыуға киткән булған. Тик ул ҡайта алмаған, дошмандар ҡулынан үлгән.

Урманға ҡасҡан кешеләр, араларында теге ҡатын менән баланың юҡлығын күреп, кире ҡайтҡандар. Улар йүгереп бала ятҡан өйгә кергәндәр. Өй ҡыйығын ут алған булған. Бала, бер ни булмағандай, тәҙрә аша утҡа ҡарап көлөп ята икән. «Бына, исмаһам, батыр егет», — тип күтәреп алғандар уны. Малайға Батыр исеме ҡушҡандар. Уның янған өйө һәм ауылы урынына яңы ауыл төҙөлгән. Ауылдың тәүге өйө итеп Батыр малай өйө һалынған. Шул көндәрҙән алып ауыл Батыр тип йөрөтөлә.

## 184. СӘЙЕТБАБА МЕНӘН МЫРҘАҠАЙ

Борон-борон заманда Урал буйында бер әбей менән бабай йәшәп ятҡан. Уларҙың әллә ни малдары ла, байлыҡтары ла булмаған. Ҡышын малдарын ҡураларында аҫрағандар, йәй көнө Мәнһем[1] буйына ҡыуғандар.

Бер көндө ҡарт менән әбейҙең бер-бер артлы ике ир балаһы тыуа. Береһенә Мырҙаҡай, икенсеһенә Сәйетбаба тип исем ҡушҡандар.

Үҫеп еттек тигәндә генә, егеттәрҙең атаһы үлеп китә. Үлер ал-

дынан ҡарт балаларына васыят ҡалдырған: «Уландарым, ир булып еттегеҙ инде. Бер-берегеҙгә ярҙамлашып йәшәгеҙ», — тигән.

Егеттәр, башлы-күҙле булып, донъя ҡороп ебәргән. Береһе, Өййә[2] йылғаһының уң яғына, икенсеһе һул яғына йорт һалған.

Бер көндө баҫҡынсылар килеп, быларҙың малдарын эйҙәп алып китергә иткәндәр. Мырҙаҡай менән Сәйетбаба, белеп ҡалып, баҫҡынсыларға ҡаршы сыҡҡан. Бик ныҡ алышҡандар. Мырҙаҡай яралана. Сәйетбабаға бер ни ҙә булмай. Туғандар баҫҡынсыларҙы баҫмалатып барып, ҡырып бөтөрөп, ҡайтып китәләр.

Батырҙарҙы халыҡ өс көн, өс төн, бер ай, утыҙ бер көн буйы күтәреп йөрөп ҡунаҡ иткән. Йәйләүҙең һул яғын — Мырҙаҡай, уң яғын — Сәйетбаба тип йөрөтә башлағандар[3].

## 185. КРЕПОСТНОЙ ЙЫЛАЙЫР

Элгәре, бик борон, ошо Исҡужа ауылынан үрҙә ун саҡрым самаһы araһынан һыбай ҙа үтә алмаҫлыҡ ҡарағай урманы булған. Бер урыҫ баяры ошо урындан үгеҙ тиреһе ҙурлығында ер һораған. Башҡорттар риза булған. Теге урыҫ үгеҙ тиреһен нәҙек кенә итеп телеп ялғаған да, шул урман уртаһына ҡаҙыҡ ҡағып, бер осон шунда бәйләгән, бер осон һуҙып алып киткән. Бер-бер яғы унар саҡрымға еткән һәйбәт ҡарағай урманы шулай уратылған да алынған, ти. Ошонан башлап, башҡорттар менән әлеге баяр араһында ыҙғыш-талаш киткән. Баяр атлығаҙаҡ алдыртҡан. Башҡорттар күгәрсен ботона дегетләп сүбәк бәйләгәндәр ҙә, баярҙың ағас крепосына алып килеп ут төртөп, осороп ебәргәндәр. Баярҙың утары янып киткән.

Бында янғын бер мәртәбә генә булмаған. Уҡтың осона дегетләп сүбәк урап, ут тоҡандырып та атҡандар. Уҡтың кәбән-фәләнгә тейеүе була, яна ла китә икән.

Эш ҙурға китә башлағас, түрәләр килеп, башҡорттарҙы алдаштырып, яңы урынға күсеп ултырырға урын күрһәткән. Бына шул көндән башлап, Исҡужа ауылы ошо урында ултыра. Теге баяр ултырған урыҫ ауылын Крепостной Йылайыр[1] тип йөрөтәләр.

## 186. АБЛАСКИН (ЯУЫМБАЙ)

Бер саҡ шулай урыҫ байы килә лә Аблас ҡарттан ер һорай.

— Үгеҙ тиреһендәй ер бир, башҡаһы миңә кәрәкмәй, — тип әйтте, ти.

— Үгеҙ тиреһе хәтлем? Һы, була ул.

Килешеү яһайҙар былар шул ерҙә. Теге бай эшкә лә керешә. Үгеҙ тиреһен нәп-нәҙек итеп телдертә лә тегеләрҙе ялғап-ялғап һуҙып сығып китә был. Эй бара, эй бара. Аблас ҡарт, күҙҙәре аларып, бынан ҡалмай эйәреп бара. Һуҙып үлсәй торғас, кругом егерме саҡрым ерҙе уратып та алған теге. Бына һиңә, Абласҡа бер баҫыр ҙа ер ҡалмаған. Ни хәл итәһең? Эш һуң. Килешелгән.

Аблас йәшәгән ерен ташлап китергә мәжбүр була. Теге урыҫ ...йы завод һалдыра башлай. Әүжән заводы шулай барлыҡҡа ...лгән. Аблас ҡарт хәҙерге Яуымбай ауылы урынына килеп ауыл ...ора. Ул үлгәс, Яуымбай [1] тигән кешенең исеме бирелә ауылға.

## 187. НӘБИ АУЫЛЫНЫҢ ТАРИХЫ

Бынан күп йылдар элек Һатыбал бабай ҡаршы тауҙан йәйәү ...нөп килеүсе бер кешене ҡаршы алған. Был Филатов [1] бул...ан.

— Ниңә улай тарау йәшәйһегеҙ, ауыл булып ултырырға кә...к, — тигән Филатов бабайға.

Филатов утарҙарҙа мал ҡараусыларҙы йыйып, йыйылыш яһа...ан. Ауыл булып йәшәүҙең бик файҙалы булыуын аңлатҡан. Шу...н һуң, Филатов күрһәткәнсә, ошо урында ҡиблаға ҡаратып (...уй) урам төҙөлә. Һатыбал бабай ҙа урын ала, бабайҙың ул...ары, тағы башҡа кешеләр ҙә шулай урынлашалар.

Филатов, ауылға исем бирергә кәрәк хәҙер, ти. Ул Һатыбал ...абайҙың исемен тәҡдим итә. Әммә бабай ҡаршы килә, аръяҡта... Нәбиулла бабайҙы күрһәтә. Шул ваҡыттан бирле беҙҙең ауыл Нәби исемендә йөрөй [2].

## 188. ҠАТАЙ

Бер бик ҡаты яуҙан һуң, батша ғәскәрҙәренән ҡасып, эҙ яҙҙы...п, беҙҙең атай-бабайҙар Силәбе яҡтарынан ошо яҡҡа килеп ...ҡҡандар.

Ҡатай ҡарт — Ҡатай нәҫеленән. Уның ике улы булған. Бер ...ы Ағиҙел буйында төпләнеп ҡалған. Ҡесе улы менән үҙе ошо ...рәгә килеп ултырған. Был тирә Ҡатай ҡарт килгәндә үтеп сыҡ...ғыҙ ҡара урман булған. Ағас бурап, өй һалғандар, урман төп...п, әҙерәк иген сәскәндәр. Төп кәсептәре, ағас киҫеп, дегет ҡай...ыу, ағас күмере яндырыу булған.

Рязань яғынан, Уҡа [1] буйҙарынан, бер төркөм халыҡ күсеп ...лгән. Ер өсөн бер тартҡылаш ваҡытында Ҡатайҙарҙың Күсем, ...сон нәҫелдәрен Иҫке Ҡатайҙан был яҡҡа сығарғандар Яңы ...айға. Ауылды һаман да Ҡатай яғы, Типтәр яғы тип атау бар.

Ауылдың аръяҡ ҡырынан ғына аҡҡан Бикләнде тигән йылға ... Бынан йөҙ йылдар элгәре бер алпауыт килеп, ер һатып алып, ...емер килтертеп, шул йылға буйҙарын бүлеп ала. Ҡатай ере... шул яғы бүленеп, бикләнеп ҡалғанға, халыҡ йылғаны Бик...де тип атай башлай. Ул ерҙе «Баяр яғы ер» тип йөрөтәләр ...

Баяр Ҡиевтан килгән хәрби врач Петр Чайковский тигән кеше ...н, ти. Уның дүрт ҡыҙы булған. Ул дүрт ҡыҙына ла имение, ер ...еп биргән, үҙе ҡартайғас, еренең күп кенә өлөшән уларға, ке...үҙәренә, бүләк иткән.

Башҡорт ерҙәренә марийҙар ҙа килгән. Ҡатай еренә уларҙың Туҡмаҡ тигән бер ҡарты башлап килеп ултырған. Ерҙәр ҡыҫыла, әҙәйә башлағас, башҡорт-типтәрҙәр марийҙарҙы хәҙерге Туҡбирҙе ауылы яғына ҡыҫырыҡлап сығарғандар. Элек ауылдың шәжәрәһе лә булған, тиҙәр.

## 189. ҠАНЫ-ТӨРКӘЙ АУЫЛЫ

Матур Сәрмәсән[1] буйҙарында элек-электән башҡорттар мал үрсетеп, һунарсылыҡ менән шөғөлләнеп йәшәп килгәндәр. Улар — Меңле ырыуы башҡорттары.

Шулай бер ваҡыт баҫҡынсылар, яу менән килеп, бындағы башҡорттарҙы ҡыуып ебәрәләр. Меңле ырыуы башҡорттары Ирәндек буйы башҡорттарына барып һыйыналар. Ирәндек буйында Төркәй * исемле танылған башҡорт батыры була.

Был батыр илдең егеттәрен бергә туплай ҙа, меңле егеттәрен эйәртеп, Сәрмәсән буйҙарына баҫҡынсыларға яу булып килә. Сәрмәсән ярында, ҡалҡыу урында, ҡан ҡойғос һуғыш башлана. Шулай ҙа Төркәй батырҙың һуғышсылары сыҙамлыраҡ булып сыға. Дошман Сәрмәсән буйынан ҡыуыла. Төркәй ҡаты яраланып үлә. Меңле ырыуы кешеләре ошо майҙанда ҡалып, тирмә ҡорғандар. Төркәй батырҙың үҙен аямай ярҙам итеүен онотмаҫ өсөн, ауылға Ҡанны-Төркәй[2] тигән исем биргәндәр.

## 190. ҠАНЫ-ТӨРКӘЙ

*(икенсе версия)*

Әүәле ошо тирәлә күсеп йөрөүсе башҡорттар араһында Төркәй исемле уң ете йәшлек бик батыр бер егет булған. Төркәй үҙ янына егеттәр туплап, башҡорт ерен талаусы рус заводчиктары менән һуғышып йөрөгән. Ул, заводчиктар ҡаҙнаһын талап, аҡсаны халыҡҡа өләшеп бирер булған. Бер ваҡыт ул, бик нык эҙәрләү башлангас, мәмерйәлә ҡасып йәшәргә мәжбүр булған. Уның аҡсаһы күп булған, тиҙәр.

Төркәй ауыл төҙөгән. Шул ауылға Ҡаңны ырыуы кешеләре килеп ултырғандар, ауылға Төркәй, йәки Ҡаңны-Төркәй, исеме биргәндәр. Төркәй аҙаҡ Салауат батыр яҡлы булып, әбей батшаға ҡаршы һуғышып йөрөгән. Ҡанны-Төркәйҙә Иҫәкәй исемле лә бик данлы бер батыр булған. Ул Төркәй менән бергәләп Салауат яуында ҡатнашҡан. Төркәй үлгәндән һуң бик күп йылдар үткәс, Ҡанны-Төркәй ауылы кешеһе Яныша исемле ҡарт, Төркәйҙең бер тоҡсай аҡсаһын табып, бик нык байып киткән.

## 191. КИЛҠАБЫЗ

Беҙҙең ата-бабалар элек Степан Разин восстаниеһында[1] ҡатнашҡандар. Восстание ҡыйратылып, халыҡты эҙәрләү, язалау башланғас, өс ағай-эне ҡасып, был яҡҡа килгәндәр. Ошо урынға йорттар һалып, хәҙерге ауылды нигеҙләгәндәр. Шул ағай-энеләрҙең иң өлкәне бик уҡымышлы кеше — абыз булған. Шуға уны тирә-яҡ халҡы хөрмәтләп «килгән абыз» тип йөрөткәндәр. Ул бик абруйлы аҡһаҡал булған. Шул «килгән абыз» һүҙенән Ҡилкабыз тип ауылдың исеме лә аталып киткән.

Ирек һөйәр, дыуамал был ауыл халҡы бүтән яуҙарҙа ла ҡатнашҡан. Пугач яуында күптәр булған. Улар ҙур-ҙур лагерҙар ҡороп ятҡандар. Шундай лагерь ятҡан ерҙе — хәҙерге Баҡалы урманындағы бер тауҙы — Пугачев тауы тип йөрөтәләр.

Беҙҙән арыраҡ Нағайбәктә[2] бик ҙур Пугачев лагеры була. Нағайбәктә әле бер таш күпер бар. Уны Пугач күпере тиҙәр.

## 192. ҠАНЫҠАЙ

Беҙҙең Ҡаныҡай, ҡарттар һүҙенә ҡарағанда, бер кеше исеменән килә. Яуҙарҙа бик батыр һуғышҡаны өсөн Әбей батша Дим башҡорто Ҡаныҡайҙы ҙур аҡсалар менән бүләкләмәксе булған. Ҡаныҡай аҡсаны алмай, тыуған яҡтарына ҡайтып киткән. Уны Дим буйында тирмәләрҙә ҡәрҙәш-ырыуҙары шатланып ҡаршы алған. Унанниндәй яуҙар кискәнлеге, ҡайҙарҙа булыуы хаҡында һорашҡандар. Ҡаныҡай былай батыр кеше булыу өҫтөнә бик тура һүҙле кеше булған. Дөрөҫөн һөйләп биргән был. Йәйләү халҡы бер һүҙ әйтмәй, ризаһыҙлыҡ менән таралған. Улар беҙҙең ерҙәребеҙҙе, беҙҙең иркебеҙҙе, тау-урмандарыбыҙҙы, илебеҙҙе, беҙҙен Уралыбыҙҙы яҡлап күтәрелгән башҡорт туғандарыңа, үҙ халҡыңа ҡул күтәргәнһең икән, тигәндәр, беҙҙең янда һиңә урын юҡ, тигәндәр. Ҡаныҡай сығып киткән. Яңғыҙ башы Димдең башынан түбәненәсә гиҙгән, ти. Һыйыныр урын тапмаған. Төйәк табалмай шулай йөрөгәндә, бер саҡ төнгә ҡарай бер сағыл буйына килеп туҡтаған.

Төн еткән. Шул саҡ сағыл түбәһенән аҫтараҡ таштар ҡуҙғалып ҡуйғандай булған. Ҡаныҡайҙың толпары кешнәп, аяҡ үрә торған. Яп-яҡты булып киткән. Шул ваҡыт ҡаялар араһынан бер һылыу килеп сыҡҡан да Сағыл түбәһенә баҫып йырлап ебәргән:

Әй, егеткәй, менәйек, ай, Сағылға,  
Сағылдарҙин бүреләре(у) күренә.  
Иҫән саҡта(у) кеше ҡоҙере булмай,  
Үлгәс ҡәҙерҙәре беленә(ү).

Сағылдарҙың яҫмыҡ саҡма ташын  
Беләү итеп ҡылыс ҡайрарһың.  
Ир-егетмен тиһәң, бер ҡулыңды,  
Ғәзиз башым ғазаптан йоларһың.

Каныҡайҙың аты ҡыҙ моңона түҙә алмай, яңғыратып кешнәп ебәргән. Ул кешнәгәндә, Сағыл зыңҡырлап торған. Уның тауышын ишеткән ҡыҙ, ҡулын ҡаш өҫтөнә ҡуйып, түбәнгә ҡараған. Унда Каныҡайҙы күргәс, әкрен генә уның янына төшкән. Төшкән дә Каныҡайға баш эйгән.

Ул ҡыҙ иленән айырылып, дошмандар тарафынан ҡыуылып, ҡасып йөрөй икән. Каныҡай ҡыҙҙы хас дошмандан яҡларға кәрәк булыуына сикһеҙ шатланған, ти. Берауыҡ ял иткән, ҡыҙ менән бергә булған, шунан ҡыҙ йәйләүен эҙләп киткән, ти. Ул ошо һылыу ҡыҙ Таубикә өсөн ҡаты үс алған. Тик Таубикәһенә ҡайта алмаған, яу яланында ятып ҡалған, ти. Таубикә Каныҡайҙан Сафар, Ҡасҡын, Исламғол исемле өс малай тапҡан. Шул тауҙарҙа үҫтергән, уға тау кәзәләре, ыласындар, бөркөттәр — барыһы ла ярҙам иткән, ти. Улдары килеп ултырған урындар уларҙың исеме менән йөрөтөлә башлаған. Ә төп ауыл Каныҡай булып ҡалған. Бына Каныҡай, Сафар, Ҡасҡын, Исламғол[1] ауылдары ҡайҙан килә ул

## 193. ҠОРЪЯТМАҪ АУЫЛЫ

Бынан 400 йылдар элек Сәйет батыр Үҫәргән бейе Әмирҙең ҡыҙын алмаҡ була. Әмир ҡыҙын уға биреүгә ҡаршы була. Сәйет ҙур көс менән килә. Тик уны Үҫәргән батыры Көтөр[1] ҡыйрата. Сәйет ҡасып ҡайтырға мәжбүр була. Әммә ул яңынан ғәскәр туплап, үҫәргәндәргә ҡаршы сыға. Үҫәргәндәр, икегә бүленеп, ҡасып китәләр. Бер өлөшө Ҡытайға, икенсеһе көнбайышҡа (Ҡоръятмаҫҡа) китә. Ҡоръятмаҫта мадьярҙар[2] йәшәгән була. Үҫәргәндәр мадьярҙар менән бергә йәшәйҙәр. Мадьяр тоҡомонан хәҙерге көндә етмеш хужалыҡ бар. Үҫәргән ырыуы кешеләрен Сәгәҙәткирәй Сәйетғәле улы юл башлап алып килә. Улар килгәндә, Ҡоръятмаҫ ерендә Дим буйы Ябалаҡлы ауылы кешеләре күптән йәшәгән булалар инде. Ябалаҡлылар — аҫаба башҡорттар. Ҡоръятмаҫ тигән йылға бар. Ябалаҡлынан Мөхәмәҙүәли тигән бик оҫта һунарсы булған. Ул ҡош-ҡорт ата торған булған. Бер ваҡыт ул ҡор ата сыға. Бынан ҡор ҡаса. Ҡор һис ятмаҫ булған. Шуға ошо ауылға Ҡоръятмаҫ тигән исем биргәндәр.

## 194. ҠЫПСАҠ-АСҠАР АУЫЛЫ ТАРИХЫ

Борон Ҡары-ҡыпсаҡ башҡорттары Ҡытайҙан сыҡҡандар. Шунан һуң улар ҡырғыҙ ерендә йәшәгәндәр. Ҡырғыҙ еренән Ирәндек яғына килеп ултырғандар, аҫаба башҡорт иҫәпләнгәндәр. Мал көтөү өсөн ер-һыу эҙләп, улар хәҙерге Өфө эргәһенә килеп сыҡҡандар. Хәҙерге Дурасов ауылы еренә күсеп ултырғандар. Шунан ул ерҙе ташлап, Сурай, Ҡайыпҡол ауылы еренә припущенниктар булып килеп ингәндәр. Ҡыпсаҡ-Асҡар ауылын шулар төҙөгән. Беҙҙең атай-олатайҙарҙың күсеп килеүенә 500 йыл самаһы бар. Ул ваҡытта Өфө ҡалаһы булмаған әле.

Бер ваҡыт ҡыпсаҡтар менән Сурай кешеләре араһында ер өсөн ыҙғыш сыҡҡан. Ҡыпсаҡтар үс алмаҡсы булғандар. Аҡман дархан[1] тигән ҡыпсаҡ батыры: «Быларҙы үлтереп, гонаһына батмайыҡ», — тигән. Халыҡты тыйған. Шуға үлеш-ҡырылыш булмаған. Ер мәсьәләһен дауһыҙ ғына хәл иткәндәр. Үҙ-ара килешеп эш иткәндәр.

Аҡман дархан бик ҙур кәүҙәле, ғәйрәтле кеше булған. Кешегә ҡунаҡҡа килһә, ишеген алып инә торған булған. Ул Иван Грозный Ҡазанға ҡаршы һуғыш башлаған мәлдә Ҡазанда була, һуғышҡа ҡатнаша, бик күп батырлыҡтар күрһәтеп ҡайта. Ул Ҡыпсаҡ-Асҡарға иң элек күсеп килеүселәрҙән бер быуын һуң тыуған Ҡыпсаҡ батыры булған.

Һуңынан Ҡыпсаҡ-Асҡар ауылынан халыҡ бүленеп сығып, Яңы-Ҡыпсаҡ ауылын төҙөгәндәр.

Был яҡтағы Тәүәтәй, Һарыш, Туҡтар, Бөрйән ауылдары Бөрйән ырыуына инәләр. Был ауыл кешеләре аҫаба түгелдәр, припущенниктар (килмешәктәр). Илсеғол ауылының яртыһы Бөрйән, яртыһы Аҫаба (Меңле ырыуы) була.

## 195. ҠЫПСАҠ-АСҠАР АУЫЛЫ

*(икенсе версия)*

Бер йылға булған. Шул йылғаның ике яғында ауыл ултырған. Береһенең исеме — Ҡыпсаҡ, икенсеһенеке — Асҡар. (Икенсеһенеке тигәнем — икенсе ярҙағыһы тигәнем инде.) Ике исем уңайһыҙ. Бер аҡһаҡал: «Ағай-эне, бер ауылға ике исем уңайһыҙ. Бер исемен генә ҡалдырайыҡмы, әллә бөтөнләй яңы исем ҡушабыҙмы?» — ти икән. Береһе әйтә:

— Ҡыпсаҡ.

Икенсеһе:

— Асҡар исемен ҡушайыҡ, — ти.

Тартыша торғас, күҫәк күтәреп һуғышалар ҙа китәләр.

Ҙур аҡһаҡал:

— Талашмағыҙ. Берегеҙгә лә ҡыйын булмаһын өсөн ауылға Ҡыпсаҡ-Асҡар» исеме ҡушабыҙ, — ти.

Ана шунан ҡала Ҡыпсаҡ-Асҡар ауылының исеме. Шул ауылдан күсеп килеп ултырған кешеләр нигеҙ һалған был ауылға. Ауылдың һалыныуына бер 500 йыл бар, тип һөйләй торғайнылар әлекке бабайҙар.

Революцияға тиклем беҙҙең ауыл Бәләбәй кантоны Өфө өйәҙе Әлшәй волосына кергән.

Ауылдағы нәҫелдәр: майырыҡ, сапҡын, шайтан (ҡушамат), саҙҙар, ҡаралар, ҡаҙаҡтар, маңҡалар.

Мәҙрәсә бар ине. 30-сы йылдарҙа мәсет манараһын киҫтеләр.

Граждандар һуғышы ваҡытында беҙҙең ерҙәрҙән үтмәгәне ҡалманы: аҡтары ла, ҡыҙылдары ла, колчак ғәскәрҙәре, чехтар...

## 196. ҠЫПСАҠ-АСҠАР

*(өсөнсө версия)*

Бөрйән яғынан, Ҡары-ҡыпсаҡ ырыуынан, Асҡар тигән бабай килеп ултырған. Апрель айы булған. Апрель айын «хәмәл» тиҙәр. Асҡар ҡарт әйткән: «Хәмәлемдә — ғәмәлем, ана тора оло кәбәнем», — тигән, Сатыртауға күрһәтеп. — Эсергә Диме бар, сабырға туғайы бар. Ошонда урынлашайыҡ. Урынлашҡандар. Шул бабай исеменә «Ҡыпсаҡ-Асҡар» тигән ауыл. Ҡыпсаҡ ырыуынан Асҡар ҡарт нигеҙ һалғанға шулай тигәндәр инде.

## 197. ҠАНДРА ӘМИН

Элек, түрәләр ерен-һыуын тартып ала башлағас, халыҡ батшаға ҡаршы ҡорал күтәргән. Һуғыш бик ҡаты булған. Ырымбурҙан Ҡазанға тиклем йәйәү барып һуғышҡандар. Халыҡ бик ғазапланған, мал-тыуар тәләф булған. Башҡортто бик ҡыра башлағандар. Яу урынында ауылдарҙың көлө генә ҡалған.

Әй һыуы буйында яу баҫтырыу бигерәк тә ҡаты булған. Ул тирәләге башҡорттарҙы эйәртеп сығыусы Салауат батыр булған. Һуңынан уны тотоу өсөн бик күп көс түккәндәр. Ахырҙа, тотоп алып оҙатҡандар. Яуға ҡатнашҡан кешеләрҙе эҙәрләп берәм-берәм ҡулға алғандар. Әй буйы тирәһендә йәшәргә рәт булмағас, беҙҙең бабабыҙ Әмин ҡарт ҡарсығын, балаларын һәм үҫеп еткән балдыҙын эйәрткән дә баш һуҡҡан яҡҡа сығып киткән. Урмандарҙа, ҡаяларҙа ҡасып йөрөй торғас, ул Ҡандра күле буйына килеп сыҡҡан. Шунда һунарсылыҡ менән көн итә башлаған. Ҡандра күле тирәләй ҡара урман ҡаплаған булған. Ҡошо-ҡорто, балығы ла бик күп булған.

Шулай бер ваҡыт һунарҙа йөрөгән сағында Әмин ҡартҡа бер йәш егет осраған. Бабай егетте күргәс тә, уғын тоҫҡап, атмаҡсы булған. Теге егет: «Атма, бабай, мин дә һинең кеүек өләшһеҙ әҙәм», — тигән. Бабай атмаған. Егетте үҙе менән бергә алып киткән, ҡыуышына алып барып ҡунаҡ иткән.

Егеттең исеме Туйыш булған. Былар бергә һунарға йөрөй башлағандар. Ҡыр кәзәләре атҡандар, мышылар тотҡандар, балыҡ аулағандар. Бабайға егет бик оҡшаған. Бабай Туйышҡа үҙенең балдыҙын биргән. Бына шунан үрсеп киткәндәр. Тәүҙә күл тирәләй ултырғандар. Балалары үрсегәс, төрлө урынға таралышып, йәйелеп киткәндәр. Ҡандра Әмин тигән исем бына шунан тороп ҡалған.

## 198. ТЕЛӘҮЛЕ

Теләүле ауылының тарихы турында ҡартатайым шулай һөйләй торғайны. Пугач яуы менән килеп, Сөн буйына туҡталып ҡалған

беҙҙең ата-бабалар. Ҡарайҙар: Сөндән юныҫҡылар аға. Тимәк, йылға үрендә кешеләр йәшәй. Ҡитәләр йылға үренә. Унда бер ҡарт алты улы менән донъя көтөп ята икән. Тораҡтары — землянкә. Шунан бергәләшеп ағастан өйҙәр һалып керәләр. Әлеге Теләүле урынында йәшәй башлайҙар. Ауылға Ҡама — Сулман Иҙел буйынан тағы дүрт ул килеп ултыра. Шуларҙан ауыл үрсеп-ҙурайып киткән.

## 199. ЮЛЫҠ АУЫЛЫ

Элгәре замандарҙа был Юлыҡ ауылы халыҡтарының затынан бер Бәшәрғол исемле кеше йәшәгән. Ошо Бәшәрғол кәләште Урал буйынан барып алған.

Бер ваҡыт, ҡатынының нәҫелдәрен күрер өсөн ҡунаҡҡа барғанда, юлда быларҙың балалары тыуа. Уралға барып еткәс, Бәшәрғол:

— Бына һеҙгә ҡунаҡҡа килгәндә, бер ир балабыҙ донъяға килде, — тигән.

Ҡатынының нәсәптәре:

— Юлда тыуған балаға Юлыҡбай тип исем бирәйек, — тигәндәр.

Ата-инә шатланып риза булған.

Бына ошо юлда тыуып, Уралда исем алған Юлыҡбай батыр ир-егет булып үҫеп етә. Салауат яуында ҡатнашып, шул яуҙа меңгән толпары менән бергә һәләк була.

Дошман яуында үлгән Юлыҡбай батырҙың исемен тәҙкирә өсөн ауылды Юлыҡ ауылы тип атағандар [1].

## 200. МОРАҘЫМ

Был ергә Мораҙым ҡарт ике энеһе — Исмәғил, Ҡинйәкәй менән килеп ултырған. Тау-таш, ҡалын урман булған, мәмерйәләрҙә йәшәгәндәр тәүҙә. Ул мәмерйәләр әле лә бар. Мораҙым йылғаһы буйында. Таш ташлаһаң, йә ат менеп үтһәң, дөңгөрләп тора. Шуға береһен Дөңгөрләүек тип йөрөтәләр. Ҡулсура мәмерйәһе, Ерҡүпер мәмерйәләре [1] өй һымаҡ булған. Халыҡ аҙаҡ та, бола-фәләп булһа, шул мәмерйәләргә ҡасып ҡотолған.

Мораҙым үҙе Мең ырыуынан, шуның алтынсыһынан булған. Меңдәр ун ике йорт булған бит инде. Алтынсы меңдең башы Уралас бей [2] була. Ул үлгәс, балалары ерҙе лә, халыҡты ла бүлеп, ҡаҡлап бөтөргәндәр. Мораҙым ана шул дәүерҙә килеп сыҡҡан быңда. Тәүҙә Биллеҡылыс [3] буйына ултырған. Биллеҡылыс — бей исеме булырға тейеш. Асығын әйтә алмайым. Тик Мораҙым шул Биллеҡылысҡа эйәреп килмәнеме икән тип кенә әйтеүем. Мораҙым үҙе бей булмаған, тик бик аҡыллы, йылғыр кеше булған. Мораҙымдан йылға менән ауыл ҡалған, Биллеҡылыстан Шишмә йылға ҡалған. Мораҙымдың энеһе Исмәғилдән Смаковтар нәҫеле

ҡалған, Ҡинйәкәйҙән кем ҡалғанын белмәйем. Бына шулай ул Мораҙым тарихы [4].

## 201. СУМАР

Ун ике ауыл ер өсөн тауыш күтәреп, ғауға сығара башлағас, землемер ебәргәндәр. Һәр ауыл землемерҙы ныһыраҡ һыйларға тырышҡан. Маянғандар [1] аш-һыуға оҫтараҡ икән. Улар майға ҡайнатып шөшмәрә (билмән) бешергәндәр. Землемер Абдрахманға [2] килгәс, һорайҙар икән: «Нимә ашағың килә?» — тип. Землемер әйткән: «Маянғандыҡылар бешергәнде ашатығыҙ», — тигән. Шунан Абдрахмандыҡылар Маянғанға барып: «Землемерға нимә ашаттығыҙ?» — тип һорағандар. Тегеләр әйткән: «Сумар ашаттыҡ».

Абдрахмандыҡылар ҡайтып сумар бешергәндәр. Шулай итеп, Абдрахмандыҡылар көлкөгә ҡалған. Землемер, асыуы килеп, тегеләргә насар ерҙәрҙе киҫкән, ти. Шунан аҙаҡ Абдрахмандарға сумарҙар тип исем таҡҡандар.

## 202. МАЯНҒАН

Маянған ауылын Әбделкәрим тигән кеше нигеҙләгән. Ул үҙе меркет меңле булған. Ауыл шулай уның исеме менән һәүетемсә йәшәп ятҡанда, бер ҡомһоҙ байҙың йортонда ут сыҡҡан. Байҙың келәтендә майы күп икән. Ут келәткә ҡапҡас, өтөрө дөрләп киткән, ҡарағусҡыл төтөн сығарып яна башлаған. Халыҡ ҡысҡыра икән: «Бай яна, бай яна, бай келәтендә май яна!» Һүндерешергә бөрәү ҙә килмәй, ти. Байҙың өйө янып бөтә. Бай нигеҙенә ҡаҡҡан дүрт бүкәнгә ҡарап тороп ҡала. Шунан был ауылды «Май янған ауыл» тип атай башлағандар. Әбделкәрим исеме аҙаҡ бөтөнләй онотолған, Маянған тигәне тороп ҡалған.

## 203. ОТҠОЛ (ДӘҮЛӘКӘН)

Бынан ике йөҙ йыл элек Дим буйы яҡтарына Отҡол тигән ҡарт килеп сыҡҡан. Ул үҙе Ирәндектән — Төрөкмән ауылыныҡы булған. Отҡол ҡарт был йәмле яҡты бик яратҡан, ошо урында оя ҡороп йәшәргә булған. Ирәндек яҡтарында тормош бик тынғыһыҙланып киткән: барымталар йышайған икән. Аяғы аҡһаҡ Отҡол ҡарт илендә малын һаҡлай алмаған, шуға ла бында, тыныс илдә, урын тапҡан. Шунда әкренләп йүнәйеп киткән.

Отҡолдан ҡалған халыҡтарҙан Отҡол ауылы килеп сыҡҡан. Шунан үҫә бара, 1890—1895 йылдарҙа суйын юлы үткәс, ауыл станцияға тоташа башлай. Һаман үҫә барып, унда һөнәрселәр, оҫталар, һатыусылар килә. 1910—1914 йылдарҙа тирмәндәр һалына, Отҡол әкренләп Дәүләкәнгә әйләнә. Уныһы — Тәүләгән исеменән сыҡҡан. Отҡол нәҫеленән. Хәҙер ҙә бында Отҡол урамы бар.

## 204. ҺЫҘҒЫ

Элек булған был хәл. Һаҡтау[1] ауылында Ҡилсенбай исемле кеше йәшәгән. Ул һөнәрселек менән көн күргән. Бер ваҡыт ул бер байҙың әйберҙәрен талап алған да ҡайҙалыр ҡасып киткән. Уның ҡайҙа ҡасып киткәнлеген бер кем дә белмәгән.

Ҡилсенбай ҙур ғына йылға буйына йорт һалып ала. Уның урынлашҡан ере бик матур булған: тирә-яҡты тауҙар уратып алған, һыуы һалҡын, балыҡлы икән.

Ҡилсенбай элекке кеүек һунарсылыҡ иткән. Бер көндө ул атына атланып, ян-уғын аҫҡан да һунарға киткән. Ул урманда бик ҙаҡ йөрөгән, бер кейек тә ала алмаған. Өйөнән дә бик алыҫлашҡан. Йөрөй торғас, теге таныш байға тап булған (ул да һунарға сыҡҡан икән). Улар күрешәләр, хәл-әхүәлдәрен һорашалар, ә булған хәл тураһында берәү ҙә бер һүҙ ҡуҙғатмаған. Ҡилсенбай байҙы үҙенең өйөнә барып, бер-ике көн ҡунаҡ булып ҡайтырға димләй. Бай ғәжәпләнә: «Мин һинең өйөңдө белмәйем дә баһа, унда нисек барайым?» — тип һорай. «Бушҡа аптырама, мин бына был аяғым менән өйөмә ҡайтҡансы һыҙҙырып, һөйрәтеп ҡайтырмын, һин шул һыҙыҡ буйлап, юл ҡыуып миңә барырһың», — ти ҙә, атына атланып, таяғы менән ерҙе һыҙҙырып ҡайтып та китә Ҡилсенбай.

Бай ҡайтып, ул-был итеп, һыҙыҡ буйлап юл ҡыуа төшә, Ҡилсенбай өйөнә килеп тә етә. Уға был урын бик оҡшай. Ауылға ҡайтҡас, был турала һөйләй. Халыҡ күсеп ултыра башлай. Ауыл ҙурая, өйҙәр күбәйә. Һыҙыҡ буйлап килеүгә арнап, ауылды Һыҙғы тип атайҙар. Шулай уҡ инеҙ һалыусы Ҡилсенбай исеме менән дә атап йөрөтәләр.

## 205. АТИНГӘН АУЫЛЫ

Элек кешеләр, яҙ етеп, ҡар иреп бөтөү менән, йәйләүгә сығырған булғандар. Йәшәү өсөн кәрәк-яраҡты ғына алып, ишектәргә арҡыры ағас ҡаға ла, бөтә донъяһын ҡалдырып, китә лә бара торғайнылар. Йәй буйына ауылға килеп ҡараусы булмай ҙа торғайны, ти. Тик ҡатын-ҡыҙҙар ғына һанда-һаяҡ ҡайтып, күнәк-күнәк итеп көйәнтәләп йоморҡа-фәләй алып килә торғандар, ти.

Шулай бер ваҡыт элекке Атингән, хәҙерге Әбүбәкер, ауылынан йәйләүгә күсеп барған кешенең аты юғалған. Был ваҡиғаға бер-әр ай самаһы ваҡыт үткәс, тегенең ҡатыны ауылға ҡайтып киткән, ти. Ауылға ҡайтһа, ишектең арҡыры ҡаҡҡан ағасы юҡ. Ҡатын ишекте барып асып ҡараһа, юғалған тигән аты өйҙә торған. Баҡтиһәң, ат ашай-ашай килеп ауылға еткән дә, көн эҫегә ыҙай алмай, һалҡын урын эҙләп, өй күләгәһенә килеп торған икән. Ышҡынып тора торғас, арҡыры ағасы төшөп китеп, ишек эскә асылып киткән. Ат өйгә ингән. Өйгә ингәс, кире сығам тип, әйләнгеләп торһа, ишекте ябып та ҡуйған. Бер ай буйына ябығып киткән, ти. Асығып-һыуһап, өйҙөң бөтөн мүген кимереп бөткән. ти.

Ҡатын, атты күргәс, кире йәйләүгә йүгергән. Сәсе-башы туҙып, йән-фарманға йүгереп килгән ҡатынды күреп, кешеләр: «Ни булды ла ни булды?» — тиҙәр икән. Ә ҡатын ҡыуаныуынан да, аптырауынан да хәле бөтөп, «ат ингән, ат ингән» тигән һүҙҙән башҡа бер ни ҙә әйтә алмаған. Атингән[1] исеме ана шунан ҡалған, ти.

## 206. ИБРАЙ АУЫЛЫ

Әүәл Ибрай исемле бер һөнәрсе булған. Иң элек ул һабын ҡайнатып ҡараған — һабын булған, унан шырпы яһаған. «Ә нинә минә ҡорал яһап ҡарамаҫҡа?» — тип уйлаған был. Был Николай батша заманында булған (әйтә алмайым, ҡайһы Николай заманында: Николай I заманындамы, Николай II заманындамы).

Оҫта булған Ибрай. Дарыны ла бик шәп итеп яһаған да ҡуйған. Ҡайһы кеше быйың дары эшләгәнен һиҙеп ҡалған. Кемдер батшаға ялыу иткән. Бер хөкүмәт кешеһе Ибрайҙы саҡыртып, тикшерә башлаған.

— Ни эшләп һин рөхсәтһеҙ ҡорал эшләп ятаһың? — тигәндәр.

— Мин бөгөнгө көндә ҡорал эшләмәйем. Теге ваҡытта ла үҙемдең һөнәремде һынап ҡарар өсөн генә эшләнем, — тип яуап биргән Ибрай.

Батша вәкиле ҡарттың һүҙенә ышанғандырмы, юҡмы — уныһын белмәйем. Шулай ҙа артыҡ яза бирмәгән быға, тик тупраҡ алыштырырға ғына бойорған. Ер алыштырып, быны Уфа өйәҙенән Ҡасатур өйәҙенә күсергәндәр. Ибрай йыраҡ китмәгән. Ҡасатур өйәҙенең Лағырға яҡын урынына (бынан 5 саҡрым алыҫлыҡта) урынлашҡан. Элгәрге Сонка ауылы шул Ибрай исеменә Ибрай ауылы тип йөрөтөлә.

Ауылда Ибраевтар нәҫеле әле лә бар. Уларҙың нәҫеленән Һашим тигәндәре 102 йәшкә етеп үлде. Йәркәй менән Йәрмөхәмәт тә оҙаҡ йәшәнеләр. 6—9 уландары булды.

Беҙҙең ауылда өс нәҫел бар: һулымдар, туҡтаһын, миместәр, Ибраевтар миместәргә инә.

## 207. КЕЙЕКБАЙ (БАШТИРЕ) АУЫЛЫ

Был ауыл борон Баштире тип йөрөтөлгән. Ҡарттар уның исеменең сығышы тураһында шулай һөйләй торғандар.

Бик күп йылдар элек бер ҡарт Мәсем тауына һунарға киткән. Йөрөй торғас, был бер болан күреп ҡала. Теге күп уйлап тормай, туралап ҡына атып ебәрә. Шулай ҙа яҡшылап тигеҙә алмаған. Болан ҡасып бара, ти, ҡарт та быйың артынан ҡалмай йәйәүләп бара ла бара икән, ти. Шунан ҡыуып етеп, нисек етте улай атып йыҡҡан тегене. Боланды ҡыуған ваҡытта тирләп, бөтөн кейемен һалып ташлап бара икән. Хәҙер килеп туҡтағас, өшөй башлаған, ти. Ҡарт боланды тунаған да, сей ярын тышҡа ҡуйған, бөркәнен

ҡайтҡан. Көн һыуыҡ бит инде. Тире башына ҡуша туңған да ҡуйған, ти. Уны күргән кешеләр «Тире баш», тип көлөп ҡалғандар. Шунан башлап ауылды Баштире тип йөрөткәндәр. Ҡейекбай килеп ултырғас, ауыл уның исемен алып киткән. Ҡейекбай ҡарттың килеп ултырыуына ике йөҙ йыл самаһы бар [1].

## 208. АБДРАХМАН АУЫЛЫ

Абдрахман — Ялан Зәй йылғаһы буйындағы иң ҙур башҡорт ауылдарының береһе.

Беҙҙең бабаларыбыҙҙы сығыштары буйынса иҫке башҡорттар, ауылдың ҡалған халҡын типтәрҙәр йәки яңы башҡорттар, ясачныйҙар, мишәрҙәр һәм мещандар тип йөрөтә торған булғандар ти әле.

Беҙҙең Таһировтар нәҫеле — Ыҡ [1] буйынан Бәләбәй яҡтарынан килгән башҡорт ырыуы. Абдрахман аҫаба башҡорттарҙан, йәки беҙҙең яҡта әйткәнсә, иҫке башҡорттарҙан бер нисә эре-эре нәҫелдәрыу бар. Абдрахмандың иң ҙур урамы әле лә Башҡорт урамы тип йөрөтөлә халыҡта. Ҡырғыҙҙар тигән кескәйерәк урам да бар, уларҙы ла боронғо башҡорттарҙың ҡырғыҙ аймағынан икән, тип ишеткәнем бар.

Башҡорт яҙыусыһы, күренекле дәүләт эшмәкәре Афзал Таһиров — беҙҙең ауылыбыҙҙың һәм нәҫелебеҙҙең ғорурлығы. Уның китаптарында тыуған ауылы Абдрахмандың кешеләре, ауылдың ерһыу исемдәре лә бер нисә тапҡыр телгә алына. Ауылға ла йыш ҡына ҡайтып йөрөй ине.

## 208а. ӘПСӘЛӘМ АУЫЛЫ

Борон заманда бер Әпсәләм исемле ҡарт уландары менән ил гиҙеп йөрөгән. Бик күп ерҙәрҙе, илдәрҙе үткән, йылғалар кискән. Бер ваҡыт былар ял итергә туҡтаған. Аттарына ашарға һалып, үҙҙәре лә ял итеп, тамаҡ ялғап алғас, усаҡ янына йыйылышҡандар. Улар урынлашҡан төбәк бик матур була. Ике яҡлап тау уратҡан туғайлыҡ; ҡарағай, ҡарағас, сейәләр үҫкән тау битләүҙәре; тау аҫтында йәм-йәшел, оҙон үләнле һаҙлыҡ; туғайлыҡты уртаға бүлеп, таҙа һыулы, балыҡлы йылға аҡҡан. Оҙаҡ һөйләшеп ултырғандан һуң, усаҡты һүндереп, йоҡларға ятҡандар.

Иртән, ҡояштың тәүге нурҙары менән тороп, улдары юлға сығырға әҙерләнә башлаған. Тик Әпсәләм ҡарт, нимәгәлер, ашыҡмай икән. Оло улы, аптырап, һорарға булған:

— Атай, әллә сирләйһеңме? Һиңә ни булды?

— Мин һеҙҙең менән бергә бик күп илдәр, ерҙәр үттем. Ҡайғылы көндәрҙә һеҙгә терәк булдым, шатлыҡлы көндәрҙә һеҙҙең менән бергә ҡыуандым. Инде һеҙ ҙур үҫеп, егет ҡорона индегеҙ. Мин инде ҡартайҙым, йәш саҡтағы дәрт-дарманым бөттө. Тән тыныслығы менән йән тыныслығы ла кәрәк миңә... Оҙон һүҙҙең ҡыҫ-

ҡаһы: миңә ошо төбәк оҡшаны — мин бында нигеҙләнәм. Һеҙ минең ризалығым, йылы һүҙҙәрем менән юлығыҙҙы дауам итегеҙ. Күңелегеҙгә ятҡан ерҙәрҙә нигеҙ һалырһығыҙ, өйләнерһегеҙ, балалар үҫтерерһегеҙ. Шул саҡ мине лә иҫкә алырһығыҙ. Ә хәҙер изге юлға сығығыҙ, уландарым! — тигән Әпсәләм ҡарт.

Аталары менән хушлашып, улдары юлға сыҡҡан. Әпсәләм ҡарт ошо төбәктә нигеҙ һалып, йәшәй башлаған. Башҡа ерҙәрҙән күсеп килгән кешеләр ҙә ошонда төйәкләнгәндәр. Әпсәләм ҡарт донъя ҡуйғас, уның хөрмәтенә ауылға Әпсәләм тип исем ҡушҡандар [1].

---

1995 йылда Дыуан районы Әпсәләм ауылында Закира Абдуллинанан Баймурзина Земфира яҙып алған.— БДУ, БӘФК, ФФ.

# ТАРИХИ РИҮӘЙӘТТӘР





## 209. БОЛҒАРҘАР МЕНӘН БАШҠОРТТАР

Бик борон был яҡта болғарҙар йәшәгән. Уларҙың үҙ дәүләте, үҙ хандары булған. Бик ғәйрәтле, көслө, һуғышсан халыҡ булған тиҙәр үҙҙәрен. Улар Айҙар хан заманында ислам динен ҡабул иткәндәр икән. Уға хәтле мәжүси булғандар — һәр төрлө пот-пәрәсәткә табынғандар.

Болғарҙарҙың мосолман булыуы ла шунан килеп сыҡҡан: Айҙар хандың берҙән-бер ҡыҙы яман сиргә һабышҡан. Аяҡ-ҡулдары йөрөмәҫ булған, ти. Төрлө ерҙәрҙән табиптар саҡыртҡандар, имтом итеп ҡарағандар. Тик береһе лә файҙа килтермәгән, шифа бирмәгән.

Инде хан ҡыҙының һауығыуына, аяҡҡа баҫырына өмөттәре өҙөлөп бөткәс, бер ваҡыт хан вәзире шундай хәбәр һалған: бик алыҫ илдәрҙән өс табип килгән, имеш, бик ғилемлеләр, имеш, төрлө шифалы дарыуҙары, ҡөҙрәтле им-томдары бар, имеш...

Табиптарҙы эҙләп табып килтергәндәр. Араларынан өлкәнерәге сырхау ҡыҙҙы ҡараған да ханға әйткән: «Ҡыҙығыҙға фалиж зәхмәте тейгән. Әгәр ҙә минең ике шартымды үтәй алһағыҙ, ҡыҙҙы һауыҡтырыу беҙҙең ҡөҙрәтебеҙҙә», — тигән.

— Шартыңды әйт, — тигән хан.

— Беренсе шартым шул, — тигән өлкән табип, — беҙҙең динебеҙгә иман килтерәһең, икенсеһе — ҡыҙыңды никахлап миңә бирәһең.

Хан риза булған. Тик шуныһын да киҫәткән: «Мәгәр ҡыҙым һауыҡмаһа, үҙ башыңды ҡырҡырмын», — тигән.

Өлкән табип ҡулындағы сәфәр таяғын хан һарайындағы бер ҙур гөл төбөнә ҡаҙаған. Өс юлдашы менән шул гөл төбөндә аяҡтарын бөкләп оҙаҡ ҡына ултырған. Шул саҡта, бөтә халыҡты хайранға ҡалдырып, ҡыу таяҡтан ботаҡтар үҫеп сыҡҡан, күҙ алдында улар бөрөләнеп япраҡ ярған, ти.

Сәфәр таяғы ҡайын ағасынан булған икән. Уның йәш япраҡтарынан табип миндек яһаған. Эҫе мунсала шул миндек менән

сырхау ҡыҙҙы сабындырырға ҡушҡан. Мунсаға ҡыҙҙы күтәреп алып киләләр. Сабалар ҙа сабалар быны, хәл йыйып алалар ҙа тағы сабалар. Шунан теге ҡыҙ мунсанан үҙ аяҡтары менән йүгерә-атлай ҡайтып китә.

Был мөғжизәнән һуң, хан үҙ вәғәҙәһен үтәмәй булдыра алмай, үҙен, бөтә болғар халҡын мосолман диненә күсерә. Өлкән табипҡа ҡыҙын бирә, никах уҡытып, туй яһай.

Мунсала йәш ҡайын миндек менән сабыныу шул мөғжизәле-кирәмәтле ваҡиғанан һуң ҡалған, имеш. Ҡайын миндеге ҙур шифа итеп һаналған. Шуға күрә борон болғарҙарҙа мунса шифахана дәрәжәһендә йөрөгән, тиҙәр.

Башҡорттар шул заман болғарҙарҙан ун биш-егерме көнлөк юлда, урман араларында йәшәгәндәр, ти. Боронғо кәсептәре — һунарсылыҡ менән солоҡсолоҡ булған. Ҡондоҙ, ҡама тиреһе, батман-батман бал менән алыш-биреш иткәндәр болғарҙар менән. Аҙыҡ-нәфәкәләре — ит тә балыҡ, бал да ҡымыҙ икән.

Бик борон башҡорттар ҙа мәжүси булған. Ҡырылмаһа ҡырҡ аллаға [1] табынғандар улар.

Болғарҙар ислам диненә күскәс, теге табиптарҙы изге кешеләр әүлиәләр тип иҫәпләй башлағандар. Улар башҡорт яғына ла үҙ илселәрен — табиғиндарын ебәргәндәр. Шунан Ағиҙел, Ыҡ, Дим, Танып буйы башҡорттары араһында ислам дине таралып киткән. Башҡорт араһына ислам динен күндергән табиғиндарҙы изге — әүлиә кешеләр тип һанағандар.

## 210. БӨЙӘНДӘР ХАН ЗАМАНДАРЫНДА

Бөйәндәр — бик боронғо ырыу. «Күсәк бей» ҡиссаһында бөйән, имеш, бер йәндән килеп сыҡҡан тиҙәр. Күсәк бей Ҡарағөлөмбәт ырыуын ҡырып бөтөрә лә, шунан бер йән эйәһе генә ҡалып, аҙаҡ бөйәндәр үрсеп китә, йәнәһе. Быны ҡыпсаҡтар үҙҙәрен бөйәндәрҙән боронғораҡ ырыу итеп күрһәтер өсөн әйтәләр.

Ҡыпсаҡтар килеп сыҡҡансы бөйәндәр ер йөҙөндә әллә ҡасан уҡ йәшәгән. Хан-ҡаһан замандарынан. Борон улар бик күп ерҙәрҙә һибелеп, күсеп-күсеп йөрөгән. Шунан бер өлөшө Уралға килеп мәҡам тотҡан. Улар әллә ни ғүмер, йөҙәрләгән йылдар йәшәгәс кенә бер заман ҡыпсаҡтар пәйҙә булған. Бөйәндәрҙе ҡыҫырыҡлай башлаған былар. Ер-һыу өсөн тартыш киткән, тыныслыҡ бөткән. Ҡыпсаҡ, уҫал, килмешәк халыҡ, һаман ҡыҫмаҡлаған, бөйән бирешмәгән.

Бер заман донъяны Сыңғыҙхан яулап алған. Уны изге заттан булған, имеш, тиҙәр. Әсәһе күктән ингән икән. Бәйғәмбәр хаяты Ғүмәргә әйткән: «Минең төкөрөгөмдө йота алған кеше — изге булыр», — тип. Ғүмәр үҙе бәйғәмбәр төкөрөгөн йота алмаған — сәсәгән, ти. Ә әлеге күктән ингән әсәнән яралған сабый [1] төкөрөктө йотҡан да ҡуйған.

Сыңғыҙҙы башта һанламағандар. Ағай-энеләре уны ныҡ ҡаҡҡан. Аптырағас, ул тауға ҡасҡан. Шунда ас-яланғас байтаҡ ғү-

мер һөргән. Бер килке йөрөгәс ул бер таяҡҡа тап булған. Әүлиәләр таяғы икән был. Шул таяҡты алып, ергә бер орған икән, йәп-йәш малай ҡырҡ йәштәр тирәһендәге олпат иргә әйләнгән дә ҡуйған, ти. Сыңғыҙҙың шундай олпат ҡиәфәтен күреп, халыҡ уға ылыға башлаған. Сыңғыҙ тиҙҙән ағай-энеләрен дә үҙенә бағындырған. Ғәскәр йыйып яуға сыҡҡан; күп ерҙәрҙе, күп халыҡтарҙы үҙенә баш һалдырған.

Бер заман ул Урал, Иҙел буйҙарын, Ҡазан тирәһен баҫып алған. Хәҙерге Ҡазан тирәһендә борон болгарҙар ханы хакимлыҡ иткән. Шул ерҙәрҙе һуғышып алған [2].

Шул замандараҡмы, элегерәкме Зөлҡәрнәй тигән бер батша булған, тиҙәр. Үҙе бер ниндәй дин тотмаған. Зөлҡәрнәй Сыңғыҙҙы һанламай булашҡан. Сыңғыҙ әйткән: «Һанлау-һанламау — һыналыр. Хәжәте төшһә, үҙе бер килер әле», — тигән. Күпме үткәндер, бер саҡ Зөлҡәрнәй, ин эшләптер, ниндәйҙер зәхмәттән диуанаға һабышҡан. Дауалап-дауалап һис һауыҡтыра алмағандар. Сыңғыҙға үҙе килеп баш эйгәс кенә, Зөлҡәрнәйҙе һауығып киткән, тиҙәр.

Сыңғыҙхан халыҡтарға тамғалар өләшкән. Башҡорттар ҙа тамға алған.

Башҡорттар Уралға Алтайҙан килгән. Урал буйҙарында бөрйәндәр менән бергә мәҡам тотҡан.

Сыңғыҙ үлгәс, Батый хан булған. Ул замандарҙа башҡорттар, ҡаҙаҡтар, бөрйәндәр, бүтән күп кенә халыҡ мосолманға әйләнгән.

Ошо Сыңғыҙ, Батый хан замандарында бик ҡаты яуҙар булған. Халыҡ хан ғәскәрен үҙ ерҙәренә, урман-тауҙарға үткәрмәҫкә тырышҡан. Хәҙерге Тимер арҡаһында (хәҙерге Бөрйән районы Тимер ауылы янында) хәтәр бер яу үткән. Шундағы йылға ҡан менән буҙарған. Шунан уға Буҙарған исеме биргәндәр. Бер тауында ун туғыҙ ҡәбер бар. Ошо яуҙа үлгән ун туғыҙ батыр ҡәбере, тиҙәр.

Хан ғәскәренән ҡасып, тау тишектәренә боҫҡан. Ҡолғона тигән ауыл исемдәре лә шул хан замандарынан ҡалған булырға тейеш. Әҙәм үткеһеҙ урман-тау араһындағы ауылдарҙы шулай тигәндәр.

Сыңғыҙ, Батый хан замандарынан һуң ҡыпсаҡтар күберәк үрсегән. Яусыл, даусыл халыҡҡа әйләнгән. Бөрйәндәрҙең төп өлөшө ошо тау араларында ҡалған, байтағы ялан яҡтарына күскән. Ялан бөрйәндәре ана шунан айырылған тоҡом. Тау бөрйәндәре үҙҙәре икегә айырыла: бараҡ, собханғол араһы.

## 211. БИКСУРА

Сарман ҡарт [1] был урынға килеп ултырғансы, әле беҙҙең яҡтарға Сыңғыҙ, Батый сиреүҙәре килгәнсе, Ағиҙел тамағы, Ыҡ [2] буйҙары, Мәллә [3] менән Минзәлә [4] йылғалары тәрән һыулы, балыҡлы булған, тирәләре ҡуйы урмандар менән ҡапланған. Ул ҡош-ҡорт, йәнлектәрҙең иҫәбе-һаны юҡ. Бына ошо урындарҙа бәй-

...р. бүләр[5] тигән башҡорт ырыуҙары күсенеп йөрөгәндәр. Улар ... йәшәгәндәр. Тапҡан аҙыҡ, мал-мөлкәт уртаҡ булған. Шу... тыныс ҡына йәшәгәндә, Болғар илен баҫып алырға барыусы ... ый хан[6] сиреүе был яҡтарға килеп сыға, халыҡты аҫа-киҫә, ... мөлкәтен талай башлай. Минзәлә менән Ыҡ йылғалары ара... да күсеп йөрөп тереклек итеүсе Ҡарағай-Атай ырыуы[7] айы... ...а ҙур ҡайғыға дусар була. Сиреү башлығы алдында бил бөк... ...н көмөш һаҡаллы Ҡарағай-Атайҙы бөтөн нәҫел-нәсәбе ал... ...да һуҡтыралар. Ат тубығынан ҡалҡыуыраҡ булған барлыҡ ... атының башын ҡырҡалар. Ҡатын-ҡыҙҙарҙы әсир итәләр. Бар... мал-мөлкәт, йылҡы көтөүҙәрен тартып алалар. Хәҙер Ҡа... ...а тауы тип йөрөтөлгән Әбей тауында Ҡарағай-Атайҙың ҡа... ...ы Аҫылташ ҡына иңрәп тороп ҡала. Үҙенең килендәре, ейән... менән ул бер ҡарт имән төбөнә килеп туплана.

Шул ваҡыт һунарҙан Ҡарағай-Атайҙың оло улы — Биксура ...а. Ул, башта яландағы ауыр хәлде күреп, тораташ булып ...п ҡала. Ҡарт әсәһенең илай-илай әйткән хәбәрен тыңлап то... ...а, бөтә нәҫел-ырыуы менән, биләүҙәге улы менән хушлашып, ...ымағын менеп, бәйләр, ыласын, бүре[8] ырыуҙарына саба. Ба... ут-һыу кисергә әҙер торған егеттәрҙе туплап, Батый ханға ...ны сыға. Болғар ҡалаһына һөжүмгә барыусы Батый хан си... ...е яугирҙарын аңдып тороп, ҡырып ташлай. Батый хандың Бол... ...а беренсе һөжүме өҙөлә.

Ике-өс йылдан һуң, Батый хан Болғар иленә тағы ҙур ғәскәр ...лай. Биксура үҙенең егеттәрен тағы туплап ала ла тағы ҡар... сыға. Бер бәрелештә ул ҡаты яралана, Әхмәт исемле дуҫы ...н Текәй тип йөрөтөлә торған тауҙар аша урман яғына ҡаса. Бер аҙ барғас, Биксураның хәле ауырая, ул хәҙерге Яңы Әхмәт ...лы зыяраты урынында үлә. Дуҫы Әхмәт уны шунда ерләй ҙә, ... урында үҙе нигеҙ һалып, ултырып ҡала. Дошман сиреүе йы...лашҡас, ул Ҡарағай-Атайҙың ҡалған нәҫел-ырыуын үҙ ҡанат ...ына ала, яңы ил ҡороп ебәрә.

## 212. БОШМАН-ҠЫПСАҠ БАТЫР

Тамъян, Ҡыпсаҡ, Ҡатай, Теләүле, Бөрйән, Юрматы — бер ата... таралған уландар, бер туғандар. Уларҙың тоҡомдары борон Ыҡ, Яйыҡ, Ағиҙел, Сулман иҙеле[1] буйҙарында йәйелеп, йылҡы... менән көн күргәндәр. Малдарының һанының иҫәбе бул... ...маған. Улар меңәрләгән баш көтөү-көтөү булып ерҙе ҡара ябып йөрөр булған. Шуға улар яҡшынан-яҡшы, үләнле йәйләүлектәргә ... күсенеп йөрөгәндәр.

Бер заман Алтай тауы яҡтарынан бик яман бер ҡара яу кил... ...гән[2]. Аңғармаҫтан ҡалҡҡан был яу икһеҙ-сикһеҙ далаларға та... ...ралған; Тамъян, Ҡыпсаҡ, Ҡатай, Бөрйән, Теләүле, Юрматы ил... ...дәрен берәм-берәм ҡыйратып үткән. Ҡыпсаҡ, Ҡатай, Бөрйәндәр Яйыҡ буйында бер яу биреп ҡарағандар, әммә, һанһыҙ ғәскәрле яуҙан еңелеп, урман-тауҙар араһына ҡасҡандар.

Ҡыпсаҡтар бик үрсемле ил булған. Ҡыпсаҡтан Гәрәй-Ҡыпсаҡ, Бошман-Ҡыпсаҡ, тағы әллә ни хәтле ырыуҙар таралған. Улар яусыл да, даусыл да, уҡымышлыраҡ та, хәйләкәрерәк тә булған. Яусыл, бик сая һуғышыусан батыр ырыу икәнен күреп, әлеге ҡара яуҙың ханы быларҙы бүләк, ер-мөлкәт менән дә үҙ яғына ауҙарырға тырышҡан. Шунан ҡыпсаҡтарҙың бер өлөшө шул ғәскәргә ҡушылып киткән, ти.

Ә Бошман-Ҡыпсаҡ батыр, ханға баш һалмай, шимал яҡҡа[3] урман-тауҙарға ҡасҡан. Шунда ғәскәр йыйып, хан ғәскәренә ҡаршы яу асҡан. Уны бик оҙаҡ яулашҡан, тиҙәр. Тик аҙаҡтан бер хыянатсы арҡаһында ғәскәре ҡамап алынған, һуңғы кешеһенә тиклем ҡыйратылған, үҙен хан язалатып үлтерткән.

Ҡулға алғас, хан Бошман батырҙы үҙенә саҡыртып килтергән, ти. Уны ярлыҡап, үҙ яғына алырға, үҙенең бер ғәскәре башы итергә теләгән. Батыр күнмәгән. Дөйә теҙ сүкмәй, ыласын ятып үлмәй, тигән ул.

Был яҡтарҙа, Ыҡ, Ағиҙел буйҙарында, хәҙер ҙә Ҡыпсаҡ, Ҡатай, Тамъян, Юрматы, Теләүле тигән ауылдар бар. Улар ана шул ырыуҙарҙан ҡалған. Борон уларҙың ошо тирәләрҙә йыйылып кәңәшләшмәгә ҙур йыйын майҙаны ла булған, тиҙәр.

## 213. АҠМАН-ТОҠМАН

Аҡман-Тоҡман бик боронғонан килгән тарих ул. Хан замандарынан. Уны әллә нисәмә быуын ата-баба һөйләй килгән. Был ерҙәрҙә элек башҡорттар хужа булған. Ер-һыу байлығын һөйләп бөтөрөрлөк түгел икән. Урман-тау тулы йәнлек: айыу, бүре, төлкө, ҡуян, һыуһар, ҡамсат, шәшке, кеш. Йылға-күл тулы балыҡ. Урманда солоҡ. Халыҡ һунар, солоҡ кәсебе менән шөғөлләнгән; мал аҫраған.

Боронораҡ башҡорттар көтөү-көтөү мал менән күсеп-ҡунып йөрөгән. Һәр ырыуҙың, аймаҡ-түбәнең яҙлау, йәйләү, көҙләү, ҡышлау урыны булған.

Шулай имен-аман ғүмер кисергәндә бер заман Көнсығыштан, Алтай тауҙары яғынан, ҙур ҡара яу килгән[1]. Был йәйгеһен булған: мал-тыуар, халыҡ йәйләүҙә, тау, урман араһында, йылға буйҙарында икән. Яуҙың бер осо ғына башҡорттарға тейгән. Төп өлөшө көньяҡлап, Яйыҡ буйлабыраҡ, үткән буғай.

Яу уҙып, бер аҙ үткәс, хан башҡорттар араһына ғәскәр-нөгәрҙәре менән түрәләрен ебәргән[2]. Улар халыҡты ханға баш һалдырған. Ер-һыуҙарҙы ырыу-ырыу, йәйләү-йәйләү бүлеп биргән. Һәр бер ырыу халҡына тамға, оран, ағас, ҡош тоғәйенләнгән. Беҙҙең ҡатай ырыуының бағау тамғаһы, Салауатораны, ҡарағай ағасы шунан ҡалған. Башҡорттар тамғаланып, ер-һыу алғас, шул ханға яһаҡ түләргә тейеш булған.

Башта был әллә ни ауыр тойолмаған. Урман-тау тулы солоҡ. Батман-батман бал яһаҡтан үҙҙәре өсөн дә артып ҡалған. Урман-тау тулы йәнлек — улары ла ваҡытында түләнгән. Тик бер заман

...дан яңы фарман килгән: йәш ир-егеттәр аты-ҡоралы менән хан ғәскәренә саҡырылған. Аҙаҡ ханға өйөр-өйөр йылҡы, көтөү-көтөү мал оҙатыла башлаған.

Башҡорттар түҙмәгән, ханға ҡаршы яуға күтәрелгән. Араларында Сураман исемле батыр егет була. Шул күп кенә ғәскәр ...ла яһаҡ түләтергә, мал-тыуар алырға тип килгән хан нөгәр...ен ҡыйратып ташлай. Ҡалғандары ҡаса. Хан быға ҡаршы ғәс...ер ебәрә. Батыр улар менән оҙаҡ яулаша. Ҡатыны ла уның ме...н бергә һуғыша.

Халыҡ үҙенсә таһылланып ала. Яһаҡ түләтергә, мал йыйырға ...н ғәскәрен ебәргәндә, бер тау-урман араһында һағалап тора ...а ҡапыл тегеләр өҫтөнә ябырыла. Атыш-үлтереш китә. Мал-ты...арын халыҡ урман-тау төпкөлөнәрәк ҡыуа. Йәйге мәл шулай ...н китә. Ҡыш, юлдар өҙөлгәс, урман-тауҙарҙы ҡар ҡаплағас, ...ан ғәскәре төпкөлдәргә инә алмай. Ҡыш һилерәк үтә. Йәйгә сыҡ...ас, тағы яу ҡуба.

Шулай бер баҫылып, бер ҡыҙып, ханға ҡаршы яу оҙаҡ йыл...ар бара. Егет көйө яуға сыҡҡан Сураман батыр бер саҡ олоғая. Ҡаты яуҙарҙың береһендә ул үлеп ҡала. Артабан халыҡты яуға ҡатыны алып китә. Яуҙа ул да бик ҡаты яралана. Үлер алдынан улдарын саҡыртып ала (уларҙың ике улдары була: өлкәне — Аҡман, кесеһе — Тоҡман исемле): «Балаларым, мин дә атайығыҙ артынан китәм инде, — ти ул. — Атайығыҙ яуҙа үлгәндә һеҙ бала ғына инегеҙ. Ул һеҙгә шундай васыят әйтеп ҡалдырҙы. «Дошманға баш эйеп йәшәгәнсе, һуғышып үлгәнең артыҡ», — тине. Һеҙ инде буйға еттегеҙ, егет ҡорона индегеҙ, атайығыҙҙың васыят һүҙен онотмағыҙ, улдарым!»

Хәҙер яуҙы Аҡман менән Тоҡман алып китә. Улар ҙа оҙаҡ яулаша.

Бер саҡ улар, йөҙгә яҡын иң ышаныслы яуҙаштарын эйәртеп, ҡыш үткәреү өсөн Урал төпкөлөнә китәләр. Тик араларында береһе хыянатсы булып сыға. Ул бер төндө ҡасып китә лә былар...ың ҡайҙа ҡышларға төпләнгән урынын хан түрәләренә барып әйтә. Быға бүләк бирәләр.

Хан ҙур ғәскәр ебәрә. Батырҙарҙы тауға ҡыҫырыҡлайҙар. Улар хан ғәскәренән ҡаса-боҫа, эҙ яҙҙыра-яҙҙыра бер саҡ Урал аръяғына барып сығалар. Уларҙы был яҡлап та ураҡандар икән.

Ҡар берсә ирей, берсә ҡата торған мәл була. Ҡапыл ҡаты бурандар башлана. Быларҙың ашарына бөтә, йылыныр, ышыҡланыр урын да ҡалмай. Тирә-яҡ — ҡола ялан, күҙ асҡыһыҙ ҡаты буран. Аҡман, Тоҡман унлап юлдашы менән ошо буранда асығып, туңып үлә. Бер нисә яуҙашы яҡындағы бер ауылға барып юлыға. Унда хан ғәскәре ята икән. Һуңғы сиккәсә һуғышып үлә былар. Араларында ике батыр ҡыҙ була. Уларҙы тотоп алып, аяуһыҙ яҙалап, аяҡ-ҡулдарын ҡырҡып үлтерәләр.

Ошонан һуң оҙаҡ йылдарға һуҙылған яулашыу туҡтала.

Аҡман, Тоҡман унлап батыры менән туңып үлгән был яҙғы буранды халыҡ Аҡман-Тоҡман бураны тип атай башлай[3]. Ул атама ана шул хан замандарынан уҡ ҡалған.

## 214. ҠЫҘТОРАТАШ

Элекке заманда, Алтын Урҙа осоронда, башҡорттар монгол-татар иҙеүе аҫтында булған. Монгол баҫҡынсылары башҡорт ауылдарын яндырғандар, кешеләрен үлтергәндәр, киҫкәндәр, ҡол итеп ҡыуып алып киткәндәр. Монгол ханы әленән-әле башҡорт иленә баҫҡынсыларын ебәреп торған.

Баҫҡынсылар беҙҙең ауылға ла ҡағылған. Ауыл ҡарттары һөйләүенсә, беҙҙең ауылға монголдар килеп ингәс, бер кеше лә ҡасып ҡотола алмаған. Тик бер 18 йәшлек ҡыҙ ғына ҡасып китә алған. Тик уны һыбай эҙәрләгәндәр. Ҡыҙ алыҫ ҡаса алмаған. Урман юлы менән ҡасып барып, ауылдан бер саҡрым алыҫлыҡтағы ҡаяға инеп йәшеренгән. Баҫҡаҡтар аттарынан төшөп, ҡаяны уратып алғандар. Ҡыҙ таштың өнөш эсенә һаман төпкә ҡасҡан. Ҡарттарҙың һөйләүенсә, ул ваҡытта таш йомшаҡ булған. Ҡая ишелеп, ҡыҙҙы ҡыҫҡан. Тегеләр ҡыҫылып, ҡысҡырып торған ҡыҙҙы күргәндәр ҙә, инергә ҡурҡып кире киткәндәр. Ҡыҙ шунда ҡыҫылып үлгән. Өлкәндәрҙең һөйләүенсә, ҡыҙҙың һөйәктәре лә ятҡан, тиҙәр. Һуңынан күлдәктәре генә ҡалған.

Ҡаяны геологтар шартлатҡайнылар. Элекке хәленә кире ҡайтып, ҡаяның ауыҙы кире асылды. Шунда биш бармаҡ менән баҫҡан һымаҡ ташта соҡорҙар уйылып ҡалған. Шул соҡорҙарҙы ҡыҙҙың бармаҡ эҙҙәре тип һөйләйҙәр. Ысынлап та, биш бармаҡ менән баҫып ҡараһаң, бөтә бармаҡтар ҙа үҙ урынында булып, тап килеп тора. Ә ҡаяны Ҡыҙтораташ ҡаяһы тип йөрөтәләр.

## 215. МӨЙТӘН

Сыңғыҙ хан заманында башҡорт халҡынан Ҡыуаҡан, Үҫәргән ырыуҙарының бабалары Мөйтән Туҡһаба балаһын бүләк менән ханға ебәргәндәр. Мөйтән бай хан ҡулынан Урал, Яйыҡ, Һаҡмар үҙәндәрен биләүгә хоҡуҡ алып ҡайтырға тейеш булған. Хан да Мөйтәнде ҙурлап ҡаршы алған, ҡунаҡ иткән. Аҙаҡ уға бейлек дәрәжәһе биргән. Мөйтән иленә ҡайтҡас, йыраусылар уны маҡтап тулғау * әйткәндәр.

Хаҡ тәғәлә ҡөҙрәте
Мәлкүр * итәйем уны.
Илебеҙҙә булған эш
Борон ханлыҡ заманы.

Башҡорттарҙың бабаһы —
Туҡһаба бей балаһы.
Мөйтән тибеҙ беҙ аны,
Хаҡ яратмыш дан аны.

Күркле булмыш исеме,
Булмыш ирҙең арыҫланы,
Йөҙөн күргән һәр әҙәм
Хөрмәт итмештер аны.

Алып йөрәкле һиммәте *,
Халыҡ эсендә ғиззәте
Булмыш уның дәүләте,
Хаҡтың биргән ғисмәте *.

Арғымаҡтан ат алды,
Төрлө йыһаз зат алды.
Ете төйәгә йөк артып,
Хан Сыңғыҙға ул барҙы.

Ханға бүләк һыйланы,
Хандың күңелен ауланы.
Маҡтау күрҙе ханынан,
Урын алып янынан.

Нуйындарҙан *, бейҙәрҙән,
Мәдих * алды барынан.
Ханды камил күҙәткән,
Һәр эштәрен төҙәткән,
Нуйын менән бейҙәрҙең
Белмәгәнен өйрәткән.

Ауға барһа, ат тотҡан,
Яуға барһа, тыу * тотҡан.
Хан янынан айырылмай,
Ҡәҙер итеп бик көткән.

Ҡөйлә тиһә, көйләгән,
Һөйлә тиһә, һөйләгән.
Ханға килеп күрешкән,
Маҡсатына ирешкән.

Мөйтән бей ҡайтып оҙаҡ йылдар йәшәгән. Ер-һыуға үҫәргәндәр хужа булып ҡалған. Мөйтән бей хандан бетеү * алып ҡайтҡан. Унда былай яҙылған, ти:

«Мөйтән Туҡһаба балаһына бейлек мансабы * бирелде. Үҙе үлгәс, балаларының берәйһе бей булыр. Шул рәүештә баланан балаға бирелеп, Мөйтәндең нәҫеленән башҡаға бирелмәҫ. Шул нәҫелдең береһе һайланмай бей булыр. Йәнә лә Мөйтән бей һораған төрлө сәхрә, урман, ер төрлө мәғдәнләре берлә аларныҡы улыр...» [1]

## 216. АҠҺАҠ ТИМЕР

Бер ваҡыт күрәҙәсе ҡарсыҡ ханға килә лә хәбәр һала:

— Ханым-солтаным, быйыл тыуасаҡ балалар һинең башыңа етәсәк!

Хан күп уйлап тормай, үҙенең дәүләте буйынса йөрөп, бөтә

ауырлы ҡатындарҙың ҡорһағын тапарға әмер биргән. Хандың ялсылары һәр өй һайын кереп, ауырлы ҡатындарҙың береһен ҡалдырмай ҡорһаҡтарын тапап сыҡҡандар. Шулай илдә бер бала ла тыумаған. Тик бер генә ир бала донъяға килгән. Ул да сатан булып тыуған. Шуға күрә уға Аҡһаҡ Тимер тип исем ҡушҡандар.

Бала үҫкән. Бер көн килеп хандың башына еткән[1].

* * *

Аҡһаҡ Тимер яусыл булған. Һуғышҡа сыҡһа, ҡала артынан ҡала алған. Уға ҡаршылыҡ күрһәтә алмағандар. Шулай ҙа бер ҡаланы ала алмай, туҡталып ҡалған был. «Был ни эш? — тип әйтте ти Аҡһаҡ Тимер. — Ниmәһенә һуң был ҡаланы алып булмай әле? Сере нимәлә һуң бының?» Аҡһаҡ Тимер аптырап ҡалған. Күп башын ватҡандан һуң ҡалаға шымсылар ебәрергә булған. Улар ҡайһыһы сауҙагәр булып, ҡайһыһы хәйерсе булып, ҡаланың һәр босмағына таралған. Тик уларҙың береһе лә йүнле хәбәр алып килә алмаған.

Шымсыларҙың береһе хәйерсе булып һәр өй һайын кереп йөрөгән. Шулай ул күмәк балалы бер ғаиләгә тап булған. Аталары һуғышта икән. Балалары бутҡа ашап ултыра икән. Табаҡ сығып ҡасмаһын тигәндәй, уны тирәләп ултырғандар, ти, былар. Балаларҙың береһе үҙ алдынан ғына ашамай, ҙур табаҡтың уртаһына үрелә икән. Шул ваҡыт әсәләре тәртипһеҙ баланың маңлайына ҡашыҡ менән һуғып:

— Алдыңдағын ғына аша. Аҡһаҡ Тимер кеүек буйың етмәҫкә үрелмә! — тигән. Шымсы ҡайтып был хәбәрҙе һөйләгән. Шунда ғына Аҡһаҡ Тимер үҙ хатаһын аңлаған.

## 217. БОҒРАХАН (ҠАРАХАН)

Борон Ҡариҙел тамағында ҡаласыҡ төҙөп, Боғрахан тигән бер әҙәм йәшәгән. Унда торған саҡтарында был Боғраханды йыш-йыш ҡына яман яуҙар баҫып торған. Теге, бик аптырағас, был ерҙән күсеп китергә була. Ағиҙел буйындағы Илсекәй тигән башҡорт ауылы янында бер бәләкәй генә Аҡташ тау бар икән, — ул шул урынды оҡшатып, төйәк ҡороп ебәрә. Тауҙың башына ҡарауыл ҡуйып, ҡаласыҡ төҙөтә. (Боғрахандың ҡарауыл ҡуйған тауын әле лә «Ҡарауыл тауы» тиҙәр.)

Яңы урында Боғрахан байтаҡ ҡына ваҡыт тыныс йәшәй. Ҡаласыҡҡа ҡаршы бер урында ҡара тупраҡтан ҡалҡыу ер эшләп, уның тирәһенә ҡайын ағастары ултыртып, халыҡтары баҡса яһап ҡуйғандар. Унан һуң был ҡалҡыу урынға, кармалин менән биҙәлеп эшләнгән кейеҙҙәр түшәп, шунда Боғраханды бала кеүек күтәреп килтереп ултыртҡандар ҙа ҡара төлкө тиреһенән тегелгән ҡолаҡсын бүләк иткәндәр. Ҡолаҡсынды биргәндә йырсы былай тип әйткән, ти:

Ҡара ерҙән күтәрҙек беҙ тәхетте,
Ҡарахан тип исем бирҙек бәхетле.
Ханым, һинең күркең бар,
Төлкө йәнлек бүркең бар.
Ҡыҙыл ҡанға буялған,
Ҡулыңда ҙур һөңгөң бар.

(Ҡараханға йырҙар йырлап төлкө ҡолаҡсын кейҙергән урынды хәҙер ҙә «Төлкөтүбә» тип йөрөтәләр.)

Шунан халыҡтар был Ҡараханды үҙенең ҡаласығы янына алып килеп, Аҡташ тауының башындағы бер бүкән ташҡа баҫтырғандар ҙа, наказ йыры йырлағандар:

Урының бейек, ташың аҡ,
Үҙең ҡара, һүҙең хаҡ.
Илде баҫҡан яман яуға
Әҙер булһын уҡ-һаҙаҡ.

Ҡарахан яуап итеп, былай тип йырлаған:

Уҡ-һаҙағым бар янымда,
Күктәге йондоҙҙар һанында.
Бирмәм төп йортто дошманға.
Изге йортомдо һаҡлармын изге таңымда,
Алданмам изге таңым тип, ялған таңымда.

Халыҡ тынысланып ҡала. Шулай ҙа күңел тыныслығы оҙаҡҡа бармай. Ни өсөн тигәндә, Ҡарахан ҡаҙаҡ нәҫеленән булған икән, ти. Ҡаҙаҡ менән башҡорт яулашып йәшәгән заманда, бер әсир ҡаҙаҡ ҡыҙын һуғышсан ғына башҡорт егетенә кәләш итеп биргән булалар. Был икәүҙән донъяға килгән сабый шул Ҡарахан була.

Ҡарахан Аҡташ тауында йәшәгән дәүерҙә лә ҡаҙаҡтар башҡорттарға яу аҫҡылап торған. Әсиргә эләккән ҡаҙаҡтарҙы теге бер ҙә рәнйетмәй икән, ти. Хатта үҙе янында хеҙмәттә бер ҡаҙаҡ егетен тотҡан. Шунан башҡорттар үҙҙәренең ханына шикләнеп ҡарай башлағандар. Ә инде Ҡарахандың үҙенең янында йөрөгән ҡаҙаҡ егете Ҡараханға әсәһе яғынан туған кеше булып сыҡҡан.

Бер заман йәйен Ҡарахан, ҡыҙыу көндәрҙә Иҙел буйында ятып, ҡарайғансы ярған да, үҙе янында йөрөгән ҡаҙаҡ егете менән Ҡаҙағстанға ҡасып киткән. Был Ҡарахандың Ҡаҙағстанға барып урынлашҡан ере хәҙерге Ҡарағанды ҡалаһының урынында булған, ти.

## 218. ӘБЕЙХАН АТА

Бик күп-күп замандар элек Сәпәй исемле ҡатын, ғәскәр башлығы булып, ошо тирәгә яу менән килеп йөрөгән. Уны Әбейхан тип атар булғандар. Бик ҡаты һуғыш ваҡытында Әбейхан ата[1]

(Сэпэй) үлеп ҡала. Уны Һарғайы[2] тамағындағы Сэргэйле убаһы тип йөрөткән урынға күмәләр. Әбейхан атаның батырлығын данлап йыр сығарғандар. Элек мәжлестәрҙә һамаҡлап-һамаҡлап йырлай торғайнылар.

## 219. БАБСАҠ МЕНӘН ҠУСӘҠ БЕЙ

Имеш, бынан бик күп, бик күп заман элек хәҙерге Мәсемтау тирәһендә Мәсемхан[1] йәшәгән, бик күп ерҙәрҙе биләп, бөтә ырыуҙарҙы үҙ ҡулында тотҡан.

Мәсемхандың ҡырҡ улы менән бик һылыу бер ҡыҙы булa.

Ҡөндәрҙән бер көндө хандың ҡырҡ улы, ҡырҡ дөйәгә атланып, юлға сыҡҡан икән. Юлда уларға бер үҫал януар тап булып, ҡырҡ дөйәһе менән хандың утыҙ биш улын ҡырып ташлай. Тик биш кенә егет был бәләнән ҡасып ҡотола алған. Былар аталарына хәбәр ебәрһә, хан быға аптырап ҡалған. Ат еткән ергә ат саптырып, хат еткән ергә хат ебәреп, бөтә ырыуға ла хәбәр тарата. Быны ишетеп, батырҙар, һөйәк һаплы һөңгөләрен, алмас ҡылыстарын, суҡмар-киҫтәндәрен алып, аттарына менәләр. Бөрйәндең ырыу башы Ҡарағөлөмбәт тә ике йөҙ илле батыры менән килгән. Тик иң алыҫ Ҡыпсаҡ ырыуының башлығы Бабсаҡ бей генә килеп етмәй. Уның яцыраҡ ҡына йәрәшкән Йәмилә исемле йәш кәләше, иренең юлға сығырын белеп, ебәрмәҫкә ялына башлай.

Йәмилә бик һылыу була. Бабсаҡ уны ҡырғыҙ яғынан алып ҡайтҡан икән. Кәләше бик инәлеп, күҙ йәше менән ялбара башлағас, Бабсаҡ уны, янына ултыртып, өгөтләй башлай.

— Ҡайғырма, Йәмиләм, мин иҫән-һау әйләнеп ҡайтырмын, — ти. Йәмилә, ниҙер һиҙенеп, болоҡһой. Быны күргән Бабсаҡ:

— Өҙгөләнмә, илама! Мин һине бер ваҡытта ла яңғыҙ ҡалдырмам. Тиҙҙән һин бер ир бала табырһың, ул ярҙамсың булыр, — ти ҙә, хушлашып, Мәсемханға ҡарай юл тота.

Мәсемханға етмәҫ элек өс көн алда Бабсаҡ менгән ат тояҡтарының тауышы ишетелә. Бөтәһе лә, уны көтөп, ҡаршы сыға. Атаһының тыйыуына ҡарамай, хан ҡыҙы ла юлға сығып тора.

Бабсаҡ бер үҙе көйө әллә күпме ер-һыу үтеп йөрөй торғас, бик бейек бер тауға килеп сыға. Уҡ-һаҙаҡтарын һалып, бер аҙ тын ала ла, тауҙың нәҡ зыңҡына менеп, тирә-яҡҡа күҙ йөрөтөп сыға. Ҙур яландың ҡап уртаһында күбә дәүмәлендәй бер нәмәнең ятҡанын күреп ҡала. Эҙләй торған януарҙың шул икәнен белгәс, аяҡ аҫтында ятҡан баш ҙурлыҡ ташты алып, уятырға итеп, йоҡлап ятҡан януарға ырғыта. Таш, януар алдына барып төшөп, ерҙе аҡтарып инеп китә. Януар, һиҫкәнеп, башын ҡалҡыта ла тора башлай. Шуны ғына көткән Бабсаҡ, уғын тоҫҡап, керешен тартып ебәрә: уҡ януарҙың түшенә барып ҡаҙала. Януар ҡоторонop ерҙе тырнай, үҙәккә үткес итеп үкерә башлай. Тауышына тауҙар һелкенеп, урмандар шаулап ҡуя. Аҙаҡ хәлдән тайып йығыла.

Бабсаҡ, тауҙан төшөп, януарҙың уң ҡолағын ҡырҡып ала — ҡолаҡ ҡанай. Уғын һурып алып, уртаға яра ла яртыһын януар-

ҙың ҡорһағына тығып ҡуя, яртыһын үҙе менән алып ҡайтып китә.

Кис булғас, януар янына Ҡарағөләмбәт килеп сыға. Уҡ менән атһа, януар ҡыймылдамай ҙа икән. Яҡын килеп, һул ҡолаҡты ҡырҡып ала ла ҡайтып китә был. Тик ҡолаҡ ҡанамай. Ханға ҡайтып ҡолаҡты күрһәтә, үҙем үлтерҙем, ти. Хан батырҙы бик ныҡ ҡунаҡ итә, ҡыҙын биреп, туй ҙа үткәрмәк була.

Туй ҡыҙған мәлдә, Бабсаҡ хан эргәһенә бара ла:

— Туйҙы яңылыш үткәрәһең, ханым, януарҙы Ҡарағөләмбәт үлтермәне, мин үлтерҙем, — тип, ҡырҡып алған ҡолаҡ менән ярыҡ уғын күрһәтә. — Бына уң ҡолағы, ҡырҡып алғанда, йәне лә сығып етмәгәйне, ҡаны аҡты. Ә бына был уҡтың яртыһын эсенә тығып киттем, — ти.

Мәсемхан аптырап ҡала. Дөрөҫлөктө белергә тип, кешеләр ебәртә. Улары Бабсаҡтың әйткәнен раҫ тип ҡайталар, уҡты ханға ҡоршап күрһәтәләр. Хан туйҙы хәҙер Бабсаҡҡа үткәреүҙе әйткәс, Ҡарағөләмбәт ғәрлегенән ташлап сығып китә. Кемдер ул саҡ, өйгә инеп, һамаҡлап ебәрә:

Бабсаҡ батыр аң торһон —
Ҡарағөләмбәт күҙ һала,
Асыуынан, ғәрлегенән
Йөрәгендә ут яна.

Бабсаҡ аптырап ҡалмай, быға һамаҡлап яуап бирә:

Дошманымдан еңелгән —
Мин булмайым,
Унан ҡурҡып, муйынымды
Мин бормайым.

Быны ишеткән Ҡарағөләмбәт ҡара янып килеп инә лә Бабсаҡты уғы менән ата.

— Ирлегең юҡ, ҡурҡаҡ йән, — тип көлә лә йығыла Бабсаҡ.

Ҡарағөләмбәт ике йөҙ илле батыры менән ҡыпсаҡтарға яу сабырға әҙерләнә.

Бабсаҡ бейҙең кәүҙәһен үҙ кешеләре Ҡыпсаҡҡа алып ҡайтып күмергә итһәләр, Ҡарағөләмбәт ҡаршы төшә. Үлгән ерендә күмергә ер ҙә бирҙертмәй.

Ҡыпсаҡ халҡы үҙ батырын ҡош-ҡортҡа ташларға ирек ҡуймай, Ҡыпсаҡҡа ҡайтып, үҙ ерҙәренән мөркеләр менән ер ташып, Бабсаҡты ҡәҙерләп күмәләр. Ҡәбер өҫтөндә ҙур тау үҫеп сыға. Ҡарағөләмбәт, быға асыу итеп, Ҡыпсаҡ ырыуын ҡырып бөтөрөргә була, бөтә ғәскәре менән Ҡыпсаҡ еренә саба. Бабсаҡтың нәҫел-ырыуын ҡоротам тип, Йәмиләне лә үлтерергә килә. Йәмилә өйҙә яңғыҙ ултыра икән.

Ҡарағөләмбәт, Йәмиләнең һылыулығына таң ҡалып, ҡул һалырға баҙнат итмәй, үҙенә бисәлеккә алмаҡсы була.

Бөтә Ҡыпсаҡ ырыуын буйһондороп, Ҡарағөләмбәт Йәмилә ме-

нән донъя көтә башлай. Үҙе күп ваҡытын һунарҙа үткәрә. Йәмилә яңғыҙы биктә ултыра. Ире Бабсаҡты уйлап, көн-төн ҡайғырып, һарыға һабышып бөтә, бер көнө лә илауһыҙ, күҙ йәшһеҙ үтмәй. Ҡарағөләмбәттән ытырғанып, уны ек күрә.

Шулай көндәрҙән бер көндө, киске эңер төшөп, күҙ бәйләнгәс, Ҡарағөләмбәт, Йәмиләне аулаҡҡа алып, ҡыл арҡан менән ҡорһағын быуа башлай: «Бабсаҡ бейҙән бала ҡалғандыр», — тип уйлай. Йәмилә, башҡаса түҙер әмәле ҡалмағас, ни булһа ла булыр, тип былай ти:

— Һин мине ыҙалатма юҡҡа, миндә Бабсаҡ ҡаны юҡ. Ышанмаһаң, бәхәс итәм: әгәр анау тана быуаҙ булһа, минең балам булыр; тыу булһа, бер нәмәм дә булмаç, — тип, хәлдән тайып йығыла. Ҡарағөләмбәт шунда уҡ ҡара тананы һуйырға ҡуша — ҡара тана тыу булып сыға. Ҡарағөләмбәт Йәмиләнең һүҙҙәренә ышанырға була.

Шулай көндәр, айҙар үтә. Йәмилә уны: «Һинән ауырлымын»,— тип ышандыра.

Тиҙҙән ир бала тыуа. Бала тыуғандан уҡ бик теремек, йор була. Ун көн тигәндә, Ҡарағөләмбәт һунарҙан ҡайтып инә лә ир бала булыуға бик ҡыуана. Күрәйем тип бишек янына килһә, ни күҙе менән күрһен, ун көнлөк сабый Ҡарағөләмбәттең кәзә һаҡалына йәбешеп, һелкетә тартып ала. Баланың бармаҡтарында эйәк ите менән аҡтарып алған һаҡал йолҡондоһо тороп ҡала.

Йәмилә, батыр иренең төçө итеп, улына Күсәк бей тип исем ҡуштыра. Күсәк бей, ай үçәһен көн үçеп, бер йәшенә еткәс, ун йәшлек малайҙар менән ҡатышып уйнай башлай. Үҙе ат башынан төшмәй, сапҡанда аттан ҡолауҙы ла белмәй. Буй-һынға ла ун йәшлектәй мыҡты, баҙыҡ, сос була. Малайҙарҙың ул йә аяғын һындырып, йә ҡулын ҡаймыҡтырып, йә башын тишеп ҡайтара. Барыһы ла аптыраша ҡала.

Көндәрҙең береһендә шулай уйнап йөрөгәндә, бер ҡартайып бөткән сал сәсле әбей Күсәк бейҙе саҡырып ала ла:

— Һин, улым, бик көслө булһаң, былай бала-саға имгәтеп йөрөгәнсе, атайыңдың ҡонон алыр инең, — тип, сәстәренән һыйпап, яурынынан тапап һөйә.

— Минең атайым бит, ни эшләп уның ҡонон алайым? — тигән икән Күсәкбей, әбей шунда уға:

— Юҡ, балаҡайым, һинең үҙ атайың былдай яуыз түгел ине, ил батыры ине ул. Ҡарағөләмбәт башына етте уның, нахаҡтан ҡанын ҡойҙо. Үҙ атайың Ҡарағөләмбәт түгел шул, балаҡайым, — тигән дә илап ебәргән, бөтә хәлде баштан-аяҡ һөйләп биргән, әсәһенән һорашырға ҡушҡан, ти.

— Әгәр әсәйең әйтмәһә, ҡурмас ҡыҙҙырт та, эçе ҡурмасты усына ҡыçып һора, ул һиңә дөрөçөн әйтмәй булмаç, — тигән, ти, әбей.

Күсәк бей йүгереп ҡайта ла әсәһенән:

— Әсәй, әйт әле ысынын ғына — ҡайҙа минең атайым? — тип һораған икән, әсәһе ауыр көрһөнөп ҡуйған да:

— Ана бит атайың, тағы һиңә ниндәй атай кәрәк? — тигән.

Күпме генә инәлеп һораһа ла, Йәмилә, улына бер ни ҙә әйт-

мәйенсә, бер үк һүҙен тылҡыған. Ҡис булғас, Ҡусәк бей, әсәһененең муйынына һарылып, иркәләнә лә:

— Әсәй, минең бик ҡурмас ашағым килде, ҡурмас ҡыҙҙырып бирсе, — тигән, ти.

Әсәһе улының һүҙен йыҡмай, суйын табала ҡурмас ҡыҙҙыра һалған. Ҡусәк бей, ҡурмастың һыуынғанын да көтмәйенсә:

— Әсәй, тиҙерәк алып бир ҡурмасты! — тип мыжыған була. Әсәһе ҡалаҡ менән ҡурмас һоҫоп бирһә, Ҡусәк бей кире этәрә, туҫтаҡҡа һалып бирһә — алмай, үпкәләй башлай.

— Һин бит услап ҡына алып бирә торғайның! — ти.

Йәмилә, уттай ҡурмасты усына алып, улына һоноуы була, Ҡусәк бей әсәһенең усын йомдороп ала ла:

— Әсәй, әйт, минең үҙ атайым ҡайҙа? — тип ныҡыша. Әсәһе усының янып барыуына сыҙамай, дөрөҫтө әйтергә була.

Ошо көндән башлап, Ҡусәк бей Ҡарағөлөмбәтте ҡан дошманы күрә башлай, атаһының ҡонон алырға йыйына. Бер нисә йыл үткәс, ҡунаҡҡа киткән ерендә ғәйеп була ла ҡайтмай. Уң йәшенә еткәс, үҙенә иш булырҙай батырҙар һайлап, Ҡыпсаҡ ерен Ҡарағөлөмбәттән ҡотҡарырға йыйына. Был ваҡыт эсендә ул ир-егет булып етә, шулай ҙа әсәһен бик һағына, уны бик күргеһе килә. Иҫке-моҫҡо кейенеп ала ла бер көн әсәһенә килеп инә. Йәмилә инде ҡайғынан ҡартайып, һағыштан һарғайып, ҡаңғырып ултырған була. Ҡусәк бей килеп инә лә әсәһенән хәйер һорай. Әсәһе ойотҡан ҡойоп бирә.

Ҡусәк бей ҡаты ойотҡанды өскә киҫеп бүлә лә, ике өлөшөн ашап, бер өлөшөн ҡалдырып сығып китә. Йәмилә хәйерсе булып килгән улын танымай ҙа. Ҡарағөлөмбәт ҡайтҡас, бөтәһен дә һөйләп бирә. Ҡарағөлөмбәт, туҫтаҡтағы аҡты күреп, шомлана башлай. «Был ойотҡан менән булған хәл яҡшыға түгел», — тип юрай.

Ҡусәк бей, йөҙ илле батырҙан торған нөгөр-ғәскәр туплап, Ҡарағөлөмбәткә ҡаршы яу менән килә. «Ҡарағөлөмбәт нәҫеленән бер генә йәнде лә ҡалдырмай, ҡырып бөтөрәм», — ти Ҡусәк бей. Ахыр сиктә Ҡарағөлөмбәт яуҙы ҡайтара алмай, ҡасып ҡотола. Ҡусәк бей уның затынан булған бөтәһен дә ҡырып бөтөрөп, Ҡарағөлөмбәт йәйләүенә килә, дошманын эҙләп табырға, тере килеш тотоп килтерергә ҡуша.

Ауылдан алыҫ түгел бер ырҙында ун өс йәшлек бер ҡыҙ бала тап була быларға. Ҡусәк бейҙән ҡурҡып, ул:

— Батыр, үлтермә мине. Мин Ҡарағөлөмбәт нәҫеленән түгел, һигеҙ йәштән етем ҡалып, уның һарыҡ көтөүсе генә көтәм, — ти.

— Ярай, мин һиндәй етем-еҫергә теймәйем. Тик һин миңә Ҡарағөлөмбәттең ҡайҙа ҡасҡанын әйтмәҫһеңме? — ти Ҡусәк бей.

— Әйтәм, — тигән, ти, ҡыҙ, кинәнеп. — Ул, ана, анау ырҙын аҫтында боҫоп ята.

Ҡусәк бей, ырҙынға барып:

— Ҡарағөлөмбәт, сыҡ! Хәҙер ырҙының-ниең менән үртәйем үҙеңде! — тип ҡысҡырған икән, ҡурҡыуынан ҡобараһы осҡан Ҡарағөлөмбәт килеп сыҡҡан. Батыр уны шыр яланғас ҡалдырған да, танауынан тишеп бау үткәргәс, ҡара һыйырға арты менән

атландырып, Ҡыпсаҡ ырыуына ҡарай юл тотҡан. Уны Ҡыпсаҡ ауылдарында мәсхәрәләп йөрөтә. Бер йылға буйында ҡара һыйыр үлеп ҡала. Шунан бирле ҡыпсаҡтар был йылғаны Ҡара һыйыр үлгән йылға тип йөрөтөр булғандар.

Ҡара һыйырҙан һуң Күсәк бей Ҡарағөләмбәтте, ҡыҙыл һыйырға атландырып, Һарағыға[2] килтерә. Йәйләүҙәге көллө кеше күрһен тип, Өмбәткә[3] алып бара, Өмбәттән Ағиҙел аша Байназар[4] ҡаршыһындағы бейек тауға мендереп, Ҡарағөләмбәтте ҡоро ҡаҙанға һалып ҡура. Ҡурылғанда сыҡҡан тоҙлоғон бармағы менән ялап ҡарай ҙа: «Ҡон алынды!» — тип һөрәнләй, ти.

Ҡарағөләмбәт тау башында ҡара янып ҡаҙанда күмергә әйләнә. Шуға күрә был тауҙы хәҙер Ҡурыуҙы тауы тип йөрөтәләр. Ҡурыуҙы тауының башындағы имәнлек араһында һаман да әле Күсәк бей ҡаҙан ултыртҡан таштар ята, имеш.

## 220. ҠАРАСАЙ МЕНӘН ҠАҘЫ БАТЫР

Борон нуғайҙарҙың Ураҡ[1] тигән бер батыры булған. Уның батырлығынан, данынан туған тейешле Исмәғил мырҙа бик көнләшкән, ти. Ураҡ батырҙы нисек тә булһа үлтермәк булып, ике егетте ҡотортҡан.

Тик Ураҡ батырҙы нисек үлтерергә? Унан нисек ҡотолорға? Батырҙы уҡ та, һөңгө лә алмай икән. Исмәғил Ураҡ батырҙың үҙ ҡылысынан ғына үлә алыр серен белгән булған. Шуға ул әлеге яллаған егеттәрен батырҙың йоҡлағас ҡылысын урлап алып, уны тирмәнең ишеге арҡыры бәйләп ҡуйырға, аҙаҡ һөрән һалырға өйрәтә. Тегеләр быны эшләй: бер төндә батыр ҡаты йоҡлап киткәс, тирмәһенә шым ғына инеп баш осондағы ҡылысын урлайҙар. Шуны тирмә ишегенә батырҙың муйын тәңгәле бейеклеген самалап арҡыры бәйләп ҡуялар. Бер аҙҙан: «Йәйләүҙе ҡараҡтар баҫа!» — тип яр һалалар.

Шау-шыуға Ураҡ батыр уянып китә лә, йүгереп тирмә ишегенән сығайым тиһә, арҡыры аҫыулы торған үҙ ҡылысына киҫелеп үлә.

Шулай итеп, Исмәғил мырҙа Ураҡ батырҙан ҡотола. Үҙе хан булып ала. Ураҡтың ике бәләкәй улы тороп ҡала. Олораҡы Ҡарасай, кесерәге Ҡаҙы исемле. Өләсәләре был етем ҡалған балаларҙы ла ҡанһыҙ Исмәғил үлтереүенән һаҡлап, икеһе яҡҡа алып китә. Улар бик ауырлыҡ менән аслы-туҡлы үҫәләр.

Бер ваҡыт нуғай илен ҡалмыҡтар яуы килеп баҫа. Улар Исмәғил ханды үлтерәләр.

Батыр булып үҫеп килгән Ҡарасай ҡалмыҡтарҙы ҡыйратырға самалай. Тик уның аты ла, ҡоралы ла юҡ. Өләсәһенән ул ат, ҡорал табып биреүен һорай. Ҡарасайҙың әле бик йәш икәнен күреп, өләсәһе башта быға юл ҡуймай. Ат-ҡорал таба алмауын, дошмандың хәҙер йыраҡ китеүен һылтау итә.

Бер заман Ғәҙелсолтан тигән батыр, ҡырҡ нуғай батырын йыйып, ҡалмыҡтарға ҡаршы һуғышҡа китә. Һуғышта Ғәҙелсолтан

әңелеп, ҡалмыҡтарға әсир төшә. Уны зинданға ябып ҡуялар. Ул зиндан кеше үткеһеҙ бейек тау араһында икән.

Ғәҙелсолтандың еңелгәнен, үҙе тотҡон булғанын ишеткәс, өләсәһе Ҡарасай батырҙы солтандың бер толпарына атландырып яуға оҙата. Ҡалмыҡтарҙы ҡыйрата батыр. Тик Ғәҙелсолтанды таба алмай.

Зинданда ятҡан Ғәҙелсолтан бер ҡарлуғас ҡанаты аҫтына ҡыҫтырып хат ебәрә. Был хатты алып уҡыйҙар. «Мине эҙләп тапһа, Ураҡтың кесе улы Ҡаҙы ғына ҡотҡара алыр», — тип яҙылған, ти.

Ҡаҙы батырҙы эҙләргә ебәрәләр. Ул теге бейек тауҙа бер мәмерйәне барып таба. Шуның эсе менән барып, ҡалмыҡтарҙың тау араһындағы ҡалаһына барып сыға, Ғәҙелсолтан бикләнгән зинданды таба. Ҡалмыҡтарҙы ағаһы Ҡарасай батыр менән ҡыйратып, Ғәҙелсолтанды ҡотҡарып, илдәренә бик күп мал-байлыҡ алып ҡайталар. Ҡарасай менән Ҡаҙы батырҙың даны тирә-яҡҡа тарала.

Ырымбур өлкәһенең Беляев районы Бурансы ауылы янында Ҡарасай күле тигән күл бар. Уны ана шул күл буйында борон Ҡарасай батыр йәйләгән икән, исеме шунан ҡалған тиҙәр.

## 221. ҠЫРҠ НУҒАЙ БАТЫРЫ

Ырымбур өлкәһе Беляев районы Бурансы ауылында уҡытҡанда, ауыл ҡарттарынан, шулар араһынан Әбделғәли Күҙбәков ҡарттан (ул 1892 йылғы), ҡырҡ нуғай батыры хаҡында һөйләгәндәрен ишеткәнем булды[1].

Борон ҡырҡ нуғай батыры булған, тиҙәр. Ул батырлыҡ бабанан атаға, атанан улға, улдан улға нәҫел менән күсә килгән. Төкләҫ баба, Иҙеүкәй, уның улы Мораҙым, уның улы Муса хан, уның улы Мамай хан, Сура батыр, Ямғырсы, Агиш батыр... шулай быуын-быуын теҙелеп килә. Һуңғыраҡ, иң йәше Ҡобланды батыр булған. Ҡобланды батырҙың тарихын, өләндәрен элек ҡарттар күп һөйләй торғайны.

Мамай хан был тирәнән ҡалмыҡтарҙы ҡыуып ебәргән. Беҙҙең Бурансы ауылы исеме Бурансы нуғай батырынан ҡалған. Ул Ижүкәй (Иҙеүкәй) менән ҡорҙаш, замандаш булған, тиҙәр. Ижүкәй ҡара халыҡтан сыҡҡан. Башта төмән башы булған, имеш. Уның ике ҡәбер ташы бар. Беляевкаға бара торған юлдың һул яғында мосолман зыяратында яҙыулы таштар ята. Таштарын йәйге туристик поход ваҡытында балалар менән үҙебеҙ күрҙек, фотоһын төшөрөп алдыҡ. Яҙыуы бик боронғо, аңлауы ауыр. Ижүкәй заманында Һабрау йырау[1] йәшәгән.

Ижүкәйҙән һуң Баял хан булған. Тоҡомо менән Баял ҡаҙаҡ, ҡара, ярлы халыҡтан. Йәтим булған. Тырышлыҡ менән, батырлығы менән күтәрелеп киткән.

Тағы Көнсү, Күк балаһы Есем батыр үҫкән. Ул ҡалмыҡтарҙы был яҡтан ҡыуған. Күп яуҙар булған.

Үҫәргән башҡорттары ҡаҙаҡтар менән ныҡ аралашып йәшәгән. Үҫәргәндәрҙән Алғышай батыр, Сура батыр сыҡҡан.

## 222. ҠОБЛАНДЫ БАТЫР МЕНӘН ҠАҘАНХАН

Нуғайҙарҙың Ҡобланды тигән батырҙары ла булған. Ҡаҙаҡтар уны беҙҙең батыр тип йөрөйҙәр[1]. Уның тураһында өләндәр, йырҙар сығарғандар.

Ҡыпсаҡ батыры Ҡобланды ҡыпсаҡ ырыуҙарын ҡалмыҡтарҙан һаҡлап ҡалған, тип һөйләйҙәр Бурансы ауылы ҡарттары. Ҡыпсаҡтарҙы Ҡазанхан тигән бер ҡалмыҡ ханы бик йонсотҡан. Малтыуарҙарын ҡыуып алып киткән; йәшәгән ерҙәренән, йәйләүҙәренән ҡыуған, ирҙәрен ҡырған, матур ҡыҙҙарын ҡол итеп алып киткән.

Ҡаҙанхан үҙе яман көслө, оло кәүҙәле әҙәм булған, ти. Башы ҡаҙан дәүмәле. Шуға ла уны Ҡаҙанхан тигәндәр, имеш. Яурындары әллә нисә аршын. Буй-һыны ғәләмәт. Ул бер ҡысҡырып ебәрһә, тау-ер һелкенеп ҡуйған, ти, аяҙ көндә болот ҡубып, йә ҡар, йә ямғыр яуа башлар булған.

Уны бер еңер кеше, еңер батыр табылмаған. Ҡобланды батыр батыр булып үҫеп еткән. Ҡаҙанханды еңергә, ҡыпсаҡтарҙың үсен алырға ҡыҙыҡҡан.

Бер сибәр бисә алып ебәргән был. Ул бик аҡыллы, әүлиә ҡатын булған. Ҡобландыға бер йылҡы өйөрөнән бейә һайлап алып, шунан тыуған ҡолондо тәрбиәләп үҫтергән. Ҡолон толпар тоҡомо икән. Кеше күҙенә күрһәтмәй, әллә нисә йыл тәрбиәләгән, ти.

Ваҡыты еткәс, шул толпарға атландырып, ире Ҡобландыны Ҡаҙанханға ҡаршы ебәргән.

Ҡобланды батыр Ҡаҙанхандың ҡалаһына етеп, уның менән бик ҡаты алышып, тегене тәки еңеп сыҡҡан. Башын сабып өҙөп, һөңгөгә ҡаҙан әллә күпме ил-ерҙәр аша халыҡҡа күрһәтеп йөрөгән, ти.

Аҙаҡ уның ҡыу башы әллә күпме тәгәрәп ятҡан. Уны типкеләп тә, сәнскеләп тә йөрөткәндәр. Ҡыу баш барыбер ситалмаған, ти. Ошо яҡтарҙағы Иҫке зыяратта элегерәк һаман бер өлөшө ята торғайны, тип һөйләйҙәр.

## 223. ТӘҮӘШ

Урал буйында башҡорт халҡы бик күп йәшәгән. Мал көткән, йылҡы үрсеткән, ҡымыҙ әсеткән. Йәй көндәре йәйләүгә сыҡҡандар, ә ҡышын ҡышлауға ҡайтҡандар.

Йәйләүҙәрҙең береһендә Тәүәш исемле бер ҡарт йәшәгән. Уның биш улы, бер ҡыҙы, бер килене, бер ейәне булған. Бер көндө Тәүәш ҡарттың үгеҙе үкергән, тирмәһе янына буҙгөр килеп көлтөрләгән. Тәүәш бабай тирмәгә ингән дә:

— Ҡыҙым, үгеҙ үкерҙе, буҙгөр көлтөрләне. Ахыры, берәй хәл

булыр. Өйөр айғырын тотоп эйәрләп ҡуй. Ул-был була ҡалһа, ағайҙарыңа барырһың, — тигән. Ҡыҙ атаһының һүҙен тыңлап, шунда уҡ айғырҙы эйәрләгән.

Ағалары был саҡ йыйында икән. Өйҙә ҡарттың ҡыҙы, килене менән ейәне генә булған. Күп тә үтмәй, алыҫта бер төркөм һыбайлы күренгән.

Ҡыҙ шунда уҡ ағалары янына сапҡан. Барған да хәбәр һалған:

— Ағай-энеләр, яу баҫты, яу! — тигән. Йыйындағы ирҙәр бөтәһе лә аттарына менеп ҡыҙ артынан сапҡандар.

Килгән яуҙы бер ҡаҙаҡ байы ебәргән икән. Ҡарт булыуына ҡарамаҫтан, Тәүәш бабай уларҙы уҡ-һаҙаҡ менән ҡаршы алған, биш-алты илбаҫарҙы аяҡтан йыҡҡан. Атыша-атыша бабайҙың уғы бөтөп киткән. Баҫҡынсылар уны үлтереп, һөңгөһөн башының осона ҡаҙап ҡуйғандар ҙа киленен, ейәнен, бөтә малдарҙы ҡыуып алып киткәндәр.

Күп тә үтмәй, «Яу артылған» тигән ерҙе үрләгәс, быларҙы ҡыуғынсылар ҡыуып етә. Бай ҡаҙаҡты үлтерәләр, ҡалғандары ҡасып өлгөргән. Бай ҡаҙаҡ йығылып төшкәс, теге малай тиҙ генә атты кире бороп, ағаларына килеп ҡушылған. Бергәләп ҡайтып аталарын ерләгәндәр. Бабай күмелгән яланды Тәүәш яланы тип йөрөтә башлағандар. Тәүәш ҡарттың зыяраты әле лә бар.

Шунан Тәүәш ҡарттың биш улы, елләнеп, әлеге ҡаҙаҡ байы еренә килеп сыҡҡандар. Бай ҡаҙаҡтың аҡ һаҡаллы атаһы бар икән, быларға ҡаршы сыҡҡан.

— Илһегеҙме әллә яуһығыҙмы? — тип һораған.

Былар яуап биргән:

— Илсенгә илбеҙ, яусылға яубыҙ!

Ошо ваҡытта бер йомран ҡор [1] ситендә ояһынан сығып һыҙғыра ла кире инеп юғала, сығып һыҙғыра ла кире инеп юғала икән. Бай ҡаҙаҡтың атаһы:

— Ой, истәктәр, бынау йомранды атыңдар, — тигән.

Егеттәр араһынан Йәйекҡол исемлеһе тупаҫ уҡ менән бер атыуҙа йомрандың башына тейҙергән.

Быны күреп торған бай ҡаҙаҡтың атаһы:

— Малдары ла, байлыҡтары ла кәрәкмәй. Бөтә нәмәләрен биреп ҡайтарығыҙ. Тамырҙы ҡороторҙар ғуй, дуҫ йәшәйек, — тигән.

Егеттәр малдарын, байлыҡтарын алып ҡайтып киткәндәр. Шунан аҙаҡ ҡаҙаҡтар барымтаға килмәгән, башҡорттар барымтаға бармаған. Ике халыҡ ыҙғышмайынса ғына йәшәп киткән.

## 224. БАЯС БАТЫР

Элек ике дуҫ йәшәгән. Береһе Баяс исемле була. Был ике батырҙы илдә байҙар бер ҙә һыйҙырмаған, ти. Шунан былар һүҙ беркетеп, байҙарҙы талай-талайҙар ҙа ҡаҙаҡ яғына сығып китәләр. Унда ла күңел таяуы тапмағас, ары китәләр. Сәҙе яғына

һуҡтыра былар. Баястың дуҫы әйтә: «Бер ояға ике ҡусҡар һыймаҫ», — ти. Ҡуҙғалып тағы ары китә лә был мадъярға[1] барып сыға. Шунда тороп та ҡала был. Ә Баяс батыр Сәҙе буйын үҙ иткән. Сәҙелә ул мал, ул үлән шәп булған.

Сәҙе буйлап күсенеп йөрөгәндә ҡаҙаҡтар барымтаға килгән. Баяс батыр халыҡты, малды туплай ҙа ҡамыш араһына йәшерә. Бер һайыҫҡан тегеләрҙең өҫтөндә шыҡырлап осоп тик йөрөй икән. Ҡаҙаҡтар шуға ҡарап быларҙы килеп баҫҡан, ти. Баяс батыр: «Тәүге уғым хыянатсыға», — тип һайыҫҡанды атып төшөргән, ти.

Кис булған. Ҡаҙаҡтар уратып ут яғалар ҙа йоҡларға яталар. Баяс батыр түш менән шыуып сығып ҡаса ла, күрше йәйләүҙәрҙәге халыҡты күтәреп, ҡаҙаҡтарҙы ҡыуа сыға. Уҡ атымы ҡалғансы ҡыуалар. Баяс батыр иптәштәренә әйтә: «Тегеләр уҡ ата башлағас та боролоп ҡасығыҙ, ти, хәйләһеҙ еңеп булмаҫ был Алаҫтайманы», — ти. Ҡаҙаҡтарҙың ата башлауы була, Баястың егеттәре аттарын бороп кире сабалар, ә Баяс батыр үҙе ярһыған атын тотоп ҡала. Ҡаҙаҡтар быға ташлана.

Шунда Баяс батыр әйтә:

— Исемең Алаҫтайма булһа, үҙең алыш минең менән, — ти.

Ҡаҙаҡ батыры Алаҫтайма Баястың һүҙен кире ҡаҡмай. Былар уҡ етеме ерҙән тороп атышалар. Тәүҙә Алаҫтайма ата. Осоп килгән уҡты Баяс батыр еңел генә тотоп алып һаҙағына һала. Алаҫтайма ҡалтырап төшә. Баяс батыр атып ебәрә. Уҡ көмөш эйәр аша үтеп, киҙеһен тишеп сығып, Алаҫтайманың сапанына эләгеп ҡала. Алаҫтайма күреп тора, эш хөрт: алдында халыҡ батыры тора. Башын эйә был.

Баяс батыр быға әйтте, ти:

— Әй, Алаҫтайма, малды һаҡлау бер бурыс, илде һаҡлау мең бурыс. Ҡабат килеп йөрөмә!

Шунан аҙаҡ ҡаҙаҡтар Сәҙегә килмәҫ булды, ти, малдарына теймәҫ булды, ти. Ошонан аҙаҡ Сәҙелә арыу ғына күн иткәндәр. Унда әле лә ҙур зыярат бар, беҙҙең ата-бабаларҙан ҡалған ул. Аҙаҡ был тирәгә урыҫ казактарының күҙе төшкән. Улар башҡорттарҙы ҡыуып сбәргәндәр. Шунан бит инде беҙҙең ошо Ҡәмәлеккә ун ауыл булып килеп ултырғандар: Бөрйән, Ҡыпсаҡ, Ҡәһәрмән, Ҡондоҙло, Өсөйлө, Бишул, Ҡатай, Ишембай, Һарыш, Мишәр. Ҡәрәлек буйына һигеҙ ауыл булып ултырғандар: Таллы, Бөрйән, Диңгеҙбай, Ҡыпсаҡ, Ҡинйәғол, Хәсән, Таштуғай, Моратша.

Бына шул инде беҙҙең Ҡәмәлек менән Ҡәрәлек буйының тарихы.

## 225. БӘНДӘБИКӘ МЕНӘН ЕРӘНСӘ СӘСӘН

Бәндәбикә әбей Мәҡсүт ауылы ерендә, Эйеккә һул яҡтан ҡойған Бәндәбикә йылғаһы буйында йәшәгән. Ул заманда йылғаның һыуы мул булған, балығы күп булған, буйы ҡуйы ағаслыҡ менән ҡапланған.

Йылғаның төньяғындағы ҡалҡыулыҡта Бәндәбикә ҡурғаны бар. Ул тирмә өй һымаҡ итеп кирбестән эшләнгән. Бәндәбикәнең ҡыш йәшәй торған өйө — ыҙмаһы булған.

Бәндәбикә үҙенән бик күп йәшкә кесе Ерәнсә сәсәнгә кейәүгә сыҡҡан. Уны үҙ өйөнә алҡайтҡан. Үҙе ул бик абруйлы, һынсыл, батыр, тәүәккәл ҡатын булған. Ил аҙаматтары һәр саҡ уның кәңәшен тотҡандар, уны хөрмәт итер булғандар.

Берҙән-бер ваҡыт Бәндәбикә әбей ауырыҡһына башлай. Ә Ерәнсә сәсәндең тап ир ҡорона тулған сағы. Һәр яуҙан еңеп ҡайтыуы арҡаһында, күңеле лә үҫә бара бының. Бәндәбикә ауырып киткәс, был айырыуса йүгәнһеҙләнә. Егеттәрен йыя ла бер көн әйтә:

— Ҡаҙаҡтар беҙҙең илгә барымта менән күп килделәр. Йәгеҙ әле, егеттәр, бер ҡыҙыҡ булһын, беҙ ҙә уларҙың йәйләүҙәренә барымта яһап ҡайтайыҡ.

Егеттәрҙең ҡайһылары:

— Бәндәбикә инәй рөхсәт итерме? Ул нимә әйтер? — тип икеләнеберәк ҡалғандар, ә ҡайһылары:

— Ҡурҡаҡ кеше беҙ түгел, — тип, Ерәнсә сәсәндең һүҙен ҡеүәтләгәндәр.

Һүҙҙе төйнәгәс, Ерәнсә сәсән, Бәндәбикә янына ҡайтып, үҙ фекерен әйткән икән, Бәндәбикә уға ҡаршы төшкән.

— Һин үҙ илеңдә батыр исемен яуланың. Батырлыҡ янына аҡыл да кәрәк. «Ил һаҡлаған — ирәйеп йәшәгән, ил баҫҡан — иҙелгә таянған», — тигәндәр. Быраса халыҡ һеҙҙе изге эш башҡарғанға күрә хөрмәт итте. Ә һин хәҙер, ахмаҡланып, йәштәрҙе насар эшкә ҡотортҡанһың. Ил баҫыу — беҙҙең ғөрөфкә һыймай. Исем һатмағыҙ. «Теймәҫте хоҙай һөймәҫ», тигәндәр. Насар уйҙан кире ҡайтығыҙ, — тип өгөтләгән, ти, ул хәл өҫтөндә ятҡан көйө. Халыҡ та уның һүҙен ҡеүәтләгән, ти.

Ә Ерәнсә сәсән тыңламаған, үҙенә эйәргән егеттәре менән төнөн китеп тә барған, ти.

Бәндәбикәнең ауырыуы тағы көсәйгән. Ул, туғандарын йыйып:

— Хәлем насар, шәбәйә алмам. Әгәр үлеп-нитеп китһәм, өйөмә индереп һалығыҙ ҙа ишек-тәҙрәләрен күмегеҙ. Өйөм минең ҡәберем булһын, — тип васыят әйткән, ти.

Бәндәбикә оҙаҡ та тормай үлгән. Ҡарттар уны, васыяты буйынса, үҙ өйөнә ерләгәндәр.

Ә Ерәнсә сәсән егеттәре менән ҡамауҙа ҡалған, күптәр үлгән. Ҡаҙаҡтың ил һаҡсылары уларҙы хөкөм майҙанына килтергәндәр. Унда аҡһаҡалдар йыйылған булған. Әсирҙәр баштарын түбән эйеп торалар икән. Улар янына бер ҡаҙаҡ батыры килеп баҫҡан. Шул ерҙә Ерәнсә сәсән, Бәндәбикәнең әйткәндәрен хәтерләп, бик ныҡ үкенгән, ти.

Аҡһаҡалдар:

— Батырҙар көрәшергә тейеш. Әгәр батырҙары еңһә, был илбаҫарҙарҙы азат итергә. Әгәр ҡаҙаҡ батыры еңһә, яу менән килгән батырҙың йөрәгенә бысаҡ ҡаҙап үлтерергә, ҡалғандарын ҡай-

тарырға. Был мажараны улар ҡайтып ил ҡарттарына һөйләрҙәр, — тип хөкөм сығарғандар.

Ҡаҙаҡ батыры Ерәнсә сәсәнде йығып, күкрәгенә ултырған да йөрәгенә ҡаҙарға әҙерләнгән генә икән, Ерәнсә сәсән ҡысҡырып көлөп ебәргән.

— Туҡта! Үлтермәй тор! Ниңә көләһең, һорашайыҡ! — тип ҡысҡырғандар, ти, аҡһаҡалдар. Ерәнсә сәсән аяҡ үрә баҫҡан да:

— Минең ҡатыным Бәндәбикә миңә... — тип әйтеүе була, аҡһаҡалдар:

— Бәндәбикә!.. Беләбеҙ Бәндәбикәне! Хуш! Һөйлә! — тиҙәр ҙә бер-береһенә ҡарап ҡуялар. — Әллә һин уның ире Ерәнсә сәсәнме?

— Эйе, мин Ерәнсә сәсән. Бәндәбикә беҙҙе ил баҫыуҙан ҡырҡа тыйҙы. «Ил һаҡлау — ҙурлыҡ, ил баҫыу — хурлыҡ», — тине. Мин уның һүҙен тотманым. Егеттәрем менән барымтаға киттем. Уның әйтеүе дөрөҫ булды, хурлыҡҡа ҡалдыҡ. Шуға үҙемдән көләм, — тигән Ерәнсә сәсән.

— Бәндәбикәне әүлиә тип ишетә инек, ысынлап та әүлиә икән. Ҡатының хөрмәтенә барығыҙҙы ла азат итәбеҙ, — тигәндәр ҡаҙаҡ аҡһаҡалдары.

Былар йонсоп илгә ҡайтыуҙары була, улдары үлеп ҡалған кешеләр Ерәнсә сәсәнгә ташланалар:

— Ҡайҙа беҙҙең улдарыбыҙ? — тиҙәр. — Һүҙ тыңламай ни ҡырҙың? Ил тыңламай хур булдың!

Ерәнсә сәсән ҡайғыға ҡала. Хурлығынан ул түҙә алмай атына менеп, көнсығышҡа ҡарай сабып китә лә, Ҡәңшәт тауына[1] барып менә. Шунан ҡырла буйлап йән-фарман елеп килә лә тау битләүендәге ҡаянан һыбай көйө һикерә. Шунда аты ла, үҙе лә һәләк була.

Ерәнсә сәсән убаһы ағаслы Үрген[2] йылғаһының уң яғынан, Наҙый[3] йылғаһының Үргенгә ҡойған еренә яҡын, йылғаны уң яҡлап, Ҡоро Урҫай уяҙына барған юлдың өҫ яғында, тәпәш кенә һырт өҫтөндә. Уның тирә-яғы һөрөлгән. Ҡәбер өҫтөндә оҙон таш ултыра.

## 226. ИҪӘНҒОЛ МЕНӘН СӘЙЕТ БАЛУАН

Был яҡтарҙа борон башҡорттарҙы ғәскәри хеҙмәткә алмағандар. Иҫәнғол[1] түрә булып киткәс, аҡ батшаға иң беренсе булып ул башҡорттарҙан һалдат бирә башлаған. Иҫәнғол йыш ҡына ҡаҙаҡ яғына сығып өгөткә йөрөгән. Ул ҡаҙаҡтарға: «Беҙ Аҡ батшаға һалдатҡа йөрөйбөҙ. Һеҙ ҙә Яйыҡты тотоп тороғоҙ, үҙегеҙ хужа булып, һалдатҡа кеше бирегеҙ», — тигән. Ҡаҙаҡ байҙары быға риза булмаған. «Ой-бай, ҡыуығыҙ иштәкте, уландарҙы урыҫ яһамаҡ була!» — тигәндәр. Иҫәнғол киткәндә: «Мин дә ҡаҙаҡ балаһы. Һалдатҡа кеше бирмәһәгеҙ, Уралдан ҡыуылаһығыҙ һеҙ», — тигән ҡаҙаҡтарға.

Икенсе юлы Иҫәнғол ҡаҙаҡ яғына үҙе менән ҡустыһы Ғәбит

батырҙы, тағы Сәйет көрәшсе менән Ҡыуандыҡты[2] алып сыҡҡан. Улар ҡаҙаҡ байының аш биргән йыйынына тап булғандар. Унда ла Иҫәнғол ҡаҙаҡтарға өгөт әйткән, батшаға хеҙмәт итергә өндәгән. Шул йыйында бәйге ойоштороғандар, көрәш булған, ат сабышҡандар. Көрәш майҙанына бер ҡаҙаҡ балуанын алып килгәндәр. Иҫәнғол Сәйет көрәшсегә әйткән: «Һин көрәшеп ҡара», — тигән, Ғәбит батырға әйткән: «Һин алмашҡа сығырһың», — тигән. Ҡаҙаҡ балуаны Сәйет батыр менән көрәшә башлаған. Оҙаҡ алышҡандар. Быларҙың бер-береһен еңә алмай серәнешеп йөрөүенә түҙеме етмәй Ғәбит батыр ат өҫтөндә ғәйәрләнеп, тибәләнеп ултыра икән. Иҫәнғол уға: «Ай-й, атты боҙаһың, аттан төш!» — тип ҡысҡырған.

Сәйет көрәшсе теге ҡаҙаҡ балуанын алып бырғыған. Көрәштән һуң ат ярышы булған. Иҫәнғол үҙенекеләргә: «Ат сапҡанда үҙ-ле-үҙебеҙ менеп сабайыҡ та ҡуяйыҡ», — тип кәңәш биргән. Һәр кем үҙенең атын менеп сабырға тейеш булған. Ярышта былар бишәүһе лә уҙған. Ә Сәйет көрәшсенең аты — иң беренсе булып килгән.

Шунда йыйын ойоштороған ҡаҙаҡтың олоһо:

— Ой-бай, ары әйтһәң дә Сәйет балуан, бире әйтһәң дә Сәйет балуан. Балалар, ҡуйығыҙ инде, — тип йыйынды бөтөргән. «Ары әйтһәң дә Сәйет балуан, бире әйтһәң дә Сәйет балуан» тигән һүҙ ана шунан тороп ҡалған.

## 227. ӨМБӘТ БАТЫР

Бынан биш йөҙ йылдар элек үҫәргән башҡорттарының бер өлөшө Һамар буйында йәшәгән. Улар Ҡазан ханлығы менән йыш ҡына ыҙғышып торғандар. Ҡазан ханлығы башҡорттарҙы үҙенә буйһондорорға тырышҡан. Һамар башҡорттары берҙәм булып, татарҙарҙың яуын ҡайтарып торғандар. Башҡорттаҙың ҡор башында үҫәргән батыры Өмбәт торған.

Өмбәт батыр, олоғая төшкәс, Һамар буйындағы үҫәргәндәр иленә ҡайтып йәшәмәк була. Үҫәргәндәр уны бик хөрмәтләп ҡаршы алалар. Уға ауҡан яткан Өҫкәлек[1] буйынан ер бирәләр. Был ваҡытта Өмбәттең бер нисә улы ир ҡорона тулған була. Үҫәргән иленә йыш ҡына ҡаҙаҡтар, ҡалмыҡтар сапҡын яһап торалар. Өмбәт, олоғайыуына ҡарамаҫтан, түҙеп ята алмай. Һәр ауылдан һыбайлы ғәскәр төҙөүгә кешеләр һайлап ала. Үҙенең улдарын, батырҙарҙы ғәскәр башлыҡтары итеп тәғәйенләй. Ҡаҙаҡтар, ҡалмыҡтарҙың килер юлына ҡарауылдар, сапҡындар ҡуя. Хәҙерге Муйнаҡ ауылы эргәһендәге Тишеклетау башына ҡарауыл итеп үҙенең өлкән улы Муйнаҡты[2] билдәләй. Тау башына ҡуйылған ҡарауыл дошман күренеү менән ут яндырып хәбәр иткән, сапҡындар шунда уҡ йәйләүҙәргә таралып ғәскәр туплағандар.

Үҫәргәндәргә бигерәк тә ҡалмыҡтар күп яфа килтерәләр. Бер ваҡыт ҡалмыҡтар бик күп ғәскәр менән хатта Өмбәт ҡарт йәшәгән Ҡаратау йәйләүенә үк килеп етәләр. Был яу үҫәргәндәрҙең

көсөн нык кына ҡаҡшата. Ҙур кыйынлык менән үçәргәндәр калмык яуын илдәренән кыуып сығаралар. Дошман килгәндә ауыл халкы, бисә-сәсә, бала-саға урманға касып кына котолор булған. Хәҙерге Өмбәт ауылы эргәһендәге Ауылкаскан урманының исеме ана шунан тороп калған.

Өмбәт карт байтак ғүмер итеп үлеп кала. Уны хәҙерге Өмбәт ауылы зыяратына күмәләр. Өмбәттең ере бик күп була. Улдарының рөхсәте буйынса һуңғарак «Һүрән күгәрсене» еренә татарҙар килеп ултыралар.

## 228. ТӘКӘҒАШКА

Бынан дүрт йөҙ йылдар элек Карт-Муйнак ауылында Урал арты башкорттарының бер ырыуы йәшәгән. Был тирәләге башкорттар менән калмык ырыуҙары бәрелешеп торғандар. Карт-Муйнакта ырыу башлығы Үтәғол тигән бер батыр булған. Был Үтәғол үҙ башынан күп кенә калмык яуы үткәргән.

Йылдар үткән. Берҙән-бер көндө калмыктар Үтәғол картка сапкын ебәргәндәр. Шулай ҙа шулай, ерегеҙҙе бирегеҙ, әгәр бирмәһәгеҙ, яу менән киләбеҙ, тигәндәр. Үтәғол быға риза булмаған, шундай шарт куйған: Карт-Муйнак ауылынан өс сакрым алыçлыкта яткан бер тау янында ике яктың да иң көслө батырҙары осрашһын. Кем батыры еңә, ер шул якка күсә.

Теге сапкын Үтәғолда эленеп торған бер янды күреп кала ла һынап карамак була. Янды күтәреп ала, кире урынына илтеп һала алмай, шул көйө ташлап иленә кайтып китә. Кайткас, бөтәһен дә һөйләп бирә.

Был кайтып киткәс тә, Үтәғол карт кустыһы Тәкәғашканы сакыртып ала. Ысын исеме Ырыçкоя булған. Тәкәғашка тип шуның өсөн әйтәләр: түбәһендә сәсе булмай. Тәкәғашка килгәс, Үтәғол уға һорау бирә: «Кустым, һин хәҙер егет булдың, көсөңдө һынап карағаның бармы?» — ти. «Һынауын һынағаным юк, — ти Тәкәғашка, — бер ус дубылғы кабығын һыкканда, һыуы шәп акты», — тип яуап бирә. Шунан һуң Үтәғол әйтә: «Белеп тор, ти, көтөп тор, ти, һиңә калмык батыры менән көрәшергә тура килер, ти. Калмыктар батырҙарын ике яклап аркан менән бәйләп килтерерҙәр, ти. Ул үкереп, ерҙе тырнап, ике якка сәсрәтә ташлап килер, ти, үҙе яланғас булыр, ти, тәндәре май менән майланған булыр, ти. Ике һәңгө буйы ер калғас, арканды ыскындырырҙар, ти, батыр һиңә ташланыр, ти. Көрәшкән сакта ул һинең аяғың араһына керергә тырышыр, шул сакта һин уның ике һебәлегенән тотоп һауаға ырғыт», ти.

Билдәләнгән көн килеп еткән. Үтәғол үҙ халкы менән шарт куйған тау янына бара. Күп тә үтмәй, калмыктар ҙа күренә. Үтәғол һөйләгәнсә, калмык батыры үкереп, ер тырнап, балсыкты ырғытып, ике якка ташлап килә икән. Килеп етер алдынан батырҙы аркандан ыскындыралар.

Алыш башлана. Ике яҡтың да халҡы батырҙарына көс-ҡеүәт биреп ҡыҫҡырышалар. Ҡалмыҡ батыры Тәкәғашҡаның аяҡтары араһына керергә маташҡан саҡта, Тәкәғашҡа тегенең ике һөбәләгенән тотоп ала ла һауаға ырғыта. Ике ҡулында теге батырҙың ике ҡабырғаһы тороп ҡала. Батырҙары еңелгәс, ҡалмыҡтар, һуғышмайынса, кире боролоп ҡайтып китәләр. Ә бындағылар Тәкәғашҡаны данлап, бәйге яһап, күңел асып, өйҙәренә таралалар. Шул көндән алып был тауҙы Шартым тауы тип атағандар.

Үтәғол ҡарт батырын тағы үҙ янына саҡыртып кәңәш бирә: «Ҡустым, һин хәҙер көсөңдө һынаның инде, еребеҙҙе һаҡлап ҡалдың. Шулай ҙа әҙер тор, ти. Оҙаҡламай ҡалмыҡтың икенсе батыры килер. Ул һыбай булыр. Бик шәп сабып килгән саҡта, һин уның үҙенә сәнсмә, һөңгөң менән атының башына сәнс, ти. Ат әйләнер ҙә әйләнер, батыр аты менән булашҡан арала, һөңгөң менән ҡултыҡ аҫтына уҡтал», — ти.

Күп тә үтмәй, ҡалмыҡтар икенсе тапҡырға киләләр. Тәкәғашҡа, Үтәғол өйрәткәнсә, сабып килгән ҡалмыҡ батырының тәүҙә атына, шунан үҙенә һөңгө менән сәнсә. Ҡалмыҡтар тағы кире китәләр. Был алыштан һуң тағы бәйге була. Шартым тауынан йыраҡ түгел бер тау буйына бөтә йәйләүҙәре менән ҡыуанышып күсеп ултыралар. Ул ултырған тау Ҡыуандыҡ тауы тип атала.

Ҡаҙаҡ, ҡалмыҡ яуы Аҡ батшаға баш һалғас ҡына туҡтаған. Ҡаҙаҡ, ҡалмыҡ менән башҡорт араһына Аҡ батша атлы казак ебәргән. Шул сәбәпле был тирәлә атлы казак ауылдары килеп сыҡҡан, шунан һуң башҡорттар менән ҡаҙаҡ-ҡалмыҡтар араһында ер өсөн һуғыш булмаған.

Шартым тауы янынан хәҙерге көндә Миәс — Учалы тимер юлы үтә. Хәҙер унда станция. Был станцияны Шартым тип атанылар.

## 229. МУЙНАҠ ҠАРТ

Әбей батша заманында Муйнаҡ исемле ҡарт йәшәгән. Был ҡарттың алты улы булған: Ҡунаҡбай, Ҡанбулат, Яуынбай, Ҡарамыш, Ҡунаҡҡужа, Аҡбаш. Был балалар ир булып еткән.

Бер ваҡыт Ырымбур янындағы Ҡарғалы шәһәрендә[1] торған гарнизон башлығы Ахмар батыр Муйнаҡты тотоп батшаға буйһондорорға рөхсәт ала ла Муйнаҡ ҡартҡа сапҡын ебәрә: шулай ҙа шулай, мин йөҙ һалдат менән һиңә ҡунаҡҡа киләм, ти был, мине ҡаршыла, ти, фәлән көндө Иҫәнғол аръяғында, Эйек һыуында, Яһы кисеүҙә булырмын, тип, ҡултамғаһын һалып ебәрә.

Ахмар батыр шулай итеп Муйнаҡ ҡартты бөтә йәйләүе менән, байлығы, бала-сағалары менән тотоп алып китмәксе булған. Муйнаҡ ҡарт Ахмар батырҙың был уйын һиҙенгән. Уландары өйҙә булмай бының, яу ҡайтарырға киткәндәр, ти. Шулай ҙа һис бер сара юҡ. Әйткән көнгә Ахмар батырҙы ҡаршыларға кәрәк. Муйнаҡ ҡарт йәйләүҙәге кешеләрҙе йыя. Унда ун ике ҡарт була, ҡалғандары — ҡатын-ҡыҙ, бала-саға.

*Муйнаҡ ҡарт халыҡҡа эште аңлатып бирә.*

Әйткән көн килеп етә. Муйнаҡ ҡарттың уландары һаман ҡайтмай. Ул, өйҙән ҡарт-ҡороно, ҡатын-ҡыҙҙы йыйып, ҡоралландырып, юлға сыға. Юлда барғанда аҡыл бирә: «Ахмар батыр минең менән күрешкәндә: «Бына, Муйнаҡ, эләктең»,— тип әйтер. Шул ваҡытта мин Айсыуаҡ менән Орҡоя килендән: «Балалар нисек?» — тип һорармын. Һеҙ Ахмар батырҙың ике яғынан килеп һөңгө менән сәнсерһегеҙ ҙә күтәреп алырһығыҙ», — ти.

Алға китәләр. Яһы кисеүгә килеп етәләр. Һыу аръяғында теләләр ҙә күренә башлай. Ахмар ғәскәренә егерме сажин ерҙә тороп торорға ҡуша ла, табынты ҡулға төшөрәм тип, үҙе килә башлай. Муйнаҡ ҡарт та халҡына ишара итеп, Ҡара юрғаһының теҙгенен тотоп, алға бара. Ахмар батыр, Муйнаҡ ҡарт менән күрешкәндә: «Эләктең бит», — тип әйтә, үҙе ҡарттың ҡулын ҡыҫып тота. Шул ваҡытта Муйнаҡ ҡарт, һөйләшкәнсә: «Балалар нисек?» — тип ҡысҡырып ебәрә. Айсыуаҡ менән Орҡоя шул сағын Ахмар батырҙың ике яғынан килеп һөңгө менән сәнсәләр. Һуғыш башланып китә. Был һуғышта бигерәк тә әлеге Орҡоя килен йылғырлыҡ күрһәтә, Ахмар батырҙың ғәскәре таралып, ҡасып бөтә

Муйнаҡ ҡарт ана шулай еңеп ҡайта. Бер ике көн үткәс, мал әйҙәп Муйнаҡ ҡарттың балалары ҡайтып килә. Улар әле йәйләүҙә ни булғанын белмәйҙәр. Муйнаҡ ҡарт һөйләп бирә, алып ҡайтҡан ҡоралдарҙы күрһәтә. Улдары атаһының эшен хупламайҙар: «Хөкүмәт ғәскәренә теймәҫкә кәрәк ине. Беҙҙең уларға ҡаршы торорлоҡ көс юҡ, хәҙер ни эшләйбеҙ инде?» — тип тауыш сығаралар. Шунан Муйнаҡ тороп, халыҡҡа ҡарап әйтә: «Мин эште боҙғанмын икән, үҙем төҙәтермен», — ти.

Өс-дүрт көн үткәс, Муйнаҡ ҡарт ике уҡсы алып, Ҡазан шәһәренә ҡарай юлға сыға. Барып, үҙен батша хөкөмөнә тапшырмаҡ була. Ул Ҡазанға барып етә. Губернаторға инеп, Ахмар батырҙы үлтереүен, ғәскәрен тар-мар итеүен һөйләй. «Минең балаларыма теймәгеҙ инде», — тип, үҙен ғәйепле һанап, башын түбән эйә. Муйнаҡ ҡарттың шул тиклем йыраҡ ерҙән һыбай килеүенә губернатор хайран ҡала. Бик күп һөйләшкәндән һуң әйтә: «Муйнаҡ, беҙ һине азат итәбеҙ, — ти, — старшина итеп ҡуябыҙ. Халыҡты бер ергә туплап тот, беҙҙең әмерҙе еренә еткер», — ти. Муйнаҡ, баш эйеп, үҙенең риза булыуын әйтә. Ҡулына указ алып, старшина булып ҡайтып китә. Бөтә халыҡты саҡырып ала. Ҙур туй үткәрәләр. Муйнаҡ ҡарт халыҡты ауыл-ауыл итеп ултырта. Ул Һүрәм, Өҫкәлек, Әселе[2] һыуҙарын үлсәргә ҡуша. «Ҡайһы йылға ҙур булһа, шунда ауыл ҡororға», — ти. Йылғаларҙы үлсәп сығалар. Былар араһында Өҫкәлек йылғаһы иң ҙуры булып сыға. Муйнаҡ ҡарт үҙе шул Өҫкәлек йылғаһы буйына ултырырға була. Улар өс ауыл: Үрге Муйнаҡ, Түбәнге Муйнаҡ, Урта Муйнаҡ булып ултыралар.

Һүрәм һыуын ташламайбыҙ тип, Муйнаҡ ҡарттың өс улы Малай Муйнаҡ исеме алып ултыралар. Улдарының исеме — Ҡанбулат, Ҡунаҡкужа, Аҡбаш була. Уларҙың тоҡомдары әле лә бар.

## 230. ЫҪМАИЛ МЕНӘН ДАУЫТ

Бынан дүрт йөҙ йыл самаһы элек Яйыҡ һыуынан алыҫ түгел Өҙөнгүл буйында Күбәләк ырыуының Ыҫмаил тигән данлыҡлы бер кешеһе йәшәгән. Был осорҙа күп кенә башҡорт ырыуҙары рус батшаһына баш һалған булғандар. Күбәләк, Теләү, Ҡатай ырыуҙары бөтөнөһө рус батшаһына ҡушылғандар. Ыҫмаил ҡарт быға риза булмаған. Ул, бисәһен, Дауыт исемле яңғыҙ улын, киленен атҡа мендереп, өйөр-өйөр малын ҡыуып, ҡаҙаҡ далаларына сығып киткән.

Былар дүртәүләп бара торғас, бер бай ҡаҙаҡ йәйләүенә килеп сыҡҡандар. Ыҫмаил ҡаҙаҡтарға хәлде һөйләп биргән, ҡаҙаҡ ерендә йәшәргә, донъя көтөргә рөхсәт һораған.

Ҡаҙаҡ байы Ыҫмаил ҡарттың өйөр-өйөр малына, бисәһенә, килененә ҡыҙыҡҡан да ярамһаҡтарына әйткән: «Был иҫәктең малын да, бисәһен дә, һылыу киленен дә тартып алығыҙ», — тигән. Быны Ыҫмаил ҡартҡа еткергәндәр: «Бисәңде, килененде беҙгә бирһәң генә бында йәшәргә рөхсәт итәбеҙ», — тигәндәр. Ыҫмаил ҡарт әйткән: «Бисәмде лә, киленемде лә бирмәйем», — тигән.

Быға ҡаршы: «Ул саҡта үҙеңде лә, улыңды ла үлтерәбеҙ», — тигәндәр.

Ҡарт риза булмағас, тиҙ генә Ыҫмаил менән улы Дауытты бәйләп ташлағандар. Байҙың башкиҫәре Ыҫмаил ҡарттың үңәсенә бысаҡ терәгән. Шул саҡта ғына ҡарт байға әйткән:

— Минең һиңә бер генә үтенесем бар: Дауыт — минең яңғыҙ улым. Үҙемде салһағыҙ ҙа, улымды ҡалдырығыҙ. Мал бағып булһа ла йөрөр, — тигән.

— Теләгеңде ҡабул ҡылам, — тигән бай.

Ыҫмаил ҡартты үлтерәләр, ә Дауытты ҡуй көтөүсе итеп ҡуялар. Уның бисәһен бер аҡһаҡалға тотоп бирәләр, ә киленен бай үҙенә ала. Дауыт бисәһенән дә, әсәһенән дә айырылып, байҙың малсылары йортонда йәшәй башлаған.

Берҙән-бер көн Дауыт, көтөүҙән ҡайтып, мал өйөнә инеп барғанда ҡатынын күреп ҡала. Хәтфәгә генә төрөнгән, ти, был хәҙер, вайымһыҙ көлә-көлә үтеп бара, ти. Дауыт әйтә быға: «Кәләшкәйем, һин ни эшләп хәлемде лә белешмәйһең? Дошман ҡулына эләгеп, мине бөтөнләй оноттоң?» — тип үпкә белдергән. Ҡатыны танауын сөйөп әйтә икән: «Һин йолҡош, тик ятмаһаң, ҡайтып байыма әйтермен. Ул һинең кәрәгеңде бирер», — ти икән.

Кис ятыр алдынан Дауыт янына бейә һауып йөрөүсе бер әбей килеп ингән. «Улым, һиңә сер итеп әйтәм», — тигән был әбей, — берүк, һаҡ бул. Һине ҡырҡ көндән һуң үлтерергә йыйыналар. Ҡасып китергә тырыш. Иң әүәл байҙың ҡара айғырын тотоп ал, шул айғыр, ғына һине ҡотҡара алыр. Башҡа атты менһәң, ҡыуып етерҙәр. Мин үҙем дә башҡорт әбейе булам. Ҡыҙ сағымда урлап алып киткәйнеләр. Тыуған илемде бик һағындым, тик ҡайта алмайым. Уралыма ҡайтып үлһәм, һис кенә лә үкенмәҫ инем», — тигән.

Егет шул көндән алып ҡасыу яғын ҡарай башлаған. Байҙың ҡара айғырын урлау өсөн көн дә уны андый икән. Тик йылҡы кө-

төүсеһе уны бик нығ һағлай, төндә йоҡлағанда ла арҡанлап, бер осон ҡулына урап ята, ти. Шулай итеп, утыҙ туғыҙ көн үтә, ҡырҡынсы көн башлана, кис була. Дауыт айғырҙы аңдырға килә. Үҙе менән ике ботлоҡ гер алып килә был. Йылҡы көтөүсе йоҡларға ята. Ул айғырҙы арҡанлап алған да, бер осон ҡулына урап, тирмә эсенән әленән-әле тартҡылап ята икән. Дауыт һаҡ ҡына килеп, айғырҙы тотоп ала. Арҡанын сисеп, герҙе шул арҡан осона тағып китә. Шул сәбәпле көтөүсе аттың урланғанын һиҙмәй ҡала.

Дауыт, ҡара айғырҙы менеп, ата йортона елә. Ҡаҙаҡтар уянып ҡыуып ҡараһалар ҙа, етә алмайҙар. Егет үҙенең Күбәләк ырыуына ҡайтып төшә. Ырыуҙаштары уны һырып алалар, ни булғанын һорашалар. Дауыт баштан-аяҡ барыһын да һөйләп бирә. Ҡаҙаҡ байының оятһыҙлығына, ҡатылығына ырыуҙаштарының бик нығ асыуы килә. Улар: «Ыҫмаил ҡарттың үсен алайыҡ, уның әбейен ҡотҡарайыҡ, тартып алынған өйөр-өйөр малын ҡайтарайыҡ!» — тиҙәр. Был эш өсөн Теләү, Ҡатай ырыуынан да батырҙар саҡыралар. Ҡоралы һыбайҙар ҡаҙаҡ байы йәйләүенә табан юлға сығалар. Улар, йәйләүҙе аңғармаҫтан баҫып, Ыҫмаил ҡарттың әбейен, йәш сағында урланған башҡорт ҡарсығын алып, тартып алынған малын ҡыуып ҡайтып китәләр. Күбәләк еренә аяҡ баҫҡас, артта ике яҡлап саң томаны күтәрелгәне күренә. «Ҡыуғын килә!» — тигән хәбәр тарала. Батырҙар ҡатындарҙы, малды алға ебәреп, үҙҙәре юл кәртәләп ҡалғандар. Аҡһаҡалдар кәңәш биргән: «Яуҙы ҡан ҡоймай ғына кире борорға тырышығыҙ», — тигәндәр.

Ҡыуғынсылар яҡынлағас, Күбәләк батыры иң алдан килеүсе яу башлығын ҡурҡытыу өсөн әллә ни ахыры ерҙән тороп уның эйәр ҡашын емерә ата. Яу башы, быны күрһә лә, атта елеүен дауам итә. Шунан һуң ғына Күбәләк батыры уны күкрәгенә атып үлтерә. Яу башы йығылғанын күреп, башҡалар боролоп ҡайтып китәләр.

Әсирлектән ҡотолған Дауыт атаһы йәйләгән Оҙонгүл буйына килеп ултыра. Дауыттан таралған балалар ишәйеп ауыл булып китә. Ошо ауылды Ыҫмаил тип тә, Оҙонгүл тип йөрөтә башлайҙар.

## 231. АЛДАР-ШЫМАЙ МЕНӘН ЗӨҺРӘ

Борон был тирәлә Шымай тигән батыр, мәргән уҡсы булған. Уға бөтә эштә лә алдан йөрөгәне өсөн, етеҙ, ҡыйыу булғаны өсөн, Алдар исеме биргәндәр. Өршәк буйында уға тиңдәш булмаған. Уның боландай һомғол, Өршәк ҡамышы кеүек зифа буйлы Зөһрә атлы һөйгәне лә булған. Тик улар ҡауыша алмағандар. Был яҡҡа ниндәйҙер ят халыҡ ябырылған. Алдар-Шымай шуларға ҡаршы сыҡҡан. Сыуаш Ҡарамалыһы [1] янында Етмеш урманы бар. Шунда ул етмеш кешене уҡ менән сүпләгән. Уғы бөткәс, үлтергәндәр. Ошо Бикҡол менән Миәкә araһында күмгәндәр. Элек ҡәберлеге лә була торғайны. Хәҙер беленмәй инде. Алдар тигән ауыл уның

исемен йөрөтә. Ул ауыл Илсеғол[2] янында. Алдар үлгәс, Зөһрә лә күп тормаған. Уның ҡәбере беҙҙең Бикҡол ауылының ҡояш сығышында, тау башында. Элек Алдар менән Зөһрәнең бик матур өҙөн хикәйәте булған[3].

## 232. ҠОЛОМБӘТ БАТЫР

Рәсәй батшалығына ҡушылырға ҡарар ҡылғас, был хаҡта Аҡ батшаның үҙе менән һөйләшеп-килешеп ҡайтырға, тип, башҡорттар Иван Грозныйға ун ике илсе ебәргәндәр[1]. Улар араһында Ҡоломбәт батыр ҙа булған.

Аҡ батша быларҙы бик яҡшы ҡабул иткән, ти. Ҙур мәжлес ҡороп, алдарына алтын табаҡтар менән алтын ҡалаҡтар ҡуйып, һыйхөрмәт күрһәткән. Мәжлестән һуң батшаның ашнаҡсылары иҫәпләп ҡараһалар, бер алтын табаҡ менән бер алтын ҡалаҡ етмәй икән, ти. Был хаҡта батшаға хәбәр итәләр. Батша хөкөмө үҙ ҡулында бит: тотҡан да был илселәрҙе тентеп сығырға ҡушҡан. Теге алтын табаҡ менән алтын ҡалаҡ Ҡоломбәт ҡуйынынан килеп сыҡҡан. Батша бынан:

— Ниңә алдың быларҙы? — тип һораған икән, Ҡоломбәт аптырап тормаған, былай тип яуап биргән:

— Мин, батшам, илемә ҡайтҡас, һинең яҡшы батша икәнлегеңде бөтә ырыуҙаштарыма һөйләп бирергә уйлағайным, — тигән.

— Һөйлә, тик урлашма, — тигән батша.

— Юҡ, мин урлашманым. Мин алдым ғына. Башҡорттарҙы яратҡан өсөн ошо алтын табаҡ менән алтын ҡалаҡты батша үҙе бүләк итте, тип, күрһәтергә алдым. Үҙҙәре тотоп ҡарамайынса, улар ышанмай бит.

Ҡоломбәттең сослоғон, зирәклеген батша бик тә оҡшатҡан. Илселәрҙең бөтәһенә лә берәр алтын табаҡ менән берәр алтын ҡалаҡ бүләк иткән. Шулай итеп, улар ергә мәңге хужа икәнлектәренә грамота, өҫтәүенә батша ҡулынан алтын табаҡ та алып ҡайтҡандар, ти.

## 233. ИЛСЕКӘЙ ВАҠИҒАҺЫ

Илсекәй Буралы улы Шаҡмановҡа бер ваҡыт яуға барған башҡорттар менән бергә яланда ҡунырға тура килә. Шул ваҡыт йыйылышып ултырғанда һөйләшәләр: «Бөгөн аттарҙы кем көтә, кемгә сират?» — тиҙәр. Араларынан Һунаҡ тигән бер кеше уйнатып: «Илсекәй ағайыма сират», — ти. Илсекәй уларҙың хандары була, башлыҡтары. Һунаҡтың ошо һүҙен ишетеү менән Илсекәй: «Ярар, мин сығырмын», — ти ҙә, уҡ-һаҙағын алып, ат көтөргә китә. «Миңә алмашҡа ярты төндән Һунаҡты ебәрерһегеҙ», — тигән ул. Баш-

ҡалар был эшкә ғәжәпләнеп ҡалып, һунаҡты орошалар һәм ярты төндә уны уяталар: «Бар, мал көтөргә», — тиҙәр. Һунаҡ йоҡонан тороп китеп, мал яғына барып етә лә тауыш бирә: «Илсекәй, һин ҡайҙа?» — ти. Илсекәй: «Мин бында, Һунаҡ, һинме, килдеңме?» — ти. «Мин килдем», — тигән була Һунаҡ. Илсекәй уҡ-янын алып, Һунаҡтың күкрәгенә төҙләп атып ебәрә. Уҡ уның күкрәген ярып сығып та китә. Һунаҡ аунап ҡала. Илсекәй иптәштәре янына ҡайта. «Бар, ана, малды ҡарағыҙ», — тип әмер бирә. Уйнатып һүҙ һөйләгән өсөн Һунаҡ меңкен донъянан күсә.

## 234. АҠАЙ БАТЫР

Аҡай[1] яу башлығы булған. Беҙҙең яҡтарға Минзәлә тирәһенән килгән. Мин бәләкәй саҡта уның тураһында йыраусылар думбыра сиртеп, гөслә уйнап бирәләр ине. Хәҙер ундай йыраусылар бөткән инде. Наурузсылар ҙа күптән юҡ.

Был Аҡай тигән кеше бик батыр булған, ти. Уны уҡ та алмаған, ҡылыс та киҫмәгән. Мылтыҡтан атһалар, пуля теймәгән, һыуға төшһә, һыуға батмаған, тәрән упҡын аша атлап сыға ла китә, ти, был. Дошман ғәскәрҙәре менән һуғышҡандан һуң ҡағынһа, тимер көпөһөнән пуль ергә шыбыр-шыбыр ҡойола, ти. Батшаның эфисәрҙәре, түрәләре менән оҙаҡ ҡыйышҡан ул. Ҡандракүл тирәһендә лә ҡаты орош-һуғыштар була. Өфө яғында ла, унан ары Иҙел буйында тоҙло инештәр аҡҡан ерҙә[2] батша ҡорғандарын алыр өсөн ҡаты һуғышалар. Мәгәр ҡорғандарҙы халыҡ ала алмай. Яу еңелә, иң аҙаҡтан Аҡай бер үҙе ҡалып, күл буйында оҙаҡ ҡына алыша. Бик арығас, һыуға атлап керә лә китә. Артынан инергә тиеп ынтылып ҡарайҙар — булмай. Һалдаттар бата, ә Аҡай батыр баҫып тик тора, ти. Аталар, аталар — теймәй. Шунан батша ғәскәрҙәре башлығы Тәфтиләү[3] мундир төймәләрен өҙөп ташлай, асыуланып мылтыҡ ҡора ла атып ебәрә. Аҡай һыуға йығыла.

Иллә-мәгәр Аҡай аяҡтан йығылһа ла, күл уны йотмай. Әкрен генә тирбәткәндәй итеп, тулҡындар уны икенсе яҡ ярға алып сығалар. Күлдең икенсе яғында уны аты көтөп тора икән. Шул ат хужаһының һушына килгәнен көтөп тора ла урманға алып ҡаса.

Тик Аҡай батыр рәхәт күрә алмай, яраһын дарыулайбыҙ тигән булып, тилебәрән биреп, аҡылдан яҙҙыралар уны. Шунан ул йорт-илде хәүефкә төшөрөп, еңләнеп йөрөй. Аҙаҡтан аҡылға килеп, ни эшләгәндәрен төшөнгәс, бик үкенеп, арҡандың бер башына атын, икенсе башына үҙен аҫып үлә[4]. Ана шул күлде Аҡайкүл ти икән халыҡ.

Яуҙар элек күп булған ул. Һиммәт түрәләр, батырҙар ҙа күп булған халыҡта. Халыҡ берҙәм булып «бер үреккә кереп» бөтәлмәгән. Ҡорал да таҡы-тоҡо. Уҡ, ҡылыс та һөңгө, айбалта. Ә батша ялсыларында мылтыҡ та буйтым, ат мылтығы — туп та бар. Бар, сәкәшеп ҡара. Еңә буламы айбалта суйын тупты?..

## 235. ҠАРАС МЕНӘН ҠАРАҺАҠАЛ

Ҡараһаҡал[1] килеп, башҡорттар араһына ингәс, түбә-түбә ҡарттарҙы, уҙамандарҙы, аҡһаҡалдарҙы йыйып һөйләшкәндә, аранан берәү:

— Яу эше, дау эше, ике яҡлы була торған. Әле бында килгәндәр аҙ. Меңгә баш булып, Димде һыулаған, хандар менән сайҡашып, илен-һыуын ташлап Уйташта өй теккән Ҡобағош сәсәндең[2] ярсығы Ҡарас сәсән бар. Ул Иҙел башы Ирәмәлгә, Яйыҡ буйы Уйташҡа баш, уға һүҙ һалырға кәрәк. Ҡасһаң-боҫһаң урман, ҡая кәрәк. Ул ҡая, урмандың атаһы, — тигән, ти.

Ҡарасты таныусы кеше булмаған. Ул үҙе лә шунда булған икән. Ҡарас ырғып тороп:

— Ат тирләтеп йөрөмәгеҙ, мин бында, — тигән.

Һораша башлагас, Ҡарас былай тип яуап биргән:

— Дау — ирҙеке, яу — илдеке. Берәй бәләкәс нәмә өсөн генә һүҙем кәрәк булһа, әйтер инем. Яу өсөн ил кәрәк, ил өсөн һүҙ әйтә алмайым.

Берәү тороп әйткән:

— Ҡырҡ кеше — бер яҡ, ҡырын кеше — бер яҡ тигәндәй, ҡарышма, Ҡарас! Һин — ил теле.

Ҡарас әйткән:

— Дөрөҫ әйтәһең! Ил ауыҙын асһа, мин — тел, һөйләйем. Шунда ла ил ауыҙын асырмы икән? Уралда йәшәйем, ҡамсы һабына ҡырҡып алыр тал юҡ. Ҡамсыһыҙ яуға барырҙармы икән?

Шунан Ҡараһаҡал тороп былай тигән:

— Һине ил ағаһы, тинеләр. Аҡыллы һүҙ көттөләр. Ә һин бөтөнләй бушты һөйләйһең. Уралда ҡамсы һабына яраралыҡ тал табылмаймы?

Ҡарас әйткән:

— Талы күп тә ул Уралдың. Тик, ҡырҡа башлаһаң, ҡан сыға. Унан һуң Уралдағы мәмерйәләр эсенә бүреләр инеп көсөкләгән. Аттарҙың ҡолағына ин һалғандар, боттарына тамға баҫҡандар. Төндә өрөр эттәр үлтерелгән. Ә һуң ямау һалыр кейем бармы? Уныһын да белеп булмай. Ағас башына ҡор ҡунмаған бит әле, уҙамандар. Ярай, ҡайтып һөйләшеп ҡарармын.

Бөтәһе лә аптырап ҡалған. Берәү ҙә яуап бирмәй, ти. Ҡарас үҙе тороп, сығып киткән.

Шунан тауыш ҡупҡан. Ҡайһылары әйтә: «Был Ҡарас аҡылдан шашҡан!» Ә ҡайһылары әйтә: «Был беҙҙе мыҫҡыл итә», — ти.

Аранан берәү тороп тегенең йомоҡ телен сисеп биргән:

— Юҡ, уҙамандар, Ҡарас дөрөҫ һөйләне. Һеҙ үҙегеҙ ҡыйыш аңланығыҙ. Талды ҡырҡһаң, ҡан тама тигәне — Урал урмандары яуҙарҙа аҡҡан халыҡ ҡаны менән һуғарылған тигән һүҙ була. Аттарҙың ҡолағына ин һалынған, боттарына тамға баҫылған тигәне — бөтә еребеҙ билдәле, ҡайҙа барһаҡ та, тотҙрҙар тигән һүҙ була. Төндә өрөр эттәрҙе үлтергәндәр тигәне — үткән яуҙа ҡатнашҡандарҙы язалап бөткәндәр була. Ағас башына ҡор ҡунмаған тигәне — яуҙан һуң ҡасып йөрөүселәр илгә ҡайтып бөтмәгән

була. Ә ямау һалыр кейем бармы тигәне — килгән ҡунаҡ (Ҡараһаҡал) сит кеше, беҙҙең илгә ямаулыҡтай ғына буласаҡ тигән һүҙ була.

Уҙамандар Ҡарастың һүҙҙе йомоп һөйләй алыуына һоҡланып ҡалғандар.

## 236. ЕР ҺАТЫУ

Бер рус баяры башҡорттарҙан ер һатып алырға килә.

— Күпме аҡса бирәһең? — тип һорай былар баярҙан.

— Йөҙ тәңкә бирәм, — ти баяр. — Күпме ер бирәһегеҙ һуң?

— Бер көн эсендә үҙең күпме ер күрәһең, шунса алырһың. Тик ат менән түгел, йәйәүләп йөрөргә, — тиҙәр башҡорттар.

Урамға сығарып межа ҡуялар. Баяр йүгерә-йүгерә сығып китә. Әй йүгерә икән был, әй йүгерә икән. Барған һайын ер яҡшы. Ҡыҙыға был, күберәк алып ҡалайым тип тырыша. Көн эҫе, ти. Йүгереп бара ла тирләп-бешеп һыу эсә икән. Шулай йүгерә торғас, хәлдән тайып, ауырып китә лә шул ерҙә үлеп ҡала.

## 237. БАЙЫМДЫҢ ЕР ҺАТҠАНЫ

Хәҙерге Белорет ҡалаһының дәүләт банкыһы ултырған ерҙә ҡасандыр Байым тигән башҡорттоң тирмәһе торған, ә уның тирәяғында көтөүлектәре йәйелеп ятҡан.

Бер ваҡыт Твердышев [1] тигән урыҫ сауҙагәре бер тутәрәм икмәк, бер ҡула-ҡаҙан менән бер балта хаҡына Байымдан үгеҙ тиреһендәй генә ер [2] биреүен һораған.

Байым, үгеҙ тиреһендәй генә ер булдымы, тип уйлаған да, риза булған. Үҙе, оттом быны, тип көлә икән. Шунан былар килешеү төҙөгәндәр. Ә Твердышев үгеҙ тиреһен ҡылдай ғына итеп телгән дә, Байымдың әллә ни саҡлы ерен уратып алған. Аҙаҡ ошо ергә завод һалдырып, Байымдың үҙен дә йәйләүенән ҡыуып ебәргән.

Белорет заводы һалынған ерҙе әле оҙаҡ ваҡыт Байым тархан ере тип йөрөткәндәр. Ә Байым үҙе, Уралтау аръяғына күсенеп, хәҙерге Байым ауылы [3] ерендә төйәкләнгән.

## 238. БАЯРҘЫҢ ЕР АЛҒАНЫ

Борон башҡорттар ергә бай булған. Беҙҙең юрматыларҙың да Ашҡаҙар буйында ере-һыуы, болонлоғо күп булған.

Бер мәл шулай беҙҙең Бүжә ауылына бер барин килеп төшә. Ауыл ҡарттарын саҡыртып ала ла:

— Мин ер һатып алырға килдем. Иртәгә сход йыйығыҙ, — ти.

Иртәгеһен ауыл халҡы барсаһы ла сход майҙанына йыйыла.

— Ағай-эне, мин һеҙгә аҡса бирәм, давай, миңә ер бирегеҙ, — ти теге барин.

Халыҡ гөжләп ала. «Беҙҙең еребеҙ үҙебеҙгә кәрәк, һатмайбыҙ!» — тиҙәр.

Шунан теге барин кеҫәһенән мөһөрлө ҡағыҙ килтереп сығарған да әйткән:

— Бына күрәһегеҙме, — ти ул, — батша миңә үҙе бирҙе һеҙҙең ерҙе. Асыуҙы килтерһәгеҙ, бөтөнләй бушҡа аласаҡмын,— тип осонған.

Халыҡ аптырап ҡалған.

— Барыбер алыр, исмаһам, сәй-шәкәрлек аҡсаһын мөнтәйек,— тип уйлағандар.

Барин әйткән:

— Ҡурҡмағыҙ. Мин күп алмайым, — тигән. — Миңә бер үгеҙ тиреһе тиклем ер етә.

Ҡарттар шунан риза булғандар. Бер үгеҙҙе килтереп һуйғандар. Барин тиреһен алған да нәҙек кенә итеп сей ҡайышҡа ярған. Шул ҡайыш һуҙылғансы ерҙе ҡаҫырын алған да ҡуйған.

Иҫкесәк, Бүжә[1] ауылдары баринға бына шулай төшкән.

## 239. БАЙҘАРҘЫҢ ЗАВОДСЫЛАРҒА ЕР ҺАТҠАНЫ

Был хаҡта миңә атайым һөйләй торғайны, ә атайым үҙенең олатаһынан ишеткән булған.

Үҙәндәге суйын ҡойоу заводының хужаһы үҙе гел Мәскәүҙә йәшәй, ә заводтың бөтә эштәрен управляющийы алып бара икән. Был башҡорттарҙан ер һатып ала, завод ерҙәрен киңәйтә, алыш-биреш итә.

Ер һатыуҙа бигерәк тә Ҡоҙашман байҙары Байсура, Ҡолсура, Ишхужаларҙың даны сыҡҡан була. Улар бөтәһе лә, элек сотник булып хеҙмәт иткәнлектән, рус телен яҡшы беләләр, завод управляющийы менән һин дә мин һөйләшеп, аҡсаны йөгө-йөгө менән ҡайырып алып ҡайталар.

Ә халыҡтың ере кәмегәндән-кәмей бара. Бының өҫтәүенә ҡоролоҡ булып, илдә йотлоҡ башлана. Шуны ғына көтөп торғандай, завод управляющийы килеп төшә лә бөтә башҡорттарға ла аҡса таратып бирә: ҡайһыһына — 5, ҡайһыһына — 10, ә ҡайһы беренә 20 һумы ла эләгә. Һәр кеме аҡса алғанлығына ҡултамғаһын һалып бара. Ә завод хужаһы аҙаҡтан был ҡағыҙҙы ер һатҡанлыҡҡа килешеү ҡағыҙы тип батшаға күрһәтә икән.

Батшаға нимә? Һатҡанмы — һатҡан, ер һинеке, ти. Шулай итеп, халыҡ әллә ни саҡлы еренән ҡолаҡ ҡағып ҡала. Аҙаҡ эштең ниҙә икәнен һиҙеп ҡалһалар ҙа, инде эш үткән булып сыға. Шуға ла ҡарамаҫтан, Ишхужа староста ер межаһын тағы ун саҡрымдай беҙҙең ауылға табан күсертеп ҡуя.

Бына шунан бирле инде беҙҙең ерҙәр Үҙән заводына тороп ҡала.

## 240. ШАРЛЫ УРМАН

Беҙҙең яҡтарҙа Йайыҡһыбы ырыуы[1] башлығы Йайыҡһыбы ҡарт хаҡында элгәрерәк бик күп һөйләй торғайнылар. Хәҙер ҡарттар аҙайғас, онотолоп бара инде.

Йайыҡһыбы нәҫел-нәсәпле, заманында бик абруйлы кеше булған. Уның уландары ғына һигеҙгә еткән: Ҡармыш, Сураҡай, Сурай, Әлшәй, Ташлы, Аҡколай, Ҡайып, Дүртөйлө, Йайыҡһыбы ҡарттың һигеҙ улына һигеҙ ауыл булған. Был ауылдар әле лә шул уландар исеме менән йөрөтөлә.

Бер саҡ ырыу башы, бер татарҙы тәржемәсе итеп яллап, Петербурға яһаҡ тапшырырға ебәрә. Был татар үҙен Йайыҡһыбы ҡарттың туғыҙынсы улы тип күрһәтеп, Туҡтар-Әбдрәшит тип яҙҙырып ҡайтҡан. Шуға был татарҙар араһы башҡорттарҙың мең ырыуына туғыҙынсы ауыл булып игәндәр.

Туғыҙ ауыл һуғышҡа, яуға һәр ваҡыт әҙер торған. Ағай-энеләр ҙә берҙәм, татыу йәшәгән. Тик бер заман әллә ни урыҫ баярының хәйлә тоҙағына эләгеп, ағай-энеләрҙең өсөһө, бер булып, Шарлы урманын[2] һатып ҡайтҡандар. Ҡалғандары быға бик әрнегән. Урманынан ҡолаҡ ҡаҡҡан халыҡ йыр сығарған:

Шарлы урманҡай тигән урман ҡайҙа?  
Ҡайҡымбирҙе[3] кеүек һыу ҡайҙа?  
Шарлы урманҡай беҙҙән китте инде,  
Кинәнеп һурып эсергә бал ҡайҙа?  
Шарлы урманҡайҙарҙың уртаһында  
Ҡушылып-боролоп үҫкән бер уҫаҡ,  
Шарлы урмандар беҙҙән китмәҫ ине,  
Бөтә Йайыҡһыбы бер булһаҡ.

## 241. ЫСПРАУНИК

Әлеге Архангель районындағы туғыҙ ауыл башҡорто үҙҙәренең Буләҙе тигән ерен Сафронов тигән баярға һатҡан. Сафронов шул ерҙе бүлеп алыу өсөн землемер килтергән. Оҙонлар ауылынан Ғәйнетдин исемле бер егет иптәштәре менән ҡаршылыҡ күрһәткән. Ыспрауниктар, урәтниктәр был ҡаршы кешеләрҙе ҡыуып ҡайтарғандар. Шунан был Ғәйнетдин ыспрауниктың ауылға ҡайтҡанын күҙәтеп тороп, быға тәҙрә аша мылтыҡ менән атҡан. Ғәйнетдинде ҡулға алып, төрмәгә оҙатҡандар. Төрмәгә киткәндә уны оҙатҡан халыҡ алдында Ғәйнетдин былай тип йырлаған:

Ыспрауник килгән, әй,  
илдәргә,  
Туғыҙ ауыл ерен бүлергә.  
Йөрәкле лә ирҙәр ҡаршы сыҡты  
Үҙ яҙмышҡайҙарын күрергә.

## 242. УТӘГӘН

1812 йылда хеҙмәттә батырлыҡтар күрһәткән өсөн Утәгән тигән ҡартҡа хәҙерге Ҡырмыҫҡалы районы ерҙәрен алырға рөхсәт итәләр. Утәгән ҡарт үҙенә крәҫтиәндәр йыя: татарын да, башҡортон да, сыуашын да. Ул 8 тин хаҡ менән (5 тин ер хаҡы, 3 тине Утәгән ҡарттың файҙаһына яһаҡ) ер һата.

Утәгән ҡарттан ер һатып алыу мөмкинлеген ишетеп, Ҡазан губернаһы Мамадыш өйәҙенән Ишекәй, Иштуған, Ишбирҙе исемле өс туған Иҫке Ҡыйышҡыға [1] килеп төшәләр. Ишекәй менән Ишбирҙе Утәгәнгә ылаусы булып ялланалар.

— Ылаусы булған өсөн күпме түләргә? — ти Утәгән ҡарт.

— Һыйыр тиреһе ҙурлығы ер бирһәгеҙ етер, беҙ улай ҡанһыҙ түгел, — тиҙәр Ишекәй менән Ишбирҙе.

Бер йыл ылауҙа сапҡас, быларҙы бәхилләргә кәрәк бит инде. Ишекәй һыйыр һуя, тиреһен ҡаҙанға һалып ебетә, киреп, һуҙып киптерә лә, өҙмәйенсә генә шырпы ҡалынлығында ҡырҡа бара, ҙур кәтүккә урай бара. Кәтүкте киптерә лә, бураһынан сығып нескә ҡайышты һуҙа. Эй һуҙа был, эй һуҙа, Утәгән ҡарт әйләнеп ҡараһа, бер ауылдың ере киткән дә ҡуйған теге Ишекәй ҡулына. Ҡаран [2] ауылы бына шунан тороп ҡалған.

## 243. МОРҘАҒОЛ

Элекке ваҡытта беҙҙең ауыл ултырған урында кеше үтмәҫлек ҡара урман үҫкән. Хәҙерге Белорет ҡалаһы урынында башҡорт ауылдары булған. Ауыл эргәһендә урман байлығы тулып ятҡан. Ҡусатыр яғынан хөкүмәт кешеләре килгән. Улар, урмандарҙы ҡарап, ерҙе тикшереп ҡайтҡас, батшаға доклад яһағандар. Батша был ерҙәрҙе башҡорттар ҡулынан тартып алырға уйлаған. Бер ваҡыт кузнислыҡ эшен белгән бер бай килә лә халыҡҡа әйтә: «Ерҙе һатығыҙ, — ти был, — күрәһегеҙме, — ти. — Һеҙҙең бөтә нәмәгеҙ ағастан эшләнгән. Ағас тиҙ ватыла ул. Кузнис төҙөһәк, тәгәрмәсегеҙ тимер булыр, ныҡ булыр. Һеҙгә әйбер эшләгән өсөн хаҡ алмам», — тигән.

Аҡһаҡалдар кәңәш тотҡандар. Ерҙе һатырға булғандар, шулай ҙа күп түгел. Кузнис һорағанса үгеҙ тиреһе тиклем генә. Бай риза булған. Шунда уҡ килешеү яһап, тамға һалғандар.

Башҡорттар, үгеҙҙе һуйып, бишбармаҡ бешерергә һалғандар. Ит бешкәнсе, уйын-көлкө булған. Уйын-көлкөнән һуң ит ашарға ултырғандар. Шул ваҡытта кузнис үгеҙ тиреһен нәҙек кенә телгеләп ташлаған да оҙон итеп һуҙып ебәргән. Тире хәҙерге Белорет ҡалаһынан Әҙекәй ауылына тиклем һуҙылған. Дүрт яҡты ла урап алған. Башҡорттар аптыраған. Шулай ҙа бер нәмә лә эшләй алмағандар, килешеүгә ҡул ҡуйылған бит инде.

Ете-ун көн үткәс, тағы теге кузнис килә. Үҙе менән юҡ-бар әйбер алып килеп, башҡорттарға тараткан. Даға, суйын һәм башҡа бүтән әйберҙәр биргән дә был тағы ла хәйлә ҡора башлаған.

Башҡорттарҙа ул саҡ тирмән-фәлән булмаған, тик ҡул тирмәне генә бар. Был кузнис әйтә: «Давай, йылғағыҙҙа тирмән ҡорайыҡ, бына хәҙер иген етер, уны тарттырып он итергә кәрәк». Күҙгә тирмән әҙер булған. Теге һаман башҡорттарҙан хаҡ алмай икән.

Бер ваҡыт был байға батшанан әмер килә: завод төҙөргә. Бай әйткән: «Тимер эшләһәк, хужалығығыҙ нык булыр, — тигән, — завод төҙөйөк», — тигән. Эш башларға тотонһа — һатып алған ерҙәре етмәй, ти. Был тағы батшаға мөрәжәғәт иткән. Батша башҡорт ерҙәрен һатып алырға ҡушҡан. Тәүҙә аҡһаҡалдарҙы саҡырып алып һөйләшкәндәр, аҡһаҡалдар әйткән: «Халыҡ менән һөйләшмәйенсә, ерҙе һатмайбыҙ», — тигәндәр. Халыҡ ерҙе һатырға риза булмаған. Батша менән байҙар ҡаты торғандар. «Әгәр ерегеҙҙе һатмай икәнһегеҙ, беҙ тартып алабыҙ», — тигәндәр. Хәҙерге Белорет заводы урынына бер нисә өй һалғандар. Башҡорттар тәүҙә был урынды «дәрәүәшкә»[1] тип йөрөткәндәр.

Бер нисә ай үткәс, халыҡты тағы саҡыртҡандар. Быныһында инде башҡорттар бармаған. Шунан байҙар башҡорттарҙы тыуып үҫкән ерҙәренән ҡыуырға, ерҙәрен тартып алырға булғандар. Ауылға атлы казактар килгән. Бәрелеш башланған. Ҡазактар бик күп булған. Башҡорттарҙы туҙҙыра башлағас, Әбйәлил, Учалы, Бөрйән башҡорттары, төрлөһө-төрлө яҡҡа китеп, үҙҙәренең айырым кантондарын төҙөгәндәр. Шул башҡорт тоҡомдарынан сыҡҡан да инде Учалы, Әбйәлил, Бөрйән халыҡтары.

Ҡазактар башҡорттарҙы хәҙерге Белорет ҡалаһындағы Нура йылғаһы аръяғына ҡыуып сығарғандар. Халыҡтың үҙ ерҙәренән киткеһе килмәгән. Башҡорттар араһында Морҙағол ҡарт та булған. Уның да киткеһе килмәгән. Шулай тартҡылаша торғас, самалап 1707—1712 йылдарҙа, башҡорттар менән рус байҙары араһында һуғыш ҡуба. Башҡорттар урман, тауҙар араһына инеп боҫалар. Морҙағол ҡарт арттаныраҡ килә икән. Эргәһендә ҙур үгеҙе килә, ти, бының, ике ҡыҙы — Шәрбоҫтан менән Гөлбоҫтан исемлеләр — бара, ти. Янында бер ҙур һаҙағы булған ун туғыҙ уҡ һыйышлы.

Морҙағол ҡарт арып киткән дә ял итергә ятҡан. Шул ваҡытта казактар әлеге ҡасып киткән халыҡты эҙләп йөрөй икән. Бер нәмә лә тапмайынса, былар ашарға ултырғандар. Шул саҡта Морҙағол ҡарттың үгеҙе аҡырып ебәргән. Атлы казактар: «Башҡорттар бында икән», — тип, эҙләргә сыҡҡандар.

Морҙағол ҡыҙҙарын йәшереп ҡуйған да әйткән: «Мин нисек кенә ҡысҡырһам да, урынығыҙҙан сыҡмағыҙ, — тигән, әгәр мин үлһәм, бер ҡайҙа ла күсермәгеҙ. Ҡайҙа үлеп ятам, таштан бура бурап, шунда күмегеҙ», — тигән.

Морҙағол ун туғыҙ уғын эргәһенә һалып ҡуйған, казактарҙы һанап сыҡҡан, тегеләр бөтәһе егерме кеше икән. Ҡазактар тик һөңгө менән ҡоралланған булғандар. Морҙағол атҡан һайын бер ҡаҙаҡ йығылған. Ата-ата ул ун ете казакты үлтергән. Ун һигеҙенсе уғы ла бушҡа китмәгән. Бер уғын атмайынса ҡалдырып торған. Иҫән ҡалған ике казак Морҙағолға ҡаршы килә башлаған. Ә уның уғы берәү генә. Морҙағол береһен үлтергән, икенсеһенә

батманын алып орған. Батманы казактың һөңгөһөнә тейеп, ситкә тайпылып киткән. Шул ваҡытта казак Морҙағолдоң эсенә һөңгө менән сәнскән. Морҙағол үлгәндән һуң казактар бүтән килмәй башлағандар [1].

## 244. ТИМЕРСЕ ӘМИН МЕНӘН БРАГИН ТҮРӘ

Ҡасандыр Баймаҡ яғына Брагин тигән ҙур бер түрә килеп төшә. Уны һалдаттары ҡарауыллап йөрөй икән. Был түрәгә бәҙҙең ер-һыуҙар, урмандар, көмөш балығы тулы Һаҡмар буйҙары, аҫыл таштары көнгә балҡып ятҡан Яғалса, Ирәндек тауҙары, бигерәк тә тал-ҡамыш меңән уратып алынған Талҡаҫ [1] күле оҡшап китә. Был байлыҡтарға хужа булғыһы килә бының. Күп тә үтмәй, ул ошо башҡорт ерҙәрен тартып ала. Брагин бының менән генә ҡалмай, күҙе төшкән һәр ҡыҙҙы тотоп мыҫҡыл итә башлай.

Хәҙерге Әмин ауылы ултырған Яғалса тауы аҫтында Әмин тигән тимерсе йәшәй икән. Ирәндек аръяғында ла, Уралтау аръяғында ла оҫталығы менән уға тиңләшерҙәй башҡа бер кем дә булмай. Булат ҡылыстар ҡойҙорорға тирә-яҡ батырҙары уға ғына килер булған. Брагинға был бик оҡшап етмәй: халыҡ, ҡоралланып алып, бола ҡуптарыр, тип ҡурҡа был. Тирә-яҡта дапы сыҡҡан тимерсене ҡулға алып, хибескә яптырып ҡуя.

Берҙән-бер көн Брагин ошо ерҙә бик ҡаты нығытма һалдырырға уйлай. Ә бының өсөн таш аҡтартырға кәрәк була. Был шунда Әмин тимерсегә килә лә ҡая тауҙың ташын киҫерҙәй бик үткер ҡылыс ҡойорға ҡуша. Әминде тимерлегенә килтертеп, Брагиндың үҙ күҙе алдында ҡылыс ҡойҙорталар. Ҡылысты һынап ҡараһалар, ҡылыс ташты киҫмәй ҙә ҡуя икән. Әмин икенсеһен ҡоя. Быныһы ла ташҡа үтмәй. Брагин бик ныҡ асыуланып Әминде ҡурҡыта. Әмин батыр, бик оҙаҡ уйланғас, тәүәккәлләргә була. Бына тигән булат ҡылыс ҡойоп бирә. Ҡая янына барып, ҡылысы менән бар көсөнә кирелеп сапһа, таш быяла һымаҡ ҡап уртаға ярылып китә.

Брагин, ҡулына шундай ҡылыс килеп эләгеүенә бик шатланып, Әминде иреккә сығара, уға ҡиммәтле бүләк бирә. Ә аҡыл эйәһе аҡһаҡалдар Әминде әрләйҙәр.

— Һин ни эшләнең, батыр? — тиҙәр улар. — Былай ҙа халыҡ был ҡәһәр һуҡҡыр түрә арҡаһында зар илай. Ә инде ул Һаҡмар буйына таш нығытма ла һалдырһа, илгә оло ҡаза киләсәк. Ул саҡта бөтөнләй һәләк булырбыҙ, — тиҙәр.

Әмин уларға әйткән:

— Юҡ, был хәл булмаясаҡ! — тигән.

Башҡа бер һүҙ ҙә әйтмәйенсә, ул кинәт кенә юлға сығырға булып, тиҙҙән Яғалса тауын артылып, күҙҙән дә юғала.

Ул Брагиндың Талҡаҫ күле буйында һалдаттары менән балыҡ тотоп, өйрәк атып, кәйеф-сафа ҡороп ятҡанын белгән була. Әмин батыр туп-тура шунда юл тота. Күл буйына килеп етһә, Брагиндың Талҡаҫ уртаһында кәмәлә балыҡ ҡармаҡлап улты-

рыуын күрә. Әмин шунда, тиҙ генә әҙернә йәйәһе менән алмас башаҡлы уғын алып, атып та ебәрә. Уҡ, кәмәнең төбөн аҡтарып, күл төбөнә барып ҡаҙала. Брагин ни булғанын иҫләп ҡысҡырырға ла өлгөрмәй ҡала, һыу тулған кәмә бата ла башлай. Аръяҡ ярҙан ярҙамға ташланалар. Тик инде һуң була! Йыуан ҡорһаҡ Брагин йөҙөргә лә белмәй икән. Шулай ҙа, ауыҙына һыу уртлап, күл төбөнә киткәнсе, бармағынан ҡиммәтле балдағын сисеп, һыуға ташлап өлгөрә. Уның ниңә шулай эшләгәнен бер кем дә белмәй.

Брагиндың мәйетен һыу төбөнән табып сығаралар. Аҙаҡ кәмәһен дә табалар. Ҡараһалар, кәмәнең төбө аҡтарылып киткән була. Ни аҡтарғанын берәү ҙә белмәй. Һыу төбөн һөҙөп ҡараһалар, алмас башаҡлы башҡорт уғы килеп сыға. Брагиндың бөтә командаһы мәйет тирәһендә ығы-зығы килгәнсе, Әмин тиҙ генә икенсе яҡ ярҙағы Брагин өйөнә инеп, үҙе ҡойоп биргән булат ҡылысын алып та сыға. Ҡылысты күл төбөнә ырғыта ла кире ауылына табан һыҙа.

Брагин ҡатынының әмере буйынса, түрәләр Әмин менән бергә бөтә башҡорт егеттәрен ҡулға алып, алмас башаҡлы уҡтың кемдеке булыуын белергә тырышалар. Берәү ҙә әйтмәй. Белә алмағас, Брагин ҡатыны ҡулға алынғандарҙы аҫырға ҡуша.

Ҡарт аҡһаҡалдар кәңәш-төңәш итешеп алалар ҙа был ҡатынға килеп:

— Беҙҙең егеттәрҙе харап итмәгеҙ, — тиҙәр, — уларға әле йәшәргә, ил һаҡларға, Аҡ батшаға яһаҡ түләргә кәрәк. Брагинды улар түгел, бына беҙ үлтерҙек, — тиҙәр.

Килгән аҡһаҡалдар дүртәү була. Уҫал бисә уларҙы бик оҙаҡ интектерә. Күпме генә төпсөнһә лә, ҡарттар үҙ һүҙҙәрендә ныҡ тора. Аҡһаҡалдарҙың дүртеһен дә Иҫән йылғаһы ярындағы йөҙйәшәр дүрт ҡарағасҡа илтеп аҫалар. Ә егеттәр үҙ ауылдарында тороп ҡала. Брагиндың ҡатыны, ҡурҡыуға төшөп, һалдаттары, офицерҙары менән кире Питербурға ҡайтып китә лә башҡаса был яҡтарға аяҡ баҫмай.

Батыр тимерсе хөрмәтенә ул йәшәгән ауылды халыҡ Әмин ауылы тип йөрөтә башлай, булат ҡылысы менән уртаға ярған ташты Әмин ташы тип атайҙар.

Талҡаҫ күле, имеш, Ирәндек һырты аҫтынан ағып ятҡан йылға аша Серекҡүлгә[2] барып тоташҡан икән. Ысынмылыр, юҡмылыр — Брагиндың балдағы, күп замандар үткәс, ошо Серекҡүлдә тотолған бер суртан эсенән килеп сыҡҡан, тиҙәр.

## 245. СУРАШ

Элек беҙҙең ерҙәрҙә Питербурҙан килгән Брагин тигән бер уҫал урыҫ байы булған. Уның һалдаттары ла булған. Тегене гел һаҡлап ҡына йөрөйҙәр икән.

Брагин аҡ таш ҡаҙҙыртҡан. Халыҡты бушлай эшләтеп бик йонсотҡан. Өҫтәүенә, ҡатын-ҡыҙҙарҙы мыҫҡыл итеп, халыҡтың

йәненә тейгән. Ҡейәүгә сығыр алдынан һәр бер ҡыҙ Брагин менән төн уҙғарырға тейеш булған. Әгәр риза булмаһалар, ҡыҙҙы ла, егетте лә, ата-әсәләрен дә һәләк иткән.

Бер көн ауылдың уҙамандары:

— Был Брагиндың осона сығайыҡ, — тип кәңәш итәләр.

Унда Әмин, Сураш батырҙар була. Сураш — Әминдең ағаһы. Сураштың яурыны алты сирек була.

— Брагин йәкшәмбе һайын Талҡаçҡа балыҡ аулай бара. Шунда беҙ уны ҡаплайыҡ, — ти Сураш.

Былар йыйылышып баралар. Сураш әйтә:

— Һеҙ күренмәгеҙ, мин эргәһенә барайым, — ти. Үҙе Брагин эргәһенә килә.

— Сураш, ни өсөн килдең? — тип һорай Брагин.

— Бына балыҡ ашай килдем, — тип әйтә Сураш.

— Балыҡ ашай килгәс, төш, — ти Брагин быға, — һин бик үҙгәреп килгәнһең, — ти.

Сураш балыҡ ашарға ултырҙы ла усы менән маңлайын һыпырҙы, ти. Шул саҡ эргәһенән генә шыйылдап уҡ үтеп китте, ти. Теймәне, ти.

— Ай, Сураш, һин мине үлтерергә килгәнһең икән, — тип, Брагин һыҙмаһына йәбешә. Сураш һыҙманы һыпыра тартып алып өлгөрә. Брагин кәмәгә ултырып, күлгә төшөп китә. Шул саҡ Сураш янын алып Брагинға ата[1]. Уҡ яурынды үтә сығып кәмәнең башын ярып ебәрә.

Брагиндың ҡулында өс бармаҡты ябып торған алтын балдағы була.

— Сураш, һин кинәнгәнсе, һыу кинәнһен, — тип, һыуға ташланы, ти, был балдаҡты.

Һалдаттар шул тирәлә икешәрләп, өсәрләп таралышҡан була. Берәм-берәм уларҙы ла үлтереп бөткәндәр. Ғауға ҡупҡан арала Брагиндың кухаркаһы һыуға төшөп, танауын өçкә күтәргән дә ҡамыш араһына ингән дә ятҡан, ти. Ыҙғышҡан арала форсат табып бер ҡара бейә менән көрән бейәгә менгән дә ҡасҡан. Артынан ҡыуғандар. Етеп барғанда, ярыштап торған атты менде лә тағы сапты, ти, был. Етә алмай кире ҡайтып киткәндәр ҙә кәңәш ҡорғандар: «Йә, былай булмай. Беҙ бынан шыуып ултырайыҡ», — тип уйлашалар. Шунан уи ике өй ҡалҡынып, Троицкий[2] аръяғына, Кустанай[3] яғына сығып китәләр. Бер мәл батшанан: «Брагин беҙҙең кеше түгел. Ул үҙе хөкөм сығарып, кешеләрҙе язалап ятҡан. Унан ҡасып йөрөгән кешеләр булһа, шул әүәл йәшәгән ауылдарына ҡайтһындар», — тигән әмер килә.

Шунан һуң ғына күсеп киткән халыҡ кире ҡайта. Бер аҙы Әминдә тороп ҡала. Сураш ҡарҙың иртә төшкән еренә күсә. Әлеге Иçән ауылында нигеҙ һала.

Сураш Истамғол улы була. Сураштан Йәрмөхәмәт, Йәрмөхәмәттән Ҡунаҡҡужа тыуа. Ҡунаҡҡужанан Хөсәйен, Йомағужа, Әбдрәхим, Хәмит, Байтүрә тигән биш улы була. Минең атайым Байтүрә була инде.

## 246. ҠИРӘЙ МӘРГӘН[1] МЕНӘН БРАГИН

Тау аҡтартып йөрөүсе Брагин бер ваҡыт Талҡаҫ күленә яҡынлыштан балдағын төшөрөп ебәрә. Шунан был күлдең бөтә һыуын һоҫоп алырға ҡуша. Юғалтҡан ҡиммәтле бүләген эҙләшергә тип приказчигын да ебәрә. Башҡорттар шулай күлдең һыуын түгә башлайҙар. Күлде бушата торғас, ҡарттар үлеп китә, йәштәр аҡ һаҡаллы ҡартҡа әйләнә, ә күл һаман кәмемәй ҙә кәмемәй икән, элеккесә мөлдөрәмә тулы булып тик ята, ти.

Бер саҡ күл буйына эштең нисек барғанын ҡарарға хужа үҙе килеп сыға. Ул ҡара күҙле, ҡыйғас мыйыҡлы бер егеттең улай ҙа былай буш күнәк менән йөрөгәнен күреп ҡала. Брагин унан, ни эшләп былай йөрөйһөң, тип һорағас, теге егет көләмһөрәп яуап бирә:

— Һинең әмереңде үтәп йөрөйөм, — ти икән.

— Исемең кем һинең, ялҡау? — тип һорай бынан Брагин.

— Исемем Мәргән булыр. Һин беҙгә иләк менән һыу ташырға ҡушҡайның, ә мин бына һауа ташыйым, барыбер түгелме ни? — ти егет.

Брагин уға ҡамсыһы менән һелтәнгән икән, Мәргән уны эйәренән тартып төшөрә лә, атына үҙе менеп, сабып китә лә бара, ти. Һаҡсыларының уның артынан мылтыҡ тоҫҡағанын күреп, Брагин:

— Атмағыҙ! Миңә икенсе ат килтерегеҙ ҙә, был атты мин уға бүләк итермен. Әйҙә ул минең ялсым булһын, — ти.

Мәргән был хаҡта ишеткәс, Брагинға килгән дә:

— Миңә бындай эш оҡшамай: күлдең һыуын бушатып бөтөрөп булмаҫ ул, — тигән.

— Ярай, улайһа. Бөтәһе лә ҡайтып китһен. Минең балдаҡты күл үҙе һаҡлар. Тик бынан һуң күлдән бер тамсы һыу алырға ла рөхсәт итмәйем, — тигән шарт ҡуйған.

Көн артынан көн үткән. Халыҡ һыуһыҙ интеккән. Мал-тыуар ҡырыла башлағас, күлдән тағы һыу ала башлағандар. Шул саҡ ауылға стражниктар килеп тулған. Брагиндың әмере буйынса, һәр өсөнсө кешене урамға алып сығып, ҡамсылап йөрөткәндәр.

Алыҫ юлдан ҡайтып төшкән Мәргән, быны күргәс, ярһып килеп етә. Килһә, былар бер ҡыҙҙы һөйрәп алып китергә яталар. Мәргән ҡысҡырған:

— Был минең кәләшем, ҡулығыҙҙы ла тейҙерәһе булмағыҙ! — тигән.

— Мәргән, — тигән шул саҡ Брагин. — Мин һине бығаса ғәфү итеп килдем, быныһы инде һуңғыһы булыр! — тигән.

Брагин хәйлә ҡора башлай. Бығаса ул туй алдынан һәр егеттең кәләшен үҙенә алып ҡайтып, мыҫҡыл итеп ҡайтара торған була. Мәргәндең кәләшен ул тартып алмай. Ҡейәүҙе аяҡтан йыҡҡансы иҫертә лә кәләште үҙенә алып ҡайтып китә.

Ҡәләше әйләнеп ҡайтҡас, Мәргән уны ҡыуып сығара ла үҙе тауҙар араһына ҡаса. Ҡыҙҙы атаһы йортонда ла ҡабул итмәйҙәр.

Шулай итеп, байтаҡ ваҡыт үтә. Брагин һаман, халыҡты ҡан

илатып, корота бирә. Тик тауҙар араһына ҡасҡан Мәргәндән генә шөрләп ҡуя.

Бер саҡ Брагин стражниктары менән Мәргәнде тоторға сыға. Ә Мәргән шуны ғына көтөп ята икән. Быларҙың килгәнен аңдып ҡына тора ла, уҡ менән стражниктарҙы берәм-берәм ҡырып һала. Брагин, ҡото осоп, күлгә табан йүгерә. Мәргәндең ҡыуып еткәнен күреп был тиҙ генә кәмәгә ултыра ла бар көсөнә ишә башлай. Мәргән уҡтан атып, кәмәнең төбөн аҡтарып ташлай ҙа, Брагин күл төбөнә китә. Күл бер болғанып тулҡынлана ла, тап-таҙа булып, тынып ҡала.

## 247. БАЙБУЛ СТАРШИНА МЕНӘН БРАГИН

Таш аҡтарыусы Брагин беҙҙең яҡтарҙа батша һымаҡ йәшәгән, бер кем менән дә иҫәпләшмәй, ни теләһә шуны эшләгән, тиҙәр.

Бер саҡ шулай Иҫәнбәт ауылынан Байбул старшина менән дуҫлашып ала был. Бер-берeһенә ҡунаҡҡа йөрөшәләр. Байбул быны, иң ҡәҙерле ҡунағы күреп, һый-хөрмәт итә: тәкә һуйып, бишбармаҡ бешертеп, ҡымыҙ менән һыйлай. Бер көн Байбул ҡыҙын кейәүгә бирәсәген, туйға әҙерләнеүен дә әйтеп һала. Шул саҡ Брагин, тартынып та тормай, туйға бер көн ҡалғас, ҡыҙҙы үҙенә килтерергә бойора.

Байбул уйға ҡала. Брагинды оҙатҡас, Әмин, Сураш, Исмәғил, Моратша батырҙарға барып, бөтәһен дә түкмәй-сәсмәй һөйләп бирә. Былар, кәңәш-төңәш итешеп алғас, ҡара йөҙ Брагинды үлтерергә кәрәк, тигән ҡарарға киләләр.

Брагин Талҡаҫ күлендә ял итеп ятҡан бер көндө былар күлде уратып алалар. Брагин ултырған кәмәгә иң әлек Әмин батыр атып ебәрә, теге шунда уҡ күл төбөнә китә. Брагиндың һаҡсыларын ҡырып һалғас, Әмин ауылындағы казармала ятҡан һалдаттарын да һуйып сығалар. Ә казарманың үҙен ут төртөп яндыралар.

Беҙҙең ауылдың Ғариф тигән бер ҡарты үҙе үлер алдынан миңә был хәлдең бер таҡтаташҡа яҙып ҡалдырылыуы тураһында һөйләгәйне. Имеш, ул таш Талҡаҫ күле тирәһенә күмеп ҡуйылған. Тик әлегә был таштың ҡайҙа икәнлеген бер кемдең дә белгәне юҡ, ти.

## 248. ҠӘНИФӘ ЮЛЫ

Көндәрҙән бер көндө Брагин үҙенең яҡын-ярандары менән Талҡаҫ күле буйында ял итеп ята икән. Шул саҡ быны Әмин, Темәс, Сура батыр егеттәре уратып алалар ҙа: «Алыш бармы, атыш бармы?!» — тип һөрәнләп, өҫтөнә уҡ яуҙыра башлайҙар. Күп тә үтмәй, батырҙар Талҡаҫ ярында буш биҙрәләр ултырыуын күреп ҡалалар: Брагиндың хеҙмәтсеһе ниндәйҙер шом барын һиҙеп, түрәләргә ошаҡларға ҡасып өлгөргән икән.

Батырҙар уйға ҡалып ултыралар ҙа үҙ төйәктәрен ташлап китергә булалар; тиҙҙән батша һалдаттарының эҙләп килерс көн кеүек асыҡ бит инде[1]. Бала-сağа, бисә-сәсәләрен алып, тейәнәләр ҙә ҡаҙаҡ далаларына һыҙалар.

Аҙаҡ тикшереү килеп, соҡсоноп ҡарағалар ҙа, Брагинды үлтереүселәрҙең эҙенә төшә алмайҙар. Бер ни ҡәҙәр ваҡыт үткәс, ҡасҡындарҙы ярлыҡау хаҡында ҡағыҙ килеп төшә.

Темәс, Әмин, Сура батыр бер йылдан һуң тыуған төйәктәренә кире ҡайтырға булалар. Тик ҡаҙаҡ байҙары Сура батырҙың уп өс йәшлек Ҡәнифә исемле ҡыҙын ебәрмәйҙәр икән. Сура батыр Ҡәнифәне ҡасандыр ҡаҙаҡтарға әсир төшкән бер башҡорт әбейенә ун һигеҙ йәшкә еткәнсе тәрбиәләргә ҡушып, шунан ғына кейәүгә биреү шарты менән ҡалдырып китергә була. Шуның өсөн ҡаҙаҡтар Сура батырға ҡәҙер-хөрмәт күрһәтеп, бүләктәр биреп оҙаталар. Ә Темәс менән Әминдең аҡтыҡ малын да тартып алып, икеһен дә йәйәү сығарып ебәрәләр.

Бер заман Ҡәнифәгә ун һигеҙ йәш тә тула. Тик бағып-ҡарап үҫтергән теге әбейҙең уны ҡаҙаҡҡа биргеһе килмәй. Ҡәнифәне ул үҙ иленә ҡайтарып ебәрергә юлға әҙерләй башлай. Бер төндө, бөтәһе лә йоҡоға киткәс, ҡыҙҙы алыҫ юлға сығарып ебәрә. Оҙатҡан саҡта;

— Бар, ҡыҙым, тик юл ҡырыйлап төндә генә атла. Тимер ҡаҙыҡ йондоҙо һәр саҡ уң яғыңдан булһын, — тип кәңәш биреп ҡала.

Иртән торһалар, ҡыҙ юҡ. Ҡаҙаҡтар, атҡа атланып, ҡыҙ артынан ҡыуа төшмәксе булалар. Тояҡ тауыштарын ишетеп, ҡыҙ ҡыуаҡ араһына боҫоп ҡала. Тегеләр быныҡ эргәһенән сабып үтеп китәләр ҙә, аҙаҡ, бер кемде лә осратмағас, кире әйләнеп ҡайталар. Ә Ҡәнифә, көн кисләгәнен көтөп ята ла, кеше аяғы һил булғас, юлын дауам итә.

Бер саҡ шулай уны бүреләр уратып ала. Ҡәнифә шунда, түшлегенән энәһен алып, бармағын энә менән нығытып сәнсә лә бөркөлөп сыҡҡан ҡанын бүреләрҙең береһенә һиптерә. Ҡалған бүреләр, кеше ҡанына буялған бүрегә ташланып, өҙгөләргә тотонғас, Ҡәнифә тағы хәлдән тайғансы ары йүгерә.

Ул шулай бик оҙаҡ килә торғас, аҙашып, юлдан яҙа ла Тамъян-Ҡатай[2] иленә барып сыға. Бер йылға буйына туҡтап, еләк йыйып ашай ҙа ятҡан бер йырын йырлап ебәрә. Уның моңло тауышын ишетеп, яҡындағы йәйләү кешеләре килеп етәләр, ҡайҙан, кем булыуын һораша башлайҙар. Ҡыҙ бер ни тип тә яуап бирмәгәс, уны Верхнеуралға илтеп ҡуялар.

Быңдағы түрәләр тирә-яҡҡа, бер ҡыҙ табылды, тип хәбәр ебәрә. Сура батыр был хәбәрҙе ишетеп, Верхнеуралға килә, үҙ ҡыҙы икәнен таный ҙа Ҡәнифәне алып ҡайтып китә.

Бына шул замандан бире Сура батыр ҡыҙы ҡайтып килгән юлды Ҡәнифә юлы тип йөрөтә башлайҙар.

## 249. БРАГИН ТАШЫ

Бынан ике йөҙ йылдан да элек был яҡҡа Ырымбурҙан Брагин исемле бер кенәз килгән. Брагин Әмин ауылы эргәһендәге тауҙа таш сығартҡан. Әминде шунан һуң Таш ауылы тип йөрәтәр булғандар.

Ул саҡта ауылдар ниндәй ҙә булһа батыр исеме менән аталып йөрөтөлгән: Темәс батыр исеменә — Темәс, Таһир батыр исеменә — ауылдың яртыһын — Таһир, яртыһын — Нурғәле тип йөрәткәндәр. Батырҙар үҙҙәренең исемен биреү өсөн һәнүз тартышып торғандар. Бүтән ауылдарҙа ла шулай булған элек.

Беҙҙең ауылдың батыры Әмин булған. Әмин бик тә ҡеүәтле, бик тә зиһенле, бик тә мәргән атыусы булған, даны тирә-яҡҡа таралған уның.

Брагин был тирәлә ҡоралы утыҙ һалдаты менән йөрөгән. Яҡындағы тауҙан таш сығартҡан, кирбес һуҡтыртҡан. Тимерлек ҡороп балта эшләткән. Һәр эшләнгән балтаны ташҡа саптырып ҡарата икән. Әгәр балта йәнселһә, тимерсенең башын киҫә икән. Әмин батырға нәүбәт килеп еткән. Ул балтаһын ҡуйған да, килеп, ҙур-ҙур ташты ярып ташлаған. Тауҙа Әмин сығарған ҙур бер аҡ таш та бар. Уны әҙәм түгел, машинаң да күтәргеһеҙ. Күтәргән дә аҫтына икенсе бер ташты ҡыҫтырып, күтәртеп ҡуйған.

Бөтә ауыл халҡы Брагиндың ҡанһыҙлығынан, ҡатылығынан ҡан илаған. Брагиндың рөхсәтенән башҡа егет кеше кәләш әйттерә алмаған, ҡыҙ кеше кейәүгә сыға алмаған. Әгәр ҙә берәй егет кәләш йәрәшһә, Брагин ҡыҙҙы тартып ала ла, тәүге өс төндө үҙе ҡыҙ менән үткәрә. Кем дә кем ҡаршылашып, бер ауыҙ һүҙ әйтә икән, аҫтыра ла киҫтерә. Брагин Әмин батырҙың кәләшен[1] дә шулай мыҫҡылларға ниәт итә. Әмингә ул үс һаҡлап йөрөгән була. Ни өсөн тигәндә, Әмин үҙенең халҡын һәр саҡ яҡлап, аралап килер булған.

Әмин батыр үҙе лә халҡының был хәленә бик намыҫланған. Инде түҙер әмәл ҡалмағас, үс алыу өсөн уңайлы ваҡытты һайлап йөрөгән.

Брагин яҙғыһын Талҡаҫ күленә һунарға йөрөй торған була. Әмин үҙенең дуҫ-иштәре менән Брагиндың һунарға килеүен аңдып, Талҡаҫ ситендәге ҡамыш араһында ята. Брагин килеп, кәмәгә ултырып, камил Талҡаҫтың уртаһына еттем тигәндә, Әмин ҡамыштар араһынан яр ситенә атылып сыға ла йәйәһенең ҡаты керешен зыңҡылдатып тартып ебәрә. Уғы һыҙғырып барып, туптура Брагиндың күкрәген тишеп сығып, кәмәһен аҡтарып ебәрә. Брагин ҡолап китә. Бата башлағас та бармағындағы балдағын һурып алып, һыуға ташлай был. Брагиндың балдағы уға Әбей батша тарафынан бүләк ителгән алтын балдаҡ була. Исеме лә яҙылған икән. Шул исемле алтын балдаҡ Ирәндек аръяғындағы Яугүлдә йылымға эләккән бер суртан эсенән килеп сыҡҡан: Талҡаҫ менән Яугүл Ирәндек аҫтынан тоташып ята, тиҙәр. Был тирәнең халҡын Әмин батыр шулайтып ҡазанан ҡотҡара. Үҙенең йән-

дәй һөйгән кәләшен дә һаҡлап ҡала. Аҙаҡтан ул кәләше менән ҡасып сығып китә, шул китеүенән китә, ҡайтмай, ғәйеп була.

Халыҡ Брагиндың өйөн яндыра, ғәскәрен туҙҙыра. Ул ултырған урынды һөрәп ташлайҙар. Аҙаҡ батшанан килеп һорашып йөрөһәләр ҙә, бер кем бер ауыҙ һүҙ ҙә әйтмәгән.

Әмин сығарған аҡ таштар хәҙер ҙә кәбәндәй булып ята. Атабабаһының күргәне һаман онотолмай. Хәҙер Әминдән һуң алты быуын киткән: Әмин — бер, Мөхәммәт — ике, Назар — өс, Үтәмеш — дүрт, Фатих — биш, Ниғмәт — алты. Ниғмәттән тыуған Әшрәф. Әшрәфтең үҙ ауыҙынан ишеттем мин быны. Ә Ниғмәт йөҙгә етеп үлгән. Был хәлдәргә кәм тигәндә лә шул ике йөҙ йылдан артыҡ ваҡыт үткән.

Ни белгәм, ни ишеткәм, шуны ишеттерҙем үҙегеҙгә. Белмәгәнде һөйләр хәл юҡ. Ҡырын ултыр, тура һөйлә тигәндәр бит.

## 250. БАЙМАҠ ЯҒЫНДА АУЫЛДАРҘЫҢ ИКЕ ИСЕМ АЛҒАНЫ

Беҙҙең Иҫән ауылын башлап ебәреүсе Иҫән батыр Бөрйән ырыуының Янһары ауылынан була. Иҫән ауылы был тирәләге үтеп сыҡҡыһыҙ урман араһында, бынан өс йөҙ йылдар элек үк барлыҡҡа килә.

Иҫән батыр шулай уҡ икенсе ауылға ла нигеҙ һалып, уны үҙенең олоулының исеме менән Атанғол тип атай. Һуңынан был ауылды тағы икенсе исем менән Назар ауылы тип йөрөтәләр.

Был тирәлә Брагинға ҡаршы күтәрелгән боланан һуң, батша хөкүмәтенең эҙәрләүҙәренән ҡасырға тырышып, күп ауылдар үҙҙәренең исемен алыштыра башлай. Берәй ауылға батшаның яза ғәскәрҙәре килеп, ауылдың исемен һораша башлаһалар, бер кем дә улар һораған ауылдың исемен белмәмеш булып сыға. «Атанғол ауылымы был?» — тип һораһалар, бөтәһе лә: «Юҡ, был Назар ауылы», — тип яуап бирәләр икән. Язалаусылар бер ни ҙә белә алмайынса, ары китеп баралар.

Бына ни өсөн ҡайһы бер ауылдар беҙҙең яҡта йә Әмин, йә Таш ауылы, йә Ҡуяндар, йә Сәитбаттал, йә Анығ, йә Бәхтегәрәй, йә Ноғай, йә Тимер, йә Атанғол, йә Назар ауылы булып ике төрлә исем менән йөрөй.

## 251. ҠӨПӘШ

Ырымбурҙа иң тәү башлап Йәмбәк хан йорт һалған [1]. Ырымбур күп ваҡыттар башҡорттар ҡулында булған. Башҡорттар үҙҙәренә ҡунаҡ йорто — Ҡаруанһарайҙы һалдырғандар, мәсет эшләткәндәр [2]. Ошо Ҡаруанһарай баҡсаһына хәҙерге беҙҙең Саҙалы буйынан ҡарағай апарып ултырттандар. Ҡаруанһарай өсөн күп кенә ыҙғыштар, талаштар булып торған. Шул ваҡытта башҡорттар ошолай тип йырлағандар:

Каруан да һарай баҡсаһында
Үҫтергәндәр икән ҡуш уҫаҡ.
Хас дошмандар беҙгә нишләр тиһәң,
Ете ырыу башҡорт бер булһаҡ.

Батша хөкүмәте ҡала һалыу өсөн башҡорттарҙан бер вәкил ебәреүҙе һораған. Шунан ете ырыу башҡорттары хәҙерге Саҙалы буйына йыйылғандар ҙа вәкил һайларға булғандар. «Ололарҙан белемле Көпәш олатайҙан да яраҡлы кеше булмаҫ» тип, Ырымбурға уны ебәрергә булғандар. Көпәш ҡарт, ауылға ҡайтып тормайынса, ҡалаға сығып киткән. Хәҙерге Саҙалы буйындағы Ҡала киткән үҙәге шунан ҡалған. Көпәш ҡарт әйләнеп ҡайтҡан. Ете ырыу башҡортонан тағы ла вәкилдәр йыйылғандар.

Көпәш ҡарттан Ырымбурҙа ни күреүе, ни башҡарыуы тураһында һорашҡандар. Шунан Көпәш тороп әйткән: «Һаҡмар менән Яйыҡтың тамағында бер түмәләк тауға ҡала һалынды. үҙегеҙгә тыныслыҡ булмаҫ инде», — тигән. «Ни эшләргә?» — тип һорағандар башҡорттар. Көпәш ҡарт: «Ҡала ике һыуҙың сатлығында урынлашҡан. Һыуығыҙҙы ат итәр, үҙегеҙҙе һалсы итәр, һыу башында ағас ҡалмаҫ», — тигән.

Хәҙерге Саҙалы ауылы элек Һүрәм буйында ултырған булған. Көпәш ҡарттың кәңәше буйынса, был ауыл тау башына күсеп ултырған.

## 252. СУҠЫНДЫРЫУ

Элекке заманда Баҡалы, Бүздәк яҡтарында урыҫтар ауыл һайын мосолмандарҙы суҡындырып йөрөгәндәр. Сана менән үткәндәр. Һәр санала өс һалдат, бер поп булған.

Шаҙы кешеләре суҡынмаған. Ошо тирәләге уң бер ауыл халҡы башҡорттары һәнәк, салғы менән ҡоралланып, суҡындырыусыларға ҡаршы сыҡҡан. «Үлһәк, үлербеҙ — динебеҙҙе ташламабыҙ», — тигәндәр.

Күмәк көскә ни етә? Шаҙыларҙы суҡындыра алмай кире тайғандар урыҫтар.

## 253. БАШҠОРТТАРҘЫҢ СУҠЫНЫУҘАН БАШ ТАРТҠАНЫ

Беҙ бер ун-ун ике йәштәрҙә саҡта нәнәйем (өләсәйем) һөйләгәйне. Уға һикһән йәштәр самаһы ине.

Сыуаштарҙы, татарҙарҙы суҡындырғас, поптар беҙҙең ергә лә килеп еткән. Был боласыл халыҡты суҡындырып, христиан яҫап, итәғәле итмәксе булғандар инде. Бөтөн тирә-яҡ халҡын Ағиҙелдең ҡаты аға торған еренә йыйып һыуға ҡыуып индергәндәр ҙә, тәре тотоп үҙҙәренсә лә, татарса ла һөйләп суҡынырға ҡушҡандар. Иртәнән төнгә тиклем тотҡандар халыҡты. Хәлһеҙләнеп, күптәре

аяк-ҡулын көҙән тартып йығылған. Меңдәрсә кеше үлгән, һыу өҫтө тулы мәйет булған, ҡотолғандар ҙа ауырыуға һабышҡан, тик бәрәү ҙә сыҡынмаған. Бына шулай булған сыҡындырыу. Налогтан ҡотҡарабыҙ тип тә, бүләк бирәбеҙ тип тә ҡарағандар. Халыҡты һындыра алмағандар. Көсләгәс, кем баш эйһен? Серәшеп үҙенекендә ҡалған халыҡ. Шунан һуң поптар көсләшеүҙе ташлағандар.

## 254. БАТЫРША МЕНӘН ЯНЫШ

Батырша [1] хәҙрәт Юғары Ҡарышта тыуып үҫкән.

Юғары Ҡарыш үҙе бик күптәнге ауыл. Юғары Ҡарышҡа башта Алтай тауҙарынан ике бабай килеп ултырған. Береһе — Байбирҙе, береһе — Туҡай ҡарт. Шулар нигеҙләгән әлеге ауылдарҙы. Ауылдары хәҙерге ике Ҡарыш — Юғары һәм Түбән Ҡарыш — араһында булған. Был ҡарттар нәҫеле үрсеп киткәс, бүленеп ултырғандар: Байбирҙе — Юғары Ҡарышта, Туҡай — Түбән Ҡарышта.

Был тирәләр әүәл әҙәм үткеһеҙ ҡуйы урманлыҡ булған. Ҡара тупраҡлы ерҙә игене лә бик уңған. Шундай урман-һыуы, шәп ере булған был яҡҡа ситтән күп кешеләр килеп ултыра башлаған. Иҙел буйынан Таулар ауылынан килеп ултырғандар. Ырымбурҙан килгән нәҫел бар. Аҙаҡ мишәрҙәр күбәйгән.

Батырша хәҙрәт заманында беҙҙең ауыл тирә-яҡта данлыҡлы булып киткән. Хәҙрәт үҙе мәҙрәсә тотҡан, шунда мөдәррис булып балалар уҡытҡан. Уҡымышлы булғаны өсөн тирә-яҡ ауылдарынан бай кешеләр үҙ балаларын Батырша хәҙрәттә уҡытырға тырышҡан [2].

Батыршаның бик абруйлы булып китеүе Яныш старшинаға [3] оҡшамаған. Ул, күрәһең, үҙ дәрәжәһе төшөүенән ҡурыҡҡан. Үтә тәкәббер, көнсөл, хәйләкәр әҙәм булған ул. Тирә-яҡ халҡын үҙ ҡулында ҡан ҡалтыратып тотҡан, ти.

Яныш старшина һунар яратҡан. Бер ваҡыт Яныштың бер өйөр эте хәҙрәт мәҙрәсәһенә эйәләшеп, ситтән килгән шәкерттәрҙең аҙыҡ-түлектәрен ашап йөҙәтә башлаған. Был хәлде Батырша хәҙрәткә һөйләгәндәр. «Йөҙәтһәләр, ҡайнар һыу һибеп, теге эттәрҙе биҙҙерегеҙ», — тигән хәҙрәт. Шул саҡ старшинаның бер яратҡан эте үлеп китә. Яныш, Батырша хәҙрәткә тағы ла нығыраҡ үсегеп киткән, уны хас дошман итеп күрә башлаған.

Батырша хәҙрәт менән Яныш старшинаның аралары боҙолоуға серлерәк сәбәп тә булған, тиҙәр. Улар ниндәйҙер бер йәшерен хазинаға юлығып, шуны бүлешә алмайынса асыуланышҡандар булһа кәрәк. Батырша хәҙрәт Яныштың төрлө мутлыҡтарын, этлектәрен күп белгән. Шуға ла ул ҡурҡыр булған.

Тыштан былай улар һин дә мин булған, тиҙәр. Көнсөл Яныш Батыршаны гел аҫтан киҫергә тырышҡан. Абруйлы кеше булғаны өсөн бер саҡ Ырымбурҙан Батыршаны ахунлыҡҡа үткәреү тураһында ҡағыҙ килгән. Яныш старшина ул ҡағыҙҙы йәшереп ҡал-

ған, Ырымбурға, Батыршаны ахун итергә ярамай, тип хәбәр иткән.

Ул замандарҙа донъялар тыныс булмаған. Хөкүмәт тоҙға хәтле налог һалған. Халыҡтың ризаһыҙлығы көсәйгән. Мосолман динен дә ҡыҫа башлағандар. Шул хәлдәр хаҡында һорашып хәҙрәткә ситтән дә күп кешеләр килер булған. Ул үҙе лә йыраҡ-йыраҡ ауылдарға сығып йөрөгән. Уны һәр ерҙә хөрмәт итеп ҡаршылағандар, ололап ҡунаҡ иткәндәр.

Динде, мәсетте бер заман ныҡ ҡыҫа башлағас, мосолмандар йыйылып Батырша хәҙрәттән бөтә халыҡҡа ғарызнамә яҙырға үтенгәндәр, ти. Өс көн, өс төн бер ҙә бүленмәй ултырып, ул ғарызнамәне яҙып бөткән. Хәҙрәттең яҡын шәкерттәре уны күсереп тирә-яҡҡа сапҡын ебәреп таратҡандар. Шул ғарызнамә буйынса бөтә ил яуға сыҡҡан. Тик мосолмандар — башҡорттар ҙа, мишәрҙәр ҙә батша ғәскәренән еңелгән. Аҫыу-киҫеү, төрмәгә ябыу башланған.

Яныш старшина Батырша хәҙрәттең мосолмандарҙы ҡотортоуын башта уҡ күреп-белеп торһа ла, губернаторға донос яҙмаған. Халыҡтан ҡурҡҡан, ахыры. Баш бирмәҫ уҫалыраҡ ир-егеттәрҙе батша хәҙрәттәренә хеҙмәткә тиҙерәк оҙатырға тырышҡан. Мишәрҙәрҙән бер нисә отряд төҙөп Өфөгә ебәргән.

Батырша хәҙрәт, Яныш мине барыбер яман күрһәтеп хөкүмәт ҡулына тотоп бирер тип, мәҙрәсәһендәге уилап шәкерте менән урманға ҡасҡан, тиҙәр. Үҙе менән бөтә ғаиләһен дә алған. Шәкерттәренең күбеһе аҙаҡ арып-йонсоп ауылға кире ҡайтҡан. Ҡайтҡан берен, допрос алып, Яныш старшина Уфаға төрмәгә оҙата торған.

Ул хәҙер нисек тә булһа Батыршаны ҡулға үҙе төшөрөргә тырышҡан. Урмандарға әллә ни саҡлы ҡоралды кешеләрен эҙләргә ебәргән. Ни өсөн тигәндә, Батыршаны тотҡанға губернатор мең һум ярлыҡаш тәғәйенләгән. Ярлыҡашынан да бигерәк, Янышты дан, дәрәжә ҡыҙыҡтырған. Ул көн-төн тигәндәй тирә-яҡҡа шымсыларын, кешеләрен сығарған. Хатта Себер, Ҡазан яҡтарына сапҡындар ебәргән. Тик уны барыбер таба алмаған.

Батырша аҙаҡ үҙе тотолған, тиҙәр. Ул ҡайҙалыр Петербург яғында таш төрмәлә үлгән, ахыры [4]. Батырша хәҙрәттең тоҡомо ҡалмаған. Уның балаларына хәтле тотоп ҡайҙалыр һатҡандар, ти.

Быңа атайым һөйләүе буйынса ишеткәндәрем, хәтерҙә ҡалғандары шул.

## 255. БҮГӘС ЯУЫ

Элек Ҡотан ауылы тапҡырындағы Иҙел аръяғы башҡорт ере булған, шунан бер ваҡыт Вознесенский исемле рус кешеһе килеп башҡорттарҙан ер һораған:

— Миңә бер үгеҙ тиреһе ҙурлығында ғына ер бирегеҙ, — тигән.

Башҡорттар:

— Ал әйҙә, ал, — тиешкәндәр.

Шунан теге Вознесенский килеп килешеү ҡағыҙы яҙышҡан да, бер үгеҙ тиреһен тунатып, телгеләп һуҙған, ти. Шулайтып был егерме биш дисәтинә ерҙе биләгән дә алған, ти. Шунан ул завод һала башлай. Был баҡыр иретеү заводы була [1]. Руданы Дубинскиҙан [2] килтергәндәр.

Ул килеп аҙмы-күпме ултырыуы булған, башҡорттар баш күтәргән. Юлай Аҙналин үҙенең улы Салауат менән Имән йорт ауылында һуғышып, ошо яҡҡа юл тотҡандар. Бүгәс Ҡананикольск заводын [3] емереп килә ята икән. Улар бейек тау башынан таш мәсетте туптан атып емерттерә башлағандар. Шунан ғына кемдер белеп ҡалып, атыуҙы туҡтаттыра. Шулай итеп, беҙҙең ауылда борон Бүгәс батша, Салауат, уның атаһы Юлай Аҙналин булған. (Улар атҡан туп йәҙрәләре әлек бик күп табыла ине, быңа береһе әле лә бар, ауырлығы 400 грамм.)

Шунан Бүгәс бынан бер саҡрым самаһындағы Вознесенский заводына юл тотоп, ут менән үртәп, яндырып киткән.

Ҡотандан һуң Бүгәс Өфө яғына юл тотҡан [4].

## 256. ҠЫҘҠАЛАТАУ

Был тау Башҡортостандың Краснокама районы Иҫке Мөйөштө ауылы эргәһендә, Ағиҙелдең уң яҡ ярына яҡын. Тирә-яғы тигеҙлек. Алыҫтан ҡарағанда ла бейек һәм бик күркәм булып тора. Ошо тау хаҡында Иҫке Мөйөштө ауыл ҡарттары шуларҙы һөйләй: «Борон заманда Ағиҙел буйында Әбей батша [1] ғәскәре менән Петр батша [2] ғәскәре һуғышҡан. Петр батша ғәскәре Әбей батша ғәскәрен ҡыуып килеп, шул тауға һырындырған. Петр батша Ағиҙелдең уң яҡ ярына сыҡмайынса, һул яҡта тороп ҡалған. Бер нисә көн тынып торғандан һуң, Ҡыҙҡалатауында ятҡан Әбей батша ғәскәре менән Петр батша ғәскәре араһында тағы ҡаты һуғыш башланған. Әбей батша ғәскәре еңелгән, Ҡазан яғына ҡарай ҡасып киткән. Петр батша арттарынан баҫтырып барған.

Әбей батша ғәскәрҙәре ҡорал-ҡарыу, кейем-һалымдарын да ала алмағандар. Улар киткәс, Петр батша ғәскәре ҡоралға, малға, кейем-һалымға мулыҡҡан.

*Петр батша халыҡҡа ипле булғанға күрә, ул тирәләге халыҡ уның ғәскәренә аҙыҡ-түлек бирер булғандар, атын-арбаһын егеп, үҙҙәре лә ғәскәрлеккә яҙылғандар.* Әбей батша ғәскәренең еңелеүенә ҡыуанған бөтә халыҡ йыйылып байрам иткәндәр, күңел асҡандар. Петр батшаның ғәскәрендә башҡорттар ҙа, татарҙар ҙа, ҡырғыҙҙар ҙа булған».

## 257. ПЕТР БАТША МЕНӘН ӘБЕЙ БАТША ҺУҒЫШҠАНЫ

Петр батша ысынында батша булмаған. Ул үҙе лә шул беҙҙең һымаҡ крәҫтиән булған. Уны тик халыҡ үҙе генә батша тип йөрөткән.

Был Ҡыҙҡалатауында элек һуғыш булған. Ошо тауҙа Әбей батша ғәскәре ятҡан. Уға ҡаршы бер тауҙа Петр батша ғәскәр тотҡан. Әбей батша менән Петр батша һуғышы Урал тауы араһында ла, ҡырғыҙ иләндә лә, Өфө менән Ырымбур тирәһендә лә булған. Петр батша Әбей батша ғәскәрен ҡыҫырыҡлап алып ошо тауға килтергән.

Ағиҙел боҙонон ул китер, был китерҙән ятҡан сағы булған. Әбей батша ғәскәре ҡабаланып-ҡарһаланып, бата-сума боҙҙан сығып өлгөргән. Бер тиклем ғәскәре, боҙ умырылыу сәбәпле, һыуға батҡан. Алыҫ ерҙән килеп, арманһыҙ булып арығанға, улар Ҡыҙтауға хәл йыйырға туҡталғандар. Һыу ташыу сәбәпле Петр батша Иҙелде сыға алмайынса, һыуҙың һул яғында ҡалған. Был мәлде һуғыш туҡтап торған. Тик ара-тирә уҡ менән генә атышып ятҡандар. Шулай булһа ла, үлеш булған. Тора-бара Әбей батшаға йәнә ҡайҙандыр өҫтәп көс килгән. Петр батша, берҙән, һыу ташҡанға, икенсенән, ғәскәре лә аҙ булғанға һөжүм яһамай торған.

Көндәрҙән бер көндө Ағиҙел буйлап үрҙәрәк бер тауҙа биш урында биш ҡараҫҡы күренгән. Быны күреп, Петр батша: «Анау тауҙа биш бүтән кеше ҡалҡып сыҡты, дошманмы икән, кем икән?» — тигән. Шунан быларҙың кем икәнен белер өсөн кешеләр ебәргән. Барһалар — Петр батшаның дошманы түгел икән былар. Башҡорттан, татарҙан, ҡырғыҙҙан уҡмашҡан ғәскәр булып сыҡҡан. Һуңынан был ғәскәрҙәр Петр батшаға килеп ҡушылғандар. Шунан һуң, һыуҙың ташыуына ҡарамаҫтан, бергәләшеп, Әбей батша ғәскәренә йомолғандар. Ағиҙелде аша сығып, дошман ғәскәрен ҡыҫырыҡлай башлағандар. Петр батша Ҡалатауҙан дошманды ҡыуып ебәргән. Ҡабатлап был урында һуғыш булмаған. Бына шунан һуң Әбей батша тороп һуғышҡан тауҙы Ҡыҙҡалатау тип, Петр батша ғәскәре тороп һуғышҡан тауҙы Петр батша тауы тип, ә ҡырғыҙ ҡырылған урынды Ҡырғыҙ тип йөрөткәндәр. Биш бүтән кеше күренгән урынды Бишбүтән тип атағандар.

## 258. ПЕТР БАТША ТАУЫ

Ҡыҙҡалатауынан алыҫ түгел, Ағиҙелдең һул яғында, хәҙерге Илеш районы Айыу ауылы менән Иҫке Тартыш ауылы араһында, бер тау бар. Ул тау оҙон булып, моронланып барып туҡталған. Шул морондоң кәнт башында бик тәрән ике соҡор бар. Береһе тауҙың моронона яҡын. Соҡоро кеше аяҡ үрә йөрөгәндә күренмәҫлек тәрән итеп, туңәрәкләп, киң итеп ҡаҙылған. Бынынһында Петр

батша үҙенең яҡын ярандары Салауат, Әлебәктәр менән ятҡан. Шунда улар ҡорал менән аҙыҡ һаҡлағандар.

Икенсе соҡор унан бер нисә таяҡ арттараҡ, тауҙың арҡырыһы аша ҡаҙылған. Быныһы ла тәрән генә, үҙе киң. Бында ғәскәр ятҡан. Был соҡорҙоң артында йәнә ваҡ соҡорҙар бик күп. Былары туп соҡорҙарылыр, ахыры.

Ҡаршы тауҙың да башы ҡаҙылған. Уныһында Әбей батша ғәскәре ятҡан, тиҙәр. Был тау хаҡында халыҡ былай тип тә һөйләй: «Унда элек тау булмаған, тигеҙ ер булған икән, һуғышырға уңайлы булһын тип, Әбей батша ғәскәре ситтән балсыҡ ташып өйгән», ти. Быныһын Торатау тип тә йөрөтәләр.

Әбей батша ғәскәре Петр батша ғәскәрҙәренең ҡыҫыуына сыҙай алмайынса, Торатауҙы ташлап, Миңлебай тауына[1] ҡасып киткән. Миңлебай тауының арҡырыһына тәрән ур (соҡор) ҡаҙып атышып ятҡандар. Бер килкеһе Уразай ауылы ҡаршыһындағы тауҙа булған. Салауат отрядындағы бер Әлебәк тигән ғәскәр башлығы Торатауға һөжүм иткән ваҡытта, туранан сығам тип, боҙо иреп бөтмәгән күл аша ынтылған сағында, яҙғы март боҙо емерелеп китеп, бик күп ғәскәре менән үҙе лә һәләк була. Ул күлде хәҙер Әлебәк күле тип йөрөтәләр. Әбей батша ғәскәре Миңлебай тауында ятҡан саҡта, Петр батша үҙ ғәскәрен Бурһыҡ[2] тигән ауыл ҡаршындағы тауға алып килеп һуғыша башлай. Әбей батша ғәскәре бында ла еңелеп, Сулман[3] аръяғындағы тауҙарға ҡасып китә. Ҡабан яғынан яңы көстәр килеү сәбәпле Әбей батша ғәскәре бер аҙ тын алып ҡала, ул бында Петр батша яусылары менән ныҡ ҡына ҡыйыша. Шулай ҙа Петр батша ғәскәренең ҡыҫыуына сыҙамай, Әбей батша ғәскәре Ҡазанға ҡарап ҡасҡан.

## 259. БҮГӘСӘҮ ЮЛЫ

Нуғайбәк[1] ауылы тирәһендә бер юл бар. Уны Пугачев кешеләре һалған, тиҙәр. Юлға арҡыры ер өйөмө ята. Был урында элек йырын булған. Шул йырынды аша сығырға тип, Пугачев кешеләре бүрек менән ер ташыған, имеш[2].

Был өйөм ана шунан тороп ҡалған.

Юлды тора-бара урман баҫып киткән. Тик күптән түгел генә, юлды таҙартып, яңынан йөрөй башлағандар.

## 260. БҮГӘС ТҮБӘСӘЙЕ

Беҙҙең өләсәй Ағиҙел аръяғындағы анау түбәсәйҙе, Бүгәс ғәскәренән ҡалған, тип һөйләй торғайны.

Имеш, Бүгәс ғәскәре уны кәпәс менән ер ташып өйгән. Шуға ла ул әле һаман ер менән тигеҙләнмәгән. «Бүгәс ғәскәре, ай-һай, ҙур булған икән шул!» — тип ҡуя торғайны өләсәйем.

## 261. БҮГӘС ТАУЫ

Науруз[1] ауылынан алыҫ түгел Һатҡы юлы буйында бер тау бар. Уны Бүгәс тауы тип йөрөтәләр.

Имеш, Пугачев үҙенең ярҙамсылары менән, артабан ҡайҙа юл тоторға, тип, ошо тау башында кәңәш ҡорған.

## 262. ЯУ ҠҮРГӘН МӘСЕТ

Бүгәс яуына саҡлы беҙҙең Ҡотан ауылын Мәсетле тип йөрөткәндәр. Нимә тиһәң, ауылдың бик ҙур мәсете булған.

Бүгәс, Вознесен заводын алырға тип, Ырғыҙлы ауылына килгәс, үҙенә ғәскәр йыя башлаған. Беҙҙең Ҡотан муллаһы уға ҡаршы сыҡҡан халыҡҡа ҡотҡо таратҡан: имеш, ул Петр батша түгел, бер боласы, динһеҙ бер бәндә, тигән.

Бына шуның өсөн дә Бүгәс беҙҙең мәсетте Ағиҙелдең һул яғындағы тау башынан тороп туптан аттырған, тиҙәр. Шуға ла был тау хәҙер Бүгәс тауы тип атала. Бүгәс йәҙрәләрен мәсет ултырған ҡалҡыулыҡтан әлегә тиклем таба торғайнылар.

Яу баҫтырылғас, Бүгәс емерттергән мәсет урынына яңы мәсет һалған булғандар.

## 263. ПУГАЧЕВ ХАЗИНАЛАРЫ

Пугачев хазиналары хаҡында был яҡта күп һөйләйҙәр. Күп һөйләһәләр ҙә, табылғаны бик һирәк. Ә бына мин һеҙгә табылғаны хаҡында һөйләйем әле.

Бынан һикһән-туҡһан йылдар элек бер туған ике рус егете — Александр менән Степан Гусевтар — хәҙерге Күгәрсен районындағы Гусевка хуторынан Ырымбурға барырға тип юлға сыға. Былар Синегорка ауылына инеп, ҡунып китергә булалар. Аттарын туғарып, өйгә инһәләр, мейес башында ҡарындыҡтай ҡорошоп бөткән һуҡыр бер ҡарсыҡ ята икән. Ҡарсыҡ быларҙың мосалдар[1] икәнлеген һөйләшеүҙәренән танып ала ла:

— Һеҙ Кананикольскийҙанмы? — тип һорай.

— Юҡ, беҙ Гусевканан, — тиҙәр былар.

— Ҡайһы Гусевканан? Кесе Эйектәге Ямашлы тамағы эргәһендәгеме? — тип төпсөнө ҡарсыҡ.

— Дөрөҫ! — тиҙәр былар. — Ҡайҙан беләһең, әбей?

— Мин бит йәш сағымда Пугачев менән йөрөнөм, — ти әбей, — мин уның бешексеһе була торғайным. Бер саҡ Ырғыҙлыға китеп барғанда, беҙҙең арттан Һаҡмар казактары ҡыуа башланы. Пугачев шунда Ямашлының һул яҡ ярында, йылға тамағы эргәһенә бөтә байлығын күмеп ҡалдырырға әмер бирҙе. Ул бит байҙарҙың алтынын тартып ала килде. Ана шул күмелгән байлыҡ, моғайын, хәҙер ҙә ер аҫтында яталыр әле...

Ҡарсыҡтың был хәбәрен ишеткән Гусевтар тиҙ генә ауылға әйләнеп ҡайта. Олоһо Александр төндә тороп, Ямашлы тамағына бара ла алтын сүлмәген эҙләп таба. Алтынды алып ҡайтып, кеше күрмәгән ергә генә йәшереп ҡуя. Хазина хаҡында бер кемгә лә бер һүҙ ҙә әйтмәй. Бер нисә көн үткәс, кесе туғаны Степан Пугачев хазинаһы хаҡында ҡарсыҡтан ишеткән хәбәрҙе атаһына һөйләп бирә.

— Ниңә быны Ырымбурҙан ҡайтҡас уҡ һөйләмәнең? — тип аптырай атаһы.

Атаһы ике улын эйәртеп, Ямашлы ярына китә. Бөтә ерҙе ҡаҙып бөтөрәләр, тик бер ниндәй хазина ла тапмайҙар. Ә ағаһы Александр атаһынан башҡа айырылып сыға ла урман эше менән кәсеп итергә тотона. Һал ағыҙа, ҡыуғын ҡыуа. Үҙенә ер ҙә һатып ала. Өҫтәүенә, ике тирмән ҡороп ебәрә: береһен — Шығрызда[2], икенсеһен — Ҡузьминовкала[3].

Колхоз сыҡҡас, инде арыу уҡ оло йәштәге Александр Петрович Гусев ҡартты кулак итеп һөрөп ебәрәләр. Был ҡомһоҙ кулактан күп кенә алтын тартып алынғанын байтаҡ кеше хәтерләй әле. Беҙҙең яҡтарҙың серегән бер байы ине ул. Пугачев хазинаһы бик байытҡан булған уны...

## 264. САЛАУАТ

Йүрүҙән һыуы тирәһендә боронғо ҡарағайҙарҙан ҡалған таш бағана бар. Яланға сыҡҡас та ул күҙгә бәрелеп тора. Шул бағанаға бер нисә ҡаҙаҡ ҡағылған. Салауат яуы ваҡытында унда Салауат кешеләре мылтыҡтарын элгәндәр, атгарын бәйләгәндәр.

Хәйер, Салауат хаҡында һеҙ белмәйһегеҙҙер әле. Әгәр минән ишеткәнде кешегә әйтмәһәгеҙ[1], мин һеҙгә бер тарих һөйләйем.

Бик күптән булырға кәрәк, минең мәрхүм олатай уны аҙ-маҙ ғына хәтерләй ине.

Бына ошо беҙ ултырған ерҙә ҡуйы урман булған. Айыуҙар ҡуян кеүек тегендә-бында сабышып йөрөгән. Кеше үтмәҫлек ҡарағайлыҡ булған. Бына шул урман, бөтә тирә-яҡ, арҙа халҡының[2] ерҙәре булған. Халыҡ бик яҡшы йәшәгән. Көтөү-көтөү мал аҫраған. Көтөүҙәре күҙ күреме ерҙән дә ҙур булған. Был халыҡ бик тыныс көн иткән, бер кемгә лә теймәгән, шулай үҙ алдына йәшәй биргән. Бер заман урыҫ түрәләре башҡорттарҙы ҡайыҙлай, талай башлаған. «Халыҡ бай, ҡара, тәртип белмәй», тип, ҡыҫа башлағандар. Иң башлап ерҙәрен тартып алғандар ҙа баярҙарға һатҡандар. Мал-мөлкәттәрен алғандар. Был арҙа халҡының малын ҡырғыҙҙарҙа[3] ҡыуып алып китеп торған. Арҙа халҡы бер нәмәһеҙ тороп ҡалған. Аптырағас, был арҙа халҡы кылысҡа йәбешә башлаған. Әгәр берәү яһаҡ түләтергә, йә бүтән берәй эш менән былар ҙың ауылына килһә, уның күбеге лә, төкөрөгө лә ҡалмай икән. Арҙа халҡын йыуашлатырға ғәскәр ебәрә башлағандар. Былар уның һайын яман булғандар. Ҡаршы барыу бик ауырлашҡан.

Шул ваҡытта арҙа араһынан бер батыр килеп сыҡҡан. Ҡайҙан икәнен аныҡ ҡына әйтә алмайым, Эҫемдән[4] шикелле. Ул батырҙы Салауат тип йөрөткәндәр. Көслө булған ул. Бер ҡулы менән егерме ботто йөн ырғытҡан кеүек итеп кенә күтәргән. Уның һуғыш күлдәге өс боттан артыҡ булған.

Салауатты йәш сағында йылҡы көтөргә ҡушҡандар, ти. Көтә-көтә ул ялҡып киткән. Көтөүен ташлаған да иптәштәре янына уйнарға киткән. Уйнай башлағандар. Башлаһалар, уйынға хан[5], түрә юҡ. Ханһыҙ нисек уйын булһын? Салауат: «Әйҙәгеҙ беҙ бына шул һуҡмаҡ буйына, бер таяҡ ара ҡалдырып, маяҡ ултыртайыҡ. Үҙебеҙ атҡа атланып, шәп итеп сабып барған саҡта шул маяҡты кем ауҙара алһа, шул хан булыр», — тигән. Һәр малай һанына маяҡ ултыртҡандар. Һәр кем үҙ маяғын ауҙарырға булған. Сабыша башлағандар, малайҙарҙың берсһе лә маяғын ауҙара алмай икән. Салауат, бүреге менән бәреп, маяғын ауҙарған. Малайҙар:

— Салауат, шартты боҙҙоң бит, — тигәндәр.

— Әй аҡылһыҙҙар, — тигән Салауат, — бер таяҡ ерҙән ҡул менән нисек маяҡ ауҙармаҡ кәрәк? Мин һеҙҙән аҡыллымын икән, шулай булғас, мин түрә булдым, — тигән.

Башта улар шулай балаларса уйнағандар. Салауат һуңынан ысынлап та башлыҡ булып киткән.

Аҙмы-күпме ваҡыт үткәс, Салауат үҫеп ир ҡорона кергән. Шул арҙаны артыҡ тағы йәбер итә башлағандар. Бер яҡтан купецтар, икенсе яҡтан Урал, Ырымбур казактары. Арҙа халҡы, эштәрҙең бик яман икәнен күреп, Салауатҡа әйтә:

— Һин — беҙҙең батырыбыҙ. Беҙ һине хөрмәт итәбеҙ. Башҡорт ерҙәренән шул урыҫ, ҡырғыҙ түрәләрен ҡыуып сығар.

Шунан һуң Салауат баярҙарға ҡаршы һуғыш аса. Көн үтмәй — ҡала, сәғәт үтмәй — ауыл алалар. Баярҙарҙың эше мөшкөллөккә ҡала. Шул ваҡытта Пугачев тигән кеше пәйҙә булған. Салауат уның менән дуҫлашып киткән. Улар икәүләп бергә күп эштәр эшләгәндәр. Күп илдәрҙе азат иткәндәр.

Аҙаҡ казак Пугачты тотоп үлтергәндәр[6]. Уны Йүрүҙән һыуына ла батҡан икән, тиҙәр. Салауат ҡасып киткән. Хәбәр-хәтер булмаған. Аҙаҡ уны ла тотҡандар.

## 265. САЛАУАТТЫҢ БАЛА САҒЫ

Салауат ун биш йәштә сағында, айыу менән һуғышып, алғы ике тешен һындырған. Шул арҡала үҙе ҡурайға өйрәнә алмаған. Әммә ҡурайсыларҙы бик яратҡан. Һәр саҡ, көтөүселәр янына килеп, ҡурай тыңлап ултырыр булған.

Бер саҡ атаһының көтөүсеһе бер бейәне үлтергән. Атаһы бик асыуланған. Шунда Салауат әйтә икән:

— Әрләмә һин уны, атай, уның бер йыры бер өйөр йылҡыға торорлоҡ.

## 266. САЛАУАТ БАТЫР

Урал итәгендәге түңәрәк күл буйында майҙандарҙа һис бер батырға бил бирмәç, сәсәнлектә һис бер сәсәнгә ал бирмәç, аҡыллылыҡта тиңһеҙ, бик тә мәргән атыусы, бик тә зиһенле Салауат батыр ғүмер иткән.

Бер заман Салауат батыр тауҙан-тауға, ҡаянан-ҡаяға атылып, һунар ҡылып йөрөгән саҡта, билепә аçҡан бер тиреһе, ҡая аçтындағы йылғаға төшөп, түбәнгә ағып киткән.

Шул тирене Ҡырмаһаҡал батшаға[1] тотоп апкиләләр. Батша ул тирене үҙ янында яҡшатланып йөрөгән ярандарының береһенә бүләк итә. Был тиренең тылсымлы тире булыуын әйтә:

— Бына, — ти ул, — шул тирене алығыҙ ҙа хужаһына барығыҙ. Ошо тире тиклем генә ерен һорағыҙ. Шунан тирене яҡшы оçтанан иләттереп, ат ҡылындай ғына нәҙек еп яһап, шул еп менән ерен үлсәп алып, башҡортто һемәйтергә кәрәк, — ти Ҡырмаһаҡал.

Шул алдаҡ менән иң әүәле башҡорттоң күҙ күреме етмәç ерен талап алалар. Әш тирелә түгел, кирелә булып сыға шулайтып. Тире һылтауы менән алған ергә аяҡ терәп алғас, башҡорттоң иленә лә Ҡырмаһаҡал батша түрә була башлай. Ахыр сиктә ерҙең йәме китә. Һунар ҙа ырамай. Йылғаларҙың һыуы ла кәмеп китә. Байҙарҙы Ҡырмаһаҡал батша дәрәжә бирәм тип үҙенә ҡаратҡан, ти.

Шунан һуң Ҡырмаһаҡал батша тағы ла ҡатылыҡ күрһәтә: тирмәләрҙе туҙҙыра, ауылдарға ут һала, мал-тыуарҙы әйҙәп алып китә, халыҡты талай башлай. Түҙер әмәл ҡалмай.

Ҡарттар Салауат батырға килеп әйтәләр:

— Илде дошманға бирмәйек, — тиҙәр, — хәҙер түҙеп торор әмәл юҡ. Күҙ терәп торғаныбыҙ һин илдә, Салауат! — тип, уға тылсымлы ҡылыс бирәләр.

Салауат толпарына һикереп менә лә әйтә:

— Ир яҙмышы ил ҡулында, ил яҙмышы ир ҡулында. Ҡайҙа халҡым, шунда яҙмышым! — ти.

Атын уйнатып, ҡылысын, йәшендәй balҡытып, ҡынынан һурып ебәрә лә ҡулына күмер киçәге тотоп[2], оран һала:

— Үҙ еребеҙгә үҙебеҙ хужа булайыҡ! Урал урманы беҙгә уҡ менән суҡмар үçтергән. Урал иле ерен-һыуын яҡлап һуғышырлыҡ дәртле ирҙәр үçтергән. Илде дошманға бирмәйек!

Салауат батырҙың ҡылды ҡырҡҡа ярыр һүҙҙәрен ишетеп, бөтә ир заты атҡа менгән, ҡорал таҡҡан. Салауат батырҙың оранын илгә еткереп, бөтә яҡтарға саҡындар сапҡан.

Ирек яулашыр өсөн Салауат батыр үҙенең ғәскәрен Бүгәсәү яуына килтереп ҡушҡан. Салауат батыр Бүгәсәү батырҙың уң ҡулы булып китә.

Ҡырмаһаҡал батша бик ҡурҡыуҙа ҡалған. Бүгәсәү батыр менән Салауат батырға ҡаршы иçәпһеҙ-хисапһыҙ ғәскәр ебәргән. Күп ҡан ҡойолған. Батша, хәлдән тайып, ғәскәр артынан ғәскәр ебәреп тора. Шунан бер аҙға һуғыш тына.

Бүгәсәү менән Салауат икенсе бер ваҡыт еткәнде көтөп, бергә

күтәрелергә һүҙ ҡуйышалар ҙа, икеһе ике яҡҡа урмандарға ҡасалар.

— Осрашырбыҙ! — ти Бүгәсәү батыр.

— Күрешербеҙ! — ти Салауат батыр.

Ҡырмаһаҡал батша нисек тә Салауат батырҙы ҡулға эләктерергә хәйлә эҙләй. Бер заман ул Салауат ауылындағы байҙарҙан белешеп, ғәскәре менән ул йәшәгән ҡара урманға килеп сыға.

Салауат батыр өйҙә булмай, һунарға киткән була был саҡ. Ҡырмаһаҡал батша ҡатынының ҡотон алып, ғәскәрен баҙға йәшертеп ҡуя.

Салауат батыр, боландай саңғыла елеп, үҙенең урман төпкөлөндәге өйөнә килеп төшә лә, уҡ-һаҙаҡтарын, тун-бүректәрен сисеп ташлай. Шул саҡта күҙ асып йомғансы баҙҙа боҫоп ятҡан һалдаттар атылып сығалар. Салауат батыр бәғзеһен һуғып йыға, бәғзеһен тибеп осора, ғәскәр тиклем ғәскәргә бер үҙе генә була. Уны тотоп алып, ҡулын көскә артҡа ҡайырып бәйләп сыуал артына килтереп йығалар.

Шунда ғына Ҡырмаһаҡал батша, иркенләп алып, йоҡларға ята. Ғәскәрҙәрен был келәткә йоҡларға ятҡыра. Ҡырмаһаҡал батша йоҡоға китеү менән, Салауат батырҙың бәләкәй ҡыҙы сөйҙә эленеп торған әлеңге тылсымлы булат ҡылысҡа үреләә. Ҡыҙының буйы етмәй торғанда, әпсәһе уяньш китеп, улын ебәрә. Ҡылысҡа улы үреләә Салауат батырҙың. Улы ҡылысты сөйҙән алып, атаһына, сыуал артына апара. Салауат батыр ҡылыстың осон ауыҙына ҡабып, улы һабынан тотоп, аяҡ-ҡулға бәйләп ҡуйған бауҙы киҫеп өҙәләр. Шунан Салауат батыр, ярһыған арыҫландай, ырғып тороп, баяғы үҙен бәйләгән һалдаттарҙың башын ҡырҡып сыҡҡан, ти.

Бер заман Ҡырмаһаҡал батша уяньш китә. Уны-быны белмәй, бик эре атлап килә был Салауат батыр янына, сыуал артына. Килә лә:

— Йә, батыр, ниндәй төш күрҙең? — тип һорай.

Салауат әйтә:

— Минең төш һиңә ярамаҫ, — ти, — үҙең ниндәй төш күрҙең?

Ҡырмаһаҡал һыңар күҙен ҡыҫа бирәп, эре генә әйтә:

— Дошманым Салауат батырҙың, ҡулдары ҡайырылып, бәйләнеп ташланғанын күрҙем, — ти.

Шул саҡ Салауат батыр ятҡан еренән иҫе китмәй генә әйтә:

— Мин Ҡырмаһаҡал батша ғәскәренең башы ҡырҡылып ташланғанын күрҙем, — ти.

Ҡырмаһаҡал батша, ғәскәрен барларға тип, ишеккә ынтылған икән, Салауат батырҙың тауышы тағы яңғыраған:

— Юлың тупһанан ары уҙмаҫ! — тигән. Салауат батырҙың ҡылысы батша башын сабып осорған.

— Үҙ башыңа булғыры! — тип, Салауат батыр Ҡырмаһаҡал батшаның башын ҡоҙғонға ырғытҡан.

Шулай булған ул Салауат.

## 267. САЛАУАТТЫҢ СИТТӘ ЙӨРӨП ҠАЙТҠАНЫ

Баярҙар, заводчиктар башҡорт ерен алып, Эҫем заводын[1] ҡорғас, тағы ла киңәйтергә теләп, йорттар һала башлағандар. Был эште күреп, башҡорттар шаулай башлаған. Эш көндән-көн ҙурая барып, башҡорттар менән заводчиктар араһында һуғыш киткән. Был ваҡыт Салауат 16—17 йәштәрҙә булған. Заводчиктарға ҡаршы сыҡҡан халыҡ араһында ул да ҡатнашҡан. Үҙенең йәш кенә булыуына ҡарамаҫтан, Салауат был ҡораллы бәрелештәрҙә батырлыҡ күрһәткән. Бөтә халыҡ, уның ғәйрәтен, һәләтлеген күреп, хайран ҡалған.

Ошо һуғышта ҡатнашҡан бер ҡарт уҙамандарын йыйып алған да:

— Ҡарттар, мин һеҙгә мәслихәт итәйем әле, — тигән. — Әле генә булып үткән һуғышта Салауаттың батырлығын күреп хайран ҡалдым. Ул барып һуғышҡа башлаған срҙә һис кем сыҙамай. Был баланы былай ҡороға ғына йөрөтөп, әрәм итергә ярамай. Уны ил батыры яһарға кәрәк. Һеҙ ҡайтҡас та, Юлай түрә менән ҡатынына, Салауат һуғышта үлеп ҡалды, тиерһегеҙ. Ә мин уны изге юлға төшөрәйем, — тигән, ти.

Шунан һуң был ҡарт Салауатты Пугачев янына алып киткән, ти. Шулай итеп, Салауат был китеүҙән ике-өс йыл йөрөп, кире ауылына ҡайтҡан.

Әлеге ҡарттың һорауы буйынса, һуғыштан ҡайтҡан халыҡ Юлайға ла, Салауаттың ҡатынына ла «Салауат үлеп ҡалды» тип ышандырған икән. Шуға күрә Салауатты ҡайтыр тип уйламағандар.

Бына шулай ямғырлы мәлдең ҡараңғы төнөндә берәү Юлай ҡарттың ишеген ҡаға башлай. Салауаттың: «Атай, мин ҡайттым», — тип ҡысҡырыуына Юлай ҡарт ышанып етмәгән. Шулай ҙа: «Әгәр һин Салауат булһаң, атайыңдың, әсәйеңдең, ҡатыныңдың, туғандарыңдың исемдәрен әйтеп сыҡ», — тигән. Салауат барын да әйтеп сыҡҡан. Шунан һуң Юлай ҙа Салауаттың тауышын тамам танып, ишеген асып керткән.

Салауаттың һау-сәләмәт ҡайтыуы Юлай ҡарт өсөн дә ҙур шатлыҡ тыуҙырған.

Ошо ҡайтыуҙан оҙаҡ та үтмәй, күрәһең, Пугачев менән һөйләшеп ҡайтҡанға, Салауат ғәскәр йыйыу тураһында уйлай башлай. Бер көн кис атаһына:

— Атай, тирә-яҡта болалар бара, һин миңә гәскәр бир, мин шул ғәскәр менән батша[2] ғәскәренә ярҙамға барам, — ти.

Атаһы улының был фекерено ҡушылып, ғәскәр бирә, Салауат уларҙы Пугачев ғәскәренә алып барып ҡуша.

## 268. САЛАУАТ ТЕЛМӘРЕ

— Ҡазактар араһында был көндәрҙә бик ҙур эш сығып тора, — ти Салауат үҙенең телмәрендә. — Дон яғынан бер Бугас

тигән батыр килеп сығып, батша түрәләренә ҡаршы һуғыш башланы. Ул батыр хаҡында халыҡ араһында: «Ул Әбей батшаның ире Петр икән», — тигән хәбәрҙәр ҙә йөрөй. Ул батырҙан мин хәбәр алдым. Ул: «Башҡорттарға мин ирек бирәм, — ти. Үҙ илдәренә үҙҙәре баш булһындар, башҡорттар үҙ илдәрендә теләһә ҡош булып осһондар, теләһә балыҡ булып йөҙһөндәр», — ти. Батша түрәләренә, баярҙарға, һанаттарға бик яман күҙ менән ҡарай.

Мин бөтә илдәрҙән хәбәр алдым. Ошо форсаттан файҙаланып, Бөрйән, Тамъян, Түңгәүер, Үҫәргән, Табын, Ҡатай, Юрматы, Ҡыпсаҡ илдәре[1] бере лә ҡалмай, күтәрелергә тора.

Бугас — батшамы, түгелме, уныһында беҙҙең эшебеҙ юҡ. Бугас — түрәләргә, баярҙарға ҡаршы. Беҙгә шул етә.

Беҙ утыҙ һигеҙ йыл[2] буйына тыныс тороп, батша түрәләренә хеҙмәт итеп, ни ҡушһалар, шуны эшләп, ни һораһалар, шуны биреп ҡараныҡ. Бының менән түрәләрҙең йәбер-золомо туҡталманы. Беҙҙең был тыныслығыбыҙҙан файҙаланып, илгә баярҙар тула. Йөҙәр, меңәр башлап малдарыбыҙ талана. Фискалдар йөрөп, көн һайын йөҙәрләп ил ағаларыбыҙҙы һуғалар, үлтерәләр, тотоп ситкә ебәрәләр.

Башҡорт болалары баҫтырылып, башлыҡтары һәммәһе ҡулға алынғас, Бахметов тигән бер майор өс йөҙ һалдат менән яңынан килеп сығып, башҡорт ауылдарын яндырып, ҡатын-ҡыҙҙарын йыйып, барыһын да әсир алып китте, — ти. Шунан Салауат ғәскәренә ҡарап:

— Беҙ «Башҡорт илен, башҡорт иркен һаҡлаймын», — тигәндәре өсөн Ур[3] тамағында үлтерелгән биш мең ҡоралһыҙ башҡорттоң, Яйыҡҡа батырылған өс мең башҡорттоң, Минзәләлә үлтерелгән Анғар, Килмәт, Әлшәй, Юлдаш, Әмин, Батыршаның, бынан ун ете йыл борон яндырылған башҡорт ауылдарының ҡонон Бугасҡа ҡушылыу менән алырға тейешбеҙ, — ти ҙә, шунда йыйылған халыҡҡа төбәп, түбәндәге һүҙҙәрен әйтә:

— Туйҙа, майҙанда көрәшеп кеше йығыу менән генә кеше балуан булмай, илен эйәртеп, ил ирке өсөн дошманын еңеп, ил күрке булыу, бына шул була балуанлыҡ.

Батырмын, тип кем әйтмәй,
Яу килгәндә йәне юҡ.
Сәсәнмен, тип кем әйтмәй,
Дау килгәндә өнө юҡ.

Танауынан һайлап алған һылыуынан ҡанлы йәш түктермәй, ата-инәнҙең ҡайғы менән билен бөктөрмәй, башҡорт иленә һайлап ҡуйған ирек бармы?

Ялп-йолп иткән ябалаҡ
Яҙмышта кемгә юлдаш булмаған,
Бутәгәләй үлән, буҙ ялан,
Кемгә генә түшәк булмаған?
Яғаһына ҡош оялап,

Ир башҡорттоң башы ҡайҙа ятып ҡалмаған?
Хахылдап, ҡан түкөрмәй,
Үлән түшән, ит еймәй,
Ҡан күпертеп, һурпа эсмәй,
Хәләл ҡаныңды түкмәй,
Башҡортҡа тиң ирек буламы? —

ти.

Был һүҙҙәрҙән һуң Салауат батыр, халыҡҡа ҡулы менән бер күмер күрһәтеп:

— Бына был яндырылған башҡорт ауылдарының күмере. Бына ошо күмер гәуаһ * булһын, — башҡорт егеттәренең ҡаны, ҡол итеп һатылған, мәсхәрә ителгән башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының намыҫы өсөн ошо ерҙә беҙ дошмандан үс алырға ант итәйек, — ти.

Бөтә башҡорт ғәскәре, шул күмерҙе үбеп ант итеп, Бугасҡа ҡушылырға китә [4].

## 269. САЛАУАТ МЕНӘН ПУГАЧЕВТЫҢ ДУҪЛАШҠАНЫ

Салауат батырҙың атаһы Юлай ҡарт волость старшинаһы була. Уралға батша Петр Федорович (Пугачевты шулай атағандар) килеп сыҡҡас, Юлай үҙенең башҡорттарына:

— Тыуған төйәкте йәбер-золомдан ҡотҡарырға кәрәк, — ти.

Башҡорттар шунда, атлы ғәскәр төҙөп, Салауатты баш итеп һайлайҙар ҙа Пугачевҡа ебәрәләр [1]. Пугачев ул саҡ Ырымбурҙы ҡамап тора икән [2]. Ҡалаға туҡһан саҡрымдай ҡалғас, Салауат Пугачев ғәскәрен күрә. Батшаны нисек табырға, тип һораша ла Пугачевҡа китә. Пугачев:

— Башҡорттар ҙа минең менән булғас, бик шәп булды әле. Рәхмәт! — тип, бик ҡыуанып ҡаршы ала.

Шунда уҡ Салауатты полковник итеп тәғәйенләй ҙә башҡорттарҙы тағы ла күберәк йыйып килтерергә ауылдарға сығарып ебәрә.

Салауат атлылары Ырымбур эргәһендә батша ғәскәрҙәренә ҡаршы рус казактары менән бергәләп һуғышалар. Һуғыштан һуң Салауат Пугачев менән бергә Елдәк крепосына барғанда, былар һөйләшеп китәләр. Пугачев уға әйтә:

— Һин, Салауат, ҡыйыу батыр икәнһең, — ти.

Шулай итеп улар, Салауат Юлаев менән Емельян Пугачев, бик ныҡ дуҫлашып китәләр.

## 270. САЛАУАТ МЕНӘН ҠАРАҺАҠАЛ

Салауат Юлаев, һуғышып-һуғышып яңғыҙы ҡалғас, аптырағандың көнөнән, Ҡараһаҡалға [1] барып кәңәшләшер булған. Ҡараһаҡал мәмерйәлә йәшәгән ул ваҡытта.

Бер саҡ шул мәмерйәгә китеп барғанда, Салауатты йөҙләп бүре баҫа. Ҡысҡырған тауышҡа Ҡараһаҡал килеп сығып, егетте

ҡотҡарып алып ҡала. Салауат Ҡараһаҡалдан, ҡайҙан ғәскәр алырға тип, кәңәшләшә.

— Балам, белмәйем, булдыра алмаҫһың. Инде халҡыңдан яҙып ҡалғанһың. Мин инде Әстрхан сығырмын, — тигән Ҡараһаҡал.

Ҡараһаҡал ҡартайған көнөндә, Уйыл һыуын үткәс, ҙур эштәр өҫтөндә кәңәштә торғанда, үлеп ҡалған.

## 271. САЛАУАТ МЕНӘН БАЛТАС[1]

Урыҫ батшаһы башҡорттарҙың батыр, һуғышсан халыҡ икәнен белеп, оло яу-фәлән сығып китһә, уларҙы яуға аты-ние менән саҡырыр булған.

Бер заман прусактар менән һуғыш башланғас[2], башҡорттарҙы яу сабырға саҡырып батшанан фарман килгән. Күп ир-егеттәр менән атҡа атланып, Танып буйҙарынан Ҡыйғаҙы, Балтас тигән старшина, Йүрүҙән яҡтарынан Юлай батыр яуға киткән. Балтик диңгеҙе буйында дошманды ҡыйратҡас, батша башҡорт ғәскәрҙәрен йыйып алған да, башлыҡтарының теләгенә, хеҙмәтенә ҡарап, төрлө бүләк, чиндар биргән. Теләге буйынса Ҡыйғаҙы батыр ер-урман, Балтас — фәҡәт аҡса алған. Юлайға ер-һыу ҙа, миҙал да тейгән.

Ҡолой Балтастың ере былай ҙа күп булған. Шулай ҙа, яуҙан ҡайтып күпмелер йәшәгәс, хәҙерге Илекәй ауылы яҡтарындағы урманлы-туғайлы, йылғалы, күлле ерҙәргә күҙе төшкән, шул ерҙәрҙе лә үҙенеке итергә ҡыҙыҡҡан.

Ул заманда ошо яҡтарҙа Илекәй менән Дауыт исемле ике батыр йәшәгән икән. Был ике батыр әйткән: «Беҙҙең дә ул ерҙәргә күҙебеҙ ҡыҙа, тик уны әйтергә ҡыймай ғына йөрөнөк, — тигәндәр. — Улайһа, өс уҙаман, ил-йорт башы, йәрәбә һалайыҡ. Йәрәбә кемгә сыға, ер шуныҡы булыр».

Ҡолой Балтас быға ризалашмаған, көрәшеп ҡарайыҡ, тигән. «Көрәштә кем өс тапҡыр еңә, ер шуныҡы булыр», — тип шарт ҡуйған. Ни өсөн тигәндә, Ҡолой теге батырҙарға ҡарағанда ла бәһлеүәнерәк икән. Ҡолойҙоң ауырлығы ғына ла туғыҙ боттан артығыраҡ булған.

Ни эшләмәк кәрәк, намыҫланған батырҙар Балтастың шартына күнгәндәр. Көрәш башланған. Башта Илекәй менән Дауыт көрәшкән. Илекәй еңгән. Шунан Балтас менән алыша башлаған. Башта Балтас Илекәйҙе ике тапҡыр йыҡҡан. Өсөнсө көндө Илекәй Балтасты, шул ғәләмәт дәү, ауыр әҙәмде, һелтәп ебәргән. Алыш тағы ҡыҙған. Балтас күпме сәмләнһә лә, Илекәйҙән еңелгән. Шулай итеп, Илекәй беренсе батыр булып сыҡҡан, әлеге бәхәсле ерҙәр уға тейгән. Хәҙерге Илекәй ауылы ана шул Илекәй батырҙан ҡалған.

Ҡолой Балтас әлеге көрәштәге шарт буйынса хәҙерге Иҫке Балтас ауылы урынында нигеҙләнгән, Дауыт батырға хәҙерге Дауыт ауылы ерҙәре тейгән.

Илекәй батыр, ни эшләптер, оҙаҡ йәшәй алмаған, ҡапыл ғына үлеп киткән. Үлер алдынан былай тигән: «Мин теге ваҡытта көрәшкәндә Балтас өҫтөмә төшөп күкрәгемде имгәтер тип ҡурҡып, башта ике тапҡыр еңелдем, аҙаҡ сәмләнеп, рәттән өс тапҡыр Балтасты ендем. Шунда миңә көс төшкән кеүек ине. Үҙем сырхауымды хәрәм төшөүҙән күрәм. Мин Балтасты тубығым менән сала биреберәк йыҡтым. Шуның өсөн минең был хәрәм кергән кәүҙәмде хәләл ергә күммәгеҙ. Йылға аръяғына ситкә күмегеҙ» [3], — тигән.

Илекәй батыр шулай итеп үҙе әйткән ергә, йылға аръяғына күмелгән. Ул ҡәберҙең урыны әле лә һаҡланған.

Бер заманды Пугач яуы сығып киткән. Башҡорттар ике ярға айырылған: берәүҙәре Пугач батша яҡлы, бәғзеләре Әбей батша яҡлы.

Салауат менән атаһы Юлай етәкселегендә башҡорттар Пугачҡа ҡушылған.

Ҡолой Балтас үҙе ҡурҡаҡ, үҙе хәйләкәр, хөсөт бер әҙәм булған. Башта ул, Әбей батша фарманы буйынса, уға кешеләр йыйып оҙатҡан. Үҙе, старшина кеше, теге-был һылтауҙар менән яуға бармай ҡала килгән. Пугач менән Салауат ғәскәрҙәре еңеп алып киткәс, ул оло шом-хафаға төшкән. Бер мәл ҡурҡып шымып ҡалған. Үҙен теге яҡҡа ла, был яҡҡа ла артыҡ ҡыҫылмаҫ кеше итеп күрһәтергә тырышҡан. Аҫтан Пугач менән Салауат яҡлыларға ҡаршы шымсылыҡ алып барған.

Ҡолой Балтас ҡурҡышынан күп байлығын, мал-мөлкәтен йәшереп бөткән: алтын-көмөш әйберҙәрен Ҡарыш [4] йылғаһына һалған, тиҙәр.

Бик ҡаты бер һуғыштан һуң, Салауат аҙ ҡалған ғәскәре менән Балтас яҡтарына килеп сыҡҡан. Ғәскәренә хәл алдырыу өсөн, Нөркә ауылы янындағы һөҙәк тауға лагерь ҡорған. Килеп урынлашҡас та, Нөркәгә бер сапҡын ебәргән. Ауыл халҡы Салауат ғәскәрен хөрмәт менән ҡаршы алған. Шул кисте үк, мал-тыуар һуйып, һый-хөрмәт ойоштороғандар. Быны ауылдың аҡһаҡалы Муса ҡарт [5] башлап йөрөгән. Аҙаҡ ул Салауат менән бик ныҡ дуҫлашып киткән.

Тирә-яҡ ауыл халыҡтары ла Салауат ғәскәренә аҙыҡ-түлек ташыған, ғәскәр биргән. Нөркә ауылының көнсығышындағы бер яҫы ҡалҡыулыҡта, аты-ние, ҡорал, кейеме менән яуға килеп ҡушылған ир-егеттәрҙе Салауат үҙе ҡабул итеп ҡөрьән үптереп, ант иттереп ғәскәр яһаған. Муса ҡарт та үҙенең еткән ике улын Салауат ғәскәренә ҡушҡан. «Ил-йортҡа, Салауатҡа намыҫ менән хеҙмәт итегеҙ», — тип яуға оҙатып ҡалған. Ана шул ғәскәр ҡабул итер тау моронон әле лә Прием тауы тип йөрөтәләр. Ошо тау янында соҡор-саҡырлы һаҙламыҡ урындар күп булған. Салауат үҙ ғәскәрен үткәрер өсөн шул һаҙ аша тупраҡтан күпер һалдыртҡан. Ул күперҙең эҙе әле лә ярылып ята. Салауат һыҙаны тиҙәр хәҙер ҙә уны.

Нөркә янында Салауат ғәскәре байтаҡ ҡына ятҡан. Шунан 15—18 саҡрым ерҙә Әбей батша ғәскәре лагерь ҡорған. Ике арала бер-ике тапҡыр яу булып алған. Шул Әбей батша ғәскәре лагерь

ҡорған ерҙе хәҙер Торлағыр, тиҙәр. Йәғни «торған лагерь» урыны тигән һүҙ. Унда ҙур ғына урҙарҙың эҙе лә бар: шул тирәнән, Нөркә тауы янынан, әле лә төрлө уҡ башаҡтары, һуғыш ҡоралдары табыла, тиҙәр.

Шул 15—18 саҡрымлыҡ ике лагерь араһынан тауҙан-тауға уҡ менән атышҡандар. Уҡ-йәйәләре былай ғына булмаған уларҙың. Йыуан ғына ҡарама йә муйылдан эшләнгән йәйә ҙур бағанаға беркетелгән, кереше ат эсәгенән яһалған булған. Бындай йәйәнең керешен ат менән тарттырып сирттереп ебәргәндәр, ти. Уғы ла уның үҙе оҙон, үҙе йыуан, етмәһә, ҡанатлы булған. Башағы ла ҙур булған.

Салауат был яҡтарға килеп сыҡҡас, Ҡолой Балтасов Әбей батша ғәскәре менән Торлағырға ҡасҡан. Салауат асыуҙан Ҡолойҙон йорт-ҡураһын туҙҙырған, мал-мөлкәттәрен алған.

Салауат үҙ ғәскәрҙәре яулап алған ауыл-ҡалаларҙа йорт-ҡураларҙы яндырыуға ҡаршы булған. Мал-мөлкәтте тәләф итмәгән. Пугач батша ҡаҙнаһын байытыу хәстәрен күргән. Пугач үҙе Салауатҡа ҡаҙнаны аҡса, алтын, көмөш, мал менән байытыу тураһында өйрәткән, тиҙәр. Салауат Эҫем заводын яулап алғас [6], завод аҡсаһын тинен дә әрәм-шәрәм итмәй мисәтләп алып, һаҡ менән Пугачевҡа оҙатҡан, ти.

Пугачев ғәскәре Ҡазан яғына киткәс [7], Салауат етәкселекте үҙ ҡулына алған. Шунда ул дәүләт ҡаҙнаһын да үҙенә йыя башлаған. Ул алдағы яуҙарға әҙерләнер өсөн, ҡалған ҡаҙна аҡсаларын урманға ағас ҡыуыштарына йәшерткән.

Күп йылдарҙан һуң, Илекәй ауылының Салих тигән бер кешеһе урманда бер йыуан ағас ҡыуышынан хазина табып, аҙаҡ бик байып киткән, тиҙәр. Ул байлыҡ шул Салауат хазинаһынан булған икән.

Пугач менән Салауат яуы баҫтырылғас, Ҡолой Балтасов салауатсыларҙан яман үс алған. Бигерәк тә ул Салауат ғәскәренә ҡушылған мариҙарҙы ныҡ ҡыйратҡан, уларҙы ауылы-ауылы менән ситкә һөрҙөрткән. Салауат яҡлыларҙы батша ғәскәренә берәм-берәм тотоп бирешкән. Салауат тотолғас, уны яманлап, ҙур ғәйеп тағып өҫтөнән күп доностар биргән.

Шымсылығы, Салауат яуын баҫтырыуҙағы «хеҙмәттәре» өсөн Ҡолой Балтасовҡа Ырымбур губернаторы ҡылыс бүләк иткән. Алтын-көмөш йүгертелгән был ҡылысҡа бер аят яҙылғайны. Мин уны бәләкәйерәк саҡта Шәйхетдин бабайҙарҙа күргәнем бар ине.

Ҡолой Балтасовҡа эт тиреһенә яҙылған бер ярлыҡ та бирелгән булған. Унда уға дворянлыҡ хаҡында, түләүҙән бушатылыу хаҡында яҙылған булған икән. Кемдер аҙаҡ Ҡолой Балтасовтың был эт тиреһенә яҙылған ярлығын урлап юҡ иткән. Шулай итеп, халыҡтың ҡанын көйҙөрөп, донос өсөн алынған тиреһе лә юҡҡа сыҡҡан.

Тотҡондағы бығаулы Салауатты үҙе яу менән үткән урындарҙа ҡамсы менән һуҡтырып язалап йөрөткәндәр. Нөркә ауылына килгәс, башҡорт батыры Салауат хыянатсы Балтас менән янынан

осрашҡан. Балтас уға ғәйеп таҡҡан. Салауат ғорур рәүештә уларҙы кире ҡаҡҡан. Халыҡ та Балтас ғәйептәрен йөпләмәгән.

## 272. САЛАУАТТЫҢ ӘЙ БУЙЫНДА БУЛҒАНЫ

Салауат батыр Әй буйында ла үҙ дошмандары менән алышҡан. Әй башҡорттары уның яуына ҡушылып, азатлыҡ яулағандар. Урындағы халыҡ Салауат ғәскәренә аҙыҡ-түлек менән ярҙам иткән.

Салауат тирә-яҡ ауылдарҙы йөрөп, ғәскәрҙәрен аҙыҡ, башҡа кәрәк-яраҡ менән тәьмин итеү эшен Юлға һала. Ләмәҙтамаҡ ауылында ғәскәргә кәрәк-яраҡ йыйыусы итеп бәһлеүән кәүҙәле көрәшсе Динекәй (Динислам) тигән кешене тәғәйенләй. Динекәй йыйылған әйберҙәрҙе Дыуан-Мәсетле ауылына Салауаттың казначейҙарына илтә торған булған. Шунда бер нисә тапҡыр Салауат менән осрашҡан. Тик Салауат бында оҙаҡ тормаған. Красноуфимскиға ғәскәр алып киткән. Китер саҡта ул үҙенә ярҙам ҡылған кешеләр менән хушлаша, һәр ҡайһыһына бүләк тапшыра. Динекәйгә биленән көмөш ҡәмәрен сисеп бирә. Юлға сыҡҡас ғәскәр башында былай йырлаған, ти:

Әй әйләнем, Әй әйләнем,
Әй буйында йәйләнем.
Ҡаршы килгән дошмандарҙы
Ҡуй һарыҡтай әйҙәнем.

Бола баҫтырылып, Салауат тотолғас, уның яҡлы кешеләрҙе эҙәрләү башлана. Батша яҡлылар Салауат ярҙамсыларын тотторa башлай. Ҡулға алыуҙар, ҡамсы менән һуғыуҙар китә. Динекәй, ҡурҡып, көмөш ҡәмәрҙе ергә күмә. Аҙаҡ, эҙләп ҡараһа ла, таба алмай. Динекәйҙе батша һалдаттарынан ауылдаштары йәшереп алып ҡала.

Ләмәҙтамаҡ кешеләре Салауат яуында ҡатнашҡан 40-лап кешене Ташлы туғайҙағы (хәҙер «Эгәреү» тип йөрөтөлә) мәмерйәгә йәшерәләр. Уларҙы ҡыш буйы ауыл халҡы ашата. Ул замандарҙа яҙ көндәре Златоуст яғынан Красноуфимскиға һал-карaптар үтә торған булған. Яҙғы ташҡында Әй йылғаһынан улар иркен аҡҡандар. Тик һай урындарҙа ултырғандар. Шуның өсөн һал хужалары һалды оҙатырға кешеләр яллаған. 1776 йылда Салауат кешеләрен берәм-берәм шул һалдар менән оҙата башлайҙар. Әммә барыһын да оҙатып бөтә алмайҙар. Кемдер Дыуанда торған батша һалдаттарына хәбәр итә. Ун ике кешене тотоп алып китәләр. Тик ҡамсы менән туҡмауҙары билдәле, артабан был егеттәрҙең яҙмышы билдәһеҙ.

Бер аҙ донъя тынысланғас, Әй буйы башҡорттары Салауат менән уның атаһы Юлай тураһында иҫтәлектәр һөйләй, йырҙар сығара башлай. Бына уларҙың береһе:

Иртәнсәккәй тороп Салауат
Сыға икән Әй буйының талына.
Бәхет яулау, ирек яулау
Һеңгән булған уның ҡанына.

Ҡаһармандар, ҡылыс алып,
Дошман яуын тағы быуырҙар.
Юҡҡа ғына шатланмаһын дошман —
Салауаттар тағы тыуырҙар.

## 273. САЛАУАТ ҺӘМ УРМАНДА ЙӘШӘГӘН ҠАРТ

Салауат бер ваҡыт яуға сыҡҡанда, ни нәмәһендер онотоп, юлдан кире ҡайтҡан. Шулай һыбай ҡайтып барғанда, бер көтөү бүрегә тап булған. Ҡылысы менән ун икеләп бүрене сапҡылап үлтереп ҡайтып ултырғанда [1], Көрәк (Эҫем заводы) урманында бер өйгә килеп сыҡҡан. Ул өйҙә бер генә ҡарт булған. Ҡарт, Салауат менән һөйләшеп, кем икәнен, ни эш менән йөрөгәнен белгәс:

— Улым, һин миңә ҡарындаш кеше. Мин һине беләм. Бына, һиңә тип, бүләктәр ҙә әҙерләп ҡуйғайным. Мә, ал. Тик ҡайтып еткәнсе асып ҡарама! — тигән.

Ҡайтҡас, Салауат ҡарттың бүләген асып ҡараһа, алтын булып сыҡҡан.

## 274. САЛАУАТ ЯЛАНҒАС ТАУЫНДА

*Яңы Тәпәреш* [1] ауылы ҡаршында *Яланғас* исемле бер тау бар. Бына шул Яланғас тауында элек яу ятҡан. Бында атлы уҡлы ғәскәрҙәр булған. Был ғәскәрҙәрҙең башлығы булып башҡорт халҡының батыр улы Салауат торған. Салауат ғәскәрҙәре Яланғас тауынан тороп, хәҙерге Борай районына ҡараған Ишмәмәт тауҙарына төбәп уҡтан атҡандар. Саҡрым ярым йыраҡлығындағы араны уҡтар осоп үткән.

## 275. САЛАУАТ БАТЫР ШТАБЫ

Салауат йәшәгән заманда Оло-Аҡала бик ҙур бер өй булған. Был өйҙөң бүрәнәләре ҡарағастан булған. Һәр бүрәнәһенең йыуанлығы аршын ярым булған. Ошо өйгә Салауат үҙенең штабын урынлаштырған. Өйҙөң тышында сасауайҙар торған.

Салауат үҙенең сасауайҙарына:

— Һеҙ, туғандар, был өйҙө генә күҙәтмәгеҙ, ә анау ялан буйлап килгән юлдарҙы ла, анау сусаҡ тауҙы ла ныҡ күҙәтегеҙ. Дошман ғәскәре ана шул юлдан килер, — тигән.

Салауат штабы Оло-Аҡа ауылында 15 көн торған. Салауат бында Красноуфимскиға [1] үтеү ыңғайында Пугасинды [2] көтөү һылтауы менән туҡталған. Ул бында Мәсетле аша көнтыуыш яҡ тау итәкләп килгән.

## 276. САЛАУАТ БАТЫРҘЫҢ ДАРЫ СҠЛАДЫ

Салауат батыр Оло-Аҡала торған сағында үҙенең ғәскәрҙәренән дары склады эшләткән. Ул дары склады Аҡанан өс саҡрым тау ҡырыйында булған. Уны был көнгә тиклем берәү ҙә белмәй ине әле. 1927 йылды ауыл халҡы шул тауға балсыҡ ҡаҙырға барҙылар. Уны-быны уйламай, ҡаҙа башланылар. Ҡаҙа торғас, бер өй өҫтөнә барып сыҡтылар. Бүрәнәләре әлеге Салауат штабы йортондағы кеүек аршын ярымлап икән.

Шунан һуң ҡыҙыҡһынып, теге өйҙө ҡаҙа башланылар. Ҡаҙа торғас, эсенән бер нисә йөк дары сыҡты. Дарыны тейәп алып барып волосҡа тапшырҙылар.

Өйҙөң эс яғы бик ҡалын туҙ менән көпләнгән. Белмәйем, ул тиклем ҙур туҙҙы ҡайҙан алғандарҙыр. Ул замапда был тирәлә эре-эре ҡайындар булған, тиҙәр. Күрәһең, ул туҙҙар шул эре ҡайындарҙан һуйылғандарҙыр.

Был Салауат батырҙың дары склады булып сыҡты.

## 277. САЛАУАТ БИҠ ҠЕҮӘТЛЕ БУЛҒАН

Салауаттың Ҡаратаулы ауылынан Мөгөш исемле бик яҡын бер иптәше булған. Мөгөш Салауаттың һәр бер әмерен тоғролоҡ менән үтәгән. Шуның өсөн дә Салауат уға ҙур ышаныс менән ҡараған, уны ратҡан.

Ҡатау заводын яулар алдынан дошмандың көсөн белергә бер кеше ебәрергә кәрәк булған. Оҙаҡ уйлап тормайынса, Салауат унда Мөгөштө ебәргән. Мөгөш заводҡа киткән. Ҡатау крепосына килеп, кескәй бер тәҙрәһенә ҡарауы булған, шул арала уны ағып та йыҡҡандар.

Салауат, эштең былай икәнен һиҙеп, Мөгөш йығылған ергә аты менән сабып барған да, Мөгөштөң ете ботло кәүҙәһен һыңар ҡулы менән генә күтәреп алып, үҙенең яуы торған ергә илтеп күмгән.

## 278. САЛАУАТ БАТЫР МӘРГӘН БУЛҒАН

Салауат бик йылғыр, мәргән кеше булған.

Бер ваҡыт йорт өҫтөнә яу килә ятҡан икән. Яу башында бер батыр иң алдап килгән, ти. Был батыр тотош тимер кейенгән булған, ти.

Салауат ҡарап торған да: «Был батырҙың бер ерен дә уҡ алырлыҡ түгел икән, тик маңлайында ғына асыҡ урын бар, шунда атайым», — тигән.

Уғын алған да, атып Мәүлекәй иптәшенә биреп, үҙе атырға киткән. Күп тә тоҡҡан тормай атып ебәргән. Теге батыр, атынан әйләнеп, тас салҡан йығылып төшкән.

Был хәлде күргәс, килгән яу кире боролған да ҡасҡан.

Мәүләкәй атты Салауатҡа ҡарай алып барған. Ул арала Мәүләкәй күрмәй ҙә ҡалған, Салауат, тауҙан һикереп, атҡа атланып та ултырған, ти.

## 279. САЛАУАТ БАЙҘАРҒА УСАЛ БУЛҒАН

Салауат батыр кешеһенә күрә бик усал булған. Был тирәнең байҙары уның алдында ҡалтырап торғандар. Беҙҙең Ҡыйғыла Абдулла тигән бай булған. Ул Салауатҡа ҡаршы булған. Абдулла байҙың был ҡаршылығы тураһында Ишмәт ҡарт Салауат батырға барып әйткән. Бер ваҡыт Салауат батыр беҙҙең ауылға килгән дә, Абдуллаға ингән, әммә Абдулла өйҙә булмаған. Бай ҡайтҡас, Салауат килгәйне, тигәндәр. Шунан Абдулла бай, «мине үлтерергә итә икән», тип Златоустҡа жандарм алырға киткән. Златоуcттан килгән жандармдар, Салауатты ҡыуа китеп, Аҡанан барып тотҡандар. Салауат ҡарышмай Ҡыйғы ауылына килгән. Шунан Салауат батыр жандармдарҙы пыр туҙҙырып ҡыуып ебәргән дә, Абдулла байҙы зыярат артында атып үлтергән. Абдулланың үлеүенә генә дүрт балаһы килеп еткән. Салауат быларҙы күреп, «атағыҙ яман кеше ине, уның өсөн ҡайғырмағыҙ», тип үҙенең бик ҡиммәтле ҡәмәренән дүрт тәңкәһен алып, балаларға өләшкән.

## 280. САЛАУАТ ПРИКАЗЫ

Салауат үҙенең ғәскәрҙәре менән Сибәләй тирәһендә ятҡан сағында Көсәпәй тигән байға приказ ебәреп ғәскәрҙәренә аҙыҡ килтерергә ҡуша. Көсәпәй тыңларға теләмәй. Салауат икенсеһәй хәбәр ебәрә. Һаман аҙыҡ килтермәйҙәр. Шунан Салауат бик ҡаты итеп өсөнсөләй яҙып ебәргәс, Көсәпәй, күп кенә һарыҡ һуйып, ҡаҙы-ялы, ҡымыҙ алып үҙе килә.

Салауат әйтә: «Ниңә тәүге хәбәр иткәс тә килмәнең?» — ти. Көсәпәй, төрлө һылтау табып, аҡланырға тырыша. Салауат әйтә: «Мин ил өсөн һуғышам, — ти, — һин аяҡ салаһың!» — ти, байҙы үлтерергә әмер бирә.

Бай иңәлә башлай. Салауаттың ярҙамсыһы ла Көсәпәйҙе яҡлашырға керешә, Салауат уны һыңар ҡулы менән генә сөйөп ебәрә лә, байҙы үҙе үлтерә.

## 281. САЛАУАТТЫҢ РУС ҠЫҘЫН АЛҒАНЫ

Салауат Красноуфимскиға барып йөрөгән икән. Шунда бик һылыу бер рус ҡыҙына күҙе төшкән. Рус ҡыҙы ла Салауатты күңел иткән. Шулай итеп бер-береһен бик яратышып киткәндәр.

Салауат Красноуфимскиҙан киткән сағында үҙенең һөйгәненә:

— Ну, сын родится — мой будет, девочка родится — твоя будет, — тигән дә, атына менеп, юлға сыҡҡан.

Салауат һөйгән ҡыҙы янына тиҙ генә бара алмаған.

Бер-ике йылдан һуң барһа, теге ҡыҙы килеп сығып, Салауатты ҡосаҡлаған да:

— Твой будет, — тигән.

Салауат быны аңлап, йүгереп өйгә ингән, ти. Өйҙә бер дәү малайҙың сәңгелдәктә ятҡанын күргән. Малайҙы ҡосаҡлап алған, ти.

Яу ваҡыты булғас, Салауат был бисәһе янында оҙаҡ тора алмаған. Малайҙы айыу тиреһенә төрөп, үҙ ҡуйынына ҡыҫтырып, алып киткән, ти.

Дошман ғәскәренең һуғышҡа әҙерләнгәнен белгәс, Салауат: «Баланы алып йөрөп әрәм итмәйем, берәй кешегә ҡалдырайым»,— тип, уны Ҡыйғы ауылының иң осонда тороусы бер әбейгә биреп ҡалдырған, ти. Салауат әбейгә: «Мин һуғыш бөткәс килеп алырмын, инәй, был баланы һин үҙ балаңдай күреп ҡара инде», — тип әйткән, ти. Шунан ул үҙе ғәскәре менән Ҡатау яғына киткән. Шул китеүҙән әйләнеп ҡайта алмаған. Бала ни эшләгәндер, кем булғандыр, тереме, үлеме, һис хәбәр-хәтер булмаған [1].

## 282. САЛАУАТ УЛЫ

Салауат батыр Пугачев бригадиры булып һуғышып кенәздәрҙе ҡырып йөрөгәндә, Красноуфимскиҙа бер рус ҡыҙына өйләнгән. Унан бер малай тыуған. Эштәрҙең яйы китеп, кире бороловорға тура килгәс, Салауат шул Красноуфимскиҙағы ҡатыны янына кергән. Уның иҫәбе ҡатынын алып китеү булған. Тик ҡатыны киреләнеп торған. Шул арала Салауатты аңдып йөрөгән пристав менән урядник килеп кергәндәр ҙә тотоп алмаҡ булғандар. Салауат, быларҙың икеһен ике яҡҡа үлтерә һуғып, балаһын алып ҡасҡан. Ҡыйғыға килеп етеп, баланы Нурҡылыс тигән ҡартҡа тәрбиәгә биреп киткән. Үҙе Ҡыйғынан туп-тура Ҡалмаҡ ауылы янындағы хәҙер «Салауат дворы» тип йөрөтөлгән урынға барып йәшеренгән.

Салауат янында Кинйә лә булған. Кинйә, эштең насарлығын һиҙеп, Салауатҡа:

— Әйҙә, бөтә аҡсаларҙы алайыҡ та бөгөн үк ҡаҙаҡ яғына ҡасайыҡ, тынысланa төшкәс, тағы ла ғәскәр йыйып, эшкә башларбыҙ, — тигән.

Салауат, үҙенең көсөнә таяныптырмы, пи эшләптер, ашыҡмаған. Ул Кинйәнең һүҙенә ҡаршы:

— Мин әле, Ҡыйғыға барып, улымды алып ҡайтам. Шунан һун китербеҙ, — тигән.

Шул арала йыйынған да сығып киткән. Ошо сығыуынан ул ҡайтмаған. Әбей батша ғәскәрҙәре ҡулына барып эләккән.

Салауаттың Нурҡылыс ҡартта ҡалған улын Ҡулбаҡов Вәлиша, бер нисә йыл үткәс, барып алған да тәрбиәләп үҫтергән. Ул баланың исеме Хәсән булған. Хәсән дә атаһы һымаҡ бик таҙа кәүҙәле, батыр булған, тип һөйләй торғайнылар ҡарттар.

Ул, ир урталарына етәрәк, икенсе Әйле волосында кантон булып торған, ти. Ҡарттар уны бик уҫал булған, асыуы сыҡһа, килгән түрәләрҙе туҡмап ташлай торған булған, тип һөйләйҙәр ине.

## 283. САЛАУАТ УЛЫ ХӘСӘН

Салауат батыр Пугачев менән бергә йөрөгән сағында Пермда бер рус купецының ҡыҙына өйләнгән. Был ҡыҙҙан бер бала тыуған. Ҡыҙ Салауат менән бергә китергә риза булмағас, батыр улын үҙе менән алып киткән. Был бала Ҡолбаҡ[1] ауылында үҫкән. Уның Салауат улы икәнен тәрбиәләгән кешенән башҡа берәү ҙә белмәгән.

Ҡолбаҡ ауылында үҙ заманында бик данлы бер кантон булған. Ул кантон Хәсән исемле булған, ти. Хәсән кантон становой приставтарҙы ҡамсылап йөрөтә торғайны, тип һөйләйҙәр.

Хәсән кантон бер нәмәнән дә ҡурҡмаҫ батыр йөрәкле булған. Бына шул Хәсән кантон — Салауаттың улы булған икән, тиҙәр.

## 284. САЛАУАТ ҠАТЫНЫ

Салауат батырҙың өс ҡатыны булған икән тип һөйләйҙәр. Шуның береһе ҡалмыҡ ҡыҙы булып, унан бер бала тыуған. Әсәһе ташлап киткәс, шул баланы тоҡҡа һалып, Ҡолбаҡ ауылына килтергәндәр. Был ауылда хәҙер ике төрлө халыҡ[1] йәшәй: береһе — ҡомой, икенсеһе — ҡалмыҡ. Ҡалмыҡтары Салауаттың өсөнсө бисәһенән киткән. Ҡолбаҡҡа баланы тоғоска (тоҡҡа) һалып килтергәнгә күрә, ауылдың ҡалмыҡтар нәҫелен «тоғос» тип йөрөтәләр.

## 285. САЛАУАТТЫҢ ТОТОЛҒАНЫ

Салауат Әбей батша ғәскәренә ҡаршы һуғышта еңелгәс, бик күп ваҡыттар ҡасып йөрөгән. Уның ҡасып ятҡан ере Ҡалмаҡ ауылы эргәһендәге һаҙлыҡта булған, ти. Ул һаҙлыҡҡа бер кем дә керә алмаған. Шулай ҡасып йөрөй торғас, ҡыш керер алдынан Салауатты Ҡалмаҡ ауылындағы үсле кешеләре күргәндәр ҙә батша һалдаттары башлығына әйткәндәр. Һалдаттар һаҙлыҡты ҡамап алғандар. Салауат, был эште һиҙеп, һаҙлыҡтан Ҡаратауға ҡасҡан. Шул ерҙә уға һалдаттар тап булып:

— Һин ниндәй кеше? — тип һорағандар. Салауат быларға:

— Мин һунарсы, — тип яуаплаған.

Һалдаттар Салауаттың ай-вайына ҡуймай алып киткәндәр. Башлыҡтары был «һунарсының» Салауат икәнен белеп ҡалған да бағанаға бәйләп ҡуйырға ҡушҡан. Салауатты Шағанай[1] ауылына алып барып бағанаға бәйләгәндәр ҙә, «башҡаларға ғибрәт булһын» тип, бөтә ауыл халҡын йыйғандар.

Салауаттың Кинйә исемле яҡын бер иптәше булған икән. Халыҡ йыйылған ергә ул да килгән. Килеп Салауатты күргәс тә, ғәскәр башлығы янына барып әйтә икән:

— Был яуыз кеше мине лә бик интектерҙе. Мин унан күп зарар күрҙем. Әле тотолғанын ишеткәс, туҡмап ҡалайым тип килдем, — тигән.

Шунан ул түрәләрҙән рөхсәт алған да, Салауат янына барып, туҡмаған кеше булып, Салауаттың бауын ҡырҡа башлаған. Киҫеп бөтөм тигәндә генә, быны күреп ҡалғандар ҙа, үҙен дә тотоп, бәйләп ҡуйғандар [2].

## 286. САЛАУАТТЫҢ ТОТОЛҒАНЫ

*(вариант)*

Салауат яраланып, ҡаты һуғыштарҙа иптәштәренән яҙып бөткәс, яңғыҙы ғына Малаяҙ [1] ауылына килгән. Бер «дуҫы» уны бал эсереп хөрмәт итә башлаған, үҙе шул ваҡыт Салауатты эҙләп йөрөүсе отрядҡа хәбәр ебәргән.

Салауат балға ҡыҙып еткән саҡта ғына, ауылды һалдаттар уратып алғандар. Салауат, ырғып тороп, уҡ-һаҙағын ала һалған да, тышҡа сығып, саңғыларын кейеп, ҡаса башлаған. Уны тота алмағандар. Ҡасып барғанда, һыңар саңғыһы һынып ҡалған, ти.

Салауат Ҡалмаҡ ауылына ҡарай юл тотҡан. Уға ҡаршы яҡтан да килә башлағандар. Салауат ауылға һуғылмай, тура тауға ынтылған. Шул ваҡыт уны Әбей батша һалдаттары ҡыуып килеп тотоп алғандар [2].

## 287. САЛАУАТТЫҢ ҒАИЛӘҺЕНЕҢ ҺӘЛӘКӘТЕ

Салауат тотолгас, бисәһен, туғандарын, әсәһен тотоп Өфөгә оҙатҡандар.

Ул ваҡытта Ағиҙел ташҡан саҡ булған. Һыу аша борам ғына йөрөгән. Ағиҙелде сыҡҡан саҡта: «Барыбер беҙгә көн күрһәтмәҫтәр, дошман ирксенә ҡалғансы, үҙебеҙ бөтөйөк!» — тигәндәр ҙә, бөтәһе лә һыуға ташланғандар [1]...

## 288. ТАУҘАРҘА НИЛЕКТӘН ГӘЛСӘР КҮП?

Салауат батырҙы тотоп, мәңгелек һөргөнгә ебәргәс, бөтә Башҡортостан зар илаған. Кешеләр берәмләп тә, бөтә бала-сағалары менән дә, тотош ауылдары менән дә йәш ҡойған. Күҙ йәштәрен бер-берсеһенә күрһәтмәҫ өсөн, кешеләр тауҙарға китеп тә ҡайғырышҡандар.

Саф, ҡайнар булган халыҡтың күҙ йәше. Ҡая таштарға тәгәрәп төшөп, хәсрәтле ергә һеңеп, был күҙ йәштәре гәлсәргә әүерелгән.

Шуға күрә хәҙер берәй гәлсәр бөртөгөн тапһалар, был урында яңғыҙы ғына бер кеше илаған, тиҙәр. Ә гәлсәр күберәк табылған ерҙә — бөтә өй эсе, ә бик күп булған ерҙә тотош ауыл илаған, имеш.



*Тау сере*



*Балаҡарға*



*Толбуйӡар*



*Бошман-Ҡыпсаҡ батыр*



*Салауат менән Пугачев*



*Эрме*



*Кэмилэ*



*Зөһрә йондоҙ*

## 289. ЭЛЕҠ САЛАУАТ ТУРАҺЫНДА ЙЫРЛАТМАЙҘАР ИНЕ

1890 йылды беҙҙең ауылда йыйын булғайны. Мин бер йыйындан да ҡалмай скрипка уйнап, йырлап йөрөгән кешемен үҙем. Был йыйында ла халыҡ араһына инеп, төрлө көйҙәрҙе уйнап, йырлап ултырҙым да, халыҡтың һорауы буйынса, Салауат батыр көйөн һыҙып ебәрҙем. Йырлап та алдым. Бер-ике йырын йырлауым булды, яныма Хөснуллин тигән урядниктың килеп баҫыуы булды.

— Ҡайҙан сыҡҡан был йыр? — ти Хөснулла урядник. — Кем ҡушты һиңә уны йырларға?

Был ҡылыслының екеренеүе мине ҡурҡыта төштө. Аптырағас мин әйтәм:

— Был йыр, господин урядник, Салауат батыр йыры, — тим.— Ул миңә кейәү тейешле кеше булған, — тим.

Ошо һүҙҙәрҙән һуң мине Хөснуллин урядник йыйындан алып китте лә биш тәүлеккә ябып ҡуйҙы.

## 290. САЛАУАТТЫҢ ҠЫЛЫСЫ МЕНӘН СУҠМАРЫ

Салауатсыларҙың ҡылысы менән суҡмары Тулыбай ауылында һаҡланған. Ҡылысы кәкре, һабы еҙҙән эшләнгән. Тотҡос өҫтөнән еҙ селтәр сыбыҡ үткәрелгән. Ә суҡмарҙың башын тамыр ағасты йоморолап эшләгәндәр. Тирә-яғын әйләндереп тимер тештәр ҡуйылған. Был ҡылыс менән суҡмарҙы атайым: «Салауат яуынан ҡалған изге ҡорал», — тип ҡат-ҡат киҫәтә ине.

## 291. САЛАУАТ ҠАМСЫҺЫ

Нөркә ауылы Хайбрахман атаһы Фазылбәковта Салауат Юлаевтың ҡамсыһы һаҡланған. Ул уны бик ҡәҙерләп түрҙә генә тотҡан. Намаҙлыҡ йәймәһе эленгән ағас сөйгә генә элеп ҡуя торған булған.

Атайҙарының өйрәтеүе буйынса, балалары ла Салауат ҡамсыһын бик изге, шомло-серле бер нәмә тип уйлағандар, оҙаҡ йылдар һаҡлап тотҡандар.

## 292. САЛАУАТ ЭЙӘРЕ

Нөркә ауылында Салауат батыр оҙаҡ ваҡыттар ҡунаҡ булып ятҡан. Шул ауылда Муса Ҡәҙермәтовтың улының улы Ҡисрә ҡартта Салауаттың эйәре һаҡланған. Был эйәрҙең алғы башына ҡайыштан суҡ тағылған. Айылы — киң. Өҙәңгеһе тимер түгел. Ҡамыш һымаҡ ағастан бөгөп эшләнгән. Шымарғанлыҡтан өҙәңгеһе ялтырап тора ине. Мин малай сағымда Ҡисрә ҡарт янып китте. Булған мөлкәте менән бергә Салауат эйәре лә шунда янды.

## 293. ПУГАЧ МЕНӘН САЛАУАТ ЮЛЫ

Пугач менән Салауат яуы ваҡытында Әбей батша армияһының бер нисә батальонын ҡыҫырыҡлай-ҡыҫырыҡлай Бөрө, Дүртөйлө, Мәскәү ауылдары яҡтарынан ҙур ғына яу үткән, тиҙәр. Саҡмағош ауылы янында Себекәй йылғаһының уң яҡ ярындағы урманлыҡта Әбей батша ғәскәре ятҡан. Шул тирәлә ҡаты ғына яу булып алған. Әбей батша ғәскәре сигенгән.

Пугач менән Салауат ғәскәре Туйыҙҡыуыш, Саҡмағош, Бәләкәй Суҡты, Иҫке Балаҡ, Ҡамай ауылдары аша көнсығыштан көнбайышҡа үтеп киткәндәр. Шул тирәнән үткән яу юлын халыҡ Салауат юлы йәки Сәбә юлы тип атаған. Сәбә — йәшел юл тигәнде аңлата.

Был үткән юл ул заманда таулыҡ, урманлыҡ булған. Өфө ҡалаһында торған батша ғәскәрҙәре арттан төшмәһен өсөн, Салауат үҙ ғәскәренең эҙен йәшерергә тырышҡан, ти. Шуға ул күберәк урман юлдарын һайлаған. Ғәскәр үтеп киткән, ә юл йәшел урман менән ҡаплана барған. Яу эҙе шулайтып әллә ни беленмәгән. Сәбә — йәшел юлдың — мәғәнәһе ана шунан килә.

Урман юлын үтешләй, Салауат атын бер матур аҡландағы ҡайын янына туҡтатҡан. Ғәскәрен шунда ҡуна ҡалырға бойорған. Батырға шул ҡайын янында урын әҙерләгәндәр. Салауаттың йән дуҫы Кинйә шул ваҡыт күрше тауҙағы шишмәнән һалҡын һыу алып килгән. Улар ауыр юлдан һуң һалҡын шишмә һыуы менән рәхәтләнеп йыуынғандар ҙа, кинәнеп сәй эскәндәр. Ул шишмә әле лә бар.

Салауат яуҙа үлгән һуғышсыларын ошо шишмә һыуында йыуып, йыназа уҡып күмергә ҡушҡан. Уларҙы Базы [1] йылғаһының уң яҡ ярына бер саҡрым йыраҡлыҡта күмгәндәр.

Шулай бер төн ҡунып, иртәгеһен Пугач менән Салауат ғәскәрҙәре Ҡазан табан юл тотҡан [2].

Салауат атын бәйләгән был ҡайынды Салауат ҡайыны тип йөрөтәләр. Ул иҫтәлекле ҡайын оло батыр хөрмәтенә хәҙер колхоз тарафынан кәртәләп алынған, эргәһенә эскәмйәләр яһалған. Уны тарихи ҡомартҡы итеп ҡәҙерләп һаҡлайбыҙ.

Беҙҙең Саҡмағош мәктәбе музейында Пугач менән Салауат яуҙарынан ҡалған хәнйәрҙәр, уҡ башаҡтары ла бар. Улар нефтселәр поселогын төҙөгәндә табылды. Ана шул яу үткән, яу булған тирәләрҙән.

## 294. САЛАУАТ КҮПЕРЕ

Һүрәм [1] ауылынан йыраҡ түгел бер күпер бар. Уны Салауат күпере тип йөрөтәләр. Ниңә тиһәң, был урында ике йөҙ йыл элек Салауат Юлаев ҡушыуы буйынса Һүрәм аша ҡайын күпер һалынған. Шул күперҙән аръяҡҡа Пугачев ғәскәренең туптарын сығарғандар икән.

## 295. САЛАУАТ МӘМЕРЙӘҺЕ

Йүрүҙәнгә ҡойған Һөләклә йылғаһының ҡаялы ярында Салауат мәмерйәһе бар. Салауат батыр унда батша һалдаттарынан йәшеренеп ятҡан, тиҙәр.

Мәмерйәгә, йылан һымаҡ бормаланып, текә яр башынан ҡая битен яғалап бер һуҡмаҡ үтә. Был — Салауат һуҡмағы. Оҙонлоғо йөҙ илле аҙымдай ғына. Тау ҡыуышына Салауат ошо һуҡмаҡ буйлап менеп йөрөгән.

Ҡатау заводына ингәндә, крепостной эшселәр Салауатты икмәк-тоҙ менән ҡаршы алғандар. Бик күптәре Салауатҡа ҡушылып киткән. Шуға күрә, Салауат тотолоп, хөкөм ителгәс, Ырымбур суд палатаһы уны, халыҡ асыуынан ҡурҡып, Ҡатау-Тамаҡ крепосында язалап йөрөтөүҙе лә тыйған була.

## 296. БҮГӘС МЕНӘН САЛАУАТ ТАШЫ

Беҙҙең Ыҫмаҡай ауылы тирәһендә, Әүжән менән Туҡан юлы буйында, бер тау бар. Шул тау башында мүк баҫып бөткән бер таш ята.

Ташта ат тояғы менән ҡолон тояғы эҙҙәре уйылып ҡалған. Имеш, ҡасандыр Емельян Пугачев менән Салауат Юлаев, үҙ ғәскәрҙәренә юл ҡарап, ошо таш өҫтөндә һыбай торғандар.

Ҡарттар, тояҡ эҙе Салауат батырҙың ҡолонлаған бейәһе менән ҡолононан тороп ҡалған, имеш, тип һөйләй торғайнылар.

## 297. ҠӘШМӘР ТАУЫ, ШӘҺИТТӘР ҠЫРАҺЫ

Ҡәшмәр тауы бар. Ҡыйғы районы Үргө Ҡыйғы ауылынан һигеҙ километр көнбайышта, Ибрай ауылына табан, Соңҡа йылғаһының һул яғында. Элек унда Ҡәшмәр ауылы булған. Уны яндырғандар. Йүкәле ауылы ла Салауат яуында яндырылған. Пугачев Салауатҡа ошо Ҡәшмәр тауында осрашҡанда бригадир[1] исеме бирә. Ҡәшмәр тауынан төньяҡта, дүрт-биш километр ерҙә күренеп тора Шәһиттәр ҡыраһы. Шул тауҙа Салауат менән Пугачев 1774 йылдың 3 июлендә Михельсон ғәскәренә ҡаршы бик ҡаты һуғышҡан. Халыҡ бик күп ҡырылғанға күрә, ошо ергә Шәһиттәр ҡыраһы тигән исем бирелә.

## 298. САЛАУАТ АУЫЛЫ

Салауат батыр Пугачев менән Троицк яғынан сигенеп килеп, хәҙерге Салауат ауылы тураһында туҡтай. Ул урын Ҡырҡты[1] тауының көньяҡ битендә Ҡанлы бил тигән ер бар — шунда була. Йылғаһына ла Ҡанлы бил тиҙәр.

Был яҡ көнбиттәге башҡорт ырыуҙары Тамъян, Түңгәүер, Кү-

бәләк-Тиләү, Ҡатай, Ҡыпсаҡтар төркөм-төркөм яусылар ойоштора. Бер төркөм яусыларҙың башлығы итеп, беҙҙең олатайыбыҙ Шәйхем Ҡолаҡаев тәғәйенләнә. Әлеге урында бик ҡаты яу була. Шул яу ваҡытында Шәйхем үлтерелә. Ҡәберлектәрҙең береһе хәҙер ҙә Шәйхем зыяраты тип йөрөтөлә.

Батша ғәскәрҙәре был урында еңелә. Яуҙан ҡалған яралы аттарҙы һуйып, ҙур туй яһайҙар. Салауат ауылының исеме шул ваҡыттан ҡалған.

## 299. УҠЛЫ ҠАЯ

Салауат яуы замаңында Михельсон отряды килгәндә беҙҙекеләр бер ҡая янында ҡасып ятҡан. Ҡарауыл тауы башына бер күбә бесән һалғандар. «Әгәр дошман килһә, ут төртөрһөң», — тип, иптәштәренең береһенә әйтеп ҡуйғандар.

Дошман килә башлау менән теге иптәштәре күбәгә ут төрткән. Беҙҙекеләр тиҙ генә әҙерләнеп Михельсон ғәскәренә уҡ яуҙыра башлағандар. Шул ваҡиғанан һуң теге ҡаяны Уҡлы ҡая тип атар булғандар.

## 300. ХАҠҠЫЙ ТҮРӘ

Күҙ етмәҫ ерҙәргә йәйрәп ятҡан Нөгөш, Өсән[1] буйында Хаҡҡетдин исемле бер түрә йәшәгән. (Исемен ҡыҫҡартып, уны Хаҡҡый түрә тип йөрөткән халыҡ.) Уның олатаһы Атанғол, атаһы Собханғол исемле булған. Ата-олатаһының тире түгелгән, кәүҙәләре күмелгән ғәзиз ере, йәнендәй күргән башҡорто өсөн һәммә нәмәһен дә фиҙа ҡылырға әҙер булып йәшәгән был Хаҡҡый түрә.

Хаҡҡетдин әле түрә дәрәжәһенә күтәрелмәҫтән элек тирә-яҡ ауыл ырыуҙарын берләшергә, татыу йәшәргә, бер-береңә хыянат итмәҫкә өндәп йөрөгән. Ул-был һөжүмдәр була ҡалһа, тиҙ, һыбай яу ғәскәр туплаған. Үҙе лә оҫта һыбай сапҡан, тиҙәр. Белемле лә булғас, халыҡ араһында абруйы ҙур булған быңың.

Атаһы Собханғол вафат булғандан һуң, бөтә булған ерҙәр, урман-һыуҙар, мал-тыуар Хаҡҡетдин ҡарамағына ҡала. Идара итеү эше йөкмәтелә.

Ул ваҡыттарҙа илдә ығы-зығы, халыҡтар араһында сыуалыштар булғылап тора. Бер саҡ әлеге Собханғол ауылына саптар аттарҙа ике рус һыбайлыһы килеп төшә. «Башкирскому кантону Хаккый Субхангулову» тигән ҡағыҙ тапшыралар. Был ҡағыҙҙы ул саҡтағы Бәләбәй өйәҙенән рус кантоны ебәргән була.

Хаҡҡый түрә ҡағыҙҙы уҡып сыға ла, бер аҙ уйланып торғас: «Илдә бола күтәреп, Боғасау[2] йөрөй икән», — ти. Тиҙ арала 20 һыбайлы әҙерләргә бойора. Һәр бер һыбайлының кәрҙәш-ырыуы менән Хаҡҡый түрә тәнә буйы һөйләшеп сыға. Иртәгеһен уҡ-йәйә, суҡмар-кәшәнәләр менән ҡоралланған 20 һыбайлы ҡибла тарафына юлға сыға. Улар Стәрле ҡалаһына етеп, Салауат батыр

һыбайлыларына ҡушыла. Шунан былар бергәләшеп Боғасау госкәренә барып инәләр. Әбей батша Екатеринаға ҡаршы яуҙа батырлыҡтар күрһәтеп йөрөйҙәр. Ошо хәлде белеп алған Әбей батша рус кантонына әмер ебәрә. Бола күтәреүҙә ҡатнашҡаны өсөн Хаҡҡый түрәне урынынан ҡолатып ташларға бойороҡ бирелгән була. Хаҡҡый түрәлектән төшөрөлә. Бөтә Нөгөш, Өсән буйҙары, урманлы тауҙар бының ҡулынан тартып алына. Үҙен һөргөнгә хөкөм итәләр. Тик Бәләбәйҙәге рус кантоны ғәрәпсә лә, русса ла иркен уҡый-яҙа, оҫта эш йөрөтә белгән Хаҡҡый түрәне ҡулға алырға ашыҡмай, уны яҡлай. 500 баш йылҡы малы бирел, Хаҡҡый һөргөндән ҡотола.

Әбей батша тарафынан килгән әмер нигеҙендә Өсән йылғаһы үҙәнлегенең буйында урыҫ ауылдары ҡалҡып сыға. Ул ауылдар: Воздвиженка, Ново-Георгиевка, Никитинка, Поздеевка, Николаевка. Воздвиженкала оло сиркәү төҙөйҙәр. Был ауылдарҙың төҙөлгәненә 200 йылдан артыҡ ваҡыт үткән инде.

Йылдар үтә торған. Башҡорттар араһынан һайланып ҡуйылған тәүге түрәнең үлгәненә лә байтаҡ: ул 1800 йылда донъя ҡуйған. Ғәҙеллеге, аҡыллылығы, зирәклеге менән Хаҡҡый түрә халыҡ күңеленә кереп ҡалған. Хаҡҡый түрә хаҡында йыр ҙа бар:

Хаҡҡый түрә бөтәһен дә белә,
Бәтә нәмәне лә күрә.
Халыҡтарҙы тигеҙ күрә,
Ерҙәрҙе тигеҙ бүлә —
Мәңге йәшәһен.

## 301. МУЛЛАЯН

1773—1775 йылдарҙағы Салауат яуында Төрөмбәтселәр ҙә ҡатнашҡан. Күп кенә ирҙәр яуға ҡушылып киткән. Шуның өсөн, бола баҫтырылғанда, Әбей батшаның каратель отряды Төрөмбәт ауылының бер генә өйөн дә ҡалдырмай яндырып киткән. Ҡешеләрен үлтереп бөткән. Был фажиғәнән тик ике генә кеше ҡотолоп ҡалған.

Хәҙерге Өмөтбаевтарҙың ата-бабаларынан Муллаян тигән егеттең икенсе ырыуға кейәүгә бирелеп тә. оҙатылмай үҙҙәрендә торған һеңлеһе булған. Уларҙың аталары, яу яҡынлашҡанын ишеткәс, улы Муллаянға былай ти: «Улым, яу килһә, беребеҙҙе лә аямаҫ. Шуның өсөн һеңлеңде кейәүгә илтеп тапшыр».

Муллаян менән һеңлеһе икеһе ике атҡа атланып, әйберҙәрен артмаҡлап, юлға сығалар. Юл бик алыҫ була. Былар бер ауылға етеп, ял итергә туҡтайҙар. Ситтәге йортҡа төшөп, ашап-эсеп алалар. Көн ҡыҙыуы һүрелә төшкәнсе, ошонда ял итмәксе булалар. Күпмелер ваҡыт үткәс, был өйгә бер нисә ҡыҙ килеп керә лә, Муллаяндың һеңлеһен һыу инергә тип алып сығып китәләр. Шул китеүҙән ҡыҙ ғәйеп була, ағаһы уны күпме генә эҙләһә лә, таба алмай. Өйҙән-өйгә инеп йөрөгәндә, бер әбей Муллаянға: «Улым, һин

һеңлеңде эҙләп маташма инде, үҙ башыңды алып ҡас, һеңлеңде барыбер таба алмаçһың», — тигән.

Муллаян үҙ атына атланып, һеңлеһенең атын тағып, был ауылды ташлап, ҡайтыу яғына сыға. Ысынлап та, уның артынан ҡыуа башлайҙар. Һеңлеһенең атын ысҡындырып ебәрә лә, саба башлай был. Аты шәп була, ҡыуғынсыларҙы бик күпкә артта ҡалдырып, ҡайтып етә. Ҡайтһа, ауылы урынында көл-күмер, торомбаш ҡына тороп ҡалған. Каратель отряды уларҙың ауылынан үтеп киткән икән. Бер генә тере ҡалған кеше лә юҡ, ти.

Муллаян яуға ҡушылып киткән ағаһы Муллағәлиҙең тере булыуын өмөт итә. Уны эҙләп ил гиҙеп сығып китә. Һәр ерҙә һорашып йөрөй торғас, Яйыҡ янына барып сыға. Ағаһын шул яҡтарҙан табып, аҙаҡ бергәләп Төрөмбәткә ҡайталар. Ҡабаттан донъя ҡороп алып китәләр. Уларҙан ҡалған быуын ошо Төрөмбәт ауылында йәшәне.

## 302. ҠАРА СӘҮКӘ (ЯМҒЫРСЫ)

Пугачев бунтынан һуң Твердышев[1] Ырымбурға ошо яуҙа ҡатнашып йөрөгән кешеләрҙе саҡыртҡан. Күсем ауылынан Ҡарағужа, Темәстән — Рәхмәтулла, Мөхәммәттән — Ҡоçман, Салауаттан — Ҡәҙерғол, Ниязғолдан[2] — Ямғырсы барған. Твердышев уларҙың һәр ҡайһыһынан һорау алып, язаға тарттырған. Уçаллашҡан өсөн Ямғырсының — иренен, Ҡәҙерғолдоң — ҡолағын, Рәхмәтулланың танауын ҡырҡып алған. Ҡоçмандың сәсенә туҡмаҡ тағып ҡуйған. Тик Ҡарағужа ғына язанан ҡотолоп ҡалған.

— Һин Пугачев яуына ҡатнаштыңмы? — тип һорайҙар унан.

— Урал булды йәйләүем, Ҡырҡты булды ҡышлауым — мин бер нәмә лә күрмәнем, — тип яуап биргән Ҡарағужа.

— Һуң нисек итеп көн күрҙең?

— Ҡыш ҡорот киптерҙем, эремсек ҡайнаттым. Яҙ етһә, һарына ҡаҙыным, йәйләүҙә ҡымыҙ эсеп, ит ейҙем.

Твердышев һарынаның нимә икәнен белмәгән. Ҡарағужа юлға тип алып килгән һаранан бешерелгән аҙығын алып күрһәткән. Шулай итеп ҡарт язаһыҙ ҡалған.

Юлда Ҡарағужа иптәштәрен ҡыуып етә. Тегеләр сәй ҡайнатып эсергә ултырғандар икән. Ауылға ҡайтҡас, улар дөрөçөн әйтмәçкә булғандар: имеш, беребеҙҙе ат типте, тип әйтергә, ҡалғандарыбыҙ эләгеп ҡоланыҡ, тип хәбәр һалырға булғандар.

Ҡарағужа килеп етһә, күрәләр: уның бөтә ағзаһы иçән-һау. Етмәһә, теге быларҙан көлә:

— Ниңә аҙыҡты етерлек алманығыҙ, — тигән була был, — берегеҙ — танауын ҡырҡып ашаған, икенсегеҙ — иренен...

Ҡарағужаны — Ҡара сәүкә тип атағандар.

Араларындағы Ямғырсы оçта йырсы булған. Ул Ниязғол ауылынҡы. Ырымбурға барғанда был сәфәрҙең күңелһеҙ булырын алдан белеп йыр сығарған булған. Ямғырсы йырлап ебәргән:

Аяҙҙы(ла) болот ҡаплайҙыр,
Менгән атым ыуаҡ атлайҙыр.
Киттем булһа кәрәк уңһыҙ юлға,
Йөрәгем сығып тәҡәт тапмайҙыр.

Иртәнсәккәй тороп мин ҡараһам,
Ҡырҡты буйҡайҙары аҡ томан.
Ошо сәфәремдән ҡайталһам,
Ашар инем салып аҡ ҡорбан.

Күл өҫкәйендә (ай) өс өйрәк
Өйөрөлөп-әйөрөлөп китә, йөҙалмай.
Ҡысҡырып та йырлап мин ебәрҙем
Янған йөрәгемә түҙә алмай.

Имен-һау ҡайтып килгәс, Ямғырсы, Ҡырҡты тауының үркәсләнеп торған еренә менеп, ошо йырҙы йырлап, ҡурай уйнап ултырыр булған [3].

## 303. САЛАУАТ ҒӘСКӘРЕНДӘ МАРИҘАР

Элекке замандарҙа беҙҙең был тирәлә күп һуғыштар булып уҙған. Салауат тигән батыр ҙа беҙҙең тирәнеке булған. Мин бәләкәй саҡта, атайым да, башҡа ҡарттар ҙа шул турала бик күп һөйләй торғайнылар.

Мәрхүм Камалетдин бабай йәш ваҡытында ниндәйҙер йомош менән Минзәләгә барған. Ул ваҡытта юлдарҙың рәте булмаған. Камалетдин бабай юлда бара торғас, аҙашып, юл яҙып, уңға китеү урынына һулға кереп киткән. Бик оҙаҡ барғас, урман эсендә бер кардунға барып сыҡҡан. Шул кардунда 110 йәшкә еткән бер мари ҡарты булған. Ошо мари ҡарты Камалетдин бабайҙан: «Һин ҡайһы яҡтыҡы?» — тип һораған. Камалетдин бабай: «Мин Златоуст өйәҙе, Ҡыйғы ауылы», — тигәс, теге ҡарт: «Ул тирәне мин дә бик яҡшы беләм», — тип яуап биргән. Шунан һуң ҡайҙан һәм нисек белеүен һөйләгән:

— Мин ул саҡта ун һигеҙ йәшлек егет инем. Бик ҡаты болалар ҡуҙғалып китте. Халыҡ баш күтәреп, баярҙарҙы ҡыра башланы. Мин дә эйәрҙем. Йөрөй торғас, Салауат батырға барып ҡушылдыҡ. Ҡатау, Үҙән, Лаҡлы, Йыланлы, Ваҡир, Ҡарабаш шары (Батҡаҡлы һаҙ) [1] аша Ҡыйғыға килдек. Унан Ҡазанға киттек. Ҡарабаш шарында өс йөк көмөш тәңкә күмдек. Ул көмөш тәңкәләр хазинаға әйләнгәндер инде, берәй кеше тапманымы? — тигән.

Шунан һуң ул Камалетдин бабайҙы ашатып-эсереп, юл өйрәтеп, Минзәләгә ҡарай оҙатҡан.

## 304. ЮЛҠАЙ МЕНӘН БӘШӘРҒОЛ

Еҙем һыуы буйында, Мағаш тауҙары тирәһендә йәшәгән халыҡтарҙан Салауат Юлаев болаһында ике кеше айырыуса ныҡ ҡатнашып йөрөгән. Уларҙың береһе — башҡорт егете Бәшәрғол, икенсеһе сыуаш егете — Ҡәсиркә булған. Улар икеһе лә Салауат батырҙың дуҫы булғандар. Бәшәрғоло Салауаттың тыуған яғында ла күп йөрөгән, унда ул Басарҡол тауында [1] йәшәгән. Ҡәсиркә иптәшен Бәшәрғол тип түгел, Басарҡол тип йөрөткән, шуға күрә тауҙың исеме лә Басарҡол булып киткән.

Салауат Пугачевҡа ҡушылып киткәс, егеттәр Басарҡол тауынан ҡайтып, Мағаш тауында йәшәгәндәр. Ҡәсиркәһе Табын ырыуы башҡорттарынан Әлимә исемле ҡыҙға өйләнгән булған.

Бер саҡ Салауат Мағаш тауында йәшәгән Бәшәрғол менән Ҡәсиркә янына килеп, ғәскәр төҙөү тураһында һөйләшеп киткән. «Батша ғәскәрҙәрен еребеҙгә үткәрмәйек, Урал юлдарын нығытайыҡ, — тигән. — Ер-һыуҙарығыҙҙы баярҙарҙан ҡайтарып алып бирәбеҙ», — тип, халыҡҡа Пугачевтың фарманын [2] еткергән дә, китеп тә барған.

Салауат батыр ораның төрлө милләт кешеләре күтәреп алған. Күп тә үтмәй, көслө ғәскәр төҙөлә. Халыҡ Салауат батырға дан йыры йырлаған:

Урал тауы кеүек, ай, тау булмаҫ,
Урал ярып аҡҡан һыу булмаҫ.
Был донъяла ирҙәр бик күп булыр,
Салауат һымаҡ батыр ир булмаҫ.

Салауат батыр үҙе Ырымбур яҡтарында һуғышып йөрөгән.

Бер саҡ Бәшәрғол Еҙем буйындағы хәлдәр тураһында Салауатҡа хат яҙып, был хатты үҙенең улы Юлҡай аша ебәрә. Улы толпарға атланып, Ырымбур яғына саба. Атаһы: «Хатты Салауат батырға тапшыр, башҡа кешегә күрһәтмә», — ти.

Юлҡай Салауат батырҙы Ырымбур менән Стәрлетамаҡ араһында осратып, хатты тапшыра. Салауат, хатты уҡығас, бик шатлана.

Юлҡай кире ҡайтмай, Салауат батыр отрядында ҡала. Ғәскәр менән Ырымбур яғынан Әүзән, Питрәүски үтә Өфөнө алырға тип килгәндә, Юлҡай, Соколовка [3] ауылы янында бик ҡаты мәжрух булып үлә. Бәшәрғол, улы Юлҡай батырҙың үлгәнен ишетеп, ҡайғыһынан былай тип йырлай:

Әҙернәйә менән уҡтар аттым,
Юлҡайымды яуҙа юғалттым.
Әскенәйем бошоп йөрөгән саҡта
Йырҙар йырлап, күңел йыуаттым.
Сабырһыҙлыҡ менән күберәк уйлап,
Йөрәккәйемдең башын һыҙлаттым.
Дошман яуҙарында һәләк булды

Юлҡай менән менгән толпары.
Ай яҡтылары юҡ, ҡараңғы төн,
Ҡалҡмай ҙа шул кисен Өлкәре.

Улы Юлҡай яуҙа үлгәс тә, Бәшәрғол Салауат батырҙың янына барып, ҡайғыһын белдергән. Салауат әйткән: «Айыу үлеме тауҙа, батыр үлеме яуҙа», — тигән.

Салауат ғәскәрҙәре Соколовка ауылы янында өс аҙна самаһы бер урында ғына һуғышҡандар, был ерҙә күп юғалтыуҙар булған.

Был урындан киткәс, Иҫке Ҡыйышҡы[4] тигән ауылда ла бик ҡаты һуғыштар булған. Унан һуң Чесноковка[5] тигән рус ауылын алып, унда бер ҡыш торғандар. Шунда тороп, Өфөгә һөжүм яһағандар. Яуға әҙерләнгәндә, Бәшәрғол былай тип йырлаған:

Мағаш ҡына тауҙың ҡарсығаһы
Күренгәндә бери күк була,
Батыр егеттәрҙең ҡулдарында
Әҙернә(йә) менән уҡ була.
Булат тағып билгә, уҡтар алып ҡулға,
Беҙ һаҡланыҡ Урал тауҙарын.
Ҡаршы һаҙаҡ тартып, мәргән атып,
Тар-мар иттек дошман яуҙарын.

Өфөгә өсөнсө һөжүмгә әҙерлек алдынан уҡ юныусылар менән һуғыш кәрәктәрен эшләгәндә, Бәшәрғол иптәштәренең күңелен күтәреп, былай тип йырлай:

Ҡармалинкай яға, ай, күк сәкмән,
Ҡилбәтһеҙ ир кейһә, килешмәҫ.
Әҙер булһа ирҙең уҡ-һаҙағы,
Ҡаршы килгән яуға бирешмәҫ.

Бер ни тиклем ваҡыттар үткәс, Бәшәрғол Пугачевтың ҡулға алынған[6] хәбәрен ишетә. Күңел төшөнкөлөгөнә бирелеп, ул былай тип йырлай:

Ҡөн яҡтылары юҡ, ҡояш төшмәй,
Сағылдарҙың юҡ шул яланы.
Әжәлдәрем етмәй үлер инем,
Саҡмай ҙа шул ҡара йыланы.

Болала ҡатнашыусы халыҡтар, аҙаҡ ҡыҫылғандан-ҡыҫылып, Мағаш тауының Йылан сағыл тигән ҡаяһында төрлө ҡыйынлыҡтар күреп йәшәгәндәр. Шуға ла Бәшәрғол үҙенә ваҡытһыҙ үлем теләп, йырҙар йырлаған.

Йылан сағыл янындағы бер бәләкәй генә йылға эргәһендә боласылар ун бер землянка ҡороп, шунда ҡыш итәләр. Бәшәрғол отряды ла ошо урында ҡышлай. Түрәләр килеп, Бәшәрғолға ке-

шеләр ебәргәндәр. «Ҡайтып, ҡылған эшегеҙҙән тәүбә ҡылығыҙ, беҙ һеҙгә яза бирмәбеҙ», — тиҙәр икән.

Бәшәрғол уларға: «Намыҫлы ирҙәр үҙ намыҫында үлергә тейешле, — тип кенә ебәрә. — Ҡайтып баш һалыуға ҡарағанда, намыҫ менән үлеү артығыраҡ», — тигән.

Боласылар землянка ҡороп йәшәгән урындағы йылға хәҙергәсә Землянка йылғаһы тип йөрөтөлә. Был Мағаш тауының Йылан сағыл тигән урынында булыр.

Һуңынан Бәшәрғол отряды менән Йылан сағылдан ҡасып сығып киткән, уларҙың ҡайҙа киткәндәре билдәле түгел.

Ә Салауат батырҙы үҙе һуғышып алған ерҙәргә килтереп халыҡ алдында ырузгы менән һуҡтырғандар, танауҙарын ҡырҡып, маңлайҙарына, биттәренә тимер ҡыҙҙырып тамға һалғандар. Яралары уңалып бөтөр-бөтмәҫтән, конвой менән Балтик порты Рогирвикка мәңгелек каторгаға ебәргәндәр.

Халыҡ, үҙенең һөйөклө батыры Салауаттың язаланыуына әрнеп, былай тип йырлаған:

Ҡара ла ғына ҡара Ҡаралы тау,
Алдарында ята ҡуштәкле.
Инанмайыҡ, дуҫтар, был донъяға,
Арыҫлан һымаҡ ирҙәрҙе нишләтте.

Салауат батыр ир ине лә,
Салауат батыр ир ине.
Маңлайынан ҡан сыҡҡанда,
Тирем сыға тир ине.

## 305. ҠАРАНАЙ БАТЫР МЕНӘН ЯРАНДАРЫ

Беҙ Ҡаранай батыр[1] тоҡомдары. Ҡаранай Пугачтың иң яҡын атаманы, полковнигы булған. Ошо батырыбыҙға оҡшап беҙҙең ауыл дыуамал, ҡыҙыу ҡанлы халыҡ.

Ҡаранайҙы бик йәшләй үк батыр булған тиҙәр. Көрәштә бил бирмәгән ул, алыш-ярышта ал бирмәгән. Һунар сыҡһа, бүре, төлкө һуҡмай ҡайтмаған.

Бер заман Пугач яуы ҡубып киткән. Морат ҡарттың ике улы — Ҡаранай менән Ырысай — Пугач батшанан манифест килеп төшкәс тә, яуға сыҡҡандар. Ҡаранайҙы йөҙ башы — сотник итеп ҡуйғандар. Энеһе Ырысай ярҙамсыһы булған.

Ҡаранай бик күп ерҙәрҙә һуғышҡан. Улар башта Стәрле пристаненә һөжүм иткәндәр. Уны алғас, Табын ҡарай юл тотҡандар. Аҙаҡ Өфө менән Ырымбур араһындағы ерҙәрҙе Ҡаранай батыр үҙ ҡулында тотҡан, тиҙәр[2]. Дошман унан уттан ҡурҡҡан кеүек ҡурҡҡан. Атлы ғәскәре менән әле бер урында булһа, аңғармаҫтан икенсе урынға килеп сыҡҡан, ти, ул. Дошман яуын уратып алыр ҙа ҡырып ташлар булған.

Пугач батша Ҡаранайҙы үҙенә саҡырып, әллә нисә көн һыйхөрмәт күрһәткән. Полковник чины биргән. Шунан: «Минең ғәскәргә юлды ас», — тип, Ҡазан яғына ебәргән тиҙәр. Пугач батша Салауат менән Ҡаранай батырҙы «уң ҡулдарым», тип йөрөткән, ти. Һуғыштың иң ауыр, иң хәтәр ерҙәренә уларҙы ебәрер булған.

Ҡаранай батырҙың яҡын дуҫтары, яу ярандары күп булған: энеһе Ырысай, Ҡасай батыр[3] (уны Ҡасҡын батыр ҙа тигәндәр), Мораҙым[4] батырҙар.

Ҡаранай батыр Ырымбур яғында бер яуҙа үлеп ҡалған[5]. Унан ҡалған ике улдан беҙҙең тоҡом үрсегән.

Беҙ йәш саҡта Ҡаранай батырҙың һаҡланып ҡалған уҡ-йәйәләре бар ине. Олатайҙар батырҙың төҫө итеп йәшерәберәк һаҡлап ҡәҙерләп йөрөтәләр ине. Тик ауылдағы бер оло янғын ваҡытында юҡҡа сыҡтылар. Хәтеребеҙҙә, уҡтары киҙеле, уҡ башаҡтары һөйәктән ине. Йәйә, керештәре әҙәм тартҡыһыҙ ине.

Ҡаранай батыр тураһында йырҙар ҙа була торғайны.

Пугач Ҡаранайға алтын ҡынлы ҡылыс, Ырысайға бик шәп тун бүләк иткән, тиҙәр. Тәтербаш янындағы бер һуғышта Ырысай еңелеп урманға ҡасҡан. Аҙаҡ, эҙ юғалтып, ошо тирәләрҙә йәшәй башлаған. Әбей батша Ырысай батырҙың үҙенән бигерәк, уға Пугач бүләк иткән тунды эҙләткән, ти. Оҙаҡламай Ырысай батырҙы ла, тунды ла ҡулға төшөргәндәр. Әллә ниндәй хикмәтле тун булған тиҙәр уны. Хикмәтен берәү ҙә белә алмаған.

Ырысай батырҙы Минзәләгә илтеп аҫҡандар[6]. Бер аҫҡандар икән, алыптай кәүҙәле батырҙы күтәрә алмай арҡаны өҙөлөп төшкән, ти. Әбей батша Ырысай батырҙы аҫмаҫҡа тип яҙыу ебәрткән икән, ул яҙыу-хәбәр килеп еткәнсе, Ырысайҙы икенсе тапҡыр аҫып һәләк иткәндәр. Бының өсөн башкиҫәрҙәргә бик ныҡ эләккән, ти. Әллә кешене ике тапҡыр аҫмау, әллә ярлыҡау, әллә тун[7] хикмәтенән булған — белмәгәндәр.

## 306. ИЛЕКӘЙ КИЛЕНЕНЕҢ ЗИРӘКЛЕГЕ

Илекәй ҡарт минең олатайымдың атаһы булған. Бүгәс менән Салауат яуында һуғышып йөрөгән. Яу баҫтырылғас, уны бик ҡаты язаға тарттырғандар: бөтә Ҡаҙанғол халҡы алдында танауын ҡырҡып алырға хөкөм иткәндәр.

Язалау башланғансы килене уға бер кәңәш биреп өлгөргән.

— Ҡайным, ауыҙыңа бынау алтын тәңкәне ҡап та, теге ҡатил бик ыҙалай башлаһа, усына төшөрөрһөң, — тигән был.

Илекәй ҡарт шулай иткән дә. Бының уйын һиҙеп алған теге ҡатил Илекәй ҡарттың танау осон ғына киҫеп алған. Шулай итеп, килененең зирәклеге арҡаһында Илекәй ҡарттың танауында бер киртләс генә яһалып ҡалған.

## 307. ИҪӘКӘЙ МЕНӘН ДЕҢКӘ

Салауат яуы баҫылғас та, башҡорт илендә тыныслыҡ булмаған. Урыҫ байҙары, баярҙары башҡорт ерҙәрен талай торған булғандар. Матур Асылыкүлде, уның йәмле туғайҙарын, Дим буйын, Аҡай тигән баяр, башҡорттарҙы ҡурҡытып, буш ҡына хаҡҡа һатып ала. Был ваҡытта Салауат яуы әле генә баҫылған була. Халыҡ ҡаршы сығам тиһә, Аҡай бик күп ғәскәр саҡыртып ала. Шул ваҡыт Сураҡай[1] ауылынан Иҫәкәй тигән батыр үҙ ише егеттәрҙе йыйып, Аҡай баярға, уның ғәскәренә ҡаршы сыға. Ул Аҡайҙың бик күп ғәскәрен ҡыра. Уға ярҙамға Деңкә ҡашҡа тигән батыр ярҙамға килә. Деңкә бик көслө була. Ул Асылыкүл буйындағы ҙур һуғышта Аҡай ғәскәрен һөңгө менән сәнсеп үлтереп бөтөрә. Аҡай баяр ҡурҡыуынан Асылыкүлгә аты менән төшөп батып үлә. Баяр атының кәүҙәһе Ҡандракүлгә барып сыҡҡан. Аҡай баяр хәҙерге Татарстан ерендәге Аҡай күле ауылынан килгән булған. Асылыкүл буйында был һуғыштан башҡа ҙур һуғыштар булмаған.

## 308. ИКЕНСЕ ӘРМЕ

Берҙән-бер көн француз батшаһы Мәскәү батшаһына һуғыш аса. Күп ер-һыуын, күп ҡалаларын баҫып алып, Мәскәүгә килеп инә. Французлар Мәскәүҙе килеп алғас, батша, һанаттарын эйәртеп, Мәскәүҙән сығып киткән. Үҙ һанаттарының ҡалтырап төшөүен күргән батша ҡулына бер ус тупраҡ алып әйткән, ти: «Ай, ата-бабам йөрөгән ер-һыуым! Шулай уҡ дошманға ҡалырһығыҙмы икән ни? Ҡабат миңә һеҙҙе күреү насип булмаҫмы икән ни?» Һанаттары ләм-мим һүҙ әйтмәй, баштарын баҫып, уйға талып тик ултырғандар, ти.

Был хәлде ситтәрәк ауын ямап ултырған бер балыҡсы ҡарт ишеткән дә батша янына килгән, ти.

— Ай, оло батша! — тигән балыҡсы. — Ниңә был хәтле ҡайғыраһың? Һиңә алтын тәхетеңде, олатайҙарыңдың зыяратын ташлап, Мәскәүҙе ҡалдырып сығыу ауыр булһа, илде дошманға биреп тороу ил халҡы өсөн бигерәк тә ауыр. Бер ҙә ҡайғырма! Һинең халыҡтарың Мәскәү тирәһендә генә йәшәмәйҙәр бит! Ат өҫтөндә ҡорҙай уйнаған, сабып килһә, елдәй гөжләгән, ҡая таштарҙа аҡ кейектәй һикергән, шыр урманды өс бүкәндәй һанаған, юшанлы сағылдарҙы еҙ йыландай аралаған, бүре, айыуҙы ҡуй бәрәндәрҙәй ҡырған, саңғыла һыуҙағы балыҡтай йөҙгән башҡорт тигән халҡың бар бит! Сит ярлыҡамаҫ, үҙеңдеке үлтермәҫ тигәндәй, улар беҙҙең менән бер ерҙе еҫкәгән, бер һыуҙы эскән халыҡ бит. Шуларҙан да ярҙам һора! — тигән.

Балыҡсы ҡарттан был һүҙҙәрҙе ишеткәс, батша ырғып торған да, бер нәмәһен юғалтып һиҫкәнгән кеше һымаҡ, тирә-яғына ҡараған:

— Ай, ҡартым, алтын табаҡтан бергә аш ейгән һанаттарым,

мамыҡ түшәктә бергә ятҡан бисәм бирмәгән аҡылды бирҙең, рәхмәт, ҡартым, мин хәҙер янаралдарымды илгә таратырмын. Башҡорттарҙы ла ярҙамға саҡыртып ҡарармын, — тигән.

Балыҡсы ҡарт киткәс тә, батша һанаттарын эҙләй һалып, уларҙы йыйып, кәңәш-төйөш иткән. Башҡорттарға хат яҙырға булғандар, ти.

Башҡорттар рус еренә сит дошман килгәнлеген ишетмәй ҙә яталар икән. Был хәбәрҙе ишетеү менән, бөтә Урал халҡы йәшен һуҡҡандай һиҫкәнеп киткән, бөтәһе лә аяҡ өҫтө баҫҡан, ти.

Урманда уҡ юнып, аласыҡта һаҙаҡ һуғып, тана-торпо, тәкә һуйып ит ҡаҡлап, эркет ҡайнатып, ҡорот йәйеп, тире ыҫлап, турһыҡ, һаба, мәс тегеп, ҡаймаҡ яҙып май таҫҡып, төн-көн ағытмай бейә һауып, турһыҡ, һаба тултырып ҡымыҙ йыйып, аҙыҡ-түлек, ат-тун, кейем-һалым таярлап, халыҡ яуға әҙерләнгән, ти. Бөтә бисә-сәсә, әбей-һәбей, ҡыҙ-ҡырҡын, бишектән төшөп түштән шыуған, аяҡҡа баҫҡан бала-саға бере ҡалмай батырҙарҙы яуға оҙатырға йыйылған, ти.

Яуға оҙатҡанда әбей-һәбейҙәр, яуға китеүселәрҙең юлы ҡыҫҡа булһын тип, тегәр еп биргәндәр. Бисә-сәсәләр, күкрәктәрегеҙгә дошман уғы теймәһен тип, яуға барыусыларҙың түштәренә тәңкә теккәндәр. Ҡыҙ-ҡырҡындар егеттәргә сер һаҡлаусы булығыҙ, тип нәгешле янсыҡтар биргәндәр, ти.

Оҙатҡанда әбейҙәрҙең әйткәне:

Әрмеләргә китә, ай, башығыҙ,
Буҙ балалар, инде хушығыҙ!
Йылдарығыҙ айҙай тиҙ үк үтеп,
Иҫән йөрөп, еңеп ҡайтығыҙ.

Бисә-сәсәләрҙең әйткәне:

Атҡайҙарға менеп, һаҙаҡ алып,
Яуға китер ирҙәр булдығыҙ.
Һай, илкәйем, илкәйемдең батыр иркәйе,
Тәңкәләрҙәй төҫлө шылтырашып,
Шат көлөшөп, еңеп ҡайтығыҙ.
Һай, илкәйем, һағынып көтөр һеҙҙе илкәйең,
Ҡош юлдары ҡалҡһа күк йөҙөндә,
Ҡейек ҡоштар осор төньяҡтан.
Һай, илкәйем, батырҙарын көтөр шул саҡта.
Ҡоштар үтһә, һеҙҙән беҙ көтөрбөҙ,
Сәләм килә, тиеп үк йыраҡтан.
Һай, илкәйем, хатың уҡыр илең шул саҡта.

Ҡыҙҙар яуға китә торған егеттәргә ҡулъяулыҡ, янсыҡтар бүләк итеп, һөйгән егеттәренә ҡарап былай йырлағандар:

Атҡайҙарға менеп, беҙҙе ташлап,
Урал ашып яуға киттегеҙ,

Һай, илкәйем, ҡалдырып шул нәҙек билкәйең,
Киткән юлығыҙға ҡарай-ҡарай,
Күҙкәйҙәрҙе талдырып көтөрбөҙ.
Һай, йәнкәйем, онотмағыҙ нәҙекәй билкәйең.
Урал армыттарын семәрләгән
Сәскә менән бүләк бирәбеҙ,
Һай, йәнкәйем, еҫкәгәндә аңҡыр илегеҙ,
Ил намыҫын бергә шул бүләктә
Йөрәгегеҙҙә бергә һаҡлағыҙ,
Һай, илкәйем, батыр булып яуҙан ҡайтығыҙ.

Ата-әсәләренең яуға киткән улдарына хуш аяғы биреп, теләк теләгәндә әйткәне:

Йомро ғына тояҡ, ай, йылҡының
Юлҡайҙарын сикләр ҙә йән булмаҫ.
Һай, балаҡайым, егет беленер теҙген тотҡанда,
Ир-егеткәйҙәрҙең, ай, күкрәген
Дошмандарына сарып юл һалмаҫ.
Һай, балаҡайым, егет һайлар яуҙа сапҡанда,
Ҡулдарыма һаҙаҡ алдым, тиеп,
Торомтайҙан осма, йән күреп,
Һай, балаҡайым, ауыр көндәр көтөр алдыңда.
Сал бөркөттәй талғын бул сапҡанда,
Дошманыңды ҡыйрат яй белеп.
Һай, балаҡайым, бәхет гөлө үҫһен юлыңда.

Илдең сәсәндәренең яуға китеүселәрҙе өгөтләп һамаҡлағаны:

— Яуға тиеп уҡталған
Батырҙарға һүҙем бар.
Күп яуҙарҙы күрҙек беҙ,
Өлгө өсөн йәштәргә
Әйтә торған уйым бар.
Урал батыр биш булып,
Яу ҡайтарған, беләһегеҙ,
Ҡараһаҡал, Салауат —
Яуы булып үткәнен,
Батыр булып, дан сәсеп,
Дошманын ҡуйҙай ҡырғанын,
Күҙ алдында дошмандың
Һаның һанап тормайса,
Аткан уҡтай уҡталып,
Тауға сөйгән ҡыйғырҙай,
Яуын ҡырған йотонон,
Уралтауҙай дан алып,
Үҙ дәүерен киҫкәнен
Барығыҙ ҙа беләһегеҙ.

Яуға барыу йыйынып —
Ҡалым алып, туй яһап,
Бер кэрэгэ төбөндә
Ҡымыҙ эсеп, яу һалып,
Бер табаҡтан аш ейеп,
Ҡунаҡ булыр ер түгел.
Типһә тимер өҙөрҙәй,
Салауаттай беләкле,
Яуға барған нөгәрҙең
Батырҙары күп булһын.
Һөрән һалып яу ҡырған,
Ҡылды ҡырҡҡа ярырлыҡ
Теле майҙай иреткән,
Бөтә эште сер тотҡан,
Уйлағанда таш йотҡан
Ҡараһаҡалдай ир булып,
Яуҙы башлар ир булһын,
Ир булһын, ау, ир булһын!

Яуға китеүселәрҙең әйткәне:

— Сусаҡ сағыл, ҡырлас тауҙар менән
Урал армытына ла, ай, һыйынған,
Һай, илкәйем, наҙлы еркәйем,
Сал бөркөттәй яуын, ай, оҙатып,
Ҡарап ҡалаһың бит ҙур юлдан.
Һай, илкәйем, наҙлы билкәйем.
Ата-бабаларҙың ҡанын һыулап
Үҫкән сауҡаларҙан уҡ юнып,
Һай, илкәйем, моңло еркәйем,
Дошмандарҙы сыр-сыу, ай, килтереп,
Беҙ ҡайтырбыҙ илгә лә шатланып.
Һай, илкәйем, моңло еркәйем.
Уралҡайым, беҙҙе, ай, үҫтерҙең
Буйҙарыңда атта уйнатып,
Һай, илкәйем, тыуған еркәйем.
Бүре, айыуҙарҙай дошманды ла
Беҙ ҡайтырбыҙ еңеп, ҡыйратып.
Һай, илкәйем, тыуған еркәйем.
Быуын-быуын үткән батырҙарҙың
Һүҙен тыңлап, йырын йырларбыҙ.
Һай, илкәйем, батырҙарҙың һүҙкәйен.
Илкәйебеҙ өсөн булырбыҙ шәһит,
Дошмандарға илде бирмәбеҙ.
Һай, илкәйем, батырҙарҙың әйткән һүҙкәйен.

Башҡорт ғәскәрҙәре тау шишмәһендәй гөжөлдәп, диңгеҙҙәй рус ғәскәрҙәренә ҡушылып, французлдарҙы ҡыуып алып киткәндәр, ти [1].

## 309. ҠАҺЫМ ТҮРӘ

Бер заман француз батшаһы Наполеон, Рәсәйгә ҡаршы һуғыш асып, рус батшаһы Александрҙы Мәскәүҙән ҡыуып сығарған. Александр батша ғәскәре менән Мәскәүҙе кире үҙ ҡулына алыу өсөн ни тиклем һуғышһа ла булдыра алмаған. Көн уйлаған, төн уйлаған, көндәрҙең берендә бер уйға килә алған. Үҙенең һанаттарына әйткән: «Минең ҡул аҫтымда башҡорт тигән халыҡ бар бит әле. Шуларҙан ғәскәр һорап ҡараһаҡ, ҡалай булыр икән?» — тигән. Һанаттар: «Дөрөҫ әйтәһең, батша хәҙрәт, был эште булдырһа, шулар ғына булдыра инде», — тигәндәр. Башҡорт иленә илсе ебәргәндәр. Был хәбәрҙе алғас, башҡорттарҙың аҡһаҡалдары йыйылышып кәңәш-төңәш иткәндәр. «Барайыҡ, шул дошмандарҙы айҡайыҡ, батырлығыбыҙҙы күрһәтәйек», — тигәндәр. Тирә-яҡҡа һөрән һалғандар. «Һуғышырға теләгән кешеләр, ҡоралдарын алып, аттарына менеп сыҡһын», — тигәндәр.

Күҙ асып йомғансы йыһан ғәскәр йыйылған. Йыйылышып, һуғышырға тип, юлға сыҡҡандар. Башлыҡ итеп Ҡаһым түрәне һайлағандар. Ашамағандар, эсмәгәндәр, ун көн, ун төн киткәндәр.

Мәскәүгә барып еткәндәр. Башҡорт халҡын күреү менән Наполеон Мәскәүгә ут төрткән дә ғәскәрен алып ҡаса башлаған. Быны күргәс, Ҡаһым түрә батырланып киткән. Наполеондың артынан баҫтыра башлаған. Ун көн, ун төн баҫтырған. Наполеон ғәскәрен һуҡтырып, рус батшаһы еренән сығарып ташлағандар. Шунан һуң Ҡаһым түрә алдына ҡараған, артына ҡараған, сит батша еренә инергә баҙнат итмәгән. Ғәскәрен әйәртеп, кире Мәскәүгә килгән. Килһә, Александр батша, дошмандар китте инде, тип иркенләп, йәйрәп тәхетенә ултырып алған, ти. Ҡаһым түрә бының былай ултырыуына риза булмаған: «Йә, нинә былай вайымһыҙ ултыра ҡалдығыҙ, батша хәҙрәт, ул мәлғүн французларҙы былай ғына ҡалдырып ҡуймайыҡ. Үҙҙәренең ҡылыҡтарын үҙҙәренә күрһәтәйек. Улар Мәскәүҙе алһалар, беҙ Парижды барып алайыҡ. Миңә сит батша еренә сығырға рөхсәт бирһәгеҙ, мин ғәскәрем менән китәм», — тигән. Батша бик оҙаҡ уйлаған да әйткән: «Рөхсәт бирәм, әйҙә, барығыҙ!» — тигән. Тәүҙә башҡорттар киткәндәр. Улар артынан татарҙар киткәндәр. Башҡорттар Мәскәүҙән сыҡҡанда: «Һай, илкәйем, нәҙек билкәйем» тигән көйгә йырлап сығып киткәндәр.

Пәлуән башҡорт халҡын дан итеп,
Батша хәҙрәт алды ла ҡаршына,
Һай, илкәйем, нәҙек билкәйем.
Атабыҙҙан ҡалған уҡ-һаҙаҡты
Яуҙырайыҡ дошман башына,
Һай, илкәйем, нәҙек билкәйем.
Урал тауы, һиңә васыятым,
Ошо һайбарҙанған батырҙар,
Һай, илкәйем, нәҙек билкәйем.

Французлдарҙан кире ҡайталмаһа,
Беҙҙең үсте кемдәр алырҙар?
Һай, илкәйем, нәҙек билкәйем.

Шулай йырлап баралар икән, ти, Урал тауы уларға яуап биргән, ти. Уралдың әйткәне:

Әй, балалар, юҡҡа ҡайғырмағыҙ,
Тәрбиәсе инәң барында;
Француздан бер ҙә хәүефләнмәй,
Ҡыуып, бөтәрөп ҡайтың барың да.
Тәрбиәсе инәң барында
Бер батырға меңде тыуҙырыр;
Әгәр дошман һеҙҙе еңеп ҡалһа,
Урал инәң донъя туҙҙырыр.
Ишетмәйҙәрме икән сит илдәрҙә
Уралтауҙың йәйелеп ятҡанын,
Ниндәй яуга ҡаршы барһалар ҙа,
Һис күрмәнең еңмәй ҡайтҡанын.

Уралдан шул яуапты алғас, былар батырланып тағы ла алға киткәндәр. Быларға Австрия тигән батшалыҡтан үтергә тура килгән. Австрия халҡы быларҙы күреп: «Һеҙ ниндәй халыҡ?» — тип һорағандар. Былар: «Беҙ башҡорттар», — тигәндәр. Австрия халҡы башҡорт тигән халыҡты электән белә икән. «Ә, теге йылҡы ите ашай торғандар икән», — тигәндәр. Шунан һуң башҡорттар Күбәләк-Тиләүҙең бер Ғариф исемле батырын нуҡталап килтереп, Австрия халҡына күрһәткәндәр. Нуҡталанған кешене күргәс, улар бик ғәжәп иткәндәр.

Австрия ерен үтеп, егеттәр әлеге француз ерenә килеп еткәндәр. Улар башҡорттарҙан әжәл көтөп торалар икән. Быларҙы күргәс, француз ғәскәре тырым-тыраҡай ҡаса башлаған. Башҡорттар дошмандың ҡасҡанын күреп, ғәйрәтләнеп киткәндәр ҙә: «Ҡайҙа Париж!» — тип арттарынан ҡыуа башлағандар. Бер заман Парижға барып еткәндәр. Барып етһәләр, ни күҙҙәре менән күрһендәр, Париж ҡалаһы ҡоймалар менән уратылып алынған, ти. Наполеондың бөтә ғәскәре шунда инеп бикләнгән, ти. Ҡойманың мылтыҡ ҡуйып ата торған тишектәре бар икән, ти. Французлдар шул тишектәрҙән генә мылтыҡ менән атып яталар, ти. Шунан һуң Ҡаһым түрә: «Мылтыҡҡа мылтыҡ!» — тип урыҫ ғәскәрҙәренең алға сығыуын һораған. Урыҫ ғәскәрҙәре бер көн, бер төн мылтыҡтан атҡандар. Ә башҡорттар һаҙаҡ уҡтарын һауаға сорғой башлағандар. Һауаға атылған уҡтар кире әйләнеп, ҡойма артында боҫоп ултырған французларға төшөп ҡаҙала башлаған. Мылтыҡтан атылған пуляларҙы, һауанан себен шикелле яуып торған уҡтарҙы күргәс, француздар түҙә алмағандар: «Был ни хәл?» — тип, ҡойма яғынан ҡаса башлағандар. Уларҙың ҡасҡанын күреп, беҙҙең ғәскәрҙәр сабышып ҡапҡа эргәһенә килгәндәр. Инеп китәбеҙ тиһәләр, ҡапҡа бикле икән. Нисек инәбеҙ инде, тип торғанда, әлеге нуҡталап йөрөтөлә торған Ғариф батыр

алға сығып: «Туҡтағыҙ, мин ҡойманы аша төшөп ҡарайым», — тигән дә, ҡойма башына менеп киткән. Менеп ҡараһа, ҡапҡа йоҙаҡлы икән. Ғариф батыр йоҙаҡты ҡылыс менән сабып онтаған да ҡапҡаны асып ебәргән. Шул ыңғайға беҙҙең бөтә ғәскәрҙәр бәреп ҡапҡанан инеп киткәндәр. Париж ҡалаһының бөтә урамдарын ҡаплап алғандар.

Беҙҙекеләр Парижды алып, батшаһын баш һалдырғас, унда бер нисә көн байрам иткәндәр. Унан һуң Александр батша әйткән: «Әйҙәгеҙ, Мәскәүгә ҡайтабыҙ, шунда барығыҙға ла бүләк бирермен», — тигән. Бөтә ғәскәрҙәр эркелеп Мәскәүгә ҡайтып киткәндәр. Ҡайтҡан саҡта юлда башҡорттар ошо йырҙы йырлағандар:

Урал тауҡайҙары сағыллы,
Урал тауы беҙҙе лә һағынды;
Һай, илкәйем, нәҙек билкәйем.
Бөгөн үлһәбеҙ ҙә үкенмәйбеҙ,
Дошман еңелеп, маҡсат табылды,
Һай, илкәйем, нәҙек билкәйем.

Бөтә ғәскәрҙәр Мәскәүгә йыйылғас, Александр батша һуғышта ирлек күрһәткән кешеләрҙе үҙ эргәһенә саҡырып алған. «Йә, батырлығығыҙ өсөн ни һорайһығыҙ?» — тигән. Башҡа халыҡтың батырҙары мал, миҙал, түрәлек һорағандар. Батша уларға һорағандарын биргән. Шунан һуң башҡорттарҙан һораған: «Һеҙ бик күп батырлыҡ күрһәттегеҙ, йә, һеҙгә ни кәрәк?» — тигән. Ҡаһым түрә уға шулай тип яуап биргән: «Беҙ ярҙамға ғына килдек. Бер нәмә лә һорамайбыҙ», — тигән. Батша Ҡаһым түрәнең был яуабына көлгән дә бик оҙаҡ уйланып торған. «Мин һеҙҙең теләгегеҙҙе ишетмәнем. Улай булһа, теләгән тиклем ер бирәм. Ҡаһым түрә, мин һине генерал-майор итәм. Сәйфетдин, Мортаза, Насир тигән батырҙарыңды есаул итәм, Әбүбәкер, Ярулла тигән батырҙарыңа хорунжийлыҡ бирәм», — тигән.

Башҡорттар үҙ ерҙәренә, Уралға, ҡайтып киткәндәр.

## 310. ҠАҺЫМ ТҮРӘ

*(вариант)*

Ҡасандыр Мырҙаш һәм Айыусы ауылдары бергә булған. Бында Моғатай тигән ҡарт йәшәгән. Уның Тувай менән Һатлыҡ тигән улдары була. Һатлыҡтың балалары булмай. Тувайҙан Ҡаҙаҡбай, Ҡаҙаҡбайҙан Мырҙаш, Мырҙаштан Ҡаһым түрә тыуған.

Ҡаһым түрәне Туйсин тип йөрөткәндәр. Ул дөрөҫ түгел, Туваев булырға тейеш. Сөнки Ҡаһым түрәнең олатаһының атаһы Тувай булған.

Ҡаһым түрә заманында бик данлы ир булған. Уны көтөүҙәге бер ат та күтәрмәгән, тик Ҡуксә менән Турысай ғына йөрөткән. Ишеккә ул тик арҡаһы менән генә ингән.

Ҡаһым түрәне 1812 йылда һуғышҡа китеп барған ерҙә ағыулайҙар. Уның ярҙамсыһы Үтәғол мулла була. Ҡаһым түрәнең атын Ҡаҙаҡбай алып ҡайта. Ҡаһым түрәнән һуң, атты улы Хәйбулла менеп йөрөй.

Француз яуына киткән бөтә атлыларҙан Буранбай иң аҙаҡ ҡайта. Был ваҡытта уға 45 йәштәр самаһы була. Ҡулына ҡамсы тотоп, Урал тау башына менеп баҫа ла:

Урал тауынан бейек тау булмаҫ,
Урал аша сыҡҡан һыу булмаҫ.
Ҡаҙанда ҡайнаған ҡуйырмаҫ,
Маңлайҙарға яҙылған юйылмаҫ, —

тип йырлай.

Ҡаһым түрәнән — Хәйбулла, Хәйбулланан — Йондоҙаҡ, Йондоҙаҡтан — Ғәлиулла менән Вәлиулла тыуа. Вәлиулланың балалары булмай. Ғәлиулланан Ғәйнулла менән Хөснулла тыуа. Улар Ҡасимов йөрөйҙәр. Ғәйнуллаһы уҡытыусы, Хөснулла — бай колхозсы [1].

## 311. АБДРАХМАН АҠЙЕГЕТ

Беҙҙең ауылдың батыры Абдрахман йәшләй үк ғәйрәтле егет булып дан алған. Һабан туйҙарында көрәштә ул берәүгә лә бил бирмәгән, ат сабыштарында, уҡ атыштарында ла ул гел алғырҙарҙан булған. Шунан тирә-яҡ башҡорттары Абдрахман батыр менән ярышырға баҙнат итмәҫ булғандар. Абдрахман батыр ауыл егеттәре менән уҡ-һаҙаҡтар аҫып, суҡмар тотоп, һунарға йөрөргә яратҡан. Бер сыҡҡанда улар дүртәр-бишәр көнләп, хатта аҙналар буйы йөрөгәндәр.

Абдрахман батырға егерме биш-егерме алты йәштәр тирәһе булғанда, француз яуы сығып киткән. Рәсәй батшаһы башҡорттарға ярҙам һорап мөрәжәғәт иткән. Был хәбәр-оран беҙҙең Үтәгәнгә лә килеп еткән. Ауыл ҡарттары — аҡһаҡалдар йыйылып кәңәш ҡорғандар. Илгә ауырлыҡ төшкәндә, яу килгәндә башҡорттар бер ҡасан да ситтә ҡалмаған, ир-егеттәр иртән үк аттарын эйәрләһендәр, тигәндәр. Ауылдың бынамын тигән ир-егеттәрен ат атландырып, башлыҡ итеп Абдрахман батырҙы тәғәйенләп, яуға оҙатҡандар.

Бер мәл Абдрахман батырҙы французлар ҡамап алған икән. Абдрахман батырға тирә-яҡтан төҙәп аталар — һис пуля алмай, ҡылыс менән сабалар — ҡылыс үтмәй, ти. Өҫтәнә кейгән тимер көпөһө уҡ та, пуля ла үткәрмәй икән. Шунан ни французлар улай-былай иткән арала, Абдрахман батыр йән-фарман тегеләрҙе ҡылыс менән тураҡлап, йырып сығып киткән, ти.

Французлар нисек кенә булһа ла Абдрахман батырҙы тоторға уйлаған. Бер киләсе тәрән бер киң соҡор ҡаҙып, шул тирәлә ҡыҫырыҡлай башлағандар. Абдрахман батыр һуғыша-һуғыша сигеп-

тән дә, соҡорға килеп терәлгәс, аптырабыраҡ ҡалған: ни эшләргә, аты менән һикерһә, арғы ярға барып етмәй соҡорға төшөп һәләк булыуы бар. Шулай ҙа тәүәккәлләргә булған: ҡыҫырыҡлап алған дошманды өркөтөп, бер аҙ эскә үткән дә саптырып килеп соҡорҙан атын һикерткән, уның аты дөлдөл толпар булған. Ул осҡондай икенсе ярға барып еткән, тик арт тояҡтары ғына соҡорға төшөп китеп, батырҙы саҡ ҡапландырмай ҡалған.

Абдрахман батыр ғәжәп шәп ҡурайсы ла, оҫта йырсы ла булған, тиҙәр. Яуҙан еңеп сыҡҡан араларҙа ла ул ҡурай уйнарға, йырларға ятҡан икән. Абдрахман батырҙың шул саҡтарҙа йырлаған йырҙары тип йөрөлгән ошондай йырҙар бар:

Һағындырған илем, төйәккәйем,
Урал ғына тигән тау икән.
Ир баштарын илдән, һай, айырған
Француз да тигән яу икән.
Күгәреп кенә ятҡан Мағаш тауы
Әле генә булһа бар микән?
Үҙем бында иҫән-һау ғынамын,
Туған-тыумасалар һау микән?

Яуҙан еңеп ҡайтышлай Абдрахман батырҙы батша үҙенә саҡырып миҙалдар биргән. Батша аҙаҡтан тағы: «Башҡорттарым, һеҙ ҙур дан ҡаҙандығыҙ, бар теләктәрегеҙҙе әйтегеҙ», — тигән. Башҡорттар: «Беҙгә бер ниндәй байлыҡ та, бүләк тә кәрәкмәй, һеҙ беҙгә ер генә бирегеҙ», — тигәндәр. Ҙур батырлыҡтары өсөн Абдрахман Аҡйегеткә лә бик күп ер биргәндәр. Беҙҙең Үтәгәндең ере бит бер яҡ сиге Архангель яҡлап Ҡыҙылға йылғаһы буйынан Ҡырмыҫҡалы яҡлап Ҡарлыман башы яҡтарынаса юҡҡа ғына йәйрәп ятмаған.

Абдрахман Аҡйегет ҡайтҡас та һалдат хеҙмәтен ҡуймаған, бер ҙур түрә булып эшләгән, ти. Ул Ҡырмыҫҡалы арҡаһынан ҡысҡырһа, тауышы Үтәгәнгә ишетеләгә торған булған.

Беҙҙең ауылдың хәҙерге Мырҙаҡаевтар ана шул Абдрахман батыр нәҫеленән булалар [1].

## 312. ЙӘНҺАРЫ БАТЫР

Фәйзулла ҡарттың Мөхәммәтсадиҡ тигән улы бар ине. Ул, француз яуында йөрөп ҡайтҡас, яуҙа күргәндәрен былай тип һөйләй торғайны.

Имеш, шул яуҙа Йәнһары тигән батыр ҙа ҡатнаша. Ул шул тиклем ҡеүәтле була — атҡан уғы ике кеше аша үтеп сыға икән бының. Буйы ике аршын ярымға етеп, яурынға ла ибәтәйһеҙ киң була. Һуғышҡанда, арыу-талыуҙы белмәй һуғыша. Көс яғынан ат ни, ул ни! Яуҙа гел әҙернә-йәйәһен ҡалдырмай йөрөтә был. Атҡан уғы бер саҡрымдан ары китә. Французлар ҡаса башлаһа, берәһе лә ҡотола алмай икән.

Шуға күрә батша уны бик маҡтап, кинәнесенән уға ла, башҡа батырҙарға ла, бөтә нәҫел-ырыуығыҙға етһен, тип, ошо ерҙәрҙе бүләк итә. Хатта Питербурҙың үҙендә уларҙың һындарын ҡойоп ҡуйырға әмер бирә.

## 313. ЙӘНТҮРӘ ХИҠӘЙӘҺЕ

Беҙҙең ғәскәр Дризенға[1] бик ҡыҙыу барҙы. Беҙ өс көн һәм өс төн аттарыбыҙҙан төшмәнек. Ул ваҡытта августың урталары ине. Эҫе һауа кешеләрҙең тынын ҡура. Бик ныҡ арыным. Ат өҫтөндә көскә-көскә генә килдем. Ахырҙа, бара торғас, минең хәл тамам бөттө. Миң атты юлдың бер яғына ҡайырҙым да үләнгә яттым. Бисәм дә үҙемдең янда ине. Ул да минең янға ултырҙы. Ул өҙөлөп-өҙөлөп илай башланы. Мин саҡ-саҡ ҡына тын ала инем. «Хуш бул, — мин әйтәм, — тыуған илем Башҡортостан, хуш булығыҙ киң сәхрәләрем, мин һеҙҙе хәҙер яңынан ҡайтып күрә алмам инде». Миңә бик ҡыйын, бик ауыр ине. Тамағым кипкән. Беҙҙән алыҫ түгел күтерле соҡорға оҡшаған, ылымыҡлы бер бәләкәй күл бар икән. Нисек етте шулай, бисәм ярҙамы менән, шыуышып шул күл янына барып еттем. Сисендем дә бер сәғәт самаһы һыу эсендә яттым. Миңә еңел булып китте. Аяҡҡа баҫып, һыуҙан сыҡтым. Сығыу менән мин ҡурҡып киттем: бөтә тәнемде, муйынымдан алып табаныма тиклем, һөлөк һырып алған. Бисәм ҡурҡыуынан йығылып китә яҙҙы. Ҡурҡыуҙан һуң мин шатландым. Ҡанымды тағы бер аҙ һурһындар әле тип, яңынан һыуға инеп яттым. Һыуға өсөнсө тапҡыр инеп ятҡандан һуң, минең ҡанымды эсеп туйған һөлөктәр үҙҙәре төшөп бөттөләр. Шунан һуң тәнем еңеләйеп китте. Ауырлыҡ ҡул менән һыпырып ташлаған кеүек булды. Мин үҙем кейенеп, атыма һикереп мендем. Бисәм менән икәүләп, үҙебеҙҙең отрядты ҡыуып еттек.

Икенсе бер ваҡыт мин тыуған илемә әйләнеп ҡайтыуҙан бөтөнләй өмөтөмдө өҙгәйнем. Бисәм генә ҡотҡарып алып ҡалды. Ҡайһы урында икәне хәтерҙә ҡалмаған, беҙҙе бәләкәй бер күҙәтселек отрядына ҡуйҙылар. Белмәйем, беҙ нисектер күрмәй ҡалғанбыҙ, таң атып килгәндә, түштәренә тимер таҡта кейгән егермеләп француз беҙҙең алға килеп сыҡты. Беҙ тиҙ генә һөңгөләребеҙҙе эйәргә нығытып, һөрән һалып, яуыздар өҫтөнә ташландыҡ. Мин атланған ат бик йылғыр, ҡурҡмаусан ине. Сабып барған ыңғайға бер французды һөңгөм менән сәнсеп йыҡтым. Һөңгөнө тартып алып маташҡанда, икенсеһе килеп, ҡылысы менән минең яурынға сапты. Тимер кейем сыҙаманы, мин сабылған яурын менән аттан йығылып төштөм. Шунда иҫтән яҙғанмын. Һушыма килгәндә, беҙҙең иптәштәрҙең яртыһы тегеләр тарафынан тураҡланып бөткәнен күрҙем. Ҡалғандарының ҡул-аяҡтары бәйләнгән. Бисәм янымда юҡ ине. Мин инде уны бөтөнләй донъяла юҡтыр тип уйланым. Аттарға мендереп, беҙҙе пленға алып киттеләр. Сәғәт ярымдан һуң ҡапыл урман араһынан бер йөҙ Дон казактары килеп сыҡты. Беҙҙе тирәләй уратып алдылар. Унлап ҡына ҡалған французлар ҡурҡ-

тылар. Бирелеүҙәрен белдереп, баш эйҙеләр. Ҡараһам, бисәм Дон казактары араһында йөрөй. Ул эш шулай булып сыҡты: беҙ һуғыша башлау менән, минең ҡатын, тегеләргә ҡаршы тора алмаясағыбыҙҙы аңлап алып, һуғыш майҙанынан тайшанып сыҡҡан да, беҙҙең главный отрядҡа хәбәр иткән. Эйе, әгәр ҙә бисәм булмаған булһа, мин үҙ илемдә былай итеп байрам ҡороп, күңел асып йөрөй алмаған булыр инем. Яманлап бер һүҙ ҙә әйтерлек түгел. Бик яҡшы һәм дан бисә!

## 314. ӘРМЕ

Бер егет яңы ғына өйләнеп башҡаланған саҡта йәрәбә буйынса батша хеҙмәтенә алына. Өйҙә йәш кәләше генә тороп ҡала. Бик оҙаҡҡа һуҙылған һалдат хеҙмәте, ауыр казарма тормошо, походтар, һуғыштар егетте ялҡтыра, зарыҡтыра. Тыуған ерҙәрен һағына ул. Төнгө ҡарауылдарҙа торғанда алыҫта ҡалған тыуған илен, һөйгән ҡатынын хәтерләп, үҙенең ҡәһәрле яҙмышын ҡарғап моңлана торғас, күңелендә һағышлы көй, йыр тыуа:

Әрмеләрҙә йөрөп сәс сткерҙем,
Сәскенәйем етте лә үрмәгә.
Ризыҡ яҙған булһа, бер ҡайтырбыҙ
Тыуған еркәйҙәрҙе күрмәгә.
Ҡояш ҡына сыға, ай, әйләнеп,
Аҡ болотҡайҙарға бәйләнеп;
Иҫән генә булһаҡ, бер ҡайтырбыҙ,
Ҡояш ҡына кеүек әйләнеп.
Йөрөгән юлдарыбыҙ, ай, таҡырҙыр,
Күк күгәрсенкәйҙәр йүгерә,
Таҡыр ҙа ғына түгел, ай, баҡырҙыр,
Шул ерҙәрҙә йөрөү бөлдөрә.

Һалдат шуны йырлап йыуаныс таба.

Хеҙмәте оҙаҡлап китә. Ике тиҫтә йылдан ашыу әрме михнәттәрен татығас, һаулығы ныҡ ҡаҡшаған, апаруҡ ҡартайған һалдатты тыуған иленә ҡайтарып ебәрәләр.

Ауылына ул ҡараңғы төшкәс ҡайтып төшә. Өйөн табып ала. Күрә: донъяһы үҙе киткәндәгесә имен-аман тора, йорт-ҡуралар төҙөк — ир кешенең ҡулы тейгәнгә оҡшай. Тимәк, тауыш-хәбәре байтаҡ йылдар килмәй торған һалдаттан өмөт өҙөп, ҡатыны башҡа берәүгә сығып ҡуйған. Шом алынғас, ҡарындыҡ тәҙрә аша өй эсен күҙәтә башлай. Бер аҙ олоғая төшкән ҡатыны сыра яҡтыһында йөн иләп ултыра. Өйҙә йәш бер кеше лә бар. Ул ҡатын эргәһенә килеп, арҡаһына ҡулын һала, ҡосаҡлай. Ҡатын тегене туйылдатып һөйә. «Ошо икән ире, — тип уйлай һалдат. — Минең ише түгел — йәш, һыу һөлөгөндәй һылыу». Сирек быуат тирәһе ҡатынының тоғролоғона инанып йәшәгән һалдат зәһәрләнеп китә. Шулай ҙа егеттең бер һүҙе һағайта төшә:

— Әсәй, атайыма арнап сығарған йырыңды йырла әле. Ҡатын йырлап ебәрә, егет ҡурай алып уға ҡушыла:

Йәмле генә Урал буйҙарында
Ҡымыҙлыҡтан йыуан йыуа бар;
Егет кенә саҡта эрмеләрҙә
Хеҙмәт итеү тигән йола бар.
Ҡайынлы ла ағас, ай, еркәйем,
Эрмеләргә китте иркәйем;
Инде лә генә тиҙҙән ҡайтыу ҡайҙа,
Аман-иҫәнлеген теләйем.

Һалдат ғәжәпләнә, төшөнә алмай. Әсәй тип өндәшкән был егет ниндәй һалдаттың улы һуң?

Ишекте шар асып эскә инә. Йөҙөн һаҡал-мыйыҡ баҫҡан әлһерәп бөткән ҡартты күреп, ҡатын башта аптырап ҡала. Унан иренең ҡосағына ташлана. Егет ҡыйыр-ҡыймаҫ һалдат эргәһенә килә.

— Ошо ҡарт буламы минең атайым? — тип һорай. — Һин уны һәр саҡ йәп-йәш егет итеп хәтерләп һөйләй торғайның.

— Егерме йыл үҙе бер кеше ғүмере бит, балам, — ти әсәһе. — Атаң эрмегә киткәндә, ҡарынымда ғына ҡалғайның. Хәҙер һин дә уның шул саҡтағы йәшен уҙып бараһың, — ти әсәһе.

Хәл аңлашыла. Һалдат улы менән дә күрешә[1].

## 315. ПЕРОВСКИЙҘЫҢ ҮЛЕМ ЯЗАҺЫНАН ҠОТОЛҒАНЫ

Ырымбурҙың губернаторы Перовский, башҡорттар батшанан рөхсәтһеҙ ер баҫып алғандар тип, Дуңғыҙлау күлендә[1] туғыҙ мең кешене ҡырҙырған. Был турала батшаға ялыу иткәндәр. Батша асыуланып, Перовскийҙы язаларға Петербурға саҡыртҡан.

Батшаға барыр алдынан Перовский башҡорттарҙың иң шәп ике ҡурайсыһы менән бер өзләүсеһен саҡыртып килтерергә ҡушҡан. Ул заманда иң данлы ҡурайсыларҙан Һунарсы ауылынан Рәхимғол, икенсеһе — Ҡолсомдоҡо[2] Хәсән булған. Өзләүселәрҙән Һунарсы ауылы кешеһе Өзләү Йосоп булған. Ул шундай шәп өзләр ине, ти, Һаҙҙан[3] тороп өзләһә, тауышы ауылға ишетелер булған.

Ошо ике ҡурайсыны, бер өзләүсене алып, Перовский юлға сығып китә. Петербурға барып еткәнсе, өҙлөкһөҙ ҡурай уйнап, өзләп барғандар. Батша һарайына ла шулай барып ингәндәр.

Перовский батшаға рапорт биргән. Рапорт аҙағында «Һеҙ, ғали йәнәптәренә, башҡорттарҙан ике ҡурайсы, бер өзләүсе алып киләм», — тигән.

Перовскийҙы батша үлем язаһына хөкөм иткән. Батша хөкөм иткәндә тегеләр өҙлөкһөҙ ҡурай уйнап, өзләп торғандар. Бер туҡтамай уйнап килеүгә ҡурайсыларҙың ирендәре уйылып бөткән булған. Шунда ла улар бөтә халыҡты шаҡ ҡатырғандар. Былар-

ҙың шулай бер туҡтамай уйнауына батша ла аптыраған. «Берәй нәҫтә тығып килмәгәнме был?» тип, өҙләүсенең ауыҙын астырып, тамағын ҡараған. Шуларҙың ғәжәп уйнауҙары арҡаһында, тәьҫирләнеп, аҙаҡ Перовскийҙы үлем язаһынан ҡотҡарған. Ҡурайсыларҙың өсәүһенә лә яҡшы кейемдәр бүләк итеп, еҙ ҡурайҙар яһатып биргән. Батша һарайында уйынсы итеп ҡалырға димләгән.

Былар риза булмағандар, тыуған илебеҙгә ҡайтабыҙ, тигәндәр. Батша тегеләрҙе яҡшы аттарға атландырып, һый-хөрмәт менән ҡайтарып ебәргән. Перовский, шулай итеп, үлем язаһынан ҡотолоп ҡалған.

## 316. АМАН

Элек ҡаҙаҡ халҡы Арал диңгеҙенән алып Башҡортостан сигенә тиклем урынды биләгән. Ҡаҙаҡтар башҡорттар менән бик татыу булғандар. Башҡорт сәсәндәре, ҡаҙаҡ аҡындары һәр ваҡыт бәйгеләрҙә ярышҡандар. Был ике халыҡ бер-береһенә ҡыҙ бирешеп, улдарына кәләш әйттереп йәшәгәндәр. Бына шулай тыныс ҡына йәшәгән ваҡытта донъялар боларып киткән. Батша ғәскәрҙәре килеп илде байҡай башлаған.

Ҡаҙаҡ халҡы был хәлгә сыҙай алмай баш күтәргән. Баш күтәреүселәр бөтә көньяҡты ҡаплап алғандар. Хәҙерге Семипалатинский янында, Аҡтүбә өлкәләрендә бик ҡаты бәрелештәр булған. Был яуҙа ҡаҙаҡ халҡы еңелгән. Батша ғәскәрҙәренең утлы ҡоралдарына ҡаршы тора алмаған. Күп кешеләр яуҙан ҡайта алмаған. Ҡалғандары Арал буйына боҫҡан. Баш күтәреүҙә ҡатнашып йөрөгән Аман Абазбаев башҡорт араһына ҡасҡан. Башҡорттар уны булғаны менән ҡунаҡ иткәндәр. Ул Бәрйән, Ҡыпсаҡ, Үҫәргән ырыуҙарында йөрөгән. Уның янында бер нисә иптәше лә булған. Аман Үҫәргән ырыуының Хужа исемле аҡһаҡалдың еренә килеп сыҡҡан. Эңгерсе[1] тип аталған уяҙҙың аръяғында йәшәй башлаған. Аҡбаш тигән ауылға йыш барып йөрөгән. Шул ауылдағы Гөләндәм тигән ҡыҙҙы яратҡан. Көндөҙҙәрен урманда йөрөгән, кистәрен Гөләндәм янына барған. Улар Әйек һыуының матур яланында осраша торған булғандар. Өйләнешеп йәшәргә хыялланғандар. Мөмкинлек булмаған, уны батша һалдаттары эҙләгәндәр. Аман Урта Муйнаҡ ауылына ла килеп китә торған булған, унда Ҡарамыш нәсәбенән таныштары булған. Уны тоторға уйлағандар, Гөләндәм уны йәшереп ҡалдырған. Быға үс итеп Гөләндәмде үлтерткәндәр.

Бер мәл Аман иптәштәре менән Эңгерсе буйына сыҡҡан. Көн бик эҫе булған. Аман иптәштәрен ике яҡҡа айырып ебәргән: яртыһын Гөләндәм ҡәберенә, Аҡбаш ауылына, яртыһын Ҡырғыҙбай ауылына, үҙе һыу инмәксе булған. Бөтә кейемен, ҡоралын яр башында ҡалдырған. Шул ваҡытта батша ялсыларына һатылған бер нисә кеше үтеп бара икән. Улар араһында Йәлир тигән аҡылға бер төрлө генә әҙәм дә булған. Ул, ҡылысын алып, Аманды сапҡыларға иткән, иптәштәре ебәрмәгәндәр. Уны тотоп Урта Муй-

наҡ ауылына алып ҡайтып киткәндәр. Йәдир юлда иптәштәренең береһен үлтергән дә Амандың күкрәгенә атып ебәргән. Аман сайҡалып китеп, тирә-яғына ҡаранғансы, Йәдир икенсегә атҡан. Был юлы Амандың бөйөрөнә тейгән. Аман һыу эсенә ҡолаған. Шул ваҡытта Амандың иптәштәре килеп сыҡҡандар. Йәдир ҡасҡан. Ҡаҙаҡтар уға теймәгәндәр. Аман үҙен бейек тау башына алып сығып ерләргә ҡушҡан. Иптәштәре уны ерләп, баш осона һөңгөһөн ҡаҙағандар ҙа, ҡаҙаҡ далаларына ҡайтырға сыҡҡандар. Юл ыңғайында Урта Муйнаҡ ауылына тейеп китмәк булғандар. Быларға бер төркөм һыбайлы ҡаршы сыҡҡан. Был хәлгә ҡаҙаҡтар бик аптырашҡандар. Һөңгөләрен ергә ҡаҙағандар ҙа аттарынан төшөп, баш эйгәндәр.

Ҡарамыш нәсәбенән булған Йәдирҙе үлтереп китеүҙә ҡаҙаҡтарҙы ғәйепләйҙәр икән. Ҡаҙаҡтар: «Йәдирҙе беҙ үлтермәнек», — тип әйткәндәр. Урта Муйнаҡ кешеләре Йәдирҙең кәүҙәһен килтерәләр. Шул саҡта улар батша һалдаттары китеп барғанын күрәләр. Алда барғаны Йәдирҙең кейемен кейеп алған була. Шунан һуң башҡорттар менән ҡаҙаҡтар бер-береһен аңлайҙар. Башҡорттар ҡаҙаҡтарҙы Аҡтүбәгә тиклем оҙатып баралар. Аман һыу ингән йылға Аманйылға, ә тау аралары Аманингән булып ҡалған.

## 317. БАЙЫҠ СӘСӘН

Байыҡ бик атаҡлы сәсән булған. Тапҡырлыҡта, һүҙ ярышында уның алдына сығыр кеше булмаған. Ул ошо беҙҙең яҡта йәшәгән. Уның ҡәбере Ҡыҙылъярҙа. Иҙелбай тауында Ҡыҙылъяр. Нәҡ Иҙелбайҙан Урмантауға китә торған ерҙә.

Байыҡ сәсәндең улының ҡәбере Арҡауылдың фермаһы менән кәләте араһында. Ҡарт ҡайнатам күрһәтә торғайны. Хәҙер тапалып бөткән инде. Байыҡ сәсәндең шәжәрә быуыны былай:

Байыҡ сәсән — улы Баймөхәммәт — Игембәт — Әхтәм — Вәли — Сәфәрғәле [1].

## 318. БУРАНБАЙ

Боронғо башҡорттарҙың тәүге болаларынан һуң Туҡ һыуы буйына Ирәндек башҡорттары күсерелгән. Шул саҡта бер ауылдың башы Исәнгилде тигән ҡарт була. Бының Ағыш тигән улы була. Шул улы үҫеп буйға еткәс, уны Ирәндек яғынан өйләндерә. Ағыштан бер ул тыуа, уның исеме Йәрмөхәмәт була. Уны Йәркәй тип тә йөрәтәләр. Йәркәй үҙе бик батыр көрәшсе, йырсы булып, Туҡ, Ҡыр, Соран, Ҡәмәлек, Юшатыр һыуҙары буйҙарында дан тота.

Берҙән-бер көн Туҡ-Соран башындағы Урал тауы тип йөрөтөлгән ҡалҡыуҙа ятҡан Тоҙ юлы буйындағы киң яланды, Ҡайыпҡол старшиналар менән һөйләшеп, Тимашев [1] тигән баяр һатып ала. Быны межалауға ауыл халҡы уҡ-һаҙаҡтар менән ҡоралла-

нып ҡаршы сыға. Был боланың башында Йәркәй йөрөй. Бола ғәскәр көсө менән баҫтырыла. Ер межалап алына. Йәркәйҙәрҙе яналалға оҙаталар. Һаҡмар күперен аша сыҡҡанда, Йәркәй ҡасып ҡотола. Тау, урман башҡорттары араһына китә. Үҙенең ейән йортона барып морон төртә. Уны шул ауылдағы ейәндәренән башҡа бүтән берәү ҙә белмәй. Исемен дә алмаштыра. Буранбай тип йөрөтә.

Ул тирәлә дан тотҡан Буранғол кантон Йәркәйҙе шул Буранбай исеме менән уҡырға ебәрә [2]. Был уҡып ҡайтҡас, уны үҙ ҡулы аҫтына старшина итеп ҡуя.

Буранғол кантон Буранбайға Ҡатайҙағы Әлми старшинаның ҡыҙын алып бирә. Бер ваҡыт Рәсәй батшаһы менән француздар араһында һуғыш башлана. Башҡорттарҙан бик күп ғәскәр йыйыла. Күп кешене әрмегә алалар. Был ғәскәрҙең башлығы Буранғол кантон була. Ул яуға киткәндә, ғәскәрҙәренә йөҙ башы итеп, үҙенең улы Ҡаһарманды, Ҡаһымды, Буранбайҙы, Бейеште, Айсыуаҡты, тағы шундай үҙе ышанған кешеләрҙе алып китә.

Былар яуҙа ҙур батырлыҡ күрһәтеп ҡайталар. Ҡайтҡас, Буранбайҙы тағы ла старшина, үҙенең улы Ҡаһарманды кантон, Бейеште сотник итеп ҡуя ла ҡартлығынан Буранғол үлеп китә. Ҡаһым Ҡаруанһарайҙағы әрме башында, Буранғол урынында ҡала.

Был һуғыштар бөткәс, башҡорт ерҙәренә заводчиктар тула башлай. Халыҡтың һунарға йөрөй торған урманы, йәйләй торған туғайҙары китә башлай. Илдә тынысһыҙлыҡ башлана. Янарал һәр бер старшина, кантон янына үҙ кешеләрен ебәрә. Элекке писарҙарҙы алмаштыра башлайҙар. Буранбай ҙа, күп кенә бүтән старшиналар ҙа үҙ писарҙарын алмаштырмайҙар, килгәндәрен кире ҡайтарып ебәрәләр.

Янарал был турала батшаға ҡағыҙ яҙа. Батшанан: «Тархан булған кешеләргә гене старшина булырға, тархан булмағандары ышаныслы кешеләр тарафынан геуаһлыҡ алһалар ғына старшина була ала», — тигән фарман килеп төшә. Ҡантондар, старшиналар бер-береһен яҡлап, үҙ урындарында ҡалалар. Заводчиктар менән ризаһыҙлыҡ һаман баҫылмай. Был бигерәк тә Буранбай йортонда йыш осрай. Янарал бынан шикләнеп, үҙенең бер кешеһен Буранбайға ҡунаҡҡа ебәрә. Ул кеше Буранбайға килеп ҡунаҡ була, һунарға йөрөй, балыҡ тота. Буранбай менән заводчиктарға барып йөрөй. Халыҡ Буранбайҙың был эшенә асыулана башлай. «Буранбай заводчиктарға һатыла, беҙҙе ситләтә», — тип халыҡ эс тарта (сер йәшерә) башлай. Был эштә Буранбайға дошманыраҡ йөрөгән кешеләр тағы ла өҫтәп, ҡуйыртып ебәрәләр.

. Был кешенең һунарҙа йөрөгәндә Буранбайға дошман кешеләр менән осрашып һөйләшкәнлеген үҙенә еткерәләр. Янаралдан килгән кеше Буранбай тураһында төрлө кешеләрҙән, заводчиктарҙан һорашып, ҡайтып китмәк була. Буранбай быны белә. Шунан һуң үҙ серҙәштәре менән кәңәш итеп, бының юлына кеше сығарып аңдыталар ҙа янарал кешеһен дә, оҡшаҡсыларҙы ла юлдан алалар.

Был эш янаралға еткерелә. Янарал үлтереү эше буйынса ҡапыл ғына сара күрмәй, ни өсөн тигәндә, бындай эштәрҙең бер Бу-

ранбай тарафынан ғына түгел, байтаҡ кантон, старшиналар тарафынан эшләнгәнен һиҙә. Шуға күрә лә янарал Каруанһарайҙа йыйын йыя. Унда бөтә старшиналарҙы, кантондарҙы, уларға эйәреп йөрөгән йырсы, ҡурайсыларҙы ла саҡыра. Был йыйынға аттат еткән ерҙән бөтә ҡурайсы, йырсылар килә. Ни саҡлы йырсы, ҡурайсы килмәһен, Буранбайға етерлек бер кеше лә булмай. Бының уйнауына ситтән түгел, Буранбайҙың үҙ йортонан килгән кешеләр ҙә аптырай.

Халыҡ үҙ-ара һөйләшкәндә: «Бының ҡурай тотоуы ла, ҡурай уйнауы ла, көйҙәре лә, йырҙары ла беҙҙең яҡтан ҡасып киткән Ағыш улы Йәркәйҙекенә оҡшай»,— ти. Тик күп йылдар үткәнгә, берәү ҙә Йәркәйҙер тигән уйға килә алмай.

Шул йыйын осоронда ашау-эсеү мәжлесе үткәрелә. Бында ҙурыраҡ тархандар, старшиналар бисәләре менән саҡырылған була. Йыйындан һуң, кис ҡайтҡанда, күп кенә тархандар Буранбайҙы үҙҙәренә ҡунаҡҡа саҡыралар, уның йырын, ҡурай уйнауын ишетергә теләүҙәрен белдерәләр. Буранбай был мәжлестә Ҡәмәлек буйының Тимерғазы тигән тархан-старшинаһы менән дуҫлаша. Береһе лә Буранбайҙың Йәркәй икәнен танымайҙар, ул үҙе лә был турала бер нәмә лә әйтмәй. Байтаҡ ҡунаҡ булалар, бал эсәләр, шунда йоҡлайҙар. Быларҙың тороуына Тимерғазының бисәһе аш һала, былар йоҡлаған бүлмәгә инеп-сығып йөрөй. Шул саҡта Буранбайҙың юрған аҫтынан сығып ятҡан балтырына күҙе төшә. Ҡараһа — балтырында ҙур яра эҙе бар. Юрғанын асып ҡарай. Ҡараһа, старшина Буранбай икән. Был ҡатын шунан һуң һаман бының тураһында уйланып йөрөй. «Был Йәркәй түгелме икән?» — тип шикләнә. Минең тирмәмә килеп йөрөгәндә атайым уның аяғын балта менән бәреп яралағайны, шул яра урыны түгелме икән?» — ти.

Аш бешә. Бары ла торалар. Ашай-эсәләр. Йыйынға барып ҡайталар. Тағы бал эсергә тотоналар. Тимерғазы йомош менән ҡала араһына сығып китә. Аулаҡ ҡалыуҙан файҙаланып, Тимерғазының бисәһе Буранбайҙан күреп һорай: «Һин Йәркәй түгелме?» — ти. Был бисә Йәркәйҙәр яғындағы Ҡайыпҡол старшина нәҫеленән була. Заманында ул, Йәркәйгә киләм, тип, ғашиҡ булып йөрөгән икән. Исеме Сәлимә.

Буранбай ҙа башта уны танымай, ҡапыл Сәлимәне күргәс, аптырап китә лә әйтә:

— Әгәр шул Йәркәй булһа, нишләр инең? — тип бер шикле һүҙ әйтеп, бисәнең күңеленә тағы бер төйөн һалып ҡуя.

Буранбай асылын әйтмәһә лә, Сәлимә Буранбайҙы «шул» тип таный. Бисәһенең Буранбайға бик ҡыйшанлауын күреп, Тимерғазының көнсөлөгө ҡуҙғала. Бал эскәндә, Тимерғазы Сәлимәнең Буранбайға артыҡ һөйкөмлө йырҙар йырлауына асыулана. Бисәһен һалып ебәрә. «Ирҙәр күрһәң, — ти, — аталанып бараһың, — ти был, — элек бер Йәркәй ҡасҡы менән башымды ҡатырғайның», — ти. Үҙенең Йәркәйгә дошман икәнлеген Буранбайға аңлатып һала. Йыйын таралғас, килеүселәр йорттарына ҡайтып китәләр.

Тимерғазы бисәһе менән тыныс тора алмай, был хәбәрҙе ишетеп, Сәлимәнең ата-әсәһе килеп етә.

Сәлимә шул саҡ әйтеп һала:

— Һеҙ Йәркәйҙе хурлаһағыҙ ҙа, ул хур булмаған, ил тотҡан түрә булған, — ти.

Йәркәйҙең Буранбай исемендә йөрөгәнен һөйләп, ул маҡтанмаҡ була. Быны атаһы ла, Тимерғазы ла эстәренә һалып ҡуялар ҙа, янаралға хәбәр итәләр.

Янарал быны тикшереү эшенә керешә. Кешеләр ебәрә. Буранбайҙың Йәркәй икәнен беләләр. Шулай ҙа был көйгә ҡапыл ғына ҡулға алмайҙар. Батшаға, башҡорт араһында йәшерен ҡасҡыларҙың түрә булыуҙарын белдереп, яҙыу ебәрелә. Батша был ҡағыҙҙы алғас, кантондарҙы штатский итеп ҡалдырырға фарман ебәрә.

Янарал шулай эшләй. Ул бөтә кантондарҙы саҡырып, ҡылыстарын, уҡа кейемдәрен һалырға ҡуша. Шул саҡта Ҡаһым түрә үҙенең армияһын таратырға, ә Ҡаһарман кантон ҡылысын, кейемдәрен бирергә ҡаршы торалар. Бүтән кантондар араһынан да йыйынды ташлап ҡайтып китеүселәр була. Янарал Ҡаһарман кантондың писары аша уны ағыу менән үлтерә. Ҡаһым түрәне эҙәрләтә, ул да ҡаса; Буранбай яңғыҙ ҡалғас, уны ҡулға алып, Себер ебәрә. Буранбай Себерҙә бер нисә йылдар йөрөгәс, унан ҡаса. Янарал кешеләре уны йәнә табалар ҙа үлтерәләр.

Буранбай Себергә киткәс, былай тип йырлаған;

Минең дә исемем һораһағыҙ,
Ялған исемем булыр Буранбай,
Ялған ялаларҙы ябып миңә,
Ебәрҙеләр Себер ҙәү, күралмай.
Табаҡ та ғына табаҡ, ай, аҡ ҡағыҙ —
Буранбайҙың яҙған хаттары.
Батырымдың хатын уҡығанда,
Зар илайҙар ауыл ҡарттары[3].

## 319. БУРАНБАЙ

*(вариант)*

Бынан күп йылдар элек бер бай йәшәгән. Уның бер балаһы ла булмаған. Шуға күрә бай алдан вәғәҙә биреп ҡуйған;

— Ҡатыным малай тапһа, үҙ иркенә ҡуям, ҡыҙ бала тапһа, ил батырына бирәм.

Көндәрҙән бер көндө бай ҡатыны донъяға ҡыҙ бала килтергән. Уға Айһылыу тип исем ҡушҡандар. Йылдар үткән, Айһылыу ҙа буйға үҫеп, еткән ҡыҙ булған. Тирә-яҡта уға һоҡланмаған, матурлығына ғашиҡ булмаған егет ҡалмаған. Яусы ебәреүселәр ҙә күп булған. Бай үҙ вәғәҙәһен боҙорға теләмәгән.

Бер ваҡыт халыҡ һабан туйына йыйылған. Майҙанда батыр-

ҙар алыша башлағандар. Бер яҡтан байҙар, икенсе яҡтан ярлылар уратып ултырғандар икән. Теге бай шунда әйтеп һалған:

— Кем дә кем батырҙарҙың барыһын да еңеп сыға, шуға Айһылыуҙы бирәм, — тигән.

Егеттәр дәртләнеп көрәшә башлағандар. Алыш бик оҙаҡҡа киткән.

Аҙаҡ килеп бер бай түрәнең улы бөтә батырҙарҙы ла еңеп һалған. Уға ҡаршы Уралбай тигән бер егет сыҡҡан. Былар бик оҙаҡ көрәшкәндәр. Аҙаҡ килеп, Уралбай тегене күтәреп бәргән. Халыҡ араһында шау-шыу ҡупҡан, байҙар ҡысҡырған.

Ярлылар Уралбайҙы яҡлаған. Батырҙарҙы икенсе ҡат көрәштерергә булғандар. Был юлы ла Уралбай еңеп сыҡҡан. Тағы ғауға киткән. Байҙар ярлы батырҙың еңеүен танымағандар. Айһылыуҙы атаһы түрә улына бирергә булған. Уралбайҙы тотоп ябып ҡуйғандар.

Туйға әҙерлек башланған. Айһылыу Уралбайҙы яҡындан белмәһә лә, күреп йөрөгән булған икән. Ул еңелгән түрә улына сығырға теләмәгән. Уралбайҙың йәп дуҫы Ибрайҙы тәңгел килтереп, үҙенең теләген һөйләп биргән.

— Туй барған кисте Уралбай менән беҙҙең янға килегеҙ. Ҡалғанын һуңынан уйларбыҙ, — тигән Айһылыу.

Туй көнө килеп еткән. Ҡоҙа-ҡоҙағыйҙар, ҡунаҡтар килеп тулған. Табын асылып, һый башланып киткән. Ҡунаҡтар иҫерешә башлағас, Уралбай менән Ибрай килеп еткәндәр. Йәшертен генә Айһылыу менән һөйләшеп алғандар. Айһылыу Уралбайға әйткән:

— Һарайҙан атайымдың Аҡбуҙаты менән Күкбуҙатын алып сыҡһағыҙ, мин һинеке, — тигән.

Уралбай менән Ибрай һарай янына килһәләр, ишек йоҙаҡлы. Ишек эргәһендә ҡараусылар йөрөп тора. Уралбай ситкәрәк китеп ергә ултыра ла, ҡурайын алып, уйнап ебәрә. Ҡурайҙан сыҡҡан моңға таң ҡалып, ҡарауылсылар донъяларын онотала. Уралбай тирәһенә йыйылып ултыралар ҙа уның уйнағанын йотлоғоп тыңлай бирәләр. Ә Ибрай был ваҡытта һиҙҙермәй генә һарайҙан аттарҙы алып сыға. Шунан тегеләр маташҡан арала Аҡбуҙатҡа Уралбай менән Айһылыу, Күкбуҙатҡа Ибрай менеп атлана ла, Урал тауҙарына табан йүнәләләр. Туйҙағы халыҡ эштең нәмәлә икәнен һиҙеп алғандар. Инде һуң булған. Аҡбуҙат менән Күкбуҙатты ҡыуып етерлек ат тирә-яҡта булмай.

Уралбай, Айһылыу, Ибрай Урал тауҙарының кеше аяғы баҫмаған еренә барып етәләр ҙә, Аҡбуҙат менән Күкбуҙатты ышаныслы урынға йәшереп, йәшәй бирәләр. Ибрайға Айһылыуҙың иптәше Көнһылыуҙы ҡасырып алып киләләр. Йәштәр бында ике пар булып тормош ҡороп ебәрәләр.

Йылдар бер-бер артлы үтеп тора. Айһылыуҙың балалары була. Байҙар һаман да Уралбайҙы эҙләйҙәр. Таба алмайҙар. Батшанан ғәскәр ҙә килтертәләр. Ул да эҙгә баҫа алмай.

Бер ваҡыт Уралбайҙы эҙләүселәр Урал тауҙары араһында Аҡбуҙат менән Күкбуҙаттың эҙен юллап килеп алып китәләр. Шунан

һуң ғәскәр килеп былар торған ерҙе уратып ала. Аҡбуҙат менән Күкбуҙат булмаһас, былар алыҫ китә алмайҙар. Быларҙы тотоп алалар. Уралбай үҙ исемен әйтмәй, Буранбай тип яҙҙыра. Ҡул-аяҡтарына бығау һалып, быларҙы Себер ебәрәләр. Уралбай каторганан хаттар яҙып тора:

Исемемде минең һораһағыҙ,
Ялған исемдәрем Буранбай.
Аҙ ғына ла эште күптәр күреп,
Ебәрҙеләр кәтер, күралмай.

Уралбайҙы халыҡ онотмаған, унын хаттарын һағынып көткән:

Табаҡ та ғына табаҡ, ай, аҡ ҡағыҙ —
Буранбайҙың яҙған хаттары.
Буранбайҙың яҙған хатын уҡып,
Зар илайҙар ауыл ҡарттары.

Айһылыу Уралбай[1] иҫтәлегенә көй сығарған. Ул, ирен һағынып, эсе бошҡан саҡтарында йәшеренеп йәшәгән ерҙәренә бара торған булған. Шул урында былай тип йырлаған:

Урал ғына тауҙың ҡуйынында
Аҡбуҙатҡайҙарҙың төйәге.
Урал ғына тауҙың көн битендә
Ята йәнкәйемдең төйәге.

Хәҙер был йырҙы «Буранбай» тип йырлайҙар.

## 320. БУРАНБАЙ

Оҙон да ғына оҙон, ай, бик моңло
Буранбайҙың һуҙған йырҙары.
Буранбайҙың йырын тыңлағанда
Йөрәкһенә ауыл ирҙәре.

Буранбай Ҡотдосов 1800 йылдарҙа йәшәгән. Сығышы менән Баймаҡ районы, Буранбай ауылы (элекке Ырымбур губернаһы, I Бөрйән волосы, Ҡинйәбулат ауылы). Бик батыр, мәргән, тапҡыр һүҙле, оҫта йырсы булған, һунарға йөрөгән, уҡ-һаҙаҡ менән оҫта эш иткән. Бер күҙе һуҡыр булған. Халыҡ был хаҡта йыр ҙа сығарған:

Буранбайҙы һуҡыр тиҙәр,
Бер күҙкәйе менән ҡарайҙыр...

Атаһы — Зөлҡәрнәй, ҡатыны — Тутыйғош. Нәүширбән исемле улдары булған (хәҙерге Нәүширбәновтар шунан килеп сыҡҡан).

Һаҡмарҙың уң яғындағы Мәкәр урманы ул ваҡытта ҡарағас ағас менән ҡапланған булған. Буранбай шул ҡарағастан өй һалып торған. Нигеҙе 12 бүрәнәнән һалынған.

Буранбай заманына күрә уҡымышлы, ғәрәпсә уҡый-яҙа белгән кеше булған. Шулай уҡ күҙ бәйләү (гипноз) һәләтенә эйә булған. Байҙар алдында һис ваҡыт баш эймәгән, һәр ваҡыт ярлыларҙы яҡлаған. Шулай булғаны өсөн тирә-йүндә ихтирам яулаған. Ярлылар уға кәңәш һорап барғандар. Юғары властар Буранбайҙан бик ныҡ ҡурҡҡандар, унан ҡотолоу сараһын эҙләгәндәр. Ырымбурға ялыу яҙғандар. Әллә нисә мәртәбә саҡыртыуҙарына ҡарамаҫтан, ул Ырымбурға бармай, урманда ҡасып йөрөгән. Шул ҡасып йөрөгәндә, ул Сибай кантон менән дә бәйләнешкә ингән. Сәркәтибе Ибраһим менән йөрөгән. Ирәндектә, унан һуң Үҙәндә йөрөп, бер йыл үткәргән. Ауылға ҡайтырға мөмкинселек тапмаған.

Шулай ҙа бер төндө ул ауылға ҡайтырға булған. Апрель айының Һаҡмар ташып ятҡан ваҡыты. Ҡайтып, һыйыр һауып ултырған ҡатыны менән күрешкән дә, атын һарайға индереп, өйгә кергән. Һәр ваҡыт күҙ яҙҙырмай өйҙө аңдып йөрөгән һаҡсылар, быны күреп ҡалып, өйҙө ҡамағандар. Тик улар Буранбайҙы таба алмаған. Һарайҙағы ат та табылмаған. Үҙенең күҙ бәйләү һәләтлеге менән ҡотолоп ҡалған. Иртәнсәк китергә йыйынған. Һағалап торған һаҡсылар тағы ла Буранбайҙы тоторға булып, артына төшкәндәр һәм Һаҡмарҙа ҡамағандар. Ауылдың уртаһында тирәк бар. Шул тирәк тәңгәленән шаулап киткән боҙға ҡарамаҫтан, ул арьяҡҡа сыҡҡан да: «Бына Буранбай мин булырмын»,— тип, Шөңгөр юлы (Элекке Тоҙ юлы) буйлап Ҡасҡын ҡарағайына ҡаса. (Ҡасҡын ҡарағайы — хәҙерге Шүлкә ауылы янындағы урман. Ҡасҡыновтар шунан килә.) Һәр ваҡыт билбауында йөрөткән һәрнәк балтаһы менән ҡарағайға йыр яҙған. Үҙе был ерҙәрҙән бөтөнләй китергә уйлаған. Мораҡҡа (хәҙерге Күгәрсен районы), Ишбирҙе ауылына, дуҫы Суфиян ҡартҡа барған. «Мин илдән киттем, йырымды Ҡасҡын ҡарағайына яҙып ҡалдырҙым. Дәртең булһа, ҡояш төшөп сайыр (һағыҙ) иремәҫ борон барып яҙып ал», — тип хушлашҡан да, Дим буйына Иҙелбай ауылына барып төпләнгән. Шул ауылдан ҡатын алған (1824 йылдар тирәһе).

Ә Суфиян ҡарт теге ҡарағайға барған, тик сайыр ағып өлгөргән булған. Шулай ҙа бер нисә юлын күсереп алған. Шуларҙың береһе:

> Буранбайҙың ғына, ай, баҡсаһы
> Ун ике лә төрлө япраҡ...

Буранбайҙың артабанғы яҙмышы билгеле түгел. Тик шуныһы, ул башҡа яҡтарҙа йөрөгәндә, үҙен Буранбай тип түгел, Ялан Йәркәй тип таныҡтан. Бынан Буранбай менән Йәркәйҙең бер үк кеше булғанлығын әйтергә була.

1956 йылда Иҙелбай ауылынан Буранбайҙың ейәне Заһиҙулла килгән, тиҙәр беҙҙең ауылға. Уның һөйләүенсә, олатаһы Дим буйында үлеп ҡала (йылы билгеһеҙ).

Бик күп йылдар буйы Буранбайҙың уҡ-һаҙағын һаҡлап килгәндәр.

50-се йылдарға тиклем беҙҙең ауыл Кинйәбулат исемен йөрөткән. Шунан һуң, ҡарттарҙың һорауы буйынса, Буранбай иҫтәлегенә ауылды Буранбайға үҙгәртәләр.

Ололарҙың әйтеүенә ҡарағанда, Буранбайҙың йорт нигеҙенең дә урыны билдәле. Хәҙер ауылдағы Буранбаев, Нәүширбәнов, Шәйхисламов, Үтәбаев, Халисовтар Буранбайҙың тамырҙары һанала [1].

## 321. ИШМЫРҘА

Ишмырҙа үҙе Иҫәкәй [1] ауылынан булған. Киң күңелле, кеше менән аралашыусан, йор һүҙле ир булған инде ул. Заманына күрә белеме лә еткән. Ауылдаштары уны һәр ваҡыт ер доверенныйы итеп һайлар булғандар. Ул мәлдәрҙә башҡорттарҙың ер-һыуы, тауы-урманы күп булған.

Ишмырҙа күҙ күрмәҫ ерҙәрҙе уттай итеп йөрөгән. Халыҡтың бөтәһен дә тигеҙ күреп, ерҙәрҙе тигеҙ бүлер булған. Шуғалырмы, халыҡ уны үҙ күргән.

Йылдар үтә. Илдәр ҙә, мәлдәр ҙә артта ҡала. Баярҙар килеп ҡыҫа башлай. Ҡайырылып бесән үҫә торған туғайҙарҙы, мал туплап рәхәтләнеп ята торған йылға буйҙарын тартып алып, хужа булалар. Халыҡтың ыҙаланыуын күреп йәне ҡыйылған Ишмырҙа илде ташлап китергә мәжбүр була. Ул ҡараҡ булып китә. Баярҙарҙың һимеҙ йылҡыларын ҡыуып алып килеп ярлы-ябағаға бирә, бесән кәбәндәренә ут һала ул. Ишмырҙа Алатау ҡабағына ла барып йөрөй. Ошонда ул Белорет — Стәрле юлында йөрөүсе почтаны үлтерә. Сумка менән аҡса алып ҡаса. Әммә үҙенең документын торғоҙоп ҡалдыра. Һуңынан уның Оҫҡонлотау [2] тирәһендә:

Алатауҡай бында, һай, ни саҡлы,
Саҡрымдары уның хисаплы.
Үҙган ғына ғүмерҙең хисабы юҡ,
Ҡалган гына ғүмерем ни саҡлы? —

тип йырлағанын ишеткәндәр.

Күп ерҙәр гиҙеп, күп йылдар үткәс, уны батша ялсылары тотоп алғандар. Оҙон арбаға ултыртып Аҡмәсеткә ҡарай алып киткәндәр. Уның эргәһендә ике һаҡсы оҙата барған.

— Мин һеҙҙән тоттормаҫ инем, тик бер үҙем тау ҡуйынында йөрәп ялҡтым, — ти икән. Ә һалдаттар тегеңә:

— Беләбеҙ һине! Ҡараҡ Ишмырҙа булһын да үҙе теләп тотолһон имеш! Беҙ ҙур тырышлыҡ менән генә тота алдыҡ, — тиҙәр икән.

— Улай булғас, тотоп ҡарағыҙ, — тигән дә, тегеләрҙең икеһен ике яҡҡа бәреп, ҡасҡан да киткән тағы Ишмырҙа.

Мылтыҡ дробы алмаҫ араға йүгергән дә:

— Йә, тотоғоҙ улай шәп булғас, — ти икән был.

Тегеләр күпме генә йүгерһәләр ҙә, Ишмырҙаны тота алмағандар. Шунан ул үҙе килеп ҡулын бәйләткән.

— Ағай, ҡаса алаһың икән, ышандыҡ, башҡа улайта күрмә инде, — тип ялынғандар һаҡсылар. Иҫәкәйҙе уҙғанда Ишмырҙа ауылдаштарына:

— Эх, ауылдаштарым, анау урмандағы ағас ҡыуышына йәшергән аҡсамды табалһағыҙ, бөтәгеҙгә лә етер ине лә бит, — тип ҡысҡырған. Халыҡ һыҡтай-һыҡтай оҙата уны Аҡмәсет яғына. Шунан уның хаҡында ошондай йыр сыҡҡан:

Ишмырҙа ла батыр атҡа менгән,
Аты уйнай башын тартҡанда.
Һөңгө, ҡылыс болғап, бүркен кейеп,
Таштар яра уҡтарын атҡанда.

## 322. БАЯС

Һаҡмар буйында мыҡты кәүҙәле, оҫта йырсы, сәсән телле Баязитдин исемле батыр йәшәгән, ти. Ул үҙенең бер туған апаһы менән бергәләп, билгә һөңгө тағып, уҡ-һаҙаҡ менән ҡоралланып, иң яҡшы уҡсыларҙы йыйып, команда төҙөй ҙә колонизаторға ҡаршы һуғыш башлай. Баястың (уны шулай тип йөрөтәләр) ата-әсәһе лә, яҡын туғандары ла язалап үлтерелгән була.

Баяс та, апаһы ла атта оҫта, йылғыр йөрөй белгәндәр. Ярышта көмөш балдаҡ аша уҡ атып, алмаш-тилмәш беренселекте бирмәгәндәр. Дошманға ҡаршы атҡан уҡтары ла бушҡа китмәгән. Шулай ҙа, мылтыҡ менән ҡоралланған карателдәрҙең ҡыҫымына түҙеп тора алмай, сигенергә мәжбүр булғандар.

Улар Урал арты башҡорттары араһына килеп сығалар. Командалағы кешеләр төрлө ауылдарға таралып ултыра. Апаһы менән Баяс Ирәндек буйлап күсеп йөрөй. Ирәндектең көнсығыш битендә Баяс сауҡаһы тигән урын бар. Һаҡмар буйындағы Түбәнге Йыйыҡбай ауылы ерендә бер тау Апай тауы тип атала. Һөйләүсәренә ҡарағанда, батырҙар бына ошо ауылдарҙа тороп киткәндәр.

Ил тынысланa башлағас, Баяс үҙе Күсей [1] ауылына урынлашып йәшәй башлай. Һылыу ғына ярлы ҡыҙына өйләнә. Ә апаһы Басай [2] ауылына кейәүгә сыға.

Йылдар үтеү менән байҙар, Баясты күрә алмай, килмешәк тип мыҫҡыл итәләр. Ялған ғәйеп тағып Себер ебәрергә һүҙ беркетәләр.

Баяс, быны һиҙеп, тағы ҡасҡынға әйләнә. Өйө тирәһенә көнтөн йәшерен ҡарауыл ҡуйыла. Ҡасҡынды тота алмағас, «эҙләүҙе туҡтатырға» тигән булып ялған хәбәр тараталар. Шымсылар Баястың ҡатынынан күҙ ысҡындырмайҙар.

Баяс менән ҡатыны шулай ҙа осрашып торғандар. Уларҙы, уңайын тура килтереп, тота ғына алмағандар. Баястарҙың икәүара вәғәҙәләре була: аулағыраҡ яҡҡа китергә. Ошо уй менән йәй-

ҙең матур бер көнөндә, еңелсә генә кейем-һалым, аҙыҡ ала ла ҡатыны, еләккә киткән кеше булып, йәшеренә-йәшеренә юлһыҙ ерҙәрҙән ире янына йүнәлә. Шымсылар һиҙҙермәй генә бының артынан күҙәтеп баралар. Түҙемһеҙлек менән көтөп торған Баяс күреү менән ҡатынын ҡосаҡлап ала. Ҡораллы шымсылар килеп, уларҙы шунда тоталар. Баястың аяҡ-ҡулын бәйләп, хәлдән тайғансы туҡмап, ауылға килтерәләр.

Ни тиклем ҡаты туҡмаһалар ҙа, Баяс дошмандарына бер һүҙ өндәшмәй. Сырайын да һытмай.

Себергә оҙатҡанда, ике һыбайлы, тимер сынйыр менән етәкләп, урам буйлап үтәләр. Шул саҡта Баяс моңло тауыш менән йырлап ебәрә:

Һауаларҙа уйнай, ай, ыласын ҡош,
Тояҡҡайҙары ҡыҙыл буяулы.
Үҙ илкәйҙәремдән, ай, һөрөлгәс,
Кем балаһы кемгә аяулы?
Ат ҡушаҡлап йөрөп бында килдем,
Ҡалдырҙым мин тыуған ерҙәрҙе,
Уғыры ла тип хурламағыҙ
Ирәндеккә ҡасҡан ирҙәрҙе.
Ирәндеккәй тауҙа йөрөгәнемдә
Уң ҡанатҡайҙарым ат булды.
Ғәзиз генә башым әсир булғас,
Дуҫ-иштәрем минең ят булды.
Ямғыр яуған саҡта ҡырҡып алдым
Йәш сауҡаны — ҡыуыш ҡорорға.
Хаҡ тәғәлә беҙгә яҙған микән
Нәҫел-ырыуыбыҙ ҡорорға.
Ҡояш ҡына сыға, ай, әйләнеп,
Алһыу нурҙарына ла бәйләнеп.
Һау-сәләмәт булһам, бер ҡайтырмын
Тыуған илкәйемә лә әйләнеп.

Баястың зарлы йырҙарын ишетеп, ауыл ярлылары, ҡатын-ҡыҙ, бала-саға сыр-сыу килеп илашып ҡала. Шул китеүенән Баяс әйләнеп ҡайтмаған.

## 322. ҠАМАЛ ҠАСҠЫН

Бынан ике йөҙ йылдар элек беҙҙең Иҙел башы яҡтарында Ҡамал исемле бик батыр егет булған. Ул Бүгәс менән Салауат яуҙарында ҡатнашып йөрөгән. Уны тотоп алып, аяҡ-ҡулын бығаулағандар ҙа баструкка ултыртҡандар. Шулай ҙа Ҡамал баструктың мөрйәһенән сығып ҡасҡан. Бик оҙаҡ ил гиҙеп йөрөй торғас, тыуған ауылына ҡайтып еткән. Аяҡ-ҡулынан бығауҙарын бысып алғандар бының. Тик ауылда оҙаҡ торорға ярамағанлыҡтан, Ҡамал урманға ҡасып китеп, юлбаҫар булып йәшәргә булған.

Камал ярлы-ябағаға, етем-ебергә тырнаҡ осон да тейҙермәй, тик бай-түрәләрҙе, купец-сауҙагәрҙәрҙе генә талап йөрөй икән. Шуға ла улар уны батша һалдаттарына тотоп бирмәксе булалар.

Бер саҡ шулай Йыһанша тигән бай, Камал артынан төшөп, ҡыуып килә торғас, уның аяғын яралай. Яралы көйөнсә лә Камал унан ҡасып ҡотола. Кеше аяғы баҫмаған ике тау эсендәге бер мәмерйәлә ул үҙенә төйәк ҡороп йәшәй башлай. Ҡәләш йәрәшеп, уны ла шул тау ҡыуышына алып китә. Был тау итәген әле лә Камал ҡултығы тип йөрөтәләр.

Камал шулай йыш ҡына ауылына ҡайтып йөрөй. Ауылға инер алдынан ул һәр саҡ ҡурайын һыҙҙырып ебәрер була. Уның ҡурайҙа шул тиклем моңло уйнауын ишетеп, йәше-ҡарты — бөтәһе уға ҡаршы сығып, аҙыҡ-түлек, кейем-һалым биреп ебәрер булған.

Камалды бик оҙаҡ ваҡыт бер кем дә тота алмай. Шулай ҙа бер көндө уның ҡайтып килгәнен аңдып торған стражниктар Ҡотҡар ауылы аръяғында атып үлтерәләр. Кәүҙәһен йылға ярына ҡом менән күмеп китәләр. Камалдың үҙенән бер аҙым да ситкә китмәй йөрөй торған саптар аты менән ерән бурҙайы була. Атын стражниктар тотоп алып киткәс, бурҙайы өс көн буйы Камал ҡәбере өҫтөндә шыңшып илап ята. Тик аҙаҡ кемдер бурҙайын да атып китә.

## 324. БЕЙЕШ БАТЫР

Бейеш батыр бер ауылда йәки бер урында ғына йәшәмәгән. Ул күп ғүмерен Ирәндек менән Уралтау буйҙарында үткәрә. Ни өсөн тиһәң, ул замандың түрә-ҡаралары, байҙары менән һыйыша алмаған, уларҙы күрә алмаған.

Бейештең ата-әсәһе ярлы була. Шуға ҡарамаҫтан, ул үҙенең тиңдәштәре араһында ҙур кәүҙәле, көслө бала булып үҫә. Малайҙан өлкәнерәктәр ҙә шөрләгән. Көрәшкәндә, уйнағанда яңылыштан ҡайһы берҙә тиңдәштәренең аяҡ-ҡулдарын да һындырып ҡуя торған булған. Бай балалары илаһа, бәлә һалһа, яза гел Бейештең ата-әсәһенә төшкән.

Ун-ун ике йәштәрҙә инде ул бик ҙур кәүҙәле малай булып үҫеп етә. Ни тотһа, шуны һындыра был. Ҡулдары көрәктәй, йоҙроҡтары сүместәй була. Ә ун алты-ун ете йәшендә киң яурынлы, яҫы маңлайлы, үткер күҙле, ҡара йылтыр йөҙлө һылыу егет була. Урта кәүҙәле берәй кеше Бейеш янында торһа, бала һымаҡ ҡына күренгән. Бәйгеләрҙә көрәштә уны бер батыр ҙа йыға алмаған, күптәр Бейеш менән көрәшеүҙән ҡурҡҡан.

Бейеш батырҙың ата-әсәһе ҡартая башлаған. Егет үҙе бер байҙа ялланған. Ул эшкә шәп булған. Эшен дә эшләгән, ашын да ашаған. Бер ултырғанда бер ҡуйҙы, йә биленә ураған ҡаҙыны ашап бөтә торған булған. Эш хаҡын ашауындан артмай, тип байҙар уға бик аҙ түләгәндәр. Бындай саҡта Бейеш батыр асыуынан

байҙы туҡмап сығып китә торған булған. Шуға ла байҙар нисек тә булһа унан ҡотолоу юлын эҙләй башлайҙар.

Бейеш батыр ҙа уларҙы күрә алмай. Ата-әсәһе ярлы тормошта үлеп китәләр.

Бейеш батыр ҡасҡынға әйләнә. Байҙарҙы, түрәләрҙе талап, йорттарын яндырып, үс ала. Алған аҡсаларҙы, затлы әйберҙәрҙе ярлыларға таратып бирә. Түрәләр нисек булһа ла Бейеште юҡ итеү юлын эҙләй. Уға «Бейеш ҡараҡ» тигән исем тағалар.

Бер саҡ батырҙың эҙенә төшәләр. Уны Ирәндек тауында осраталар. Батыр артыҡ аптырап тормаған. Тирә-яғында үҫеп ултырған баҫрау йыуанлыҡ ағастарҙы ҡырҡып алып, ҡыуыусыларҙы туҡмай башлаған. Эҙәрләүселәр ҡоттары осоп ҡасалар.

Шунан Бейеш батыр Ирәндек, Урал тауҙарының ҡая таштары, ҡуйы урмандары араһында көндәрен үткәрә. Төнгә кергәс, байҙарҙан үс ала. Ул һәр көн үҙенең юлын яңылыштырып йөрөй. Төрлөсә кейенеп, ауылдарға, ҙур баҙарҙарға ла килеп сыҡҡылай. Бер ваҡыт ул Хәлил баҙарына килә. Баҙарҙа көсө менән тирә-яҡта дан алған бер ҡуштан батыр була. «Бейеш ҡараҡты күрһәм, уны тотоп алып, ҡул-аяҡтарын бәйләр ҙә тештәрен кеҫәһенә тултырып ебәрер инем», — тип маҡтана икән был. Уның һүҙҙәрен Бейеш ишетеп тыңлап торған.

Бына теге батыр ҡайтыу юлына сыға. Уның артынан Бейеш тә ҡуҙғала. Улар икеһе лә арбаларына саҡ һыйып китеп баралар. Бер аҙҙан Бейеш тегене ҡыуып етә. Ҡуштан батыр: «Бейеш ҡараҡты беләһеңме?» — тип һорауға: «Беләм», — тип яуаплай Бейеш.

— Ҡайҙа һуң ул ҡараҡ, мин уның тештәрен йолҡоп кеҫәһенә һалып ебәрәйем әле? — ти ҡуштан.

— Бейеш батыр бына мин булам, — тигән Бейеш.

Ике батыр алыша башлаған. Бейеш тегенең аяҡ-ҡулдарын арбаһына ҡуша бәйләп, тештәрен берәм-берәм һурып алып, кеҫәһенә һалып ебәргән.

Көндәрҙең береһендә Бейеш Урал тауы буйлап йөрөгәндә бер рус кешеһен осрата. Ул да ҙур кәүҙәле, киң яурынлы, етен сәсле, үткер күҙле ир икән. Улар бер-береһенә өнһөҙ-тауышһыҙ яҡын киләләр ҙә үҙ-ара аңлашалар, танышып китәләр. Завод хужаһын үлтерә һуғып, Урал тауҙары буйлап ҡасып йөрөүсе Синцов [1] фамилиялы кеше икән был. Хәҙер улар икеһе бергә ҡасҡын булып йөрөйҙәр, байҙарға ҡаршы көрәшәләр, үс алалар.

Синцов Бейешкә ҡарағанда ла көслө була. Ул ун ике ботлоҡ батман алып йөрөй. Байҙарҙың магазиндарын талап алған аҡсаларҙы, затлы нәмәләрҙе улар ярлыларға таратҡандар.

Бейеш, нисектер бер Синцовтан айырылып, ауылдар буйлап сығып киткән. Ул бөтөнләй икенсе кейем кейенеп ала, үҙен танымаҫтар тип уйлай. Тик быны танып алалар ҙа бай-түрәләр ҡыуа сығалар. Бейеш атын эйәрләй ҙә һыбай урманға, тау араһына ҡаса.

Ҡыуыусылар, яңынан-яңы атҡа атланып, Бейешкә яҡынлашалар. Батыр Ағиҙел башы Ирәмәлтауға менә башлай. Тегеләр бик

яҡынлашҡас, Бейеш, атынан төшөп, ҡая тау башына үҙе үрмәләп менеп китә. Тегеләр ҡая таштың тирә-яғын һырып алалар, артынан үрмәләйҙәр. Бейеш ҡая башындағы бейек ҡарағас башына менә. Тегеләр быға төшөргә ҡушалар.

Батыр тереләй бирелергә теләмәй. Ҡуштандар балта менән ҡарағасты тумыра башлайҙар. Хәҙер Бейеш батырҙың башына бер уй килә. Ул йәйелеп үҫкән ике йыуан ҡарағас ботағын беләктәренә урап тота ла, уны ҡанат (таяу) итеп, Ағиҙел аша оса. Бейеш Ағиҙелдең икенсе яғына осоп барып төшә лә, үҙен ҡыуып килеүселәрҙе мыҫҡыллы һүҙҙәр менән әрләп, йырлай-йырлай Урал урмандары араһына инеп юғала.

Шунан Бейеш батыр байҙарға, түрәләргә ҡаршы тағы уҫалыраҡ көрәшә башлай. Уларға ҙур ҡурҡыу һала. Бейеш батырҙы һаман эҙәрләйҙәр.

Бер йылды ҡар иртә яуа. Эҙләргә сығыусылар аҡ ҡар өҫтөндә Бейеш батырҙың эҙҙәрен табалар ҙа буйлап китәләр. Бер аҙҙан Бейеш тотола. Ҡүмәк көс батырҙы еңә.

Ҡарттарҙың ҡайһы берәүҙәре, Бейеш батырҙы туҡмап үлтергәндәр, икенсе берәүҙәре, уны һөргөнгә ебәргәндәр ҙә шул китеүҙән кире әйләнеп ҡайтмаған, тип һөйләйҙәр. Өсөнсөләре, уны тота алмағандар икән, тип тә әйтәләр.

Бейеш ҡасып йөрөгәндә йыр сығарған.

## 325. БЕЙЕШ

*(вариант)*

Бейеш ул байҙарға, түрәләргә ҡаршы көрәшеп, урмандарҙа ҡасып йөрөгән бер кеше. Ҡасып йөрөгәнендә, Бейеш үҙе тураһында йыр сығарып, көйләп йөрөгән:

Аҡ ҡуянҡайҙарҙан тун тектерҙем,
Тышҡынайын нимән тышлайым?
Йәйгенәһен бында, эй, йәйләнем,
Ҡышҡынаһын ҡайҙа ла ҡышлайым?

Бейеш бәһлеүәндең ҡырҙа йөрөгәнен ярлы-ябаға күрһә лә, эҙләүселәргә хәбәр итмәгән. Байҙар быны ҡулға төшөрөргә бик тырышҡан, ни өсөн тиһәң, юлдан үткән бер генә байҙы ла таламайынса үткәрмәгән ул.

Шулай ҙа бер ваҡыт Бейештең урманда йөрөгәнен күреп, бер кеше урядникка килеп хәбәр итә. Ҡүмәкләшеп эҙләй сығалар. Бейеш ысынлап та урманда була. Артынан ҡыуып еткәс, быға тотонорға берәү ҙә баҙнат итмәй икән. Нисек итһә итеп, Бейеште тоталар. Ҡул-аяҡтарын сыйыр менән бәйләп, Орский өйәҙ төрмәһенә оҙаталар. БыҒаулы көйө, ғазап сигеп, бик күп ауырлыҡтар күтәреп, төрмәлә йәшәй башлай Бейеш.

Бер көн шулай аяҡ-ҡулдарындағы быҒауҙы өҙгөләп, төрмә тәҙ-

рәһенең тимер ҡоршауҙарын һүтеп ала ла, тимерҙең барыһын бер урынға йыйып, өҫтөнә менеп ултыра.

Иртәгеһен төрмәлә проверка уҙғарғанда был хәлде күреп, аптырап китәләр. Тотҡондоң аяҡ-ҡулына тағы ла ҡалыныраҡ бығауҙар кейҙереп, ныҡыраҡ төрмәгә ултырталар. Ниндәй генә ауыр ғазаптар күрһә лә, Бейеш сыҙай. Үҙ күңелен үҙе йыуатып йыр сығара:

Ишектәре төрмәнең, ай, нумирлы,
Тәҙрәләре уның тимерле.
Аяҡта ла ҡулда тимер бығау,
Ысҡындыра алмай ҡулым тимерҙе.

Яҙ булыуҡайҙарын, ай, белерһең:
Ҡарайып-ҡарайып күренә үңерҙәр,
Сәғәттәре айҙай, айы йылдай
Төрмәләрҙә үткән ғүмерҙәр.

Шулай итеп, күп ғазаптар менән өс йыл ғүмер уҙып китә.

Бер заман, йәй көнө, Александр второйҙың батша булып ултырыу уңайы менән өйәҙҙәрҙә, ҡалаларҙа байрам үткәрелә. Орск ҡалаһында коронование байрамы барыуын төрмәлә ултырған Бейеш тә ишетә. Яманһыу булып китә быға. Ашарына килтергән ашын ашамай. Төрмә начальниктары: «Ниңә ашамайһың?» — тип һорағас, Бейеш: «Мин ашай алмайым. Элек, ирекле ваҡытта, һәр бер туйҙа ҡатнашып, көрәштә алдыма кеше сығармай торғайным. Бөгөнгө коронование байрамы минең шул ваҡыттарымды иҫемә төшөрҙө», — тигән.

Байрамда бик күп халыҡ йыйылған була. Ат саптыралар, малайҙар йүгерешәләр. Шунан көрәш башлана. Көрәштә бер ҡаҙаҡ бәһлеүәне алдына берәүҙе лә сығармай икән. Йыуан, ҙур кәүҙәле кеше, ти, был ҡаҙаҡ батыры. Көрәшкә әҙерләнеп килгән ир-егеттәрҙең барыһын да ырғытып бөткәс, түңәрәк яһап ултырған халыҡҡа ҡарап: «Эй, ҡайҙа ҡасып бөттө батырҙарығыҙ? Булһа, килең!» — тип һөрән һалған. Шул ваҡыт төрмә начальнигы өйәҙнейгә килеп, төрмәлә бер көрәшсе бәһлеүән ятҡанын әйтә. Тиҙ генә ат ектерәләр ҙә Бейеште алырға ебәрәләр.

Бейеш әйтә: «Улай булғас, миңә бер кружка һөт килтерегеҙ», — ти. Һөт алып киләләр. Һөттө эсеп ала ла, китә был коронование барған ергә. Түрәләр ҡаҙаҡ батыры менән көрәшерҙәй кеше таба алмай ултырғанда килеп етә Бейеш. Майҙанға йөҙҙәре һарғайып, йонсоп бөткән бер кеше сыҡҡас, халыҡ бошоноп та ҡуйған. Ҡаҙаҡтар унан көлөп: «Эй, бынауы бер әҙәм төптө үҙенең үлеменә ҡан тартып килеп ятыр», — тигән.

Ҡаҙаҡ бәһлеүәне көрәшкәндә ҡулына сыййыр тотоп көрәшкән. Бейеш батыр ҙа көрәшеү өсөн сыййыр һорап ала. Тик ул сыййырҙың ҡул менән тота торған ос яғына ҡайыш ҡуйҙыра. Ҡаҙаҡ батыры: «Мин сыҙамайым ғуй, тиҙерәк әпкилең», — тип, Бейеш батырға яҡынлашҡас та, Бейеш уның күкрәгенән этеп ебәреп,

майҙанды бер мәртәбә урап сыҡҡан. Үҙе кешеләргә: «Әгәр ҡаҙаҡты тәүҙә мин күтәрһәм, һөрәнләгеҙ, ҡаҙаҡ мине күтәрһә, өндәшмәгеҙ», — тип әйтеп йөрөгән.

Шунан һуң майҙан уртаһына килеп, ҡаҙаҡ батыры менән ҡул тотошалар. Ҡаҙаҡ батыры кеше тотоп алыу менән бер мәртәбә һелккеләп, таушап алып, шунан һуң ғына ташлай торған булған. Бейеш батырҙы ла шулай итеп һелкмәксе булған был. Тик Бейеш тегенең һелкеүенә бирешмәгән, бер аяғы менән ергә тубыҡланып ҡалған. Майҙанда ултырған халыҡтар араһында: «Ай, бынау меҫкенде асыуланып үлтерә ташлап ҡуймаһын был ҡаҙаҡ», — тигән һүҙҙәр таралған. Әммә ҡаҙаҡ батыры Бейеш бәһлеүәнде күтәрә алмаған. Бейеш ҡаҙаҡ бәһлеүәнен ергә йығып, майҙан урталап ултырған түрәләр янына һөйрәп алып барған. Майҙандағы халыҡ аяғүрә тороп ҡысҡырышҡан. Бейеш ҡаҙаҡ батырын әллә ҡайҙа ырғытып ташлаған икән. Тегенең яурын һөйәге онталып, бер ҡулы һынған, ти. Халыҡ быға таң ҡалған [1].

Урыҫ, татар, башҡорт — һәммәһе аҡса, тауар, кейелгән кейем менән Бейеште бүләкләй. Хатта өйәҙ начальнигы үҙе лә бүләкләй Бейеште.

«Тағы ниндәй һөнәрең бар?» — тип һорайҙар икән бынан түрәләр. Бейеш: «Мин элек бик мәргән атыусы ла була торғайным, — ти. — Ҡулға алған саҡта, уҡ-һаҙағым да үҙем янымда ине», — ти. Тиҙ генә төрмәнән бының уҡ-һаҙағын алдырталар. Байрам барған майҙандан саҡрым ярым алыҫлыҡта бер сиркәү була. «Әгәр рөхсәт итһәгеҙ, мин мәрәйгә атмай, анау сиркәү башындағы тәре өҫтөндә ултырған ике ҡарғаға атыр инем», —ти икән Бейеш. «Ат әйҙә, булдыра алһаң», — тиҙәр быға түрәләр.

Бейеш батыр ҡарғаларҙың икеһен ҡуша атыу өсөн бер аҙ ҡырғараҡ сыға.

— Был ҡарғаларҙың ҡайһы еренә атайым? — тип һорай был түрәләрҙән.

— Ҡарғаларҙың ҡайһы еренә атһаң да ат, тик тәрегә тейгеҙмә, — тиҙәр икән тегеләр.

— Мин был ҡарғаларҙың икеһенең дә баштарын өҙә атам, — ти икән Бейеш.

Атып та ебәрә — ҡарғалар ҡолап та төшә. Иҫе китеп торған халыҡ төркөмө сиркәүгә ҡарап йүгерә башлай.

Түрәләр ҡысҡыра икән:

— Туҡтағыҙ, йәмәғәт, туҡтағыҙ! Хәҙер ат менән алдыртабыҙ ҡарғаларҙы, — тип, халыҡты туҡтаталар. Ат менән сабып барып, ҡарғаларҙы алып килһәләр, тегеләрҙең икеһенең дә баштары өҙөлгән, ти.

Шул көндө үк Бейештең бүләктәрен ат менән батырҙың атаһы йәшәгән ауылға ебәрәләр.

Өйәҙ начальнигы Бейештән:

— Һине ни өсөн төрмәгә ултырттылар? — тип һорай.

— Мин байҙарға ҡаршы булдым, — ти Бейеш. — Һәр ваҡыт һөжүм ҡылып йөрөнөм, — ти.

Шулай булһа ла өйәҙ начальнигы Бейеште, үҙенә алып ҡайтып, өс көн ҡупаҡ итә. Шунан һуң төрмә начальнигына Бейеште ирекке сығарырға ҡуша. Бейеш төрмәнән сығып ауылына ҡайта. Тик барыбер ул элекке ғәҙәтен ташламай: байҙарға ҡаршы көрәшеп, шул юлда үлә [2].

## 326. ЮРҠӘ-ЮНЫС

1840—1850 йылдарҙа хәҙерге Курган өлкәһенең Сафакүл районы Атйетәр ауылында Юныс исемле бер егет йәшәгән. Ул үҫеп еткәс, Шәрип тигән байға ялсылыҡҡа инә. Шәрип бай был яҡ башҡорттары араһында үҙенең йыртҡыслығы менән дан тотҡан була. Юныс эшкә бик сос була. Бер саҡ байы Урал артындағы Юрматы ауылынан етенсе ҡатынлыҡҡа бер йәш ҡыҙ алып ҡайта. Ҡыҙ Юнысҡа бик оҡшап китә. Ҡыҙ ҙа байҙы бер ҙә тиңһенмәй. Үҙе Юнысты эстән генә яратып йөрөй икән.

Юныс уның менән ҡасып китергә уйлай, тик эш ул уйлағанса барып сыҡмай. Ҡатындың Юныс менән китергә батырсылығы етмәй.

Бай үҙ ҡатыны менән Юныстың мутлығын һиҙә башлай. Ялсыһын үлтерергә була. Юныс урман-тау араларына ҡасып ҡотола.

Юныс менән байҙың йәш кәләше ауыл янындағы урманда осраша башлайҙар. Бай быны белә. Асыуынан шартларҙай булып, икенсе бер ялсыһын саҡырта ла әйтә:

— Шул Юнысты тотоп үлтерһәң, ярты байлығымды бирәм, — ти, — маллы ла, кәләшле лә булырһың, — ти. Теге риза була.

Берҙән-бер көндө: «Мин дә ҡасып сығып киттем», — тип ул Юныс янына килә. Шул көндө Юныс бай бисәһенең йөҙөгөн кейеп ҡайтҡан була. Был һатлыҡ йән Юныс бармағындағы йөҙөктө күреп ала.

Юныс уға ҡарата башта һағыраҡ йөрөй. Теге ялсы тырыша, Юныс менән бергә мал урлаша. Әкренләп ул Юныстың ышаныссына инә.

Бер көн «кәсептән» ҡайтҡас, ашап-эсеп алалар ҙа йоҡларға яталар. Юныс бик ҡаты йоҡлап китә. Шуны ғына көтөп торған ялсы Юнысты үлтерә. Шатлығынан ни эшләргә белмәй, байы янына ҡайтып етә.

— Юнысты юҡ иттем, — ти.

Бай мыйыҡ аҫтынан хәйләкәр генә йылмайып ала ла:

— Ярай, улай булһа, уның бармағында минең йәш ҡатындың йөҙөгө булыр, шул йөҙөклө бармағын киҫеп килтер, — тип бойора.

Ялсы китә. Бай уйлап ҡуя: «Бер дошманымдан ҡотолдом, был мөртәтте лә теге донъяға олаҡтырырға кәрәк», — ти.

Бер аҙҙан ялсы ҡайтып етә. Юныстың йөҙөклө бармағын байға бирә. Шәрип бай ялсыһын бик маҡтай. Уның хөрмәтенә һый әҙерләргә ҡуша. Бай теге ялсыны иҫертеп йыға ла юҡ итә.

Халыҡ байҙың был эшен белгәс, мәрхүм Юнысҡа арнап йыр сығара.

Аҡтүбәкәйҙәрҙең иң башынан
Күренәлер Аҡйүн[1] далаһы.
Ҡушҡайынҡайҙарға яҙыу яҙған
Юркә[2]-Юныс — Ҡирәй балаһы.

## 327. ҒӘҘЕБӘК НАСИР

Ырымбурҙың иң тәүге губернаторы Иван Иванович Неплюев крайҙа батша хакимлығын нығытыу буйынса күп эштәр башҡара. Ул етмешләгән крепость төҙөтә, төрлө яҡтарҙан купецтарҙы, баярҙарҙы саҡырып, ер өләшә. Уп һигеҙенсе быуаттың урталарында И. И. Неплюев Ҡазандан Сәйет исемле байҙы саҡыра. Бай Ырымбурҙан 18 саҡрым алыҫлыҡта, Ҡарғалы йылғаһының Һаҡмарға ҡушылған урынында, төйәк ҡора. Ул ерҙә Ҡарғалы тигән ауыл була. Сәйет тора-бара шул ауылдың старшинаһы итеп билдәләнә.

Старшинаның Исхаҡ тигән улы сауҙа эштәре менән башҡорттар араһында йөрөй. Бер ваҡыт Исхаҡ Ташлы йылғаһы[1] буйҙарына килеп сыға ла тәбиғәттең бер матур ерендә туҡтай. Уның янына Үрге Себенле менән Түбәнге Себенле[2] ауылдарынан да кешеләр күсеп килә. Ауылға тәү нигеҙ һалыусы хөрмәтенә уны Исхаҡ тип атағандар. Ә күптәр ауылды Ташлы тип йөрөтә.

Әммә татарҙар был ауылда тыныс йәшәй алмай. Әленән-әле барымта менән киләләр. Малдарын, ҡатын-ҡыҙҙарын әйҙәп алып китәләр. Татарҙар, ауылды ташлап, кире Ырымбур яғына китергә мәжбүр була.

Шунан һуң Ташлы ауылы бөтә ере-һыуы менән Тимашев тигән баярға күскән. Билдәле, был баяр ауылды киңәйтә. Ташлы Ырымбур губернаһында иң матур ауылға әйләнә.

Тимашев күңел асырға, типтерергә, кәрт уйнарға ярата. Ҡарғалы ауылынан бирәүҙең мал-мөлкәте менән яңғыҙ һеңлеһен отоп ала. Ҡыҙҙы был үҙенә алып ҡайта. Ҡәрҙәштәренән айырылған ҡыҙ ят ерҙе бер ҙә ерһенмәй. Илап-илап һарғайып бөтә. Аптырағас, Тимашев Ҡарғалынан ҡыҙҙың ҡәрҙәштәрен күсереп килтерә. Уларға әҙерәк ер бүлеп бирә. Ана шулай тағы, Алмалы[3] ауылы барлыҡҡа килә.

Ташлыға күршеләш Аллабирҙе ауылында башҡорттар йәшәй. Уларҙың ере Юшатыр йылғаһы[4] буйында була. Комһоҙ Тимашевтың ошо ерҙәргә күҙе төшә. Бер саҡ Аллабирҙегә килә лә, халыҡты йыйып, ике үгеҙ һуйып ашата, араҡы эсерә. Эсеп башы әйләнгән халыҡҡа үҙенең бәләкәй генә үтенесе барлығын әйтә.

— Һөйлә, баяр, — тиҙәр башҡорттар, — әйт үтенесеңде.

— Үтенесем шул: әҙерәк ер кәрәк ине.

— Күпме кәрәк? — тиҙәр.

— Күп кәрәкмәй. Ошо ике үгеҙ тиреһе ҡапларлыҡ булһа, етә.

— Бүстәк икән, — тип көлөшә башҡорттар. — Әйҙә, баяр, ал! Йөҙ тире ҡапларлыҡ ал!

Хәйләкәр Тимашев үгеҙ тиреләрен еп нәҙеклегендә телеп, бербереһенә ялғай. Шуның менән әллә нисә саҡрым ерҙе әйләндереп ала. Башҡорттар, иң яҡшы ерҙәрҙең ҡулдан китеүен күреп, ғауға күтәреп ҡарайҙар, әммә бер ни ҙә сығара алмайҙар.

Ҡағыҙға ҡул ҡуйылған. Тимашев быныһ менән генә туҡтап ҡалмай. Башҡорттарҙы һаман ҡыҫырыҡлай. Ерен киңәйткәндән-кинәйтә. Уның һөрөнтө ере генә 47 мең дисәтинәгә етә.

Ошо осорҙа Аллабирҙе ауылында Хәжбәков Насир тигән кеше йәшәгән. Ул заманына күрә ярайһы уҡ уҡымышлы булған, ти. Рус телен дә белгән. Ҡөс яғына килгәндә, уға тиң кеше булмаған. Һабан туйҙарында күрше-тирәләге батырҙарға бил бирмәгән. Йырға ла оҫта булған.

Насир гел генә Тимашев утарына барып йөрөгән. Баяр менән кәрт уйнаған, һунарға сыҡҡан. Һирәк-һаяҡ баярҙың эске мәжлестәрендә лә ҡатнашҡан.

— Ниңә өйләнмәйһең, Насир? — тип һорай баяр бер ваҡыт унан.

— Күңелгә оҡшаған кәләш таба алмайым, — ти был.

— Һи, иҫең киткән икән, минең Алмалы ауылында урта бармаҡ кеүек татар ҡыҙҙары бар, теләгәнеңде һайлап ал.

— Ҡасан киләйем, баяр?

— Иртәнән һуңға.

Насир, кейенеп-яһанып, билдәләнгән көндө баярҙың утарына килә. Икәүләшеп былар Алмалы ауылына юл тоталар. Тимашев килеп, унлаған ҡыҙҙы бер төҫтә кейендереп теҙеп ҡуя ла:

— Һайла, Насир, — ти.

Килешеү буйынса бөркәнсекте асырға ярамай. Насир, тәүәккәлләп, ыҡсым ғына кәүҙәле ҡыҙҙы күрһәтә. Ҡыҙ бөркәнсеген аса. Насир аптырап ҡала: алдында үҙе кеүек үк шаҙра ҡыҙ баҫып тора. Өләшемә төшкән көмөшөм тип, Насир кәләшен ауылына алып ҡайтып китә. Ҡыҙҙың исеме Хәжәр була.

Баяр Тимашевтың этлеген күреп, Насир тыныс ҡына ҡарап ята алмай. Ул баярҙы өйрәтеп алырға була. Тимашев менән бер нисә тапҡыр һүҙгә килә. Ошонан һуң уларҙың араһы киҫкенләшә.

Бер төндө Насир, иптәштәре менән баяр утарына килеп, Тимашевтың бик шәп айғырын урлай. Быны берәү ҙә тоймай ҡала. Иртәгеһен ҡараһалар, йоҙаҡ үҙ урынында, ишек тә бөтөн, ә айғыр юҡ.

Тимашев, айғырын эҙләтеп, тирә-яҡтағы ауылдарҙы аяҡҡа баҫтыра. Ғәйепһеҙ кешеләрҙе ябып ҡуя, ҡамсы менән һуҡтыра. Был хәл Насирҙы тағы ла ярһыта төшә. Айғыр ғауғаһы баҫылып та өлгөрмәй, Насирҙың егеттәре баярҙың малын туҙҙыра, утарына ут һала. Тимашев Ырымбурҙан ҡоралды отряд саҡырта. Күбә һымаҡ күпереп торған погонлы түрәләр килеп Хәжбәков Насирҙы ҡулға алалар. Бығаулап алып сығып китәләр. Ауыл уртаһында, мәсет һалырға тип килтергән бүрәнәләр өҫтөнә ултырып, Насир былай тип йырлай:

Аллабирҙе беҙҙең, ай, илебеҙ,
Йома көнө була баҙары.
Уйҙарыма һис тә килмәгәйне
Башҡайымдың былай аҙары.
Аллабирҙе тигән ҙур ауылдың
Мәжит купец асты баҙарын.
Ғүмеркәйем булһа, бер ҡайтырмын
Туҙҙырырға Тимаш баярын.

Оҙата сыҡҡан халыҡ илаша. Насир, урынынан һикереп тороп, бығауҙарын шылтыратып: «Башығыҙҙы түбән эймәгеҙ, байҙарға, түрәләргә аяуһыҙ булығыҙ!» — тип ҡысҡыра.

Ауылды сыҡҡас та, Туғыҙҡыр тигән ер башлана. Шунда Хәжбәковтар иген иккән. Ошо урындан уҙған саҡта Насир киң ҡырҙарға күҙ ташлап ала ла тағы бер йырлай:

Туғыҙҡырҡайҙарҙан үткән саҡта
Күренәләр Юшатыр туғайы,
Минең дә генә былай булыуымды
Беләме икән Хисам туғаным?

Хисам — Насирҙың бер туған ҡустыһы була. Ағаһын Себергә һөргөнгә алып киткәндә ул өйҙә булмай, ҡайҙалыр ситтә йөрөп ҡала.

Хәжбәков Насир һөргөнгә оҙатылғас та, баяр тыныслана алмай. Юҡ-юҡ та, утарҙан малы юғала бының, урманы ҡырҡыла, кәртә-ҡуралары көлгә әйләнә. Йәйге төндәрҙә Юшатыр туғайында Насир сығарған көйгә йыр яңғырай:

Ғәзебәк Насир менгән ҡара юрға
Манлай сәскәйҙәрен йыя алмай.
Ғәзебәк Насир яуап биргән саҡта,
Губернатор-майор түҙә алмай.
Өҫтәл өҫкәйҙәре, ай, көрәгә,
Өҫтәл аҫҡайҙары күләгә.
Ҡуш аяҡҡайҙарын тиңдәр баҫып,
Яуап бирә Насир түрәгә.
Юшатырҡай ҡырының буйҙарында
Йәйрәп ята баяр ерҙәре,
Ғәзебәк Насир Себер китте тиеп,
Тынырмы икән ауылдың ирҙәре.

Ошо китеүҙән Насирҙан хәбәр-хәтер булмай. Бер нисә йылдан һуң ҡатыны Хәжәр ирен эҙләп сығып китә. Ирен тапҡандырмы, юҡмы, уныһы билдәһеҙ. Әммә Насир ҙа, Хәжәр ҙә ауылға әйләнеп ҡайтмайҙар. Ә Насир сығарған көй, «Ғәзебәк Насир» көйө исемен алып, быуындан быуынға күсеп килә.

## 328. ҠЫҘЫРЫН ТАШ — ИБЛИ ЙОРТО

Ташлы ауылында Яйыҡһыбы[1] исемле бай булған. Уның бер улынан Ябир менән Ибли исемле ике батыр тыуған. Улар яман көслө булып үҫеп еткәндәр. Бер нәмәнән дә ҡурҡмағандар.

Ике туған үҙ-ара килешә алмаған. Ябир ҡомһоҙораҡ булған, ә Ибли урлап алынған малды бер ҙә үҙендә тотмаған, халыҡҡа таратып биргән. Ул берәй бай йортона барып инә лә икән, иплэп кенә ишекте терәп ҡуя ла әкрен генә: «Шауламаҫҡа, мин Ибли»,— тип әйтә икән. Бай тын да сығармай ята икән. Һуңынан стражниктар килеп эҙләһә, Иблиҙең эҙе лә юҡ.

Бер йылды яҙ бик ҡоро килде, ти. Халыҡтың ашарына бөткән саҡ, ти. Шул хәлдән файҙаланып, бер баяр Шафранға[2] килеп ҡыйбат хаҡҡа һоло һатмаҡ булған. Бүтән кешелә һоло юҡ икән. Быны Ибли ишетеп ҡалған. Байҙың әҙерләп ҡуйған дүрт йөк һолоһо йортта тора икән. Эттәре лә бар, ти, бының. Ибли бер кеше эйәртеп йортҡа килеп ингән дә теге кешене ат егергә ҡушҡан. Теге әҙәмдең ҡулынан сбруйҙар төшә лә китә, төшә лә китә икән. Ибли үҙе, мылтыҡ тотоп, ишек төбөндә тора икән. Шунан түҙептүҙеп торған да: «Бына ошолай егәләр уны», — тип, дүрт йөккә лә атты үҙе егеп, теге иптәшен ултыртып, баяр ҡапҡаһынан сығарып ебәргән.

Ибли шул төндә ҡайтып, ауылдағы бар кешенең аты башына ҡапсыҡ менән һоло кейҙереп сыҡҡан. Иртән тороп ҡараһалар, күргән бере аптырай икән.

Бер тәүлек үтеүгә Ибли тағы ла теге байға юл тотоуға иҫәпләгән икән. Баяр: «Бер ҡаныҡҡас, мине ҡоротмай туҡтамаҫ», — тип, стражниктар килтерткән булған. Иблиҙең уны-быны абайламай барып туҡтауы булған, стражниктар быны егеүле ат башынан тотоп та алғандар. Ибли һикереп кенә төшкән дә олаҡҡан ғына. Бының артынан эт ҡыуа сыҡмаһынмы. Бик яман ҙур, ти, теге эт. Ибли Сураҡай[3] һыуына килеп еткән, аша сығайым тип, һыуға кергән. Шул мәлде эт килеп етеп Иблиҙе ҡабып алған. Ибли әйләнгән дә эттең ике ҡолағынан эләктереп һыуға манған. Шул көйөнсә үҙе яйлап ҡына киткән дә барған. Теге эт ник кенә Ибли артынан барһын. Кешеләр үсектереп тә ҡарайҙар икән дә, эт боролоп та ҡарамай, ти. Иблиҙең ҡайтып ҡуна торған урыны тау битендәге таш ҡыуышында булған. Ул шунда киткән.

Шулай бик күп йөрөй торғас, берҙән-бер көндө, ҡыуышына кереп йоҡлайым тип кенә торғанда, урманда бер тауыш ишетелә. Сыҡһа, бер башҡорт кешеһен әлеге урыҫ баяры баҫтыра икән. Ибли барған да һөңгөһө менән баярҙы сәнсергә иткән. Шул ваҡытта баяр һөңгөнө тота ла ала. Ибли һөңгөнө кире үҙемә тартып алайым тигәнсе, һабы һынып китә. Шул арала теге ҡылыс менән Иблигә сәнскән. Шунан Иблиҙән урғылып ҡан аға башлаған. Иблиҙе үлтерҙем тип, баяр тиҙ генә атҡа менгән дә ауылға сапҡан. Дуҫтарын йыйып алып килгән. Бына ошонда булды тип күрһәтә, ҡан эҙе бар, Ибли юҡ, ти. Ҡан тамсыларына ҡарап килһәләр, Иб-

ли үҙенең таш ҡыуышына кереп ятҡан икән. Шул көйөнә аңғармаҫтан килеп кереп тотоп алғандар ҙа язалап үлтергәндәр.

Иблиҙең аҡсаһы бик күп булған тиҙәр. Тик ҡайҙа икәнен генә әйтә алмай ҡалған. Ул ҡуныш йөрөй торған таш ҡыуышты Ҡыҙырын таш тип тә әйтәләр, Ибли йорто ла тиҙәр. Быны күптән түгел генә унан таш сығара башлағандар. Тик Иблиҙең аҡсаһы сыҡмаған

## 329. ИҪТЕМ

Иҫтем Табылды ауылы кешеһе була. Ярлы кешенең исемен элек дөрөҫ әйтмәгәндәр. Ысын исеме Исмәғил булырға тейеш. Ул бәһлеүән була. Байҙар уны күрә алмай. Ниндәйҙер сәбәп менән каторгаға оҙаталар. Каторганан ул ҡасып ҡайта. Ҡайтҡан ваҡытта ҡайҙандыр Аҡбуҙат эләктерә. Уны ауылға керетмәйҙәр. Шунан ул ошо тау башына менә лә бик яҡшы итеп йырлап ебәрә. Уның йырын бөтә ауыл илап тыңлай. Шулай итеп, уның ҡасҡылыҡ тормошо башлана.

Ауылдағы бер байҙың бик яҡшы аты була. Ул аты өсөн бик ҡурҡа башлай. Иҫтемде үлтереү өсөн ике әҙәм яллай.

Бер ваҡыт күперҙән сығып барғанда Аҡбуҙаттың аяғы тишеккә төшөп һына. Шунан Иҫтем ауылға килә лә әнеһе тейеш кешеһенә: «Атты һуйып алың», — ти. Теге бай тап ошоларҙы яллаған була. Тегеләр Иҫтемдең елкәһенә балта менән сабалар. Кәүҙәһен, таш бәйләп, бер күлгә ырғыталар.

Бер йылдан һуң уның кәүҙәһе күлдең өҫтөнә сыға. Халыҡ Иҫтемдең кәүҙәһен танып, зыяратҡа күмә.

## 330. ЙӘНӘЛЕ

Бынан бик күп йылдар элек, лопатский хеҙмәт заманында, бер һалдат Амударъя буйынан ҡасып ҡайта. Уның исеме Йәнәле була. Йәнәленең ҡулында быҙау тиреһенән эшләнгән ер планы була. Ул уны бер кемгә лә бирмәй, ҡырмыҫҡа иләүенә йәшерә. Бер ваҡыт уны тоторға Ырымбурҙан һалдаттар менән яһауыл ебәрәләр. Яһаул Йәнәлене аңдып тороп тота. Йәнәлене атҡа мендерәләр ҙә ике яғынан ике аяғын өҙәңгеләренә бәйләп алалар. Аты ҡасырға итеп ҡараһа, башына һуғалар. Шунан Йәнәле ҡотолоуынан өмөт өҙә.

Ата-әсәһе менән хушлашҡанда:

— Аҡкүктең башына һуҡтылар, ҡотола алмам инде, — тип бәхилләшә.

Ырымбурҙа уны айырым бүлмәлә бығаулы килеш тоталар. Шунда Йәнәле, моңайып, йыр сығарып йырлаған:

Алыҫтаҡай ҡарайып күренеп ятҡан
Уралҡайҙың ап-аҡ ҡайыны,

Ғүмер итеүҙәре шуға миҫал —
Ҡояш ҡалҡып көн дә байыны.

Йәнәлене төрмәлә лә ағас атҡа мендереп ҡуялар. Аҙаҡ язалап үлтерәләр.

Хәҙер Йәнәле йәшеренеп ятҡан тауҙы Йәнәле тауы тип йөрөтәләр, шунан алыҫ булмаған йылғаны Йәнәле йылғаһы тиҙәр. Ә яһауыл аңдыған тауҙы Яһауыл тауы тип йөрөтәләр.

## 331. АЙСЫУАҠ МАЖАРАЛАРЫ

Айсыуаҡ — бик тә көслө, бик тә батыр була. Бер саҡ ул Кананикольск заводының бай түрәһе менән бәхәскә керә.

— Әгәр ҙә бөгөн төндә минең атымды урлай алһаң, күп алтын бирәм, ҡулыңдан килмәһә — һин үҙең бирәһең, — тигән шарт ҡуя был түрә.

Айсыуаҡтың алтын түгел, ашарлыҡ ризығы ла булмаған. Шулай ҙа ул тәүәккәлләргә була. Бай түрә, атын һарайға бикләп, аяҡтарын бығаулы йоҙаҡ менән тышап ҡуя ла үҙе йоҡларға инеп китә. Ҡараңғы төшкәс тә, Айсыуаҡ һарай башына менә лә, түшәм таҡтаһын һарайҙың эске яғына һөйкәп, аҫҡа төшә. Тиҙ генә бығаулы тышауҙы сисеп, атты ҡырын таҡта буйлап өҫкә мендерә лә, тышҡа һикертеп, сабып сығып та китә. Иртән һарайҙы асып ҡараһалар, аттан елдәр иҫкән була. Шулай итеп, ат та, алтын да Айсыуаҡҡа эләгә.

Айсыуаҡ йыш ҡына һунарға сығып йөрөй торған була. Бер саҡ ул шулай бер алып ҡайтҡан төлкөһөн бер үк кешегә ете ҡабат һатып:

Бер генә ҡат тоттом,
Ете ҡабат һаттым, —

тип һамаҡлап килә икән. Шунан һуң халыҡ араһында: «Айсыуаҡ ул әҙәм затынан түгел, шайтан затынандыр», — тигән хәбәр таралып китә.

Ә бер мәл шулай ҙа була: Айсыуаҡ тиң-тоштары менән һунарға сыҡҡас, бер айыуҙы күреп ҡала. Килә лә был, ҡолаҡтарынан ҡыҫып алып, айыуҙың арҡаһына атланып ултыра. Айыуҙы үкертә-үкертә, был шулай иптәштәре алдына барып сыға.

Кананикольск заводының стражниктары Айсыуаҡты тотоп алып үлтерергә йыйыналар икән. Был ҡыш көнө була. Айсыуаҡ, саңғыларын кейеп, урманға ҡаса. Артынан ҡыуып етеп килгәндәрен күргәс, саңғыһы-ние менән был ҡуйы ботаҡлы бер ҡарағай башына менә лә китә. Тегеләр быны ҡайһы ботаҡта ултырғанын да күрә алмағас, ҡарағайҙы ҡырҡып ауҙара башлайҙар. Айсыуаҡ ауып барғанда ҡарағай осонан тейен һымаҡ һикереп төшә лә саңғыһы менән шыйлатып урман эсенә инеп тә китә. Тегеләр Айсыуаҡты ағас баҫты тип уйлайҙар. Ҡарағайҙы ботарлап, ҡар аҫты-

нан Айсыуаҡтың кәүҙәһен эҙләргә тотоналар. Ҡапыл шунда урман араһына инеп киткән саңғы эҙе күренеп ҡала. Былар, шулай аптырашып, буш ҡул менән кире ҡайтып китәләр.

Шулай ҙа бер көн килеп Айсыуаҡ тотола. Уны манара башынан ташлап үлтерергә хөкөм сығаралар. Айсыуаҡты бейек манара башынан ташлаһалар, ул осоп төшөп, аяғы ергә тейҙе генә тигәндә, атлап сыға ла китә. Был хәлде күреп, тотоп алалар, тағы бер ҡат ташларға булалар. Ул тағы оса-оса ла, аяғы ергә тейгәс кенә, йүгереп сыға ла китә. Шулай итеп, Айсыуаҡты барыбер үлтерә алмайҙар.

Ул аҙаҡ, ҡартайып, үҙ әжәле етеп кенә үлә.

## 332. ХАЖИ ҠАРТ

Элек-электән Күсей менән Әбйәлил ерҙәрендә мәғдән барлығы билдәле булған. Батша хөкүмәте бер туған Шакир, Закир Рәмиевтәрҙе башҡорт ерҙәренә ултырта. Рәмиевтәр «Восьмое», «Йылылы», «Һултан» тигән приискылар асып ебәрәләр. Башҡорттарҙы ҡаты иҙеү башлана. Хәлил ҡарт[1] тоҡомонан булған Хажи Кәримов: «Ни өсөн халыҡ ыҙалана?» — тип Рәмиевтәргә ҡаршы килә, ыҙғыш күтәрә был. Шакир Рәмиев унан ҡотолмаҡсы була. «Байлығымды баҫып алды, бер көтөү башҡорттар менән банкымды таланы», — тип, Кәримовты судҡа бирә. Кәримовты ун һигеҙ йылға Себергә каторгаға ебәрәләр.

Ун һигеҙ йыл ултырып ҡайтҡас, Хажи әлеге Рәмиевкә инә лә әйтә:

— Иә, түрә, мин ҡайттым. Башыңды бирәһеңме, әллә был ерҙәрҙән табаныңды күтәрәһеңме? — ти.

Рәмиев бик ныҡ ҡурҡыуға төшкән. Хажи ҡартҡа күп кенә байлыҡ биргән. Барыбер Хажи ҡарт уға тыныслыҡ бирмәгән. Революция сығып китеп, Шакир Рәмиев табанын был ерҙәрҙән ялтыратҡан.

## 333. АҠМУЛЛА

Аҡмулла 1892 йылдарҙа Хәлил[1] ауылында Ҡорманғәлиевтәрҙә булған. Темәс училищеһында уҡытыусы Камил Мусин һөйләүенсә, Аҡмулла Ҡорманғәлиевтәргә ике тәгәрмәсле ҡуян арба менән килгән. Ҡуян арбаһында һандыҡ эшләнгән булған. Унда оҫталыҡ ҡоралдары, үҙенең уҡый торған китаптары булған, үҙенең яҙмаларын шунда һаҡлаған. Теге Мусин һикһән йәшендә үлде.

Аҡмулланың даны башҡорт араһында бик ныҡ таралған ине. Уның шиғырҙарын күп кеше ятҡа һөйләне. Хатта шул Аҡмулла шиғыры ҡалыбы менән шиғыр яҙыусылар булды. Әбйәлил районы Әбделғәзе ауылы Шафиҡ Әминев[2] ҡарт та күп кенә шиғыр

яҙҙы. Уларҙы уҡып йөрөнө, тик матбуғатҡа баҫырға ебәрмәне. Бик талантлы ине. Аҡмулланың Дәүләтша ауылында булыуын Ҡотлоғужин Баязит ҡарт белә. Баязит ҡарт әйтеүенсә, Аҡмулланы Силәбе яғында үлтергәндәр [3].

# ТОРМОШ-КӨНКҮРЕШ РИҮӘЙӘТТӘРЕ



## 334. ҮТКӘН ҒҮМЕР

Тамъян-Ҡатай ырыуынан[1] бер бай үҙенең улына Үҫәргән ырыуының бер һылыу ҡыҙын йәрәшкән, ти. Буласаҡ килендең атаһы ла хәлле кеше икән. Килешкәндәр, ярашҡандар, туй көнөн билдәләгәндәр.

Көткән көн килеп тә еткән. Иң тәүҙә килен яғына барырға кәрәк икән. Кейәү буласаҡ егет атаһының бынамын тигән толпарына атланған да юлға сыҡҡан. Аҙау айғыр ауыҙлығын сәйнәп, уйнаҡлап ҡына бара икән. Тирә-яҡта был атты уҙырлыҡ йүгерек осрамаған. Кәләше йәшәгән ауылға етер-етмәҫтән атын туҡтатҡан да был шундағы сағылда сатыр ҡорған. Толпарын йәшергән дә үҙе ҡайны йортона йәйәүләп киткән.

Был хәлде балдыҙҙары белеп ҡалғандар. Кеше йоҡлыҡтан файҙаланып, толпарҙы күрергә барғандар. Мәрәкә күреп сатырҙы асһалар, әлеге ат ике яҡҡа ике ҡанатын йәйеп йоҡлап ятҡан була. Шул ерҙә ул тора алмай күҙегеп үлә[2].

Туй мәжлесе күңелһеҙ үтә. Барыһы ла ат үлгәнгә ҡайғыралар. Бигерәк тә был хәлде кейәү ауыр кисерә: күҙ йәштәрен түгеп илай ул.

Ҡунаҡтарҙың ҡайтыр ваҡыты ла етә. Ҡыҙҙың атаһы уларға былай ти:

— Күңелегеҙгә оҡшағанын һайлағыҙ араһынан. Шуныһын кейәүемә бүләк итермен.

Ҡоҙалар барыһы ла ат һайларға тотона. Меңләгән сапсан араһынан теге толпарға иш булырлығын таба алмайҙар. Ахырҙа туйҙа ҡатнашҡан һынсыл ҡарт:

— Минең күңелемә бында өс кенә хайуан оҡшаны, — ти, — улар өсөһө лә әле ҡолонлоҡтан яңы сыҡҡан тай, — ти, — аттың толпар булыуын фәҡәт дүрт йәш тулғас ҡына белеп була. Быларҙы яңынан өс йыл тәрбиәләргә кәрәк. Әгәр ат толпар булып етешһә, уның алғы аяғында елек майы тулы була.

Ҡарт өйрәтеүенсә, кейәү ҡайны йортонда быны өс йыл көтөргә тейеш була.

Өс йыл да үтеп китә, өс аттың берећен һуялар. Итен бешереп, елек майын ҡарайҙар. Май бысаҡ һырты ҡалынлығы етмәй тора.

— Былай булғас, ҡалған икеће толпар булып етешкән, — ти ҡайны кеше. Аттарҙы ҡыҙы менән кейәүенә тотоп бирергә ҡуша.

Аттарҙы менгегә өйрәтәләр. Кейәүгә лә оҡшап ҡуя улар. Инде иленә ҡайтарыуҙы үтенә. Ҡайны, ҡәйнә риза булып, ҡыҙ менән кейәүҙе юлға оҙаталар. Былар ауылды сығып бер аҙ барғас, ҡаршыға саң-туҙан күтәреп һыбайлы килеүе күренә. Егет кәләшенә әйтә:

— Был беҙҙең юлды ҡыйырға самалай, — ти, — әйҙә, үткәрмәйек, — ти. Улар сабып икенсе яҡҡа киткәндәр. Теге сапҡынсы уҡ кеүек атылып килеп быларҙың юлын арҡыры киҫеп үтеп тә киткән, ти. Шул ергә егет атынан төшкән дә ултырып үкһегән.

— Туры атым барҙа минең юлымды берәү ҙә арҡыры сыҡмай торғайны, ахыры, үлеремә булыр был, — тигән.

Ҡыҙ егетенә ҡарап әйткән:

— Әй, йәнем, бушҡа илама, — тигән. — Юлыбыҙҙы арҡыры киҫеүсе кеше түгел, үткән ғүмер бит, — тигән. — Үткән ғүмерҙе толпар менән дә ҡыуып етеп булмай.

Кәләше бик моңло булған икән, йырлап та ебәргән.

Менгә генә атым ҡара күк,
Менеп кенә сыҡтым эңерҙүк.
Елә лә генә саба етә алманым
Үтеп кенә барған ғүмерҙүк.
Үтәһең дә, ғүмерем, эй, үтәһең.
Ҡартайтып та харап итәһең.
Ҡартайтыуҡайыңа үкенмәйем —
Үлтереп үк ергә кертәһең.
Сәхрәләргә сығып йөрөгәнемдә
Хайран ҡалам ҡоштар тауышына.
Үткән ғүмеремде оҡшатамын
Сылтырап ятҡан шишмә ағышына.
Күгәреп кенә ятҡан күк арҡаны
Сабып менһәң, атҡа көс була.
Үткән ғүмеркәйҙең билдәһе юҡ,
Таң ата ла дәхи кис була.

Ошо йырҙан һуң егет ата йортона ҡайтып етә алмай. Юлда ниндәйҙер яҙмыш менән үлеп ҡала.

## 335. ТАРХАН ҠЫҘЫ МЕНӘН «ЙОСОФ КИТАБЫ»

Борон-борон заманда бер башҡорт тарханының бик һылыу ҡыҙы булған. Ҡыҙ бик холоҡһоҙ икән, бер кемде лә яратмай ҙа, оҡшатмай ҙа икән был. Атаһы кейәү таба алмай ҡаңғырып, тамам тәҡәте ҡороп бөткән.

Тарханды ҡыҙғанып, бер ҡарт хажи уға шундай әмәл өйрәткән:

— Мысыр [1] батшаһында «Йософ менән Зөләйха» тигән бер мө-

хәббәт китабы бар икән, шуны уҡыған бер кеше йән һөйгәнен таба икән, — тигән. Тархан күп уйлап тормаған, Ырыҫбай исемле бер йылгыр ғына мулланы саҡыртҡан да, Мысырға барып ана шул мөхәббәт китабын алып ҡайт, тип бойорған. Юл хәжәте минән булыр, иллә-мәгәр йәһәтерәк йөрөй күр, тигән. Ырыҫбай мулла Мысыр батшаһына киткән. Муллаға мөхәббәт китабын алып ҡайтырға түгел, шунда һарайҙан сыҡмай ғына уҡып торорға биргәндәр. Иртән алаһың да төнгөләккә үҙ урынына ҡуяһың, тигәндәр. Уҡып бөтмәһәң, йәнә иртәгеһен алып, кис менән урынына ҡуяһың, тигәндәр.

Был шартты Ырыҫбай боҙмай үтәгән. Китапты иртән алып уҡыған да, уҡығанын көн буйына ятлап, кис батшаның китап кәштәһенә ҡуя икән. Ятлаған өлөшөн төн ултырып күңеленән ҡағыҙға яҙа икән. Ете көндә «Йософ китабы»н ятлап алып, һәр бер һүҙен төн буйы керпек ҡаҡмай ҡағыҙға төшөрөп, Мысыр батшаһына күп рәхмәттәр әйтеп, Ырыҫбай мулла тыуған иленә ҡайтып киткән.

Ҡайтып ингәс тә, мулла ҡулъяҙманы хан ҡыҙына тотторған. Ҡыҙ ашар ашын, йоҡлар йоҡоһон онотоп уҡыған да уҡыған, ти. Был мөхәббәт китабын уҡып бөткәс, тәмле йоҡоға сумған. Төшөндә һөләктәй һылыу бер егетте күреп, шуға мөкиббән китеп ғашиҡ булған, ти. Был эшкә ҡыҙынан былай атаһы ҡыуанған. Мулланан: «Был хеҙмәтең өсөн һиңә ниндәй бүләк бирәйем һуң?» — тип һораған. Мулла уға: «Миңә бер ниндәй ҙә бүләк кәрәкмәй, бына ошо үҙем ятлап алып ҡайтҡан «Йософ менән Зөләйха» китабын ил эсендә ырыуҙан ырыуға, ауылдан ауылға, йәйләүҙән йәйләүгә, йорттан йортҡа уҡып йөрөргә рөхсәт итһәң, мин шуға бик ҡәнәғәт булыр инем», — тигән.

Тархан уйға ҡалған, шунан ул, башҡа бүләк һора, быныһына риза була алмайым, ни өсөн тиһәң, минең арҡала бөтә эбер-себер, йәш-елкенсәк үҙ ишен табып, бик рәхәт йәшәп китмәй торһондар әле тип, ҡырт киҫкән. Шулай ҙа Ырыҫбай мулла әйткәнде бәйнә-бәйнә тыңлағас, тархан был яман уйын үҙгәртергә мәжбүр булған. Ни өсөн тигәндә, мулла тарханды ҡурҡытҡан: «Һинеңсә итһәк, тарханым, — тигән ул, — ҡыҙың төшөндә күреп ғашиҡ булған егете менән ҡауыша алмайынса һарғайып үләсәк. Ул егет кейәүең булһын өсөн ҡыҙыңдың төшө генә етмәй. Егет үҙе лә ҡыҙыңды төштә күреп ғашиҡ булырға тейеш һәм шунан ул үҙе эҙләп килер. Ә «Йософ китабы»н уҡымай йә иһә уны тыңламай тороп, ул быны эшләй алмай», — тигән.

Тар күңелле тархан быға ҡаршы һүҙ әйтә алмай ауыҙы ябылған. Ниш.ләһен, риза булған.

Ырыҫбай мулла бөтә илде ҡыҙырып ырыуҙан ырыуға, ауылдан ауылға, йәйләүҙән йәйләүгә «Йософ менән Зөләйха» китабын яттан һөйләп йөрөгән. Халыҡ араһында ул иң ҡәҙерле, иң һөйөклө ҡунаҡ булып дан алған. Уның исеме бөтә тирә-яҡҡа таралған. Тиҙҙән теге егет тә тархан ҡыҙын төшөндә күреп, йәне-тәне менән ғашиҡ булған. Урал арҡалап, Иҙел кисеп, михнәт сигеп, хәтһеҙ ерҙәрҙе үтеп килеп йән һөйгәнен эҙләп тапҡан, ти. Ике йәш йөрәк ана шулай ҡауышҡан, ти.

## 336. УҘАМАН АПАЙ

Борон Ирәндек яғында Уҙаман исемле апай йәшәгән. Ул төҫкә һылыу ҡыҙ булған. Уның һылыулығы тураһында күрше-тирә ауылдарҙа ла һоҡланып һөйләгәндәр. Уҙаман апай, уҡ-һаҙағын алып, көн һайын Ирәндектең иң бейек түбәһенә менеп тирә-яҡты күҙәтә торған булған. Берҙән-бер көндө Ирәндек башынан ҡарап торһа, үҙҙәренә табан яу килгәнен күреп ҡала. Шунда уҡ ағайҙарына хәбәр итә. Ағайҙары Уҙаман апайҙан көләләр:

— Бында ниндәй яу килһен, — тиҙәр, — юҡты һөйләмә, ҡарындаш! — тиҙәр. Яу яҡынлашҡандан-яҡынлашҡан. Уҙаман апай йәшәгән урынды тирә-яҡтан ҡамап алған. Уҙаман апай ҡамауға эләкмәй, ике еңгәһен дә ҡотҡара алған. Еңгәләре Уҙаман апайға рәхмәт әйткәндәр. «Ағайҙарыңды ла ҡотҡара күр инде!» — тип ялынғандар.

Уҙаман апай хәйлә менән ағайҙарын да ҡотҡарып алып сыға.

Яу Уҙаман апайҙың үҙен алыу өсөн булған икән. Уҙаман апай Ирәндектең иң бейек түбәһенә менә лә яуға ҡаршы ата башлай. Атҡан уғы бер бушҡа китмәгән, ҡаршы килгәндәрҙе тиҫтәләп ҡырып ҡына торған, ти, ул. Уҡ-һаҙағы бөткәс, ул өйкөм-өйкөм ултырған тал төбөнә килә лә ҡысҡыра:

— Ағайҙар, һеҙ миңә тал ҡырҡып биреп тороғоҙ, — ти. Ағалары уҡ әҙерләп бирә торған, Уҙаман апай ата торған. Яу еңелгән. Иҫән ҡалғандары ҡасып киткән.

Көндәрҙең береһендә бик алыҫ ерҙән уға бер яусы килгән, Уҙаман апай ризалыҡ биргән. Киленде ҡайны булған кеше үҙе килеп ала. Ҡыш ваҡыты икән. Санаға йыһаздарын тейәп, киленде алып ҡайтып киткән. Был юлда ағас башында бер һуйыр күргәндәр. Ҡайны кеше атын туҡтатып һуйырға ата башлаған. Тик бер ҙә тейҙерә алмай икән. Шул ваҡыт Уҙаман апай ҡайныһынан уҡһаҙағын тартып ала ла һуйырҙы атып төшөрә.

Ҡайны кеше:

— Был ниндәй әҙәм икән, — тип ҡурҡып, килленен төшөрөп ҡалдыра. Ҡарт был эште ауылға ҡайтып һөйләй. Киленде ҡабат килеп алып ҡайталар.

## 337. ӘҮӘҘБИКӘ

Бөрйән ырыуында Дәүләт тигән егет менән Әүәҙбикә исемле ҡыҙ йәшәгән. Былар бер-береһен кесе йәштән яратышҡандар. Етем һеңлеһенән башҡа, Дәүләттең бер кеме лә булмаған. Үҫеп еткәс, былар бергә-бергә тормош ҡоралар.

Боронғолар яулашып, даулашып, бер-береһенең малын талап йәшәр булғандар. Дәүләт тә яуға йөрөгән. Яуҙарҙың береһендә Дәүләт ҡаҙаҡтарға әсир төшкән.

Әүәҙбикә малдарын әйҙәгән дә яуҙан ҡасып киткән. Ялан яҡҡа килеп, Ер күперҙе сыҡҡас, хәҙерге Әүәҙбикә ҡулында [1] туҡталған.

Аҫабалар үҙ ерҙәрендә сит ырыуҙың малы йөрөгәнен күреп килһәләр, бер ир кешегә тап булалар. Шул кеше Әүәҙбикә булған. Үҙен аҫабаларға Әүәҙғол тип таныҡкан. Бер аҫау айғыр, бер ҡама бүрек биреп, аҫабаларҙан ер һатып алған, Илсеғол ауылында тора башлаған. Әүәҙбикә Дәүләттең ҡасан булһа ла ҡайтасағына ышанған.

Дәүләт әсирлектә яфа сигеп, ҡол булып йәшәгән. Ҡасып китмәһен өсөн, Дәүләттең аяҡ табандарын ярып, ат ҡылы менән урағандар. Шунда уҡ ҡаҙаҡ байының ҡулында көн итеп ҡартайған бер кәмпер булған. Уны йәш кенә сағында урлап килтергәндәр икән. Алыҫ ерҙәрҙә йәшәһә лә, үҙе тыуған яғын — Уралын һис тә онотмаған. Бала-сағалы булып бөтһә лә, йәшәгән ерен ерһенмәгән. Дәүләткә ҡасыу юлын да шул ҡатын өйрәткән. «Уралға юл тотҡанда, Етегән йондоҙҙо уң яҡ ҡулбашыңда ҡалдыра бар», — тигән. Юлға май, ҡорот әҙерләгән, бәләкәй генә бер хәнйәр ҙә биргән.

Табанындағы яраһы уңала төшөү менән Дәүләт ҡасҡан. Арттан ҡыуа сыҡҡансы байтаҡ юл алған. Ҡаҙаҡтар саң борҡотоп ҡыуып киләләр икән. Ҡыуып етә башлағас, ул бер күлдең тарай араһына инеп һыуға сумған да ҡурай аша ғына тын алып ятҡан. Ҡаҙаҡтар таба алмағас, күл тирәләй кейеҙ урап, һаҡҡа эт ҡуйғандар, ти.

Дәүләт һыу эсендә өс көн ятҡан. Шунан төндә хәнйәре менән кейеҙҙе ярып, тағы ҡасҡан.

Ҡаҙаҡтар тағы ла ҡыуа төшкәндәр. Башҡорт ерҙәренә килеп сыҡҡас, кире әйләнеп ҡайтып киткәндәр. Дәүләт Ирәндеккә, үҙҙәренең элек йәйләп ятҡан йәйләүенә юл тота. Йәйләүенә бер нисә кеше генә ултырған була. Шуларҙан ҡатынының малын әйҙәп сығып киткәнен белә. Һауығып еткәс, Әүәҙбикәһен Дим буйындағы Илсеғол ауылында килеп таба.

Ул Илсеғолға төндә килгән була. Шул көндөң иртәгеһен Әүәҙбикә, ҡатын-ҡыҙҙар кейемен кейенеп, бик һылыу килен булып йөрөй башлаған. Эштең айышына төшөнгәс, аҫабалар был зирәк ҡатынды маҡтап һөйләр булғандар. Дәүләттең һеңлеһен аҫабаларҙың береһе ҡоҙалаған.

Дәүләт менән Әүәҙбикәнән ауылда Бөрйән Илсеғоло араһы таралған. Хәҙер ауылдың тап яртыһы ошо Бөрйән Илсеғолонан тора.

## 338. АЛТЫНСӘС

Бынан өс йөҙ йылдар самаһы элек ошо Үтәғол ауылында Бирҙеғол тигән бер бабай йәшәгән. Уның Алтынсәс исемле ҡатыны булған. Бик уңған, төҫкә сибәр бер ҡатын булған был.

Бер ваҡыт ауыл халҡы йәйләүгә күсеп китә. Элек халыҡ киндер кейем кейә торғайны. Шул йыл ауыл тирәһендә киндер бик уңа. Алтынсәс йәйләүҙә ятҡан еренән ҡышлауға киндер йолҡорға

килә. Шул ваҡыт ҡырғыҙ (ҡаҙаҡтарҙы элек шулай тип атағандар) баҫҡынсылары килеп, Алтынсәсте алып китәләр. Алтынсәс зымзыя юҡ була. Ирҙәр йәйләүҙән килеп эҙләп ҡарайҙар. Таба алмайҙар.

Ҡырғыҙҙар Алтынсәсте бер бай кешеләренә һаталар. Алтынсәс йөклө киткән була, уның бер улы донъяға килә. Уға Бирҙеғол тип исем ҡушалар.

Бер ваҡыт ҡырғыҙ байы бәйге яһай. Яҡшынан өс ат яраулата. Аттар эйәрле көйө тирмә янында бәйләп ҡуйылған була. Алтынсәс был ваҡыт ҡасырға әҙерләнеп йөрөй. Балаһы Бирҙеғол өсөн киндерҙән тоҡ тегә. Байҙар эсеп-эсеп йоҡлап китә. Алтынсәс баланы алып тышҡа сыға ла ишекте ҡыл арҡан менән бәйләй. Атҡа атланып ала ла, балаһын йөкмәп, ҡаса. Ташып ятҡан Яйыҡты аша сыға. Шул ваҡыт быны артынан ҡыуғын төшә. Һаҡмарға еткәс кенә ҡыуып етәләр. Алтынсәс Һаҡмарҙы йөҙҙөрөп сыға. Тегеләр тороп ҡала.

Бирҙеғол бабай яңынан никах уҡытып Алтынсәсте ала.

## 339. ӘЛЕБАЙ МЕНӘН ҠАТЫНЫ

Борон булған был хәл. Башҡорттар ырыу-ырыу булып бүленеп йәшәгән. Тупланышып йәшәүҙе белмәгән. Илгә оло яу килһәнитһә генә бер нисә ырыу берләшеп, көс туплап тора ла, яу ҡайтарғас, тағы һәр ҡайһыһы үҙ көнөн үҙе күрә. Ваҡыт-ваҡыт даулашып та китә, даулашҡанда бер-береһенең малын ҡыуа, бушҡа ҡан ҡоя. Дуҫлашып та китә, дуҫлашҡанда ҡыҙ бирешә, ҡунаҡҡа йөрөшә. Үҙ ырыуҙары ғына түгел, күршеләге ҡаҙаҡ ырыуҙары менән дә башҡорттар шул рәүешлерәк йәшәгән. Улар әле бүләк алып, бүләк бирешә, әле зыҡ ҡубышып мал бүлешә. Башҡорттарҙа ҡаҙаҡҡа, ҡаҙаҡтарҙа башҡортҡа килеп мал әйҙәү, ҡыҙ-ҡатын урлау ҙур бер егетлек һаналған ул саҡта.

Шул замандарҙа Үҫәргән ырыуының Мәмбәтәй тигән бер кешеһе Бөрйән ырыуының Әлебай тигән егетенә ҡыҙын биргән. Ҡыҙының исеме Һырбикә булған. Әлебай, йәш кенә булһа ла, үҙенең аҡылы, көсө, ҡыйыулығы менән илгә танылып, хөрмәт ҡаҙанып өлгөргән.

Ҙур туй яһап Һырбикәне алғас, Әлебай имен генә донъя көтә башлаған: мал баҡҡан, тау яғалап төлкө ҡыуған, һөңгө тотоп айыуға сыҡҡан, әҙ-мәҙ генә иген дә иккән, тапҡан-таянғанынан яһаҡ түләгән.

Берҙән-бер көн Әлебай һунарға киткән. Өйҙә атаһы менән әсәһе, ҡатыны Һырбикә генә ҡалған. Һунарға сыҡһа, Әлебай ике-өс көнһөҙ ҡайтмай, ҡырҙа ҡунып йөрөй торған булған. Иҫәпле ваҡыт үтеп, өйҙәгеләр Әлебайҙы көтөп кенә ултырғанда, уйламаған ерҙән быларҙы ҡаҙаҡтың бынамын тигән ете батыры килеп баҫҡан да, ҡарттарҙы сыр-сыу килтереп, Һырбикәне алып ҡасҡан.

Әлебайҙың атаһы ул батырҙарға ҡаршы тора алмаған, һөңгө тотор, кереш тартыр йәштән үткән булған.

Бына бер заман, кискә ҡаршы ғына, арманһыҙ булып, Әлебай һунарҙан ҡайтып төшкән. Өйгә килеп инһә, кәләше юҡ. Илашып, зарланышып, атаһы менән әсәһе генә ултыра. Әлебай күп уйлап тормаған. Уҡ-һаҙағын яңыртып, эйәрле атына һикереп менгән дә ҡаҙаҡтарҙы ҡыуа киткән. «Йөрөмә, улым, улар күмәк бит!» — тип атаһы ҡысҡырып ҡалған. Әлебай әйләнеп тә ҡарамаған. Уның артынан Ҡашҡар тигән эте лә сапҡан.

Әлебай төнө буйы тын бирмәй атын ҡыҫтаған. Иртәгеһенә, төш етеүгә, Яйыҡ аша ҡаҙаҡ далаһына килеп сыҡҡан. Байтаҡ ер киткәс, бер тирмә күренгән. Яҡыныраҡ барып ҡараһа, тирмә эргәһендә ҡаҙан аҫылған, ҡатыны һырбикә ҡаҙан тирәһендә йөрөй. Әлебай кире боролоп, атын бер уяҙға ҡуйған да, үлән араһынан иләп кенә шыуышып, ҡатыны эргәһенә киткән. Әҙ генә етмәйерәк туҡтап, ҡарап ята икән. һырбикә бер ҙә бойоҡ күренмәй: итәген ҡыҫтырып алған, һурпаны һапырып, ҡаҙан аҫтындағы тиҙәкте ҡағыштырып, йәһәтләп йөрөп ята. Әлебай шунда уҡ бынан эс тартҡандай булған. Шулай ҙа шыбырлап ҡына тауыш биргән. Әлебайҙың тауышын ишеткәс, һырбикә тертләп киткән дә әйткән:

— Кит тиҙерәк, — тигән, — һиҙеп ҡалһалар, тотоп үлтерерҙәр, — тигән...

— Ҡил әле, бер генә һөйөп китәйем, — тигән Әлебай.

һырбикә килмәгән. Шунан Әлебай һикереп тороп, ҡатынының ауыҙын ҡаплаған да, күтәреп алып, аты эргәһенә йүгергән. Йүгерә килеп, быны эйәр ҡашына ырғытҡан да, осоп менеп, ҡайтыу яғына сапҡан.

Ҡаҙаҡ батырҙары йоҡонан тороп сыҡһа, ит тә бешмәгән, теге ҡатын да юҡ — һип-һил. Ни булғанын былар шунда уҡ аңлап алған. Ит ҡайғыһы ла киткән. Тиҙ генә һөрән һалып, улар Әлебай артынан ҡыуа төшкән. Яйыҡты сыҡҡан ерҙә улар Әлебайҙы ҡыуып еткәндәр. Ҡаҙаҡтарҙы күреп, Әлебай аты менән ҡатынын бер ышыҡҡа ҡуйған да, уңайлы урын табып, атыша башлаған. Атыша-атыша Әлебай ҡаҙаҡтарҙың алтыһын аяҡтан йыҡҡан, бер генә батыры тороп ҡалған. Уныһы бөтөнләй яҡын уҡ килеп:

— Алыш кәрәкме, атыш кәрәкме! [1] — тип ер ярып ҡысҡырып ебәргән.

— Алыш кәрәк! — тигән Әлебай.

Былар билбауҙан алып, көрәшә башлаған. Ике батыр, бил бирмәй көрмәкләшеп, аяҡ аҫтындағы сиҙәм ерҙең ҡараһын әйләндереп бөткән, ти. Төшлөктәге ҡояш кискә ауышҡан. Елкә тарамыштары шартлар сиккә еткән. Ахыр килеп, нисәмә көн буйы ашамаған-эсмәгән Әлебайҙың быуыны йомшап, хәле бөтөп киткән. Ҡаҙаҡ батыры быны ергә һуғып өҫтөнә менеп ултырған да боғаҙына йәбешкән. Әлебай, көскә уның ҡулын ҡайырып, ҡатынына ҡысҡырған:

— Үлтерә бит, ярҙам ит! — тигән.

— Кем еңһә, мин шуныҡы, — тигән Һырбикә, эргәһенә бармаған.

Аптырағас, Әлебай этенә өндәшкән:

— Ҡашҡар, кил! — тигән.

Ҡашҡар һикереп килен, ҡаҙаҡ батырының елкәһенән алған да Әлебайҙың өҫтөнән һөйрәп төшөргән. Шулай итеп, Әлебай үлемдән саҡ ҡотолоп ҡалған. Шунан һуң ул һыу эсеп, битен-ҡулын йыуып, билбауын ҡыҫып быуған да, ҡатынын алып, этен эйәртеп ары киткән.

Ҡайныһы Мәмбәтәйҙең йәйләүе шул ерҙән алыҫ түгел, Һаҡмар аръяғында ғына булған икән. Әлебай тура шунда юл алған. Көн кисләүгә йәйләүгә етеп, ҡайнының тирмәһенә килеп инһә — Мәмбәтәй ҡунаҡ йыйған, ит ашап ултыралар. Әлебай сәләм биргән. Ҡайны уның сәләмен алып, һикереп килеп торған да ҡәҙерләп ҡунаҡтар эргәһенә ултыртҡан. Ә ҡәйнеше йүгертеп тас менән ҡомған алып килгән, еҙнәһенең ҡулын сайҙырған. Мәмбәтәй хөрмәт итеп, Әлебайҙың ҡулына һарыҡ һебәһе тотторған. Әлебай итте алған да яртыһын ҡырҡып, үҙенең алдына һалған, яртыһын, этен саҡырып, этенә биргән. Мәмбәтәйҙең быға бик асыуы килгән. Ул төҫөн боҙоп:

— Был ни эш, кейәү, нишләп минең һыйымды башһынмайһың? — тигән.

Шунан Әлебай бөтә булған хәлде ҡайныға һөйләп биргән.

— Шул Ҡашҡар арҡаһында үлемдән ҡалдым, — тигән.

Әлебайҙың хәбәрен ишеткәс, Мәмбәтәй ҡыҙы Һырбикәне саҡырып алған. «Дөрөҫмө?» — тип, ул өс тапҡыр бер һорауҙы биргән. «Дөрөҫ», — тип, Һырбикә өс тапҡыр яуапты ҡайтарған. Мәмбәтәй һикереп тороп, элеүле торған ҡылысын алған да ҡыҙының башын өҙә сапҡан да ҡуйған. Бөтә халыҡ аһ итеп ҡалған.

Мәмбәтәй шул ерҙә үҙенең кесе ҡыҙы Уҡабикәне етәкләп килтереп Әлебайға тотторған:

— Бына, кейәү, һиңә ҡатын, — тигән.

Үҙе Әлебайҙан Ҡашҡарҙы һорап алып ҡалған.

Ҡашҡар бик оҙаҡ йәшәгән. Ҡартайып үлгәс, Мәмбәтәй уны ҡәҙерләп бер тау башына мендереп күмгән. Тауҙы эттең исеме менән Ҡашҡар тауы тип атай башлағандар. Һуңынан был исем үҙгәреп, Ҡашҡуҡ булып киткән. Әле ул тауҙы Ҡашҡуҡ тауы, тиҙәр [2].

## 340. ҒӘЙШӘ

Элек ошо ерҙәргә Аҡсура батыр килеп ултырған. Ауылдың исеме шул батырҙан ҡалған. Хәҙер ҙә был ерҙәрҙең матурлығына хайран ҡалырлыҡ. Ә ул саҡтарҙа — әйтерлек тә түгел. Һаҡмар һыуы ла бик шәп булған; уның тұғайҙары әҙәм үткеһеҙ шыр урман һымаҡ булып, емеш-еләге емерелеп ултырған; тау-тұғай буйҙарындағы үлән араһына йылҡы малы инһә, һырты күренмәгән; тотоп таяҡ ташлаһаң, ҡош-йәнлеккә тейер булған.

Аҡсура үлгәс, аталары ерен тотоп, уландары ҡалған. Шулар араһынан Тойғон тигән берәүһе туғыҙ улы менән оло бер донъя ҡороп, арыу ғына көн итеп ятҡан. Тойғондоң ҡатыны Ғәйшә һыңар аяҡҡа зәғиферәк булған, арҡырыраҡ баҫып йөрөгән, ти.

Көндәрҙән бер көн был Тойғон, туғыҙ улын эйәртеп, һунарға киткән. Ул замандарҙа һунар оло бер кәсеп тә, оло бер зауыҡ та булған башҡортҡа. Киткән саҡта Тойғон ҡатынына әйткән: «Өйҙән сыҡма, ҡаҙаҡтар алып китер», — тигән. Ҡаҙаҡтарҙан, ысынлап та, тынғы булмаған ул саҡтарҙа.

Йорт бағып, Ғәйшә яңғыҙы ҡалған. Бағырлыҡ әллә ни йорто ла булмаған быларҙың. Бар малы ҡырҙа икән. Ҡәртә-ҡура тип әйтерлек нәмәләре лә ул хәтле булмаған. Бер туҡалаҡ өй инде бөтә донъяһы. Ғәйшә аиа шул өйөнөң ишегенә типке һалған да, сығырға ҡурҡып, тик ултырған.

Тойғон һунарҙа оҙаҡлап киткән. Ғәйшә көткән-көткән дә, бөгөндәре ҡайтырҙар инде, ашарҙарына бешереп ҡуяйым, тип, утын алырға сыҡҡан. Шул арала арт яҡтағы бейек үлән араһынан ҡаҙаҡтар һикерешеп килеп сыҡҡан да, башына еләнен бөркәп, Ғәйшәне алып ҡасҡан.

Тойғон уландары менән һунарҙан ҡайтып төшһә, ишеге шар асыҡ. Ҡатынынан елдәр иҫкән. Олораҡ уландары менән ул ҡаҙаҡтарҙың артынан ҡыуа төшкән. Яйыҡты кисеп, бер аҙ ер эҙләп ҡарағандар — таба алмағандар. Ахыры, былар буш ҡул менән кире боролғандар.

Ғәйшәне ҡаҙаҡтар алып ҡайтып, бер байға тапшырғандар. Ҡаҙаҡ байы менән бер йыл торғас, Ғәйшәнең улы тыуа. Ул табып биргән өсөн, бай уны бигерәк тә яратып киткән. Шунан Ғәйшә тағы бер нисә йыл тороп киткән. Улы ла арыу уҡ ҙурайған. Тамам ҡаҙаҡ бисәһе булып бөткән был. Шулай булһа ла, бер ҙә ерһенмәй икән ҡаҙаҡ ерен. Бер ҙә өйрәнә алмай, ти, был. Илен, эсеп үҫкән һыуын, уландарын һағына, ти. Төндәрен далаға сығып, шым ғына илай, ти, таҫтар осо менән күҙ йәштәрен һөртә, ти.

Бер ваҡыт ул ҡаҙаҡтың ашап-эсеп, аҡ кейеҙгә ҡырын төшөп ятҡан сағын ғына ҡарап тора ла эргәһенә барып ултыра. Бер аҙ һөйләшеп алғас, әйтә: «Нисәмә йыл бергә торабыҙ, — ти, — минеп йөрөргә бер-ике яҡшы ат та тағәйенләп ҡуя белмәйһең миңә», — ти. Уны-быны уйламаған бай ҡатынының күңелен күрергә була. Бик яҡшынан ике ат һайлап, уға атап ҡуя. Ул аттарға Ғәйшәнән башҡа һис бер әҙәм йүгән һалмаҫҡа тейеш була.

Ғәйшә быға бик ҡыуана. Ул көн дә ваҡыт табып, аттарын алмаш-тилмәш йөрөтөп алып ҡайта. Шул саҡ үҙе иплән кенә тирә-йүнде байҡай. Юл ҡарай. Шунан килеп үҙенең уйын шунда тотҡонда ятҡан етмеш тирәләрендәге башҡорт ҡартына әйтә. Был ҡарт йәш сағында уҡ тотҡонға эләккән булған икән. Ҡасмаһын тип, уның табанын телеп, ат ҡылы тураи һалғандар. Уңалып ҡалған ат ҡылынан атлай алмай туйтанлап саҡ йөрөгән, ти, был ҡарт. Ғәйшәнең уйын ишеткәс, ул үҙе белгәнсә юл өйрәтә: «Гел тиреҫкә, яҡты йондоҙға ҡарап бар, — ти. — Мин ҡайта алмам инде, ошонда ҡартайҙым, ошонда үлергә яҙғандыр», — ти.

Берҙән-бер көн ҡаҙаҡ байы ҡунаҡҡа китә. Ғәйшә бер-ике көн сабыр итә лә, эңер төшөп, кис булғас ҡына йәһәтләп улын саҡырып ала. «Әкәң ауырып ҡалған бит, әйҙә артынан барайыҡ», — ти. Теге малай әсәһенә ышана. Былар ике атты тотоп эйәрләйҙәр, менәләр ҙә юлға сығалар.

Далаға сыҡҡас, яҡты йондоҙға ҡарап, әйҙә китә былар елдерә сабып. Аттар шәп, Ғәйшәнең кәйеф яҡшы. Үҙе осоп китерҙәй булып бара инде был. Ә улы белмәй, әкәм эргәһенә ашығабыҙ икән, тип уйлай.

Ул арала булмай, теге ҡаҙаҡ байы ҡайтып төшә. Ҡайтһа, ҡатыны ла юҡ, улы ла юҡ. Ни булғанын шунда уҡ төшөнөп ала ла был, бер нисә егетте алып, тегеләрҙең артынан ҡыуа төшә.

Ғәйшә улын эйәртеп, таң атҡас та, яҡты йондоҙ һүнгәс тә саба. Шунан ат сыҙамаҫ, янып үлер тип, көндөҙ ятып ял итә лә, киске һалҡын төшкәс, тағы тороп саба. Яйыҡҡа килеп кенә еткән ерҙә ҡаҙаҡ байы быларҙы ҡыуып етә лә һөрәнләп ҡысҡырып ебәрә. Атаһының тауышын ишеткән малай: «Ана бит, әкәм был яҡта», — ти ҙә теҙгенен кире тарта. Ә Ғәйшә үҙе бейек ярҙан аты менән Яйыҡҡа һикерә. Яйыҡты сыҡҡас, тағы атын ҡыуа. Саба торғас, аты гөрһөлдәп ергә ауа. Ғәйшә һикереп тора ла йәйәү йүгерә. Ул әлегәсә, яҡты йондоҙға ҡарап, гел төндә килә, ул арала ҡар төшә. Ҡар кисеп, Ғәйшә һаман бара ла бара.

Шул көндәрҙә Тойғон һунарға сыҡҡан була. Һунарсылап йөрөгәндә, ҡырпаҡ ҡарҙағы бер кеше эҙенә тап була. Ҡаҙаҡ ҡатаһы кейеп, бер аяғын арҡырыраҡ баҫып атлаған була был кеше. Тойғондоң күңеленә шик төшә, ҡатынының аяҡ эҙен танығандай була ла артынан китә. Бара торғас, ҡапыйҡ аҫтынан ярты кәүҙәһе сығып ятҡан бер ҡатынды күрә. Ҡапыл уятһам, сыусып үлеп ҡуйыр тип, был өндәшмәй, уянғанын көтә. Бер аҙҙан теге ҡатын уяна. Эргәһендәге кешене күреп, һикереп килеп тора. Ҡараһа — үҙенең ире. Уның биттәренән һырҡырып-һырҡырып күҙ йәштәре ағып төшә.

— Танныйһыңмы, мин һинең ҡатының бит, — ти Ғәйшә.

— Таныйым, — ти Тойғон.

— Ситтә сыҙай алманым, ҡайтырға илем тартты, — ти Ғәйшә. — Риза булһағыҙ, ҡабул итеп алығыҙ мине.

Тойғон ҡарт бик риза булып, ҡатынын өйөнә алып ҡайта. Ҡайтҡандың һуңынан Ғәйшә тағы ун өс йыл ғүмер итә.

## 341. ҒИЛМИЯЗА

Ҡояш һөңгө буйы күтәрелеп килгәндә, йәйләүгә тау битенән саң туҙҙырып, себенләп йылҡылар ҡайта. Төн буйы йоҡламай, ат өҫтөндә талығып йөрөгән йылҡы көтөүселәре талғын көй менән йырлап киләләр. Һауымдан бушаған һыйыр-һарыҡ көтөүҙәрен ашауға таратып, көтөүселәр ҙә, таяҡтарына таянып, ауыр уйға батҡандар. Ирәндек тауын яғалап аҡҡан Танылыҡ йылғаһын ике яҡлап төтөнгә ыҫланып бөткән алама кейеҙле тирмәләр, улар

араһында унда-һанда ғына матур аҡ тирмәләр менән Иҫке бей менән Бикбау бейҙең[1] ырыу йәйләүҙәре теҙелгән. Яҙ көнөндә ас-лы-туҡлы йәшәгән ҡатын-ҡыҙҙарҙың тамаҡланыу өсөн еләклек, сейәлектәре Ирәндек тауының үҙәктәрендә йыл һайын сәскә ата.

Ана шул саҡта Ғилмияза үҙ иштәре менән еләккә сыға. Улар килер алдынан ғына был ерҙән бай малы үткән була. Еләклек тапалған. Сейә ағастары сыптағайланып бөткән. Ирәндек тауы биттәренә юлаҡ-юлаҡ мал юлы һалынған, ти. Бай балалары яҡшы атҡа менеп, ҡыҙ күҙләргә сығалар икән. Үҙҙәренә оҡшаған ҡыҙҙарҙы урлап та ҡасалар икән улар.

Көндәр, айҙар, йылдар һанап, Ғилмияза үҫә. Атаһының бүтән балаһы булмағанлыҡтан, Ғилмияза ирҙәр эшләй торған ауыр эштәрҙе лә башҡара. Йырсы, сәсәндәр менән бер рәттән йыйындарҙа, бәйгеләрҙә ҡатнаша. Түрәләр, байҙар тарафынан насар ҡарала торған йырсылар иҫәбенә алына башлай.

Бөрйәндең Иҫке бей менән Үҫәргәндең Бикбау бейҙең ырыу көсөн һынау өсөн йыйылған бәйгеһе була. Ат саптырыла, батырҙар көрәштерелә, йырсылар йырлатыла, сәсәндәр һөйләтелә. Был бәйгелә — Бөрйәндең ҡара аты уҙа. Бөтә йырсылар араһында Бөрйән ырыуы йырсыһы Ғилмияза өҫтөнлөк ала.

Бикбау бей быға түҙә алмай. Бөтә ҡуштандарын, батырҙарын йыйып әйтә:

— Бөрйән атын уҙырлыҡ ат табығыҙ. Ғилмиязаны еңерлек йырсы табығыҙ, булмаһа булмай икән, уларҙы Бөрйән ырыуынан юҡ итегеҙ! — ти. Шунан ат-хат еткән ергә кешеләрен ебәрә.

Саҡырыу буйынса күп ат килгән. Күп йырсылар йыйылған. Бер ат та, бер йырсы ла Бикбау бейҙең күңелен баҫмаған. Халыҡ араһында гел әлеге Бөрйәндең йүгерек ҡара атын маҡтайҙар икән. Ғилмиязаны данлап йырлайҙар икән. Бикбау бейҙең ҡуштандары ятып ҡалмаған. Ат эҙләп ҡаҙаҡ сәхрәһенә сығып киткәндәр. Унан бер йүгерек ат табып, өс ҡаҙаҡ егетен эйәртеп, Бикбау бейгә алып ҡайтып биргәндәр. Ат Бикбау бейгә оҡшаған. Ҡаҙаҡ егетенең икеһенә мал биреп кире оҙатҡандар. Береһенә ҡыҙ табып бирмәк булып, көттөргәндәр. Шул егетте эйәртеп, Бикбау түрә ҡуштандары яланға сығып киткәндәр.

Ирәндек тауының битендә еләктән ҡайтып килгән ҡыҙҙар, йыйылышып, ял итергә ултырғандар ҙа, көлөшөп, «биш таш» уйнайҙар икән. Былар араһында Ғилмияза ла булған. Ғилмияза эш эшләгәндә лә, уйнағанда ла һәр саҡ йырлап, көйләп, йә булмаһа таҡмаҡ әйтеп ултырырға ярата икән. Ҡуштандар күренмәй генә ҡаҙаҡ егетенә быны күрһәткәндәр. Ҡаҙаҡ егете туп-тура ҡыҙҙар янына сабып барған да Ғилмиязаны бәйләп, ат өҫтөнә һалып, күҙҙән юғалған. Ҡыҙҙар ҡайта һалып ғауға һалған. Тирә-яҡҡа ат ебәргәндәр. Эҙенә төшә алмағандар. Урлаусының ҡаҙаҡ егете икәнен асыҡ белгәс, Бикбау ырыуына бәйләнә алмағандар.

Ғилмияза ят илдә үҙенең йөрәк бауырынан һөйләшерлек кеше тапмай икән. Тапһа ла, телдәрен аңлай алмай, ауырлыҡ өҫтөнә ауырлыҡ кисергән. Илен-һыуын һағынып йырлаған:

Һаҡмар ғына аға лай төшкә таба,
Урал тауы ята лай көн битләп;
Үҙ илкәйемә лә ҡайтыр ҙа инем,
Аяҡтарым талһа лай, имгәкләп.
Был илкәйҙәрҙең дә, ай, аттары
Ҡырлас яллы, көмрө ләй билле икән,
Төньяғынан иҫкән епшек елдәр
Урал буйҡайынан да килә икән.
Йәштән генә менгән туры атымдай,
Ялбыр яллы аттар ҙа юҡ икән,
Ҡайғыларым тарҡап һөйләшерҙәй,
Телем аңлар берәү ҙәй юҡ икән.
Ирәндеккәй тауы, ай, ҡырлас тау,
Иҫке менән Бикбау төйәге,
Мине урлатып инде Бикбау бейҙең
Мөрхәтһенде микән теләге?

Ғилмияза матур, асыҡ йөҙлө, алсаҡ күңелле булған. Ниндәй ауыр саҡтар кисерһә лә, түҙергә тырышҡан. Уның был матурлығынан көнләшкәндәр. Аҙаҡ сиктә Ғилмиязаның ҡаҙаҡ сәхрәһендә икәнлеге Бөрйән ырыуына ишетелгән.

Бөрйән ырыуы батырҙары, был хәбәрҙе ишеткәс, ҡул ҡаушырып ҡалмаған. Төпсөп асылын белгәндәр ҙә, яу һалып, Ғилмиязаны ҡаҙаҡ иленән тартып алып ҡайтҡандар. Бикбау бейҙең уҫаллығы асылған, уларға «үс алған» (үс алыусы) ырыу тигән атама биргәндәр. Бара-бара был атама үҙгәреп Үҫәргән булып ҡалған.

Бикбау бей быныц менән генә ҡалмаған. Ғилмиязаны икенсе берәүгә көсләп бирергә булған. Уны бығаса күрмәгән, танымаған бер егеткә көсләп биргәндәр. Үҫәргән ырыуына — Бикбау тупрағына Ғилмияза килен итеп оҙатылған.

Ғилмияза үҙен оҙатҡан саҡта атаһына былай тип йырлай:

Ирәндеккәй буйы яландыр,
Яландары төп-төп ҡылғандыр,
Атаҡайым, инде мин китәмен,
Тәҡдирҙәрем шулай булғандыр.
Атаҡайым мине ситкә бирҙе,
Ҡарыу йырҙарымдан туйғандыр,
Яулы ғына илгә тотоп бирҙе —
Көн күрә алмаһын тип торғандыр.
Ҡара ла сәсем минең, ай, билемдә,
Китмәҫ тә генә инем илемдән;
Нисек итеп китмәй тора алайым,
Атаҡайым ҡыуғас та өйөнән.
Иртәнсәккәй тороп йыр йырлаһам,
Таңғы йоҡоларҙан да уяттым,
Бикбау бейҙең, атай, хәтере өсөн,
Һөймәгәнгә биреп илаттың.

Әсәһенә былай тип йырлаған:

Күк йөҙөндә йөҙгән таңғы айҙың
Шәүләләре төшөр битеңә,
Ҡанлы йәштәр түгеп илағанда,
Ғилмиязаң төшөр иҫеңә.

Аҙаҡ сиктә был ауырлыҡтарға түҙә алмай ул үлемде еңел һанаған. Бейә һауа барғанда, үҙен-үҙе ағасҡа аҫып ҡорбан иткән. Уның моңло көйө, зарлы йырҙары, халыҡ күңелендә һаҡланып, мәңгелек ҡомартҡы булып ҡына ҡалғандар.

## 342. ҒИЛМИЯЗА

*(вариант)*

Борон заманда хәҙерге Баймаҡ районының Таһир ауылында Исмәғил ҡарттың Ғилмияза исемле ҡыҙы булған. Йәйҙең бер йәмле көндәрендә ҡатын-ҡыҙҙар еләк йыйырға сыҡҡан. Улар араһында Ғилмияза ла булған. Быларға ҡаршы бүрәнә тейәгән кешеләр осраған. Улар ялан яғынан килгәндәр икән. Шул саҡ Ҡыҙрас тигән аҡһаҡ аяҡлы бер әҙәм Ғилмиязаны шул кешеләргә һатҡан да ебәргән, ти. Ҡатын-ҡыҙҙар, еләк йыя алмайынса, кире ауылға ҡайтып киткәндәр. Ҡурҡыштарынан был хәл тураһында улар бер кемгә лә әйтмәгәндәр.

Ҡыҙҙың ата-әсәһе илаған-илаған да аҙаҡ Ғилмиязанан бөтөнләй төңөлә башлағандар.

Бер саҡ Садиҡ тигән берәү бер ауыл урамынан үтеп барғанда бик моңло йыр ишеткән. «Был беҙҙең яҡ көйөнә оҡшай ҙа баһа, — тип уйлаған был, — рәхәтләнеп тыңлайым әле». Аты менән тәҙрә янына килгән дә тыңлай башлаған.

Эткара[1] ла тигән тау башында
Ятып ҡалды уйнаған ташҡынам.
Ете йәштәремдә әсир булды
Минең генә ғәзиз башҡынам.
Исемкәйем минең Ғилмияза,
Миндәй зарлы бармы донъяла?
Ата-әсәкәйем иҫемә төшһә,
Хәсрәттәрем була Зияла.
Ата-әсәм мине беләмикән
Яуыз дошман һатып биргәнен?
Минең күргән ҡайғы-хәсрәтемде
Минән башҡа бүтән күрмәһен.

Был Ғилмияза була. Шул саҡ тышҡа күҙ һала, биҙәкләнеп эшләнгән күн сергеле көмөш ҡойошҡапы менән аҡыҡлы эйәре өҫтөндә бер ҡупшы егет ултыра, ти. Бер аҙ ҡарашып торғас, был егет әйтә:

— Һеңелкәш, янына инеп сығырға буламы? — тип һорай.

Ҡыҙ, ризалығын белдереп, башы менән ишара яһаған. Егет килеп ингән дә һораша башлаған:

— Һин кем? Бында ҡайҙан килдең?

Ғилмияза шунда был егеткә башынан үткәндәрен һөйләп биргән.

— Тағы ла бер йырла әле! — тигән Садиҡ.

— Ҡурҡам, — тигән ҡыҙ. Шул саҡ Ғилмиязаның янына бер нисә ҡыҙ йыйылып киткәндәр ҙә тағы шул йырҙы ҡабатлауын үтенгәндәр. Шунан Ғилмияза былай тип йырлап ебәргән:

Һаҡмар һыуы аға ҡибла таба,
Урал тауы буйлап, көн битләп.
Тыуған илкәйемә ҡайтыр инем,
Аяҡтарым талһа ла, имгәкләп.

Садиҡ, Ғилмиязаның моңло, зарлы, серле йырҙарына хайран ҡалып, ҡайтып киткән. Ҡыҙҙың тыуған ауылына килгән дә әйткән:

— Исмәғил уҙаман, һөйөнсө, юғалған Ғилмиязаны таптым. Теләһәң, бөгөн үк алып ҡайтам, — тигән.

— Әгәр Ғилмияза ҡыҙым тере булһа, үҙеңә кәләш итеп бирәм, — тигән Исмәғил ҡарт.

Был ваҡытта инде ҡыҙҙың юғалыуына 25 йыл үтеп киткән. Исмәғил ҡарттың ике күҙе лә күрмәҫ булған, ти.

Садиҡ, һүҙен һүҙ итеп, Ғилмиязаны Таһир ауылына алып ҡайтҡан.

— Бына, Исмәғил олатай, Ғилмиязаны килтерҙем. Ҡыҙыңды кемгә теләйһең, шуға кәләш итеп бирерһең, — тип әйткән дә үҙ юлына киткән, ти, егет.

## 343. ТАШТУҒАЙ

Башҡорттар батша хөкүмәтенә буйһонғас, ҡаҙаҡ ханы Абулхаир [1] башҡорттарҙы үҙенә ылыҡтырыу өсөн төрлө саралар күрә башлай. Ул саҡта ҡаҙаҡтарҙа Сәйет тигән батыр була. Башҡорттарҙа ла Көтөр исемле батыр дан тота. Көтөр Үҫәргән ырыуы батыры була. Ул ат өҫтөндә елеп йөрөүе менән, мәргән булыуы менән башҡорттар араһында ғына түгел, ҡаҙаҡтар араһында ла данлы була.

Ул сағында Үҫәргән ырыуында — Көбәк, Ҡыпсаҡ ырыуында Ҡаҙаҡкол тигән старшина була. Былар батшаға аҡ тирмәләр, яҡшы ике буҙ юрға бүләк итеп алып баралар ҙа тарханлыҡ алып ҡайталар. Шунан һуң былар ҡаҙаҡ менән башҡорт араһында ҡотҡо таратып, башҡорттарҙы ҡаҙаҡтарға ҡаршы аяҡландыралар.

Ҡаҙаҡ менән башҡорттар араһында йыш-йыш ҡына һөжүмдәр, бер-береһенең илен баҫып талауҙар була. Сәйет батыр башҡорт илен һиҙмәҫтән килеп талап китә. Башҡорттарҙың быға бик асыу-

ҙары килә. Ат-хат еткән ерҙән батырҙар саҡырып, ҡаҙаҡ иленә барымта яһайҙар. Бик күп мал менән бергә Сәйет батырҙың еткән ҡыҙын алып ҡайталар. Был ҡыҙҙы Көтөр үҙенә кәләш итеп ала. Абулхаир хан ҡыҙҙы башҡорттарҙан кире талап алыуға әҙерләнә башлай. Эштең ҙурға китеүенән һаҡланып, Көтөр батыр Ҡатай ырыуы араһына күсеп китә.

Көтөр бында кәләше Ҡуйһылыу менән тиң йәшәй. Быларҙың бер Көнһылыу исемле ҡыҙҙары тыуа. Бүтән һис балалары булмай. Был ҡыҙ үҫеп еткәндә, үҙенең йырсылығы, матурлығы менән дан ала. Көтөрҙөң ҡунаҡ атын бәйләй торған бағанаһынан яусы аты өҙөлмәй. Һәр көндө әллә нисә яусы килеп тора.

Был саҡта Көтөр торған ауылда Байғүбәк исемле бик мәргән ҡурайсы егет була. Бының атаһы йәштән үлгән. Үҙе, йәшлегенә ҡарамаҫтан, ил аҙаматтары менән ҡатнаша. Һунарға йөрөй. Берҙән-бер көндө балдаҡ атыш уйыны була. Бында егет-елән, ҡыҙҡырҡын, ҡарт-ҡоро, әбей-һәбей — барыһы ла йыйылып китә. Балдаҡ атышта Байғүбәк беренселекте ала. Көтөр ҡыҙы икенселекте ала. Атаһы быны күреп, бөтә уҡ-һаҙаҡтарын уға бирә. Байғүбәктең мәргәнлегенә лә бик риза була.

Ат өҫтөнән тәңкә атыу ярышында Көнһылыу беренсе булып килә. Байғүбәк икенселекте ала. Көтөр быға шулай уҡ шатлана. Быға са бер әҙәмгә бирмәй торған үткер, текә, ҡаты тояҡлы, ялбыр сәсле, оҙон бәкәлле, ҡуян ботло, ҡарсыға түшле, тар бөйөрлө, ҡырас яллы, ҡамыш ҡолаҡлы, батыр күҙле, ас яңаҡлы, осло эйәкле, суртан һыртлы, ҡалҡыу мондалы йүгерек туры атын ҡыҙына менеп йөрөргә рөхсәт итә.

Ҡыҙы көн-төн, ай һанап үҫкәндән-үҫә. Бер ваҡыт Көнһылыу шишмәгә һыуға бара. Шул уҡ ваҡытта уға Байғүбәк тап була. Көнһылыуҙың һыуға килеүен күреп, былай тип йырлай:

Урал япраҡтары ла япраҡ түгел,
Һандуғаскайҙары ла ҡош түгел.
Көнһылыуҡай матур, алсаҡ күңел,
Уға бәрәү Уралда тиң түгел.

Көтөр батыр тирмә алдарында
Ат бағаналары ла буш түгел.
Уғым менән атып та алыр инем,
Көнһылыуҡай ыласын ҡош түгел.

Көнһылыу быны Байғүбәк йырлағанын белә. Уға ҡаршы:

Ат бәйләйҙәр ҡаҙыҡ, ай, бүлганға,
Саңлаталар даны киткәнгә.
Моңая ла бәрәү, торғай һалып,
Тиң табалмай йөрәге типкәнгә.

Батыр егет яуҙан, ай, ҡурҡамы,
Ат ҡушаҡлап сапмай ятырмы?

Буш оялар көткән кәкүк ҡоштай,
Ҡыҙ әйтеүен егет көтөрмө? —

тип йырлағас, Байғүбәк килеп ҡулындағы баҡыр балдағын ҡыҙға бүләк итеп бирә. Шунда береһе алырға, береһе барырға һүҙ ҡуйышалар.

Төрлө ырыу аҡһаҡалдарынан яусылар һаман килеп тора. Көтөр аптырап бөтә. Ҡыҙын кемгә бирһә лә, арала үпкә тыуасағын белә. Шуға күрә үҙенең боронғо ырыуынан Көбәк старшинаның улы Әлмигә бирмәк була. Ҡоҙа булышалар. Ҡыҙ ҙа, Байғүбәк тә был эшкә ҡаршы төшә алмайҙар. Байғүбәк менән Көнһылыуҙың һөйләшеүҙәре шул көйө сер булып ҡала. Туй була, кейәү Әлми килә. Ҡыҙҙы кейәү йортона оҙаталар. Әлми бик йүнһеҙ, хатта аҡылға ла еңел булып сыға.

Көнһылыу ҡунаҡҡа килгән саҡтарында, һәр ваҡыт Байғүбәк менән тәү танышҡан шишмәгә төшөп бит йыуа торған булған, Әлми атын ҡарап ҡалған. Былар килер көндө Байғүбәк шул шишмәгә төшөп, көтөп торор булған.

Көнһылыу кейәү йортона ҡайтҡас, моңланып, һарғайып, гел Байғүбәкте һағынып йырлар булған. Ҡыҙҙың һарғайып кибеүенең ниндәй ҙә булһа берәр сере барҙыр, тип уйлағандар. Сараһын таба алмағандар.

Бер ваҡыт ҡайныһы киленс менән улын үҙе менән бергә Көтөрҙәргә алып китә. Көнһылыу һаман да үҙен көтөп торған Байғүбәк менән осрашып, һөйләшеп уҙа. Улар йыр аша аңлашалар. Байғүбәк Көнһылыуға йырлай:

Һары ла балдаҡ бирҙем, ай, үҙеңә
Йөрәгеңә һары ла типһен тип.
Әселештә булмай, яуҙар асмай,
Көнһылыуҡай йәбешеп сыҡһын, тип.

Һары ла балдаҡ һиңә, ай, тиң түгел,
Сер тотмаҫтай ирҙәр мин түгел.
Алһыу йөҙҙәренде күп һарғайтма,
Ат менмәҫтәй ҡыҙ ҙа һин түгел.

Ҡайныһы, Көнһылыуҙың бармағындағы аҡыҡ ҡашлы көмөш йөҙөккә күҙе төшөп, быларҙың серен аңлай башлай. «Шул егет быны сихырлаған икән, — тип уйлай, — моғайын ул шишмә әйәһелер», — тип шомлана. Ҡоҙаһы Көтөр йортона барғас, серҙе улына аңлата. Улы ла һәр ваҡыт Көнһылыуҙың шунда төшөп бит йыуғанын һөйләй. Быларҙа тағы ла ҡурҡыу арта. Сихырсыларға, муллаларға кәңәш итәләр. Был шишмәнән һыу алмаҫҡа, унан һыу эсмәҫкә кәңәш төҙөйҙәр. Ул шишмәне Бәрейле шишмә тип атайҙар, ташын Бәрей ташы, ҡулҡаһын Бәрей ҡулы тип йөрөтә башлайҙар.

Бер аҙ ваҡыттан һуң Көнһылыуҙың һары балдағын Байғүбәк ҡулында күрәләр. Уны урлайҙар. Шунан һуң Байғүбәкте, күп малдар биреп, үлтертергә һүҙ беркетәләр.

Көнһылыуҙар ҡайтып китә. Уға бер нәмә лә белдермәйҙәр. Байғүбәкте һиҙҙермәй генә үлтерәләр. Көнһылыу тағы ла ҡунаҡҡа килә. Тағы ла элекке шишмәгә бит йыуырға төшә. Был юлы Байғүбәк булмай. Төрлө яҡҡа ҡарай был, егете һаман күренмәй. Моңайып йырлап ала:

Алыҫтарҙа күгәреп, ай, күренгән,
Иҙел башы Ирәмәл таумы икән?
Ҡошоң һайрай, Урал, егетең юҡ,
Байғүбәгем иҫән-һаумы икән?

Күңелһеҙ генә килеп атына менә. Атаһы йортона барып төшәләр. Көнһылыуҙың һарғайған йөҙҙәрен күреп, ата-әсәләре ҡыҙғанып, хәлен һорашалар. Көнһылыу уларға йыр менән яуап бирә:

Таштуғайҡай елле ялан икән,
Сәскәләре ҡойола ел менән.
Алһыу йөҙкәйҙәрем, ай, һарғайҙы,
Күңелем тулы ҡайғы. уй менән.
Таштуғайҡай ялан, урманы юҡ,
Ҡошҡайҙары һайрай таштарҙа.
Урал сәскәһендә үҫкән балаң
Ни йәм тапһын ҡырлас тауҙарҙа?
Һағынырмын, атай, Уралымды,
Таштуғайға күңелем ерһенмәй,
Биргән генә кейәүең ыжмы — һүҙһеҙ,
Уны күңелем бер ҙә ирһенмәй.
Урал буйҡайҙары ла, ай, шишмәлек,
Йөрәктәрҙе баҫа эскәндә,
Турат менеп ҡасып киткән булһам,
Кем дә етмәҫ елдәй иҫкәндә.
Иртәнсәккәй тороп бер ҡараһам,
Һағынамын Урал тауҙарын,
Түшәктәй үк итеп йоҡлар инем
Ҡырҡтытауҙың ҡая таштарын.
Таштуғайҡай елле, тымыҡ түгел,
Ышыҡланам тиһәң, сауҡа юҡ,
Биргән дә генә кейәүең теремек түгел,
Сер һөйләр ҙә инем, ибе юҡ.

Тыңлаусылар илашып, Көнһылыуҙы ҡыҙғанышалар. Ул арала аш-һыу әҙерләйҙәр, Көнһылыу Байғүбәкте күрергә теләй. Борсола башлай. Хәбәр-хәтер ала алмай. Кис тә етә, йылҡы ҡайта. Байғүбәк һаман юҡ. Көнһылыу аптырай. Шунан һуң ул серҙәш еңгәләре аша Байғүбәктең үлтерелгәнен белә. Атаһына үпкәләп йырлай:

Атаҡайым, даның, ай, сәселде
Илең баҫҡан яуға уҡ атып.

Ҡарт көнөндә тағы бер дан алдың,
Минә илатып, ситкә оҙатып.
Батыр ирҙәр әллә ҡартайҙы иһә,
Барымтаһыҙ, һыулап, ҡан эҙләй?
Йөрәгә керһеҙ ирҙең ҡаныи ҡойоп,
Ҡартлығында, алйот, дан эҙләй.
Уҡтарыңды, атай, мин атмамын
Таштуғайҡайҙағы төлкөгә.
Ытырғанмайынса буш ҡан ҡойоп,
Ҡалмайһыңмы, атай, көлкөгә?

Көнһылыу аталарынан китә. Яңғыҙ бикләнеп ята. Шул төндә Байғүбәктең бер иптәше менән уның ҡәберен эҙләп табалар. Көнһылыу ҡәберҙән бер тоҡҡа тупраҡ тултырып ала. Муйынына асып һыуға ташлана. Аталары килеп, ҡотҡарып алып ҡалалар. Көнһылыу атаһына тағы йырлай:

Таштуғайҡайҙың да ҡурайы юҡ
Көйҙәремде яһап тартырға.
Үлем тупраҡтары минә тарта
Таштуғайҡайыма ҡайтырға.
Атаҡайым, инде һаргайырмын
Һайрар ҡошһоҙ ялан ерҙәрҙә.
Минең менән, атай, күрешерһең
Ҡолас ярым ҡара гүрҙәрҙә.

Аталары менән иҫәнләшмәй-нитмәй, атына менеп ҡайтып китә. Атаһы, артынан сығып, Байғүбәктең ҡәберен уҙғанса, бергә бара. Көнһылыу береһенә лә ҡарамай, Байғүбәктең ҡәберен ҡосаҡлап йырлай:

Урал япрағында бер тау артты
Һине ҡосҡан үкһеҙ убанан.
Көтөр батыр тынды, бүтән янды,
Теләге шул икән алланан.
Уралҡайым, һиндә Байғүбәккәй
Күп ауланы айыу-бүреңде,
Яңғыҙлатмам, йәнем, үгәйһетмәм,
Бәғерем, ятҡан ҡара гүреңде.
Уралҡайым, һинең битторендә
Ат уйнатыр миңә юл булмаҫ.
Ер аҫтынан тапһам юлдарыңды,
Ҡарыулашыр миңә йән булмаҫ.

Көнһылыу көндән-көн һарғая, хыялый була. Аҙаҡ сигендә Таштуғай һыуына ташланып үлә.

Көтөр батырға ат саптыралар. Көтөр үлем хәбәрен ишеткәс, балаһына бер ус булһа ла тупраҡ һалайым тип, юлға сыға. Тиҙерәк барып етәйем тип, ул үҙе менән яуҙа йөрөгән егерме йәш-

тән уҙған йәй йөрөм туры атын менеп саба. Көтөр барып та етә, йәй йөрөм туры ат, янып килгәнлектән, йығылып та үлә.

Көнһылыуҙы күмәләр. Әсәһе тик ҡыҙының өсөн үткәргәндә генә килеп етә.

Көтөр туры атты ла салдырмай, тиреһен тунатмай күмдерә. Бер сағыл янына күмдерә. Шуға был сағылды Турат сағылы тип йөрөтәләр.

Көнһылыу һәр саҡ ултырып йырлаған ташты Көнһылыу ташы тиҙәр.

## 344. ҺУҢҒЫ ЙЫР

*(Байрамбикә)*

Был хәлде күптән булған, тиҙәр. Ул саҡта башҡорт иле ҡуйы урмандар менән ҡапланған булған. Бейек тауҙарҙа мылтыҡ тауыштары ла яңғырамаған.

Айыуҙар, боландар тауҙан тауға бик иркен күсеп йөрөр булғандар. Матур сәскәләр һәм хуш еҫле үләндәр менән ҡапланған сабынлыҡтарҙа көтөү-көтөү малдар йөрөгән. Быңдағы иң ҙур көтөү Аллаяр мулланыҡы булған.

Башҡорт йортонда Байрамбикә исемле ҡара сәсле, ҡара күҙле бик матур бер ҡыҙ йәшәгән. Ул Тимерйән тигән бер ярлы кешенең ҡыҙы булған. Байрамбикәнең һылыулығы тураһында бөтә йәйләүҙәрҙә һөйләй торған булғандар. Йыйындарҙа яҡшы уҡсылар, көрәшселәр, йүгеректәр — бары ла Байрамбикәне күреү өсөн ярыша торған булғандар. Башҡорт йортонда уның кеүек һылыу ҡыҙ булмаған. Уның һылыулығын ҡурайсылар ҡурай моңонда биргәндәр, һандуғастар һәм турғайҙар үҙҙәренең йырҙарына ҡушып йырлағандар. Тау араларынан бөркөлөп-һыртылып аға торған һалҡын шишмәләр ҙә Байрамбикәнең матурлығын йырлай торған булғандар. Байрамбикә үҙе лә бик оҫта йырсы булған. Ул йырлаған саҡта һайрай торған һандуғастар ҙа һайрауҙарынан туҡтап, уның йырын тыңлағандар. Байрамбикәнең Татлыбай исемле һөйгән егете булған. Байрамбикә күп ваҡытта Татлыбайҙың батырлығын, үткерлеген маҡтап йырлаған. Йәйләүҙә Татлыбай кеүек оҫта уҡсы булмаған. Ул бер писә аҙымдан тороп атҡанда, уғы энә күҙен ярып сыға торған булған. Инде һунарға-нигә барып, юлы уңһа, үҙенең алып ҡайтҡан йәнлектәрен иптәштәре менән бүлешә торған булған. Шуның өсөн уны тиҫтерҙәре бик яратҡан.

Татлыбай батыр егет булған. Илдә бер кемдән дә ҡурҡмаған. Ул мәсеткә лә бик һирәк йөрөгән. Шуға Аллаяр мулла Татлыбайға асыулы булған. Уны бер ҙә яратмаған. Әммә ил ҡарттары Татлыбайҙы яҡлағандар: «Ул йәш әле, үҫә төшкәс, аҡыл керер, яҡшырыр. Ололарҙың һүҙен йыҡмаҫ», — тиешкәндәр.

Бер ваҡыт шулай халыҡ йома намаҙына йыйылған. Татлыбай йомаға килмәгән. Ул, йәштәрҙе эйәртеп, һунарға киткән дә бар-

ған. Мәсеттә бары ҡарттар ғына булғандар. Аллаяр мулла быға бик асыуланған.

Бер ваҡыт, көн кискә ауышҡас, Байрамбикә тау өңөрөнә еләккә китә. Ул муҙғаһы тулғансы еләк йыйып, килгән юлынан кире ҡайтырға сыҡҡанда, үткер ҡолағына бер ят тауыш ишетелә. Байрамбикәнең тәне сымырлап, эҫеле-һыуыҡлы булып китә. «Был кем булыр икән?» — тип ҡыҙыҡһынып, тауыш килгән яҡҡа китә. Бер аҙ бара төшкәс, ваҡ ҡыуаҡлыҡтарҙы ике яҡҡа айырып ҡараһа, ниндәйҙер ят кешеләр йөрөп ята. Улар тырышып-тырышып ер ҡаҙый. Ҡаҙыйҙар ҙа ер аҫтынан сыҡҡан йылтыр таштарҙы ситтә ҡатып торған бер кешегә бирәләр. Был әҙәм ҡапыл, болан күргән арыҫландай, Байрамбикәгә күҙ ташлай. Байрамбикә ҡото осоп алға, килгән яҡҡа табан йүгерә башлай. Тыны ҡыуырылып йәйләүгә ҡайтып инә. Бурама алдында йыйылышып ултырған ҡарттар аптырашып уны ҡаршы алалар. Байрамбикә улар эргәһенә килә лә әйтә:

— Анау тауҙың өңөрөндә әллә ниндәй ят кешеләр ер ҡаҙып йөрөйҙәр, — ти.

Был хәбәрҙе ишеткәс тә, бөтә йәйләү аяҡҡа күтәрелә. Ҡарттарҙың йөҙө үҙгәрә. Ил ҡарттары ул арала Аллаяр муллаға бер кеше ебәрәләр. Аллаяр мулла йылан кеүек хәйләкәр була. Шуның арҡаһында ул байҙар, аҡһаҡалдар менән ярлылар араһында сыҡҡан талаштарҙы ла төрлө юлдар менән юхалап туҡтата һәм баҫтыра килгән. Ул ҡөрьән һәм шәриғәт закондарын ятҡа белгән.

Ҡарттар Аллаяр мулланы оҙаҡ көтәләр. Бына бер саҡ, һәлмәк кенә баҫып, алпан-толпан атлап мулла килә. Ярамһаҡланып һүҙ башлай:

— Мөьмин-мосолман бәндәләр, күңелегеҙҙе ниндәй борсоу алды? Ни өсөн миңә кеше ебәрҙегеҙ? — ти.

Аллаяр мулланың был һорауына ҡаршы, өлкән ҡарттарҙан берәү:

— Хәҙрәт, һинең аҡылыңа берәүҙең дә аҡылы тиң килмәй. Һин бөтәһен дә беләһең. Ни өсөн башҡорт йортона сит кешеләр килде икән? Ни өсөн улар беҙҙең ерҙәребеҙҙе ҡаҙып йөрөйҙәр икән? — тип, ҡыйыр-ҡыймаҫ ҡына һорау ҡуя.

Йыйындағыларҙың бөтәһе лә бер ни тиклем ваҡыт өндәшмәй, тындарын эскә йотоп торалар. Мулла был ҡарттың һорауына тиҙ генә яуап бирә алмай. Бер аҙ ваҡыт үткәндең һуңында ғына, тамағын ҡырып, башын ҡырын һалып, һәлмәк кенә итеп: «Һеҙ һөйләгән сит кешеләр ул, йәмәғәт, Аҡ батшаның илселәре булыр, — ти, — уларҙың уйҙары ҡара булыр, — ти. — Бүре көтөүгә инһә, һарыҡты ҡыҙғанып ашамай ҡалдырырмы? Юҡ! Әммә уларҙа көс күп. Улар менән көрәшеү ауыр. Улар хәҙер яҡшы ниәт менән килгән булһалар, асыуландырмаҫҡа кәрәк. Улар тик беҙҙең ерҙә йәшәр өсөн рөхсәт алырға тейештәр», — ти.

Ҡарттар тағы ла нығыраҡ борсолалар. «Был ни хәл? — тиҙәр. — Ситтән килгән кешеләргә башҡорт йортонда торорға рөхсәт бирергә тейешме ни беҙ?» — тиҙәр. Шулай ҙа, мулла әйткәс, аҙаҡ күнәләр.

Хәбәрҙе йәйләүҙәге егеттәр ҙә белеп ҡала. Улар быны ишетеү менән бер көрһөнөп, бер һелкенеп ала. Берҙән, уларҙың күңелдәрендә был яңы килгән кешеләрҙе күреү теләге тыуһа, икенсенән, сәмләнеп тә ҡуялар.

Тик Аллаяр мулла ғына үҙен тыныс тота. Ул үҙенең бурамаһында, мамыҡ мендәрҙәр өҫтөндә тәмле хыялдарға батып, ҡунаҡ көтә. Бына уның бурамаһы эргәһенә бер төркөм һыбайлылар килеп туҡтай. Шунда бик ҡупшы кейенгән оҙон коүҙәле бер кеше Аллаяр мулланың алдына килеп баҫа:

— Миңә бөтә илдә билдәле булған, йырҙарҙа маҡталған, үткер аҡыллы Аллаяр мулланы күрергә мөмкин булырмы икән? — ти.

Аллаяр мулла:

— Ултырығыҙ, хөрмәтле ҡунаҡ, — ти. — Аллаяр мулла мин булам, — ти.

— Бер диңгеҙҙән икенсе диңгеҙгә тиклем ер өҫтөндә йәшәүсе халыҡтарҙы үҙенең хөкөмө аҫтында тота торған бөйөк Аҡ батша мине башҡорт халҡына илсе итеп ебәрҙе. Минең исемем — Маврин. Аҡ батшаның көсө ҙур, ҡөҙрәте киң. Ул дошмандарға — ҡурҡыныс, яҡшыларға мәрхәмәтле кеше, — ти был.

Аллаяр мулла күҙҙәрен йомоп, ҡунаҡтың һүҙҙәрен тыңлап ултыра. Ул Аҡ батша илсеһенең башҡорт йортона тиктәҫкә килмәгәнен һиҙә. Әммә, һүҙ ыңғайы көтөп, өндәшмәй тора. Маврин һүҙен дауам итә:

— Башҡорт йортоноң ерендә бик ҙур байлыҡ ята. Тик ул хазинаның ер аҫтында ятыуынан бер ниндәй ҙә файҙа юҡ. Бөйөк Аҡ батша миңә, үҙенең ҡолона, шул ер аҫтында йәшеренеп ятҡан хазинаны күреп ҡайтырға ебәрҙе. Был эштә һеҙҙең ярҙамығыҙҙы һорар әмер бирҙе. Ул һеҙгә, яҡшыларҙың яҡшыһына, аҡыллыларҙың аҡыллыһына, бүләк тә ебәрҙе.

Маврин Аллаяр мулланың алдына ебәк тоҡсай менән алтын аҡса ҡуя. Быны күреүгә Аллаяр мулланың күҙҙәре ут булып яна башлай. Ул тиҙ генә тоҡсайҙы ала ла сапанының итәге аҫтына йәшерә. Маврин тағы һүҙен дауам итә:

— Бөйөк Аҡ батша һеҙгә әйтергә ҡушты: әгәр беҙгә ярҙам итһәгеҙ, ул һеҙгә дөйә күтәрә алмаҫлыҡ алтын бирәсәк. Һеҙ халҡығыҙға әйтегеҙ. Улар беҙгә насар күҙ менән ҡарамаһындар. Беҙ башҡорт йортона яҡшы ниәт менән килдек. Аҡ батша уларҙың ерҙәрен, урман-йылғаларын тартып алыу тураһында уйлап та ҡарамай. Беҙ башҡорттарҙың үҙҙәренә кәрәк булмаған нәмәләрҙе генә эҙләйбеҙ. Буш ятҡан ерҙәрҙе генә ҡаҙыйбыҙ. Тимер-томор, һәр төрлө тау-таш тоҡомдарын ғына тикшерәбеҙ.

Аллаяр мулла сапанының еңе менән маңлайындағы тир бөртөктәрен һөртә-һөртә яуап бирә:

— Аллаһы тәбарәкә вә тәғәлә хәҙрәттәре яҙғаны булыр...

Маврин тағы һөйләп алып китә:

— Муллаларҙың — муллаһы, изгеләрҙең — изгеһе, яҡшыларҙың — яҡшыһы, минең тағы бер һөәлем бар. Мин бында килгән

ваҡытта, бик матур бер ҡыҙ күрҙем. Ундай ҡыҙҙы мин бер илдә лә күргәнем юҡ. Кем ул?

— Хөрмәтле илсе, — ти Аллаяр мулла, — күҙҙәрең үткер икән. Ул башҡорт йортондағы иң матурҙарҙың матуры Байрамбикә. Яҡшы һунарсы булһаң, уның йөрәген үҙең йәрәхәтләргә тейеш. Уның егете бар, Татлыбай исемле. Байҙарҙы мәсхәрәләп йөрөй. Алла бының өсөн уға яза бирәсәк. Һин ул матурға яҡынлашыр өсөн, ислам динен ҡабул итергә тейешһең. Әгәр һин беҙҙең динебеҙҙе ҡабул итһәң, башҡорт халҡының ышанысын ҡаҙанасаҡһың. Байрамбикәнең күңелен аулау ҙа еңел буласаҡ.

Маврин Аллаяр мулланың алдына тағы ла алтын аҡсалар һала. Аҡ батша илсеһе Аллаяр мулланың кәңәшенә риза була. Ҡулын ҡыҫып, уға рәхмәттәр уҡый.

Мавриндың ислам динен ҡабул итеү көнө килеп етә. Ҡояш сығыуға йәйләү тау битендәге урман шикелле тығыҙланып тупланған халыҡ менән ҡапланып ала. Һәр яҡта тауыш, шау-шыу, донъя зыҡ ҡуба. Эркелеп-эркелеп йөрөгән халыҡ ҡорт кеүек мыжғый. Аллаяр мулла халыҡҡа вәғәз һөйләргә тотона.

— Динебеҙ көсәйә. Ислам ғәләме киңәйә. Маврин әфәндеһең беҙҙең дингә сығыуы — ул бөтә башҡорт йортоноң шатлығы. Беҙ уға һәр төрлө ярҙамды күрһәтергә тейешбеҙ, — ти.

Аллаяр мулла ике ҡарт менән Маврин эргәһенә килә.

— Шатлыҡлы ваҡыт яҡынлаша. Аллаһы тәбарәкә вә тәғәләнең мәрхәмәте менән һин беҙҙең динебеҙҙең ҡоло буласаҡһың. Минең арттан ҡабатла:

«Лә иллаһы иллә аллаһы Мөхәмәҙрәсулулла!» — ти. Маврин да аяҡ үрә баҫып, күкрәгенә ҡулын ҡуя ла, халыҡҡа башын эйеп әйтә: «Лә иллаһи иллә аллаһы Мөхәмәҙрәсулулла», — тип мулла артынан ҡабатлай.

Шунан айҡанлы йәйләүҙә ҙур мәжлес ойошторола. Бишбармаҡ бешерәләр. Уйын ойошторалар. Йәйләүҙәге һылыу ҡыҙҙар Маврин ултырған ҡалҡыу урын алдында бейергә тотоналар. Байрамбикә лә Маврин алдынан бер нисә тапҡыр бейеп китә. Мавриндың ҡаны тағы ла ныҡыраҡ ҡайнай башлай. Байрамбикә, аларып ултырған Мавринды күреп, ытырғана, Мавриндан ҡасып киткеһе килә. Маврин эргәһендәге аҡһаҡалдар Байрамбикә тураһында уның ҡолағына ғына нимәлер һөйләйҙәр. Ул арала Байрамбикә бейей-бейей ҡыҙып китеп, Маврин янына яҡынлашҡанын һиҙмәй ҡала. Шул ваҡыт Маврин йәшеп тиҙлеге менән Байрамбикә өҫтөнә ебәк шәл ташлай. Байрамбикә аяғын яңылыш баҫа ла тиҙ генә халыҡ араһына инеп юғала.

Бынан һуң Байрамбикә Аҡ батшаның илсеһенә тап килмәҫкә тырыша. Ә Маврин Байрамбикәне ҡулына төшөрөү өсөн бөтә көсөн сарыф итә. Бер нәмәһен дә ҡыҙғанмай.

Бер ваҡыт Байрамбикә Татлыбайҙы һунарға оҙатҡас, йылға буйына төшөп, үҙенең яратҡан ташы эргәһенә килә. Байрамбикәнең күкрәгенән бәхет дәрте ағыла — ул бер нисә айҙан һуң Татлыбайҙың кәләше булырға тейеш. Шул турала Татлыбай менән

һүҙ ҡуйышҡандар. Байрамбикә шуларҙы уйлай-уйлай алға атлай.

Шул саҡ уның баш осонда бер төйләгән һауа ярып өйөрөлөп осоп йөрөй. Ул, йәшел үлән менән ҡапланған ергә ҡарап, үҙенә аҙыҡ эҙләй. Бына ул ҡанаттарын ҡапыл ғына йыйып ала ла түбән табан ҡыйылып атылып төшә, ниндәйҙер бер ҡош балаһын үҙенең үткер тырнаҡтары араһына ҡыҫа. Шунан һуң ҡанаттарын тағы йәйеп осоп китә. Һауала меҫкен ҡош балаһының мамыҡтары менән ҡауырыйҙары ғына осоп ҡала. Байрамбикәнең күңеле йыртҡыс тырнағына эләккән ҡош балаһын ҡыҙғанып һыҡрана. Уның йөрәге ниндәйҙер күҙгә күренмәй торған бер бәхетһеҙлекте һиҙгән кеүек була.

Байрамбикә һалҡын шишмә эргәһендәге ташҡа барып ултыра. Татлыбайын уйлай. Һағына.

Шул ваҡыт ағас араһынан ниндәйҙер ят тауыш ишетелә. Бер ҡеше килеп сыға. Туп-тура Байрамбикәгә ҡарай килә.

— Байрамбикә, — ти был кеше, — ер йөҙөндә һинән матур кеше юҡ. Мин һине һөйәм! Мин һиңә затлы кейемдәр алып бирермен. Күкрәгеңде ҡиммәтле таштар, алтындар менән биҙәрмен. Ҡил, минең менән бергә бул! Татлыбай бит ул ярлы. Уның йыртыҡ бишмәтенән башҡа бер нәмәһе лә юҡ... Ҡил, Байрамбикә, бир миңә ҡулыңды! — ти ул.

Маврин Байрамбикәгә яҡынлашҡандан-яҡынлаша. Байрамбикә ҡурҡып, йәйләүгә ҡарай йүгерә башлай. Маврин уны ҡыуып барып, елкәһенән баҫып ала ла ергә йыға. Байрамбикә шул ваҡытта, ярҙам һорап:

— Татлыбай, Татлыбай, ҡотҡар мине!.. — тип ҡысҡыра. Уны бер кем дә ишетмәй.

Байрамбикә Мавриндың биттәрен тырнай, ҡулдарын тешләй. Ул Мавриндың ҡулынан ысҡынырға, һуңғы тапҡыр үҙенең һөйгәне Татлыбайҙың исемен телгә алырға теләй. Тик булдыра алмай. Тимер бармаҡтар ҡыҙҙың үңәсен быуа. Байрамбикә һушынан яҙа, үҙенең ҡайҙа икәнен, үҙе менән нимә булғанын да хәтерләй алмай.

...Байрамбикә һушына килә. Уның башы тимер менән һуҡҡан шикелле сыңсынып ауырта. Бер ни тиклем ваҡыт нимә булғанын төшөнә алмай тора. Терһәгенә таянып ерҙән торорға теләй. Тирә-яғына ҡараһа, йәшел сирәм иҙелгән. Күлдәге йыртылған. Үҙенең ҙур бәхетһеҙлеккә осрағанын һиҙә. Тағы ергә ауа. Намыҫынан йөрәге таша. Туғайҙағы ҡуйы сиҙәмле кәҫтәрҙе тештәре менән кимерә башлай. Яр буйындағы таштарға бәреп биттәрен йәрәхәтләй. Тик ерҙән күтәрелергә көс таба алмай.

— Үлергә!.. Үлергә!.. — тип өҙгөләнә ул, — кафыр, һин мине нишләттең? Һин Татлыбайҙың бәхетен дә, минең намыҫымды ла алдың. Намыҫымды алғансы, йәнемде алған булһаң, артығыраҡ булыр ине...

Бер аҙҙан һуң Байрамбикә аяғына баҫа. Тирә-яғына ҡарана. Оялыуынан башын түбән эйеп, ике ҡулы менән битен ҡаплай ҙа йүгереп урман ҡуйылығына инеп юғала.

Ошо көндән башлап Байрамбикәне йәйләүҙә күргән кеше булмай. Уның тураһында төрлө имеш-мимеш хәбәрҙәр генә тарала.

Имеш, Байрамбикәне ниндәйҙер бер йыртҡыс ашаған...

Имеш, Байрамбикәне ҡалмыҡ байҙары урлап киткәндәр...

Имеш, Байрамбикәне Татлыбай яратмаған икән дә, Байрамбикә шунын өсөн һыуға ташланған икән.

Татлыбайҙы ҙур ҡайғы баҫа. Ул Байрамбикәне эҙләргә тотона. «Тере булһа, үҙен, үлек булһа, мәйетен табасаҡмын», — тип, Байрамбикәне юллап сығып китә.

Был ваҡытта инде Маврин башҡорт йортонда үҙенен эшен бөтөрөп, кире Мәскәүгә китергә әҙерләнә башлай. Ул башҡорт йортонан алыҫ Мәскәүгә, Аҡ батшаға, бик күп хазина тейәп алып ҡайтмаҡсы була. Аҡ батшаның хөрмәтен өмөт итә.

Шул ваҡыт, уйламағанда, Байрамбикә килеп инә лә Мавриндың аяғына йығылып, һыҡрай-һыҡрай ялына:

— Мин һинән балаға ҡалдым. Инде һин мине бында ҡалдырма. Тыуасаҡ балаң хаҡына ғына булһа ла, үҙең менән бергә, Мәскәүгә алып кит! — ти.

Маврин уның ялыныуҙарына, күҙ йәштәренә аҙ ғына ла иғтибар бирмәй.

— Мәскәүгә башҡорт ҡыҙы алып ҡайтмаһаң, ҡыҙҙар бөткәнме ни унда!.. — тип ҡысҡырып көлә лә, асыуланып:

— Юғал минең эргәмдән! — тип, Байрамбикәне ҡыуып сығара. Байрамбикә һушһыҙ булып йығыла.

Ҡыш яҡынлаша. Төньяҡтан һалҡын елдәр иҫә башлай. Ә Байрамбикә һаман урманда. Ул донъянан биҙгән, йортһоҙ, төбәкһеҙ ҡырағай кеше кеүек, кеше тыны ишетелмәгән урындарҙа, бер ауҡамдан икенсе ауҡамға күсеп, ҡыр еләге, үлән тамырҙары ашап көн итә.

Татлыбай, һунарға йөрөүен ташлап, көндәр, төндәр буйы ҡалын урман эсенән Байрамбикәне эҙләй. Осраған берәүҙән Байрамбикәһен һорай. Тик Байрамбикәне күргән дә, ишеткән дә кеше булмай.

Бер ваҡыт Татлыбай сәкмәнен ҡулбашына һалып урман буйлап ҡайтып килә ятҡанда, юл ситенә яҡын ғына үҫкән бер ҡуйы ҡыуаҡ төбөндә ятҡан бер ҡатынды күрә. Әкрен генә яҡынлаша. Күрә: ҡалын оҙон ҡуйы ҡара сәс толомдарын туҙҙырып һыртына япҡан да, битен-түшен ергә ҡаплап, бөгәрләнеп ятҡан. Ағас япраҡтары уны елдән һаҡлай. Бисара ҡатын әллә өшөй, әллә ауырый — ҡалтырана, һыҙлана.

Татлыбай эйәренән уҡ кеүек атылып төшә лә ҡатын янына килә. Ҡыйыр-ҡыймаҫ ҡына уға ҡулын һуҙып, ҡатындың ҡапланып ятҡан йөҙөн үҙенә табан бора.

— Байрамбикә!

Татлыбай һушынан яҙған кеше кеүек ҡатып ҡала.

Байрамбикә лә ҡаушап, ни уйларға ла белмәй аптырап ҡала.

— Байрамбикә аҡыллым, — ти Татлыбай, — һинә ни булды? Һин ни өсөн урманда ҡасып йөрөйһөң?

Байрамбикә яланғас тәнен беләктәре менән ҡаплай-ҡаплай,

башын ергә табан эйеп: «Татлыбай, мине харап иттеләр, — ти. — Һин бынан һуң бер ваҡытта ла минең турала уйлама. Мине онот», — ти.

Татлыбай Байрамбикәне күтәреп ала. Байрамбикә башынан үткән хәлдәрҙен береһен дә ҡалдырмай Татлыбайға һөйләп бирә. Татлыбайҙың күҙ алды ҡараңғыланып киткән кеүек була. Йөрәгендә асыу ҡайнай.

— Мин ул урман йыртҡысын аяҡ аҫтына һалып тапап иҙәсәкмен! — ти.

— Татлыбай, мин унан балаға ҡалғанмын, — ти Байрамбикә, — мин — хәҙер иң бәхетһеҙ, ярҙамсыһыҙ кешемен. Миңә хәҙер донъяла бер ҡыҙыҡ та юҡ. Мин ҡасан, ҡайҙа тыуғанымды ла, һинә биргән вәғәҙәләремде лә онотторға тырыштым. Миңә уларҙы иҫкә төшөрөү ауыр. Татлыбай, мин урманда йөрөгәндә лә, йыртҡыстарҙан ҡурҡып, ағас башында йоҡлағанда ла, һин минең күңелемдән китмәнең. Мин һине йәшлегемдә булған бөтә көсөм менән һөйгәйнем. Хәҙер ҙә һин миңә яҡын. Хәҙер ҙә мин һине һөйәм. Тик хәҙер беҙгә ул көндәрҙе ҡайтарыу мөмкин түгел. Мин хәҙер йолҡонған таşланған гөлгә оҡшайым. Үҙемде тереләрҙе алырлыҡ көстө күрмәйем. Мин үлермен. Ул ваҡытта ла һин минең күңел түремдән төшмәҫһең. Мин һиңә булған һөйөүемде үҙем менән бергә ҡәбергә алып инермен...

Был һүҙҙәр Татлыбайҙың йөрәгенә барып етә. Ул Байрамбикәнең ҡулын ҡыҫып тота ла:

— Байрамбикә, бына был тауҙар, урмандар, минең уғым менән атым шаһит булһындар, мин һине ҡалдырмайым. Әйҙә, минең эйәремә ултырып, йәйләүгә ҡайтайыҡ. Һиндә ғәйеп юҡ. Һиңә бер кем, бер төрлө лә ауыр һүҙ әйтмәҫ. Балаң беҙҙеке булыр. Үҙебеҙҙең балабыҙ итеп тәрбиәләрһең...

Байрамбикә, был һүҙҙәргә йөрәге ireп, ҡыуанысынан һулҡын илай...

Байрамбикәнең ҡыҙы тыуа. Уға Гөлйемеш тип исем ҡушалар. Татыу ғына йәшәп китәләр. Татлыбайҙың бер дуҫы була. Дуҫының бер ир балаһы тыуа. Уға Кәрим тип исем ҡушалар.

Гөлйемеш менән Кәрим бергә уйнап үҫәләр. Гөлйемеш бик һылыу ҡыҙ булып китә. Уның матурлығы тураһында бөтә тирә-яҡта һөйләй башлайҙар. Буйын күл буйында үҫкән зифа ҡамышҡа оҡшаталар. Ҡарағаттай ҡара күҙҙәре тураһында йырҙар йырлайҙар. Ҙур байҙар һәм аҡһаҡалдар уны ҡатынлыҡҡа алырға ымһыналар. Гөлйемеш Татлыбай менән Кәримгә эйәреп һунарға йөрөй.

Күп яҙҙар, күп ҡыштар үтә.

Кәрим менән Гөлйемеш тә ун етешәр йәшкә етә. Улар бер-береһен яратышалар. Ил араһында «Кәрим Гөлйемеш өсөн, Гөлйемеш Кәрим өсөн тыуған инде», тип һөйләүҙәр ишетелә. Улар араһындағы мөхәббәт торған һайын үҫә, көсәйә бара. Улар бергә тормош ҡорорға, тормоштоң шатлыҡтарын, ауырлыҡтарын бергә уртаҡлашып үткәрергә вәғәҙә бирешәләр.

Ҙур йыйын яҡынлаша. Был байрамға бөтә башҡорт йорто йыйыла. Ат-хат еткән ерҙәрҙең бөтәһенән иҫәпһеҙ күп һыбайлылар, йәйәүлеләр, байҙар, ярлылар, ҡарттар, йәштәр, батырҙар, ҡурайсылар, йырсылар болот кеүек ағылалар. Йыйын Ҡырҡты тауы башында үткәрелергә тейеш була. Был тау бейек тә, текә лә. Тауҙың башына бары бер генә һуҡмаҡ менә. Башҡа бер генә юл да, һуҡмаҡ та юҡ. Тау башынан бары шул һуҡмаҡ менән генә төшөргә мөмкин. Бына ошо тау башында ҙур йыйын үткәрелә. Тап ошо ваҡытта Маврин үҙенең кешеләре менән икенсе тапҡыр башҡорт йортона килеп төшә лә ошо тау башында үткәрелә торған байрамда ҡатнаша. Башта намаҙ уҡыйҙар. Муллалар саҙаҡа йыялар. Шунан һуң тау башында уйын башлана: көрәшәләр, уҡтан аталар, һикерешәләр, ҡурай уйнайҙар, йырлайҙар, бейейҙәр. Бер ваҡыт Кәрим майҙанға сығып баҫа. Исемле батырҙарҙы көрәшкә саҡыра. Уға ҡаршы күп кенә ҡарт батырҙар көрәшкә сығалар. Егет уларҙың бөтәһен дә йыға. Майҙан шаҡ ҡата. Аллаяр мулланың күҙҙәре дүрт була. Шунан һуң халыҡ Кәримдең ҡурай уйнауын һорай. Кәрим ҡурайын алып майҙан уртаһына сыға. Ҡурайҙан аҡҡан моң бөтә йыйынды баҫып ала. Бөтә тәбиғәт тына. Иҫер ел иҫеүенән туҡтай. Бөтә донъя ҡурай моңона күмелә.

Шунан Кәрим уҡ ярышына сыға. Унда ла ул ал бирмәй. Егерме аҙым ерҙән тороп, энә күҙенә тейҙерә. Шунан һуң уны юғары урында ултырған Аллаяр мулла, Маврин, аҡһаҡалдар, бейҙәр саҡырып алалар.

— Башҡорт йортонда һинең кеүек егеттең булғаны юҡ ине, — тиҙәр. — Был майҙанда һине көрәштә лә, уйында ла еңеүсе сыҡманы. Бөгөндән һин башҡорт йортоноң маҡтаулы йондоҙо булып һаналаһың. Шуның өсөн беҙ һиңә күңелең теләгән бүләкте бирергә тейешбеҙ. Әйт, күңелең ни нәмә теләй? — тиҙәр.

— Мин хәҙергә бер нәмә лә әйтә алмайым! — тип яуап ҡайтара егет.

— Һиңә уйларға ваҡыт бирәбеҙ, — тиҙәр былар. — Бына ошо ағастың күләгәһе фәлән ергә төшкәнгә тиклем теләгендә әйтерһең. Теләгең беҙҙең өсөн закон буласаҡ, — тиҙәр.

Шул арала майҙанға Гөлйемеш сығып баҫа. Уны күреүгә халыҡтың йөҙө иртәнге таң кеүек асылып китә. Алыҫ ерҙән арып килгәнгә Мавриндың күҙҙәрен йоҡо баҫҡан була. Бындай матур ҡыҙҙы күргәс, уның да йоҡоһо асыла. Гөлйемеш йырлай. Уның йырын бөтәһе лә таңға ҡалып тыңлай. Гөлйемеш бейей. Уның бейеүе бөтә тамашасыларҙың йөрәген елкендерә. Уны тархандар, байҙар табынға саҡырып алалар:

— Гөлйемеш, һин башҡорт халҡының маҡтаулы ҡыҙы, — тиҙәр быға. — Үҙеңдең һылыулығың, оҫта бейеүҙәрең, моңло тауышың, йырҙарың өсөн бик ҙур, иң ҡиммәтле бүләк алырға тейешһең! Беҙ бында һинең турала бик күп кенә уйлаған һәм кәңәшләшкәндән һуң шундай ҡарарға килдек: һин беҙҙең иң ҡәҙерле ҡунағыбыҙ булған, шулай уҡ динебеҙҙе ҡабул иткән Мавринға тормошҡа сығырға тейешһең, — тиҙәр.

Был һүҙҙе ишеткәс, Гөлйемештең күҙ алдары ҡараңғыланып китә. Уның эргәһенә Кәрим килеп баҫа:

— Хөрмәтле ҡарттар! — ти ул, — Гөлйемеш бер ваҡытта ла сит илдән килгән сит кешенең ҡатыны булмаясаҡ. Хөрмәтле байҙар, һеҙ минең күңелем нәмә теләгәнен һорағайнығыҙ. Ағас күләгәһе һеҙ әйткән тапҡырға етте. Минең бер генә теләгем бар: һеҙ миңә Гөлйемеште кәләшлеккә алырға рөхсәт итегеҙ. Беҙ уның менән күп йылдарҙан бирле бер-беребеҙҙе яратышып йөрөйбөҙ, — ти.

Йыйын тып-тын ҡала. Табын башлыҡтарының Кәримгә ни яуап ҡайтарыуын сабырһыҙлыҡ менән көтәләр. Шул ваҡытта Аллаяр мулла әйтә:

— Беҙ ризабыҙ, — ти, — тик Гөлйемеш һинең ҡатының булһын өсөн тағы ла бер һынау үтергә тейешһең. Илдең өлкәндәре һеҙгә тағы шул тиклем ваҡыт бирә. Һеҙ, шул ағас күләгәһе фәлән ергә еткәнсе, Гөлйемеш менән икәү бергә анау һуҡмаҡтан башҡа юл табып тау аҫтына төшөргә тейешһегеҙ. Ул саҡта Гөлйемеш һинә буласаҡ. Әгәр төшәп өлгөрә алмаһағыҙ, Гөлйемеште барыбыҙға ла ҡәҙерле ҡунаҡ булған Аҡ батша илсеһенә бирәсәкбеҙ, — ти.

Кәрим менән Гөлйемештең йөҙө болот кеүек ағарып ҡала. Уйға сумалар. Тауҙан бары ҡарағош ҡанатына ғына ултырып төшөргә мөмкин. Башҡа бер төрлө лә юл юҡ.

Кәрим менән Гөлйемеш тауҙың бейек урынына менеп баҫалар. Кәрим ҡурайын уйнай. Гөлйемеш ҡурайға ҡушылып, халыҡҡа табан ҡарап моңло иттереп йөрәгенән йырлай:

Беҙ йырлайбыҙ һеҙгә һуңғы йырҙы,
Һау булығыҙ, байрам халҡы.
Һуңғы сәләм һеҙгә, ҡарт аталар,
Донъя ҡала булып байҙыҡы.

Шунан һуң улар тау башынан һикереп төшөп һәләк булалар. Шул ваҡыт халыҡ араһынан Байрамбикә сығып Маврин эргәһенә килә:

— Ҡәбәхәт, был һинең үҙ ҡыҙың ине, — ти Байрамбикә, — ун ете йыл элек һин мине мыҫҡыл итеп киттең. Хәҙер ҡыҙыңдың башына еттең, — тип илап ергә ауа.

Был ваҡиғаға халыҡтың йөрәге түҙмәй. Мавринды, Аллаяр мулланы һөңгөгә күтәреп тау башынан ырғыталар.

Кәрим менән Гөлйемеште тау аҫтынан эҙләп алып, ҡарағай ағасы эргәһенә күмәләр. Дауыллы көндәрҙә ҡарағай ағасының ботаҡтары уларға башын эйә. Көслө елдәр үлемде еңгән мөхәббәт тураһында моңло итеп йыр һуҙа.

## 345. ЗӨЛХИЗӘ

Ҡушмөхәмәт менән Ишмөхәмәт тигән ике һунарсы булған. Былар икеһе бик дуҫ булған. Халыҡ уларҙың исемен боҙоп Ишәй менән Ҡушай тип йөрөткән. Ана шулай бер ҡашыҡтан ашап, бер туҫтаҡтан эсеп йөрөгән кешегә, хатта бергә йөрөй торған өйөрһөк

малдарға ла: «Ишәй менән Ҡушай кеүек бергә йөрөйҙәр», — тип әйтер булғандар. Былар, һунарға йөрөй торғас, оһолдарын * арттырғандан-арттыра барғандар. Бөтә тирә-яҡта данлы һунарсы булып киткәндәр. Халыҡ телендә маҡталып һөйләнгәс, быларҙың икәү-ара дуҫлығы артҡандан-артҡан. Шуға күрә былар, бер көн һунарҙан ҡайтып килгәндә, шундай һүҙ ҡуйышҡандар.

Ҡушай әйткән:

— Ишәй дуҫ, икебеҙҙең дә бисәләр бер мәлдә буйға ҡалды. Әгәр беребеҙҙең ул, беребеҙҙең ҡыҙ бала тыуһа, ҡоҙа булышайыҡ, — тигән. Ишәй ҙә быны ҡеүәтләгән:

— Була ул, — тигән, — дуҫ та булырбыҙ, ҡоҙа ла булырбыҙ. Бутҡаны май боҙмай тигәндәй, унын менән дуҫлыҡ боҙолмаҫ, — тигән.

Ҡайтыуҙарына «Ҡушай ағай, ҡыҙың бар! Ишәй ағай, улың бар!» тип һөйөнсөләп торалар, ти, быларҙы.

Ишәй әйткән:

— Фәрештәнең амин тигәненә тура килде бит, — тигән.

Ҡушай әйткән:

— Әйткән һүҙ — атҡан уҡ, ҡоҙа булабыҙ, — тигән.

Былар ҡул тотошоп балаларға бүләктәр әйткәндәр. «Бишек туйы» уҙғарырға, тип һүҙ ҡуйышҡандар.

Ишәй менән Ҡушай һаман һунарға йөрөгән. Бисәләренең ҡырҡы тулғас, «Бишек туйы» йыйып, Ҡушай ҡыҙына Зөлхизә, Ишәй улына Вәли, тип исем ҡушҡандар.

Ишәй менән Ҡушай һаман, боронғоса дуҫ булып, һунарға йөрөй. Вәли менән Зөлхизә, ай-йыл һанап, һаман үҫә. Вәли атҡа менерлек була. Зөлхизә көйәнтә күтәрерлек булып китә. Ике ҡоҙа «Һырға туйы» уҙғарып ташлаған. Балаларҙың береһен килен, икенсеһен кейәү, тип йөрөй башлағандар.

Берҙән-бер көн ер-һыуы таныш булмаған яҡҡа һунарға барған саҡта, Ишәй аңһыҙҙан шаршыға осҡан да һыуыҡ тейеп ҡайтып, шунан мандый алмай үлеп киткән.

Ҡушай яңғыҙ ҡалһа ла бүтән һунарсыларға ҡушылмай икән. Яңғыҙ үҙе йөрөһә лә йәнлекһеҙ ҡайтмай, дуҫының данын юғалтмай йәшәгән.

Үҙҙәре менән бергә һунарға йөрөү өсөн Ҡушайҙы тирә-яҡтағы байҙар саҡырта башлағандар. Ҡушай риза булған.

Берҙән-бер көн Йәнтүрә исемле данлыҡлы бай Ҡушайҙы бисәһе менән ҡунаҡҡа саҡырған. Бер нисә көн ҡунаҡ иткән. Был Йәнтүрә бай тирә-яҡта байлыҡ менән дә, һаранлыҡ менән дә дан алған кеше булған. Уны халыҡ «Йәнтей ҡарун» тип йөрөткән. Ҡушайҙы саҡырып, ҙур бүләк биреп ҡайтарғанын ишеткәс, халыҡ араһында аптырап: «Таштан йүкә һуйылыр икән», — тип һөйләгәндәр, ти.

Күп тә үтмәй Йәнтей бай Ҡушайға әйтә һалған:

— Зөлхизәң бик һылыу булып үҫкән икән, — тигән, — шуны анау Ишәйҙең улына биреп әрәм итмә, — тигән, — үҙемә йәш кәләшлеккә бир ҙә ҡуй, — тигән, — ебәккә уратып ҡына йөрөтөрмөн, — тигән.

Тора-бара Йәнтейҙең йыш-йыш килеп йөрөүе һунар өсөн түгел икәне аңлашылған. Ҡушай ҙа ҡыҙы Зөлхизәне Йәнтейгә өсөнсө бисәлеккә бирергә риза булған, Быны әле Зөлхизә белмәгән.

Берҙән-бер көн һыуға барғанда, Йәнтей байҙар ауылынан төшкән бер бисә Зөлхизәгә әйтә:

— Арыумы әле, Зөлхизә килен! — ти.

Зөлхизә аптырап ҡалған. Нәмә тип яуап бирергә лә белмәгән. Ҡайтып әсәһенән һорашҡан. Әсәһе эштең нимәлә икәнен шунда әйтеп биргән.

Йәнтейгә барырға һис тә риза булмаған. Һаман да Вәлиҙе яратыуын әйткән.

Шунан Ҡушай Вәлиҙе саҡырып алған да әйткән:

— Атайың үлде, уртаҡ айырылды. Һин инде минең ҡыҙыма мөсөрәп йөрөмә, ул ҡыҙ һиңә буласаҡ түгел, — тигән.

Вәли менән Зөлхизә хәҙер нисек тә ҡасыу яғып ҡайғыртҡандар.

Һанаулы көндәр еткән. Йәнтейҙең туйы билдәләнгән. Ҡоҙалар килгән. Ашау-эсеү башланған. Уйын-көлкө дауам иткән. Тап шул бола осоронда Зөлхизә менән Вәли ҡасып киткәндәр. Зөлхизәне күҙәтеп йөрөгән егеттәр быны һиҙеп ҡалғандар ҙа Ҡушайға килеп әйткәндәр. Ҡушайҙың туйҙа ҡайғыһы ҡалмаған. Атҡа менеп, бер нисә кеше эйәртеп, ҡыуа сыҡҡан. Бәхетһеҙлеккә ҡаршы, ул төн ямғыр яуған. Зөлхизә менән Вәли йылҡы көтөүенә барып, ат тотабыҙ тиһәләр, ямғырҙа күшегеп, өшөп торған йылҡыны өйөрөп, ат тотҡанса күп ваҡыт үтеп киткән. Вәлиҙәр атҡа менеп, бер аҙ ҙа китә алмаған. Ҡушайҙар баҫмалатып ҡыуып еткәндәр. Быларҙы уратып алғандар. Вәли ҡасып ҡотолған. Зөлхизәне тотҡандар. Зөлхизәне ат ҡойроғона тағып, ҡамсы менән ярып, йәйәүләтеп алып ҡайтҡандар. Вәли шул китеүҙән юҡ булған. Ҡасҡылар араһында йөрөп, үҙенә иш йыйып, Зөлхизәне урларға уйлаһа ла, өлгөрә алмаған. Зөлхизәне Йәнтейгә биреп, Йәнтейҙең йортона оҙатҡандар.

Зөлхизә Вәлиҙе онота алмаған. Уны һағынып, көндән-көн кипкән, һарғайған.

Вәли бер нисә айҙар йөрөгән. Күп ерҙәрҙә булған. Йөрөй торғас, Йәнтейҙең йәйләүенә килеп сыҡҡан. Төн уртаһы еткәс, бөтә йәйләүҙә тынлыҡ урынлашҡас, Йәнтейҙең тирмәһе ҡаршыһына килгән дә, Зөлхизәне һағынып, оран биреп, былай тип йырлаған:

Ялан ғына ерҙән дәй болан килә, Зөлхизә,
Уйһыу еркәйҙәрҙән дәй, ай, түтә, тип, Зөлхизә,
Төн уртаһы еткәс тәй, бер ҡыҙ илай, Зөлхизә,
Йәш ғүмерем зая лай, ай, үтә, тип, Зөлхизә.
Кәкүк тә генә ҡоштоң, ай, балаһы, Зөлхизә,
Сит ояларҙа үҫә ләй, ай, ят булып, Зөлхизә,
Ҡанлы йәштәр түгеп тәй бер ҡыҙ илай, Зөлхизә,
Көләс ғүмерем үтә ләй ут булып, тип, Зөлхизә,
Таң ҡыйылмай микән, тип, Сулпан ҡарай, Зөлхизә,
Йоҡлай алмай ятҡан дай ҡыҙ бала, Зөлхизә.

Ҡуйынҡайын һәрмәп тә һыйпап ҡарай, Зөлхизә,
Карт уянмай микән, тип, ҡыҙ бала, Зөлхизә,
Һыҙылып тай таңдар атҡан саҡта, Зөлхизә,
Һандуғасҡай һайрай ҙай сут-сут, тип, Зөлхизә.
Мендәрҙәр ҙәй ҡосаҡлап бер ҡыҙ илай, Зөлхизә,
Һөйгән егеткәйем дәй юҡ-юҡ, тип, Зөлхизә,
Ишәйҙең дәй улы лай ҡурайҙа уйнай, Зөлхизә,
Ят ҡуйынында ҡыҙым йоҡлай, тип, Зөлхизә.
Ҡыҙы исемдәрен ҡушып тай йырҙар йырлай, Зөлхизә,
Ташҡан күңелдәрем дәй бушай, тип, Зөлхизә,
Туғайҡайҙарҙа үҫкән дәй, ай, сләктәй, Зөлхизә,
Берәүһен дә өҙөп тәй ҡапманым, Зөлхизә.
Илкәйҙәрҙе гиҙеп тәй йөрөп сыҡтым, Зөлхизә,
Малһыҙҙарҙан хурҙы лай тапманым, Зөлхизә.
Ташҡайҙарга баҫып тай битен йыуа, Зөлхизә,
Йөҙкөйендәге лэй күҙ йәш таптарын, Зөлхизә,
Күҙкәйҙәрен һирпеп тәй берҙәй уйлай, Зөлхизә,
Рәхәт үҫкән иркә лэй саҡтарын, Зөлхизә.

Вәлиҙен йырын ишетеп, Зөлхизә һиҫкәнеп, уянып киткән. Шунда уҡ Вәлиҙең йырын ишетеп, сығып ҡасырға уйлаһа ла, ҡотола алмаған. Йәнтей уянып киткән. Вәли көткән дә, Зөлхизә сыҡмағас, өмөтһөҙләнеп кире китеп барған. Зөлхизәнең сыҡмауынан ҡайғырып, көйөп барып, атынан төшкән дә бер ҡая өҫтөндә ултырып уй тотҡан: «Булмаһа, бөгөн төн тирмәһенә үк барып керәйем дә күҙмә-күҙ һөйләшәйем, Зөлхизә нимә тиер?» — тип уйлаған да шунда ятып йоҡлаған.

Зөлхизәне һис йоҡо алмаған. Таң беленгәс, һыйыр һауырға сығыу һылтауы менән сыҡҡан да йыр тауышы килгән яҡҡа барып, ҡамыш, тал араларынан эҙләп таба алмағас, ултырып илаған-илаған да кире ҡайтҡан.

Вәлиҙе эҙләргә Йәнтей бай кешеләр ебәргән. Эҙләй торғас, улар бер һайыҫҡан шыҡрыҡлаған урынға ҡарай киткәндәр. Вәлиҙең йоҡлап ятҡан урынына барып сыҡҡандар. Уятып-нитеп тормағандар, шул урында йөрәгенә хәнйәр ҡаҙағандар. Береһе Йәнтей байға һөйөнсөгә сапҡан. Йәнтей бай Вәлиҙең үлгәнен үҙ күҙе менән күргәс кенә ышанған. Үлтереүселәргә мал биреп, ҙур туй яһаған. Зөлхизә Йәнтейҙең ҡулында ҡалһа ла, Вәлиҙе онотмаған. Бала тыуа күрмәгән. Көндән-көн һарғайып кипкән. Аҙаҡ сиктә диуана булып үлгән, ти.

## 346. УРАЛБАЙ

Бер ауылда буйға зифа ҡамыштай, төҫкә күҙ ҡарап туймаҫлыҡ сибәр ҡыҙ үҫеп етеп килгән, ти. Ата-әсәһе тырышып-тырмашып эшләһә лә байыға алмаған.

— Ошо Айһылыуыбыҙҙы бәхетле итеп үлеп китһәк, һис тә ҡайғырмаҫ инек, — тиешкәндәр.

Ошо уҡ ауылда Уралбай менән Айбулат исемле ике батыр егет

булған. Быларҙың береһен икенсеһенән айыра алмағандар. Икеһенең дә Айһылыуға күҙе төшөп йөрөгән. Был турала улар берберeһенә асыҡ әйтмәгәндәр. Береһе икенсеһенә ҡамасауламаған да. Кәләш алыр өсөн мал кәрәк. «Кем алдан мал таба, шул Айһылыуҙы алыр», — тип һүҙ ҡуйышып, һунарға йөрөп, бүре һуғалар икән былар.

Ошо уҡ ауылда Уразбай тигән бер ҡарт бай булған. Уразбай бай Айһылыуҙы үҙенә йәш ҡатынлыҡҡа алырға яусы ебәрә. Бай тип, әсәһе бирергә тырышһа ла, атаһы ҡаршы төшкән. Ҡыҙын йәлләгән. Уразбай бер нисә мәртәбә яусы ебәргән. Ризалыҡ бирмәгәндәр.

Уразбай мәһәргә биш ат, биш һыйыр өҫтәп, ҡыҙҙың ата-әсәһенә кейем-һалым вәғәҙә итеп, тағы яусы ебәргән. Байҙың дуҫиштәре Айһылыуҙың атаһын көнө-төнө ҡурҡыҡындар. «Әгәр ҡыҙынды Уразбайҙан башҡаға бирә торған булһаң, ауылда һиңә көн юҡ», — тигәндәр. Атаһы ла ҡурҡып ризалашҡан. Туй мәжлесе башланған.

Ҡыҙ әйткән: «Үлһәм үләм, Уразбайға бармайым», — тигән. Шунан ошондай шарт ҡуялар: «Кем көрәштә еңә, ҡыҙ шуға була».

Көрәшкә Уразбай үҙенең бер дыуамал ялсыһын сығара. Айбулатты бай ялсыһы еңә. Икенсе булып Уралбай сыға. Уралбай байҙың ялсыһын күтәреп ала ла Уразбайҙың алдына бырaҡтыра. Байҙар: «Уралбай таҙа көрәшмәне», — тип, шау-шыу күтәрәләр. Айһылыуҙы ай-вайына ҡарамай Уразбайға бирергә булалар.

Ҡыҙҙы ҡушырға тип тирмә ҡоралар. Айһылыуҙың тирмәһенең һырт яғын тәҙрә ҙурлығы итеп ҡырҡып, саҡ ҡына эләктереп ҡуйғандар.

Йола буйынса, кейәү кешене ҡыҙ янына индермәй торалар. Тәңкә һорайҙар, бейергә ҡушалар. Уразбай бейергә төшкән ыңғайы билен ауырттыра. Байҙың туғандары шаулашып: «Иҙән таҡтаһы һынып китеп, бай аяғын ауырттырҙы», — тип, Уразбайҙы ҡыҙ тирмәһенә индереп ҡуялар. Тирмә эсендә шаршау ҡоролған була. Уразбай шаршау эсенә инһә, ҡыҙ юҡ. Аптырап, һөрән һала. Тирмә ишеге тыштан бикләнгән була. Байҙың ҡысҡырғанын ишетеп инеп ҡараһалар, тирмәлә бай бер үҙе генә. Ҡыҙҙың ҡасып киткәнен аңғарып, артынан ҡыуа сығалар. Күмәк кеше бөтә урманды һөҙөп бара. Һыу буйлап килеп, Уралбайҙарҙы ҡамалағандар. Уралбай менән Айһылыу яр ситенә баҫҡандар ҙа: «Үле һөйәгебеҙ бергә булһын, тере саҡта бергә була алманыҡ», — тип, Йылғаға ташланып һәләк булғандар, ти.

## 347. КӨНҺЫЛЫУ

Борон бер ауылда Көнһылыу тигән бик матур бер ҡыҙ булған. Ул ошо тирәлә данлыҡлы Ҡарабай тигән байҙың берҙән-бер ҡыҙы булған.

Ҡыҙ шундай матур булған, хатта Әй буйына һыуға төшкән са-

ғында, йылға ағыуынан туҡтап, уның һылыулығына хайран ҡалыр булған, ти. Ҡыҙҙың матурлығына бөтә Әй буйы халыҡтары маһайған. Көнһылыу йырға ла бик шәп булған. Уның тауышын таң ҡалып тыңлар булғандар.

Көнһылыу йырлай башлаһа, һандуғастар һайрауынан, елдәр иҫеүенән, януарҙар үкереүенән туҡтағандар. Уны күргән егеттәр торған ерҙәрендә иҫһеҙ булып ҡалғандар, ти.

Бер мәлде Әләксәй батша Ҡарабайға ҡунаҡҡа килгән. Көнһылыуҙы күреп, ғашиҡ булған. Был уны үҙенә ҡатынлыҡҡа алмаҡ була. Тик шуныһы, урыҫтарҙа ике бисә алырға ярамай икән, аллалары ҡушмай, ти.

Ҡарабай ҡыҙын бик яратҡан. Уны бер ҡайҙа ла сығармай бикләп кенә тотҡан. Урлап алып китеүҙәренән ҡурҡҡан.

Көнһылыуҙы һорап бик күп ҡоҙалар килгән. Атаһы ҡоҙаларҙы бороп ҡайтарып торған. Ул Ҡазан яғынан килеп йөрөй торған Аҡсура мырҙаға вәғәҙә биргән булған. Аҡсура мырҙа бик бай булған. Ул Әләксәй батшаның иң яҡын яраны икән.

Бер ваҡыт ҡыҙҙар, егеттәр йыйынға сыҡҡандар. Йылҡы һуйып, Әй буйындағы ҙур түбәктә ҡаҙан аҫҡандар. Йәштәрҙең береүҙәре көрәшкән, береүҙәре йүгерешкән, ат сабыштырғандар. *Көнһылыу аҡ сатыр аҫтында аҡ кейеҙ өҫтөндә ҡарап ултырған.* Һабантуйҙа күрше Салйығут[1] ауылының Арыҫлан тигән егете еңеп сыҡҡан. Ул үҙе Йосоп пәйғәмбәр кеүек матур булған.

Арыҫлан бер ярлы ғына көтөүсенең улы икән. Ул Салйығут ауылында һыйыр көткән. Көнһылыу Арыҫланды күреп ҡалған да ғашиҡ булған. Кешеләр Арыҫланға бүләк биргәндәр. Көнһылыу уға «Көнһылыу» тип яҙылған ебәк яулығын бүләк иткән. Көнһылыу менән Арыҫлан бер-береһенә ҡарап йылмайышҡандар. Арыҫлан да Көнһылыуҙы бер күреүҙән яратҡан. Һәр ваҡыт уны уйлап йөрөй торған булған.

Бер көндө йәштәр һаҡтауға сыҡҡандар. Һаҡтауҙа ҡыҙҙар килеп бейей торған таш булған. Өҫтө шыма, тигеҙ булып, эсе өй кеүек ҡыуыш булғанға уны Өй таш тигәндәр. Арыҫлан ҡурай уйнап ҡыҙҙар бейеткән. Көнһылыу шунда үҙен-үҙе онотоп бейегән. Шул саҡ кемдер берәү муллаға барып әйткән. Мулла бөтә кешене ҡурҡытып тота икән. Мулланың килгәнен күреп, бөтә йәштәр ҡасып бөткән. Көнһылыу менән Арыҫлан быны һиҙмәй ҡалғандар. Мулла Арыҫланға таяҡ менән һуғылған. Мулла үҙе лә Көнһылыуҙы дүртенсе бисәлеккә һоратып йөрөгән икән. Көнһылыуҙың атаһына килеп әйткән: «Ана, уйнашсы ҡыҙыңды күр», — тигән. Ҡарабай, эштең айышына төшөнмәйенсә, ҡыҙын да, егетте лә бик ныҡ туҡмап ташлаған. Етмәһә: «Зинһар кешегә әйтмәгеҙ», — тип ялынып, ҡыҙын әлеге муллаға бирергә булған.

Шуны ғына көтөп йөрөгән мулла быға бик ҡыуанған. Бер саҡ: «Көнһылыуҙы Һабанаҡ ауылының ҡарт муллаһына бирәләр икән» тигән хәбәр таралған. Был хәбәрҙе ишетеп, Арыҫлан бик көйөнгән. Атаһын Ҡарабайға ҡоҙа итеп ебәреп тә ҡараған. Атаһы ҡурҡа-ҡурҡа ғына барып Ҡарабайға баш һалған. Ҡарабай быға бик ғәрләнгән. Ҡартты эттәренән талатып сығарған. «Хә-

йерсе, һеҙҙең арҡағыҙҙа хур булдым, — тигән. — Батша яраны Аҡсураға бирә торған ҡыҙымды бөкрө мәсет ҡарағына бирергә мәжбүр булдым», — тигән.

Ауылдың зирәгерәк ҡарттары барып: «Берҙән-бер ҡыҙыңды әрәм итмә», — тип әйтеп ҡарағандар. Ҡайҙа ул, бай кеше, байлығына маһайып, үҙ һүҙен һүҙ иткән. Уйынан кире ҡайтмаған.

Арыҫлан терелгәс тә һабанаҡҡа киткән. Урамда йөрөгән-йөрөгән дә әлеге Өй ташҡа барган. Барһа, таш өҫтөндә Көнһылыу бойоғоп ҡына ҡарап ултыра, ти. Шунда былар ҡосаҡлашып тороп бик оҙаҡ илағандар.

Мулла йәш кәләшенең өйҙә юҡлығын һиҙеп алған да Ҡарабайға йүгергән. Икәүләп тороп ҡыҙҙы эҙләй башлайҙар. Өй таш яғына ҡараһалар, бер нур күренә, ти. Шундалыр, тип бара ятһалар, быларға ҡаршы ғәскәре менән Аҡсура осраған. Көнһылыуҙы бирәләр икән тип ишеткән дә Ҡазандан яу менән килә икән. Күмәкләшеп Өй ташына барһалар, ҡыҙ менән егет ҡосаҡлашып торалар, ти. Мулла ҡорбан сала торған бысағын алған да икеһен дә сәнсеп үлтергән.

Көнһылыуҙың үлгәнен күргән Аҡсура мулланы хәнйәре менән сәнскән. Шунда муллаға кейәү тейеш мәзин дә була. «Ҡайнымды үлтерҙе», — тигән дә мәзин Аҡсураны балта менән сапҡан. Ҡарабай ни үле түгел, ни тере түгел, ағарынып китеп, ҡатҡан да ҡалған, ти. Бөтә кеше ҡырылышып ята, ул бер үҙе ҡарап тора, ти. Бер талай торғас ҡына иҫенә килә. Ҡаны бырлап ятҡан ҡыҙын күтәрергә итһә, Өй таш урынынан ҡуҙғалып китә лә, Арыҫлан менән Көнһылыу юҡ була. Ҡапыл ҡараңғы булып китә. Болот араһынан ай сыҡҡан саҡта Өй таш урынында булмай. Әй аръяғындағы Ыйыҡтау яғына ниндәйҙер аҡ нәмәнең осоп киткәне генә күренеп ҡала.

Ҡарабай шул аҡ нәмә артынан йүгерә. Әҙәм аяҡ баҫмаған ерҙәргә барып сыға.

Икенсе көндө Өй таш күскән тигән хәбәр бөтә ауылға тарала. Барып ҡараһалар, таштың урыны ғына ҡалған. Уның тирәһендә ике мәйет һөйәге ята. Кемдеке икәнен белерлек тә түгел, эт-ҡош ашап бөтөргән, ти.

Арыҫландың атаһы оҙаҡ йәшәмәгән. Йөрәге шартлап үлгән. Шул уҡ көндө Ҡарабайҙың үлек кәүҙәһен табып алғандар. Икеһен дә күмгәндәр.

Был хәлдәргә туғыҙ ай самаһы үткәс, тау ярылып киткән дә, унан ике аҡҡош осоп сыҡҡан. Әй буйына оя ҡорғандар.

Әй буйындағы аҡҡоштарҙы шуларҙан ҡалған, тиҙәр.

## 348. ҠАРАЙҒЫР

Бынан бик күп йылдар элек Ҡыпсаҡ ырыуының бер егете Тамъян ырыуындағы бер ҡыҙҙы ярата. Егеттең һунар атынан, уҡһаҙағынан, этенән, ҡартайған әсәһенән башҡа бер кеме лә булмай.

Бер мәлде егет, болан ҡыуып, Тамъян ырыуы ереnә барып сыға. Тамъян ырыуы аҡһаҡалының бик һылыу бер ҡыҙы була. Ҡыҙҙың йөҙө тулған ай һымаҡ түңәрәкләнеп, ҡаштары ҡарлуғас ҡанаты һымаҡ ҡыйғасланып торған.

Ҡыпсаҡ егете был ҡыҙға бер күреүҙә үк ғашиҡ булған. Былар аңлашып, вәғәҙә бирешкәндәр.

Ҡыҙҙы һоратып яусылар килә башлаған. Тирә-яҡҡа дан сығарып йәшәгән бер бай ҙа яусы сбәрә. Был бай ҡыҙҙан ҡырҡ-ҡырҡ биш йәштәргә оло була.

Һунарсы егет тә ҡыҙға барып ҡарай. Уны, өйгә лә индермәйенсә, ҡыуып сығаралар. Егет ҡайтып китә. Ҡайтып, атын тышап торһа, ат ялына бәйләнгән ҡулъяулыҡ күреп ҡала. Ҡулъяулыҡты ҡыҙ бәйләп ебәргән була.

Яҡшылыҡ менән бирмәгәс, егет ҡыҙҙы ҡасырып алырға уйлай. Ҡыҙға ышаныслы кешеләр артынан хәбәр иттерә. Ҡыҙ ризалыҡ бирә. Бер төндә егет Тамъян ырыуына килә лә ҡыҙҙы алып ҡаса. Һиҙеп ҡалып, арттарынан ҡыуа төшәләр. Ҡыуып етеп, тәүҙә егеттең этен атып үлтерәләр. Ҡасып бара торғас, егет менән ҡыҙ бер ҡая алдына килеп сығалар. Ҡаяға менер өсөн генә юл була, кирә төшөр юл булмай. Егеттең аты ҡая башына менеп киткән дә ҡаянан упҡынға ташланған. Өсөһө лә шунда һәләк булғандар.

Ҡаяны Ҡарайғыр ҡаяһы тип йөрөтә башлағандар.

## 349. АҠ ҠАРСЫҒА (ЯЙЫҠ)

Түбәнге Ғәбдрәшит ауылында бынан күп йылдар элек Ғәлиәкбәр исемле бай йәшәгән. Уның байлығы шул ҡәҙәре булған: йылҡылары һыу эсергә төшһә, бер башы Ҡыҙыл йылғаһында, икенсеһе Сыуаш тауы[1] битендә утлап йөрөгән. Ә индe һарыҡ-кәзәһе тау араһында ҡырмыҫҡа иләүендәй мыжғып йөрөгән.

Ғәлиәкбәр кеүек ҡарундар һирәк осраған был яҡта. Ул көтөүселәрен, ялсы-йомошсоларын ас тотоп яфалаған.

Быңа ошо Ғәлиәкбәр байҙың Яйыҡ буйындағы Сыртинск, Ҡыҙыл хуторҙарында «знакум»дары булган. Купецтар ҡунаҡҡа килһә, бай туғайлыҡҡа өйрәк, ҡаҙ атырға алып барған уларҙы, туйғансы һыйлаған, Ҡыҙыл йылғаһында балыҡ тотоп та яҡылағандар.

Ауылдағы хәҙрәт менән ҡарый ҙа Ғәлиәкбәр байҙың көтөп алған ҡунаҡтары икән. Уларҙы саҡырып, ҡөрьән сығартып, хәйеренә берәр баш йылҡы биреп, фатиха ала торған булған ул.

«Знакум»дар, мулла-хәҙрәттәр байға күпме генә доға ҡылып оҙон ғүмер теләмәгәндәр, теге берҙән-бер көндө вафат булған. Байлығы улы менән ҡыҙына тороп ҡалған. Алма ағасынан алыҫ төшмәй тигәндәй, Ғәлиәкбәрҙең улы ла «знакум»дарында оҙаҡ-оҙаҡ ҡунаҡ булып, кәйеф-сафа ҡылып йөрөй башлаған. Аҡса етмәһә, атаһынан ҡалған малды һатҡан.

Бер көндө быларға яусы килеп төшкән. Үрге Ғәбдерәш ауылы-

ның бер егете Ғәлиәкбәрҙең ҡыҙын кәләшлеккә һоратҡан, ти. Ағаһы быға ҡаршы төшкән:

— Һунарсы менән туғанлашыр хәлем юҡ, — тигән. — Бер ҡарсығаһынан башҡа мал-тыуары ла юҡ бит уның, — тигән.

Яусы ҡайтып киткән. Күп тә үтмәгән, әлеге «знакум»дары йәнә килеп еткән. Тағы кәйеф-сафа ҡылып, күңел асып ята башлағандар.

Һуңғы кистә Ғәлиәкбәр байҙың улы Яйыҡ буйынан килгән йәш күлецҡа һеңлеһен кәрттә отторған. Таң атыуға теге купец ҡыҙҙы алып ҡайтып китергә тейеш була. Туғандары, әсәһе бик үтенеп һорағас, ҡыҙға әҙерләнеү өсөн бер көн ваҡыт бирелә. Ҡыҙ, ошонан файҙаланып, һөйгән егете янына йүгерә. Был хәлде ағаһы һиҙеп ҡала ла ат менән артынан ҡыуа сыға. Уларҙы йылға буйындағы тирәк төбөндә таба. Һеңлеһен, ҡайыш сыбыртҡы менән яра-яра, өйөнә алып ҡайта.

Уғаса булмай, яҡындары, дуҫ-иштәре, туғандары йыйылып китә:

— Атай-олатай йолаһында булмаған эште эшләйһең, — тигәндәр улар. — Ауылға, туғандарыңа тап төшөрәһең. Ҡыҙҙы, егет яғынан яусы ебәртеп, йола буйынса туй үткәреп оҙатырбыҙ.

Йәш бай риза булмаған. Шунда ҡыҙ әсенеп, ауылдаштары менән хушлашыу алдынан былай тип йырлаған, ти:

Аҡ ҡарсығаҡайҙың, ай, башында,
Күләгәһе юҡтыр ҡашында.
Янмаҫ ҡына инем, көймәҫ инем,
Йәнкәй йәнеш юҡтыр ҡаршымда.
Аҡ таҫтамал алып, ҡулыма тотоп,
Йүгереп төштөм Ҡыҙыл буйына.
Ун ете лә йәшлек ҡыҙ бала инем
Ағайым һатты купец улына.
Ишеккәйем алды, ай, күл генә,
Томбойоҡтар менән тулы икән.
Теләккәйең камил, ай, булмағас,
Был донъяҡайҙарға тыума икән.

Йырҙы тыңлаусылар үкһеп илағандар, ҡыҙҙың ағаһына нәфрәт белдергәндәр. Был фажиғәне күреп торған бер аҡһаҡал:

— Илағыҙ, илағыҙ, балалар, күҙ йәше тигенгә булмай ул, — тип әйткән, ти.

Ҡыҙҙы арбаға ултыртып алып сығып китәләр. Тыуған йортона һуңғы мәртәбә боролоп ҡарай. Шул ваҡыт ҡапыл һөйгән егетен күреп ҡала. Тегеһе хушлашырға килгән икән.

— Аҡ ҡарсығанды минең төҫөм итеп һаҡла, — ти ҡыҙ, ең осонан сиккән яулығын алып тегеңә ырғыта.

Әллә күпме баҫып торғас ҡына егет аңына килгәндәй була. «Өндәшә лә алманым, исмаһам, бүләк булһа ла биреп ебәрәйем», — тип, йүгереп ҡайтып китә. Егет, бауҙа ултырған аҡ ҡарсығаһын ҡулына алып, атына атланған да арбаны ҡыуа киткән.

Тегеләрҙе күреп алыу менән, һөйгәне бүләк иткән яулыҡтың осона көмөш балдаҡ төйнәй ҙә, ҡарсығаһының аяғына бәйләп, осороп ебәрә. Ҡыҙ, ҡарсығаны күреп, башындағы аҡ яулығын алған да болғай башлаған, ти. Яулыҡ килеп йәш купецтың башына уралған. Ҡорос тырнаҡлы ҡарсыға купец башына килеп ҡуныуы булған — теге тәгәрмәс аҫтына ҡолап төшкән. Ошонан файҙаланып, ҡыҙ һөйгән егете менән ҡасып киткән.

Әммә был икс йәш йөрәк мәңгелеккә ҡауыша алмаған. Бер нисә көндән һуң уларҙы, йәш купецты үлтереүҙә ғәйепләп, тотоп алалар. Егетте Себергә, ҡыҙҙы йәш купец хуторына оҙатырға хөкөм итәләр. Ә ҡарсығаны, ҡанаттарын ҡайырып, аяҡ аҫтына ташлағандар.

Ошо фажиғәгә түҙә алмайынса, егет Себерҙә вафат була, ә ҡыҙ Яйыҡҡа ташлана.

## 350. МӘХҮБӘ

Элек башҡорттар Һыйылмыш буйында йәйләгәндәр.

Бер саҡ Сауҡатау итәгендә үткәреләсәк йыйынға бөтә тирә-яҡ йәйләүҙәрҙән — Ҡурғаҙа, Һарыйылға, Юшатыр, Ҡарғалы һәм Себенле йылғаларын [1] һыулаған кешеләр килгән.

Салт аяҙ көн булған. Ҡояш өс арҡан самаһы күтәрелгәс, тыу бәйләнгән оҙон ҡолғаны майҙан уртаһына ҡаҙап ҡуйғандар. Был инде йыйын башланыуға оран булған. Оҙаҡ та үтмәй, бер урында көрәш, икенсе ерҙә йыр, бейеү, ҡурайсылар ярышы башланып киткән. Бер тиҫтер егеттәр сәпкә уҡ атыу ярышы башлап ебәргәндәр. Был ярышта Һайылмыш буйынан Айбулат, Юшатырҙан — Ҡәҙерғол исемле ике егет алдын сыҡҡан. Әммә йола буйынса ике мәргәнде айырыу шарт булып тора. Ҡайһыһының шәберәк атыусы икәнен белеү өсөн, улар уҡты йөҙөк аша үткәрергә тейеш булалар.

Ярыш алып барыусы аҡһаҡалдар нәҙек кенә тарамыш менән йөҙөктө ике бағана араһына бәйләп ҡуйғандар, ти. Уҡтың йөҙөк эсенән үткәнен белеү өсөн, артына яҫы таҡта ҡуйып, өҫтәүенә, йөҙөктө үрмәксе ауы менән уратып ҡуйған булғандар. Мәргән егеткә бүләккә тигән йүгерек аҡбуҙат эйәрле әҙер торған. Бер бай, уртаға сығып, мәргән егеткә һарыҡ тәкәһе вәғәҙә иткән. Шул саҡ икенсе берәү:

— Минең бирерлек малым юҡ, — тигән. — Әммә йәнемдәй күргән ҡыҙым бар. Еңгән егеткә Мәхүбәмде бирәм, — тигән.

Майҙан гөж килеп шаулап алған.

Егеттәр шыбаға тотошалар. Юшатыр егете Ҡәҙерғол башлап атырға тейеш була.

Ҡәҙерғол йәйә менән уҡты алғас, тағы берәү уртаға йүгереп сығып, уның ҡолағына әйтә:

— Ҡыҙ ҙа, аҡбуҙат та, тәкә лә беҙҙеке, — ти. — Ашыҡмай, йөрәкһенмәй генә ат, — ти.

Икенсе бер яҡыны әйткән:

— Ҡәҙерғол ҡустым, атайың бай, олатайың — кантон. Һиңә мал да, оҙон сәс тә кәрәкмәй. Намыҫы, даны ни тора! — тигән.

Ҡәҙерғол атҡан уҡ таҡтаға яҙа барып ҡаҙалған. Юшатыр буйынан килеүселәр ауыҙҙарына һыу уртлаған кеүек өнһөҙ ҡалдылар.

Майҙанға Айбулат сыға. Уға көс-ҡеүәт биреүсе булмай. Майҙан тын. Егеттең атып ебәреүе була, уғы йөҙөктө үтеп, таҡтаға ҡаҙалып тора, ти. Халыҡ егетте күтәреп ала.

Аҡбуҙатты Айбулатҡа килтереп тотторалар. Егет атҡа атланып, майҙанды өс әйләнгәс, Мәхүбәнең атаһы әйтә:

— Вәғәҙә — иман тотҡаһы, — ти. — Вәғәҙә билдәһе итеп, билғауымды бирәм, — ти. — Кейәү булып килгәнеңдә, билеңдә булһын, — ти. Тик теге бай ғына вәғәҙәһен үтәмәй ҡала:

— Һайылмыш йолҡошона тәкә түгел, йылы һүҙ ҙә әрәм, — ти.

Айбулат ауылға ҡайтыуға насар хәбәр тарала. Имеш, кейәү сыҡмаған һуҡыр Мәхүбәһен атаһы халыҡ алдында үҙе йәрәшкән, тиҙәр.

«Был Ҡәҙерғол эше, — тип уйлай Айбулат, — ҡыҙҙы юрый рисуай итмәксе була». Шулай ҙа уға шик төшә. Дөрөҫлөктө асыҡлау өсөн, ул ҡыҙ менән осрашырға була. Ошо саҡта ғына уға әрмегә барырға тигән ҡағыҙ килеп төшә. Айбулат нисек тә Мәхүбәне күреп китергә уйлай. Ҡыҙ йәшәгән йәйләүгә йүнәлә.

Тәүҙә ҡыҙҙың еңгәһе менән осраша был. Уның аша ҡыҙ менән йәйләү тауының башында осрашырға һүҙ ҡуйышалар.

«Һуҡыр булһа, ғәрлегемдән атым менән ҡаянан ташланырмын, матур булһа, туй яһап алып китермен», — тип, аҡбуҙатында тау башына менеп етеүгә, еңгәһе менән Мәхүбә шунда була. Ҡыҙ яулыҡ осо менән битен ҡаплаған килеш, егеткә оялып ҡына ҡул бирә. Айбулат, ни булһа ла булыр, тип тәүәккәлләп, яулыҡты тартып асһа, ни күҙе менән күрһен: ҡаршыһында сөм-ҡара күҙле, ҡыйғас ҡашлы, ай кеүек түңәрәк йөҙлө, армытлап үрелгән ҡуңыр сәсле, нәҙек билле, зифа буйлы ҡыҙ баҫып тора...

Мәхүбә егеткә вәғәҙә бүләге итеп сигелгән ебәк яулыҡ бирә. Айбулат бәйгелә иҫтәлек итеп алған йөҙөктө Мәхүбәнең бармағына кейҙерә. Егет йырлап ебәрә:

Бейек кенә тауҙың, ай, башына
Ебәк яулыҡ ҡуйҙым ҡыуалға.
Ырымбурҙан миңә фарман килде
Әрмеләргә мине алмаға.

Былар хушлашҡандар. Айбулат ата-әсәһенә Мәхүбәнең матурлығы, аҡыллы, инсафлы булыуы тураһында иҫе китеп һөйләгән. Әрменән ҡайтыу менән туй үткәрергә вәғәҙә бирешеүҙәрен әйткән. Бай малайы Ҡәҙерғолдоң көнләшеп ялған һүҙ таратыуын да һөйләп биргән. Шунан Айбулат Ырымбурға киткән.

Егеттең юлға сығыуы була, Мәхүбәләргә яусылар килеп тә етә. Атаһы һәр ваҡыт: «Мәхүбәне Айбулатҡа биреп, никах уҡытып ҡалдыҡ», — тип яусыларҙы кире ҡайтара торған.

Шулай ҙа Мәхүбә тураһында ла, Айбулат тураһында ла яман һүҙ таратыусы күп булған. Аҙаҡ килеп, бер ҙә күндерә алмағас: «Егет тигән бәндәң һине ташлап ҡасҡан», — тигән һүҙ ишеттерәләр.

Мәхүбә ышанмай. Әрмеләгә Айбулат эргәһенә үҙе барып килергә була.

Ата-әсә рөхсәте менән ул һыбай юлға сыға. Ауылдарын ҡалдырғас та, ир-атҡа ҡыҙ булып күренмәҫ өсөн, эйәр ҡапъяғаһынан егеттәр кейеме алып кейенә, толомдарын бүрек аҫтына йәшерә.

Мәхүбә Ырымбурҙа Айбулатты эҙләп таба.

Айбулат егет кейемендәге Мәхүбәне күреп башта аптырап ҡалған. Шунан уны ҙур түрәгә алып нигән.

Түрә әйткән:

— Йә, егет, ниндәй хәбәр менән килдең? — тигән.

Мәхүбә әйткән:

— Мин егет түгел, ошо ғәскәриҙең ҡатыны, — тигән. Шунда башындағы бүркен алып, сәс толомдарын таратып ебәргән. — Мине Айбулаттың атаһы ебәрҙе, — тигән, — ул бик насар хәлдә ята. Улыма ғына әйтәһе васыятым бар, алып ҡайтһаң ине, тип үтенеп һораны, — тигән.

Түрә әйткән:

— Ҡыйыу, батыр, тәүәккәл булғаның өсөн молодец, — тигән.— Ата хаҡын ихтирам итеп, иреңде бер йылға алып ҡайтырға рөхсәт итәм, — тигән. — Әммә киләһе йылды ошо ваҡытта Айбулатың хеҙмәткә үҙе килһен, — тигән.

Ҡайтҡас, дошмандарына үс итеп, ҡыҙ йортонда туй үткәргәндәр, унан Айбулаттарҙың йәйләүендә өс көн, өс төн байрам булған. Шул туй ваҡытында Айбулат менән Мәхүбә юлда сығарып ҡайтҡан йырҙарын йырлап ишеттергәндәр:

Сауҡатау ҙа менән Һайылмышты
Тирмә тейәп үттек ҡор менән.
Сәскә кеүек үткән ғүмерҙәрҙе
Аңлатайыҡ һеҙгә йыр менән.
Бәйгеләрҙә тотоп саба инек
Һайылмышҡай буйлап ат менән.
Сауҡатауға сығып, йәмле йәйҙә
Вәғәҙә биреште беҙ ант менән.
Һайылмышҡай буйы, ай, аҫылташ,
Һаҡмар буйҙары — йәшелташ.
Һайылмыштай буйында үҫкән егет
Яҫы яурын булыр, ҡара ҡаш.
Атҡайымды мендем, ай, китергә,
Ырымбурға барып та етергә.
Ырымбурға еткәс, бүркем алдым,
Егетем әйтә сабыр ҙа итергә.

Туй үткәс, Айбулат Мәхүбәне оҙатып алған.

Көндәрҙән бер көндө, таң менән, Айбулат аҡбуҙатына һыу эсе-

рергә һайылмышҡа төшкән. Мәхүбә тирмә янындағы усаҡта аш яраштырып ҡалған. Ул көткән, бик оҙаҡ көткән, ире ҡайтмаған. Ҡайны, ҡәйнәһе лә борсола башлағас, йүгерә-атлай йылға буйына төшһә, ирен тирәктә аҫылған хәлдә тапҡандар.

Быларҙың оҙаҡ ҡайтмауына хәүефләнеп, ата менән әсә лә эҙләп төшә. Мәхүбә лә йөрәге ярылып үлгән була.

Ике йәш йөрәкте һайылмыш буйындағы тау итәгенә ерләйҙәр.

Шунан ҡалған ул «Мәхүбә» йыры. Уны Ырымбур өлкәһендә Юшатыр, Ашҡаҙар, Дим буйында бик яратып йырлайҙар.

## 351. ҠАЛДЫ

Бынан бик күп йылдар элек Әлмәт ҡарттың Мәликә исемле ҡыҙына Ғәббәс исемле байҙан яусы килеп төшкән.

— Бала сағында ҡыҙымдың ҡолағын тешләгән Мөхтәр исемле егете бар. Шуға кейәүгә бирергә ниәтләп торабыҙ. Оло урындан килгән яусы булһаң да, һорауыңды кире ҡағырға тура килә, — тигән ҡыҙҙың атаһы яусыға.

— Мөхтәр тигәнең, ҡыш булһа, һунарға йөрөүҙән, йәйен һал ағыҙып, йылға буйын ҡыҙырыуҙан бушамай, — тигән яусы, — тамағы ашҡа туймай, өҫтө-башы кейемгә йәлсемәй. Бер тамағын да туйҙыра алмаған шул йолҡошҡа ғәзиз балаңды биреп, ғүмерен заяға үткәрергә теләйһеңме?! Ғәббәс байға бирһәң, өҫтө бөтөн, тамағы туҡ, бер мохтажһыҙ донъя көтәсәк. Күңелең тыныс, барһаң, ҡунаҡ булып йөрөрһөң, исмаһам. Өҫтәүенә ҡалымына ниндәй тиклем мал. Туй үткәреү сығымын үҙ өҫтөнә ала. Шундай урындан баш тартырға нисек баҙнат итәһеңдер?..

— Байлыҡ — бер айлыҡ тигәндәр боронғолар, — ти Әлмәт ҡарт. — Ҡыҙымды көсләп Ғәббәс байға бирһәм, баланың күҙ йәше башыма төшәсәк. Мин уны көсләп бирә алмайым.

— Ҡыҙ баланың ғүмере шулай инде, бөгөн ата менән әсә ҡулында, үҫеп еткәс — барыбер кейәү ҡулына күсә. Башта ҡыҙ баланың күҙ йәше түгелә инде ул. Һуңынан бөтәһе лә онотола. Ғәббәс бай бик шөһрәтле кеше. Өйөнән кантон, старшина кеүек түрәләр өҙөлмәй. Уның бер һүҙ менән мең кешене юҡ итер форсаты бар, ҡаршылап торма, — тигән дә яусы ҡайтып киткән.

Ҡыҙҙың атаһы риза булған. Ҡалым малдарын барып алып ҡайтҡан.

Был хәбәрҙе ишеткәс, Мәликә бик ҡайғырған. Иҫе-аҡылы китеп илаған. Етмәһә, һөйгән егете Мөхтәр кәсеп итергә ситкә сығып киткән булған. Мәликә уға хәбәр ебәргән:

— Мине байға көсләп кейәүгә бирәләр. Яратһаң, тиҙерәк ҡайтып ҡотҡар, — тигән.

Бына Ғәббәс бай туйға килеп тә еткән. Әммә Мөхтәр һаман ҡайтмаған. Ҡыҙ, көтә-көтә арығас, егетенең ҡайтыуына өмөтөн өҙөп, бәләкәй саҡта ҡымыҙлыҡ йыйып йөрөгән ерҙәрен ҡарап ҡайтырға сығып киткән. Мәликә тау битендәге ҡая ташҡа менеп,

тирә-яҡҡа ҡаранып, егетем менән бәхилләшеү ошо булыр тип, тауташтарҙы яңғыратып йырлаған:

Бәләкәй генә бүртә әкрен юрта,
Әкрен-әкрен баҫып тиҙ етә.
Ҡырыҡаларҙа түгел, сәхрәләрҙә
Йәшлек ғүмерем заяға тик үтә.

Ярһып ҡайтҡан егет, ҡыҙының өйҙә юҡлығын белгәс, эҙләп шул яҡҡа киткән. Мәликә инде ҡаянан ташланайым тигәндә, егетенең ҡурай моңон ишетеп ҡалған. Егете уны килеп тапҡан. Ҡыҙ уның күкрәгенә һарылған.

— Һөйөклөм, — тигән ҡыҙ уға, — байҙар һине үлтерергә йыйыналар, зинһар, күренмә!

Егет әйткән:

— Байҙан ҡотолоу өсөн бер генә юл бар: йә ул, йә беҙ йәшәргә тейеш. Һин бер ни белмәгәндәй өйөңдә бул. Мин байҙы үҙем ҡаршы алырмын. Атынан ҡолатып төшөрөрмөн дә һине ултыртып алып китермен.

Ҡыҙҙы ул ауылға оҙатып ҡуйған. Үҙе ҡыйыу эшкә тәүәккәлләнеп торол ҡалған.

Оҙаҡ та үтмәй, Ғәббәс бай килергә сыҡҡан. Бейек тау юлының бер ҡыҫыҡ ерендә аттары әкренләгән ваҡытта байҙың маңлайына бер уҡ килеп тә ҡаҙалған. Әйләнеп китеүенә йөрәгенә икенсе уҡ килеп тейгән.

Байҙың эйәрсәндәре сыр-сыу килеп кире ҡасҡан. Егет бай аттарына ултырып алға сапҡан.

Бай кейәүҙең килеүен көтөп торған кешеләр, ауылдаштары Мөхтәрҙе күргәс, бик аптырағандар. Егет шунда уҡ һөйгән ҡыҙын атҡа ултыртып ауылдан сығып та киткән. Билдәһеҙ яҡҡа ҡасып китеп, донъя көткән улар. Шул ваҡиғанан һуң ҡыҙ Мөхтәргә арнап ошо йырҙы сығарған.

Ҡалды ғына тауы, ай, ҡалд(ы) инде,
Һар(ы) баш — һар(ы) баш үлән алды инде.
Йән һөйгән дә йәрем ҡаршы алды, —
Йәнкөйөктөң йәнен алды инде.

Ҡалды ғына тауы бигерәк бейек,
Өҫтәренән талай аҡ кейек.
Йән һөйгән дә йәрем ҡулына алды,
Ятып ҡалды бахыр йәнкөйөк...

Уға яуап итеп егет былай тип йырлаған:

Күгәрепкәй ятҡан Ҡалды тауын
Тур(ы) аттарға менеп ураным.
Йәштән һөйгән йәрҙе алам тибүк
Яуыз байға ҡулым янаным...

Ике йәш йөрәк бергә ҡушылып, бәхетле йәшәгәндәр. Тик Мөхтәр кешегә ҡул һуҙыуынан выждан ғазабы кисергән.

Тыуған яҡҡа ҡабат ҡайта алмау — иң ҙур яза булған уға.

Шул ваҡыттан һуң ул урынға Ҡалдытау тигән исем биргәндәр. Егет менән ҡыҙ сығарған йырҙы Ҡалды тип йөрөтөр булғандар.

## 352. АҪЫЛҠУЛ

Бай ҙа, данлы ла ул Арыҫланхан.

Билгәгән ерҙәрсенең теләһә ҡайһы яғына яҡшы атҡа атланып бер аҙна буйы елдерһәң дә, осо-ҡырыйына сығып етмәҫлек. Йылҡы малының нисә баш икәнен белеү түгел, нисә өйөр икәнен дә һанап сыҡҡыһыҙ. Ә дала ҡаплап йөрөгән ап-аҡ һарыҡ көтөүҙәрен әйтеп тә тораһы юҡ: зәңгәр күк йөҙөндәге болоттар өйкөмөндәй, иҫәпһеҙ-хисапһыҙ улар.

Арыҫланхандың береһенән-береһе һылыу бисәләре лә күп. Шулай ҙа араларында иң һылыуы, иң һөйөклөһө бер генә.

Эйе, бай ҙа ул, данлы ла Арыҫланхан.

Тик уның ошо иң һылыу, иң һөйөклө бисәһе бүләк иткән берҙән-бер ҡыҙы — Аҫылҡайы уға бөтә байлығынан да, данынан да ҡәҙерлерәк. Ул бер Арыҫланхан биләмәһендә генә түгел, ә бөтә ер йөҙөндәге һылыуҙарҙың һылыуы. Ҡоралай һымаҡ һомғол, талсыбыҡтай зифа. Ә күҙҙәре көҙгө төндәй сөм-ҡара. Аҫыл мәғҙән төҫлө балҡып тора. Етмәһә, ҡыйылып киткән ҡыйғас ҡаштар ҡаймалап алған үҙҙәрен. Иренгенәләре тулышып бешкән сейә төҫлө! Йөҙө иртән яуған ҡырпаҡ ҡарҙай аҡ. Бит алмаларына ал таң шәфәғе яғылғандай. Сылтыр тәңкә, аҫыл таш менән нағышланған ҡашмауы аҫтынан һомғол һынына һарылып төшкән оҙон сәс толомдары ике ҡара йылан һымаҡ ялтырай. Ҡескәй ҡолаҡ осталарына таҡҡан алтын алҡалары, яңы тыуған ай шикелле, күҙҙе иркәләй. Көмөш беләҙектәр менән биҙәлгән беләктәре аҡҡош ҡанатындай. Бармаҡ тәлгәшкәйҙәренең остарынан ҡына гөлдәре тамып торған төҫлө. Атлап йөрөүҙәре аҡҡош йөҙөп килгәндәй. Әгәр ҙә ул ауыҙ асып һүҙ әйтә башлаһа, иҙланып, шишмә шылтырап аҡҡан кеүек була. Ә инде йыр йырлаһа, кешеләр баҫҡан ерҙәренән ҡуҙғала алмай ҡатып ҡалалар. Шундай һылыу ул Аҫыл ҡыҙ!..

Бер саҡ йыйынға йыйынғандар. Бейек тау башы шығырым тулы халыҡ. Сит-ят ерҙәрҙән саҡырылған хандар ҙа, уларға эйәреп килгән егеттәр ҙә бар бында. Ҡарт-ҡоролар ҙа, бисә-сәсәләр ҙә, ҡыҙ-ҡырҡындар ҙа, бала-сағалар ҙа күп. Улар араһында тирә-яҡҡа даны таралған Арыҫланхан да бар. Уның бөтә бисәләре лә килгән. Һәр егеттең күңелен елкендергән һылыу ҡыҙы Аҫыл да бар.

Батырҙар көс һынаша. Ғәйрәттәрен, таҫыллыҡтарын күрһәтәләр. Мәргәндәр зыңлап торған әҙернә-йәйәләрҙән алыҫтан тороп, мәрәйгә уҡ атышалар. Егеттәр елеп һыбай үтәләр. Тик һәр ярыш-

та ибәтәйһеҙ бер хан улы Ҡарағаштың ғына алдына сыға алмайҙар. Уны бары бер ярлы ыҫпай егет Түләк кенә еңеп сыға.

Йыйындан һуң, Түләк үҙенең һөйгән айғырын менеп, яурынына йәндәй күргән ыласынын ҡундырып, һунарға сыға. Алғыр бүре һымаҡ, дала буйлап елдерә, тау-урмандар ҡыҙырып йөрөй. Шулай ҙа һунары бик сәйер уның: ыласынын кейек юҡта сөйә, ә кәрәк мәлдә сөймәй ҡала. Уйҙары бик алыҫта йөрөй унын. Ҡеүәтле Арыҫланхан ҡыҙынан башҡа, һылыуҙар һылыуы Аҫылдан башҡа бер көн дә йәшәй алмам, тип уйлай егет.

Аҫыл шул саҡ бейә һауа. Тик һылыу байталы уға һис тә буй бирмәй. Аҫыл уға яҡыныраҡ килеп, ҡороғон һалайым тиһә, байталы ситкә ҡайырыла ла китә. Әхирәттәре инде ана ҡайҙа, алыҫта, тороп ҡалған, ә бурылы уны һаман алға әйҙәп, теге текә ҡаштаҡ аҫтына төшөп юғала.

Аҫыл, ҡоралай һымаҡ атылып, ҡаштаҡ башына менһә, байталы шунда. Күрәһең, ялыҡҡандыр инде. Хан ҡыҙы тиклем хан ҡыҙын тыңламай ҙа булмай бит. Аҫыл уның эргәһенән килеп, ергә сүкәйеп ултыра ла, аҡҡош ҡанатындай йомшаҡ ҡулдары менән көмөш күнәген ҡуйып, хуш еҫле ап-аҡ һөттө һауа ла башлай. Үҙе һауа, үҙе уйлай ҡыҙ. Анауында, аҡ тирмәләр эсендә, данлы атаһы, оло мәжлес ҡороп, ҡунаҡтарын һыйлағайны. Ә теге шул тиклем ибәтәйһеҙ улы Ҡараҡаш менән бик алыҫтан килгән бай хан уның иң ҡәҙерле ҡунағы ине. Бик һыйлаштылар. Һый ашап та, эсеп тә бөткөһөҙ ине. Уйын-көлкө лә етерлек булды. Улар шулай ике аҙна буйы һыйландылар ҙа ҡайтып киттеләр. Хан үҙенең бүкән һымаҡ улы Ҡараҡашҡа һылыуҙарҙың һылыуы — Аҫылды ҡоҙалап китте. Ә Аҫылдың бөтә уй-хыялы бары тик Түләктә ине.

Шул саҡ ҡапыл тояҡ тауыштары ишетелә. Аҫыл һикереп тора ла һөтөн түгеп ебәрә, көмөш күнәге ҡулынан төшөп китә!..

Ҡараһа, алдында Түләк баҫып тора.

— Һаумы, Аҫыл һылыуым, — ти Түләк. — Ниңә аптырап ҡалдың? Минән башҡа һинең янға кем шулай ҡоштай оса тип беләһең? Көрәшемдән осҡан уҡ та әле сәнтән яҙлыҡҡаны юҡ. Көрәштә лә бил биргәнем булмаç. Мин бөтәһен дә еңеп сыҡтым, — ти. — Шулай ҙа һинән килеп еңелдем, — ти.

Ҡыҙ ҙа уға алҡымына килеп тығылған йөрәк һүҙен әйтеп ҡалырға ашыға:

— Түләгем! Батырым! Яратам һине! — тип егеткә һарыла.

Был көндән һуң күп көндәр үтә. Ике ғашиҡ күрешеп торалар. Аулаҡта ҡауышалар, һөйләшәләр. Төндәрҙән бер төндө, ҡауышын күктән йондоҙ һанашҡанда, яҡында ғына күҙҙәренә бер шомло шәүлә сағылып ҡала быларҙың.

Шул төндөң иртәһендә үк Арыҫланхандың әмере буйынса, даланағы өйөрҙән әле йүгән дә теймәгән ике аҫау айғырҙы арҡанлап килтерәләр. Тотоп тыйғыһыҙ, сапсынып, үрә ҡарғып торған аҫауҙар. Ә киҫкә табан ун бишләп егет ҡайҙалыр сабып сығып китә. Арыҫланхандың йөҙө ҡара янып, һөмһөрө ҡойолоп йөрөй.

Дөм ҡараңғы төн була. Күҙгә энә төртһәң дә күренмәҫлек. Һылыуҙарҙан һылыу Аҫыл тирмәһендә оло йәштәге ике еңгәһе йоҡлай. Оҙаҡ лабырлашып ятҡандан һуң, гүр йоҡоһо менән хырлайҙар. Ә егет менән ҡыҙ аулаҡҡа сығырға һүҙ ҡуйышҡан. Түләк таң атҡансы Аҫылын ҡая башында көтөп торасаҡ була.

Таң да һыҙылып ата башлай. Аҫыл керпек тә ҡаҡмай ятҡан еренән шым ғына тороп, бесәй һымаҡ, аяҡ остарына ғына баҫып, тирмәнән сығып тая. Күп тә үтмәй, ул ҡая башында, вәғәҙәләшкән урында була. Тик Түләге генә, ниңәлер, юҡ та юҡ.

Ҡая аҫтында тояҡ тауыштары ишетелә. Ат бышҡырып ҡуя. Шул саҡ атаһының тауышы килә. Шул!

— Аяҡтарын ҡойроҡҡа бәйләгеҙ, — ти ул. — Хәҙер аттарҙы үҙ иркенә ебәрегеҙ ҙә һыҙырығыҙ...

Ҡамсы шыйылдағаны ишетелеп ҡала. Ат тояҡтары тыпырлай. Ниндәйҙер шытырлаған, ниҙер шартлап һынған өндәр артынса йөрәкте өҙгөс тауыш ишетелә:

— Аҫы-ы-ыл!!!

Аҙаҡ был тауыш тауҙарға ҡаҡлығып, шаңдау булып яңғырай ҙа оҙаҡ-оҙаҡ һауала һарлығып тора.

Аҫыл төнө буйы ҡая башында була. Ул тыйыла алмайынса, башын таштарға ороп, үкһеп-үкһеп илай.

Аҙаҡ иҫенә килгәндәй, ятҡан еренән талпынып тора ла, тәнтерәкләп, ҡая ситенә барып баҫа. Унда, аҫта, ҡан күләүеге боҫрап ята. Түләгенең ҡаны. Күҙҙәрен йома ла, аҡҡош ҡанаттарын йәйеп, ул шунда һикерә:

— Хуш, яҡты донъя!

Шул саҡ ике ярһыу аҫау айғыр, иртәнге елгә ҡалғып ултырған ҡылғандарҙы йылы ҡанға буяп, Түләктең икегә ҡайырылған кәүҙәһен һөйрәп, ҡайҙалыр алыҫҡа елдерәләр.

Иртән кешеләр йоҡонан торһалар, ни күҙҙәре менән күрһендәр, ҡан күләүеге боҫрап ятҡан ҡая аҫтында зәп-зәңгәр ҙур бер күл барлыҡҡа килгән була. Күлде, Аҫыл һымаҡ матур булғанға күрә, Аҫылкүл тип атайҙар.

Был хәлдән һуң күпме ваҡыт үткәндер. Әммә ул күл һаман да бар. Уның хаҡында һаман да ошо хикәйәтте һөйләйҙәр. Бәлки, бер заман Аҫылкүлдең эҙе лә ҡалмаҫ, ә уның хаҡындағы хикәйәтте, моғайын, бер ҡасан да онотмаҫтар.

## 353. ТАҒАНТАШ

Борон заманда бер ярлы егет бай кешенең ҡыҙына ғашиҡ була. Ҡыҙ ҙа ғашиҡ икән, ти, егеткә. Егет, яусы ебәреп, ҡыҙҙы һоратҡас, бай ҙур ҡалым һорай, тик егеттең уны түләрлек хәле булмай. Егет икенсе тапҡыр яусы ебәргәс, бай:

— Ярар, улай булғас, мин уға ҡыҙымды бушлай бирәм, ә ул Тағанташ башына йорт һалһын, — тип әйтеп ебәрә. (Тағанташ бик текә, бағанамы ни! Уға тик бер яғынан ғына менеп була. Шуның өсөн дә уны Таған йәки Тағанташ тип йөрөткәндәр.)

Егет, ни хәл итһен, мөхәббәте хаҡына риза була. Тағанташ аҫтындағы битләүҙән ҡарағас ҡырҡып, өйләк бүрәнә әҙерләй. Шунан һуң нигеҙлек бүрәнәләрҙе мендереп, өйҙөң нигеҙен бурап ҡуя. Был хәлде белгәс, бай: «Нигеҙен мендергәс, башҡа бүрәнәләрен еңел мендерер», — тип уйлай. Ә иртәгеһен бер ялағай хеҙмәтсеһен саҡырып ала ла былай ти:

— Егет Тағанташҡа бүрәнә мендергәндә, күренмәй генә алдан мен дә арҡанды ҡырҡ.

Ялағай бай ҡушҡанса эшләй. Ҡыҙҙы алам тип, ғашиҡ утында янған егет һәләк була.

Ҡарттар һүҙенә ҡарағанда, ул нигеҙ ҡалдыҡтары яңыраҡ та һаҡланған булған.

## 354. ҠУМЫҘ

Башҡорттар малсылыҡ менән шөғөлләнгән заман. Бер байҙың мал көтөүсеһе үлеп киткән. Бының Бикбай исемле улы етем ҡалған. Йылдар үтеү менән Бикбай егет булып үҫеп етә. Уның эшен бай ҙа, күршеләр ҙә ярата. Бай уға үҙенең иң яҡшы аттарын да ҡарарға ҡушҡылай. Йәмле йәй көндәрендә йыш ҡына йәш егеттәр менән ҡыҙҙар аттарын матурлап, яҡшы эйәрҙәр һалып, ҡымыҙлыҡҡа сығыр булғандар. Ҡымыҙлыҡҡа барыу йәштәрҙең байрамына әйләнеп китер булған. Унда төрлө уйын ойоштороғандар, йырлағандар, бейегәндәр, ҡурай тартҡандар. Бикбайҙың да уйынға һәләте ҙур булған. Бер ваҡыт ул, саған ағасынан ҡумыҙ эшләп, бейеү көйҙәре уйнарға өйрәнә. Йәштәр ҡымыҙлыҡҡа йыйылғанда, уларҙы бейетә. Шуның өсөн был музыка ҡоралына ҡумыҙ тип исем бирәләр.

Байҙың Гөлйөҙөм менән Гөлсөм тигән ҡыҙҙары була. Улар икеһе лә Бикбайҙы ярата, унан ҡумыҙ эшләп биреүен һорайҙар. Бикбай бейеү көйҙәре уйнап, уларҙы бейетә, әммә ҡумыҙ эшләп бирмәй. Бикбайҙың һәләтлелеген күреп, бай уны үҙе менән бергә ҡала баҙарына алып барғылай. Бикбайҙың бай менән баҙарҙарға йөрөүе, унда бай ҡыҙҙары менән аралашыуы башҡа ҡыҙҙарға оҡшап етмәй. Шуның өсөн, ҡымыҙлыҡҡа барғанда, уға төрткө йырҙар йырлайҙар.

Ул ҡуянды атмағыҙ,
Ҡаны юҡтыр, аппағым.
Ул егеткә ғишыҡ тотма,
Малы юҡтыр, аппағым.
Шыуып, шыуып бейемәгә
Шыма иҙән булһа ине.
Шыма иҙән өҫтәрендә
Быяла өҫтәл булһа ине,
Быяла өҫтәл өҫтәрендә
Сын-сынаяҡ булһа ине,
Сын-сынаяҡ эстәрендә

Сабаҡ балыҡ булһа инс,
Сабаҡ балыҡ ҡырҡырға
Үткер бәке булһа инс.

Бер ваҡыт Бикбайҙы йыйынға саҡыралар. Унда Бикбай үҙенең ҡумыҙын уйнап, ҡыҙҙарҙы бейеткән саҡта, байҙың оло ҡыҙы Гөлйөҙөм унан күҙен алмай ҡарап тора. Бикбайға ла Гөлйөҙөм оҡшай. Үҙенең тойғо билдәһе итеп Бикбай Гөлйөҙөмгә ҡумыҙын бүләк итә. Быны күреп торған байҙың кесе ҡыҙы Гөлсөм көнләшеп ҡуя. Ул ҡайтып әсәһенә ошаҡлай. Был хәлгә байҙың да бик асыуы килә. Улар Бикбайҙы йорттан ҡыуып сығарырға уйлайҙар. Бикбай ҡумыҙҙы үҙем эшләмәнем, Бикбау исемле ҡарттан алдым, унан уйнарға өйрәндем, тип яуап бирә.

Шул ваҡыттан бирле ҡумыҙҙа уйнала торған, халыҡ араһында киң таралған бейеү көйөн «Бикбау көйө» тип йөрөтәләр.

## 355. ЫНЙЫҠАЙ МЕНӘН ЮЛДЫҠАЙ

Был хәл бик күп йылдар элек булған. Бөрйән ырыуының бейе Ҡарағөләмбәттең Ынйыҡай исемле һылыу ҡыҙы булған. Ынйыҡай икенсе ырыу егете Юлдыҡайҙы ятраҡан. Ул егет Үҫәргәнме, Ҡыпсаҡ ырыуынанмы булған. Юлдыҡай Ынйыҡайҙы һоратып яусылар ебәрһә лә, Ҡарағөләмбәт бик оҙаҡ ҡарыулашып маташҡан. «Минең теләгемә ирек ҡуймаһаң, йә үҙемде үҙем һәләк итәм, йә Юлдыҡай ырыуына ҡасып китәм», — тигән Ынйыҡай атаһына. Ҡарағөләмбәт уйлап-уйлап торған да ҡыҙын Юлдыҡайға бирмәк булған. Ҙур туй әҙерләнгән. Ике ырыуҙан да бик күп халыҡ йыйылған.

Майҙан ҡороп ат сантырғандар. Батырҙар көрәштергәндәр. Уҡ аттырғандар. Йырсылар, сәсәндәр әйтешкән. Ҡотан ауылы эргәһендә Көрәй менән Туйбаға исемендәге ике тау бар. Көрәй тауында көрәгә күтәргәндәр, шуға ла Көрәй (көрәгә) аталған. Ә Туйбаға тауында туй баҡҡандар [1]. Шуның өсөн Туйбаға аталып ҡалған.

Ошо туй ваҡытында «Ынйыҡай менән Юлдыҡай» тигән йыр сыҡҡан. Туйбаға менән Көрәй тауҙарына аҙаҡ та кешеләр сығып байрам итер булғандар.

## 356. АШҠАҘАР

Бер башҡорт түрәһенең бик иркә генә бер ҡыҙы булған. Был түрәнең мәжлесендә булһын, башҡа эштәрендә булһын — бик яҡын күргән бер дуҫы, бай башҡорт бар икән. Был байҙың бер улы менән ҡыҙы булған. Улы ҡыҙынан ике йәш оло икән. Былар йәш саҡта түрәнең ҡыҙы менән бергә уйнап, бергә үҫкән. Ҡыҙҙар икеһе бер йәштә булып, хатта бер көндә, береһе таң ваҡытында, икенсеһе көндөҙ тыуған икән. Түрә ҡыҙын таңда тыуғанлыҡтан

Таңһылыу тип, ә бай ҡыҙын көндөҙ тыуғанлыҡтан Көнһылыу тип исемләгәндәр. Бай улы йома көнө тыуғанлыҡтан Йомағол исемле икән. Был өс бала бер ғаилә балалары кеүек бергә уйнай, бергә йөрөр булғандар, ти. Былар матур Ашҡаҙар буйҙарының йәйләүлектәре араһында йәй көндәре күсмә тирмәләр ҡороп, күсеп йөрөгән. Балалар ҙа үҫкән. Ҡыҙҙар ун дүрткә, Йомағол ун алтыға еткәс, Йомағол менән Таңһылыуҙың күңелендә мөхәббәт уяна. Был серҙәрен улар йыр менән аңлатышыр булған. Таңһылыу бик моңло йырсы булып үҫкән. Күп ваҡыт бейә һауғанда, бәйле торған ҡолондарҙы күреп, үҙен дә шулар кеүек, ата-әсә ҡулында бәйле һанап, әҫәрләнеп, моңланыр булған. Ваҡыт-ваҡыт күңеле килләсәген һиҙгән кеүек, нескәреп, үкһеп-үкһеп илай икән был.

Йомағол Ашҡаҙар буйында йома көн тыуғанлыҡтан йырҙарының күбеһенә «Ашҡаҙар», йә «йома көн» һүҙҙәрен ҡушып йырлаған.

Ашҡаҙар буйының матурлығына һоҡланыу тойғоһо Таңһылыу күңеленән дә йыр булып ағылған:

Төрлө лә генә йылҡы төшөп килә
Ашҡаҙарҡай буйы тауынан.
Нурлы ғына ҡояш ҡотолоп килә
Төндөң заламат атлы яуынан.

Ҡыҙының моңланғанын атаһы ла һиҙеп ҡала. Ғишыҡ ауырыуы барлығын аңлап, үҙенең эпеһе Күсәрбайҙың ҡатыны арҡылы хәлде асыҡларға була был. Күп тә үтмәй Күсәрбай ҡатыны Яҡшыбикә Таңһылыуҙың мөхәббәте кемдә булыуын һөйләп бирә. Түрә үҙ ҡыҙын ярлы кеше балаһына биреүҙе мыуафиҡ күрмәһә лә, ҡыҙы Таңһылыуҙың теләгеп һәр нәмәнән артыҡ һанап, хәлде Йомағолдоң атаһына белдергән. Был ваҡыт Таңһылыуға ун һигеҙ, Йомағолға егерме йәш булған. Май айында быларҙың никах туйҙары үткән. Башҡорттарҙа борон замандарҙа никахтан һуң уҡ зафаф булмай ине. Уға тиклем байтаҡ ҡына ваҡыт үтер булған. Бына шундай бер арала, ҡыш һунар ваҡыты еткәс, Йомағол тураҡына менеп, һунарға киткән. Һунарҙа йөрөгәндә, бер шәшкене күреп, Ашҡаҙар боҙо өҫтөнән аша сығып барғанда, боҙ ярылып, аты менән батып, һәләк булған Йомағол. Уның һунарҙан ҡайтмауы бер ниса көн буйы күңелдәргә шик һалған, оҙаҡламай кейәүҙең һыуға батып үлеүе хәбәре лә ишетелгән. Был ҡайғыны Таңһылыу бик ауыр кисергән. Ҡайғы-хәсрәт күрмәй наҙлы үҫкән ҡыҙ бала һөйгәненең үлем хәбәрен ишеткәс, һуштан яҙып йығыла. Ике ғаиләнең ҡайғырыуҙары, үкһеп-үкһеп илауҙары ғәрешләргә сыҡҡандай була, бөтөн тирә-яҡты ҡайғы баҫа. Таңһылыу һушына килгәс тә, бик күп илай әле. Бер заман атаһына: «Мин иптәш ҡыҙҙарымды йыйып күңел асыр инем», — тигән ул. Һарыҡ көтөүсе арҡылы болондан бөтөн серҙәш ҡыҙҙарын саҡырып килтергәс, Таңһылыу уларҙан Йомағолға бағышлап, бер көй сығарыуҙарын үтенгән.

Бары башҡорт йөрәгенән генә сыға торған көйҙәр йырлана,

тик уларҙың береһе лә Таңһылыуға оҡшамай. Шунан һуң Таңһылыу, күҙҙәренән ҡайнар йәштәр тамыҙып, уй һәм илһам менән хәҙерге «Ашҡаҙар» көйөнә ошо йырҙы йырлап, иптәштәрен таң ҡалдыра:

Иртәнсәккәй тороп сығып киткән
Ашҡаҙарҡай буйы шәшкегә.
Һыуға ғына батып вафат булғас,
Башҡынайым ҡалды йәш кенә.

Бер ҙә хәсрәт күрмәгән Таңһылыу был ҡайғыны күтәрә алмаған. Уның гөл кеүек йөҙҙәре шиңә, күҙҙәре эскә бата, бармаҡтары нәфислеген юғалта. Ҡайғынан был тамам хәлһеҙләнеп, түшәккә йығыла. Ҡипкән ирендәренә бал ҡашығы менән һыу тамыҙып ҡына торғандар ата-әсәһе. «Вәғәҙәһен тотоп, Йомағол янына ашығыуы шул икән», — тип уйлаған улар. Бер көн таң атыуға Таңһылыу һис бер кер төшмәгән биш ҡат аҡ күлдәген кейеп, Йомағол янына ҡәбер ятағына китә.

## 357. ҠАРАСАЙ

Күп йылдар элек, Иҙел яғынан Юлдыҡай исемле һунарсы ғаиләһе менән Ғәҙелша ауылына күсеп килә. Уларҙың берҙән-бер Ҡарасай исемле ҡыҙҙары була. Ул ҡыҙ бик үткен, аҡыллы һәм шаян булып үҫә. Аталары ҡайҙалыр икенсе ауылға ҡунаҡҡа китә. Ҡыҙҙар һәр ваҡыт тау башына сығып күңел асҡандар, уйнағандар. Бындай уйындарҙы һәр ҡасан Ҡарасай башлап йөрөгән. Шулай итеп, аталары киткәс, Ҡарасай кисен үҙ өйөнә ҡыҙҙарҙы йыя. Был өйҙә Ҡарасайҙың өләсәһе лә була.

Байтаҡ ҡына уйнағас, ҡыҙҙарға белгертмәй, Ҡарасай тунды әйләндереп кейеп тыштан тәҙрәгә ҡарай, ҡарындыҡты тырнай. Өйҙәгеләр бик ныҡ ҡурҡышалар. Ул сыуалдан төшмәк булып, солан башына менә лә, эскә ҡарай ырғый. Унда өләсәһе ырым буйынса ҡуйған салғыға төшөп киҫелә һәм үлә. Уны күреп өләсәһе лә үлә. Ошо ҡыҙға арнап сығарылған «Ҡарасай бәйете» лә бар.

## 358. ҠАРАСӘС

Күп йылдар элек Ағиҙел буйында йәшәгән фәҡир генә бер кешенең Байғужа исемле улы булған.

Байғужа үҙенең үткерлеге, етеҙлеге менән башҡа йәштәрҙән айырылып торған. Егет ҡорона етә башлағас, ҡурай уйнарға оҫтарып алған. Ҡайҙа йәштәр уйыны — Байғужа шунда. Уларҙы ылыҡтырып, ойоштороп йөрөгән. Тирә-яҡтағы ауылдарҙа йыйын йәки һабан туйҙары уҙғарылғанда, Байғужа уртала була икән.

Шулай бер һабан туйында ҡатын-ҡыҙҙарҙың йыр, бейеү ярышы барған. Шунда күрше ауылының Ҡарасәс исемле ҡыҙы тәү тапҡыр майҙанға сыға. Байғужаның ҡурайҙа уйнай башлауы бу-

ла, Ҡарасәс уға ҡушылып йырлап ебәрә. Ҡарасәстең моңло тауышын ишетеп, халыҡ таң ҡала. Уны бер нисә тапҡыр йырлаталар. Беренсе бүләк Ҡарасәскә бирелә.

Йырсыларҙан һуң бейеүселәр ярыша башлай. Байғужа ҡурайын тартып ебәрә. Ҡарасәстең йырҙа ла, бейеүҙә лә беренселекте алыуында Байғужаның да ҡатнашы ҙур була. Шунан һуң Ҡарасәс менән Байғужаның даны тирә-яҡҡа тарала.

Бер көн егеттең атаһы улын саҡырып ала ла әйтә:

— Байғужа, хәҙер һин егет ҡоронан уҙып бараһың, башлыҡүҙле булырға ваҡыт, — ти.

— Ата-әсә һүҙенән сығып булмаç, — ти Байғужа. — Ана шул даны таралған Ҡарасәсте йәрәшегеҙ.

Туй була. Ҡарасәсте алып ҡайталар. Байғужа менән Ҡарасәс, башҡа сығып, донъя көтә башлайҙар.

Ҡарҙар ирел, ауылдағы яҙғы эштәр бөткәс, Байғужа, ҡатыны Ҡарасәс менән хушлашып, Ағиҙел башына ҡыуғынсылыҡҡа сығып китә.

Ҡыуғынсылар ҡыш буйына әҙерләп ҡуйған бүрәнәләрҙе йылғаға төшерәләр ҙә улар артынан үҙҙәре лә һыу буйлап юлға сығалар.

Ҡомға, батҡаҡҡа батып ҡалған бүрәнәләрҙе туҡтап-туҡтап багор менән һөйрәп һыуға төшөрәләр. Шунда быуындан быуынға, ҡыуғынсынан ҡыуғынсыға күсеп килгән йыр менән эшке дәртләндереп ебәрәләр.

Айһайлук, трайләйлук тә, һоп,
Ҡарағай баралмай ҙа, һоп,
Баралмай тип ҡалдырмайыҡ, һоп,
Һәйҙишеү, һәйҙишеү...
Ҡарағай баралмай ҙа, һо-о-о-п!
Баралмай тип ҡалдырмайҙар, һо-о-о-п!..
Ҡарағай кандауай ҙа, һо-о-о-п!..
Ҡарағас ауыр ағас, һо-о-о-п!..
Тартабыҙ шул баралмағас, һо-о-о-п!..
Ҡарағас сайырлы ағас, һо-о-о-п!..
һо-о-о-п!...

Ҡояш байып, ҡараңғы төшә башлағас, ҡыуғынсылар араһында уйын-көлкө башланып китә. Бер ҡыуғынсы, беҙҙең яҡта «тәритләү» бар, тип һамаҡлап, бейергә төшөп китә.

Ҡайҙа дәри-ҙирән,
Тири-ҙәри-ҙирән,
Тирә-рәттел-литирән.
Тәри-тәри-тирән,
Тәррә-рител-литирән,
Тәррә-рәтел-литирән,
Эшкәлиге биш капик,
Лимоны алты капик,
Бутылкаһы сурыҡтыр,
Килгән берен һурып тор.

— Һеҙҙең яҡта быңдай «тәритләү» булһа, беҙҙең «диңгелдәү» бар, — тип тағы икенсеһе бейергә төшөп китә.

Диңгел-диңгел-дәлләләү,
Диңгел-диңгел-дилләләү,
Диллә-диллә-дилләләү,
Диллә-диңгел-диллә-дәү.
Улай итербеҙ әле,
Былай итербеҙ әле,
Ел өҫтөнә ҡабыҡ ҡуйып,
Донъя күтәрбөҙ әле.
Ары ситән өҙөгө лә,
Бире ситән өҙөгө,
Ҡулыңдағы ҡашлы йөҙөк
Ҡайһы ҡыҙҙың йөҙөгө?

Ана шулай ҡыуғынсылар «тәритләп», «диңгелләшеп», «һоп та һоп!» килеп йылға ҡыҙырып барған саҡта, затор була. Ағып килгән бүрәнәләр, йылға уртаһындағы берәй ташҡа һуғыла ла, берененң өҫтөнә икенсеһе бәрелеп, тау һымаҡ өйөлөп китә.

Ҡыуғынсылар күмәкләшеп заторҙы ебәреү эшенә тотоналар. Быңдай ваҡытта уларҙы йылға буйындағы ауылдарҙа йәшәгән кешеләр килеп ҡарап тамаша ҡылалар. Ҡыуғынсыларға дәрт биреп йырлашып та алалар. Ялҡау эшләһәләр, көлөп мыҫҡыллайҙар. Ҡыуғынсылар ҙа һүҙһеҙ ҡалмай үҙҙәренең данлыҡлы йырҙарын һамаҡлайҙар:

Айһайлүк, трайләйлүк тә, һоп,
Гөльямал, Миңлеямал, һоп,
Әйткән һүҙең бик яман шул, һоп,
Ҡарағай баралмай ҙа, һоп,
Баралмай тип ҡалалмай, һоп,
Ҡарағай кандауай ҙа, һоп,
Ҡарағас ауыр ағас, һоп,
Ҡарағас сайырлы ағас, һоп,
Тартабыҙ шул бармағас, һо-о-оп!
Аҡ яулыҡ, зәңгәр шәл дә, һоп,
Үтә ғүмер бигерәк йәл дә, һоп,
Факиһа, Фатима ла, һоп,
Егетең килер, йоҡлап ятма, һоп!
Гөлгөнә, һин бер генә, һоп,
Һөйәм һине мин генә лә, һоп!
Ҡарағас йәш ағас шул, һоп,
Һөйөрмө бер ташлағас, һоп!
Ҡарт Егор, тот багур, һоп,
Ҡарт Ғәфүр, тарт бугарҙы, һоп! [1]

Улар ошолай мәрәкәләшеп, әйтешеп, йырлашып, заторҙы ысҡындырып ебәрәләр.

Ана шундай мәрәкәле эш ваҡытында бер саҡ тауыш ҡуба:

— Бер кешегеҙ харап булды, тиҙерәк ҡотҡарығыҙ! — тип ҡысҡыралар.

Шул саҡ атылып-атылып аҡҡан бүрәнә араһынан кемдендер бүреге генә күренеп ҡала. Шаулап торған һыу буйы тын ҡала. Бик күп эҙләгәндән һуң, Байғужаның үлек кәүҙәһен яр башына сығарып һалалар. Шул урынға Байғужаны ерләп ҡуялар ҙа, бәхилләшеп, ҡыуғынсылар тағы һыу буйлап алға китәләр.

Ҡарасәс бер нисә йыл тол булып ултыра. Тирә-яҡтан уны һоратып күп кенә яусылар килеп теңкәһенә тейәләр. Ҡилгән берен кире ҡайтарып тора. Шулай ҙа Ҡарасәсте бик яҡшы белгән бер ир, күҙгә-күҙ ҡарашып һөйләшеү өсөн, уның янына үҙе килә. Ҡарасәсте ул йыр менән әүрәтмәк була.

Ир әйтә:

Ҡара сәскәйеңдең толомдарын
Өстән үреп, сулпы таҡҡанһың.
Өс яусым да яулап кире ҡайтты,
Ҡабул итмәй кире ҡаҡҡанһың.

Ҡарасәс яуап бирә:

Яусыларың ҡайтты, һис ҡаҡманым,
Ояллым шул вәғәҙә бирергә,
Яусылатып барыр түгелмен ҡыҙ,
Теләһәм дә һине күрергә.

Ир әйтә:

Семәрле лә сана, сем үрәсә,
Рөхсәт итсе, үтәм түргәсә.
Вәгәҙәнде алһам, теләк була,
Булырбыҙ, тим, бергә гүргәсә.

Ҡарасәс әйтә:

Семәрле лә сана, сем үрәсә,
Үрәсәгә баҫып һөйләшә.
Һөйләшеүкәйҙәрең, һай, ғәҙәтсә,
Күҙ ҡарашҡайҙарың әҙәпсә.

Ир әйтә:

Урамдарҙан үтә, юлдар түтә,
Семәрле лә сана көн дә үтә,
Һөйгән генә йәрең зирәк булһа,
Ғүмерҙәрең зәүерҙә үтә.

Ҡарасәс әйтә:

Төштәремдә күрҙем килеренде,
Әллә мин дә булдым күрәҙә.
Йондоҙлама һалдым, дөрөҫ төштө,
Инде, бәгерем, бирәм вәғәҙә.

Тол ир, тол Ҡарасәс менән туй уҙғарып, икенсе бәхеттәрен табып, донъя көтөп киткәндәр.

## 359. КӘМИЛӘ

Мин бәләкәй саҡта беҙҙең ауылдың байы Исмәғил ҡарттың Кәмилә исемле бик һылыу ҡыҙы бар ине. Тирә-яҡтағы бөтә егеттәрҙең күҙе ана шул Кәмиләгә төшә торғайны. Күптәр Кәмиләнең ҡулын һорап ҡараны, береһенә лә риза булманы.

Элек ҡыҙҙы кейәүгә биргәндә, унан ризалыҡ һорамай торғайнылар. Кәмиләнең атаһы, кем һораһа ла, тәүҙә ҡыҙының риза булыу-булмауын белешкән.

Ер-һыу ҡороғас та, ауыл халҡы һарыбайталға күсте. Беҙҙең йәйләү шулай атала торғайны. Яландың уртаһынан йылға аға. Кәмиләнең атаһы тирмәһен йылғаның аръяғына ҡора торғайны. Йәйләүҙә ваҡыт тиҙ уҙа. Кис булһа, йәш-елкенсәк тауға сығып уйнай. Ҡайһылары ат сабыштыра, ҡайһылары көрәшә, ҡайһылары ҡурай тарта. Йәш егеттәр Кәмилә алдында үҙҙәрен өҫтөн күрһәтергә тырыша торғайнылар. Ҡыҙ ул егеттәргә бер ҙә иғтибар итмәй. Бойоҡ ҡына ҡарап йөрөй торғайны ул. Үҙе һәр саҡ яңғыҙ була. Йәштәш ҡыҙҙары кейәүгә сығып, бала-сағалы булып бөттөләр. Кәмилә һаман кейәүгә сыҡмай йөрөй бирә. Бының сәбәбен белеүсе кеше булманы.

Еләк, әберсә, көртмәле бешһә, әбейҙәр емешкә йөрөй башлай. Ҡайһы бер әбейҙәр, башҡаларҙан ҡыҙғанып, яңғыҙ ғына китеүсән булалар. Иртүк тороп, кеше күрмәгәндә генә сығып китәләр ҙә кисләтеп ҡайтып инәләр.

Еләк бешкәс, Базый әбей Кәмиләне көртмәлегә алып киткән. Ҡыҙҙың күңеленә шик төшмәһен тип, алда барғанда үҙе хәбәр һөйләй икән:

— Бына, ҡыҙым, мин ҡартайҙым, тиҙҙән үлер сағым да етә, мин белгән көртмәлектәрҙе бер кем дә белмәй. Шуға һине алып барып күрһәтеп ҡалайым, тим.

Барып еткәндәр. Көртмәле шул хәтле күп, ти, аяҡ баҫырлыҡ урын юҡ, ти. Келәм кеүек түшәлеп ята, ти. Туйыҙҙар тула башлағас, әбей:

— Анауында ғына барып киләм, һин ултырып тор, — тип урманға инеп китә.

Кәмилә көртмәле тиреп ҡала. Байтаҡ ҡына ваҡыт уҙа, ҡарсыҡ юҡ. «Базый инәй! Базый инәй!» — тип ҡысҡырып та ҡарай. Әбей юҡ та юҡ. Ҡыҙ ҡурҡа төшә. Ҡайтайым тиһә, юлын белмәй. Шул саҡ, ат тояғы тупылдаған тауышҡа артына боролоп ҡараһа, башына бөркәнсек ҡаплаған ҡаҫҡы ултыра, ти, ат башында. Һушһыҙ булып йығыла ла ҡуя был. Теге кеше һушһыҙ Кәмиләне эйәрҙән төшмәй генә күтәреп ала ла, китә лә бара.

Байтаҡ ваҡыт үткәс, ағас араһынан Базый әбей килеп сыҡҡан да: «Уф алла, ҡотолдом. Бынан һуң был көртмәлеккә, биллаһи, аяғымды баҫмаясаҡмын», — тип ҡайтып киткән, тиҙәр.

Элекке бер килгәнендә Базыйҙы әлеге ҡаҫҡы тотоп алған да: «Бер һылыу ҡыҙ табып бирмәһәң, үлтерәм», — тип ҡурҡытҡан икән. Ҡурҡыуынан әбей вәғәҙә иткән була.

Кэмилэ, шулай итеп, юҡ була. Иртэгеhенэ бөтэ ауыл сығып эҙлэй. Таба алмайҙар. «Базый ҡарсыҡ алып барып, ҡасҡыға биргэндер», — тип уйларға кемдең башына килhен? Йэ hыуға батҡандыр, йэ ҡасып киткэндер, йэ берэй ҡош-ҡортҡа тап булғандыр тип, халыҡ онота башлаған.

Көҙгө hалҡындар төшөүгэ, халыҡ ҡышлауға күсэ. Кешелэр hуғым hуя. Бер-берейhен ҡунаҡҡа саҡырыша башлай. Бер көндэ кискэрэк Исмэғил ҡарттың арт ҡапҡаhына бер ат килеп туҡтай. Аттың килеп туҡтауы була, өҫтөндэге кешеhе шыуып ҡына аттан ҡолап та төшэ. Тауыш-тыны юҡ. Ат эйэhен еҫкэп тора-тора ла кешнэп ебэрэ. Исмэғил байҙың эте өрэ башлай. Сығып ҡараhалар, Кэмилэ ята. Үҙе ябыҡҡан, күҙҙэре эскэ батҡан, йөҙө йэмhеҙлэнгэн. Хатта сэсенэ сал төшэ башлаған, ти. Ауыр итеп ыңғырашҡан тауышы ғына бар, ти. «Кэмилэ! Кэмилэ! Ҡыҙым тор!» — тип эйтеп ҡарайҙар икэн, торорға хэле юҡ. Шунан атаhы ҡыҙын күтэреп өйөнэ кертеп hала.

Икенсе көндө генэ Кэмилэ иҫенэ килгэн. Иҫенэ килhэ лэ, бер ни ҙэ hөйлэй алмаған. Бер аҙналай ваҡыт үткэн, тамам айнығас ҡына үҙе менэн ни булғанын hөйлэп биргэн.

Исмэғил бай эбейҙе саҡырып hорай. Эбей ҡурҡыуынан уҡына-уҡына килеп инэ. Эбейҙең тупhаны ашатлап инеүе була, Исмэғил: «Йэ, hөйлэ, юха!» — тип, ҡамсы менэн элэктереп тэ ала. Туҡмап-туҡмап, hуҙып hалып ҡуя. Тыйыусы булмай. Эбей иртэгеhенэ үк йэн биргэн.

Кэмилэ лэ элекке хэленэ ҡайта алмай. Электэн дэ ситлэшеп йэшэгэн ҡыҙ хэҙер кеше күҙенэ бөтөнлэйгэ күренмэҫ була. Таңдарын ана шул таштың өҫтөндэ Кэмилэнең моңайып йырлап ултырғанын күреүселэр булған. Шулай ҡайғырып, hарғайып, ул ҡыш башына тиклем йөрөнө. Аҙаҡтан юҡ булды. Уны шул таштан сыйҙым өҫтөнэ hикереп төшэп үлгэн, тинелэр.

Аҙаҡтан халыҡ был ташты Кэмилэ ташы тип йөрөтэ башланы. Күп кешелэргэ таныш ошо йыр ҙа Кэмилэ тураhында ул:

Кесе Инйэркэй буйы, ай, эрэмэ,
Эрэмэhеҙ юҡтыр йэме лэ.
Яуыз ҡарсыҡ Базый этлегенэн
Эрэм булды бахыр Кэмилэ.

## 360. КӨНҺЫЛЫУ ЯҘМЫШЫ

Элек Абдулла исемле ҡомhоҙ бер бай йэшэгэн. Йөҙэрлэп умартаhы, көтөү-көтөү малдары булған бынын. Бай үҙе ҡарун, үҙе уҫал булған.

Бер ваҡыт Абдулла бай тау яҡтарына алтынсы бисэлеккэ кэлэш эҙлэргэ сығып китэ. Көнhылыу исемле бер hылыу ҡыҙҙың hыуҙан ҡайтҡанын шым ғына hағалап тора ла эйтэ:

— И-hи-hи, үҙең матур ғынаhың, нишлэп эрэм булып йөрөйhөң? Иртэгэ үк яусы ебэрэм, бисэлеккэ кил миңэ, — ти.

Көнһылыу ҡурҡып, йүгерә-йүгерә ҡайтып китә. Иртәгеһен, ысынлап та, яусы килә. Абдулланың бер бот балы менән бер түшкә итенә алданып, атаһы Көнһылыуҙы һатып ебәрә.

Көн артынан көн үтә. Көнһылыу бай йортона бер аҙ эйәләшкәндәй була. Тик байҙың өлкән бисәләре һис тә тынғылыҡ күрһәтмәйҙәр, ти, уға. Көнһылыу *көндән-көн кибә*, һарыға һабыша, тыуған яғын, ата-әсәһен, туғандарын һағынып илай.

Бер көндө Абдулла бай ҡалаға йомош менән китергә була. Шул саҡ бик ҡыйыу уй төшә Көнһылыуҙың башына. Ире сығып китеү менән, Көнһылыу бик яҡшы ҡола айғырҙы менә лә тыуған яҡтарына ҡасып сығып китә. Бер аҙҙан бының ире ҡайтып төшә, эштең ниҙә икәнен аңлап, Көнһылыуҙың артынан ҡыуа сыға. Ауылына етеп барған саҡта ғына Көнһылыуҙы ҡыуып етә. Инде эләктерәм тигәндә генә, Көнһылыу боролоп, тауға менеп китә. Төшөп айғырын ебәрә лә, үҙе бейек тау башынан һикерә. Һуңынан уның кәүҙәһен килеп алалар һәм ауылға алып ҡайтып, тәрбиәләп күмәләр.

Революция сыҡҡас, Совет власы урынлашҡас, ауыл халҡы Абдулла байҙы тотоп төрмәгә оҙата, байлығын үҙ ҡулына ала.

## 361. САБИРА (ЕҘ ҮКСӘ)

Борон заманда бер ауылда бик һылыу бер ҡыҙ йәшәгән. Ул Сабира исемле ҡыҙ булған. Ул һәр ваҡыт еҙ үксәле семәрле итек кейеп йөрөй торған булған. Ике оҙон сәс толомо еҙ үксәһенә етеп торор булған. Үҙе оҫта бейеүсе лә, йырсы ла икән, ти Сабира.

Бер саҡ шулай күрше ауылдың бер егете ҡыҙ күҙләргә Сабиралар ауылына килеп төшә. Атын уйнатып, урамды өсөнсө тапҡыр үткәнендә, кемдер берәү ҡойма аша был егеткә ҡар йомарлап ата бит. Егет ҡойма янына атылып килеп ҡараһа, ни күҙе менән күрһен, иҫ киткес һылыу ҡыҙ тағы ла ҡар йомарлап тора икән. Егет шул саҡ йырлап ебәргән:

Мин урамдан үткән саҡта,
Ҡар йомарлап, ниңә аттың?
Бер атманың, ике аттың —
Йәш йөрәккә ут яҡтың.

Сабира ла йыр-таҡмаҡҡа оҫта булған. Егет йырына йағаш ҡына килтереп яуап биргән:

Ат уйнатып үткәнеңдә,
Теҙгенеңде ник тарттың?
Атҡынайыңды туҡтатып,
Минең яҡҡа ник баҡтың?
Бер баҡманың, ике баҡтың —
Йөрәгемә ут яҡтың.

Иртәгеһенә үк егет, ҡыҙҙы һоратып, яусы ебәрә. Тик Сабираның атаһы ҡыҙын биргеһе килмәй. Шунан егет яусыны икенсе, өсөнсө тапҡыр ебәрә. Һуңғы ебәргәнендә: «Әгәр бирмәһәләр, ҡыҙҙы урлап алам», — тип ишеттерә. Ни эшләһендәр? Ризалыҡ бирәләр.

Ҙур мәжлес йыйғандар, бәйге үткәргәндәр. Алыҫтан ат, яҡындан тай саптырғандар. Көрәшкәндәр, йүгерешкәндәр. Йырлағандар, таҡмаҡ әйткәндәр. Сабира үҙе лә шунда төшөп бейегән. Үҙе бейей икән, үҙе әлеге таҡмағын әйтә икән.

Теҙгененде ник тарттың,
Минең яҡҡа ник баҡтың?
Бер баҡманың, ике баҡтың —
Йәш йөрәккә ут яҡтың.

Шунан бирле уның көйө «Сабираҡай» исеме менән халыҡ араһына таралып китә. Ҡайһы бер ауылдарҙа был көйҙө «Еҙ үксә» тип тә йөрөтәләр.

## 362. ЮЛҒОТЛО

Юлғотло бәләкәйҙән үк бик теремек малай булған, ай үҫәһен көн үҫеп, бик тиҙ егет ҡорона ултырған. Атаһы уны йәштән үк һунарға өйрәткән булған.

Көндәрҙән бер көндө һунарҙа йөрөгәнендә, быға ике һылыу ҡыҙ тап була.

— Ни эшләп йөрөйһөгөҙ? — тигән Юлғотло быларға.

— Еләккә килдек, — тиҙәр тегеләр, — ә һин үҙең ни эшләп йөрөйһөң?

— Мин һунар тотам, — ти егет, — төлкө атам, ҡуян тотам.

— Мә, ағай, еләк аша, — тиҙәр ҡыҙҙар.

— Миңә еләгегеҙ кәрәкмәй, үҙегеҙ кәрәк, — ти ҙә Юлғотло ҡыҙҙарҙың береһен тотоп та ала. Икенсеһе ҡурҡышынан ҡысҡырып ауылға ҡаса.

Алып ҡалған ҡыҙҙы Юлғотло өйөнә алып ҡайта. Ауыл халҡы йыйылып хөкөм итәләр. Ҡыҙ әйтә:

— Мин унан ҡалмайым, — ти.

Шул ерҙә ике йәшкә фатиха бирәләр. Шунан йыр сыға:

Аяҙҙа ла түгел, ай, болотло,
Һыу буйына сыҡты ла Юлғотло.
Моңайып та ғына йөрәй торғас,
Ике матур ҡыҙға юлыҡты.

Ҡыҙҙар күргәс, ҡурҡып ҡасыр инем —
Йәш йөрәгем менән дә бүркем бар.
Ҡалған яғын үҙең беләһендер,
Хөкөм итһәң, кантон, иркең бар.

Шул көндән алып был йыр «Юлғотло» тип атала.

## 363. ТОҠАН БАТЫР

Тоҡан батыр көрәштә бик көслө була. Бөтә өйәҙҙә бер батыр ҙа уға ҡаршы сыға алмай. Сыҡһа ла, уны ташлай алғандары булмай.

Был ваҡыт кантон башлығы булып Ҡолойҙоң[1] улы Абдулла тора. Кантон башлығы уны бер саҡ Уралдың теге (көнбайыш) яғына алып китә. Ундағы бик бай кантон башлығының бик оҙон буйлы бер көрәшсеһе була. Буйы өс аршынлыҡ икән.

Ике кантон башлығы, бәхәскә кереп, быларҙы көрәштермәксе булалар. Теге өс аршын батыр:

— Һин минең менән көрәшергә ҡурҡмайһыңмы ни? — тип һорағас, Тоҡан батыр уға:

— Әҙәм балаһы әҙәм балаһынан ҡурҡамы? — тигән, — ҡурҡһа, аллаһынан ғына ҡурҡа ул, — тип өҫтәгән.

Шунан былар көрәшә башлайҙар. Бик оҙаҡ көрмәкләшеп йөрөй торғас, Тоҡан батыр был өс аршын әҙәмде күтәреп ала ла ергә атып бәрә. Тегеһе сәмләнеп китеп тағы йәбешә.

— Әйҙә, яңынан көрәшәйек! — тип ныҡыша.

— Йығылған көрәштән туймаç. Шулай ҙа ир-егет бер көрәштә ике йығылмаç, — ти уға Тоҡан. Ә теге өс аршын бының биленән алып:

— Әйҙә, көрәшәйек! — ти.

Ә кантон башлыҡтары:

— Икеһе лә ир-арыçлан былар, икеһе лә һәләк булып ҡуйыр, — тип, батырҙарҙы саҡ айырып ҡалалар.

Шунан теге өс аршындың бик намыçы килеп, һигеҙ аршынлыҡ бүрәнәне һөйрәп килтергән икән, Тоҡан батыр бының бүрәнәһен күтәреп алған да ситкә ырғытҡан, ти.

## 364. КИНЙӘБАЙ

Беҙҙең Дим буйында дан тотҡан өс батыр булған: Ҡунаҡбай, Кинйәбай, Фәхретдин. Иң кеселәре Фәхретдин. Өсөһө лә бер ауылда, Сурай ауылында йәшәгәндәр.

Бер ваҡыт өсөһөн дә Ырымбурға йыйынга саҡырғандар. Ырымбурҙа улар бер татар байына фатир төшкәндәр. Таң атҡас, фатир хужаһы батырҙарҙы майҙанға алып барған.

Йыйын башлана. Тирә-яҡтан бик күп батырҙар килгән була. Көрәштең ҡыҙған сағында, егермеләп һыбайлы ҡаҙаҡ майҙанды ярып килеп керәләр. Барыһы ла ҡамсынан. Урталарында яланғас тәнле, оҙон буйлы, ағас билбаулы бер ҡаҙаҡ бәһлеүәне килә, ти. Уны сынйырлап арттан тотоп киләләр икән. Оло итеп кейеҙ йәйәләр, алдында бер ҙур табаҡ ит, көрәгә менән ҡымыҙ килтереп ҡуялар.

Көрәш яңынан башлана. Бер ни тиклем батыр һайланғас, теге ҡаҙаҡ батырын сығаралар. Ҡаҙаҡ батыры ун батырҙы бер ни

ише күрмәй атып бәрҙе, ти. Ҡайһылары имгәнеп бөттө. Шунан, көсләп, йәш батыр Фәхретдинде сығарғандар. Ҡаҙаҡ батыры быны ла йыға. Ҡунаҡбай сыға, уны ла йыға. Хәҙер Ҡинйәбайға сират етә. Ҡинйәбай ҙа теге ҡаҙаҡ батыры кеүек бик бәһлеүән була. Буйы ике аршын да ике ҡарыш икән. Ҡаҙаҡ батыры Ҡинйәбайҙы бер һуғыуҙа йыға. Икенсеһендә Ҡинйәбай бының яйын белеп алған да майҙан уртаһында өйөрөлдөрөп сөйгән. Ҡарап торған халыҡ: «Бар икән башҡорттоң бер батыры», — тип, Ҡинйәбайҙы аҡ кейеҙгә ултыртып күтәреп алғандар.

Беренсе батыр булып, Дим буйы башҡорто Ҡинйәбай килгән. Уны ике көн ҡунаҡ итеп ҡайтарып ебәргәндәр.

Был хәл сама менән 1880 йылдарҙа була.

## 365. АЛАСАБЫР

Элгәре Әлтәшле ауылында Бөрөк исемле ярлы ғына бер ҡарт йәшәгән, ти. Шул Бөрөк ҡарттың бик шәп бер йүгерек аты булған. Ул ат йыйындарҙа, бәйгеләрҙә бер генә йүгеректе лә алдына сығармаған. Йүгеректең төҫө ала булғанға, Бөрөк ҡарт уға Аласабыр тип исем биргән. Аласабыр хаҡында бөтөн ерҙә белгәндәр, уны маҡтап һөйләр булғандар. Хатта уның хаҡында Яйыҡ буйы ҡаҙаҡтары ла ишеткәндәр.

Бер ваҡыт Ырымбурҙа ҙур бер йыйын ҡорола. Был йыйынға һәр ырыу үҙенең батырын ебәрә. Сабыштырырға һәр ерҙән йүгерек ат алып баралар. Бөрөк ҡарт та Зөлҡәрнәй исемле улын мендереп, үҙенең Аласабырын ана шул йыйынға ебәрә.

Ат сабыштырыр алдынан һынсылар сабыш аттарҙы ҡарап сыҡҡандар. Ҡарап бөткәс:

— Иҙел буйынан килгән бер ат бар был юлы. Уның алдына бер йүгерек тә сыға алмаҫ. Иллә-мәгәр уның йүгерек икәнен бер кем дә белмәй бында, — тигәндәр.

Ат сабышы башлана ғына тигәндә, байҙар хәбәр тарата. «Бөгөн аттарҙы сабыштырмайбыҙ, кис булған инде», — тигән булалар.

Зөлҡәрнәй, уны-быны уйламай, ярауы килгән Аласабырға һоло биргән. Шул арала байҙар үҙ аттарын саптырырға ебәрәләр. Баҡтиһәң, теге, ат сабыштырыу булмай, тигән хәбәр хәйлә генә булған икән. Яҡташтары Зөлҡәрнәйҙе эҙләргә тотоналар. Зөлҡәрнәй юҡ та юҡ. Барһалар, фатирында хәбәрһеҙ ҡымыҙ эсеп тик ултыра, ти, был.

— Аласабырҙы ебәр ҙә ебәр! — тиҙәр икән тегенә.

— Юҡ, булмаҫ, һыу эсереп, һоло бирҙем, йүгерә алмаҫ, сәсәр, — ти икән Зөлҡәрнәй.

Шулай ҙа Зөлҡәрнәйҙе күндергәндәр.

Билдәләнгән урында тиңләшеп, сабыша башлағас, Зөлҡәрнәй Аласабырҙың башын тартып, ауыҙлыҡ менән ауыҙын бысып тик килә икән. Шулай ҙа хайуан, Зөлҡәрнәйгә баш бирмәй, башҡа йү-

герektәрҙе уҙып бөткән. Яртылыҡ юлға еткәс, хайуан бахыр сәсәп киткән, һөрлөгөп йығылған, Зөлҡәрнәй әллә ҡайҙа тәкмәсләп барып төшкән.

Аласабыр әҙерәк ятҡас, тороп бер һелкенгән дә сабып сығып киткән, кем, артынан саңдар ғына уйнап ҡалған. Юлда йүгерек-тәрҙең барыһын да уҙып бөтөп, ике-өс ер буйы ташлап малай-һыҙ-ниһеҙ майҙанға килеп кергән. Халыҡ хайран ҡалған. Ҡиткән шау-шыу. «Ҡем йүгереге лә, кем аты? Ҡайҙан килгән был? Ҡай-һы ырыуҙыҡы?..»

Бер заман аттан ҡолап ҡалған Зөлҡәрнәйҙе алып килгәндәр. Ҡилтерһәләр, күрәләр: өҫтө-башы алама ғына бер егет. Оялышынан атының алдында башын баҫып тик тора икән был. Һөбәнән тыш, Бохара яғынан килгән сауҙагәрҙәр Аласабырҙың муйынына аҫыл-аҫыл ебәк тауарҙар килтереп эләләр икән. Ул Мәкәрйә яғынан килгән сауҙагәрҙәр ҡыйбатлы аршын тауарҙар килтереп һалалар икән хайуандың өҫтөнә. Зөлҡәрнәйҙең алдына аҡса ташлау булһынмы, башҡамы, — ғәжәп булған. Аласабырҙы ебәккә урағандар ҙа ҡуйғандар.

Байҙар шунда уҡ хәйлә ҡора башлаған. «Туҡта, был ярлы малайға ниңә кәрәк йүгерек?» — тип уйлағандар. Береһе: «Мин һиңә биш баш йылҡы бирәм, һайлап алырһың, һат әйҙә йүгерегеңде», — ти икән. Икенсеһе: «Мин ун баш йылҡы бирәм», — ти икән. Өсөнсөһө, бер ҡаҙаҡ байы: «Мин бер өйөр йылҡы бирәм, өҫтәүенә бер көтөү ҡуй бирәм», — ти икән.

Иҫәүән Зөлҡәрнәй ни, уйламаған-нитмәгән, Аласабырҙы һатҡан да ебәргән. Бер өйөр йылҡы менән бер көтөү ҡуйҙы ҡыуалап алған да ҡайтҡан. Аласабырҙы һатҡанға Бөрөк ҡарт асыуланмаған. Шул арҡала йүнәйеп киткән.

Зөлҡәрнәй Аласабырҙы бер өйөр йылҡы менән бер көтөү ҡуйға алмаштырып ҡайтҡас, һынсыларҙың береһе:

— Аласабыр — йылҡының ҡото ине. Иҙел буйы ул ҡотто ҡәҙерләп тота белмәне. Аласабыр менән бергә йылҡы ҡото әллә ҡайҙағы далаға күсте хәҙер. Әммә Иҙел буйынан йәнә Аласабырҙан да шәберәк бер йүгерек сыҡмай булмаҫ. Иҙел буйы шул йүгеректе ҡәҙерләп тота белһә, йылҡының ҡото йәнә кире ҡайтыр. Шуға тиклем Иҙел буйы йылҡыға мандый алмаҫ, — тигән.

Һынсылар белгәндәр: Аласабыр тоҡомо бик боронғо замандарҙан килгән икән.

Элгәре, бик борон заманда, Ҡаф тауының аръяғында данлыҡлы бер батша булған, ти. Ул батшаға кешеләр генә түгел, хатта хайуандар ҙа баш эйер булғандар, ти. Берҙән-бер көндө шул батша, далаларға, урмандарға сығып йөрөгән сағында, бер күлгә барып сыға. Шул күлдә бер өйөр йылҡы һыу эсеп тора, ти. Быға тиклем бындай хайуандарҙы бер ваҡытта ла күргәне булмағас, был аптырап ҡала. Йылҡылар батшаны күреү менән далаға сабышып сығалар ҙа китәләр.

Икенсе көндө батша йәнә теге күл янына бара, әлеге йылҡы өйөрөн йәнә күрә. Йылҡылар күлдән һыу эсәләр ҙә тағы сабы-

шып сығып китәләр. Өсөнсө көн батша күл янына йәнә бара — йәнә шул уҡ хәл.

Йылҡылар бик матурҙан икән: барыһының да төҫө ала. Ала ҡашҡа, аҡ бәкәл, барыһы ла бер тигеҙ, ваҡ нәҫел. Батша былар-ҙың матурлығына хайран ҡала. Әммә тегеләр батша һынлы бат-шаға баш эймәгәс, уның бик асыуы килә. Ҡайтҡас, үҙенең вәзир-ҙәрен йыйып, нисек булһа ла тотоп килтерергә әмер бирә.

Аранан баш вәзир тороп батшаға әйтә:

— Эй, батшаларҙың батшаһы, — ти, — ул йылҡыларҙы беҙҙең дә күргәнебеҙ бар. Тотоп ҡулға өйрәтергә иткәнебеҙ ҙә бар. Әммә уларҙы тотоп булмай. Ни өсөн тиһәң, ул хайуандар — ҡанатлы толпар нәҫеленән. Уларға илебеҙҙәге иң беренсе йүгерек аттар ҙа етә алманы. Ул толпарҙарҙы ҡулға төшөрә алырлыҡ бер генә атаҡ-лы хәйләкәр әҙәм бар. Шул хәйләкәр генә тота алһа алыр.

Батша шунда уҡ шул хәйләкәр әҙәмде табып килтерергә ҡуша. Уға шул хайуандарҙы тотоп килтерергә бойора: йә шуларҙы тотоп килтерәһең, йә башыңды өҙҙөрәм, ти.

Был хәйлә эйәһе төндә күлгә бик күп хәмер илтеп һала. Иртә-геһенә, төш ваҡыты еткәс, йылҡы өйөрө күлгә һыу эсергә килә. Эсеп ҡанып, инде китәйек кенә тиһәләр, баштары әйләнеп, бер урында өйөрөлөп тик торалар икән. Атаҡлы хәйләкәр йылҡылар-ҙың барыһын да тотоп, батша һарайы алдына килтерә. Ҡилеп ет-кәс, былар айныйғандар. Батша сыға, әммә йылҡылар һаман бат-шаға баш эймәйҙәр. Батшаның бик асыуы килә, хайуандарҙы са-лып, емтеген далаға йыртҡыстарға, сүл бүреләренә, юлбарыҫтар-ға илтеп быртырға бойора. Йылҡыларҙы берәм-берәм салырға тотоналар. Тик ике генә толпар — бер айғыр менән бер бейә — таш ҡойманан һикереп сығып ҡаса. Ана шул ике ат бик күп да-лаларҙы, ҡом сахраларын, урмандарҙы, тауҙарҙы, һыуҙарҙы үтеп, Урал, Оло Иҙел [1], Ағиҙел, Ҡариҙел, Яйыҡ буйҙарына килеп, тө-йәк тибә башлайҙар. Шунда үрсеп китәләр. Йәй булһа, Оло Иҙел, Ағиҙел буйындағы туғайҙарҙа, Урал тауының үңерҙәрендә утлай-ҙар; ҡыш булһа, Яйыҡ аша сығып, киң далала тибенләп ҡыш сы-ғалар. Был йылҡылар миҙгел-миҙгел йә ҡаҙаҡ, йә башҡорт халҡы өйөрҙәренә ҡушылып китер булғандар. Шулай итеп йылҡы малы-ның ҡотон бер ҡаҙаҡҡа, бер башҡортҡа күсереп йөрөтөр булған-дар. Тора-бара уларҙы ҡороҡ менән тотоп ҡулға өйрәткәндәр.

Тәүге ике йылҡы Ҡаф тауының арьяғына киткәс, унда йылҡы ҡото бөтөнләй бөткән. Йылҡы тоҡомо ҡороған. Унда йәшәүсе ха-лыҡтар дөйә менән ишәккә генә күҙ терәп тороп ҡалғандар, ти.

Ырымбурҙағы бәйгелә беренсе булып килгән баяғы Аласабыр ана шул ике толпар тоҡомонан булған.

Был бейәнән һуң Кәлсер-Табындағы [2] Әлтәшле ауылында ат-тарҙан ала ла тыуған, ҡола ла тыуған. Аласабыр кеүек йүгерек-тәр генә тыумаған. Ни өсөн тиһәң, Аласабырҙы бер өйөр йылҡы менән бер көтөү ҡуйға алмаштырырға ярамаған икән. Малға ҡыҙығып, ҡулындағы толпарыңды ебәрһәң, уның ҡото икенсе әйләнеп ҡайт-май икән.

## 366. САПТАР ЮРҒА

Борон Әнтеү тигән бик бай кеше ғүмер иткән. Уның Көнтөү исемле улы булған. Бай бик күп йылҡы аҫраған. Шуларҙың араһындағы Саптар юрға менән дан тотҡан. Яҡын тирәлә Саптарҙы елеп уҙырҙай юрға булмаған. Шуға күрә Саптарға ҡыҙыҡмаған кеше ҡалмаған.

Берҙән-бер көндө Әнтеү үлеп киткән. Уның бөтә мөлкәте, малтыуары улына ҡалған. Әнтеүгә йыназа уҡырға тиҫтәгә яҡын мулла йыйылған. Былар Көнтөүгә:

— Саптар юрғанды һат, шунһыҙ атайыңа йыназа сыҡмайбыҙ, — тигәндәр.

Ни эшләһен Көнтөү, атай юрғанан ҡәҙерлерәк бит, риза булған. Әнтеүҙе ерләгәндәр.

Был хәбәр тирә-яҡҡа таралып китә. Юрғаны күрергә байҙар йыйыла. Бер сауҙагәр хаҡына тормай, Саптарҙы алырға килешеп, ҡул һуға. Сауҙагәр һыбайлыларын эйәртеп, Көнтөү йортона килеп етә. Саптар юрға ҙур ғына ялан кәртәлә уйнаҡлап йөрөй икән. Ҡороҡ ырғыталар. Юрға тотҡормай, кәртә аша һикереп сыға ла далаға ҡаса. Оҙаҡ эҙләйҙәр уны, таба алмайҙар. Аптырағас, әлеге сауҙагәрҙәр хәбәр тарата:

— Кем дә кем Саптар юрғаның ҡайҙа икәнен белеп әйтә, шуға ҙур бүләк бирәм, — ти.

Берәү Саптар юрғаны күреп ҡалған була. Сауҙагәргә килеп әйтә. Шулай ҙа шулай, Саптар юрға һыу буйында, ышыҡта йәшереneп тора, ти, кисен сығып утлай-утлай ҙа, таңға ҡарай кире төйәгенә ҡайта, ти.

Килеп теге урынды ҡамап алалар. Юрғаға ҡороҡ ташлайҙар. Саптар барыбер эләкмәй, сығып ҡаса, тағы ғәйеп була.

Бер аҙҙан һуң юрғаны тағы табалар. Тағы барып баҫалар. Тағы ҡаса теге, баш бирмәй ҙә ҡуя.

Аҙаҡ теге сауҙагәр, иллеләп һыбайлы эйәртеп килеп, юрғаны ҡыуып китә. Тау битләүенә килтереп ҡыҫырыҡлайҙар. Барыр ере ҡалмағас, юрға ырғып тау башына менеп китә лә һикерә.

Саптарҙы йәлләп көй сығаралар. «Саптар юрға» көйө ана шунан ҡалған ул.

## 367. ҠУҢЫР БУҒА

Элек ялан яғынан урман яғына Ҡәнифә исемле бер килен төшкән. Артынан эйәртеп килгән ҡуңыр буға һыйыры ла булған уның. Туғыҙ йыл торғандан һуң, ҡуңыр буға туғыҙ быҙауын эйәртеп урман яғын ерһенмәй, тыуған яғына ҡайтып киткән. Килен уны эҙләй сыҡҡан, үҙе бара икән, үҙе моңая икән:

Ҡуңыр буғам, һин ҡайҙа?
Ҡуңыр буғам, һин ҡайҙа?
Туғыҙ быҙау эйәрткән,

Муйынсағын һөйрәлткән.
Ҡуңыр буға, һәү, һәү, һәү,
Ҡуңыр буға, һәү, һәү һәү.

Ҡәнифә килен һыйырын эҙәрләп барған юл Урал һыртынан һуҙыла. Уны Ҡуңыр буға юлы тип йөрөтәләр. Ҡәнифә юлы[1] тигән атамаһы ла бар.

## 368. ЙӘНОҘАҠ БАТЫР

Йәноҙаҡ батыр Йәнһары батырҙың улы була. Бер саҡ шулай был ике иптәше менән айыуға бара. Ҡаршыларына айыу килеп сыҡҡас, теге икәү быны ташлап ҡаса. Йәноҙаҡ бер үҙе айыу менән алышып ҡала. Айыу менән көрмәкләшә торғас, ҡушарлап айыу өңөнә барып төшәләр.

Теге икәү ҡайтып килһә, Йәноҙаҡтың әсәһе быларҙан:

— Ҡайҙа ҡалдырҙығыҙ баламды? — тип һорай икән.

— Уны айыу алып китте, — тиҙәр былар.

Йәноҙаҡтың әсәһе шунда, хәнйәр алып:

— Йә баламды табығыҙ, йә үҙегеҙҙе һуям хәҙер! — тигәс, былар ҡурҡыштарынан кирс урманға йүгерә. Айыу өңөнә килеп еткәс:

— Айыу бынан киткәндер инде, — тип лыбырлашалар.

Йәноҙаҡ быларҙы ишетеп, айыу өңөнән:

— Йәноҙаҡ тере әле! — тип ҡысҡыра.

Былар Йәноҙаҡты алырға төшһә, Йәноҙаҡ та тере, айыу ҙа эргәһендә ята икән. Айыу, моғайын, терелер, тип ҡурҡып торғанда, Йәноҙаҡ быларға:

— Үлгән айыуҙан да ҡурҡып тормағыҙ инде! — ти.

Шунан былар айыуҙы һөйрәп сығаралар ҙа, тиреһен тунап, Йәноҙаҡты айыу майы менән тиреһенә урайҙар.

Йәноҙаҡ һауыҡҡас, тегеләр:

— Һәр кемгә үҙ майы — үҙенә дауа икән шул, — тип ҡуялар.

## 369. ЙӘҘҺӘР ТУҒАЙЫ

Борон бер ҡарт булған. Уның сабынлыҡ еренә бер урыҫ байы аттарын ебәргән икән. Был шунда атын яйҙаҡ ҡына менгән дә теге урыҫ байы янына сабып килә. Килә лә:

— Үксәнде майла бынан! — ти икән тегеңә.

Урыҫ байы, бының бер һүҙен дә аңламағас, ни һөйләй икән тип көлә лә ҡуя, ти. Шунан һуң был ауылға кире сабып ҡайта ла кейәүен алып килә. Кейәүен килтергәндә, теге урыҫ һаман бының сабынлығын тапатып йөрөй икән. Кейәүе лә быға:

— Был бит Йәҙһәр туғайы, ниңә тапатаһың сабынлыҡты? Ә

Йәҙһәр туғайы минең ҡайнатамдың ере! — тип, башҡортса һыпырта, ти. Тегенең һаман да күлөп торғанын күргәс:

— Ниңә ауыҙыңды йыраһың, әллә туҡмаҡ ашайһың киләме?— тип ҡурҡытмаҡсы булған кейәүе. Тик теге урыҫ «туҡмаҡ ашауҙан» да ҡурҡмағас, кейәүе:

— Әле һин улай итәһеңме, хәҙер мин һинең тетмәкәйеңде тетеп, үҙеңде ҡалаға ебәртермен — гурыт Труйскиға, гурыт Силәбенскиға! — тип ҡысҡырған.

Шунда ғына теге урыҫ байы эштең ниҙә икәнен аңлап ҡалған да тиҙерәк тая һалған былар ҙан. Кейәүе менән ҡарт:

— Һай, бештек урыҫты! — тип ҡайтып киткәндәр. Ҡайтҡас, йыйылып килгән халыҡҡа ҡарт кейәүен маҡтап һөйләй икән:

— Бына кейәүҙе урыҫҡа алып барғайным, һай, шәп һөйләште урыҫса. Бер-ике һүҙ әйткәйне, урыҫ китте лә барҙы, — тип әйтә, ти.

## 370. САЛИХА ТУНЫ

Бер саҡ Рәсәй империяһының государы — батша сирләп киткән. Уны төрлөсә дауалап ҡарағандар, әммә шифаһы батшаға килешмәгән. Батша һаман сирҙән арынмаған. Ахырҙа батшаның хәлен белергә килгән бер уҡымышлы табиб уға шундай кәңәш биргән: «Ике ҡара бейә тап, шуның һөтө һиңә дауа була», — тигән.

Батша йәһәт кенә был кәңәште бойомға ашырырға ҡушҡан. Батшаны дауалап һауыҡтырыу кеүек яуаплы эште үтәү бурысы Мәмбәт бай балаһы Иҫәнғол майорға төшкән. Бының сәбәбе шунда икән: Иҫәнғол майор император дворына яҡшы хеҙмәт иткән. Генерал-губернаторҙарға яраған. Үҙе уҡымышлы булған. Батшаны башҡорт ҡымыҙы менән дауалау эше аңа шулай Иҫәнғол майорға йөкмәтелгән. Иҫәнғол, үҙе менән әбейе Салиханы алып, ҡолондарын эйәрткән ике ҡара бейәне повозкаһына тағып, Рәсәйҙең башҡалаһы Питербурға киткән.

Батша һарайына килеп төшкәс тә, Салиха әбей, ҡара бейәләрҙе һауып, тар хәсилен һалып, ҡымыҙ эшләргә тотонған. Йәй ваҡыт, иң матур айҙа, үләндең күпереп үҫкән мәлендә бейә һөтө күп рәнйеүгә дауа була икән. Ғүмер буйы ҡолон бәйләп, бейә һауып, ҡымыҙ эсеп ҡартайған Салиха әбейҙең таҙа һаумалы, хәстәрләп бешкән ҡымыҙы батшаға шифа ғына булған. Ул ятҡан урынынан тороп, аяғына баҫҡан, тамам һауыҡҡан. Ә батшаның сая ҡыҙҙары, ирмәк итеп, ат ҡороҡларға, һыбай йөрөргә өйрәнеп ҡалғандар.

Батша үҙен терелткән башҡорт ҡатыны Салиха әбейгә бик оҫта тегелгән, ынйы-мәрйендәр менән уҡаланған, алтын-көмөш тәңкәләр баҫылған ҡупшы ҡама тун бүләк иткән. Ә Иҫәнғолға Рәсәйгә тоғро хеҙмәт иткәне өсөн маҡтау яҙған, аҡсалата бүләк биргән.

Батша был әйтеп бөткөһөҙ шифалы, тәмле, тәнде яҙып, зиһенде асып ебәрерҙәй эсемлекте бынан һуң гел дә эсеп торор

өсөн ҡолонло бейәләр алдырып, айырым хеҙмәтселәр тота башлаған.

Иҫәнғол майор әбейе Салиха менән Питербурҙан үҙ иленә ҡайтып киткән. Батша бүләк иткән шәпле тунды Салиха әбей ҙур хөрмәтле ҡунаҡҡа барғанда ғына, байрамдарҙа ғына ҡеҙерләп кейгән. Үҙе үлгәс тә әле был бүләк тунды Салиха әбейҙең ҡыҙҙары, ҡыҙҙарының ҡыҙҙары һаҡлап кейгән. Тун туҙһа ла, уның тураһында хикәйәт халыҡ теләндә йөрөй биргән.

## 371. ЙӘЙӘҮЛЕ МӘХМҮТ

Мәхмүтте хәҙерге Баймаҡ районының Төрөкмән ауылында бер ярлы ғына ғаиләлә үҫкән егет тип һөйләйҙәр. Бының атаһы атаҡлы ҡурайсы, йырсы булған икән. Улы ла, атаһына оҡшап, моңло, йырға әүәҫ булып үҫә. Ете-һигеҙ йәштәрендә етем ҡалып, яңғыҙ ғына инәһе (атаһының апаһы) ҡулында тәрбиәләнә. Инәһе уны, хәленән килгәнсә, ҡәҙерләп үҫтерә, шулай ҙа фәҡирлек арҡаһында унан бай малын көттөрә. Байҙар егетте мыҫҡыллап, «көтөүсе Мәхмүт» тип йөрөткән, ти. Көтөү көткән саҡтарында Мәхмүт, тәбиғәткә һоҡланып, моңло көйҙәр сығарған, ҡурай уйнаған. Ун дүрт-ун биш йәштәрендә тора-бара ул тирә-яҡта дан алған ҡурайсы булып китә. Уның ҡурай моңдарын бөтә халыҡ яратып тыңлаған. Тормош ауыр булһа ла, егеттең күңеле тулы йыр ҙа моң булған. Ғәҙелһеҙлектәргә, йәбер-золомға йәне әрнегән. Мәхмүт ике һүҙҙең береһендә: «Батшаны күрһәң ине», — тип һөйләнә торған булған. Батшаны бик яҡшы кеше тип уйлаған инде был. Шуға күрә лә һәр ваҡыт: «Ҡасан да булһа батшаны барыбер барып күрәм», — тип һөйләнер булған. Был замандың байҙары: «Һин түгел, беҙ күрә алмайбыҙ батшаны, һин йолҡош көтөүсегә ҡалған батшаны күреү», — тип мыҫҡыл итеп көлгәндәр.

Мәхмүт үҙ һүҙендә тороусан, тәүәккәл кеше булған. Бер нисә көн әҙ-мәҙ әҙерләнә лә, инәһенә йүгереп ҡайтып былай ти: «Инәй, мин батшаны күрергә китәм, ысынлап китәм, миңә һаулыҡ телә инде», — ти. Инәһе аптырап ҡала, уны ебәрмәҫкә маташып ҡараһа ла, булдыра алмай. «Улай булғас, инде һиңә хәйерле юл, бәхет теләйем, мә, бынау икмәкте булһа ла ал, юлда асығырһың бит», — тип көлгә күмеп бешерелгән бер сөсө икмәк бирә. Мәхмүт икмәкте алып тоҡсайына һала ла, бер ҡулына тоҡсайын, икенсе ҡулына ҡурайын тотоп, юлға сыға.

Беренсе ауылға барып етеү менән үк ҡурайын уйнап ебәрә. Ғәжәп моңло ҡурай тауышын ишетеп, ауыл халҡы, бала-сағалар уның янына йыйылалар. Мәхмүтте тирә-яҡлап һырып алалар. Ауыл халҡы егетте ҡунаҡ итә, ҡайҙа китеп барыуын һорашалар. Уның: «Батшаға китеп барам», — тигән һүҙҙәрен ишеткәс, аптырашҡа ҡалалар. Шулай ҙа юлына уңышлыҡ теләп, Мәхмүтте ат менән оҙаталар. Ошо рәүешле һәр ауыл һайын ҡурайын моңло итеп уйнай-уйнай бара, һәр ауыл халҡы уны һый-хөрмәт күрһәтеп

оҙатып ҡала. Ауылдан ауылға йә ат менән, йә йәйәүләп батшаға барыу юлын дауам итә. Бара торғас, Мәхмүт, башҡорттар йәшәгән ерҙәрҙән үтеп, бүтән халыҡтар йәшәгән ерҙәргә барып сыға. Сыуаш, татар, рус халыҡтары ла Мәхмүттең ҡурай моңон һоҡланып тыңлаған. Улар ҙа егеткә ярҙамлашып, батшаға табан оҙатҡандар. Мәхмүт русса белмәһә лә, «царь» һүҙен ишетеп ҡалған икән. Ул ауылдан ауылға, ҡаланан ҡалаға барғанда иң элек ҡурайын уйнай, унан һуң «царь» һүҙен әйтеп, батшаға китеп барыу яғына ҡулын һелтәп күрһәтә торған булған. Шунан инде башҡа халыҡтар уның батшаға китеп барыуын аңлағандар. Күп урындарҙа, был кешене батша үҙе саҡырткандыр, тип уйлап, уға тиҙерәк барып етеү өсөн төрлө ярҙам күрһәткәндәр.

Күп ваҡыттар үткәреп, Мәхмүт батша һарайына барып етә бер заман. Батша һарайының вәзирҙәре, Мәхмүттең батшаға тип килеүен аңлап: «Ғали йәнәптәре, бер ят кеше һинең яныңа инергә рөхсәт һорай», — тип хәбәр итәләр. Батша егетте индерергә әмер бирә. Мәхмүт, уң ҡулына ҡурайын тотҡан килеш, батша янына инә лә, ни тип әйтергә белмәйенсә, үҙ телендә: «Бөйөк батшам, мин башҡорт, һине күрә килдем», — ти ҙә, ҡулындағы ҡурайын ауыҙына ҡуйып, үҙе сығарған көйөн уйнап ебәрә. Батша был хәлгә ғәжәпкә ҡала, моңло ҡурай тауышын яратып, йотлоғоп тыңлай. Уның һуңында батша, рус һәм башҡорт телен белеүсе кеше табырға, Мәхмүтте ҡунаҡ итергә, кейендерергә әмер бирә. Батша әмере буйынса рус, башҡорт телдәрен белгән кешене табып, һарайға килтерәләр. Мәхмүтте янына саҡыртып алып, батша уның менән һөйләшмәксе була. Мәхмүт: «Батшам, һине күрәм тип килдем», — тиеүҙән башҡа бер ни ҙә әйтә алмаған. Ошоноң һуңында батша Мәхмүтте бер нисә көн үҙ һарайында тота, һәр көн ҡурай моңо тыңлай. Батша, башҡорт халҡы алдында үҙен мәрхәмәтле, бөйөк түрә итеп күрһәтеү өсөн, был кеше үҙ иленә ҡайтҡас та, үҙ халҡына, батша мәрхәмәтле, изге кеше, башҡорт халҡын ярата, тип һөйләп бирер тигән маҡсат менән, Мәхмүтте оҙаҡ ваҡыт ҡунаҡ итә, бик яҡшы кейемдәр кейендерә. Мәхмүт танымаҫлыҡ булып таҙарып та китә. Аҙаҡ килеп батша Мәхмүткә күп аҡсалар биреп, бер төҫтәге матур сбруйҙар, дуға һәм муйын ҡыңғырауҙары тағып егелгән тройкаға ултыртып, Мәхмүтте иленә оҙата. Юлда тотҡарлыҡ яһамаһындар өсөн батша уның ҡулына танытма ҡағыҙы ла бирә. Мәхмүт ҡара тройкаға эре генә ултырып, дуға һәм муйын ҡыңғырауҙарын төрлө тауыштар менән яңғыратып, юлда саң-туҙан туҙҙырып, ҡаланан ҡалаға, ауылдан ауылға килә. Ҡалаларҙы, ауылдарҙы үткәндә бөтә халыҡ Мәхмүттең кейгән кейемдәрен, еккән аттарын күреп, таң ҡалып ҡарап ҡала. «Был батша тарафынан ебәрелгән бик ҙур түрәлер, былдай яҡшы тройкалы яҡшы кейемле түрәләр яҡын-тирәлә юҡ шикелле», — тиешәләр.

Йәйҙең матур бер көнөндә, иртәнге таң мәлендә, Мәхмүт ауылына ҡайтып төшә. Тәрән тынлыҡта ятҡан Төрөкмән ауылының урамы буйлап, ҡыңғырау моңдарын яңғыратып, Мәхмүт тройкала елдереп үтеп китә. Унан һуң Төйәләҫ йылғаһы буйлап йәйләүгә

табан елдерә. Төйәләç буйына теҙелеп ултырған аҡ тирмәләр һырты буйлатып ҡыңғырау тауыштарын яңғыратып үтә лә, Туғажман тауының һөҙәк битенән тау башына ҡарай юрттыра. Тау башына менеп еткәс аттарҙы туҡтата ла үҙе тройкаһы алдына сығып баҫа. Аттар баштарын сайҡап, эйәктәрен ҡағып тын алалар, ҡыңғырауҙар төрлө-төрлө тауыштар сығарып сыңлайҙар. Тирмәләрҙәге бөтә кешеләр төнгө йоҡоларынан уяна. Ҡарттар, әбейҙәр, килендәр, бала-сағалар, тирмәләрҙән ашыға-ашыға сығып, ҡыңғырау тауыштары килгән яҡҡа ҡарайҙар, тау башында тройкалы кешене күреп, кем булыр икән, тип ғәжәпкә ҡалалар.

Йәйләүҙә ығы-зығы китә. Ҡарттар араһынан берәү: «Был бик ҙур түрә булырға оҡшай, беҙ йоҡлап ятҡас, бында туҡтамайынса, Туғажманға менгәндәр... Ҡул ҡаушырып тормайыҡ, әйҙәгеҙ, барып ҡаршы алайыҡ, ҡымыҙ алығыҙ, тәкәләр һуйып, ҡунаҡ итәйек түрә кешене», — ти. Байҙарҙың яҡшы аттарын егеп, ҡымыҙ тейәп, түрәне ҡаршы алырға тип, юлға сығыуҙары була, шул саҡ ҡыңғырау тауыштары менән бергә моңло ҡурай тауышы ла ишетелә. Ҡаршы алырға барыусылар туҡтап ҡалалар. Араларынан берәү: «Был кешене кем тип уйлайһығыҙ, был бит Мәхмүт ҡурайының тауышы. Әллә ысынлап та Мәхмүт үҙеме икән?» — ти. «Шулай шул, әллә көтөүсе Мәхмүт батшаға барып ҡайтып киләме икән? Әйҙәгеҙ, барайыҡ әле, эргәһенә барып күрәйек. Унан кем икәнен белербеҙ», — тиешәләр. Был саҡ йәйләүҙәге ығы-зығы туҡтап ҡала, олоһо ла, кесеһе лә ҡурай моңон аҙағына тиклем йотлоғоп тыңлайҙар. Байҙар, түбәнселек менән баш эйеп, тау башында туҡтап торған тройка янына барһалар, ни күҙҙәре менән күрһендәр, бер төҫлө генә өс һылыу ҡара аттар, баштарын әкрен генә һелкеп, эйәк ҡағып торалар, зыңлап, ҡыңғырауҙар яңғырай, аттарҙың сбруйҙарында алтын-көмөш кенә. Уң ҡулына ҡурайын тотҡан килеш, мөһабәт кәүҙәле, таҙа йөҙлө Мәхмүт тройка алдында баҫып тора. Уның өҫтөндәге затлы кейемдәре күҙҙең яуын алып тора. Бындай яҡшы кейемдәрҙе был тирәләге бер байҙың да кейгәне юҡтыр. Ни тип өндәшергә белмәйенсә баҙнатһыҙланып торған саҡта, араларынан берәү: «Мәхмүт мырҙам, һин түгелме?» — тип һорай. Мәхмүт: «Эйе, көтөүсе Мәхмүт мин булам, батшаға барып ҡайтып киләм», — тип яуап ҡайтара. Хәҙер байҙар Мәхмүтте «көтөүсе Мәхмүт» тимәйҙәр, маҡтайҙар, ҙурлайҙар. Уның алдында яҡшы күренергә тырышалар. Улар ҙур мәжлестәр йыйып, Мәхмүтте хөрмәтләйҙәр, өрмәгән ергә ултыртмайҙар, күтәреп тигәндәй йөрөтөп, ҡунаҡ итәләр. «Мәхмүт мырҙам, кәләш алып бирәйек, беҙҙең менән бергәләп донъя көт инде, бик байығып ҡайтҡанһың икән», — тип, байҙарҙың әле береһе, әле икенсеһе, өсөнсөһө өйөр-өйөр йылҡы бирмәк булып, ҡыҙҙарын димләйҙәр уға. Мәхмүт бай ҡыҙҙарын яратмай, бай тормош ҡороп, байҙар кеүек йәшәргә теләмәй. Ул үҙенең инәһенә ҡайтып инәһе менән бергә йәшәй башлай, киң күкрәгенән сыҡҡан моңдарын ҡурайҙа уйнай. Уның үҙен, ул уйнаған ҡурай моңдарын бөтә халыҡ ярата, өҙөлөп тыңлай.

Мәхмүт бала сағынан уҡ бергә уйнап үҫкән күршеләге бер

ярлы ҡыҙын яратыуын инәһенә әйтә. Уны кәләш итеп алып биреүҙе һорай. Был ҡыҙ ҙа Мәхмүтте электән үк яратып йөрөгән икән. Ҡыҙ һылыу, аҡыллы, инсафлы булыуы менән тирә-яҡта дан ала, бай егеттәренең әле береһе, әле икенсеһе уға яусы ебәрә. Ярлы ҡыҙы менән Мәхмүт араһында мөхәббәт уяна, береһе алмаҡ, береһе килмәк булып, вәғәҙә бирешәләр. Тик уларҙың бербереһе менән һөйөшөүҙәрен байҙар, бай балалары белеп ҡала. Нисек тә булһа Мәхмүттән ҡотолоу, уны һөйгән ҡыҙынан айырыу юлын эҙләйҙәр былар. Байҙар, түрәләр бер булып, йәше етмәһә лә, йәш өҫтәп, Мәхмүтте һалдатҡа оҙаталар бер саҡ. Халыҡ хәтерендә Мәхмүттең көйө ҡала. Батшаға барып ҡайтҡанда сығарылғанға уны «Йәйәүле Мәхмүт» тип атағандар [1].

## 372. АБДУЛЛА ҺАЛДАТ МЕНӘН НИКОЛАЙ БАТША

Абдулла тигән бер башҡорт һалдаты Николай батшаға егерме биш йыл хеҙмәт итә. Хеҙмәте бөтөп, ҡайтыр ваҡыты еткәс, был Невский проспекты буйлап иркенләп бер йөрөп киләйем әле, тип ҡалаға сыҡҡан. Шунда быға бер таныш генералы осрап:

— Нәмә, Абдулла, хеҙмәтеңде тултырҙыңмы инде? — тип һорағай, ти.

— Эйе, — тигән Абдулла. — Бына ҡайтып китергә яңы итек менән шинель дә бирҙеләр әле.

— Һин был тиклем тырыш хеҙмәтең менән ҙурыраҡ бүләккә лә хаҡлыһың. Батшаның үҙенә кермәй ҡайтма, — тип кәңәш биргән быға генерал.

Икенсе көндө Абдулла батша һарайына килгән. Вәзирҙәре батшаға хәбәр иткәс, батша быны индерергә ҡушҡан. Шулай итеп, Абдулла һалдат батша ҡаршыһында ултырып, бөтәһен дә энәһенән ебенәсә һөйләп биргән. Батша, йылмайып:

— Һин ниндәй бүләк теләр инең: аҡсамы, ерме? — тип һорағас, Абдулла уйға ҡалған. «Байлыҡ — бер айлыҡ, ә ер — мәңгелек», — тип, ер һорарға булған. Ә батша уға:

— Күпме ер кәрәк, бына бынау картанан күрһәтеп бир, — тигәс, Абдулла көрәктәй ҡулы менән картаға баҫҡан да:

— Бына ошо ус ояһындай ер булһа, бик еткән миңә, — тигән. Батша шунда үҙенең ярандарына Абдулла баҫҡан ус ояһындай ерҙе үлсәп, шуның һыҙмаһын күсереп бирергә ҡушҡан.

Шулай итеп, Абдуллаға бик күп Бөрйән ерҙәре эләккән. Был бик байып киткән. Байлығы улдарына ла, улдарының улдарына ла етерлек булған. Тик ейәндәренең улдары — бүләләре, ерҙе купецтарға буш ҡына хаҡҡа һатып, хатта батша бүләк иткән теге һыҙманан да ҡолаҡ ҡағып ҡалғандар. Һуңынан уларҙан ҡалған быуындары Абдулла ҡарттың батша мөһөрө төшкән теге һыҙманы күпме генә кире алырға тырышмаһын, бер ни эш тә ҡыра алмағандар.

## 373. АСҠЫН АЛТЫНЫ

Асҡын ауылының бер әбейе өйрәк таҙартып торған. Бутәгәне ярып ебәрһә, күҙҙең яуын алып торған таш килеп сыҡҡан. Ташты кешеләргә күрһәтһә, ул алтын булып сыҡҡан.

Шунан һуң ҡара балсыҡты елгә елгәреп ҡараһалар, балсыҡ араһынан күренеп ҡала. Шул ерҙә балсыҡты, кейеҙ аша һыуҙан ағыҙып, алтын таба башлайҙар.

Был хәлде урыҫ байҙары белеп ҡала. Улар Асҡын ауылын һалалар, алтын йыуа башлайҙар. Алтын бик күп сыға. Ғәскәр килтерәләр. Алтын сыҡҡан ергә приискы төҙөлә. Бер урыҫ байы алтындың мыҫҡалын 20-шәр тиндән йыя.

Сәүит йылдарында был ерҙе «Ленинские прииски» тип атайҙар. Хәҙер ул Силәбе өлкәһенең Миәс районына керә.

## 374. ЕТЛЕКМӘГӘН АЛТЫН

Элек-электән тирә-яҡ ауылдар һәр йәй һайын Түбә эргәһендәге туғайға йәйләүгә сыға торған булғандар.

Шулай бер төндө көтөүселәр ҡарағас менән ҡапланған тау башында ниндәйҙер күгелйем бер яҡтылыҡ күреп ҡалғандар. Икенсе көн иртән шул урынды барып ҡараһалар, бер ҙә нәҫ китерҙәй нәмә юҡ икән. Бары йомран өңөн күргәндәр. Ә ҡарттар килеп ҡараған. Бында алтын булырға тейеш, тик әлегә ул етлекмәгән, тигәндәр.

Борондан килгән ғәҙәт буйынса, «етлекмәгән алтын» сыҡҡан ерҙе көл менән күмеп ҡуйырға кәрәк икән. Ниндәй ҙә булһа берәй йән эйәһе шунда эҙен ҡалдырһа, ул, имеш, вафат булырға тейеш.

Бер ваҡыт Түбә башҡорттары бөтә ырыуҙары менән йәйләүгә сыҡҡас, ошо алтын хаҡында бәхәс киткән: алырғамы был алтынды, юҡмы? Күбеһе, алайыҡ, тигән. Шулай ҙа ер талаһыуҙан биҙрәп бөткән иң оло аҡһаҡалдар ҡаршы төшкән. Был алтынға әлегә ҡағылмай торайыҡ, юҡһа ырыуыбыҙға бәлә-ҡаза килеүе бар, тигәндәр.

Шулай ҙа йәштәр тыңламаған. Аҙаҡ, ерҙең йөҙөн йыртып, был тауҙа Түбә приискыһы үҫеп сыҡҡан.

## 375. ТАШ БИЛБАУ

Урал тауы итәгендә элгәре Фәйзулла-Сәлимгәрәй Усманов тигән бер ҡарт йәшәгән, ти. Фәйзулла ҡарттың бер ғәҙәте булған, ул камзулын бер ваҡытта ла сисмәгән. Урал тауындағы ҡиммәтле хазиналарҙың ҡайһы урында ятҡанын бер ул ғына белгән. Үҙенә нәмә кәрәк булһа, шуны барған да алған. Әйтерһең, үҫе йәшереп ҡуйған.

Бер мәлде ул халыҡҡа бик күп алтын килтереп өләшкән.

Халыҡ аптыраған. Фәйзулла ҡарт алтындың ҡайҙа ятҡанын нисек белә икән, тип уйлаған. Быны берҙән-бер көндө Ғүмәр старшина белеп ҡалған да Фәйзулла ҡартты саҡыртҡан. Уға бик күп аҡса биреп, руда ташыусы итмәксе булған, Фәйзулла ҡарт риза булмаған. «Миңә ундай эшкә ялланырға ярамай», — тигән.

Ғүмәр старшина бик күп аҡса биреп алтын ятҡан урынды күрһәтеүҙе һорағас, Фәйзулла ҡарт әйткән:

— Ул хазиналы урын аҡсаға һатылмай, — тигән, — быуындан быуынға үлер алда бушҡа бирелә килә, — тигән.

Шунан Ғүмәр старшина Фәйзулла ҡарт үлер алда алтын ятҡан урынды әйтеп ҡалдырыуын һораған.

Фәйзулла ҡарт әйтмәгән. «Байҙарға әйтмәйем, — тигән, — ярлылар өсөн генә ҡомартҡы итеп ҡалдырам», — тигән.

Ғүмәр старшинаның был һүҙгә бик асыуы килгән. Фәйзулла ҡартты ҡараңғы баҙға ябып ҡуйырға ҡушҡан. Ашарына-эсәренә бирмәгән. Шулай итеп ул Фәйзулла ҡарттан хазина урынын көсләп әйттерергә уйлаған. Фәйзулла ҡарт ҡараңғы баҙҙа оҙаҡ ҡына ултырған. Һаман әйтмәй ҙә әйтмәй икән. Ғүмәр старшина ҡурҡа башлаған: теге ҡарт бероүгә лә әйтмәй үлеп китер, тип уйлаған. Фәйзулла ҡарт янына килгәндә, әгәр һин Урал тауында иң ҙур алтын киҫәге ҡайҙа ятҡанын әйтһәң, һине тотҡондан сығарам, тигән.

Хазиналы урынды ҡомһоҙ Ғүмәр старшинаға әйтеү Фәйзулла ҡартҡа бик-бик ауыр булған. Фәйзулла ҡарт уйға ҡалған: әгәр мин баҙҙа ятып үлеп китһәм, хазиналы урын шул көйө ятып ҡалыуы бар, тигән үҙенә үҙе.

Ул Ғүмәр старшинаның сығып китеүен һораған. «Мине баҙҙа бер үҙемде генә ҡалдыр», — тигән. Ҡанһыҙ, ҡап-йот Ғүмәр старшина баҙҙан сыҡҡан. Ишекте бикләгән, ә үҙе ишек ярығынан шым ғына ҡарап тора икән. Ҡараһа, ни күҙе менән күрһен: Фәйзулла ҡарт камзулын сискән икән, ҡараңғы баҙ аҫты яп-яҡты булып киткән. Ғүмәр старшина Фәйзулла ҡарттың камзулы аҫтында ҡиммәтле аҫыл таштар, гәүһәр-яҡут, алтын-көмөш менән биҙәлгән яҫы билбау күреп ҡалған. Ә билбауға Урал тауҙарының планы төшөрөлгән, ти. Ул ғына ла түгел, тауҙың ҡайһы урынында хазина бар, шул урынға билдәләр ҡуйылған, ти.

Ғүмәр старшинаның ҡомһоҙлоғо тағы артып киткән. Шул байлыҡтарға хужа булыуын уйлап, башы әйләнә башлаған.

Фәйзулла ҡарт гәүһәр-яҡутлы билбауын сисеп алып ҡулында әйләндереп-тулғандырып тотоп торған да кире биленә быуған. Камзулының төймәләрен элгән. Шул арала баҙ өҫтөн йәнә ҡараңғылыҡ ҡаплап алған.

Ғүмәр старшина йәшерен хазинаның ҡайҙа икәнен күреп шат булған. Теге ҡартты баҙҙан сығарған. Старшина үҙенә бер ярҙамсы алып, ҡулына тимер көрәк тотоп, Фәйзулла ҡарт менән Урал тауҙарына киткән, ти. Көнө буйы барғандар былар, арый башлағандар. Баралар-баралар, ти, былар, Фәйзулла ҡартҡа ҡарап-ҡарап алалар икән: был ҡарт беҙҙе алдап алып бармаймы, тип уйлайҙар икән.

Көн кислэй башлаған. Ғүмәр старшина теге ҡарттан йәнә күнме юл барырға икәнен һораған. Фәйзулла ҡарт, тағы шул тиклем барырбыҙ әле, тип яуап биргән.

Ғүмәр старшина Фәйзулла ҡартҡа ҡарап торған да хәйләһен ҡорған. Беҙгә был ҡарттың теге билбауы булһа, үҙе бер нәмәгә лә кәрәк түгел дә баһа, тип уйлаған. Старшина үҙенең ярҙамсыһына күҙ ҡыҫҡан. Тегенеһе тимер көрәк алған да Фәйзулла ҡарттың башын яра һуҡҡан, ти. Фәйзулла ҡарт тып да тартмай шунда уҡ үлгән. Старшина ҡарттың билендәге хазина билбауын тиҙ генә сисеп алған. Ҡабалан-ҡабалан үҙенең кеҫәһенә һалған. Шунда Урал тауы битлегенә соҡор ҡаҙып, ҡартты һөйрәкләп төшөргәндәр ҙә күмгәндәр. Ҡеше-фәлән һиҙмәһен тип, ҡәбере өҫтөнә таш һалып ҡайтып киткәндәр.

Былар бик төнгә ҡалғандар. Старшина ярҙамсыһы менән урманда аҙашып йөрөп, өйгә бик һуңлап ҡайтып ингәндәр. Ғүмәр старшина кеҫәһенә ҡулын тыҡһа, хазина билбауы юҡ, ти, аҙашып йөрөгәндә кеҫәһенән төшөп ҡалған, ти. Нишләмәк кәрәк? Старшина һуштан яҙған. Уны төнө буйы һыуыҡ һыу менән ҡойондороп сыҡҡандар. Иртәгеһенә халыҡты йыйып, хазина билбауын эҙләй киткәндәр.

Ул төндә ел шәп булған. Билбауҙы ҡайҙа осороп алып киткәндер, берәү ҙә таба алмаған. Фәйзулла ҡарттың хазина билбауы шулай итә барып юғалған.

Шул замандан бирле Урал тауҙарының ҡайһы ерендә нимә булғанын берәү ҙә белмәй икән.

## 376. АЛТЫН ТАШЫ

Элек булған был хәл.

Миндәк йылғаһы буйында бер ҡарт бесән сабып йөрөй-йөрөй ҙә, арығас, хәл йыйып, тамаҡ ялғап алырға була. Был шулай, тағанға ҡула аҫып, ит бешерергә ҡуйһа, эргәһенә бер юлаусы килеп сыға. Был ят кеше Себер төрмәһенән ҡасҡан бер урыҫ икән. Усаҡ янына ултырып, тәмәке тартып, ит бешкәнен көтә башлай. Бик асыҡҡан була ул. Шунда был усаҡ тирәһендә ятҡан бер ташты күреп ҡала ла ҡарттан һорай. Ҡарт ни, көлөп ҡуя ла: «Кәрәк икән, ал», — ти. Шунан был, ит бешкәнен дә көтөп тормай, ташты тоҡсайына һала ла үҙ юлына китеп тә бара.

Бер йыл үткәс, был тағы ҡарт янына килеп төшә. Тройка ектереп, көймәлә генә. Ҡартҡа бик күп бүләктәр ҙә килтергән була. Баҡһаң, теге таш алтын ташы булып сыҡҡан икән!..

## 377. СИБАЙ ЯТҠЫЛЫҒЫ

Бынан йөҙ йылдар элек Иҫке Сибай ауылының бер һунарсыһы көҙән өңөн ҡаҙый. Ҡаҙыған еренән гел генә ҡыҙыл балсыҡ сыға. Балсыҡ үҙе бик тос, үҙе бик ауыр булған, ти. Был аптырап ҡала. Ҡөҙәнде эләктерә лә был, өңөн дә күмеп тормай, ҡайтып китә.

Икенсе көн шунан әлеге балсыҡты килеп ала. Өйөн һылап ебәрә. Быны күрәләр ҙә башҡалар ҙа алып ҡайтып төрлө ағас әйберҙәрҙе, тирмә таяуҙарын буяп ҡуялар. Балсыҡты һаман ташыйҙар, көндән-көн, йылдан-йыл был соҡор киңәйә, тәрәнәйә бара.

— Көҙән шалы шәп булып сыҡты әле, — тиҙәр ауылда.

Аҙаҡ был буяуҙың ни булып сыҡҡанын ҡарт таусылар былай тип һөйләй торғайны: имеш, Яңы Сибай ауылының кешеһе Әмир Хоҙайбирҙин был әкәмәт балсыҡты Кабанов[1] тигән рус түрәһенә күрһәтә. Бының өсөн унан бер ҡаҙаҡ сәй ҙә алған, тиҙәр. Ә Кабанов уның ниндәй «балсыҡ» икәнен яҡшы белгән. «Ҡыҙыл балсыҡ»ты сығарып, заводҡа оҙата ла байып китә.

## 378. МАГНИТКА

Бер башҡорт егете Әтәстау[1] итәгендә мал көткән. Бер ваҡыт уның дағалы итегенең үксәһенә таш йәбешә. «Ямғыр яумай, — тип уйлай был, — тирә-яҡта ҡоролоҡ. Ни эшләп был таш үксәнән төшөп ҡалмай?» Аптырай был, шунан ул ташты уҙамаҡ башҡорттарға күрһәтә. Улар араһында таш оҫтаһы бар икән. Ул Әтәс тауында хазина барлығын әйткән. Бына шунан асылып киткән ул Магнитка.

## 379. ҠОРТО КҮП ТӘ, БАЛЫ ЮҠ

Тамъян-Ҡатай кантонында элек Ибраһим тигән бер башҡорт була. Ул көнө буйы урмандан ҡайтмай. Ҡырағай бал ҡорттарына тубал оялар яһап, солоҡсолоҡ менән көн күрә икән.

Һәр саҡ быны ҡорт саға. Бите-күҙе аяуһыҙ шешенеп йөрөй. Шулай ҙа ул ауырһынмай. Түҙә. Кирәм менән ағас баштарына аҫ һымаҡ үрмәләп менеп китә лә балды бөтләп-бөтләп ҡайырып алып төшә. Үҙенән артҡан балды Иҙелбаш заводына[1] илтеп, кәрәк-яраҡ тимер-томорға ла алыштырып ҡайта икән был. Ул заманда башҡорттарға тимерлек тоторға тыйылған була. Салауат яуынан һуң Әбей батша шундай указ сығара. Башҡорттар тағы ҡорал-фәлән ҡоймаһын тип, Әбей батша тимерлектәрҙе бөтөртә. Шунлыҡтан башҡорттар тимер-томор алырға яҡындағы Иҙелбаш заводына йөрөй торған булалар. Ул саҡта заводта Яков тигән берәү түрәлек итә.

Бер көн шулай Ибраһим заводҡа барһа, Яков быға әйтә: «Һин заводҡа эшкә күс, — ти, — һинең кеүек уңған кешенән шәп оҫта сығасаҡ», — ти.

Ибраһим тота ла риза була. «Тимер тотҡан тилмермәҫ», — тип, тимер эшенә тотоноп китә был.

Урман еләҫендә өйрәнгән кешегә тимер эше түҙеп торғоһоҙ эҫе күренә. Ибраһим был эшкә тотонғанлығына бик үкенә. Шулай ҙа был түҙеп йөрөй. Бер көн килеп Яков уға эш хаҡы тип бер ус

бағыр тоттора. Ибраһим уның бағырҙарын аяҡ аҫтына атып бөрә лә ҡайтып китергә була. Яков аптырап китә.

— Ниңә, Ибраһим, былай иттең әле? — тип һорай.

Ибраһим әйтә:

— Ҡортоғоҙ күп булһа ла, балы юҡ икән, — ти.

Был хәлде 1836 йылда, бынан йөҙ утыҙ йылдар элек булған, тиҙәр.

## 380. ӘЛИӘН ТАЯҒЫ

Элгәрге заманда, Әлйән тауы итәгендәге урманда күпте белгән бер ҡарт йәшәгән. Буйға тигәндә ул шундай оҙон булған, хатта кешеләр был ҡарт менән тауҙы айырмаҫ булғандар: ҡайһыһы бейегерәк — ҡартмы, әллә Әлйән тауымы? Кемде Әлйән тип әйтергә — ҡарттымы, әллә тауҙымы? Кешеләр йыш ҡына бутап ҡуялар икән.

Төндәрендә, тау башынан өргән ел күктән йондоҙҙарҙы ҡыуалап, күк йөҙөн болот менән ҡаплап йөрөгән саҡтарҙа, Әлйән тауы буйында йәшәүсе кешеләр йыш ҡына ниндәйҙер тимер-томор яңғырауын ишетер булғандар. Тау буйында тағы ни нәмәләр гөрҫ-гөрҫ килеп йөрөй икән. Кемдер берәү йөҙ ботло итектәре менән һуҡҡылап йөрөй, — шулай гөрһөлдәп торған, ти, тау буйҙары.

Ҡайһы берәүҙәр ишектәрен нығыраҡ бикләй биреп йөрөр булғандар.

— Тышҡа сыға күрмәгеҙ, — тиҙәр икән, — Әлйән үҙенең тимер итектәрен кейеп алған да, ҡорос таяғы менән тегендә-бында һуҡҡылап, тау әйләнәһендә йөрөй, — тиҙәр икән.

Иртә менән тороп ҡараһалар, үләндәр көрәйеп киткән була икән. Умарталарға бал тула икән. Йылғаларҙа балыҡ күбәйә, ти.

Кешеләр был хәлде күреп, таң ҡалышалар икән.

Бер саҡ Әлйән тауы буйы кешеләре бөлгөнлөккә төшкән. Көндән-көн ауырая барған уларҙың тормошо. Шунан кешеләр, йыйылышып, Әлйән ҡартҡа барырға булғандар.

— Ул көслө, — тигәндәр, — беҙгә ярҙам итер әле. Яуызлыҡҡа ҡаршы үҙенең таяғын күтәрер, — тигәндәр.

Тауҙың тишеге алдына барғандар ҙа Әлйәнгә тауыш биргәндәр. Әммә эстән тауыш-тын килмәгән. Тағы, тағы ҡысҡырғандар. Сығыуын һорағандар. Яуап һаман булмаған.

Шунан һуң ҡыйыуыраҡ кешеләр тау тишегенә кереп ҡарарға булғандар. Инеп ҡараһалар — Әлйән үлгән, ти.

— Ярҙамсыбыҙ Әлйән үлгән! — тип ҡайғыға ҡалалар.

Әлйәндең күкрәгендә таяғы ята, ти. Ул таяҡ кешеләр уйлағанса, тимер таяҡ булып сыҡмаған, ҡаты ағастан ҡырҡып яһалған, кипкән бер төҙ таяҡ булған.

Кешеләр, ҡурҡышып, Әлйән кәүҙәһе алдында тубыҡланғандар ҙа:

— Ниңә һин үлдең, — тип илашҡандар, — ниңә былай беҙҙе етем ҡалдырҙың?

Шул ваҡытта, ер аҫтынан килгән шикелле, бер тауыш ишетелгән.

— Өс йөҙ йыл буйына һеҙ ҡар аҫтында булырһығыҙ. Өс йөҙ ҙә беренсе йылда ҡар ирер, — тигән тауыш.

Ҡешеләр аптырап һорау биргәндәр:

— Өс йөҙ йыл буйы ҡар аҫтында беҙ нисек йәшәрбеҙ? — тигәндәр.

Тауыш яңынан ҡабатланған:

— Берҙәм булһағыҙ, үлмәҫһегеҙ, — тигән тауыш. — Ана шул таяҡты һаҡлағыҙ: өс йөҙ ҙә беренсе йылды ул сәскә атыр, — тигән.

Йәшен йәшнәгән, күк күкрәгән. Йыл артынан йылдар үтә барған. Йылғалар һайыҡҡан. Урмандар һирәгәйгән. Башҡорт ерҙәре кибеп ҡорой барған.

Бер саҡ килеп Әлйәндең васыятын хәтерҙәрендә тотҡан ҡарттар әйткән:

— Оло Әлйән әйткәнгә өс быуат үтеп китте инде, — тигәндәр. — Тауға барып ҡарағыҙ әле, таяғы сәскә атмаймы икән? — тигәндәр.

Йәштәр киткән. Ҡайҙа? Урманғамы, тауҙарғамы? Ҙур ҡалаларғамы? Ҡарттар быны белмәгән.

Йыл бөтөп бара тигәндә, ҡар аҫтында ятып йонсоған ауылдарҙа шундай хәбәр таралған:

— Әлйән терелгән, имеш, халыҡ араһында йөрөп ята, имеш...

— Әлйән ҡарт йоҡоһонан уянған, ти, үҙ янына тауға саҡыра, ти.

Ҡешеләр йыйылышып, Әлйән тауына, оло ҡарт ятҡан урынға киткәндәр. Уның кәүҙәһен ҡаплап торған ҙур таш алдына тауыштынһыҙ ғына килеп баҫҡандар.

— Өҫтөнән таштарын алайыҡ, — тигәндәр, — үҙен бөтә ҡеше күрһен. Күмәкләшеп таштарҙы ситкә алып ҡуя ла башлағандар.

Таштарын алһалар, ни күҙҙәре менән күрһендәр: Әлйәндең кәүҙәһе өҫтөндә таяғы сәскә атып ултыра, ти.

Ҡешеләр Әлйән таяғынан берәр бөртөк кенә сәскә алып, ауылдарына таралышҡан.

— Әлйән таяғы сәскәләнгән, — тип шатланғандар улар, — илебеҙгә ҡот керер. Баҡсалар сәскәгә күмелер...

## ШАРТЛЫ ҠЫҪҠАРТМАЛАР

**АКД** — автореферат кандидатской диссертации.

**Асфандияров, 1990** — Асфандияров А. З. История сел и деревень Башкирской АССР: Справочник. Кн. первая. — Уфа: Башкнигоиздат, 1990.

**Асфандияров, 1991** — Асфандияров А. З. История сел и деревень Башкирской АССР: Справочник. Кн. вторая. — Уфа: Башкнигоиздат, 1991.

**АЭБ** — Археология и этнография Башкирии. Т. V / Под ред. Н. В. Бикбулатова, Р. Г. Кузеева, Н. А. Мажитова. — Уфа, 1973.

**АЭМ** — Археологик экспедиция материалдары (Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының ҡулъяҙмалар фонды).

**БДУ БӘФҠ ФФ** — Башҡорт дәүләт университетының башҡорт әҙәбиәте һәм фольклор кафедраһының фольклор фонды.

**Бессонов** — Башкирские народные сказки / Зап. и перев. А. Г. Бессонова; Под ред. Н. К. Дмитриева. — Уфа, 1941.

**БҠ** — «Башҡортостан ҡыҙы» журналы.

**БЛ** — Башҡорт легендалары / Төҙ., иҫкәрмә биреүселәр һәм ред. доцент М. Х. Минһажетдинов менән проф. Ҡирәй Мәргән; Инеш мәҡәлә авт. М. Х. Минһажетдинов, Ә. М. Сөләймәнов. — Өфө, 1969.

**БНТ, ПЛ** — Башкирское народное творчество: Предания и легенды / Сост., автор вступит. ст. и коммент. Фануза Надршина. Отв. ред. Л. Г. Бараг. — Уфа: Башкнигоиздат, 1987.

**БПЛ** — Башкирские предания и легенды / Сост. автор вступит. ст. и коммент. Фануза Надршина. — Уфа: Башкнигоиздат, 1985.

**БРЛ, I** — Башкирия в русской литературе. Т. I / Сост., предисл., коммент. и библ. М. Г. Рахимкулова. — Уфа: Башкнигоиздат, 1961.

**БХИ, РЛ** — Башҡорт халыҡ ижады: Риүәйәттәр, легендалар / Төҙ., инеш мәҡәлә һәм аңлатмалар авторы Фәнүзә Нәҙершина; Яуаплы ред. Ҡирәй Мәргән. — Өфө: Башҡортостан китап нәшр., 1980.

**БХИ, Т. I. 1954** — Башҡорт халыҡ ижады / Төҙ., ред., кереш мәҡәлә һәм аңлатмалар биреүсеһе Ә. И. Харисов. — Өфө, 1954.

**БХИ. Эпос, 1. 1972** — Башҡорт халыҡ ижады: Эпос, 1-се китап / Төҙ., баш һүҙ яҙыусы, аңлатмалар биреүсе Мөхтәр Сәғитов; Яуап. ред. Ә. И. Харисов. — Өфө, Башҡортостан китап нәшриәте, 1972.

**БХИ. Эпос, 2. 1973** — Башҡорт халыҡ ижады: Эпос, 2-се китап / Төҙ., баш һүҙ яҙыусы, аңлатмалар биреүсе Мөхтәр Сәғитов; Яуап. ред. Ә. И. Харисов. — Өфө: Башҡортостан китап нәшр., 1973.

**БХИ. Эпос 3. 1982** — Башҡорт халыҡ ижады: Эпос, 3-сө китап / Төҙ., инеш мәҡәлә һәм аңлатмалар авт. Н. Т. Зарипов; Яуап. ред. Ғ. Б. Хөсәйенов. — Өфө, 1982.

**БХИ. Йырҙар, 1.** — Башҡорт халыҡ ижады: Йырҙар, 1-се китап / Төҙ., баш һүҙ яҙыусы, аңлатмалар биреүсе Салауат Галин; Яуап. ред. Ҡ. Ә. Әхмәтйәнов. — Өфө: Башҡортостан китап нәшр., 1974.

**БШ** — Башкирские шежере / Сост., перев. текстов, введ. и коммент. Р. Г. Кузеева. — Уфа: Башкнигоиздат, 1960.

**Ғилми архив** — Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө ғилми үҙәгенең ғилми архивы.

**Дияров** — Дияров Кәрим. Сал Уралдың моңдары / Төҙ. Рәшит Шәкүр, Фәрит Ҡамаев. — Өфө: Башҡортостан китап нәшр., 1988.

**КВ** — Крестьянская война 1773—1775 гг. на территории Башкирии: Сборник документов. — Уфа: Башкнигоиздат, 1975.

**Кругляшова** — Кругляшова В. П. Исторические предания и песни на горнозаводском Урале о Пугачевском восстании: АКД, М., 1955.

**Кузеев** — Кузеев Р. Г. Происхождение башкирского народа: Этнический состав, история расселения. — М.: Наука, 1974.

**Материалы и исследования** — Материалы и исследования по фольклору Башкирии и Урала. Вып. 1. — Уфа: Изд. БГУ, 1974.

**ОЛ** — Оренбургский **листок.**

**Очерки, I** — Очерки по истории Башкирской АССР. Т. I, ч. I. — Уфа: Башкнигоиздат, 1956.

**Рухи хазиналар** — Нәҙершина Ф. А. Рухи хазиналар (Асылыкүл, Дим, Өршәк буйы башҡорттарының фольклоры). — Өфө, 1992.

**СБ** — «Совет Башҡортостаны» гәзите.

**Ск. Башк. 1969** — Народные сказки, легенды, предания и были Башкирии... / Подбор текстов, ред., вступ. ст. и примеч. Л. Г. Барага. — Уфа: Башкнигоиздат, 1969.

**Ск. Башк., 1975** — Сказки, легенды и предания Башкирии в новых записях на русском языке / Под ред. и с коммент. Л. Г. Барага. — Уфа: Башкнигоиздат, 1975.

**СЭ** — Советская этнография.

**Усманов, 1945** — Салауат батыр / Төҙ., баш һүҙ һәм аңлатмалар авт. Ә. Усманов. — Өфө: Башгосиздат, 1945.

**Усманов, 1944** — 1812 йылғы Ватан һуғышында башҡорт атлылары: Легендалар һәм йырҙар / Төҙ. Ә. Усманов. — Өфө: Башгосиздат, 1944.

**Эргис.** Очерки — Эргис Г. У. Очерки по якутскому фольклору. — М.: Наука, 1974.

**вар.** — вариант.

**гәр.** — ғәрәпсә.

**йәһ.** — йәһүдсә.

**ҡаҙ.** — ҡаҙаҡса.

**монг.** — монгол һүҙе.

**р-н** — район

**рус.** — русса.

**ф.** — фарсыса.

**фраз.** — фразеологизм.

## АҢЛАТМАЛАР

## БОРОНҒО ЫРЫМ-ЫШАНЫУҘАР НИГЕҘЕНДӘ БАРЛЫҠҠА КИЛГӘН ЛЕГЕНДА ҺӘМ РИҮӘЙӘТТӘР

1. **Ике үрҙәктең (өйрәктең) утрау яһағаны.** Башҡортостандың * Ҡырмыҫҡалы р-ны Үтәгән ауылында Ғ. Ғиззәтуллиндан (1897 йылғы) Ғ. Б. Хөсәйенов яҙып алған. — АЭМ, 1985, 394-се б. БНТ, ПЛ, № 1.

[1] Башҡорт фольклорында өйрәк-демиургтар (донъя яралдырыусы йән эйәләре) образы менән бер рәттән өйрәк-күл эйәһе хаҡында ла легенда билдәле («Йөгәмәш тауы»). Зооморф эйәләр тураһындағы был мотив асылда тәбиғәт яралдырыусы өйрәктәр мотивының артабанғы үҫеш-үҙгәреше булып тора. Һыу төбөнән ҡоштар сығарған ләм, ҡом, балсыҡтан ер яһалыу мотивы төрки-монгол, Скандинавия, фин-уғыр халыҡтарының мифологияһында, көнсығыш славяндарҙың апокрифтарында, шулай уҡ Төньяҡ Америка индеецтары, полинезий, һинд фольклорында осрай. — Шаракшинова Н. О. Мифы бурят. — Иркутск, 1980. С. 23—27; Акцорин В. А. Исторические легенды и предания о контакте марийцев с предками коми // Вопросы марийского фольклора и искусства. — Йошкар-Ола, 1980. — Вып. II. С. 20; Мелетинский Е. М. Поэтика мифа. — М., 1976. С. 207.

2. **Үгеҙ мөгөҙөндәге ер.** Ҡырмыҫҡалы р-ның Үтәгән ауылында Ғ. Ғиззәтуллиндан (1897 йылғы) Ғ. Б. Хөсәйенов яҙып алған. — АЭМ, 1985. — 394-се б.

[1] Бик боронғо замандарҙа яралған был мифологик легенда (хоҙай образы һуңғараҡ ингән) хәҙер ҡыҫҡа ғына аңлатмалар рәүешендә йөрөй. Информаторҙар ҡайһы саҡ бер-ике һөйләм менән генә: «Ер үгеҙ менән балыҡ (суртан) өҫтөндә тора. Үгеҙ мөгөҙөн һелкетһә, ер тетрәй икән», — тип әйтеп ҡуялар. — Рухи хазиналар. 15-се б. Ерҙең өс балыҡ өҫтөндә тороуы, балыҡтарҙың береһе үлгәнлектән, ахырзаман яҡынлашып килеүе хаҡындағы башҡорт легендаһы уҙған быуаттың башында ҡағыҙға теркәлгән: Кудряшев П. М. Предрассудки и суеверия башкирцев // Отечественные записки, 1826. — Ч. 28, № 78; БРЛ. Т. I. С. 127.

Ерҙең балыҡ өҫтөндә тороуы тураһында башҡа халыҡтарҙа ла легенда-

---

* Башҡортостанда яҙып алынған материалдарҙың артабан районы ғына күрһәтелә.

лар бар. — Шахнович М. И. Первобытная мифология и философия. Предистория философии. — Л.: Наука, 1971. С. 179.

**3. Ай менән Урал тауҙарының барлыҡҡа килгәне.** 1984 йылда Ейәнсура р-ның Ғәббәс ауылында Ш. С. Сәфәрғәлинанан Г. Сәфәрғәлина яҙып алған. — БДУ, БӘФК, ФФ. 1984 йылғы яҙмалар; БНТ, ПЛ, № 2.

[1] Күк йөҙөндәге бер нисә ҡояш тураһындағы мифтар бик күп халыҡтарҙың фольклорында урын алған. Бындай мифологик легендалар, мәҫәлән, яңы эраға тиклем яҙылған боронғо ҡытай сығанаҡтарында уҡ теркәлеп ҡалған. Тайвань утрауында йәшәүсе цойҙар һөйләүе буйынса, борон күктә ике ҡояш булған. Оадзымы тигән батыр донъяны һәләкәттән ҡотҡарыр өсөн шул ике ҡояштың береһенә уҡ менән атҡан. Яраланған ҡояш әлеккесә ҡыҙҙыра алмайынса айға әйләнгән. Амур буйында йәшәгән нанайҙарҙа ес ҡояштың икеһен атып һүндергән Хадо батыр тураһында легенда бар. Төньяҡ Америка индеецтарының мифтары ла үрҙә килтерелгән миҫалдар менән ауаздаш. — Евсюков В. В. Мифы о вселенной. — Новосибирск: Наука, 1988. С. 20, 21.

Башҡорт легендаһында телгә алынған Урал батыр тураһында шул исемле мәшһүр эпос бар. — БХИ. Эпос. Т. I. 33—144 б.

**4. Ҡош юлы.** 1967 йылда Хәйбулла р-ны Әбеш ауылында Мөхәмәтйән Ҡаҙаҡбаевтан (1924 йылғы) С. Ә. Галин яҙып алған. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 65, д. 2, л. 97; БХИ, РЛ, № 1; БПЛ, № 1; БНТ, ПЛ, № 4.

[1] Һаҡмар — Башҡортостандың көньяҡ-көнсығышындағы йылға. Уралға ҡоя.

[2] Дини йөкмәткеле легендаларҙа күктәге Ҡош юлы Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең алтын мөгөҙлө һарыҡ тәкәһе менән үткән юлы тип аңлатыла.

**5. Айҙағы ике януар.** 1963 йылда Пермь өлк. Октябрьск р-ны Йомран ауылында Нәсибулла Хәбибрахмановтан Кирәй Мәргән яҙып алған. — БХИ, РЛ, № 2; БПЛ, № 2; БНТ, ПЛ, № 3.

Айҙағы бер-береһен ҡыуып барыусы ике януар хаҡындағы мотив тәү башлап М. В. Лоссиевский яҙмаларында телгә алына. Сюжет XIX быуаттың аҙағында Минзәлә өйәҙе башҡорттарынан яҙып алынған. Н. Хәбибрахманов вариантынан айырмалы рәүештә, бында януарҙарҙы исемләп тороу юҡ, шулай уҡ кеше образы ла телгә алынмай. «Ҡыуыла килгән януарҙың аяғы һигеҙ — шуларҙың дүртеһе арҡаһында икән. Арый башлаһа, ул януар арҡаһы менән генә әйләнеп баҫа ла, тағы йүгереп китә икән», — тигән юлдар иғтибарҙы йәлеп итә. — Лоссиевский М. В. Башкирская легенда о месяце // Оренбургский листок, 1876, № 24; БРЛ. Т. II. С. 105—107.

Айҙағы януарҙар тураһындағы боронғо мифтар төрки-монгол мифологияһында киң билдәле. — Потанин Г. Н. Очерки Северо-Западной Монголии. Вып. IV. — СПб., 1883. С. 204—206; Эргис. С. 135.

**6. Етегән йондоҙ.** 1960 йылда Ырымбур өлк. Александров р-ны Ҡайыпҡол ауылында Усман Сәйетовтан Кирәй Мәргән яҙып алған. — БХИ, РЛ, № 3; БПЛ, № 3; БНТ, ПЛ, № 5.

[1] Етегән — Алып сумесе мотивы бер ни тиклем бүрәт легендаһын хәтерләтә. Унда Етегән — Долон убгед — эпос геройы Абай Гәсерхандың өләсәһе Манзан Гүрмән стодәй тарафынан Күккә ырғытылған ете сынаяҡ тиелә. (Шаракшинова. С. 58).

**7. Етегән йондоҙ — ете ҡыҙ (вариант).** 1960 йылда Ырымбур өлк. Александров р-ны Ҡотос ауылында Рәхилә Теләкәеванан (1894 йылғы) Кирәй Мәргән яҙып алған. — БХИ, РЛ, № 4; БПЛ, № 4; ПЛ, № 6.

[1] Башҡорт легендалары араһында Етегән — ете егет мотивы ла бар. — АЭМ, 1985, 413-сө б.

Баймаҡ р-нының Һәмән ауылында Әбүбәкер Шәриповтан (1902 йылғы) Ф. Илембәтов яҙып алған вариантта: «Етегән — ете бүре. Имеш, Тимер ҡаҙыҡҡа һары ат менән буҙат тигән ике ат бәйләп ҡуйылған, ти. Бүреләр аттарҙы ашайым, тип, улар артынан ҡыуалар икән. Таң атҡансы аттар ҙа, бүреләр ҙә бер-береһенең артынан ҡыуышып, Тимер ҡаҙыҡты ете тапҡыр урап сыға булалар». — Ғилми архив, ф. 3, оп. 63, д. 56*, л. 24.

Етегән — ете ҡыҙ мотивы башҡа халыҡтарҙың легендаларында ла осрай. — Давлетшин Т. М. О космогонических воззрениях волжских булгар домонгольского периода // Из истории татарской общественной мысли. — Казань, 1979. С. 48; Эргис. С. 135; Шаракшинова. С. 58.

8. **Зөһрә йондоҙ.** 1966 йылда Әбйәлил р-ны Асҡар ауылында Бибиниса Шәһимырҙанованан (1898 йылғы) Ғ. Галина яҙып алған. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 63, д. 56, 13—14 л.; БХИ, РЛ № 5; БПЛ, № 5; БНТ, ПЛ, № 7.

[1] Әҙәм (йәһ.) — дини легендалар буйынса, Алла тарафынан балсыҡтан яратылған кеше, кешелектең атаһы.

[2] Һауа (йәһ.) — Әҙәмдең ҡатыны, бөтә кешелектең тәүге әсәһе.

[3] Башҡорт легендаһына оҡшаш ҡаҙаҡ легендаһы уҙған быуаттың аҙағында М. А. Левановский тарафынан баҫтырып сығарылған // Тургайская газ., 1896, № 52.

9. **Ай менән Зөһрә.** Пермь өлк. Октябрьск р-ны Йомран ауылында Ҡирәй Мәргән яҙып алған. — БХИ, РЛ, № 6; БПЛ, № 7; БНТ, ПЛ, № 9.

[1] Легенданың элекке Минзәлә өйәҙе башҡорттарынан М. В. Лоссиевский яҙып алған вариантында үгәй ҡыҙ мотивы бөтөнләй юҡ. Бында сюжет романтик йүнәлешле: бер сибәр башҡорт ҡыҙының айҙың матурлығына һоҡлана-һоҡлана һыуға барыуы, уның батырҙар тураһындағы хикәйәттәрҙе, әсәһенең бишек йырын иҫкә төшөрөп, татлы хыялдарға сумыуы күтәренке интонацияла һөйләп бирелә. Ҡыҙҙың айға күтәрелеү мотивы был вариантта түбәндәгесә: күнәктәрен тултырып һыу алғас, ҡыҙ яр буйында тулҡындар сығарып ташлаған ҙур бер һөйәкте күреп ҡала. «Был, моғайын, бер батырҙың һөйәгелер инде. Ҡайһылай ҙур булған ул!» — тип уйлай. Үҙе шул ваҡыт ирекһеҙҙән айға ҡарап: «Әгәр минең ай кеүек ирем булһа, мин уға ошо батыр кеүек ул табып бирер инем», — ти. Айға был һүҙҙәр бик оҡшай ҙа, ул ҡыҙҙы үҙенә тартып ала. — (ОЛ, 1876, № 24).

Легендаларҙан боронғо ата-бабаларыбыҙҙың Күк есеме Айҙы изгеләштереп ҡарағанлығы аңлашыла. Быны йола фольклоры материалдары миҫалында ла асыҡ күрергә мөмкин (сөйәл сыҡҡанда Айға мөрәжәғәт итеп, ырым һүҙҙәр әйтеү, яңы Ай күргәндә теләк теләү һ. б.).

Башҡа бик күп халыҡтарҙың ауыҙ-тел ижадында оҡшаш мотивлы легендалар булыуын да иҫкә алып китергә кәрәк. Ҡәрҙәш булмаған халыҡтарҙың быуаттар буйына аралашыуы һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килһә, ҡәрҙәш халыҡтар ижадындағы оҡшашлыҡ күп осраҡта генетик уртаҡлыҡтан килә. Йәшәү шарттарындағы оҡшашлыҡ, тәбиғәтте бер төрлөрәк ҡабул итеү (әйтәйек, айҙағы таптар төрлө географик киңлектәрҙә йәшәгән кешеләрҙә берҙәй ассоциация тыуҙыра ала), йәғни типологик оҡшашлыҡ та барлыҡҡа килтерә.

* Был «дело»ла төрлө шәхси архивтарҙан, ҡуйын дәфтәренән йыйналған материалдар тупланған.

**10. Зөһрә йондоҙ** (вариант). 1963 йылда Пермь өлк. Октябрьск р-ны Иомран ауылында Ҡирәй Мәргән яҙып алған. — БХИ, РЛ, № 7; БПЛ, № 8; БНТ, БПЛ, № 7.

Алдағы аңлатмаларҙы ҡарағыҙ.

**11. Айҙағы ҡыҙ.** 1990 йылда Әлшәй р-ының Ҡыпсаҡ-Асҡар ауылында Иәнгирова Фатима Муса ҡыҙынан Ф. А. Нәҙершина яҙып алған. — Рухи хазиналар. 15-се б.

Был вариантта ай ҡатын («инәкәйем») образында күҙаллана. Яҙма ошо мотивы менән ҡиммәт.

**12. Ҡояш ниңә юғары?** 1989 йылда Дәүләкән р-ының Көрмәнкәй ауылында Сөләймәнова Мөһөрбаныу Суфиян ҡыҙынан Ф. А. Нәҙершина яҙып алған.— Рухи хазиналар. 15-се б.

**13. Мөсәлдең барлыҡҡа килгәне.** 1986 йылда Әбйәлил р-ының Ҡужан ауылында Т. Һиҙиәтованан Ф. А. Нәҙершина яҙып ялған. Төп нөсхә яҙып алыусының шәхси архивында һаҡлана. Баҫылған: Нәҙершина Ф. Аҡбуҙатҡа кемдәр атланған (мәҡәлә эсендә) — Сб, 1990, 1 ғинуар; БНТ, ПЛ, № 11.

[1] Оҡшаш сюжетлы легендалар ҡаҙаҡ фольклорында ла бар. — ҠСЖ. С. 47—49.

**14. Умырзая.** 1970 йылда Күмертау р-ының Ялсыҡай ауылында Н. Ҡотлогилдиндан Зөһрә Ҡотлогилдина яҙып алған. — СБ, 1970, 15 апрель; БХИ, РЛ, № 8; БПЛ, № 57; БНТ, ПЛ, № 103.

**15. Айыу тоҡомо.** 1968 йылда Әбйәлил р-ны Ҡолғона ауылы Заһиҙулла Ғәҙиәтуллиндан (1883 йылғы) Ә. Бийшев яҙып алған. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 63, д. 56, л. 20; БХИ, РЛ, № 9; БПЛ, № 59; БНТ, ПЛ, № 106.

**16. Кәкүк.** Күмертау р-ының Ялсыҡай ауылында Н. Ҡотлогилдиндан З. Ҡотлогилдина яҙып алған. — БҠ, 1971, № 5, 19-сы б.; БХИ, РЛ, № 10; БПЛ, № 60; БНТ, ПЛ, № 108.

**17. Кәкүк** (вариант). Мәликә Дауытованан БДУ талибы И. Дәүләтбаев яҙып алған. — БЛ, 162-се б. (Ҡайҙа, ҡасан яҙып алыныуы күрһәтелмәгән); БХИ, РЛ, № 11; БНТ, ПЛ, № 109.

**18. Ҡарлуғастың ҡойроғо ниңә айыры?** 1986 йылда Әбйәлил р-ының Ҡужан ауылында Т. Һиҙиәтованан Ф. А. Нәҙершина яҙып алған. Рус телендә яҙып алыусы тәржемәһендә баҫылды: БНТ, ПЛ, № 110.

[1] Оҡшаш йөкмәткеле легенда Ф. А. Нәҙершина тарафынан 1988 йылда Ҡариҙел р-ны Әлмәш (Юлдаш) ауылында Ғүмәров Ғабдулла Ғүмәр улынан (1908 йылғы) яҙып алынған. Был вариантта бәйғәмбәрҙең исеме — Юныс, кәмәнең тишеген ҡаплаусы йылан — туҙбаш йылан. Кешеләрҙе ҡотҡарған өсөн туҙбаш йыланды үлтерергә ярамай, тиелә. Хикәйәнең ҡалған өлөшө (ҡарлуғас тураһындағы) китапта бирелгән варианттағыса.

Бындай легендалар башҡа халыҡтар фольклорында ла бар. Мәҫәлән, сыуаштарҙа. — Чувашские легенды и сказки. Чебоксары, 1979. С. 20.

**19. Бесәйҙе ниңә уятырға ярамай?** 1986 йылда Әбйәлил р-ының Ҡужан ауылында Байбулатова Рәбиҙә Ҡаһарман ҡыҙынан (1901 йылғы, Тамъян ырыуы башҡорто) Ф. А. Нәҙершина яҙып алған. — Шәхси архивтан.

**20. Сыңрау торна.** 1926 йылдарҙа Баймаҡ р-ны Басай ауылы ҡурайсылары Дауыт Аманголов менән Ишбулды Ноғмановтан Ҡәрим Дияров яҙып алған. — СБ, 1971, 11 июнь; БХИ, РЛ, № 12; Д и я р о в. — 12—14-се б. (ноталары менән). — БПЛ, № 61; БНТ, ПЛ, № 111.

[1] Легенданың 1938 йылда яҙып алынған тағы бер варианты билдәле. Уның сюжеты сағыштырмаса ябай, ваҡиғаларҙы әҙмә-әҙлекле итеп һөйләүгә ҡарағанда, аңлатмалар өҫтөнлөк ала. Төп мотивы менән был китапта бирелгән вариантҡа тап килә, тик бында сыңрау торналар тауышын ҡурай моңона һалған кеше — кәләш алырға китеп барыусы йәш батыр түгел, ә бер атаҡлы һунарсы. Сакраль мәғәнә түбәндәге юлдарҙа бик асыҡ сағыла: «Башҡорт ҡурайсылары араһында сыңрау торна көйөн күп уйнарға ярамай тигән фекер йөрөй. Яҡшыға булмаҫ», — тиҙәр. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 12, д. 294, л. 12.

Ошондай уҡ ышаныу революцияға тиклем С. Г. Рыбаков яҙып алған бер легендала ла сағыла. Тауҙарҙа йөрөгән үҙенә бер төрлө торналарҙың сыңрап бейеүҙәре, уларҙың сыңрауын ҡурайсы егеттең көйгә һалыуы тураһында һөйләгәндән һуң, Рыбаков түбәндәгеләрҙе яҙа: «Ул торналарҙы һирәк күрәләр. Әгәр ҙә инде уларҙы берәйһе күрһә, йә тауышын ишетһә, ул кеше йә бик бәхетле була, йә тиҙҙән үлә, тип ышаналар башҡорттар. Халыҡ «Сыңрау торна» көйөн тыңларға яратмай: торналар сыңраған ерҙә йә һуғыш, йә аслыҡ була, тип һөйләнеләр башҡорттар. — Рыбаков С. Г. Музыка и песни Уральских мусульман с очерком их быта. — СПб., 1897. С. 141.

Башҡорттарҙың сыңрау торналарға табыныуы X быуатҡа ҡараған Ибн-Фаҙлан яҙмаларынан да билдәле. Сәйәхәтсенең әйтеүенә ҡарағанда, ниндәйҙер бер һуғыш ваҡытында дошмандарҙы ҡыуып, башҡорттар еңелә башлағас, көтмәгәндә торналар килеп сығып, ҡысҡырып (сыңрап) ебәргән. Шул саҡ дошмандар үҙҙәре ҡаса башлаған. Шуға күрә башҡорттар торналарға табына: «Торналар — беҙҙең раббыбыҙ, улар беҙҙең дошмандарыбыҙҙы ҡасырға мәжбүр итте», — тиҙәр. — Ковалевский А. П. / Книга Ахмеда Ибн-Фадлана о его путешествии на Волгу в 921—922 гг.: Статьи, переводы и комментарии. — Харьков, 1956. С. 131.

Ибн-Фаҙлан яҙмалары үҙ нәүбәтендә сыңрау торна мотивының архаик тамырҙарын төҫмөрләргә мөмкинлек аса. Торналар тауышын ишеткәс, кире яҡҡа әйләнеп ҡаса башлаған дошмандар тураһындағы деталь пигмейҙарҙың торналар менән һуғышы хаҡындағы боронғо мифтарҙы хәтергә төшөрә. Был мифтар тураһында тулы мәғлүмәттәрҙе ҡарағыҙ: Шталь И. В. Эпические предания Древней Греции. — М.: Наука, 1989.

[2] Яугүл — икенсе исеме — Ҡолтабан.

21. **Балаҡарға.** 1975 йылда Баймаҡ р-ны Ниғәмәт ауылынан ҡурайсы К. Дияров (1910—1986) яҙып ебәргән. Ул был әҫәрҙе 1920—1928 йылдар араһында Баймаҡ р-ны Басай ауылы Мазһар Аманғолов, Ишбулды Ҡотлогилдин, Күсей ауылы Хазбулла Мөхәммәтҡоловтарҙан отоп алған. — Ғилми архив. Ф. 3, оп. 63, д. 57, л. 10—15; БХИ, РЛ, № 13; Дияров, 14—17; БПЛ, № 62; БНГ, ПЛ, № 112.

[1] Легенданың шул уҡ Баймаҡ р-ны Басай ауылында Ғата Сөләймәнов яҙып алған бер вариантында ла ваҡиғалар барымта-ҡарымта замандарына барып тоташа. Тик бында яу менән килеүсе халыҡ атап әйтелмәй, һуғыштың мал-тыуар, байлыҡ өсөн алып барылғанлығы һөйләнелә. — БҠ, 1970, № 7, 20—22-се б.

Ҡөйҙөң килеп сығышын ҡыҫҡаса аңлатыуға ғына ҡоролған бер вариант 1937—1938 йылдар тирәһендә яҙып алынған. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 12, д. 294, л. 67.

Легенданың 1965 йылда Баймаҡ р-ны Күсей ауылының атаҡлы ҡурайсыһы Һиҙиәт Үтәғоловтан Ғ. Исламғолова яҙып алған версияһында (БЛ. 83—84-се б.) ваҡиғалар Брагин исеменә бәйләп бирелә. Асыуҙары сиктән ашҡан баш-

ҡорттар Брагиндан ҡалған баланы ағас башындағы ҡарға ояһына аҫып үлтергәндәр. «Балаҡарға» көйө шунан килеп сыҡҡан, — тиелә был яҙмала.

Яланда ятып ҡалған сабыйҙы ҡарға ашатып, үлемдән ҡотҡарыу мотивы бик борондан килә, уның таралыу географияһы Урал менән генә сикләнмәй. Ғилми әҙәбиәттән күренеүенсә, был архаик мотив ҡытай легендаларында һаҡланып ҡалған. Усундәр (ҡытайса яңғырашында — вусунь) менән һундар бәрелеше ваҡытында үлтерелгән усунь батшаһының улына һундарҙың башлығы «мәрхәмәтлелек» күрһәтә: үлтертмәй, ләкин сабыйҙы далаға ташлап ҡалдырырға бойора. Баланы тәүҙә ҡарға (ул суҡышы менән ит ташып сабыйҙы ашата), унан инә бүре үҙенең һөтөн имеҙеп, һәләкәттән ҡотҡара.

Быңдай мотив Иран мифологияһында ла билдәле. Эпос геройы Рүстәмдең сәмреғош (симург) тарафынан үлемдән ҡотҡарылыуы алда телгә алынған легендалар менән ауаздаш. Төрки фольклорының белгесе Х. Г. Ҡорогло, мифологик легендаларҙы сағыштырып, уларҙы боронғо Иран һәм төрки культура бәйләнештәренең сағылышы тигән фекерҙә тора. Ул ташланған сабыйҙы тәрбиәләп үҫтереүсе ҡош мотивы — ирандарҙан, бүре мотивы төркиҙәрҙән килә, тип иҫәпләй. — Короглы Х. Мифы, легенды и предания народов Сибири (К проблемам взаимосвязи) // Фольклорное наследие народов Сибири и Дальнего Востока. — Горно-Алтайск, 1986. С. 87—88.

22. **Шайтан себендәре.** М. Лоссиевский менән Р. Игнатьев тарафынан яҙып алынған һәм «Шайтановы мухи. Башкирская легенда» тигән исем аҫтында «Оренбургский листок» гәзитендә баҫылып сыҡҡан (1876, № 31). Башҡортсаға Рәми Ғарипов ҡайтарҙы. Бер аҙ ҡыҫҡартып башҡорт телендә баҫылды: БХИ, РЛ, № 14.

23. **Эйәле күл.** 1973 йылда Йылайыр р-ны Ҡашҡар ауылы Мәхмүт Моратовтан (1905 йылғы) Ә. Яманғолова-Таһирова яҙып алған. — БДУ, БӘФҠ, ФФ, д. 111; БХИ, РЛ, № 15; БПЛ, № 33; БНТ, ПЛ, № 69.

[1] Мәҡсүт — Йылайыр р-нындағы ауыл.

24. **Йөгәмәш тауы.** 1973 йылда Яңауыл р-нының Йөгәмәш ауылында Бибикамал Хәйретдинованан Р. Бакирова яҙып алған. — СК. Башк., 1975, № 32. Р. Ғарипов тәржемәһе; БХИ, РЛ, № 16; БПЛ, № 9; БНТ, ПЛ, № 13.

25. **Аҡҡошатҡан тау.** 1982 йылда Өфөлә Ф. Х. Игебаеванан (Йылайыр р-нының Ҡаҙырша ауылында йәшәй) Ф. А. Нәҙершина яҙып алған. — БНТ, ПЛ, № 14. Төп нөсхә — шәхси архивта.

[1] Аҡҡош тураһындағы башҡорт легендаларындағы һәм хөрәфәттәрендәге тотемистик мотивтар төрки-монгол халыҡтарының легендалары һәм ышаныуҙары бер типта. Мәҫәлән, монгол телле дербюттарҙың ышаныуы буйынса, аҡҡошто үлтереү оло гонаһ булып иҫәпләнгән. Уларҙа аҡҡошто үлтереүҙән кеше үлә икән тигән фекер йөрөгән (Потанин, 1883. — С. 132). Аҡҡош яҡуттарҙа, себер татарҙарында ла изге ҡош һаналған, уны үлтереү ҡәтғи тыйылған булған (Гуревич И. Е. Космогонические представления и пережитки тотемистического культа у населения Оленекского района) // СЭ, 1948, № 3. С. 130; Лосева З. К., Томилов Н. А. Легенды и исторические предания иртышских татар // Духовная культура народов Сибири. — Томск, 1980. С. 23). Аҡҡошто үлтергән кешенең үҙенә һәм ғаиләһенә бәлә килә тигән ышаныу шулай уҡ ҡырғыҙ халҡында бар (Киргизско-русский словарь. — М., 1965. С. 117). Сыуаштарҙа аҡҡошто үлтереү әсәне үлтереүгә бәрәбәр һаналған (Родионов В. Г. К образу лебедя в жанрах чувашского фольклора. — Советская тюркология, 1983, № 6. — С. 19.)

Тағы ла «Юрматы ҡәбиләһе» тигән легенданың аңлатмаһын ҡарағыҙ.

**26. Шүрәле ҡыуағы.** 1959 йылда Курган өлк. Сафакүл р-ны Атйетәр ауылында Ғәлимов Әбделвәли Ғәли улынан (1895 йылғы) Н. Шоңҡаров яҙып алған. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 21, д. 2, л. 47—48; БХИ, РЛ, № 17.

[1] Сербейен — Курган өлкәһендәге күл исеме.

**27. Ярымтыҡ.** 1906—1907 йылдарҙа Гәйнә башҡорттарынан С. И. Руденко яҙып алған. — АЭБ, т. V, 24-се б. Р. Ғарипов тәржемәһе; БХИ, РЛ, № 18.

[1] Арҡаһына ыҫмала буяп ебәрелгән атҡа шүрәле атланып ҡайтыу мотивы этногенетик легендаларҙа ла йыш осрай (ҡарағыҙ: «Шүрәле араһы», «Бишул» һ. б.)

**28. Тау сере.** 1938 йылда Ырымбур өлк. Ҡыуандыҡ р-ны Ҡыуандыҡ совхозы Мөхәмәтйән Әбдерәйевтән П. Т. Завьяловский яҙып алған. — Предания и сказки Оренбургских степей / Сост. П. Завьяловский. Под ред. В. Сидельникова. ОГИЗ, Чкаловское изд-во, 1948. С. 25—28. Яҙып алыусы информаторҙың ҡыҫҡаса биографияһын килтерә, уның оҫта хикәйәсе булыуын, башҡорт теле менән бер рәттән рус телен дә яҡшы белеүен билдәләп үтә. П. Завьяловский йыйынтығына «Тау сере» әҫәренән тыш, М. Әбдерәйевтән яҙып алынған «Ҡырғыҙ батыр», «Алйот хан», «Күгәрсен тарлауығы», «Яҡшы күңелле ҡыҙыҡай», «Өс ғәрип» әкиәттәрен индергән. Башҡорт телендә Р. Ғарипов тәржемәһендә тәү башлап баҫылды: БХИ, РЛ, № 19; БНТ, ПЛ; № 423.

[1] Әлхәссә (Лхасса) — Тибеттағы ҡала исеме.

**29. Аҡтау хазинаһы.** 1966 йылда Ейәнсура р-ны Байыш ауылы Зәйнәп Исхаҡованан (1902 йылғы) И. Бүләков менән Ғ. Әйүпов яҙып алған. — БЛ, 134-се б.; БХИ, РЛ, № 20; БПЛ, № 250; БНТ, ПЛ, № 417.

**30. Нух ҡарт хазинаһы.** Өфө р-ны Иҫке Мең ауылы Сабитов Хаҙғәли Ҡасим улынан З. Әхмәтшин яҙып алған. — БЛ, 134—135-се б.; БХИ, РЛ, № 21; БПЛ, № 252; БНТ, ПЛ, № 421.

**31. Шығман тауы.** Мәләүез р-ны Яманһар ауылы Әхмәтшәриф Ғәҙиләевтән Ғ. Хәлилов яҙып алған. — БЛ, 135—136-сы б.; БХИ, РЛ, № 22; БПЛ, № 251; БНТ, ПЛ, № 420.

**32. Хазина.** 1966 йылда Ейәнсура р-ны Байыш ауылы Зәйнәп Исхаҡованан (1902 йылғы) И. Бүләков менән Ғ. Әйүпов яҙып алған. — БЛ, 134-се б.; БХИ, РЛ, № 23; БНТ, ПЛ, № 422.

Хазиналар хаҡындағы легендаларҙың күпселеге ҡара ышаныуға ҡоролған. Әлшәй р-ны Нарыҫтау ауылы Рахимҡулова Мәғүзә Сәлим ҡыҙынан (70 йәшлек) Н. Шоңҡаров яҙып алған бер вариантта, мәҫәлән, ошондай юлдар иғтибарҙы йәлеп итә: «Нарыҫтауҙа Ҡайынсыл тигән урын бар. Шул урында бер кәмә көмөш тәңкә булыр. Ул төш аҫтында икән. Шунда барып көл иләһәң, теге йәнләнә, ти. Көлгә ни аяғы менән баҫа, шуны ҡорбанлыҡҡа салаһың — тәңкә ҡалҡа. Әҙәм баҫа икән — уның ҡанын сығаралар*. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 47, д. 1, л. 63.

1906—1907 йылдарҙа Р. И. Руденко тарафынан ҡыпсаҡ ырыуы башҡорттарынан яҙып алынған легенда шулай уҡ халыҡ аңындағы цикләнгәнлектең бер үрнәге булып тора. Бына ул: «Беҙҙең ауыл тирәһендә — хазина бар, тиҙәр. Ул, имеш, анау тауҙың түбәһенә күмелгән. Шунда бер кәмә тулы алтын бар икән.

---

* Әҙәм ҡанын сығарыу — бында кешенең берәр ағзаһын еңелсә яралау мәғәнәһендә.

Тик уны күргән кеше, аҡылдан яҙып, ауылға ҡайтыр юлын таба алмайынса, шунда тороп ҡала, ә ҡайта алғаны хазина ятҡан ерҙе башҡаса таба ла алмай, ти.

Ә икенсе бер хазинаны урмандағы солоҡ эсендә ята, тиҙәр. Борон бит урман үтеп сыҡҡыһыҙ булған. Шуға күрә лә солоҡто тапҡан кеше, ауылға ҡайтыр юлын таба алмай, урманда аҙашып ҡала, ауылға ҡайтҡаны солоҡҡа илтер юлды кире таба ла алмай, имеш». — АЭБ, т. V, 26-сы б.

**33. Башҡорт байрамы.** 1963 йылда Пермь өлк. Октябрьск р-ны Иомран ауылында Нәсибулла Хәбибрахмановтан Кирәй Мәргән яҙып алған. — БХИ, РЛ, № 24; БПЛ, № 249; БНТ, ПЛ, № 367.

[1] Легенданың Белорет р-нында Ф. В. Павловтан (1898 йылғы) яҙып алынған варианты буйынса, арбаһының тәгәрмәсе ватылғас, башҡорт ике байрамын рус кешеһенә бирә. — Ск. Башк., 1969, № 22.

**34. Аҡман-Тоҡман.** — «Октябрь» (Өфө) журналы, 1948. № 10, 23—24-се б.; БХИ, РЛ, № 25; БНТ, ПЛ, № 12.

[1] Иҫәнғол — Ейәнсура районының үҙәге.

**35. Аҡман-Тоҡман (вариант).** 1963 йылда Әбйәлил р-ны Ташбулат ауылы Зиннур Харисовтан Ә. Сөләймәнов менән Н. Хәмитов яҙып алған. — БЛ, 162-се б.; БХИ, РЛ, № 26.

**36. Бишҡунаҡ бураны.** — «Октябрь» журналы, 1948, № 10, 24-се б.; БХИ, РЛ, № 27.

## ЕР-ҺЫУ, ТАУ-ТАШ АТАМАЛАРЫНА БӘЙЛЕ РИҮӘЙӘТ, ЛЕГЕНДАЛАР. (ТОПОНИМИК РИҮӘЙӘТ ҺӘМ ЛЕГЕНДАЛАР).

**37. Мүсектау.** Күренекле тел белгесе Т. Ғ. Баишев тарафынан яҙып алынған. — БҠ, 1969, № 11. — 19-сы б.; БХИ, РЛ, № 61; БПЛ, № 10; БНТ, ПЛ, № 16.

[1] Боронғо заманда йәшәгән эре халыҡ — алпамышалар хаҡында легендалар башҡорт халыҡ ижадында шаҡтай киң таралған. Кешене усына ултыртып алып ҡайтҡан һабансы тураһындағы легенданы ошо юлдарҙың авторы 1984 йылда Баймаҡ р-нында яҙып алды. «Алпамыша зыяраты», «Алпамыша ҡәбере», «Алпамыша ташы» тибындағы топонимик легендаларҙы Башҡортостандың төрлө райондарында, шулай уҡ Силәбе, Курган яҡтарында осратырға мөмкин. Яҙмаларҙан күренеүенсә, халыҡ алпамышаларға бәйле урындарҙы, ҡағиҙә булараҡ, изгеләштереп ҡараған. Башҡортостандың Архангель районы Ҡыҙылъяр ауылында 78 йәшлек Исмәғил Әлемғужиндан Әхмәт Сөләймәнов яҙып алған «Алпамыша ҡәбере» тигән бер легендала, мәҫәлән, түбәндәге юлдар бар: «Алпамыша изге кеше, әүлиә булған. Ул үлгәс, ат еткән ерҙән тупраҡ ташып күмгәндәр. Шулай яһалған ул тау кеүек ятҡан түң». Алпамыша ҡәберлектәрен изгеләштереп ҡарау мотивы 1906—1907 йылдарҙа С. И. Руденко яҙып алған легендаларҙа ла асыҡ сағыла. — АЭБ, т. V, 30-сы б.

Шуныһы иғтибарҙы йәлеп итә: башҡорт фольклорындағы алпамышалар образы, легендаларҙағы мотивтар башҡа бик күп халыҡтарҙың легендаларындағы мотивтарға яҡын, айырым осраҡтарҙа улар хатта бер-береһенә тап килә тиерлек. Әйтәйек, «Великан ҡыҙҙары һәм һабансы» тигән латыш легендаһының сюжеты менән «Мүсектау»ҙағы мотивтар араһында әллә ни ҙур айырма юҡ. — Латышские народные предания. Избранное / Сост. А. Анцелане, перевод

М. Крупниковой. — Рига: Изд. АН Латвийской ССР. 1962. С. 104; Марий легендаһы ла шул уҡ юҫыҡта. — Акцорин В. А. Марийские мифы и предания в свете исторической взаимосвязи // Вопросы марийского фольклора и искусства. — Йошкар-Ола, 1984, IV. С. 5—13.

Һабаны менән пар атты кеҫәһенә һалып, ҡарағайҙарҙы дегәнәк тип, ашатлап ҡына йөрөгән алпамышалар менән, тауҙарҙы күсереп, ҡарағайҙарҙы йолҡоп алып йөрөгән белорус баһадирҙары (волоты) араһында ла оҡшашлыҡ бик көслө. — Бараг Л. Г. «Асілкі» белорусских сказок и преданий // Русский фольклор. Т. VIII. — М.—Л.: Изд. АН СССР, 1963. С. 29—40.

[1] Төрки, фин-уғыр, славян халыҡтары фольклорындағы легенда сюжеттарының оҡшашлығы был халыҡтар араһындағы оҙайлы этнокультур бәйләнештәр менән аңлатыла.

[2] Әй — Башҡортостандың төньяҡ-көнсығышындағы йылға, Ҡариҙелгә ҡоя.

**38. Алпа ҡомо — Айырытау.** 1939 йылда Илеш р-нында Ә. Һ. Исламғолов (1906 йылғы) яҙып алған. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 32, д. 25, л. 67; БХИ, РЛ, № 62; БПЛ, № 11; БНТ, ПЛ, № 15.

[1] 1973 йылда Архангель р-ны Оҙондар ауылы Гөлбәзир Сәмсетдинованан (1896 йылғы) Б. Әхмәтшин яҙып алған бер легендала Бағрыш тауы эргәһендәге бер ташты Алпамыша кеҫәһенән төшөп ҡалған ҡайраҡ тип һөйләйҙәр, тиелә. — Ск. Башк., 1975. С. 132.

Хәҙерге Татарстан ерендәге ҡайһы бер таусыҡтарҙы Алып сабата ҡаҡҡанда ҡойолган ҡом йәки балсыҡтарҙан барлыҡҡа килгән урындар тип аңлатыу халыҡ араһында киң таралған. — Борынгы татар әдәбияты. — Казан, 1963. 24-се б.

**39. Алпамыша ҡәбере.** 1988 йылда Ҡариҙел р-нының Юлдаш (Әлмеш) ауылында Ғүмәров Ғабдулла Ғүмәр улынан (1908 йылғы) һәм уның ҡатыны Ғүмәрова Миңнекамал Мөхәммәтсәлим ҡыҙынан (1916 йылғы, Асҡын р-нында тыуып үҫкән) Ф. А. Нәҙершина яҙып алған. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 92, д. 7, л. 83.

[1] Риүәйәттәге бөтә атамалар ҙа Асҡын р-нына ҡарай.

**40. Һанайһары менән Шайтанһары тауҙары.** 1990 йылда Әлшәй р-нының Ҡыпсаҡ-Асҡар ауылында Йәнгирова Фатима Муса ҡыҙынан (1902 йылғы, иҫкесә уҡыған) Ф. А. Нәҙершина яҙып алған. — Рухи хазиналар, 15—16-сы б.

Вар.: БЛ, № 129; БРЛ, 1. С. 220.

[2] Телгә алынған ер-һыу, ауыл атамалары Башҡортостандың Дим, Асылыкүл буйы төбәгенә ҡарай.

**41. Үкерташ.** 1973 йылда Йылайыр р-нының Мәҡсүт ауылында 69 йәшлек Байғолов Айсанан Ә. Яманғолова-Таһирова яҙып алған. — БДУ, БӘФК, ФФ, д. 111.

**42. Батыр менән айыу таштары.** А. Малаховтың «Ҡурҡарауыҡ хаҡында легенда» тигән мәҡәләһенән алынды. Мәҡәлә Д. Бураҡаев тәржемәһендә бирелгән. — СБ, 1965, 8 декабрь; БХИ, РЛ, № 63; БПЛ, № 12; БНТ, ПЛ, № 18.

[1] Туранан-тура әйтелмәһә лә, легендала айыу түбәнге, ер аҫты, донъяһының хужаһы булараҡ һүрәтләнә буғай. Был мотив айырыуса Себер халыҡтары фольклоры өсөн хас.

**43. Йылҡысыҡҡан күл.** 1979 йыл Бөрйән р-нында Шүлгән янындағы заповедникта ҡарауылсы-урмансы булып эшләүсе Мостафин Ғәлиулла Аҙнағол улы-

нан (1938 йылғы) Ғайса Хөсәйенов яҙып алған. — АЭМ, 1970, 159—160-сы б.; БХИ, РЛ, № 64; БПЛ, № 32.

Вар.: Ғилми архив, ф. 3, оп. 23, д. 7, л. 73—76.

[1] «Йылҡысыҡҡан күл» легендаһы Бөрйән районында киң таралған һәм борондан һәйләнеп килгән легендаларҙың береһе. Ул М. В. Лоссиевскийҙың «Из суеверий и легенд мусульман Оренбургского края» тигән яҙмаларында ла (ОЛ, 1878, № 36) осрай. Бында мөғжизәле эттең хужаһы — Шүлгән күленән ун биш саҡрымдар алыҫлығында йәшәгән атаҡлы һунарсы Бышлаҡ. Ул һунарға йә бөркөтөн, йә ыласын-шонҡарын алып сыға. Берҙән-бер көн Бышлаҡ ҡаршыһына тау артынан бер эт килеп сыға. Эт һунарсыға бик оҡшай, тотоп муйынына бау һала был. Күп тә үтмәй тау артынан бер ят кеше лә килеп сыға. Ул:

— Ай, мәрхәмәтле кеше, ниңә бәйләнең этемде? Зинһар, бирә күр, — ти.

— Нишләп мин уны һиңә бирәйем? Мин уны үҙем тотоп алдым, ул менеке, — ти Бышлаҡ.

Ят кеше бик үтенеп һораһа ла, Бышлаҡ этте бирмәй. Шунан теге кеше әйтә:

— Әйҙә улайһа, күл буйына киттек, мин һиңә бер нәмә күрһәтәм, — ти.

Бышлаҡ уйлап-уйлап тора ла риза була. Яр буйына килеп етеүҙәре була, теге ғәжәп кеше аты-ние менән туп-тура күл төбөнә сума. Бер аҙ ваҡыт үткәс, күл күбекләнеп ҡайнай башлай. Теге ят кеше һыу төбөнән иҫ киткес матур ерән бейә алып сыға.

— Шундай бейә осратҡаның бармы? — ти был. — Оҡшаһа, ал эт урынына, — ти.

Бышлаҡ аптырап ҡала. Эштең тиктәҫтән генә түгеллеген аңлап, этте ошо бейәгә алыштырырға риза була. Теге кеше әйтә:

— Бәхетең, егет, ал бейәмде. Тик хәҙер туп-тура өйөңә ҡайтып кит. Ҡайтып еткәнсе артыңа әйләнеп ҡарама, — ти. Үҙе шул саҡ әлеге эте менән күлгә сума.

Бышлыҡ ҡайтыу яғына ысҡына. Артынан кешнәй-кешнәй йылҡы көтөүе эйәрә икән. Бышлаҡ артына әйләнеп ҡарамай түҙә алмай. Ҡараһа, күҙ күреме ерҙән эркелеп йылҡы малы килә. Шул саҡ өйөр туҡтала. Һыуҙан сығып өлгөрмәгәндәре, кире күлгә сума. Бөрйән аттары ошо тоҡомдан ҡалған, имеш.

Артабан Бышлаҡтың бик күп нәҫел-нәсәбе ҡала, уларҙы «Байулы» тип йөрөтәләр.

Ошо уҡ мотив «Ҡара юрға» исемле эпик ҡомартҡының 1960 йылда Ырымбур өлк. Александр р-ны Ҡотос ауылы Рәхилә Теләкәеванан Ҡирәй Мәргән яҙып алған вариантында ла урын ала. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 21, д. 3, л. 124.

Миң ҡәбиләһе башҡорттары араһында шулай уҡ һыуҙан (Аҡ зыярат күленән) сыҡҡан йылҡы малы тураһында легендалар бар. — БРЛ, I. 252-се б.

Ҡаҙаҡ ғалимы Е. Д. Торсоновтың хеҙмәтенән күренеүенсә, һыу аҫтында мәҡам тотҡан йылҡы малы, үгеҙҙәр тураһындағы легендалар төрки-монгол халыҡтары (мәҫәлән, төрөк, ҡалмыҡ, бүрәт) араһында әлегәсә йәшәй. — Турсунов Е. Д. Генезис казахской бытовой сказки. — Алма-Ата, 1973. С. 43.

**44. Йыланһөйрәгән үҙәге.** 1972 йылда Йылайыр р-ны Мәҡсүт ауылы Айса Байғоловтан (1903 йылғы) Ә. Яманғолова-Таһирова яҙып алған. — БДУ, БӘФҠ ФФ, д. III; БХИ, РЛ, № 65, № 33.

[1] Фольклор материалдарына ҡарағанда, борон башҡорттар араһында аж-

даһа-йыландар хаҡында мифологик хикәйәләр шаҡтай киң таралған булған. Был йәһәттән айырыуса Б. Юлыевтың «Аждаһа-йылан тураһында башҡорттар һөйләүе» тигән хеҙмәте («Этнографическое обозрение», 1892, № 3) һәм С. Руденко яҙмалары иғтибарҙы йәлеп итә (АЭБ, т. V, 25-се б.). Юха, аждаһалар хаҡындағы хикәйәләрҙең фрагменттары һуңғы дәүерҙә яҙып алған материалдар араһында ла осрай. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 26, д. 10, л. 63; ф. 3, оп. 65, д. 3.

45. **Ҡариҙел.** 1939 йылда Нуриман р-ны Күлләр ауылында Н. Низамовтан Ҡирәй Мәргән яҙып алған. — БХИ, 1959, 107-се б.; БХИ, РЛ, № 66; БПЛ, № 34; БНТ, ПЛ, № 72.

Хикәйәләү формаһы һәм ҡайһы бер мотивтары менән (мәсәлән, айғырҙың телгә килеүе) экиәткә бик яҡын торған легенда.

Ҡ а р и ҙ е л — Ағиҙелдең уң ҡушылдығы. Икенсе исеме — Өфө йылғаһы (Уфимка).

46. **Ағиҙел менән Яйыҡ.** Күгәрсен р-ны Мәҡсүт ауылы Ғибаҙулла Биишевтан Ә. М. Сөләймәнов яҙып алған. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 65, д. 56, л. 122; БХИ, РЛ, № 67; БПЛ, № 35; БНТ, ПЛ, № 75.

Вар.: Материалы и исследования, с. 130.

Йылғалар бәхәсе (ярышы) хаҡындағы риүәйәт һәм легендалар башҡа халыҡтарҙың ауыҙ-тел ижадында ла йыш осрай. Миҫал өсөн Волга менән Көнбайыш Двина, Днепр менән Десна «бәхәсен» иҫкә алырға мөмкин.

47. **Ағиҙел** менән **Ҡариҙел.** Бөрйән р-ны Нәби ауылы Әшрәфетдин Мифтахетдиновтан Ә. М. Сөләймәнов яҙып алған. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 65, д. 56, л. 123: БХИ, РЛ, № 68; БПЛ, № 36; БНТ, ПЛ, № 73.

48. **Ике Инйәрҙең бәхәсе.** Белорет р-ны Татлы ауылы Хөсәинов Зиннәт Хәсән улынан (1903 йылғы) БДУ талибәһе Г. Шәйгәрҙәнова менән Л. Г. Бараг яҙып алған. — Ск. Башк., 1969, С. 115. Башҡортса Рәми Ғарипов тәржемәһендә: БХИ, РЛ, № 69; тәүге баҫма буйынса: БНТ, ПЛ, № 74.

49. **Ҡалым** — «Октябрь» журналы, 1948, № 10, 21-се б. (паспорты билдәһеҙ). БХИ, РЛ, № 70; БПЛ, № 37; БНТ, ПЛ, № 76.

[1] Я й ы ҡ — Урал йылғаһы.

[2] И р ә м ә л — Көньяҡ Уралдағы тау.

[3] Х а з а р д и ң г е ҙ е — элек Каспий диңгеҙен шулай атағандар.

50. **Ҡарагөсөк тауы.** 1968 йылда Белорет р-ны Кәртәле ауылы Мәғәфурова Мәзинә Ғәләмшә ҡыҙынан (1892 йылғы) яҙып алынған. — Ск. Башк., 1975. С. 134; Рәми Ғарипов тәржемәһендә: БХИ, РЛ, № 71; тәүге баҫма буйынса: БПЛ, № 15; БНТ, ПЛ, № 23.

Икенсе версияһы: Ск. Башк., 1975. С. 135.

51. **Турат сағылы.** Хәйбулла р-ны Муллағәләм Ильясов (80 йәшлек) һәм Сәлимйән Кәримовтан (67 йәшлек, Аҡъярҙа йәшәй) Ҡ. Аралбаев яҙып алған // Хеҙмәт байрағы. 1967, 24 август; БХИ, РЛ, № 72; БПЛ, № 16; БНТ, ПЛ, № 49.

[1] Өйөр янына килеп йүгән шылтыратҡас, геройға бер алама ғына ябаға тайҙың ҡарауы, ул тайҙың аҙаҡ толпар булып китеүе эпик әҫәрҙәрҙә йыш осрай торған мотив.

[2] И л ә с, И л ь я с (Т у р а т) — Хәйбулла р-нындағы ауыл исеме.

[3] У м ы н к и с е ү е, Ө л к ә н ҡ у р ғ ы — шул уҡ райондағы ер-һыу атамалары.

Шул уҡ Сәлимйән Кәримовтан 70-се йылдарҙа З. Ғәббәсова-Ҡунаҡасова

яҙып алған текста легенда экиәт стилендәрәк башланып китә. Ҡыҙыл Мәсеттә йәшәгән бер егет төшөндә бик һылыу бер ҡыҙ күрә. Күрә лә оҡшата. Шунан атаһына:

— Атай, мин төш юллап китәм, — ти. Китә. Төш юллап йөрөй торғас, Иләс (Ильяс) ауылына килеп сыға. Төшөндә күргән ҡыҙ Гөләйшә булған, имеш. Ҡыҙ ҙа уны оҡшата. Шунан аталары килеп, ҡоҙа-ҡоҙағый булышып, ҡыҙ менән йәрәшеп, көҙөн егет ҡайтып китә. Китер алдынан ҡыҙға:

— Мине ҡара ҡаҙ килер ваҡытта көт, — тигән...

Артабан ваҡиғалар китапта килтерелгән варианттағыса дауам итә. — БДУ, БӘФҠ, ФФ, д. 113, л. 89—91.

«Турат» легендаһының 1968 йылда Хәйбулла р-нының Турат ауылында Төхфәт Ҡунаҡасовтан яҙып алынып, матбуғатта донъя күргән тағы бер варианты бар. Был вариантта шулай уҡ һылыу ҡыҙҙы төштә күреү һәм егеттең уны эҙләп китеү мотивы урын ала. Ҡыҙ йортона егет атаһы менән толпарға атланып килә. Егеттең атаһы был тарафҡа ниңә аяҡ баҫҡанын аңлатып: «Һиндә һунар булһа, миндә һунарсы, һиндә тауар — миндә тауарсы бар», — ти. Ҡул һуғышып, ҡалымына мең баш мал ҡуйып, ҡоҙа-ҡоҙағый, кейәү-килен булышып, ата һәм ул ҡушлап ҡайтып китәләр. Егет әйтә ҡыҙға: «Ҡыш килмәм, яҙ килермен. Ҡара ҡаҙҙар менән бергә килермен. Мин килгәнде бер кемгә лә әйтмәҫһең», — ти. Егеттең икенсе тапҡыр килеүе, еңгәләр менән булған эпизод, күҙ тейеүҙән толпарҙың үлеүе кеүек ваҡиғалар башҡа варианттарҙағыса. Артабан текста фажиғә мотивтары көсәйә: иленә кире әйләнеп ҡайтып барғанда, кейәү үлеп ҡала. Үлем хәбәрен ишеткән Көнһылыу һыуға ташланып үлә. Был варианттың үҙенсәлекле яғы тағы ла шунда, текста «Турат сағылы» көйөнөң йырҙары бирелгән:

Ҡыр ҡаҙҙары ҡунды, һай, туғайға,
Тураткайым ҡунды сағылға.
Әжәл елен һиҙеп кешенләне,
Бер боролоп килгән яғына.
Сылтыр-сылтыр көмөш йүгәндәре,
Эйәр ҡашҡайҙары алтынлы.
Сит-ят ҡарап, харап ҡына итте
Аҡ ҡанатым, толпар атымды.
(Ағиҙел, 1969, № 4. 119—120-се б.)

Легенданың 1938 йылда яҙып алынған вариантында кейәү егете Тамъян яғынығы итеп телгә алына. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 12, д. 294, л. 68.

1966 йылда Хәйбулла р-ны Бүребай ауылында яҙып алынған вариантта кейәү — ҡаҙаҡ егете. Ул бер башҡорт ҡыҙын ҡоҙалап йөрөй, әммә ҡыҙҙы алырға ризалыҡ ала алмай. Аптырағас, был ҡыҙҙы урлап китергә була. Ошо ниәт менән туратҡа атланып, башҡорт иленә килә. Атын тау башындағы урманға йәшерә лә кисен ауылға юл тота. Ҡанат йәйеп ятҡан толпарын бер башҡорт күтөүсеһе күреп ҡала...

Башҡа варианттарҙан айырмалы рәүештә был сюжетта тураттың үлеүе һүрәтләнмәй. — Материалы и исследования. С. 127.

52. **Ҡейәүташ.** Күгәрсен р-ны Ишбирҙе ауылы Ғ. Әбйәлиловтан М. Әҙелғужин яҙып алған. — БЛ, 144—145-се б.; БХИ, РЛ, № 73; БПЛ, № 17; БНТ, ПЛ, № 50.

[1] Нукай — Күгәрсен районындағы ауыл.

53. **Бәйғәмбәр ташы.** 1982 йылда Өфөлә Фәриҙә Игебаеванан (Йылайыр р-ының Ҡаҙырша ауылында йәшәй) Ф. А. Нәҙершина яҙып алып, рус теленда тәржемә итеп баҫтырған: БНТ, ПЛ, № 34. Төп нөсхә һаҡлана: Ғилми архив, ф. 3, оп. 73, д. 72, л. 252.

54. **Ярыштау.** 1989 йылда Дәүләкән р-ының Көрмәнкәй ауылында Мөһөрбаныу Суфиян ҡыҙы Сөләймәнованан (1915 йылғы) Ф. А. Нәҙершина яҙып алған. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 92, д. 9, л. 217.

55. **Тимербай түше.** Паспорты билдәһеҙ.

56. **Ҡурыуҙы.** 1971 йылда Бөрйән р-ны Нәби ауылы Һатыбалов Юныс Әбделхәким улынан (1891 йылғы) М. М. Сәғитов яҙып алған. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 65, д. 7, л. 330; БХИ, РЛ № 74; БПЛ, № 18; БНТ, ПЛ, № 36.

«Бабсаҡ менән Күсәк» әҫәренә бәйле риүәйәт.

[1] Байназар — Бөрйән районындағы ауыл.

[2] Бабсаҡ бей менән Ҡарағөлөмбәт бей — был исемдәр Ҡыпсаҡ ырыуы шәжәрәһендә лә иҫкә алына. — БШ, 106-сы б.

57. **Ҡараһыйыр яланы.** 1966 йылда Бөрйән р-ны Мөсәт ауылы Шәмиғолов Ғиләж Ғәйнетдин улынан А. А. Ҡамалов яҙып алған. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 63, д. 56, л. 109; БХИ, РЛ, № 75; БПЛ, № 48; БНТ, ПЛ, № 35.

[1] Күсәк — төрки исем, боронғо формаһы Кәүсәк — һылыу, ыҫпай тигән мәғәнәне аңлата (Ҡарағыҙ: Малов С. Е. Памятники древнетюркской письменности. — М.—Л., 1951. С. 396).

[2, 3, 4] Иҫке Усман, Яңы Собханғол, Тимер — Бөрйән районындағы ауыл исемдәре.

58. **Аҡһыйыр ташы.** 1964 йылда Мәләүез р-ының Аҡбута ауылында Маһазов Ғәйнислам Шәйхислам улынан Л. Г. Бараг яҙып алған. Башҡортсаға Рәми Ғарипов тәржемәһе. — Ск. Башк., 1969.

59. **Бей кисеүе.** 1971 йылда Бөрйән р-ны Нәби ауылы Юныс Һатыбаловтан М. М. Сәғитов яҙып алған. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 65, д. 7, л. 330; БХИ, РЛ, № 76; БПЛ, № 38; БНТ, ПЛ, № 81.

[1] Архивтарҙа «Бабсаҡ менән Күсәк» эпосына бәйле тағы бер нисә яҙма бар. Улар йөкмәткеһе буйынса, нигеҙҙә, бер-береһен ҡабатлай.

60. **Ҡанъятҡан баҫыуы.** 1972 йылда Ишембай р-ны Һайран ауылы Мирасов Шакир Тимерғәле улынан (1886 йылғы) А. А. Ҡамалов яҙып алған. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 63, д. 65, л. 80; БХИ, РЛ, № 43; БНТ, ПЛ, № 82.

[1] Торатау — Стәрлетамаҡ ҡалаһының көнсығышындағы тау. Был тауҙы хандар урыны тип ҡарау шәжәрәләрҙә лә осрай. — БШ, 77-се б.

«Хан ятҡан — ҡан ятҡан» тигән мәҡәл дә бар.

61. **Ҡанлыкүл.** 1962 йылда Архангель р-ны Яңы Ҡыҙылъяр ауылы Галин Әхмәт Ғилман улынан (1897 йылғы) Ә. М. Сөләймәнов яҙып алған. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 63, д. 56, л. 37; БХИ, РЛ, № 78; БПЛ, № 39.

[1, 2] Ҡаракүл, Аҡташ — Башҡортостандың Архангель р-нына ҡараған топонимдар.

[3] Ир хан менән ҡыҙ хан (ир батша менән ҡыҙ батша) һуғышы мотивы — башҡа халыҡтар ижадында ла осраған традицион мотив.

[4] Аҡкүл — Башҡортостандың Ғафури районындағы күл.

[5] Иҫке Ырныҡшы, Яңы Ырныҡшы — Архангель районындағы ауыл исемдәре.

[6] Легенданың 1886 йылдар тирәһендә М. Өмөтбаев яҙып алған вариан-

тында ваҡиғалар Бүгәс менән Салауат яуы ваҡытына (1773—1775) ҡайтарып ҡалдырыла. Пугачевсылар менән Әбей батша һалдаттары ҡанҡойғос һуғыштарҙы оҡшатмайынса, үҙ урынын ташлап киткән Ҡанлыкүл тураһында М. Өмөтбаевтың тарихи яҙмалары араһында түбәндәге юлдар бар: «Кеше һәм ат ҡанынан ҡып-ҡыҙыл төҫкә ингән күл өҫтөндә томан күтәрелеп тора ла, ҡапыл ғына ҡалҡынып, болот рәүешендә Ағиҙелдең үренә, төшкөләккә ҡарай осоп китә. Томандан һуң ул күл урынында бары мәте генә ятып ҡала. Томан Ағиҙелдең һул ярына, Ноғоҙаҡ * ауылы янына барып төшә һәм Аҡкүл тип йөрөтөлгән күлдә барлыҡҡа килтерә». — Ғилми архив, ф. 3, оп. 12, д. 108, л. 139.

Ишмөхәмәт Хәмиҙуллин яҙып алған вариантта ла Бүгәс менән Салауат яуы ваҡытындағы ваҡиғалар һүрәтләнелә. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 47, д. 60, л. 17—19.

62. **Әүлиә тауы.** 1972 йылда Әлшәй р-ны Морҙағол ауылы Ниғмәтйәнов Ғәлимйән Ниғмәтйән улынан (1903 йылғы) М. М. Сәғитов яҙып алған. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 65, д. 9, л. 82; БХИ, РЛ, № 79; БПЛ, № 19; БНТ, ПЛ, № 33.

Риүәйәттең йөкмәткеһенә ҡарағанда (Көнсығыштан Урал аша атылып килгән ҙур яу, ул яуҙың халыҡтарҙы, ырыуҙарҙы иҙеп-тапап килеүе, һ. б.), һүрәтләнгән ваҡиғалар монгол яуы, Аҡһаҡ Тимер походы дәүеренә ҡайтып ҡала булһа кәрәк. Ҡайһы бер эпик ҡомартҡыларҙан күренеүенсә, был осорҙа мең ырыуы башҡорттарының ғәскәр башында Иҙеүкәй батыр торған. Ихтимал, легендала уның хаҡында һүҙ баралыр.

63. **Аҙан ташы.** 1971 йылда Күгәрсен р-ны Үрге Сорғояз ауылы Ғөбәйҙуллин Мәхмүт Ҡорбан улынан (1909 йылғы) М. М. Сәғитов яҙып алған. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 65, д. 7, л. 165; БХИ, РЛ. № 80; БПЛ, № 19; БНТ, ПЛ, № 28.

[1] Аҡауаз — Ағиҙелдең һул ярындағы ауыл, Күгәрсен районына ҡарай.

[2] Шул уҡ 1971 йылда М. М. Сәғитов тарафынан Бөрйән р-ны Байназар ауылында Минһажетдин Шәрәфетдиновтан (1885 йылғы) «Аҙанташ» риүәйәтенең тағы бер варианты яҙып алынған: «Ялан сығыр саҡты, Мәҡсүттән түбән, бер башҡорт егете яу ваҡытында ошо тауҙа ҡасып йәшенеп ҡалған. Бер ваҡыт ул аҙан әйтеп намаҙ уҡырға булған. Бейек ҡая башына баҫып аҙан әйткән. Ике туғай түбән ете ҡыҙ аҙан тауышын ишетеп, егет янына килгәндәр. Шунан был тирәлә халыҡ күбәйеп киткән, ти». — Ғилми архив, ф. 3, оп. 65, д. 7, л. 165.

Риүәйәттең 1964 йылда Бөрйән р-ны Ҡотан ауылы Ғ. С. Ғәҙелшиндан Л. Г. Бараг менән Р. Һиҙиәтуллина яҙып алған варианты түбәндәгесә:

«Ырғыҙлы ауылынан аҫтараҡ, Ағиҙелдең һул яҡ ярында, мәсет манараһына оҡшаш Аҙанташ тигән бер ҡая бар.

Ҡасандыр, бик борон заманда, Йомағужа башҡорттары үҙенең мәсете менән дан тотҡан Мәсетле (хәҙерге Ҡотан) ауылына ураҙа байрамына барырға тип сыҡҡандар, имеш. Тик; ни эшләптер, юлда тотҡарланып, былар мәсеткә барып етергә һуңлап китәләр. Инде ни хәл ҡылмаҡ? Бына шул саҡ мәсет манараһына оҡшаш ҡаяны күреп ҡалалар ҙа, ошо ҡая башына ғына менеп, ғибәҙәт ҡылмаҡсы булалар. Манараһы булғас, аҙансыһы ла табыла!..

Ысын булғандырмы был хәл, юҡмы — уныһы билдәһеҙ. Шулай ҙа ҡая һаман «Аҙанҡысҡырған таш» булып тора бирә...» — Ск. Башк., 1969. С. 110.

64. **Ҡалатау.** 1988 йылда Мишкә р-нының Оло Шаҙы ауылында Ситдиков

* Н о ғ о ҙ а ҡ — хәҙерге Ауырғазы районына ҡараған ауыл.

Фәтих Ситдыҡ улынан (1923 йылғы, тулы булмаған юғары белемле, физика-математика уҡытыусыһы) Ф. А. Нәзершина яҙып алған. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 93, д. 7, л. 49.

[1] Ҡалатауҙар хаҡындағы аңлатманы ошо китаптың 74-се битенән ҡарағыҙ.

[2] Түбәтәй менән балсыҡ ташып тау, ҡәберлек өйөү — традицион мотив. Ул башҡа халыҡтарҙың фольклорында ла йыш осрай.

**65. Үлеклекүл.** 1964 йылда Әлшәй р-ны Сапай ауылы Солтан Ғабдрахмановтан (69 йәшлек) М. М. Сәғитов яҙып алған. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 47, д. 1, л. 65; БХИ, РЛ, № 81.

**66. Теләү үҙәге.** 1967 йылда Хәйбулла р-ны Аҡнаҙар ауылы Ихсан Юламановтан (1921 йылғы) Ә. М. Сөләймәнов яҙып алған. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 63, д. 56, л. 50; БХИ, РЛ, № 82; БПЛ, № 44; БНТ, ПЛ, № 33.

[1] Башҡорт һәм ҡаҙаҡ ырыуҙары араһындағы барымта күреșештәре 1973 йылда яҙып алынган «Ҡаҙаҡтар тауы» исемле риүәйәттә лә сағыла. Бында яу сабыуҙарҙы ойоштороусы булып ҡаҙаҡ байы Сәйет һүрәтләнә. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 63, д. 56.

**67. Ҡолкөрәшкән тау.** 1965 йылда Баймаҡ р-ны Темәс ауылы Сәлихов Мотаһар Ташбулат улынан (1912 йылғы) Б. Шәрипов яҙып алған. — Ск, Башк., 1969, с. 100; БХИ, РЛ, № 83 (Р. Ғарипов тәржемәһе); БНТ, ПЛ, № 55 (тәүге баҫма буйынса).

**68. Фатима туғайы.** 1967 йылда Йылайыр р-ны Мәҡсүт ауылы Моратов Әмир Иҙрис улынан А. А. Ҡамалов яҙып алған. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 63, д. 56, л. 76—77; БХИ, РЛ, № 84; БПЛ, № 45; БНТ, ПЛ, № 85.

[1] Туғай — Мәҡсүт ауылынан алыҫ түгел, Һынташ ауылынан түбән, Һаҡмар буйында.

**69. Батмағош туғайы.** Йылайыр р-ны Исҡужа ауылы 69 йәшлек Айса Яманғоловтан А. Яманғолова-Таһирова яҙып алған. — БДУ, БӘФҠ, ФФ, д. 111, л. 27—28; БХИ, РЛ, № 85.

**70. Толпарбаҫҡан таш.** 1971 йылда Өфө ҡалаһында Учалы р-ны Сәфәр ауылы Миңнебай Юлмөхәмәтовтан Ә. М. Сөләймәнов яҙып алған. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 63, д. 56, л. 41—42; БХИ, РЛ, № 86.

[1] Ҡужай — Учалы районындағы ауыл.

[2] Толпарбаҫҡан ташҡа тәңкә һалыу — толпарҙы изгеләштереп ҡарауҙың асыҡ сағылышы.

**71. Аҡсатүбә.** 1965 йылда Учалы р-ны Миндәк поселогында прииск эшсеһе Байғазин Нәжип Ғәбделлатип улынан (1906 йылғы) Б. Шәрипов яҙып алған. — Ск. Башк., 1969, с. 100; БХИ, РЛ, № 87 (Р. Ғарипов тәржемәһендә).

Риүәйәттең Н. Шоңҡаров яҙып алған икенсе бер вариантында башҡорт батырының исеме — Ҡорос. Яуҙа Ҡоростоң ағаһы Ҡилдеш тә ҡатнаша. Ҡаҙаҡ яғынан Аҡша батырҙан тыш Мөғәш батыр исеме телгә алына. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 47, д. 3, л. 12—15.

«Ҡарас менән Аҡша» исемле эпик әҫәр ҙә бар. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 12, д. 445, л. 16—21.

[1] Үрге Йәйыҡ, Истамғол — Учалы районындағы ауыл исемдәре.

**72. Дөйөмбәт тауы.** 1960 йылда Ырымбур өлк. Новосергеевка р-ны Мерәҫ ауылы Мерәҫова Бибикамал Ғимран ҡыҙынан (1892 йылғы) Н. Шоңҡаров яҙып алған. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 21, д. 3, л. 424; БХИ, РЛ, № 88; БНТ, ПЛ, № 30.

[1] Сабаҡ тирәһе — риүәйәттең йөкмәткеһенә ҡарағанда, Ырымбур өлкәһендәге ер исеме.

73. **Ырғыҙ.** Өфөлә Ғәзизә Мостафинанан (Куйбышев өлк. Больше-Черниговск р-нының Хәсән ауылында тыуып үҫкән) Хәлимә Ҡорбанаева яҙып алған. — БҠ, 1969, № 4, 19-сы б.; БХИ, РЛ, № 89; БПЛ, № 40; БНТ, ПЛ, № 77.

[1] Ат тояғы баҫҡан, йә үгеҙ мөгөҙө тейгән ерҙән һыу (йылға, күл) барлыҡҡа килеү — был малдарҙың изгелекле йән эйәһе итеп иҫәпләнеүенә ишара. Был традицион мотив башҡа халыҡтарҙың фольклорында ла осрай.

74. **Ырғыҙ** (вариант). Куйбышев өлкәһе Большая Глушица ауылында П. Русяев («Степные известия» гәзите мөхәррире) яҙып алған. Ҡемдән, ҡасан яҙылыуы билдәле түгел. Легенда бер ни тиклем әҙәбиләштерелгән. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 63, д. 56, л. 110—111.

[1] Ҡалмыҡтар менән бәрелеш мотивы башҡа варианттарҙа ла осрай. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 21, д. 6, л. 249.

75. **Ҡалмаҡ яткан яланы.** 1982 йылда Өфө ҡалаһында Фәриҙә Игебаеванан Ф. А. Нәҙершина яҙып алған (информатор Йылайыр районының Ҡаҙырша ауылында йәшәй). — Шәхси архивтан.

76. **Ҡырғыҙ айырыһы.** 1970 йылда Бөрйән р-ны Ғәлиәкбәр ауылында уҡытыусы Сабитов Хәмит Ибраһим улынан (1926 йылғы) Ә. М. Сөләймәнов яҙып алған. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 63, д. 56, л. 112; БХИ, РЛ, № 91; БПЛ, № 46; БНТ, ПЛ, № 38.

[1] Тупраҡты күнәк, йәки бүрек менән ташып, яуҙа үлгән батырҙы күмеү — традицион мотив. Ул башҡа халыҡтар фольклорында ла осрай.

77. **Аҡын (Аҡҡашҡа) тауы.** 1971 йылда Бөрйән р-ны Мәҡсүт ауылы Мостафин Абдулла Вәли улынан (1898 йылғы) М. М. Сәғитов яҙып алған. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 65, д. 7, л. 163; БХИ, РЛ, № 92; БНТ, ПЛ, № 32.

78. **Ҡарасйылға.** Бөрйән р-ны Яңы Мөсәт ауылы Ҡолбирҙина Фариза Исмәғил ҡыҙынан (1888 йылғы) уҡытыусы Ә. Уразаев яҙып алған. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 63, д. 56, л. 69; БХИ, РЛ, № 93.

79. **Яҡтыкүл.** 1963 йылда Әбйәлил р-ны Ташбулат ауылы Зиннур Харисовтан (1925 йылғы) Н. Хәмитов менән Ә. Сөләймәнов яҙып алған. — БЛ, 143-сө б.; БХИ, РЛ, № 94.

[1] Риүәйәттең икенсе бер версияһында атама 1773—1775 йылғы Крәҫтиәндәр һуғышы ваҡиғаларына бәйләп аңлатыла; имеш, Е. Пугачев менән С. Юлаев Яҡтыкүл буйында туҡтап, һалдаттарын ял иттереп, мунса индереп киткәндәр. Шуға күрә күл Банное озеро исеме алып киткән, тиелә. — Материалы и исследования. С. 141.

80. **Мауыҙлы күл.** 1981 йылда Әбйәлил р-ны Байым ауылы Хажмөхәммәт Ғабдуллиндан Ғ. Б. Хөсәйенов яҙып алған. — АЭМ, 1979.

81. **Биллеғылыс.** 1972 йылда Ауырғазы р-нында Ә. Х. Вахитов яҙып алған. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 65, д. 9, л. 88.

[1] Мораҙым аҡһаҡал — риүәйәт буйынса, Мораҙым ауылына нигеҙ һалыусы кеше. «Мораҙым йылғаһы» тигән риүәйәттә Мораҙым — тирә-яҡҡа дан тотҡан батыр.

[2] Өршәк — Башҡортостандың көньяҡ-көнбайышындағы йылға. Ағиҙелдең һул ҡушылдығы.

82. **Дүнәнһуйған тау.** 1965 йылда Белорет р-ны Татлы ауылында Фәхретдинов Ғилметдин Шәмсетдин улынан (1932 йылғы) Л. Г. Бараг яҙып алған. — Ск. Башк., 1969, с. 114; БХИ, РЛ, № 95 (Р. Ғарипов тәржемәһе).

**83. Антон ҡаяһы.** 1971 йылда Бөрйән р-ны Ҡотан ауылы Ырыҫбаев Ғиниәт Ғиззәтулла улынан (1908 йылғы, бөрйән ырыуы башҡорто) М. М. Сәғитов яҙып алған. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 65, д. 7, л. 156—157; БХИ, РЛ, № 96; БПЛ, № 22; БНТ, ПЛ, № 46.

[1] Ырғыҙлы — Бөрйән районындағы ауыл.

[2] Риүәйәттең был вариантында Антондың ни өсөн хеҙмәтенә ҡайтмауы хаҡында асыҡ ҡына әйтелмәй. Ул хаҡта шул уҡ Бөрйән р-нында яҙып алынған икенсе бер вариантта телгә алына: «Ҡокардамды юғалттым! Ул бит хөкүмәт (дәүләт) гербы!» / Ск. Башк., 1969, С. 104—206. Ошо уҡ мотив 1939 йылда Бөрйән районының Кейекбай ауылында Ғ. Әмири тарафынан яҙып алған вариантта ла урын ала. Бында Антон землемерға юл күрһәтеп йөрөүсе кеше итеп һүрәтләнә. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 32, д. 26, л. 5.

**84. Антон ҡаяһы** (вариант). Бөрйән р-ны Ҡотан ауылы Галин Таһир Ҡондоҙбай улынан (1860 йылғы) Н. Д. Шоңҡаров яҙып алған // Ленинсы, 1962, 28 август; БХИ, РЛ, № 97.

Антон ҡаяһы (Антон-таш, Антон мәмерйәһе) исемендәге риүәйәт Бөрйән районында бик киң таралған. Антонды әүлиә тип тә, Вознесен заводының ҡарауылсыһы, байҙарға ҡаршы сығыусы юлбаҫар һәм хатта революционер тип һөйләүселәр ҙә бар. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 65, д. 7, л. 159—160.

Риүәйәттең 1878 йылда М. Лоссиевский тарафынан «Оренбургский листок» гәзитендә (№ 36, 5 сентябрь) баҫтырылған вариантында Антон Е. Пугачев замандарында йәшәгән сихырсы итеп һүрәтләнә. Ул шул уҡ ваҡытта Вознесен заводында эшләүсе крәҫтиән дә икән. Завод түрәләренә буйһоноуҙан ялығып, Антон әҙәм менә алмаҫлыҡ ҡаяға ҡаса, сихырсылыҡ көсө менән үҙенә бер ҡаянан икенсе ҡаяға күпер һала һәм мәмерйәлә йәшәй башлай. Артабан риүәйәттә бик ентекләп Антондың мәмерйәләге көнкүреше һүрәтләнә. Башҡа варианттарҙан айырмалы рәүештә, бында ҡаҫҡындың Вознесен заводында эшләүсе бер ҡыҙҙы урлап алып килеп, шуның менән донъя көтөүе һөйләнә.

Ҡөндәрҙең береһендә Антон Пугач тигән кешенең ҡалаларҙы талап, үҙенә буйһонмаған халыҡты ҡырып йөрөүен ишетеп ҡала. Хужалығын, байлығын, ҡатынын ҡалдыра ла, Ырымбур янында торған Пугачты ҡыйнарға китә был. Ҡайҙа инде Пугачка көс етеү, тиелә риүәйәттә. — Пушкаларҙан атып ебәреү менән, Антондың сихырсылыҡ ҡеүәһенән бер нәмә лә ҡалмай, үҙе лә шул урында һәләк була.

**85. Митрофан ташы.** 1964 йылда Бөрйән р-ны Ҡотан ауылы Ғәҙелшин Ғәли Суфиян улынан (1905 йылғы) Л. Г. Бараг менән Р. Һиҙиәтуллина яҙып алған.— Ск. Башк., 1969. С. 107; БНТ, ПЛ, № 44; Р. Ғарипов тәржемәһендә: БХИ, РЛ, № 98.

Вар.: СЭ, 1974, № 1. С. 120—121.

[1] Лоцман Митрофан — XVIII быуатта йәшәгән кеше. «Ағиҙел йылғаһының хәтәр урындары» тигән ҡулъяҙма альбомда (1863) «Митрофан ташы»ның һүрәте аҫтында ошондай яҙыу ҙа бар: «Заводтарға нигеҙ һалыусы Владимир Демидов ваҡытында лоцман Митрошка бында барка ҡыйратҡан, шуның өсөн уға Демидов ҡушыуы буйынса үлем язаһы бирелгән» (журналист-яҙыусы Роман Алферовтың «Прочнее стали» (Уфа, 1954. С. 87) тигән китабын ҡарағыҙ.

[1] Ағиҙелдәге был таш Күгәрсен р-нының Үрге Бикҡужа ауылы тәңгәлендә.

[2] Муйнаҡташ — Күгәрсен районының Аҡбута ауылынан 8 км алыҫлыҡта, Ағиҙелдең уң яҡ ярындағы таш.

[3] Сыртлан — Башҡортостандың Мәләүез р-нындағы ауыл исеме.

86. **Максим төбө.** 1971 йылда Бөрйән р-ны Нәби ауылы Һатыбалов Юныс Әбделхәким улынан (1891 йылғы) М. М. Сәғитов яҙып алған. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 65, д. 7, л. 328—329; БХИ, РЛ, № 99; БПЛ, № 23; БНТ, ПЛ, № 43.

[1] Мораҙым — Бөрйән районындағы ауыл.

87. **Уктау (Уҡлы ҡая).** 1962 йылда Архангель р-ны Ҡыҫынды ауылы Ғ. Сәғиҙуллиндан Ә. М. Сөләймәнов яҙып алған. — БЛ, 164-сы б.; БХИ, РЛ, № 100; БПЛ, № 24.

Вар.: Ғилми архив, ф. 3, оп. 47, д. 31, л. 77.

[1] Еҙем — Ғафури һәм Архангель райондарындағы йылға, Ағиҙелгә ҡоя.

[2] Маҡаш — Ғафури р-нындағы тау.

88. **Хәлил ҡәберлеге.** 1959 йылда Әбйәлил р-ны Хәлил ауылы Шириязданов Әтекәевтән (1888 йылғы) яҙып алынған. — БЛ, 150—151-се б.; БХИ, РЛ, № 101; БПЛ, № 49.

89. **Даулы ҡыуаҡ.** 1972 йылда Әлшәй р-ны Маянған ауылы Хәмзә Рамазановтан (79 йәшлек) Ә. Х. Вахитов яҙып алған. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 65, д. 9, л. 92; БХИ, РЛ, № 102; БНТ, ПЛ, № 94.

[1] Мырҙағол — Әлшәй районына ҡараған ауыл исеме.

[2], [3] Төрөмбәт, Дөйәбатҡан — Ауырғазы районына ҡараған ауылдар.

[4] Меркет менә — Меңле исемендә йөрөгән башҡорт ҡәбиләһенең бер ырыуы.

90. **Йәҙрәле һаҙ.** 1941 йылда Ҡыйғы р-ны Ҡыйғы ауылында 70 йәшлек Мәғәфүр Баһауетдин улынан (фамилияһы күрһәтелмәгән) Ә. Усманов яҙып алған. — Усманов, 1945, 50-се б.; БХИ, РЛ, № 103.

91. **Ҡыҙҙар күле.** 1963 йылда Ҡариҙел р-ны Атамановка поселогында И. Д. Мокроусовтан (1898 йылғы) Л. Г. Бараг яҙып алған. — «Про бая, его дочек и Кызлярское, или Девичье озеро» исемендә баҫылған. — Ск. Башк., 1969, 102; Р. Ғарипов тәржемәһендә: БХИ, РЛ, № 104.

[1] Елдәк крепосы — Башҡортостандың хәҙерге Ҡариҙел р-нына ҡарай.

[2] Әсит — Ҡариҙел районындағы ауыл исеме.

[3] Ташаулы, Иҙелбай, Мәхмүт, Күҫә, Мырҙалар Арҡауылы — Башҡортостандың Салауат районындағы ауылдар.

[4] ...Ә күл эргәһендәге еләк йыйған тауҙы «Ҡыҙҙар тауы» тип йөрөтәләр. Шунда ғына «Көҫәмбәт тауы» менән «Көҫәмбәт йылғаһы» ла бар. — Тәржемәсенең иҫкәрмәһе.

92. **Ар ташы.** 1961 йылда Белорет ҡалаһында М. И. Агафониеванан (1896 йылғы) Г. Суфиянова яҙып алған. — Ск. Башк., 1969. С. 102. Р. Ғарипов тәржемәһендә: БХИ, РЛ, № 105.

[1] Тарихи документтарҙан билдәле булыуынса, Е. И. Пугачев Белорет заводы поселогына 1774 йылдың апрелендә килеп инә. Ар ташы тирәһендәге урында ысынлап та ҡаты бәрелештәр була, ләкин Крәҫтиәндәр һуғышы тарихында Генерал Арскийҙың исеме билдәле түгел. Был — уйҙырма образ. Риүәйәт төрлө яҙмаларҙа бер нисә мәртәбә рус телендә баҫылып сыҡҡан: Колпакова Н. П. Новые записи рабочего фольклора на Южном Урале // Ученые записки ЛГУ, серия филологическая, вып. 12. — Л., 1941; Алферов Р. А. Прочнее стали. — Уфа, 1954. — С. 47; Материалы и исследования, с. 137.

93. **Йәркәй тауы.** 1966 йылда Күгәрсен р-ны Бикбулат ауылы Кинйәбаев

Мәхиән Мәрхәмиғулла улынан (1891 йылғы) А. А. Камалов яҙып алған.— Ғилми архив, ф. 3, оп. 63, д. 56, л. 113; БХИ, РЛ, № 106; БПЛ, № 25; БНТ, ПЛ, № 47.

[1] Һурәм — Күгәрсен районындағы утар исеме.

[2] Быҙаулыҡ — хәҙерге Ырымбур өлкәһендәге ҡала һәм район исеме.

**94. Көмәс тауы.** 1966 йылда Учалы р-ны Илсеғол ауылы Нурғәли Бикбулатовтан (1896 йылғы), Әхмәтйән Имашев (1902 йылғы) һәм Сөнәғәтулла Ғәбитовтан (1892 йылғы) М. Хисаметдинова яҙып алған. — БЛ, 149-сы б.; БХИ, РЛ, № 107.

**95. Барҙымса тауы. Ғәле Барҙымсаһы.** 1984 йылда Баймаҡ р-нының II Этҡол ауылында Ирназаров Әбүбәкерҙән (1903 йылғы) Ф. А. Нәҙершина яҙып алған. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 92, д. 1.

**96. Атанғол йылғаһы.** 1970 йылда Бөрйән р-ны Иҫке Собханғол ауылы Ноғман Ишкилдиндан Ә. М. Сөләймәнов яҙып алған. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 63, д. 56, л. 32—36; БХИ, РЛ, № 108; БНТ, ПЛ, № 79.

[1] Ҡолбаҡты — Бөрйән районындағы ауыл исеме.

[2] Был топонимик риүәйәт бер үк ваҡытта изге ҡаҫҡындар циклына ла ҡарай.

**97. Һандыҡташ йәки Исламғол ҡурай тартҡан таш.** 1964 йылда Бөрйән р-ны Ырғыҙлы ауылы Е. Самохиндан Л. Г. Бараг һәм БДУ талиптары А. Гришина менән Е. Швецова яҙып алған. — Ск. Башк., 1969. С. 10. Р. Ғарипов тәржемәһендә: БХИ, РЛ, № 109; БНТ, ПЛ, № 58.

**98. Туйтүбә.** Учалы р-ны Яңы Байрамғол ауылы Флүзә Әхмәҙиеванан Ләүизә Әхмәҙиева яҙып алған. — БДУ, БӘФК, ФФ, д. 1, л. 587—588; БХИ, РЛ, № 110; БНТ, ПЛ, № 56.

**99. Тураташ.** 1964 йылда Балаҡатай р-ны Красный пахарь ауылында Мәүзиә Кәбированан Ф. Зиалова яҙып алған. — БЛ, 143—144-се б.; БХИ, РЛ, № 111; БПЛ, № 13; БНТ, ПЛ, № 20.

[1] Ҡатын ҡалған һындар хаҡындағы мотив — бик боронғо, ул башҡа халыҡтар ижадында ла йыш осрай. — Кербелите Б. Литовские народные предания. — Вильнюс, 1965. С. 10; Дорога Мгера. Армянские легенды и предания. — М.: Наука, 1990. С. 92—101.

Башҡорт халҡының ауыҙ-тел ижадында һынташтар тураһындағы сюжеттар байтаҡ. «Бейташ» менән «Киленташ» исемле риүәйәт һәм легендаларҙың мәҫәлән, революцияға тиклем үк матбуғатта баҫылыуы билдәле («Екатеринбургская неделя», 1888, № 29). Ул таштар хаҡында Силәбе өлкәһендә әле лә легендалар йәшәй. Ҡалды күле эргәһендәге бер һынташтың һөт* һарҡып тороуы тураһындағы легендала ла үҙенең архаик мотив һаҡлауы менән (алмаштырылған ҡатын-ҡыҙ-әсә) айырыуса әһәмиәтле. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 26, д. 10, л. 19—20.

«Киленташ» исемле таш Башҡортостандың Әлшәй районы Ташлы ауылы эргәһендә лә бар. Уның легендаһын ҡарағыҙ: Ск. Башк., 1969. С. 113.

Һынташтар тураһындағы легендаларҙың нигеҙендә боронғо ҡараштар, һүҙҙең магик көсөнә ышаныу ята.

**100. Һарыбашташ.** 1954 йылда Бөрйән р-ны Ҡуаламат ауылында М. Туленковтан (1907 йылғы) Л. Г. Бараг яҙып алған. — Ск. Башк., 1969. С. 110; БНТ, ПЛ, № 26.

---

* Аҡһыл төҫтәге һыу һөт итеп ҡабул ителгән булһа кәрәк.

**101. Инсебикәташ.** 1979 йылда Бөрйән р-ны Иҫке Собханғол ауылында М. Ш. Сәйетбатталовтан (1909 йылғы) Ғ. Б. Хөсәйенов яҙып алған. — АӘМ, 1979; БХИ, РЛ, № 113; БПЛ, № 26; БНТ, ПЛ, № 52.

Вар.: Ғилми архив, ф. 3, оп. 65, д. 7, л. 166; Ф. 3, оп. 63, д. 56, л. 86.

**102. Сәлимәкаҫкан таш, Ҡейәүсапҡан таш.** Баймаҡ р-ны Ғәҙелша ауылы Нәзирә Хәлилованан (90 йәштәрҙә) Һ. Шәйҙуллин яҙып алған. — БДУ, БӘФК, ФФ, д. 112, л. 56—57; БХИ, РЛ, № 114.

[1] Риүәйәттең шул уҡ Шәйҙуллин яҙып алған икенсе вариантында, Сәлимә ҡасыу менән, ире, аптырағас, йырлап ебәрә:

Аҡминде һыуы ташып бара,
Аҡ таш менән быуайыҡ.
Сәлимәкәй ҡасып бара,
Ҡашҡа ат менән ҡыуайыҡ.

Бында ире Сәлимәне ҡыуып етә алмай.

**103. Йөрәктау.** Матбуғатҡа Әниф Бикҡолов әҙерләп биргән: СБ, 1965, 6 октябрь (кемдән, ҡасан яҙылыуы күрһәтелмәгән). — БХИ, РЛ, 115; БПЛ, № 27; БНТ, ПЛ, № 53.

[1] Й ө р ә к т а у — Стәрлетамак ҡалаһынан алыҫ түгел, Ағиҙелдең уң яҡ ярында.

**104. Әлембикә йылғаһы.** 1973 йылда Ишлайыр р-ны Исҡужа ауылы Рамазан Аҡтаевтан (1904 йылғы) Ә. Яманғолова-Таһирова яҙып алған. — БДУ, БӘФК, ФФ, д. 111, л. 32; БХИ, РЛ, № 115.

[1] И р ә н е ш — Йылайыр, Баймаҡ райондары аша аҡҡан йылға.

**105. Йәүһәр ҡыуағы.** 1954 йылда Ейәнсура р-ны Саҙалы ауылы Вәлиулла Яҡшыбаев менән Муллағол Яҡшыбаевтан Ө. Яҡшыбаева яҙып алған. — БЛ, 151-се б.; БХИ, РЛ, № 117; БПЛ, № 51; БНТ, ПЛ, № 93.

**106. Сәфәртуй яланы.** Ишембай р-ның Иҫәкәй ауылында Йәмилә Абдуллинанан талибә Хужиәхмәтова Ф. яҙып алып, фольклорсы М. Ә. Мәмбәтовҡа тапшырған.

**107. Ҡилен тауы.** Архангель р-ны Аҡъяр ауылы Фәрит Ишкилдиндан Ә. М. Сөләймәнов яҙып алған. — БЛ, 145-се б.; БХИ, РЛ, № 118; БПЛ, № 28; БНТ, ПЛ, № 57.

[1] С ы с ҡ а н — Башҡортостандың Белорет районындағы ауыл. Икенсе исеме — Ғәбдүк.

[2] А р т ы л ы ш — Белорет, Архангель районындағы тау.

**108. Шәкирә һаҙаҡ атҡан йәйләүе.** 1966 йылда Ейәнсура р-ны Өмбәт ауылы Хәмҙиә Абдуллинанан (1906 йылғы) Ш. Баязитова яҙып алған. — БЛ, 150-се б.; БХИ, РЛ, № 119; БПЛ, № 50; БНТ, ПЛ, № 86.

**109. Йәнтаҫтарлаған тамағы.** 1969 йылда Мәләүез р-ны Һәргәй ауылы Ҡолсобаев Ташбулат Аллабирҙе улынан (1936 йылғы) А. А. Ҡамалов яҙып алған. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 63, д. 56, л. 79; БХИ, РЛ, № 120; БПЛ, № 152; БНТ, ПЛ, № 80.

[1] Һ ә р г ә й — Мәләүез р-ны Һәргәй ауылы эргәһендәге ялан исеме.

[2] Ҡ у р ғ а ш л ы менән Ҡ ө м б ә л ә к л е — Мәләүез районындағы йылға, тау исеме.

Риүәйәт туй йолаһының аҙ билдәле бер эпизодын сағылдырыуы менән әһәмиәтле.

110. Ҡоҙағыйүлгән ер. 1966 йылда Баймаҡ р-ны Таулыҡай ауылы Абзаков Әхмәт Ибраһим улынан (1915 йылғы) А. А. Камалов яҙып алған. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 63, д. 56, л. 52; БХИ, РЛ, № 121; БПЛ, № 53; БНТ, ПЛ, № 84.

[1] Ҡоҙағыйүлгән ер — I Әтҡол менән Шүлкә ауылдары араһында.

111. Абыҙ үлеге. 1966 йылда Ейәнсура р-ның Ибрай ауылында Б. Күсәрбаевтан К. Сәйетбатталова, Г. Мифтахова, В. Хөсәйеновалар яҙып алған. — БЛ, № 121; БПЛ, № 54; БНТ, ПЛ, № 88.

Икенсе версияһы: БНТ, ПЛ, № 89.

112. Ҡыҙҙар юлы. 1967 йылда Учалы р-ны Мәскәү ауылы Исхаҡов Ғиниәт Исхаҡ улынан (1887 йылғы) А. А. Камалов яҙып алған. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 63, д. 56, л. 45—47; БХИ, РЛ, № 122; БНТ, ПЛ, № 92.

[1] Хөзөргә сығыу — күңел асырға яланға сығыу. Аш-һыу әҙерләп, уйынкөлкө менән яҙҙы ҡаршылау, ҡарға бутҡаһы үткәреү һ. б. шуның кеүек йолалар элек-электән тәбиғәт ҡосағында уҙғарылыр булған. Хөзөр — хозур һүҙенән. Ғәрәпсә рәхәт, кәйеф, күңеллелек, шатлыҡ, күңел асыу тигәнде аңлата.

113. Ҡарабелгән туғайы. Бөрйән р-ны Яңы Мөсәт ауылы Ҡолбирҙина Фариза Исмәғил ҡыҙынан (1888 йылғы) Ә. Ураҙаев яҙып алған. — Бөрйән районының «Таң» гәзите, 1968, № 56; БХИ, РЛ, № 123.

114. Сыуаҡбатҡан тау. 1974 йылда Әбйәлил р-ны Дәүләтша ауылында Мәфтуха Булатова яҙып алған. — БДУ, БӘФК, ФФ, д. 10, л. 73—75, БХИ, РЛ, № 124; БПЛ, № 29; БНТ, ПЛ, № 59.

115. Түйенбәт тауы. Ырымбур өлк. Новосергеевка р-ны Мерәс ауылы Ғиниәт Хәйретдиновтан Ш. Агеев яҙып алған. — БЛ, 148 б.; БХИ, РЛ, № 125; БНТ, ПЛ, № 30.

116. Таҡыя сусаҡ. 1970 йылда Бөрйән р-ны Ғәлиәкбәр ауылы Х. Сабитованан (1926 йылғы) Ә. М. Сөләймәнов яҙып алған. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 63, д. 56, л. 40; БХИ, РЛ, № 126; БПЛ, № 30.

117. Айғыр тауы. 1965 йылда Белорет р-ны Ҡоҙашман ауылы Мөхәтдинов Зәйнулла Мөхәтдин улынан яҙып алынған. — Ск. Башк., 1969. С. 113; БНТ, ПЛ, № 24; Р. Ғарипов тәржемәһендә: БХИ, РЛ, № 127.

118. Муйнаҡташ. 1964 йылда Мәләүез р-ны Аҡбута ауылы Рәис Сәғитовтан (1952 йылғы) Л. Г. Бараг яҙып алған. — Ск. Башк., 1969. С. 109; БНТ, ПЛ, № 25; Р. Ғарипов тәржемәһендә: БХИ, РЛ, № 128.

Вар.: Ғилми архив, ф. 3, оп. 65, д. 7, л. 116«а».

[1] Боланташ менән Этташ хаҡындағы риүәйәттәр киң таралған (ҡарағыҙ: Предания реки Чусовой / Сост. В. П. Кругляшова. — Свердловск, 1961. С. 92—95.

119. Туҡ йылғаһы. 1962 йылда Ырымбур өлк. Люксембург р-ны Үргә Ильяс ауылы Әхмәткирәй Буранғоловтан яҙып алынған. — БЛ, 141—142 б.; БХИ, РЛ, № 129; БПЛ, № 41; БНТ, ПЛ, № 78.

120. Кәбәнташ йәки Байыш ташы. 1964 йылда Бөрйән р-ны Ҡуламат ауылы М. Туленковтан (1907 йылғы) яҙып алынған. — Ск. Башк., 1969. С. 109; БНТ, ПЛ, № 48.

[1] Кесе Аҡбулат — Бөрйән районындағы ауыл.

121. Мораҙым йылғаһы. Дәүләкән ҡалаһында йәшәүсе Мөлкәмән Хужиев тарафынан Р. З. Шәкүревкә яҙып ебәрелгән. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 63, д. 56, л. 4; БХИ, РЛ, № 131.

[1] Мораҙым йылғаһы — Димдең һул ҡушылдығы. Димгә Дәүләкән ҡалаһы янында килеп ҡоя.

**122. Асылыкүл**. Дәүләкән р-ны Буранғол ауылында Рәмилә Буранғолова яҙып алған. — БДУ, БӘФК, ФФ, д. 9, л. 143—145; БХИ, РЛ, № 132; БПЛ, № 42.

**123. Асылыкүл** (в а р и а н т). 1974 йылда Дәүләкән р-ны Ҡоръятмаҫ ауылы Сафиуллин Шакир Сафиулла улынан Вафа Әхмәҙиев яҙып алған. АӘМ, 1974, 141—142-се б.; БХИ, РЛ, № 133.

[1] Асылыкүлгә бәйле тағы бер риүәйәт-легенданы ошо китаптың 314—316-сы биттәренән ҡарағыҙ.

## ЫРЫУ-ҠӘБИЛӘ, АЙМАҠ-АРА АТАМАЛАРЫНА ҠАҒЫЛЫШЛЫ РИҮӘЙӘТ ҺӘМ ЛЕГЕНДАЛАР

### (Этнонимик һәм этногенетик риүәйәт, легендалар)

**124. «Башҡорт» һүҙе ҡайҙан килеп сыҡҡан.** 1961 йылда Саратов өлкәһенең Перелюб р-ны Ишембай ауылы Вәсиға Исламғолованан (1913 йылғы) М. Сәғитов яҙып алған. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 21, д. 6, л. 243; БХИ, РЛ, № 28; БПЛ, № 86; БНТ, ПЛ, № 114.

[1] Легенданың 1966 йылда Әбйәлил р-ны Таҡһыр ауылы Әбдүәмин Сабитовтан (1896 йылғы) С. Хөснөтдинов яҙып алған варианты (БЛ, 52-се б.) нигеҙҙә ошо текстҡа яҡын тора. Айырма деталдәрҙә генә. Хөснөтдинов вариантында, мәҫәлән, халыҡтың бүре өйөрөнә һөжүм итеп ҡарауы телгә алына. Өйөрҙөң килеп туҡтаған урыны ла бик конкрет — Урал буйы. «Уралға еткәс, бүре өйөрө туҡтаған. Бер көн үткән, ике, өс көн үткән, өйөр һис кенә лә ҡуҙғалмай икән. Шунан кешеләр: «Бүре өйөрө ҡуҙғалмағас, был ерҙә барҙыр, — тип уйлағандар. Ошо ерҙә төйәкләнергә булғандар», — тиелә легендала.

Изге кейек булараҡ, бүре бик күп халыҡтарҙың, шул иҫәптән төрки һәм монгол халыҡтарының мифологияһында ифрат киң урын алған образ. Р. Ғ. Кузеевтең тикшеренеүенән күренеүенсә, башҡорттарҙың бүре тураһындағы легендалары айырыуса оғуз һәм төрөкмән фольклорындағы сюжеттарға яҡын тора (Кузеев, 1974. С. 130—131). Сағыштырма материалдарҙы ҡарағыҙ: Нәҙершина Ф. А. Халыҡ хәтере. — Өфө, 1986, 54—56-сы б.

**125. Башҡорт ҡайҙан килеп сыҡҡан** (в а р и а н т). 1958 йылда Күгәрсен р-ны Ишбирҙе ауылы Ғилметдин Әбйәлиловтан М. Әҙелғужин яҙып алған. — БЛ, № 2; БХИ, РЛ, № 29; БПЛ, № 86 (1-се вар.); БНТ, ПЛ, № 115.

[1] Боронғо башҡорттарҙың йәшәү урынын легендалар төрлөсә һүрәтләй. Был текста «тәрәк яғы» хаҡындағы мәғлүмәт иғтибарға лайыҡ. Ҡайһы бер боронғо башҡорт (башдгурд, баджардж, башгирд) ҡәбиләләренең, печенегтар менән күршеләш булып, Ҡара диңгеҙ буйында йәшәүе һәм Византияға походтары тураһында яҙма сығанаҡтарҙа осраған күрһәтмәләрҙе иҫкә алғанда (Кузеев, 1974, 150—151-се б.), легенда мотивының реаль ерлеге хаҡында күпмелер фекер йөрөтөргә мөмкин.

Легенданың 1986 йылда Әбйәлил районының Таҡһыр ауылында Ә. Х. Хәйретдиновтан беҙҙең тарафтан яҙып алынған вариантында башҡорттарҙың Уралға Ғәрәбстан яғынан килеүҙәре хаҡында әйтелә. Был вариантта ла кешеләргә бүре юл күрһәтеп алып барыусы образ булараҡ һүрәтләнелә. Башҡорт ата-бабалар менән бергә ҡаҙаҡтарҙың боронғо ата-бабалары ла килгән икән, тиелә яҙмала. Яйыҡ йылғаһы буйына еткәс, башҡорттар менән ҡаҙаҡтар шыбаға то-

тошалар: кемгә йылғаның ҡайһы яғында ҡалырға йәнәһе. Шыбаға буйынса, Яйыҡ аръяғы ерҙәре ҡаҙаҡтарға, был — Урал яғы — башҡорттарға тейә.

Башҡорттарҙың ҡаҙаҡтар менән этнокультур бәйләнештәре сағылып ҡалған икенсе бер риүәйәт-легенда П. Назаров яҙмаларында ла күренә. — Этнографическое обозрение, 1890, № 1.

[2] Гәрбәлә. Дөрөҫө — Ҡәрбәлә, хәҙерге Ираҡ ерендәге ҡала (Ҡамил Әнбойлу иҫкәрмәһе).

**126. «Башҡорт» һүҙенең килеп сыҡҡаны** (вариант). 1963 йылда Ишембай р-ны Ғүмәр ауылы Ҡәримов Рамазан Закир улынан Т. Ҡилмөхәмәтов менән Т. Йосопов яҙып алған. — БЛ, № 3; БХИ, РЛ, № 30; БПЛ, № 86 (2-се вар.); БНТ, ПЛ, № 116.

Ҡайһы бер тарихсылар ҙа, мәҫәлән, Р. Әхмәров, «башҡорт» этнонимы «ҡор башы», йәғни «баш ырыу», «баш ҡәбилә» төшөнсәһен аңлата тигән фекерҙә тора (Башҡорт һүҙе ҡайҙан алынған // СБ, 1969, 13 май).

**127. Башҡорттар ҡайҙан килгән** (вариант). Ғафури р-ны Яҡтыкүл ауылында яҙып алынған. — БЛ, № 4; БХИ, РЛ № 31; БПЛ, № 86 (3-сө вар.); БНТ, ПЛ, № 117.

[1] Ҡайһы бер башҡорт ырыуҙарының Себер, Алтай яҡтарынан килеүҙәре хаҡындағы риүәйәттәр тарихи-этнографик әҙәбиәттә лә сағыла (Филоненко В. И. Башкиры. — Уфа, 1915. С. 3; Кузеев Р. Г., 1974. С. 137—138, 254). 1953 йылда Р. Ғ. Кузеев тарафынан яҙып алынған табын ырыуы башҡорттарының легендаһы, мәҫәлән, бер ни тиклем был китапҡа ингән сюжетты хәтерләтә: «Бик боронғо замандарҙа табындар Алтайҙа йәшәгәндәр... Бер ваҡыт табындарҙың рәйесе (башлығы — Ф. Н.) ырыуҙаштарын Алтайҙан Иртышҡа табан алып киткән. Рәйестең ҡыллы музыка ҡоралы булған икән, ти. Иртыш тулҡындары тауышына оҡшатып (тәьҫирләнеп) ул көй сығарған (был көйҙө беҙҙә әле лә йырлайҙар). Иртышта кеше бик күбәйгәс, табындар Ағиҙел буйҙарына киткәндәр (Кузеев, 1974. 254-се б.).

[2] Ҡорҡот — Коркут. Был исем атаҡлы оғуз эпосының («Книга деда моего Коркуда». М.—Л., 1962) геройы булараҡ таныш. Изге ата Ҡорҡот (Коркуд) тураһында төрки халыҡтары (төрөкмән, әзербайжан, үзбәк, ҡаҙаҡ) ижадында күп һанлы легендалар ҙа йәшәй. Ҡарағыҙ: Жирмунский В. М. Тюркский героический эпос. — Л.: Наука, 1974. С. 532—559; Бартольд В. В. Коркуд. — Соч., т. V. М., 1968. С. 236—237.

**128. Бүреле йылғаһы** (вариант). 1964 йылда Баймаҡ р-ны Өмөтбай ауылы Ғәйшә Ҡоманбаеванан (1896 йылғы) В. Ғүмәров яҙып алған. — БЛ, № 5; БХИ, РЛ, № 32; БПЛ, № 88; БНТ, ПЛ, № 119.

[1] Нигеҙгә кеше урынына эт һалып күмеү мотивы — традицион мотив. Ул Ҡазан тураһындағы легендаларҙа ла осрай (Худяков М. Очерки по истории Казанского ханства. — Казань, 1923. С. 244; Васильев М. А. Памятники татарской народной словесности: Сказки и легенды. — Казань, 1924. Быңдай легендаларҙың нигеҙендә ҡорбан салыу йолаларында эт — кешене алмаштыра алыусы йән эйәһе, тигән боронғо ышаныу ята.

**129. Бүреләр тоҡомо.** 1961 йылда Ырымбур өлкәһенең Гай р-ны Башбүре ауылы Сабир Төлкөбаевтан (1898 йылғы) Ҡирәй Мәргән яҙып алған. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 21, д. 6, л. 241; БХИ, РЛ, № 49; Кузеев, 1974. С. 130; БПЛ, № 87; БНТ, ПЛ, № 118.

[1] Бүре менән кешенең ғаилә мөнәсәбәтенә инеүе төрки һәм монгол халыҡтары легендаларында киң билдәле боронғо мотив. Ҡарағыҙ: Бичурин Н. Я.

(Иакинф). Собрания сведений о народах, обитавших в Средней Азии в древние времена, т. 1. — М., 1950. С. 42—49. Изгелекле бүре мотивы төрлө вариацияларҙа башҡа бик күп халыҡтарҙың ауыҙ-тел ижады әҫәрҙәрендә лә осрай; Абаев В. И. Скифо-европейские изоглоссы на стыке Востока и Запада. — М.: Наука, 1965. С. 95; Гордлевский В. А. Что такое «босый волк»? / Избранные соч., т. II. С., 1961. С. 496—497.

**130. Бүреләр араһы.** 1973 йылда Баймаҡ р-ны Иҫке Төрөкмән ауылы Үтәбаев Ғиниәт Солтан улынан (1895 йылғы) Һ. Шәйҙуллин яҙып алған. — БДУ, БӘФҠ, ФФ, д. 112, л. 54—55; БХИ, РЛ, № 50.

[1] Мифологик сюжеттың онотола барыуы сәбәпле, бүре араларының килеп сығышы был әҫәрҙә көнкүреш ваҡиғаларына бәйләп аңлатылған.

**131. Алып тоҡомо.** Ҡырмыҫҡалы р-нының Үтәгән ауылында Ғайса Хөсәйенов тарафынан яҙып алынған. Баҫылған: Хөсәйенов Ғайса. Заман. Әҙәбиәт, Әҙип. — Өфө, 1978. 370 б.; БПЛ, № 85; БНТ, ПЛ, № 113.

**132. Ете ырыу.** 1960 йылдар башында Ейәнсура р-ны Саҙалы ауылы Баймырҙа Ҡыҙрасовтан Ф. Татлыбаев яҙып алған. — БЛ, № 6; БХИ, РЛ, № 33; БПЛ, № 89; БНТ, ПЛ, № 120.

Башҡорттарҙың килеп сығышын нуғайҙарға бәйләп аңлатыу риүәйәт һәм легендалар традицияһында шаҡтай йыш осрай торған күренеш. Был хаҡта айырыуса XIX быуат ғалимдарының яҙмаларында ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр табырға мөмкин (Казанцев Н. Описание башкирцев. — СПб., 1866. С. 2; Назаров П. К этнографии башкир. — Этнографическое обозрение, 1890, № 1. С. 165)

Башҡорттар менән нуғайҙар араһындағы этник бәйләнеш хаҡында ҡаҙаҡ халыҡ риүәйәттәрендә лә телгә алына (Чулошников А. П. Очерки по истории казак-киргизского народа в связи с общими историческими судьбами других тюркских племен, ч. 1. Древнее время и средние века. — Оренбург, 1924. С. 106).

[1] Аҡ башҡорт ырыуы — бындай этноним тарихи-этнографик әҙәбиәттә осрамай. Легендала Башҡортостандың политик һәм этник тарихында ҙур роль уйнаған нуғайлылар менән бергә Көньяҡ Башҡортостан ерен биләгән, заманында көслө һәм ҙур ырыу — аҡ ҡыпсаҡ ырыуы хаҡында һүҙ барыуы бик ихтимал.

[2] Эйек — Ейәнсура районындағы йылға.

[3] Кесе Һүрәм — Ейәнсура районындағы йылға.

[4] Сура батыр — башҡорт халыҡ ижадында билдәле исем. «Аҡбуҙат» эпосында ул Урал батырҙың ейәне итеп һүрәтләнә. «Сура батыр» исемендә йөрөгән ҡобайыр һәм риүәйәттәр ҙә бар. Риүәйәттең Ейәнсура районында Баймырҙа Ҡыҙрасовтан Я. Юлдашев яҙып алған бер вариант, мәҫәлән, «Башҡорт легендалары» исемле йыйынтыҡта баҫылып сыҡҡан. — БЛ, 70-се б.

[5] Юлдаш — Ейәнсура районындағы ауыл.

[6] Муйнаҡ — Ейәнсура районындағы ауыл.

[7] Ҡотор батыр — дөрөҫө «Көтөр» булырға тейеш. Һаҡмар буйында ҡаҙаҡ яуын ҡайтарып йөрөгән Көтөр батыр хаҡында риүәйәт тә бар. Был исем «Таштуғай» легендаһында ла телгә алына.

**133. Башҡорттарҙың сығышы.** Элекке Ырымбур губернаһының Силәбе өйәҙе Мәтәл ауылында (хәҙерге Силәбе өлкәһенең Арғаяш р-ны) А. Г. Бессонов яҙып алған. Бессонов. С. 335—337; БХИ, РЛ, № 34; БНТ, ПЛ, № 121.

Әҫәрҙә элекке Силәбе, Троицк, Шадрин, Екатеринбург, өлөшсә Верхнеурал өйәҙендә йәшәүсе башҡорттар тураһында һүҙ бара.

[1] Ҡиҙәгәс — Силәбе өлкәһенең Арғаяш районындағы күл.

[2] Юғалған малдың туҡтаған урынын төйәк итеп һайлау — традицион мотив. Ул башҡа халыҡтарҙың ижадында, мәҫәлән, бүрәт легендаларында йыш осрай / Балдаев С. П. Родословные предания и легенды бурят, ч. 1. Булагаты и эхириты. — Улан-Удэ, 1970. С. 53, 56.

[3] Аман-Ҡарағай урманы — Турғай өлкәһенең Кустанай өйәҙендә (А. Г. Бессонов иҫкәрмәһе).

[4] Мәтәл, Үләндә, Оло Ҡарағайкүл, Собханғол, Ҡескәй Ҡарағайкүл, Морат, Ҡомсүл (Ҡомгүл?), Оло Олтораҡ, Ҡескәй Олтораҡ, Бөтөк, Ҡужа — Силәбе өлкәһенең Арғаяш районына ҡараған ауылдар.

[5] Башҡорт ырыуҙарының үҙ-ара бәйләнеше хаҡында А. Г. Бессонов түбәндәгеләрҙе яҙа: «Урал һыртының көнсығыш итәктәрендә йәшәүсе башҡорт ырыуҙары араһында үҙ-ара бәйләнеш бөтөнләй юҡ тиерлек. Шуға күрә риүәйәттә һөйләүсе Мәтәл башҡорто, ҡатай менән бөрйән ырыуынан тыш, үҫәргән, ҡарағай-ҡыпсаҡ һәм башҡа башҡорт ырыуҙарын телгә лә алып тормай. Ҡатайҙар Верхнеурал өйәҙенә ҡараған Ҡатай волосының төньяҡ-көнбайыш өлөшөндә һәм Стәрлетамаҡ өйәҙенең төньяҡ-көнсығыш өлөшөндә, Оло Инйәр менән Кесе Инйәр буйында йәшәй». (Бессонов, С. 337.)

**134. Байыулы ырыуы.** 1969 йылда Ырымбур өлкәһе Александр р-ны Ҡайыпҡол ауылы Усман Сәйетовтан Ҡирәй Мәргән яҙып алған.— БЛ, № 18; БХИ, РЛ, № 53; БПЛ, № 90; БНТ, ПЛ, № 122.

[1] Ҡушлаҡ — М. Лоссиевский яҙмаларында «Бышлаҡ». — ОЛ, 1873, № 38.

[2] Шүлгәнкүл — Бөрйән районындағы күл.

[3] Һыуҙан йылҡы сығыу мотивы донъя фольклорында киң билдәле. Был йәһәттән атаҡлы «Мең дә бер кисәне», диңгеҙ батшаһы Посейдондың Афина халҡына һыу аҫтынан ат сығарып биреүе хаҡындағы боронғо грек мифын иҫкә төшөрөү ҙә етә. Башҡорт халыҡ ижадында легендаларҙан тыш, ошо мотивҡа ҡоролған эпик әҫәрҙәр ҙә бар («Аҡбуҙат», «Аҡһаҡ ҡола»).

**135. Әҙәм тарпаны.** 1960 йылда Ырымбур өлкәһе Александр р-ны Ҡайыпҡол ауылы Усман Сәйетовтан Ҡирәй Мәргән яҙып алған. — БЛ, № 19; БХИ, РЛ, № 54; БПЛ, № 91; БНТ, ПЛ, № 123.

[1] Бәрәстау — легенданың тексына ҡарағанда, Ырымбур өлкәһендә бер тау исеме.

[2] Баштай ырыуы — бындай исемдәге ырыу этнографик әҙәбиәттә телгә алынмай. Ул ниндәй ҙә булһа бер ырыуҙың кескәй тармағы (ара, нәҫел) булырға тейеш. Мотивы яғынан легенда «Бүреләр тоҡомо» исемле сюжетҡа яҡын тора. Ихтимал, бүре-әсә мотивының һуңғыраҡ трансформацияһылыр был.

**136. Айыу араһы.** 1960 йылда Ырымбур өлкәһе Александр р-ны Ҡотос ауылы Рәхилә Теләкәеванан (1897 йылғы) яҙып алынған. — БЛ, № 1; БХИ, РЛ, № 52; БПЛ, № 92; БНТ, № 124.

Легенда боронғо тотемистик ҡараштарҙы сағылдырыуы һәм баһадир ҡыҙ мотивының булыуы менән ҡыҙыҡлы. Айыу менән ҡәрҙәшлек мотивы башҡа халыҡтарҙың фольклорында ла күҙәтелә. Сағыштырма материалды ҡарағыҙ: Нәҙершина Ф. А. Халыҡ хәтере, 81—83-сө б.

[1] Туҡ — Ырымбур өлкәһендәге йылға, Һамарға ҡоя.

**137. Шайтан ырыуы.** 1906—1907 йылдарҙа Шайтан-Көҙәй ырыуы башҡорттары һөйләүенән С. И. Руденко яҙып алған. — АЭБ, т. V, 21—22-се б.; БХИ, РЛ, № 45; БНТ, ПЛ, № 128.

Ошо уҡ йөкмәткеле легенда 1964 йылда Башҡортостандың Салауат р-ны Әлкә ауылы Шәмсетдин Ғәлиуллиндан БДУ талибтары тарафынан да яҙып алынған. Унда һунарсының исеме Дүрмән тиелә. Дүрмән менән шайтан ҡыҙы Әлкә, Иҙрис, Йонос, Шағанай исемле дүрт ир бала үҫтерәләр... Әлкә, Шағанай, Йонос, Иҙрис ауылдары ана шул «Дүрмәндең дүрт улынан тороп ҡалған». — БЛ, 60—61-се б.

Башҡорт халыҡ ижадында «Дүрмән» исемендә йөрөгән әкиәттәр ҙә бар. (Бессонов. С. 283—286.)

[1] Шайтан-Көҙәй ырыуы — башҡорттарҙың әйле төркөмөнә ҡараған көҙәй ҡәбиләһенең бер тармағы. Ҡалған тармаҡтары: Бүләкәй-Көҙәй, Урман-Көҙәй, Төрөкмән-Көҙәй. Урман-Көҙәй ырыуы хаҡындағы бер риүәйәт 1955 йылда Р. Ғ. Кузеев тарафынан яҙып алынған. Көҙәй батырының шайтан ҡыҙына өйләнеү мотивы ҡайһы бер башҡорт ырыуҙарының (ырыу тармаҡтарының) башҡа халыҡтар, мәҫәлән, уғырҙар менән туғанлашыу (ҡатнашыу) күренешен сағылдыра булһа кәрәк тигән фекер әйтә (Кузеев, 1974, 210-сы б.).

**138. Шүрәле нәҫеле.** 1961 йылда Куйбышев өлкәһе Оло Черниговск р-ны Кинйәгол ауылы Хөббөхужа Шәһиәхмәтовтан (1903 йылғы) Кирәй Мәргән яҙып алған. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 21, д. 6, л. 246; БХИ, РЛ, № 46; БПЛ, № 93; БНТ, ПЛ, № 125.

[1] Кешенең шүрәле менән ғаилә мөнәсәбәтенә инеү һәм шуның һөҙөмтәһе булараҡ шүрәлеләр нәҫеле таралыу мотивы — киң билдәле мотив.

Шүрәле аралары хаҡында сюжеттар Башҡортостан райондарында ла, Куйбышев, Силәбе өлкәһе ауылдарында ла яҙып алынған. 1962 йылда Башҡортостандың Әлшәй р-ны Ташлы ауылы Шәйхетдин Кәшәфетдиновтан М. Кәримова яҙып алған вариантта (БЛ, 61-се б.) Ҡамыҡай исемле бер байҙың өйөр айғырына атланып, шүрәле ҡыҙы ҡайтыуы, ул ҡыҙҙы Бәтский (Вятский) губернаһынан килгән бер хеҙмәтсегә кейәүгә биреүҙәре, аҙаҡ шул ғаиләлә алты ул тыуып, нәҫел таралып китеүе хаҡында һүҙ бара. Легендала топонимик мәғлүмәт тә бирелгән. «Шул шүрәле нәҫеленән таралған бит Бәтсә осондағы халыҡ. Теге Бәтский губернаһынан булғанға, ул урамды Бәтсе тигәндәр».

1961 йылда Куйбышев һәм Саратов өлкәһендә Кирәй Мәргән һәм Салауат Галин яҙып алған легендалар (ғилми архив, ф. 3, оп. 21, д. 6, л. 245—247). Башҡортостандың Архангель районында Н. Шоңҡаровҡа һөйләнелгән риүәйәт (ғилми архив, ф. 3, оп. 61, д. 2, л. 342) нигеҙҙә был китапҡа ингән сюжет менән тап килә.

Шүрәлене хәйлә менән еңеү мотивы Волга буйы халыҡтарының (татар, сыуаш, удмурт) ижады буйынса ла билдәле. Ҡарағыҙ: Ахметьянов Р. Г. Общая лексика культуры народов Среднего Поволжья. — М.: Наука, 1981. С. 48—50; Яшин Д. Я. Удмуртская народная сказка. — Ижевск, 1965. С. 15—28.

**139. Ярымтыҡ араһы** (вариант). 1906—1907 йылдарҙа Гәйнә башҡорттары һөйләүенән С. И. Руденко яҙып алған. — АЭБ, т. V, 23-сө б.; БХИ, РЛ, № 47.

[1] Танып — Пермь өлкәһендәге ауыл исеме.

**140. Биреләр араһы.** 1966 йылда Бөрйән р-ны Тимер ауылы Алтыншин Ғибәҙетдин Баймырҙа улынан (1886 йылғы) Ш. Бикмөхәмәтов яҙып алған. — БЛ, № 15; БХИ, РЛ, № 48;, БНТ, ПЛ, № 127.

Легенда «Дүрмән», «Түрмән» исемендә йөрөгән әкиәт сюжеттары менән ауаздаш.

[1], [2] Бабсаҡ бей, Күсәк бей — башлыса «Бабсаҡ менән Күсәк» исе-

мендәге эпик ҡомартҡы буйынса киң билдәле образдар. Уларҙы реаль шәхес итеп һүрәтләү риүәйәттәрҙә генә түгел, шәжәрәләрҙә лә күҙәтелә. Ҡыпсаҡ ҡәбиләһенең Ҡарағай-Ҡыпсаҡ ырыуы шәжәрәһендә, мәҫәлән, Бабсаҡтың нәҫел ебе түбәндәгесә һүрәтләнә: «...Бабсаҡ би, аның улы Күсәк би, аның углы Икүсәп би, аның улы Бурундуҡ, андин Сөйөндөк, Сөйөндоктән алты улы вәжүдкә килгәндәр...» (БШ, 112-се б.).

**141. Гәйнә ырыуы.** 1963 йылда Пермь өлкәһе Оса р-ны Удик ауылы Хәйҙәрхан Ибраһимовтан Кирәй Мәргән яҙып алған. — БЛ, № 7; БХИ, РЛ, № 36; БПЛ, № 96; БНТ, ПЛ, № 131.

[1] Фин-уғыр халыҡтары мифологияһында болан изгеләштерелгән образ, тотем хайуаны. Күренеүенсә, этногенетик мотив был осраҡта ла изге мал менән күсеп килеү коллизияһына ҡоролған. Легендалағы этиологик мотив (ҡояштың барлыҡҡа килеүе) шулай уҡ бик боронго. Гәйнә ырыуына бәйле легендаларҙың тарихи ерлеге хаҡында тулыраҡ мәғлүмәттәрҙе ҡарағыҙ: Нәҙершина Ф. Халыҡ хәтере, 73—77-се б.

[2] Толтау — Пермь өлкәһендәге тау исеме.

[3] Тол — Пермь өлкәһендәге йылға, Камаға ҡоя.

[4] Гәйнә — Башҡортостандың төньяғында һәм Пермь өлкәһенең төньяғында йәшәүсе башҡорт ҡәбиләһе (тармаҡтары: Тол-Гәйнә, Тор-Гәйнә, Бисер-Гәйнә, Мол-Гәйнә).

**142. Толбуйҙар.** 1963 йылда Пермь өлкәһе Оса р-ны Солтанай ауылы Байрамша Бикҡужиндан Кирәй Мәргән яҙып алган. — БЛ, № 78; БХИ, РЛ, № 37; БПЛ, № 94; БНТ, ПЛ, № 129.

[1] Тулыуа, Тулауа — Кирәй Мәргән был образдың сығанағын фин-уғыр халыҡтары мифологияһына алып барып тоташтыра: «Боронғо фин-уғыр ҡәбиләләренең мифология системаһында һәр төрлө тәбиғәт күренештәренең «хужа»-ларын тәшкил иткән мифик заттар күпселектә ҡатын-ҡыҙ образында кәүҙәләндерелгәндәр һәм ҡайһы бер фин-угыр халыҡтарының тел материалына ҡарағанда, «ава» ялғауы ҡабул иткәндәр. Мәҫәлән, урман Аллаһы, йәғни хужаһы мордва телендә Вирь-ава (вирь — урман, ава — әсәһе, йәғни хужабикәһе тигән һүҙ) була; ер Аллаһы... Мода-ава (мода — ер, ава — әсә); ...Ут Аллаһы, ут хужаһы мордва телендә... Тол-ава (тол — ут, ава — әсә), мари телендә Тул-ава (Тул — ут, ава — әбей мәғәнәһендә) була. Гәйнә башҡорттары урынлашҡан Тол йылғаһын, урындағы һөйләштә Тулва, Толва, Толвуй тип йөрөтәләр һәм гәйнәләрҙең үҙҙәрен дә ҡайһы бер урында Толбуйҙар тип атайҙар». — БЛ, 164-се б.

[2] Ар затынан — фин-уғырҙар затынан.

**143. Әйнә менән Гәйнә.** 1963 йылда Пермь өлкәһе Оса р-ны Ҡайын ауылында Ҡәүи Юлаевтан Кирәй Мәргән яҙып алган. — БЛ, № 9; БХИ, РЛ, № 38; БПЛ, № 95; БНТ, ПЛ, № 130.

[1] Был сюжетта шулай уҡ изгеләштерелгән болан хаҡында һүҙ бара. Изге мал (толпар, болан, үгеҙ, ҡыр кәзәһе...) тибенгән ерҙә күл, уйпат урын һ. б. барлыҡҡа килеү — донъя фольклорында киң таралған мотив.

**144. Юрматы ҡәбиләһе.** 1953 йылда Юрматы башҡорттарынан тарихсы-этнограф Р. Ғ. Кузеев яҙып алған. — Кузеев, 1974, 120-се б.; БХИ, РЛ, 334-се б.; БПЛ, № 97; БНТ, ПЛ, № 132.

[1] Легенда боронғо төрки, монгол халыҡтарының тотемистик ҡараштарына барып тоташа. Аҡҡош ырыу башлаусы йән эйәһе булараҡ, мәҫәлән, бүрәттәрҙең (хорин һәм хангин ырыуҙарының) этногенетик легендаларында һүрәтләнә. — Уланов А. Древний фольклор бурят. — Улан-Удэ, 1974. С. 15.

**145. Юрматы, Тәлтем ырыуҙары.** 1963 йылда хәҙерге Ишембай р-ны Ғүмәр ауылы Ғәббәсов Әхмәт Әхмәтша улынан һәм Кәримов Рамазан Закир улынан Т. Йосопов менән Т. Килмөхәмәтов яҙып алған. — БЛ, № 12; БХИ, РЛ, № 43; БПЛ, № 98; ПЛ, № 133.

[1] Юнаты — Юрматы — бында аңлашылмаған төшөнсәне аңлатырға тырышыу күренеше — халыҡ этимологияһы менән осрашабыҙ.

Юрматы этнонимын аңлатыуҙа ғилми әҙәбиәттә төрлө фекерҙәр йәшәй (был турала ҡарағыҙ: Кузеев, 1974, 118—128-се б.).

[2] Ашҡаҙар — Башҡортостандың көньяғындағы йылға, Ағиҙелгә ҡоя.

[3] Иҙел — бында Ағиҙел күҙ уңында тотола.

[4] Тәлтем — Юрматы ҡәбиләһенең бер тармағы. Был ырыуҙың этник яҡынлығы легендала бер атанан тыуған уландар яҡынлығы аша сағылдырылған. Тәлтемдәр хаҡында ҡарағыҙ: Кузеев, 1974, 68, 107, 122, 188-се б.

**146. Бөрйән нәҫеле.** 1968 йылда Күгәрсен р-ны Ишбирҙе ауылы Ғилметдин Әбйәлиловтан М. Әҙелғужин яҙып алған. — БЛ, № 10; БХИ, РЛ, № 39; БПЛ, № 99; БНТ, ПЛ, № 134.

Риүәйәттең төп мотивтары (батырҙың хыянат ҡорбаны булыуы, тол ҡалған ҡатындан ир бала тыуыуы һәм уның атаһы өсөн хыянатсынан үс алыуы («Бабсаҡ менән Күсәк» эпосы һәм ошо ҡомарткыға бәйле күп һанлы риүәйәт һәм легендаларҙағы мотивтарға тап килә. Асылда был сюжетты шул легендаларҙың алыҫлашҡан бер варианты итеп ҡарарға мөмкин. Әҫәрҙәге Ҡарабатыр эпостағы Ҡараҡөләмбәт образына ауаздаш.

[1] «Бөрйән» һүҙенең мәғәнәһе фәндә әлегә асыҡланмаған. «Бер йәндән бөрйән нәҫеле (ырыуы) таралып киткән» тип аңлатыу, әлбиттә, тарихи дөрөҫлөккә тура килмәй. Бөрйән һәм ҡыпсаҡтарҙың этник тарихы хаҡында ҡарағыҙ: Кузеев, 1974, 108—110, 113—118, 128—164, 168—193-сө б.

**147. Ҡыпсаҡтар.** 1971 йылда Бөрйән р-ны Нәби ауылы Юныс Һатыбаловтан М. М. Сәғитов яҙып алған. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 65, д. 7, л. 322; БХИ, РЛ, № 40; БПЛ, № 100; БНТ, ПЛ, № 135.

Башҡорт этносында ҡыпсаҡ элементының боронғолоғо тарихсы-этнографтар, тел ғалимдары тарафынан да танылған. XI быуат аҙағына ҡараған М. Кашғари һүҙлегендә үк башҡорт теленең оғуз һәм ҡыпсаҡ теленә яҡын булыуы күренә.

[1] Ҡыпсаҡ — Бөрйән районындағы ауыл, икенсе исеме — «Әбделмәмбәт».

[2] Үҙән — Бөрйән районындағы йылға.

[3] Нөгөш — Башҡортостандың Бөрйән, Мәләүез райондарындағы йылға, Ағиҙелдең уң ҡушылдығы.

**148. Үҫәргәндәр.** 1985 йылда Өфө ҡалаһында Ғ. Сәлиховтан Ғайса Хөсәйенов яҙып алған. — АЭМ, 1985, 390—392-се б.; БНТ, ПЛ, № 136.

[1] Һарыҡташ, Ҡыуандыҡ — Ырымбур өлкәһендәге ауылдар.

**149. Түңгәүер ҡәбиләһе.** 1953 йылда түңгәүер башҡорттарынан Р. Ғ. Кузеев яҙып алған. — Кузеев, 1974. С. 129; БПЛ, № 101; БНТ, ПЛ, № 137.

[1] Оҡшаш йөкмәткеле легенда сыуаштарҙа ла бар. Көмәләге табышты бүлеүсе батырҙарҙың исеме — Болғар менән Сувар. Ҡарағыҙ: Димитриев В. Д. Чувашские исторические предания. Ч. 1. — Чебоксары, 1983; был мотив шулай уҡ ҡаҙаҡ фольклорында бар: Потанин Г. Н. Казак-киргизские и алтайские предания, легенды и сказки. — Живая старина, вып. 2—3, 1916. С. 47.

² Түнгәүерҙәрҙең этник тарихы хаҡында ҡарағыҙ: Кузеев, 1974, 128—139, 166-сы б.

**150. Табындар.** 1953 йылда Табын ырыуы башҡорттарынан Р. Ғ. Кузеев яҙып алған. — Кузеев, 1974, 254-се б.; БПЛ, № 104; БНТ, ПЛ, № 140.

**151. Әйләләр менән табындар.** Элекке Ырымбур губернаһының Силәбе өйәҙе Мөхәммәтҡолой ауылында (хәҙерге Силәбе өлкәһенең Арғаяш р-ны) А. Г. Бессонов яҙып алған. — Бессонов, 338-се б.; БХИ, РЛ, № 44; БПЛ, № 103; БНТ, ПЛ, № 139.

¹ Уй йылғаһы Башҡортостандың Учалы районында башланып, Тоболға барып ҡоя.

² Был осраҡта башҡорттар Иван Васильевич Грозный батшаны күҙ уңында тоталар. (А. Г. Бессонов иҫкәрмәһе.)

³ Ер биләү хоҡуғына табындарҙың батшанан ҡағыҙ алып ҡайтыуҙары тураһында мәғлүмәт тарихи дөрөҫлөккә тап килә: документтарҙан күренеүенсә, жалованная грамоталар Ҡара-Табын ырыуы башҡорттарына бирелгән булған (Материалы по истории Башкирской АССР, 1936, ч. 1. Башкирские восстания в XVII и в первой половине XVIII вв. — М.—Л. С. 80—81).

**152. Әйләләр, мырҙалар, тырнаҡлылар.** Р. Ғ. Кузеев тарафынан яҙып алынған. — Кузеев, 1974, 199-сы б.; БПЛ, № 102; БНТ, ПЛ, № 138.

¹ Мырҙаларҙың Алтай яғынан күсеп килеүе тураһында ла легенда бар. — Кузеев, 1974, 199-сы б.

**153. Урман-Көҙәйҙәр.** 1955 йылда Р. Ғ. Кузеев яҙып алған. — Кузеев, 1974, 210-сы б.; БПЛ, № 105; БНТ, ПЛ, № 141.

Көҙәйҙәрҙең этник тарихы хаҡында ҡарағыҙ: Кузеев, 1974, 209—212-се б.

¹ Минзәлә йылғаһы — Ҡама йылғаһының уң ҡушылдығы (Татарстан менән Башҡортостан сигендә).

**154. Тамъян ырыуы.** 1985 йылда Белорет р-нының Ҡаһарман ауылында Ҡ. Ғ. Ғиниәтуллиндан Ғайса Хөсәйенов яҙып алған. — АЭМ, 1985; БНТ, № 142.

¹ Нөгөш — 147-се һанлы риүәйәттең аңлатмаһын ҡарағыҙ.

² Ҡазан Иван Грозный ғәскәрҙәре тарафынан 1552 йылда алына.

³ Риүәйәттә телгә алынған илселәрҙең исемдәре башҡорт шәжәрәләрендә лә яҙылған. — БШ, 71-се б.

**155. Күбәләк-Теләү ырыуы.** 1981 йылда Әбйәлил р-нының Байым ауылында Х. Ғабдуллиндан (1896 йылғы) Ғайса Хөсәйенов яҙып алған: БПЛ, № 106; БНТ, ПЛ, № 106.

¹ Беҙгә билдәле булған шәжәрәләрҙән күренеүенсә, Шәғәли Шаҡман Тамъян ырыуының илсе бейе. — БШ, 71, 121-се б. Был текстағы мәғлүмәт, күрәһең, хата мәғлүмәт.

**156. Күбәләк-Теләү нәҫеленең сығышы.** Учалы р-ны Ғәлиәхмәр ауылы Хәмитов Фәйзрахман Кашаф улынан С. Сөләймәнова яҙып алған. — БЛ, № 11; БХИ, РЛ, № 42; БНТ, ПЛ, № 144. Йөкмәткеһе һәм стиле менән әкиәткә яҡын торған легенда.

¹ Миндәк — Башҡортостандың Учалы районындағы тау.

² Миһлә (Миһелә) — Учалы районы Миндәк поселогы эргәһендәге күл.

³ Күбәләк һәм Теләү — башҡорттарҙың Табын ҡәбиләһе төркөмөнә ҡараған боронғо ҡәрҙәш ырыуҙар.

Тарихи-этнографик әҙәбиәттә теләү этнонимының сығышы телеут атамаһына бәйләп өйрәнелә (Кузеев, 1974, 266—267-се б.). Легендала ырыу исемдәренең

килеп сығышы уйҙырма формала аңлатыла һәм, әлбиттә, тарихи дөрөҫлөккә тап килмәй.

**157. Мәмбәт.** 1964 йылда Хәйбулла р-ны Таңатар ауылы Сабирйән Рәхмәтовтан (1881 йылғы) Ҡ. Аралбаев яҙып алған. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 63, д. 56, л. 93—97; БХИ, РЛ, № 41; БПЛ, № 107; БНТ, ПЛ, № 145.

Ҡ. Аралбаевтың тикшеренеүҙәренән күренеүенсә, был сюжет үҫәргән ҡәбиләһенең бер тармағы булған мәмбәт ырыуы шәжәрәһендә лә тулы сағыла. Шәжәрә һәм унда ингән фольклор әҫәрҙәре хаҡында ҡарағыҙ: Аралбаев К. Фольклорные мотивы в шежере Мамбетова рода // Фольклористика в Советской Башкирии, вып. 1. Под ред. Н. Т. Зарипова. — Уфа, 1974. С. 132—142.

[1] Кустанай далалары — хәҙерге Ҡаҙағстандың Ҡустанай өлкәһенә ҡарай.

[2] Тирәкле — Ырымбур өлкәһенең Ҡыуандыҡ районындағы ауыл исеме.

[3] Таналыҡ — Башҡортостандың көньяҡ-көнсығышындағы йылға, Уралға ҡоя.

Риүәйәттең 1970 йылда Йылайыр р-ны Байғужа ауылы 54 йәшлек Гөлнур Мәмбәтованан В. Ишмурзин яҙып алған варианты нигеҙҙә был китапта бирелгән текстҡа яҡын, айырма ҡайһы бер деталдәрҙә генә (һабыр ҡарттың биш йәшлек Мәмбәтте бер өйөр йылҡы малы менән бергә йәрминкәлә һатып алыуы; малай үҫеп, егет ҡорона кергәс, уға үҙенең кинйә ҡыҙы Сөйөмбикәне биреүе. — БДУ, БӘФК, ФФ. 14, д. 338—341).

Мәмбәт хаҡындағы сюжет «Таштуғай» көйө тарихына бәйле бер риүәйәттә лә урын ала. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 12, д. 275, л. 108—117.

**158. Биресбаштар араһы.** 1973 йылда Хәйбулла р-ны Аҡъяр ауылы Юлдашбаев Мырҙағәле Һибәт улынан (1894 йылғы) З. Ғәббәсова-Ҡунаҡасова яҙып алған. — БДУ, БӘФК, ФФ, д. 113, л. 84—85, БХИ, РЛ, № 56.

[1] Ҡарын ейгән — Ырымбур өлкәһе Әнтерәк ауылы эргәһендәге урын исеме.

[2] Биресбаш — ҡаҙаҡсаһы «биресләш», «бирешмәҫ» тигәнде аңлата.

**159. Ҡаҙаҡтар араһы.** 1962 йылда Әбйәлил р-ны Ишҡол ауылы Хәмзә Ҡаһармановтан (1908 йылғы) Д. Абдрахманов яҙып алған. — БЛ, № 16; БХИ, РЛ, № 57; БПЛ, № 108; БНТ, ПЛ, № 146.

[1] Ҡаҙаҡ аралары — башҡорттарҙың Ҡатай, Бөрйән, Түңгәүер, Ҡыпсаҡ ырыуҙары эсендә йыш осрай.

**160. Ҡалмаҡ ырыуы.** 1964 йылда Миәкә р-ны Сәфәр ауылы уҡытыусыһы Шәйәхмәт Солтанғужиндан Әнүр Вахитов яҙып алған. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 47, д. 1, л. 58; БХИ, РЛ № 58; БПЛ, № 109; БНТ, ПЛ, № 147.

[1] Ырыу — бында нәҫел, ара мәғәнәһендә. Ҡалмаҡ аралары Ҡатай, Үҫәргән, Бөрйән, Түңгәүер, Юрматы, Ҡыпсаҡ, Табын, Мең ырыуҙары составында осрай. — Кузеев, 1957, 48—57-се б.

**161. Мамыт.** 1969 йылда Йылайыр р-ны Юлдыбай ауылы Ҡашҡаров Сөнәғәт Хәкимйән улынан (1920 йылғы) Н. Шоңҡаров яҙып алған. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 65, д. 2, л. 282; БХИ, РЛ, № 59; БНТ, ПЛ, № 148.

[1] Батыйхан менән көрәшеп йөрөгән Букәт батыр тураһындағы мәғлүмәт был текст өсөн анахронизм булып яңғырай: башҡорттарҙың ҡалмыҡтар менән бәрелештәре һуңғараҡ дәүергә, XVII б. баштарына, ҡарай. — Очерки, 1. С. 98—108.

**162. Йомран араһы.** 1967 йылда Хәйбулла р-ны Аҡназар ауылы Юламанов

Нуриәхмәт Мөхәмәтйән улынан (1910 йылғы) Ә. М. Сөләймәнов яҙып алған. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 63, д. 56, л. 28; БХИ, РЛ, № 55.

[1] Йомран — көнбайыш табын ырыуы башҡорттарының бер тармағы.

Этнографтарҙың әйтеүенә ҡарағанда, «Йомран» этнонимы тамырында «юр» элементы булған һүҙҙең (Юрман, Юрмит, Юрмин, Юрматы?) трансформацияһы булып тора (Кузеев, 1974, 273-сө б.).

**163. Сыҫҡандар менән тубалдар.** 1965 йылда Белорет р-ны Татлы ауылы Фәхретдинов Ғилметдин Шәмсетдин улынан (1932 йылғы) Л. Г. Бараг яҙып алған. — Ск. Башк., 1969. С. 122; БХИ, РЛ, № 60; БНТ, ПЛ, № 176.

**164. Иҫән бабаның Танып буйына күсеп килгәне.** 1959 йылда Р. Ғ. Кузеев тарафынан яҙып алынған. — Кузеев, 1974, 320-се б.; БПЛ, № 111; БНТ, ПЛ, № 149.

**165. Башҡорт тарихы.** Элекке Ырымбур губернаһының Троицк өйәҙе Туңғатар ауылында (Башҡортостандың хәҙерге Учалы р-ны) А. Г. Бессонов яҙып алған. — Бессонов, с. 348—349. Р. Ғарипов тәржемәһендә: БХИ, РЛ, № 35; БНТ, ПЛ, № 151.

Текста иҫкә алынған ауылдарҙың бөтәһе лә Башҡортостандың Учалы районына ҡарай.

[1] Ҡатау — Башҡортостандың төньяҡ-көнсығышындағы йылға, Нуруҙәнгә ҡоя.

[2] Һатҡы — Әй йылғаһының һул ҡушылдығы.

[3] Оло Ҡыҙыл — Башҡортостандың Әбйәлил районындағы йылға.

[4] Миәс — Силәбе өлкәһендәге йылға, Башҡортостандың Учалы районында башлана.

[5] Арғужа — Силәбе өлкәһенең Аргаяш районындағы йылға исеме. Шул исемле ауыл да бар.

[6] Тинес (Динис) — Силәбе өлкәһенең Ҡоншаҡ районындағы йылға.

[7] Тубыл (Тобол) — Көнбайыш Себер йылғаһы.

[8] Йебсләй татырлауығы — Тобол йылғаһынан арыраҡ урын. Йебсләй (Юбслей) исемле күл дә бар.

[9] Урҡас күле — Көнбайыш Себерҙәге күл булһа кәрәк.

[10] Перовский — Василий Алексеевич Перовский (1795—1857), рус хәрби эшмәкәре, генерал, 1855 йылдан алып — граф, 1838—1842 һәм 1851—1857 йылдарҙа — Ырымбурҙың хәрби губернаторы һәм атлы башҡорт ғәскәренең командиры.

[11] Неплюев тип аңларға кәрәк. Иван Иванович Неплюев (1693—1773) рус дәүләт эшмәкәре, дипломат. 1742—1758 йылдарҙа Ырымбур крайының наместниғы.

[12] Үгеҙ тиреһендәй генә ер һатып алыу мотивы бөтә донъяға билдәле грек мифологияһындағы Карфагенды нигеҙләүсе Дидонаның хәйләкәрлеге хаҡындағы легенданы хәтерләтә. Ул Азия халыҡтары фольклорында ла осрай.

## АУЫЛ ТАРИХТАРЫ

**166. Бишул.** 1964 йылда Архангель р-ны Аҙау ауылы Ғәрифә Харрасованан (1894 йылғы) Ә. М. Сөләймәнов яҙып алған. — БЛ, № 87; БХИ, РЛ, № 134; БПЛ, № 63; БНТ, ПЛ, № 152.

**167. Ямаш менән Йомаш ауылдары.** 1968 йылда Баймаҡ р-ны Йомаш ауы-

лында А. Ҡамалов яҙып алған. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 63, д. 56, л. 53—57; БХИ, РЛ, № 135; БПЛ, № 64; БНТ, ПЛ, № 158.

[1] Ауылдың элекке исеме билдәле түгел. XVII быуаттың аҙағынан алып, «Йомаш» атамаһын йөрөтә. Был исем Бөрйән волосы тарханы Йомаш Батраевҡа бәйле. — Асфандияров, 1991. С. 42—43.

**168. Һаҡтау ауылы.** 1973 йылда Йылайыр р-ны Һаҡтау (хәҙерге Ҡәнзәфәр) ауылы Айнулла Ғәниевтән (1917 йылғы) Ә. Яманғолова-Таһирова яҙып алған. — БДУ, БӘФҠ, ФФ, д. 111, 23—24-се б.; БХИ, РЛ, № 136; БНТ, ПЛ, № 159.

[1] Туҡсоран буйы — Туҡ һәм Соран йылғалары буйы, Ырымбур өлкәһендәге урын.

[2] Ҡунаҡбай ауылы — Ырымбур өлкәһенең Переволоцк районына ҡарай.

[3] Олотау, Аҡтау йылғаһы, Урта түң — Йылайыр районындағы урын исемдәре.

[4] Әбей батша — Екатерина II (1729—1796).

[5] Маҡан — Хәйбулла районы еренә ҡарай.

**169. Һынташ.** 1975 йылда Федоровка р-ны Ишмөхәмәт ауылы Нурфәиз Чурбаевтан Ғ. Б. Хөсәйенов яҙып алған. — АЭМ, 1975, 265-се б.; БХИ, РЛ, № 137; БПЛ, № 65; БНТ, ПЛ, № 163.

[1] Башҡортостан топонимикаһында һынташтарға бәйле урындар байтаҡ (ҡарағыҙ: СТБ, 166-сы б.). Быға һәм легендаларға таянып, борон ата-бабаларыбыҙҙа ташһын — боттарға (идолдарға) табыныу күренеше булған тип фараз итергә мөмкин. Был фаразды башҡорттар йәшәгән Ырымбур өлкәһе ерендә ҡаҙылма һынташ (балбалы) табылыу факты ҡеүәтләй. — АЭБ, т. II, 261, 263-сө б.

**170. Этимгән.** 1966 йылда Учалы р-ны Туңғатар ауылы Йәрмөхәмәтов Абдулла Әлмөхәмәт улынан (1878 йылғы) А. Ҡамалов яҙып алған. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 63, д. 56, л. 65; БХИ, РЛ, № 138; БПЛ, № 66; БНТ, ПЛ, № 169.

[1] Этимгән йәки Әпсәләм — Учалы районына ҡараған ауыл. Яҙмаларҙан күренеүенсә, 1859—1866 йылдар араһында барлыҡҡа килгән — Асфандияров, 1990. С. 32.

Риүәйәт этнографик яҡтан иғтибарҙы ылыҡтыра. Был тәңгәлдә ҡарағыҙ: Нәҙершина Ф. Халыҡ хәтере, 65—73-сө б.

**171. Учалы.** 1965 йылда Учалы р-ны Иҫке Байрамғол ауылы Хәлит Усмановтан (1896 йылғы) С. Галин яҙып алған. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 47, д. 3, л. 20; БХИ, РЛ, № 139; БПЛ, № 67; БНТ, ПЛ, № 160.

[1] Аҡһаҡ Тимер — Тимурленг, Тамерлан (аҡһаҡ булыуына ҡарап әйтелгән ҡушамат исем: ленг фарсы телендә — аҡһаҡ) — Урта Азияның әмире (1336—1405). Аҡһаҡ Тимерҙең Башҡортостан еренә килеүе хаҡында ҡарағыҙ: Очерки, 1, 51—52-се б. Урта Азия әмире заманындағы оло яуҙар тураһындағы башҡорт шәжәрәләрендә лә әйтелә. — БШ, 50—52-се б. «Учалы» һүҙен аңлатыу иһә ялған этимология принцибына ҡоролған.

**172. Һарт Науруз ауылы.** 1930 йылда Ғафури р-нының Яҡтыкүл ауылында Вәлиулла Фазулла улы Ҡоломбәтов тарафынан яҙып алынған. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 12, д. 261, л. 79; БХИ. РЛ, № 140; БПЛ, № 69; БНТ, ПЛ, № 164.

[1] Ғилми әҙәбиәттән күренеүенсә, Башҡортостанда «һарт» этнонимына бәйле ете ауыл бар. Бындай исемле ауыл Ҡурган өлкәһендә лә осрай. Ундай ауылдарҙа йәшәгән кешеләр XVIII—XIX быуаттар сигендә Урта Азиянан килеп,

аҙаҡ башҡорттар менән ныҡ ҡатнашып (ассимиляцияға бирелеп) киткән төркиҙәр. — Киекбаев Ж. Г. Вопросы Башкирской топонимики / Уч. зап. БГПИ. — Уфа, 1956. С. 234—236.

**173. Һарт Әптерәш ауылы.** 1970 йылда Курган өлкәһе Әлмән р-ны Тәңрекүл ауылы Шәкирйән Мөхәмәтйәновтан (1938 йылғы) С. Ә. Галин яҙып алған. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 65, д. 6, л. 175; БХИ, РЛ, № 141; БПЛ, № 70; БНТ, ПЛ, № 165.

**174. Мәмбәт ауылы тарихы.** Хәйбулла районы Сәғит ауылы Мәмбәтов Вәкил Мостафа улынан Ҡ. Аралбаев яҙып алған. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 63, д. 56, л. 98—100; БХИ, РЛ, № 142.

[1] Әсирлектә йәшәгән үҫмергә башҡорт ҡатыны йәки әбейенең ярҙамға килеүе башҡорт-ҡаҙаҡ мөнәсәбәттәрен сағылдырыусы күп кенә риүәйәттәрҙә осрай.

**175. Ғәлекәй ауылы.** 1971 йылда Хәйбулла р-ны Ғәлиәхмәт ауылы Иншемғолов Шәһиәхмәт Юныс улынан (1927 йылғы) А. А. Ҡамалов яҙып алған. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 63, д. 56, л. 58; БХИ, РЛ, № 143.

**176. Ҡыуат ауылы тарихы.** 1967 йылда Йылайыр р-ны Юлдыбай ауылы Хәлил Бүләковтан (1916 йылғы, уҡытыусы) С. Ә. Галин яҙып алған. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 65, д. 2, л. 268; БХИ, РЛ, № 144; БНТ, ПЛ, № 168.

[1] Ҡыуат ауылы XVIII быуаттың аҙағында барлыҡҡа килгән. — Асфандияров, 1991. С. 73.

[2] Әбделкәрим — хәҙерге Йылайыр районындағы ауыл. 1786 йылғы картала хутор булараҡ иҫәпкә алынған. — Асфандияров, 1991. С. 72.

**177. Таулыҡай ауылы.** 1967 йылда Баймаҡ р-ны Таулыҡай ауылы Абзаков Әхмәт Ибраһим улынан (1917 йылғы, уҡытыусы) А. Ҡамалов яҙып алған. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 63, д. 56, л. 59; БХИ, РЛ, № 145.

[1] Архив яҙмаларынан күренеүенсә, Таулыҡай ауылының 400 йыллыҡ тарихы бар. Элек ул башҡа атамалар йөрөткән: Ҡолторсаҡ (XVII б.), Ҡотлоюл (XVIII быуаттың 30-сы йылдары). Һуңғы атамаһы Бөрйән волосы старшинаһы, 1773—1775 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр һуғышы ваҡытында сығыш яһаған Таулыҡай Сураҡов исеменә бәйле. — Асфандияров, 1991. С. 29.

**178. Үрге һәм Түбәнге Яйыҡбай ауылдарының тарихы.** 1984 йылда Баймаҡ р-ны II Этҡол ауылында Ф. А. Нәҙершина менән Р. Ә. Солтангәрәева яҙып алған. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 92, д. 1, л. 98—99. Тарихи мәғлүмәттәрҙе ҡарағыҙ: Асфандияров, 1991. С. 27—28.

**179. Ниғәмәт, Нуғай, Фәйзулла ауылдары.** Баймаҡ р-ныныц II Этҡол ауылында яҙып алынған. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 92, д. 1.

[1] Тарихи яҙмаларҙан күренеүенсә, Ниғәмәт ауылына 1847 йылда Ниғәмәтулла Килдекәйев тигән кеше (1791 йылғы) нигеҙ һалған. — Асфандияров, 1991. С. 26.

[2] Был күрһәтмә тарихи дөрөҫлөккә тура килмәй. Фәйзулла ауылы әле 1834 йылда билдәле була. Уның атамаһы хорунжий Ильясов Фәйзулла исеменә бәйле. — Асфандияров, 1991. С. 42.

**180. Убалар ауылы.** Ғафури р-ның Яҡтыкүл ауылында яҙып алынған. — БЛ, № 90.

[1] Арғынйәш — Архангель районындағы бәләкәй йылға.

[2] Сыҫҡан — Ҡырмыҫҡалы районына ҡараған Сыҫҡан-Баҡалы ауылы(?).

[3], [4] Әүҙәрҙәк, Осҡонло — текстан аңлашылыуынса, Ғафури районындағы урын исемдәре.

181. **Рәсүл ауылы.** 1962 йылда Учалы р-нының Рәсүл ауылында С. Мәүлекколов яҙып алған. — БЛ, № 91.

[1] Рәсүл тархан — Ҡара-Табын волосы старшинаһы, фамилияһы — Этәсеймәсов. Е. Пугачев яуында ҡатнашҡан. — Асфандияров, 1990. — С. 39.

182. **Ҡашҡар.** 1973 йылда Йылайыр р-ны Ҡашҡар ауылы 45 йәшлек Хәмзә Ҡашҡаровтан Ә. Ямаиголова-Таһирова яҙып алған. — БДУ, БӘФК, ФФ, д. 11, л. 21; БХИ, РЛ, № 147; БПЛ, № 71; БНТ, ПЛ, № 166.

[1] Яу менән килгән ҡалмаҡ йәки ҡаҙаҡтар сигенгәндә бер ир баланың тороп ҡалыуы, аҙаҡ шул бала нәҫеленән ырыу, аймаҡтар барлыҡҡа килеүе башҡорт халыҡ риүәйәт һәм легендаларында йыш осрай торган мотив.

[2] Ҡашғар — Ҡытай Халыҡ Республикаһының Синьцзян уйғыр автономия районындағы ҡала.

[3] Әкәү — Йылайыр районындағы кескәй йылға.

183. **Батыр ауылы.** Федоровка р-ны Батыр ауылы Хәмит Ишмановтан Стәрлетамаҡ педагогия институты студенткаһы Насырова яҙып алган. Күсермәһе А. Камалов яҙмаларынан алынды. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 63, д. 56, л. 61; БХИ, РЛ, № 148.

184. **Сәйетбаба менән Мырҙаҡай.** 1963 йылда Ғафури р-ны Сәйетбаба ауылы Гөлзәйнәп Хызырованан И. Хызыров яҙып алган. — БЛ, № 93; БХИ, РЛ, № 149.

[1] Мәндем — Ғафури районындағы тау исеме.

[2] Өйҙә — шул уҡ райондағы йылға исеме.

[3] Риүәйәттәге ваҡиғалар легендар төҫ алып киткән. Ғилми әҙәбиәттән билдәле булыуынса, Сәйетбаба — Кесе-Табын волосының аҫабаһы, фамилияһы — Күбәков, XVII б-тың аҙағында — XVIII б-тың баштарында йәшәгән; улы Мырҙаҡай Сәйетбабин 1735—1815 йылдарҙа йәшәгән, йорт старшинаһы Сәйетбаба ауылында 300 кешенән торған 33 хужалыҡ (двор) булған. XIX б. башында Яңы Сәйетбаба — Мырҙаҡай ауылы барлыҡҡа килгән. Аҙаҡ ул ауылдар ҡушылған. — Асфандияров, 1971. С .17.

185. **Крепостной Йылайыр.** 1967 йылда Йылайыр р-ны Исҡужа ауылы Хәмзә Ҡашҡаровтан А. Камалов яҙып алған. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 63, д. 56, л. 62; БХИ, РЛ, № 150; БПЛ, № 74; БНТ, ПЛ, № 170.

[1] Крепостной Йылайыр — хәҙерге Баймаҡ районында Йылайыр йылғаһы буйындагы ауыл (элекке ҡәлгә).

186. **Абласкин (Яуымбай).** 1969 йылда Белорет р-ны Бельский поселогы Йыһангир Сәлиховтан (1903 йылғы) Ә. М. Сөләймәнов яҙып алган — Ғилми архив, ф. 3, оп. 63, д. 56, л. 29—30; БХИ, РЛ, № 151; БНТ, ПЛ, № 171.

[1] Бөрйән р-ны Яуымбай ауылы Сәлихов Мөхәмәҙиә Ҡарам улынан 1971 йылда БДУ талибы Ш. Бикмөхәмәтов яҙып алған бер риүәйәттә Яуымбай һәм уның байлығы хаҡында түбәндәгесә һөйләнелә:

«Уның (Яуымбайҙың. — Ф. Н.) күп кенә һауын һыйыры, бер көтөү һарығы булған, ә инде йылҡы малының һаны булмаған. Ауылдың көнсығышында ҙур ғына «Баҙ яланы» тигән урын бар. Ана шул яландың сигенән ситенә уратып алынған кәртәлә Яуымбайҙың йылҡылары тулып йөрөгән. Иртәнсәк тороп ҡарағанда, шул кәртәһе тулы булһа, малын теүәлгә иҫәпләгән.

Яҙ етеп, үлән ҡалҡыуға Яуымбай йәйләүгә сығыр булған. Уның йәйләүе ауылдан 15 саҡрым алыҫлыҡта, Үҙән йылғаһы буйында булған. Йәйләүгә күскән ваҡытта ул шәп атҡа атланып, алдан төшөп барыр булған. Йылҡылары ар-

тынан эйәргән. Үҙе бер өс саҡрым китеп, Әсеү исемле яланға еткәндә, йылҡы малдарының икенсе осо әле ауылда булған, ти. Бына шундай бай булған ул ҡарт. Шул кешенең исеменән ауыл да Яуымбай булып киткән.

Йәйләүгә күскәнендә Яуымбай үҙе сығарған көйҙә ҡурайҙа уйнар булған. Ул көйҙө әле лә «Яуымбай көйө» тип йөрөтәләр. Хәҙер инде ул көй онотолоп та бара. Атаҡлы ҡурайсы Мөхәмәҙиә Сәлихов ҡарт ҡына уны уйнай». — Ғилми архив, ф. 3, оп. 63, д. 56.

Ғилми әҙәбиәттән күренеүенсә, Яуымбай ауылы Яуымбай Ҡужъетәров исемен йөрөтә. 1859 йылда был ауылда 27 хужалыҡ (двор) булған. — Асфандияров, 1990. С. 114.

**187. Нәби ауылының тарихы.** 1971 йылда Бөрйән р-ны Нәби ауылы Юныс Һатыбаловтан (1891 йылғы) М. Рафиҡов яҙып алған. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 65, д. 7, л. 311; БХИ, РЛ, № 152, БПЛ, № 75; БНТ, ПЛ, № 179.

[1] Филатов — Ырымбур губернаһының кантондар попечителе. «Филатов законы» исемле икенсе риүәйәттә Филатовтың башҡорттарға рәхимһеҙлек күрһәтеүе ҡат-ҡат һыҙыҡ өҫтөнә алына. Филатов заманында ауылдарҙың төҙәтелеп ҡалыуы ыңғай күренеш итеп баһалана. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 32, д. 24, л. 1—2.

БДУ талиптары яҙып алған бер риүәйәттә Филатов Бөрйән яҡтарына 1840 йылда килеп төшә, тиелә. — Әҙәбиәт. Фольклор. Әҙәби мираҫ. — Өфө, 1976, 225-се б. (БДУ баҫмаһы.)

[2] Нәби ауылы 1843—1847 йылдар араһында барлыҡҡа килгән. Элек ул тирәлә утарҙар булған. — Асфандияров, 1990. С. 112.

**188. Ҡатай.** 1974 йылда Баҡалы р-ны Яңы Ҡатай ауылы Әлфиә Хәйҙарова һөйләүе буйынса Ғ. Хөсәйенов яҙып алған. — АЭМ, 1974, 308—309-сы б.; БХИ, РЛ, № 153; БПЛ, № 76; БНТ, ПЛ, № 177.

[1] Уҡа — Ока йылғаһы.

**189. Ҡаңны-Төркәй ауылы.** 1968 йылда Бүздәк р-ны Ҡаңны-Төркәй ауылы Әхмәтғәле Усман улы Ишбулдин һәм Ә. Ғибәҙәтовтан (1896 йылғы) А. Камалов яҙып алған. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 63, д. 56, л. 64; БХИ, РЛ, № 156; БПЛ, № 79; БНТ, ПЛ, № 173.

[1] Сәрмәсән — Башҡортостандың Бүздәк районындағы йылға.

[2] Ҡаңны-Төркәй — күренеүенсә, риүәйәттә атамаһың «Ҡаңны» компонентына аңлатма юҡ. Ихтимал, «Төркәй ҡаны койолған урын», тиеүгә ишаралыр был (айырым яҙмаларҙа ундай аңлатмалар ҙа юҡ түгел). Ҡаңны исеменда йөрөгән ырыу тармағы ла бар. Беҙҙеңсә, Ҡаңны-Төркәй — ҡаңны башҡорто Төркәй исеме менән аталған ауыл булырға тейеш.

Риүәйәттең 1973 йылда шул уҡ Бүздәк р-ны Ҡаранай ауылында Хәниф Юныс улы Юнысов (1910 йылғы) ҡулында һаҡланған бер ҡулъяҙманан Рәшит Шәкүров күсереп алған бер вариантында ла Теркәйҙең Ирәндек буйы башҡорто булыуы телгә алына. Төркәй бабай баҫҡынсылар ҡыуып алып киткән малды үҙенең ике улы (Ишҡол менән Үткән) һәм хеҙмәтсеһе Иҫәнҡол ярҙамында кире ҡыуып алып ҡайта. Ҡайтҡас, баҫҡынсылар яуынан иҫән ҡалған ҡатын-ҡыҙҙы йыйып (ир-ат ҡырылып бөткән була), кәңәш тота: «Беҙ бында йәшәй алмабыҙ, Ирәндек буйына ҡайтып китәйек. Иҫән булһағыҙ, балалар, ошо ауылдың исемен Ҡаңлы-Төркәй итеп ҡушығыҙ», — тигән. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 63, д. 56, л. 114. Риүәйәттәрҙә «Ҡаңлы-Төркәй», «Ҡанлы...», «Ҡаңлы» формалары осрай. Ҡаңны (ҡанлы) ырыуы тураһындағы тарихи-этнографик мәғлүмәттәрҙе ҡарағыҙ: Кузеев, 1974, 331, 336, 338, 356—358-се б.

**190. Ҡаңны-Төркәй** (икенсе версия). 1964 йылда Әлшәй р-ны Буранғол ауылы Абдрахман Әбделмәновтан (1886 йылғы) М. Сәғитов яҙып алған. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 47, д. 1, л. 74; БХИ, РЛ, № 154; БПЛ, № 77; БНТ, ПЛ, № 174.

**191. Ҡилкабыз.** 1974 йылда Баҡалы р-ны Ҡилкабыз ауылында Яхин Ғәлимхан Яхыя улынан Ғ. Хөсәйенов яҙып алған. — АЭМ, 1974, 304-се б.; БХИ, РЛ, № 155; БПЛ, № 78; БНТ, ПЛ, № 175.

[1] Степан Разин ихтилалы (1670—1671).

[2] Нағайбәк — Баҡалы районындағы ауыл исеме.

**192. Ҡаныҡай.** 1964 йылда Әлшәй р-ны Сәфәр ауылы Шәйәхмәт Солтанғужиндан (1937 йылғы, уҡытыусы) Ә. Вәхитов яҙып алған. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 47, д. 1, л. 59—61; БХИ, РЛ, № 157; БПЛ, № 80; БНТ, ПЛ, № 155.

Риүәйәттең шул уҡ Әлшәй районында яҙып алынған икенсе бер вариантында «Пугач яуы үткәс, Ҡаныҡай Әбей батшанан аҡса урынына ер һораған», тиелә. Текстан аңлашылыуынса, Әбей батша Ҡаныҡайҙың үтенесен ҡәнәғәтләндергән: «...Ҡаныҡайҙың күҙе ошо Дим һыуының матур туғайҙарына төшә. Ошо ерҙәрҙә ул үҙенә ер беркеттерә. Өйләнә. Өс улы үҫеп еткәс, уларҙы өс урынға күсереп ултырта. Улар: Япар, Сафар, Исламғол...» — Ғилми архив, ф. 3, оп. 47, д. 1, л. 62.

[1] Сафар, Ҡасҡын, Исламғол — Башҡортостандың Миәкә районына ҡараған ауылдар.

**193. Ҡоръятмаҫ ауылы.** 1964 йылда Әлшәй (хәҙерге Дәүләкән) р-ны Ҡоръятмаҫ ауылы Сәфиуллин Шакир Сәфиулла улынан (1898 йылғы, пенсионер) М. М. Сәғитов яҙып алған. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 47, д. 1, л. 73; БХИ, РЛ, № 158; БПЛ, № 81; БНТ, ПЛ, № 161.

[1] Көтөр батырҙың исеме башҡа риүәйәттәрҙә лә телгә алына.

[2] Мадьярҙар — венгрҙар. 1989 йылғы фольклор экспедицияһы ваҡытында Ҡоръятмаҫ ауылының тарихын мадьярҙарға бәйләп һөйләгән информаторҙар осраманы. Өлкән йәштәге информаторҙар, шул иҫәптән Ш. Сәфиуллин да, инде вафат булғандар. Беҙ әңгәмәләшкән кешеләр мәҙиәрҙәрҙе Мәҙиәров фамилияһына бәйләп аңлаттылар. Уларҙың һөйләүенсә, Иван Грозный заманында сукындырыуҙан ҡурҡып, башҡорт ерҙәренә килеп һыйынған татарҙар. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 92, д. 9, л. 130—132.

Ошо уҡ ауылдан Мәҙиәров Миңлеғәле Минияр улы (1916 йылғы) Арыҫланова Йәмилә Тимербай ҡыҙы (1923 йылғы) Ҡоръятмаҫтағы нәҫелдәр исемлеген киңәйтеберәк әйтте: үҫәргәндәр, мәҙиәрҙәр, аҡтүбәтәйҙәр (ҡырғөйлө нәҫеленең бер араһы. — Ф. Н.). Аҡтүбәтәйҙәр — уҡымышлы, улар араһынан муллмөәзиндәр күп сыҡҡан; Морат, Мерәҫ Сөйәрғолдар.

**194. Ҡыпсаҡ-Аҫҡар ауылы тарихы.** 1964 йылда Әлшәй р-ны Ҡыпсаҡ-Аҫҡар ауылы 80 йәшлек Дәүләтшин Дәүләткилде Дәүләтша улынан М. М. Сәғитов яҙып алған. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 47, д. 1, л. 75—76; БХИ, РЛ, № 159; БПЛ, № 82; БНТ, ПЛ, № 162.

[1] Дархан — «тархан» һүҙенең ерле һөйләштәге яңғырашы. Тархандар заманының шаңдауын миңә 1993 йылдың йәйендә Ҡыпсаҡ-Аҫҡар ауылында Миниһан Ғайсинанан (1928 йылғы) ишетергә тура килде. Ул үҙебеҙҙең ауылыбыҙҙың боронғо бабаһы турында тип, бер йыр йырланы, һуңғы юлдары: «...Ҡыпсаҡ дархан, Ҡыпсаҡ дархандарҙан атала» (Ҡуйын дәфтәренән).

**195.** Ҡыпсаҡ-Аҫҡар (икенсе версия). 1990 йылда Әлшәй р-ның Ҡыпсаҡ-Аҫҡар ауылында Шәфиғуллин Нурислам Фәйзерахман улынан (1910—1991)

Ф. А. Нәҙершина яҙып алған. Төп нөсхә яҙып алыусының шәхси архивында һаҡлана.

**196. Ҡыпсаҡ-Асҡар** (өсөнсө версия). 1990 йылда Ҡыпсаҡ-Асҡар ауылында Кашапова Минжиһан Хәжеғәле ҡыҙынан (1918 йылғы) Ф. А. Нәҙершина яҙып алған. — Шәхси архивтан.

**197. Ҡандра Әмин.** 1940 йылда Туймазы р-ны Ҡандра Әмин ауылы Харис Баһмановтан (1880 йылғы) Э. Н. Усманов яҙып алған. — Усманов, 1945, 58—60-сы б.; БХИ, РЛ, № 160; БПЛ, № 83; БНТ, ПЛ, № 172.

**198. Теләүле.** 1974 йылда Шаран р-ны Теләүле ауылы Вәлиуллин Шакирйәндән (1888 йылғы) Ғ. Б. Хөсәйенов яҙып алған. — АЭМ, 1974. 314-се б.

**199. Юлыҡ ауылы.** 1940 йылда Ғафури р-ны Яҡтыкүл ауылы Ҡоломбәтов Вәлиулла Фазулла улы Еҙем һыуы башҡорттарынан яҙып алған. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 12, д. 261; баҫылған: Башҡортостан, 1991, 28 август (матбуғатҡа Ф. А. Нәҙершина әҙерләгән).

[1] Ауылдың XVIII б. аҙағында (1795 й.) Юлыҡ исеме йөрөтөләүе тарихи яҙмалар аша ла билдәле. Юлыҡ хаҡында документаль материалдар билдәле түгел. — Асфандияров, 1993. С. 9. Фольклор материалдарынан «Юлҡай менән Бәшәрғол» риүәйәтен ҡарағыҙ (№ 304).

**200. Мораҙым.** 1972 йылда Ауырғазы р-ны Мораҙым ауылы уҡытыусы-пенсионер Булат Ҡунафиндан (1901 йылғы) Ә. Вахитов яҙып алған. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 65, д. 9, л. 329; БХИ, РЛ, № 161; БНТ, ПЛ № 178.

[1] Ҡулсура, Еркүпер мәмерйәләре — Мораҙым ауылы ерҙәрендәге мәмерйәләр.

[2] Урадас би — Мең һаҙаҡлы Урҙас биҙең исеме Меңле ырыуы башҡорттарының шәжәрәләрендә йыш осрай. — БШ, 60—68, 189—190-сы б.

[3] Биллеҡылыс (Биллеғылыс) — Мораҙым ауылындағы бәләкәй генә йылға, Өршәккә ҡоя.

[4] Ғилми әҙәбиәттән билдәле булыуынса, Мораҙым ауылына нигеҙ һалыусы — Меркет Мең волосы старшинаһы Мораҙым Сәйетмәмбәтов. Ул 1773—1775 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр һуғышы ваҡытында Е. Пугачев яҡлылар яғында актив көрәшкән. — Асфандияров, 1990. С. 123.

**201. Сумар.** 1972 йылда Әлшәй р-ны Маянған ауылы 79 йәшлек Хәмзә Рамазановтан Ә. Х. Вахитов яҙып алған. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 47, д. 1, л. 74; БХИ, РЛ, № 162.

[1] Маянған — Әлшәй районындағы ауыл исеме.

[2] Абдрахман — шул уҡ Әлшәй районындағы Сумар ауылының икенсе исеме.

**202. Маянған.** 1973 йылда Әлшәй р-ны Маянған ауылы Ҡотлоәхмәт Вәлиәхмәтовтан Ф. А. Нәҙершина яҙып алған. — БХИ, РЛ, № 163.

Риүәйәттең 1972 йылда шул уҡ Маянған ауылында Ә. Х. Вахитов һәм М. М. Сәғитов яҙып алған варианттары ла нигеҙҙә был китапта бирелгән сюжетҡа яҡын тора. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 65, д. 9, л. 85, 91.

**203. Отҡол (Дәүләкән).** Дәүләкән ҡалаһында йәшәүсе Хужиевтан Азат Камалов яҙып алған. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 63, д. 56, л. 64—66; БХИ, РЛ, № 146; БНТ, ПЛ, № 182.

**204. Һыҙғы.** 1973 йылда Йылайыр р-ны Ҡашҡар ауылы Хәмзә Ҡашҡаровтан (1928 йылғы) Ә. Яманғолова-Таһирова яҙып алған. — БДУ, БӘФК, ФФ, д. 111, л. 22—23; БХИ, РЛ, № 164.

[1] Һаҡтау — Йылайыр районындағы ауыл исеме.

**205. Атингән ауылы.** Хәйбулла районы Аҡъяр ауылы Ҡоҙабаева Хәкимә Ғатау ҡыҙынан (1907 йылғы) З. Ғәббәсова-Ҡунаҡасова яҙып алған. — БДУ, БӘФҠ, ФФ, д. 113, л. 91—93; БХИ, РЛ, № 165; БНТ, ПЛ, № 181.

[1] Ауыл исеменең башланғыс этимологияһы йолаға барып тоташа булырға кәрәк: борон кемдеңдер йортона (торлағына) бәлә йыш килһә (ғаилә ағзаларының үлеүе һ. б. бәхетһеҙлектәр), киткән ҡотто кире ҡайтарыу өсөн өйгә изге мал — ат индерер булғандар.

**206. Ибрай ауылы.** 1977 йылда Салауат р-нының Лағыр ауылында Вәлиев Хәсән Мөхәммәтғәли улынан (1894 йылғы), Ф. А. Нәҙершина яҙып алған. — БХИ, РЛ, № 167; БПЛ, № 84; БНТ, ПЛ, № 180.

**207. Ҡейекбай (Баштире) ауылы.** 1939 йылда Бөрйән р-нының Мәндәғол ауылында 70 йәшлек Ваһап Ишкилдиндан Ғәйнан Әмири яҙып алған. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 32, д. 26, л. 64.

[1] Ауыл 1834 йыл барлыҡҡа килгән. Уның исеме Кейекбай Юлтимировҡа бәйле. — Асфандияров, 1990. С. 106.

**208. Абдрахман ауылы.** 1974 йылда Татарстандың Әлмәт р-ны Абдрахман ауылында отставкалағы майор Сәхәп Таһировтан (Афзал Таһировтың бер туған энеһе) Ғ. Б. Хөсәйенов яҙып алған. — АЭМ, 1974.

[1] Ыҡ — Кама йылғаһының һул ҡушылдығы. Бәләбәй, Бишбүләк, Иәрмәкәй, Туймазы, Шаран, Баҡалы райондары аша үтә.

## ТАРИХИ РИУӘЙӘТТӘР ҺӘМ ЛЕГЕНДАЛАР

**209. Болғарҙар менән башҡорттар.** 1974 йылда Илеш р-ны Ырсай ауылы Минһаж Ямалетдиновтан (1887 йылғы) Ғ. Б. Хөсәйенов яҙып алған. — АЭМ, 1974, 299—301-се б.; БХИ, РЛ, № 168; БПЛ, № 113; БНТ, ПЛ, № 187.

Был сюжет халыҡ ижады ерлегендә «Тарих-намәи болғар» ҡулъяҙмаһы күсеректәренән һәм ҡайһы бер башҡа баҫма әҫәрҙәре аша килеп ингән булһа кәрәк. Билдәле булыуынса, хан ҡыҙының фалиж ауырыуынан терелеүе тураһындағы сюжет Әбү Хәмид эл-Гарнати яҙмаһында, шулай уҡ Хисаметдин бине Шәрәфетдиндең «Рисәләи тәварихи Болғария» исемле әҫәрҙәрендә теркәлеп ҡалған «Борынғы татар әдәбияты». — Ҡазан, 1963, 29-сы б.).

Ошо уҡ легенда мотивтары Ырымбур өлкәһенең Ҡыуандыҡ р-ны Тирәкле ауылы 88 йәшлек Йосоп Исламғоловтан Ә. Бишшев яҙып алған бер әҫәрҙә лә телгә алына. Тик шуныһы, был вариант буйынса, фалиж ауырыуы менән «Уфа ханы»ның ҡыҙы ауырый, табипсылар аша «Уфа халҡы мосолман динен алған... Ҡазандар шул башҡорттарға эйәреп, мосолман булған» (Ғилми архив, ф. 3, оп. 63, д. 56, л. 120—121).

Болгарҙар һәм башҡорттар араһына ислам динен таратыу буйынса миссионерҙар килеүе тарихи яҙмалар аша ла билдәле. Әхмәт Ибн-Фаҙландың әйтеүенә ҡарағанда, болғар ханы Әлмүш («Алмуш, сын Шилки йылтывара») Багдад хәлифе Джафар ал-Мөҡтәдиргә (902—932) болғар иленә ислам динен таратырға вәкил ебәреүен һорап хат яҙған. (А. П. Ковалевский. Книга Ахмеда Ибн-Фадлана о его путешествии на Волгу в 921—922 гг. Харьков, 1956. С. 121).

[1] Ҡырылмаһа ҡырҡ аллалары булған — күп төрлө әйбер һәм күренештәрҙе изгеләштереп, уларға табыныу халыҡ аңында мәжүсилек ҡараштар хөкөм һөргән дәүергә тура килә. Х быуат башында башҡорттарҙың бер өлөшө, мәҫәлән, ун ике төрлө раббыға ышанған (Ибн-Фаҙландың үрҙә күрһәтелгән хеҙмәте, 131-се б.).

**210. Бөрйәндәр хан замандарында.** 1979 йылда Бөрйән р-ның Иҫке Собханғол ауылында Бирҙекәйев Колмөхәммәт Ырыҫмөхәммәт улынан (1903 йылғы) Ғайса Хөсәйенов яҙып алған. — АЭМ, 1979, 190—191-се б.; БХИ, РЛ, № 170; БПЛ, № 114; БНТ, ПЛ, № 188.

[1] Сыңғыҙхандың күктән төшкән нурҙан гөманлы булған әсәнән яралыу мотивы ҡаҙаҡ, монгол легендаларындағы мотивтар менән ауаздаш. — П о т а н и н Г. Н. Ерке. Культ сына в Северной Азии // Материалы к тюрко-монгольской мифологии. — Томск, 1916. (Ағаларының Сыңғыҙға булган мөнәсәбәте тураһындағы мәғлүмәттәр.)

[2] Иҙел (Волга) буйҙарын Сыңғыҙхандың ейәне — Батый ғәскәрҙәре баҫып ала. — Очерки, 1. С. 42.

**211. Биксура.** Татарстандың Сарман р-ны Сарман ауылы Фәйзелхаҡ Һаҙиуллиндан Сарман районының «Ленинчы» гәзите мөхәррире урынбаҫары Х. Хәйруллин яҙып алған. Уның ошо материал нигеҙендә яҙылған «Еллар тузанын каккач» исемле документаль хикәйәһе шул уҡ «Ленинчы» гәзитендә баҫылып сыҡҡан (1967, 31 май, 2, 4, 7 июнь). Татар тел ғалимы Ғ. Саттаров Фәйзелхаҡ Һаҙиуллин һөйләгән риүәйәтте «Сарман» топонимының барлыҡҡа килеүен аныҡлау өсөн файҙаланған (ҡарағыҙ: Г о м ә р С а т т а р о в. Ни өчен шулай аталган? — Татарстан топонимнары. — Ҡазан, 1971, 109—113-сө б.). Беҙҙең китапҡа риүәйәт ошо баҫма буйынса килеп инде. — БХИ, РЛ, № 171; БПЛ, № 115; БНТ, ПЛ, № 189.

[1] С а р м а н ҡ а р т — риүәйәттәргә һәм шәжәрәгә ҡарағанда, Сарман ауылына (Татарстан) нигеҙ һалыусы.

[2] Ы ҡ — Башҡортостан менән Татарстан сигендәге йылға, Ҡаманың һул ҡушылдығы.

[3] М ә л л ә — Татарстан ерендәге йылға.

[4] М и н з ә л ә — Ыҡтың һул ҡушылдығы.

[5] Б у л ә р — Ыҡ бассейнында йәшәгән боронғо башҡорт ҡәбиләһе, уның эсенә мышыға, ҡадыр ырыуҙары инә (Кузеев, 1974, 317-се б.).

[6] Б а т ы й х а н — Көнсығыш Европаны баҫып алған монгол ханы Бату (1208—1255).

[7] Ҡ а р а г а й-А т а й ы р ы у ы — риүәйәттең йөкмәткеһенә ҡарағанда, башҡорт ырыуы. Ихтимал, буләр ҡәбиләһенең берәй тармағылыр.

[8] Ы л а с ы н, б ү р е ы р ы у ҙ а р ы — бында аймаҡ, ара, түбә төшөнсәләре күҙ уңында тотола.

**212. Бошман-Ҡыпсаҡ батыр.** 1974 йылда Шаран р-ны Тәләүле ауылы Шакирйән Вәлиуллиндан (1889 йылғы) Ғ. Хөсәйенов яҙып алған. — АЭМ, 1974, 302—303-сө б.; БХИ, РЛ, № 172; БПЛ, № 116; БНТ, ПЛ, № 190.

Монгол баҫҡынсыларына ҡаршы көрәшеп йөрөгән ҡыпсаҡ батыры Бошман (Бациман, Бочман) хаҡындағы хикәйәттәр боронғо тарихи яҙмаларҙа ла иҫкә алына. Был яҙмаларҙан күренеүенсә, Бошманды Менгү-хан һәм уның туғаны Бүсектең гәскәрҙәре уратып ала. «Бачманды тотоп Менгү-хан янына килтергәс, ул Менгү-хандың уны үҙ ҡулы менән үлтереүен һораны. [Ләкин] Менгү-хан үҙенең туғаны Бүсеккә уны [Бачманды] ике киҫәккә сабып үлтерергә бойорҙо», — тиелә яҙмаларҙа. — Сборник материалов, относящихся к истории Золотой Орды, т. II. Извлечения из персидских сочинений, собранные В. Г. Тизенгаузеном и обработанные А. А. Ромасковичем и С. Волиным. — М.—Л.: Изд. АН СССР, 1941. С. 11; Рашид-ад-дин. Сборник летописей. Т. II. Перевод с персидского Ю. П. Верховского и Б. И. Панкратова. Ред. проф. И. П. Петрушевского. —

М.—Л.: Изд. АН СССР, 1960, 38-се б. Күрһәтелгән баҫмаларҙағы текст татарса тәржемә ителеп, «Бачман һәм аны үтерү турында хикәя» тигән исем менән 1963 йылда Ҡазанда сыҡҡан: «Борынгы татар әдәбияты». — Ҡазан, 1963, 174—175-се б.

[1] Сулман Иҙеле — Ҡама һыуы, Ҡама йылғаһы.

[2] Риүәйәттең йөкмәткеһенә ҡарағанда, татар-монгол яуы хаҡында һүҙ бара.

**213. Аҡман-Тоҡман.** Был риүәйәтте Яныбай Хамматов 1946 йылда Белорет районында Лоҡманов Ихсан исемле 85 йәшлек ҡурайсы бабайҙан ишеткән, уны атаһы ла һөйләй торған булған. Яҙыусы был әҫәрҙе аҙаҡ үҙенең «Юрғашты» тигән романында файҙаланған. Романдың идея-эстетик маҡсатына буйһондороп, уны, әлбиттә, ижади файҙаланган, шаҡтай киңәйтеп, әҙәбиләштереп биргән.

«Аҡман-Тоҡман» риүәйәтенең шулай уҡ Ғайса Хөсәйенов тарафынан яҙып алынған варианты бар. Уның тексы Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө ғилми үҙәге архивында һаҡланған, Ғайса Хөсәйенов тарафынан төҙөлгән «Тарихи легендалар» исемле ҡулъяҙмалар йыйынтығынан алынды. — БХИ, РЛ, № 173; БПЛ, № 117; БНТ, ПЛ, № 181. Вар.: БЛ, № 131.

[1] «Алтай тауҙары яғынан килгән ҡара яуҙы» XIII быуатта булып үткән татар-монгол яуына ишара тип фараз итергә урын бар. Легенданың сюжет үҫешендә лә был мотив асыҡ сағыла.

[2] Бында татар-монголдарҙың буйһондоролған халыҡтарҙан яһаҡ йыйыусы наместниктары — баҫҡаҡтар тураһында һүҙ бара булһа кәрәк.

[3] Яҙғы ҡаты март буранын «Аҡман-Тоҡман бураны» тип атау ғәҙәте, Урал аръяғына урынлашҡан Белорет, Әбйәлил, Баймаҡ, Бөрйән, Учалы райондарында ныҡ таралған. Был атаманың килеп сығышын, ғәҙәттә ошо легенда сюжеты менән бәйләйҙәр. Был осраҡта легендалар өсөн хас булған этиологик мотив сағылышын күреп була.

**214. Ҡыҙтораташ.** 1981 йылда Өфө ҡалаһында Әхмәр Үтәбаевтан Фәнүзә Нәҙершина яҙып алған. Үтәбаев риүәйәтте олатаһы А. З. Буранбаевтан (1893 йылғы, Баймаҡ районының Буранбай ауылынан) ишеткән. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 73, д. 72, л. 90. Башҡорт телендә тәү башлап баҫыла; БНТ, ПЛ, № 192.

**215. Мөйтән.** 1967 йылда Йылайыр р-ны Юлдыбай ауылы Рәхмәтуллин Мөким Бәҙри улынан (1898 йылғы) Н. Шоңҡаров яҙып алған. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 65, д. 2, л. 278—281; БХИ, РЛ, № 174; БНТ, ПЛ, № 193.

[1] Риүәйәт шәжәрәнән алынған. Шәжәрәнең тотош шиғырҙан ғына торған тулы тексын ҡарағыҙ: БШ, 81—84-се б. Шәжәрәнең Туҡһаба улы Мөйтәндә дауланған өлөшө был китапҡа индерелгән шиғри юлдар менән нигеҙҙә тап килә. Шәжәрәгә ҡарата Р. Г. Ҡузеевтың аңлатмаһын ҡарағыҙ: БШ, 200-се б.

**216. Аҡһаҡ Тимер.** 1947 йылда Ғәли Ибраһимов яҙып алған. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 32, д .30, л. 3—4; БХИ, РЛ, № 175; БПЛ, № 118; БНТ, ПЛ, № 194.

[1] Риүәйәттең был өлөшө Аҡһаҡ-Тимер хаҡындағы ҡаҙаҡ риүәйәте менән ауаздаш. — «Тамерлан» // АН, 18 (?), № 37. С. 1, 2.

**217. Боғрахан (Ҡарахан).** Ғафури р-ның Яктыкүл ауылында йәшәгән Вәлиулла Ҡоломбәтов яҙмаларынан. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 12, д. 261, л. 81; «Башҡортостан», 1992, 28 авг. (Матбуғатҡа әҙерләүсеһе — Ф. А. Нәҙершина.)

**218. Әбейхан ата.** 1960 йылда Бөрйән р-ны Мәҡсүт ауылы Галин Сәйфулла Ибәтулла улынан (1878 йылғы) Н. Шоңҡаров яҙып алған. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 23, д. 7, л. 78; БХИ, РЛ, № 177; БПЛ, № 110; БНТ, ПЛ, № 196.

[1] «Ата» һүҙе төрки телдәрендә күпселектә ир кешеләргә ҡарата әйтелә (рус. — отец, дед). Әммә ҡайһы бер телдәрҙә, мәҫәлән, төрөк теленең ҡайһы бер диалекттарында ул ҡатын-ҡыҙға ҡарата ла ҡулланылып, өлкән апай (ede) мәғәнәһендә йөрөгән, шулай уҡ хөрмәтле ҡатын-ҡыҙға ололап өндәшеү рәүешендә булған (Севортян, с. 201). Башҡорт риүәйәте һүҙҙең ошо боронғо мәғәнәһен һаҡлаған булһа кәрәк. Бынан тыш, төрөкмән, ҡараим, ҡырғыҙ, ҡарағалпаҡ, уйғыр, алтай телдәрендә ата — предок мәғәнәһен дә бирә (Севортян, с. 200). Башҡорт телендә был төшөнсә «ата-баба» формаһында йәшәй. Риүәйәттәге «ата»ның — ырыу башлаусы тигән мәғәнәне биреү ихтималлығы ла юҡ түгел.

[2] Һ а р г а й ы — Бөрйән районындағы йылға.

219. **Бабсаҡ менән Ҡусаҡ бей.** 1960 йылда Бөрйән р-ны Иҫке Монасип ауылы 74 йәшлек ҡарт һунарсы Ғилметдин Муллағолов һөйләүе буйынса, ҡышҡы саңғы походында ҡатнашыусы Байназар балалар йортоноң тәрбиәләнеүселәре яҙып алған. Поход альбомынан Рәми Ғарипов күсереп, институтҡа тапшырған.— Ғилми архив, ф. 3, оп. 12, д. 237, л. 36—42. Баҫылған: БҠ, 1970, № 8; ошо баҫма буйынса: БХИ, РЛ, № 169; БНТ, ПЛ, № 197.

Был риүәйәт Башҡортостандың көньяҡ-көнсығыш райондарында киң таралған. Сюжет эпик поэма формаһында ла, риүәйәт-легендалар рәүешендә лә йөрөй. Эпик ҡомартҡының үҙе, варианттары хаҡындағы мәғлүмәттәрҙе ошо баҫманың эпостарға бағышланған китабынан алырға мөмкин. Хеҙмәттең аңлатмалар өлөшөндә риүәйәт-легенда формаһында йәшәгән текстар ҙа иҫкә алынып, сығанаҡтары күрһәтелгән (ҡарағыҙ: БХИ. Эпос, 2, 1973, 293—324, 352—361-се б.). Өҫтәп, 1939 йылда Бөрйән р-ны Мәндәгол ауылы Ваһап Ишкилдиндан Ғ. Әмири яҙып алған сюжетты күрһәтергә мөмкин. Ул ваҡиғаларҙың йөкмәткеһен ҡыҫҡа ғына итеп һөйләп биреүгә ҡоролған, текста топонимик мәғлүмәттәр бар. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 32, д. 26, л. 68.

Риүәйәттең шулай уҡ ваҡытлы матбуғатта һәм ғилми хеҙмәттәрҙә баҫылып сыҡҡан варианттары билдәле. («Башҡорт аймағы», 1929, № 7; «Башҡорттарҙың көнкүрешен, тарихын һәм культураһын өйрәнеү буйынса Ғилми йәмғиәт хеҙмәте». — Стәрлетамаҡ, 1922.)

«Бабсаҡ менән Ҡусаҡ бей» әҫәре Башҡортостандың көньяҡ-көнсығыш райондарында йәшәүсе башҡа халыҡтар репертуарына ла күскән. Уның бер варианты 1964 йылда Бөрйән р-нының Ҡотан ауылы Ф. Капитоновтан яҙып алынған һәм баҫтырып сығарылған: (Ск. Башк., 1969. С. 97—99).

[1] М ә с е м — эпик ҡомартҡы һәм легендаларҙа йыш осраған хан образы. Мәсемхандың реаль шәхес булғанын раҫларлыҡ тарихи мәғлүмәттәр билдәле түгел.

[2], [3], [4] Һ а р а ғ ы, Ө м б ә т, Б а й н а з а р — Бөрйән районындағы ауылдар.

220. **Ҡарасай менән Ҡаҙы батыр.** 1981 йылда Өфө ҡалаһында Ф. Ф. Илбулдиндан Ғ. Б. Хөсәйенов яҙып алған. — БПЛ, № 128; БНТ, ПЛ, № 198.

Хикәйәт һәм йырҙарҙың Ноғай циклына ҡараған әҫәр. Оҡшаш сюжеттар ноғай, ҡаҙаҡ, ҡарағалпаҡтарҙың ауыҙ-тел ижадында осрай. — Ж и р м у н с к и й В. М. Тюркский героический эпос. — Л.: Наука, 1974. С. 393—410; С а г и т о в И. Т. Каракалпакский богатырский эпос. — Нукус, 1963. С. 39 (ҡарағалпаҡ телендә).

[1] Ураҡ һәм текста телгә алынған башҡа персонаждар — ысынбарлыҡтағы шәхестәр. Уларҙың исемдәре тарихи документтарға теркәлгән. Ҡарағыҙ: Ж и р м у н с к и й (үрҙә күрһәтелгән хеҙмәт), с. 411—490, 498.

**221. Кырҡ нуғай батыры.** 1981 йылда Өфө ҡалаһында Ф. Ф. Илбулдиндан Ғайса Хөсәйенов яҙып алған. — БПЛ, № 130; БНТ, ПЛ, № 199.

[1] Бындай сюжет башҡа төрки халыҡтарының (ҡарағалпаҡ, ҡаҙаҡ һ. б.) фольклорында ла урын алған.

[2] Һ а б р а у й ы р а у — «Иҙеүкәй менән Мораҙым» исемле башҡорт халыҡ ҡобайырында осраған образ.

**222. Ҡобланды батыр менән Ҡаҙанхан.** Паспорты үрҙәге текстағыса. Баҫылған: БПЛ, № 129; БНТ, ПЛ, № 200.

[1] Ҡ о б л а н д ы б а т ы р — ҡаҙаҡ фольклорындағы сағыу образдарҙың береһе, шул исемдәге эпос геройы. Ҡыпсаҡ-Ноғай циклына ҡараған был әҫәр ҡыпсаҡтарҙың Ҡобланды батыр етәкселегендә ҡыҙылбаштар (айырым варианттарҙа ҡалмыҡтар) менән көрәшен һүрәтләүгә нигеҙләнгән. — История казахской литературы, т. 1. — Алма-Ата, 1968. С. 254—255.

«Ҡоблан батыр» исемле ҡобайыр башҡорт халыҡ ижады ерлегендә лә бар. Ул ҡобайыр Ғайса Хөсәйенов тарафынан Ырымбур өлкәһе башҡорто Сабира Һөйөндөкованан яҙып алынған.

**223. Тәүәш.** 1964 йылда Әбйәлил р-ны Таштимер ауылы Мөхәмәтов Бикйән Мөхәмәт улынан (1897 йылғы) Х. Шәғәлина яҙып алған. — БЛ, № 20; БХИ, РЛ, № 176; БНТ, ПЛ, № 213.

[1] Ҡ о р — бында түңәрәк яһап ултырған кешеләр мәғәнәһендә.

**224. Баяс батыр.** 1971 йылда Саратов өлкәһе Перелюб р-ны Ҡунаҡбай ауылы Ҡолдәүләт Биишевтан (1896 йылғы) Ә. Х. Вахитов яҙып алған. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 65, д. 8, л. 53; БХИ, РЛ, № 180; БПЛ, № 122; БНТ, ПЛ, № 212.

[1] «Баяс батыр» исемле ҡобайыр ҙа бар. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 21, д. 6, л. 52—53.

**225. Бәндәбикә менән Ерәнсә сәсән.** Күгәрсен р-ны Мәҡсүт ауылында пенсионер-уҡытыусы Ғ. Биишев яҙып алған. — БҠ, 1969, № 9, 18—20-се б.; БХИ, РЛ, № 178; БПЛ, № 120; БНТ, ПЛ, № 204.

Ғ. Биишев Бәндәбикә курганы [кәшәнәһе] хаҡында түбәндәге мәғлүмәттәрҙе килтерә: «Курган әле лә бар. Уның эргәһенән дә, түбәһенән дә ҡаҙып, кирбестәрен сығарғандар. Кирбестәре бик иғтибарға лайыҡлы. Улар аҡһыл-күк төҫтә, бик еңел һәм ныҡ. Ике төрлө ҡалып менән һуғылған. Бер төрөнөң иңе лә, буйы ла 20 см, ә ҡалынлығы 5 см самаһы. Икенсе төрөнөң буйы — 20, иңе — 10, ҡалынлығы 5 см самаһы. Әгәр ике бәләкәй кирбесте рәттән һалһаң, ҙур кирбес менән тиң була».

«Бәндәбикә ҡәбере» тип йөрөтөлгән кәшәнәне өйрәнеү юлында башҡарылған археологик ҡаҙылмалар хаҡында ҡарағыҙ: Н. А. М ә ж и т о в. Башҡортостан археологияһы. — Өфө, 1968, 166—169-сы б.

[1] Ҡ ә ң ш ә т т а у ы — Күгәрсен районының Мәҡсүт ауылы эргәһендә.

[2] Ү р г е н, Н а з ы й — шул уҡ Мәҡсүт ауылындағы йылға исемдәре.

Риүәйәттең Мәҡсүт ауылында яҙып алынған бер вариантында барымта күрәнештәре хаҡында бер ни ҙә әйтелмәй. Бында Ерәнсә сәсәндең таңҡыр аҡыллы Бәндәбикә менән аҡыл һынашыу эпизодтары һүрәтләнә. Ғилми архив, ф. 3, оп. 47, д. 31, л. 58—59.

**226. Иҫәнгол менән Сәйет балуан.** 1966 йылда Хәйбулла р-ны Таңатар ауылы Сабирйән Рәхмәтовтан (1870 йылғы) Ҡ. Аралбаев яҙып алған. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 63, д. 56, л. 115—116; БХИ, РЛ, № 179; БПЛ, № 121; БНТ, ПЛ, № 219.

Билдәле булыуынса, 1789 йылда башҡорттар хәрби сословие булып иғлан ителә. Башҡортостан кантондарға бүленә. Ошо ваҡыттан алып үҙенең милли формаһы булған регуляр башҡорт ғәскәрҙәре төҙөлә башлай.

Ләкин башҡорттарҙың рус ғәскәрҙәре составында хәрби походтарҙа ҡатнашыуы элегерәк дәүерҙәрҙә лә була. Мәҫәлән, XVII быуат башында башҡорттар поляк интервенцияһына ҡаршы Минин һәм Пожарский ополчениеһында ҡатнашҡандар; Петр I батшалыҡ иткән дәүерҙә һуғыштарҙа булғандар; рустар менән бергә Пруссия короле Фридрих II ғәскәренә яу тотоп, Берлинда булғандар (1760); 1771 йылда ҡалмыҡтарға, 1787—1789 йылдарҙа шведтарға ҡаршы һуғышта ҡатнашҡандар. (Ҡарағыҙ: Усманов, 1944, 4—6-сы б.).

[1], [2] Мәмбәт ырыуы шәжәрәһендә телгә алынған шәхестәр. Иҫәнгол — Мәмбәттең улы, Ҡыуанҙыҡ — сйәне. (К. А. Аралбаев. Фольклорные мотивы в шежере Мамбетова рода // Фольклористика в Советской Башкирии. — Уфа, 1974, вып. 1. С. 132—142.) Хәҙерге Ейәнсура районының үҙәге Иҫәнгол ауылы, Ырымбур өлкәһендәге Ҡыуандыҡ ҡалаһының исемдәре, ихтимал, ошо шәхестәргә бәйлелер.

**227. Өмбәт батыр.** 1967 йылда Ейәнсура р-ны Өмбәт ауылы Бикбулатов Ғибәдулла Һибәтулла улынан (82 йәшлек, Үҫәргән ырыуы башҡорто) М. Сәғитов яҙып алған. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 65, д. 2, л. 94; БХИ, РЛ, № 181.

[1] Өҫкәлек — Ейәнсура районындағы йылға.

[2] Муйнаҡ — был исем шул уҡ Ейәнсура районында Ф. Хәмитова тарафынан яҙып алынған «Муйнаҡ ҡарт» исемле риүәйәттә (№ 229) урын ала. Бында ул аҡыллы, абруйлы шәхес итеп һүрәтләнә. Ф. Хәмитова яҙып алған вариантта ваҡиғаларҙың шулай уҡ ҡаҙаҡ-ҡалмаҡ яуҙары менән бәйле булыуын иҫкә алһаҡ, ике риүәйәттә лә бер үк шәхес хаҡында һүҙ барғанлығын төшөнөргә мөмкин. Ейәнсура районында дүрт Муйнаҡ ауылы булыуы ла осраҡлы хәл түгел.

**228. Тәкәғашҡа.** 1961 йылда Учалы р-ны Ҡарт Муйнаҡ ауылы Яхъя Рәхмәтуллиндан (1897 йылғы) Н. Сөйәрғәлин яҙып алған. — БЛ, № 25; БХИ, РЛ, № 182; БПЛ, № 127; БНТ, ПЛ, № 207.

Риүәйәттең шул уҡ Ҡарт Муйнаҡ ауылында Шығылман Насыровтан (1905 йылғы) М. Дилмөхәмәтов яҙып алған вариантында ваҡиғалар был китапта бирелгән текстағыса тиерлек. Унда Тәкәғашҡаның физик көсө хаҡында түбәндәге юлдар иғтибарҙы йәлеп итә: Үтәғол Тәкәғашҡаны саҡыртып: «Һин үҙеңде һынағаның бармы?» — тип һорағас, Тәкәғашҡа: «Эйе, бына мин Уй йылғаһынан бер тыу бейәне сығара алам», — тип яуап бирә. — БЛ, № 167.

**229. Муйнаҡ ҡарт.** 1966 йылда Ейәнсура р-ны Абзан ауылы Ибраһим Ғәлиевтән Ф. Хәмитова яҙып алған. — БЛ, № 26; БХИ, РЛ, № 183; БПЛ, № 132; БНТ, ПЛ, № 233.

Риүәйәттең 1958 йылда Күгәрсен р-ны Ишбирҙе ауылы Ғилметдин Әбйәлиловтан М. Әҙелғужин яҙып алған вариантында топонимик мәғлүмәт килтерелә: «...Әхмәр батырҙың мәйетен күлгә ташлағандар. Шул замандан башлап, был күл «Әхмәр күле» тип йөрөтөлә башлаған. — БЛ, 167-се б.

[1] Ҡарғалы шәһәре — Ырымбур янындағы Ҡарғалы ауылы хаҡында һүҙ бара.

Һүрәм, Әселе һыуҙары — Ейәнсура районындағы йылғалар.

**230. Ыҫмаил менән Дауыт.** 1965 йылда Учалы р-ны Оҙонгүл ауылы башланғыс мәктәбе уҡытыусыһы Рамазанов Ишмөхәмәт Илһам улынан М. Сәғитов

яҙып алған. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 47, д. 3, л. 16—19; БХИ, РЛ, № 184; БПЛ, № 125; БНТ, ПЛ, № 209.

**231. Алдар-Шымай менән Зөһрә.** 1972 йылда Миәкә р-ны Бикҡол ауылы Ҡаҙиров Шамил Ғәлим улынан (1914 йылғы) Ә. Вахитов яҙып алған. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 65, д. 9, л. 87; БХИ, РЛ, № 185; БПЛ, № 133; БНТ, ПЛ, № 205.

[1] Сыуаш Ҡарамалыһы — риүәйәттең йөкмәткеһенә ҡарағанда, Бикҡол менән Миәкә ауылдары араһындағы урын.

[2] Илсеғол — Миәкә районына ҡараған ауыл.

[3] Бында «Зөһрә менән Алдар» тигән эпик ҡомартҡы (БХИ. Эпос, 2, 151—292-се б.) ҡуҙ уңында тотола, ахырыһы.

**232. Көләмбәт батыр.** 1965 йылда Баймаҡ р-ны Иҫән ауылы Йәрмөхәмәтов Зөлҡәрнәй Әнәс улынан (1918 йылғы) Б. Әхмәтшин яҙып алған. — Ск. Башк., 1969. С. 121; БХИ, РЛ, № 186; БНТ, ПЛ, № 215.

[1] Башҡорт халҡы вәкилдәренең рус батшаһына барыуҙары хаҡында В. Филоненко яҙмаларында ла ҡайһы бер риүәйәттәр телгә алына. Шуларҙың береһе XVI б. урталарында башҡорт йәмғиәтендә социаль-тарихи шарттарҙы шаҡтай асыҡ күҙ алдына баҫтырыуы менән иғтибарҙы йәлеп итә: Дим, Ҡариҙел буйында Аҡһаҡ-Көләмбәт менән Ҡараҡөләмбәт тигән ике бер туған хан ҡул аҫтында йәшәгән Меңле ырыуы башҡорттарының ошо ике хандың үҙ-ара ыҙғыштары, ҡан ҡойғос һуғыштарынан яфа сигеүе, Ҡараҡөләмбәттең бер ҡатыбәрелештән һуң Кубань яҡтарына ҡасыуы кеүек ваҡиғалар һүрәтләнә. «Ҡараҡөләмбәт менән байтаҡ ҡына башҡорттар ҙа китеп барҙы», — тиелә риүәйәттә. Күсергә теләмәгән башҡорттарҙың ноғайҙар тарафынан йәберһетелеүе телгә алына.

Артабан Иван Грозныйҙың Ҡазанды алыуы, башҡорттарҙың рус дәүләте ҡарамағына ҡалыуҙы һорап, дүрт кешене вәкил итеп Мәскәүгә ебәреүҙәре һөйләнелә. — В. Филоненко. Башкиры // Вестник Оренбургского учебного округа. — Уфа, 1913, № 7—8. С. 225—226.

Рус дәүләте ҡарамағына ҡалыуҙы һорап, башҡорт халҡынан Иван Грозныйға вәкилдәр ебәрелеү тарихи дөрөҫлөккә тап килә (ҡарағыҙ: Очерки по истории Башкирской АССР. Т. 1, ч. 1. — Уфа, 1956. С. 56—66.

**233. Илсекәй ваҡиғаһы.** 1991 йылда тарихсы Әнүәр Әсфәндиәровтан Ф. А. Нәҙершина яҙып алған.

**234. Аҡай батыр.** Башҡортостандың хәҙерге Шаран р-ны Баҙғыя ауылында атаһы Ибраһимдан Йософ Гәрәй яҙып алған. — АЭМ,1974, 260—262-се б.; БХИ, РЛ, № 187; БПЛ, № 134; БНТ, ПЛ, № 235.

[1] Аҡай старшина — Аҡай Күсүмов, 1735—1740 йылдарҙағы ихтилалдың тәүге етәкселәренән береһе. 1735—1740 йылдарҙағы ихтилал батша хөкүмәтенең башҡорт ерҙәрендә ҡолғаләр төҙөү сәйәсәтенә ҡаршы йүнәлдерелгән ҙур күтәрелештәрҙән һаналып, өс этапҡа бүленә: 1 — 1735—1736 йылдар. Был осорҙа ихтилалға старшиналар Аҡай Күсүмов, Килмәк Нурушев һәм батыр Йосоп Арыҡов етәкселек итә. 1737—1739 йылдарҙы эсенә алған икенсе осорҙа ихтилалдың башында старшиналар Бипенә Трубирҙин, Юлдашмулла Һөйәрембәтов, батыр Төлкөсура Аллағолов, Мандәр Ҡарабаев һәм батыр Ҡөҫәп Солтанғоловтар тора. 1740 йыл, йәғни күтәрелештең һуңғы этабында, ихтилал менән Ҡараһаҡал етәкселек итә. (Очерки, 1. С. 173.)

[2] Иҙел буйында, тоҙло инештәр аҡҡан ерҙә — хәҙерге Ғафури районының

курорт төбәгендә булған Табын һәм Ур крепостары хаҡында һүҙ бара. (Иософ Гәрәй иҫкәрмәһе.)

[3] Тәфтиләү — Мырҙа Ҡотломөхәмәт (христиан диненә күскәс, Алексей Иванович Тевкелев) — ихтилалды баҫтырыуҙа ҙур аяуһыҙлыҡ күрһәткән кеше. Башҡорт халҡы үҙенең уға булған ҡарғыш һәм нәфрәтен «Тәфтиләү» исемле йырҙа сағылдырған (БХИ, Йырҙар. 1, 55-се б.).

[4] Аҡайҙың үлеме риүәйәттә һөйләнелгәнсә түгел, Аҡай һәм күтәрелештең башҡа етәкселәре ҡулға алынып, Санкт-Петербургка оҙатылалар.

**235. Ҡарас менән Ҡараһаҡал.** 1917 йылда хәҙерге Баймаҡ районының Бәләкәй Этҡол ауылында Хәмит ҡурайсынан М. Буранғолов яҙып алған. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 12, д. 44, л. 22—24; БХИ, РЛ, № 188; БПЛ, № 135; БНТ, ПЛ, № 236.

[1] Ҡараһаҡал — Миндеғол Юлаев, Ноғай юлының Юрматы волосы башҡорто, 1740 йылғы башҡорт ихтилалының етәксеһе. Ихтилал баҫтырылғандан һуң, Ҡаҙағстан далаларына китеп, иң элек Қазбек бай йортонда, аҙаҡ Ҡара Иртыштағы Найман батыры Ҡабанбайҙа ҡурғау таба.

[2] Кобағош сәсән — фольклор материалына ҡарағанда, алдынғы ҡарашлы сәсән (ҡарағыҙ: «Аҡмырҙа сәсән менән Ҡобағош сәсәндең әйтешкәне». — БХИ, 1954, 65—66-сы б.), Үҫәргән ырыуы башҡорто, XVI быуатта йәшәгән.

Килтерелгән риүәйәттә башҡорттарҙың Ҡараһаҡал яуында ҡатнашыу-ҡатнашмауы хаҡында бер ни ҙә әйтелмәй. Бында «ил теле» булған Ҡарас сәсән (XVI б. аҙаҡтарында — XVII б. башында йәшәгән, Тиләү ырыуы башҡорто) ауыҙынан юғары ҡатлам вәкилдәре тарафынан ойошторолған ҡан ҡойғос яуҙарға халыҡтың мөнәсәбәте образлы рәүештә әйтеп бирелгән. Риүәйәт шуның менән әһәмиәтле.

Ҡараһаҡал яуы хаҡында бер риүәйәт 1973 йылда Башҡортостандың Әбйәлил р-ны Асҡар ауылы Мөғәллим Мирхәйҙәровтан (1900 йылғы) Ғайса Хөсәйенов тарафынан яҙып алынған. Бында батша ғәскәрҙәре менән башҡорттар араһында ҡаты бәрелеш булыуы, шул бәрелештә йәш Ҡараһаҡал батырҙың да ҡатнашыуы телгә алына. Яу ҡыйратылғас, Ҡараһаҡалдың үзбәк, ҡарағалпаҡ, ҡаҙаҡ яҡтарына ҡасып китеүе һәм шул сит-ят ерҙәрҙә ун йылдан артығыраҡ йәшәүе хаҡында һөйләнелә. Уҡымышлы, Ҡөрьәнде ятҡа белгән Ҡараһаҡал «һәр ерҙә ул ерле халыҡ телендә һөйләшер булған. Шуға күрә уны бер кем дә боласы башҡорт тип уйлай алмаған, үҙ кеше тип ҡараған», — тиелә риүәйәттә. Ҡараһаҡалдың Мәккәгә барып хаж ҡылыуы, хажи булып алғас, даныкның ныҡыраҡ таралыуы, шул арҡала ҡаҙаҡтарҙың хатта уны хан итеп таныуы кеүек мәғлүмәттәр килтерелә. Ҡараһаҡал да үҙен хан һәҫеленәнмен, ти икән.

Артабан Башҡортостанда яңынан яу ҡубыуы, Ҡараһаҡалдың ҡайтып, хан булып, шул яуҙы етәкләп йөрөүе һүрәтләнә. Риүәйәт боланың баҫтырылыуы, батша ғәскәрҙәренең халыҡты аяуһыҙ ҡырыуы, бала-саға, ҡыҙ-ҡыҙҡынды мәсхәрәләүе кеүек фажиғәле ваҡиғалар менән тамамлана. — Хөсәйенов Ғ. Тарихи легендалар. Ҡулъяҙма, 11—15-се б. — Ғалимдың шәхси архивынан алынды.

**236. Ер һатыу.** 1963 йылда Баймаҡ ҡалаһында Вәситов Мәғәвиә Ғәбит улынан (1905 йылғы) Б. Шәрипов яҙып алған. — БЛ, № 30; БХИ, РЛ № 189; БПЛ, № 136; БНТ, ПЛ, № 225.

Оҡшаш йөкмәткеле риүәйәт 1973 йылда Башҡортостандың Архангельск р-ны Оҙонлар ауылы Шәрипов Сәлмән Юлмөхәмәт улынан (1912 йылғы) Б. Әхмәт-

шин тарафынан яҙып алынып, рус телендә баҫтырып сығарылған. (Материалы и исследования. С. 136.)

237. **Байымдың ер һатканы.** 1965 йылда Белорет р-ны Кәртәле ауылы Ғималиев Мостафа Тимали улынан (1891 йылғы) Л. Г. Бараг менән Г. Шәйгәрҙәнова яҙып алған. — Ск. Башк., 1969. С. 121—122; БХИ, РЛ, № 190; БНТ, ПЛ, № 227.

Белорет, Әбйәлил райондарында киң таралған риүәйәт. Уның төрлө варианттары 1965 йылда БДУ талиптары тарафынан Белорет районының Ҡоҙашман, Кәртәле, Ишле, Суран, Татлы ауылдарында яҙып алынған. Ә 1963 йылда Әбйәлил р-ны Иәнекәй ауылы Дауытов Мөхәмәҙи Дауыт улынан (1877 йылғы) В. Әхмәҙиев менән Б. Шәрипов яҙып алған варианты «Үгеҙ тиреһе тиклем ер» тигән исем аҫтында баҫылып та сыҡҡан (БЛ, № 29).

[1] Твердышев — Себер сауҙагәре И. Б. Твердышев — Белорет заводының тәүге хужаһы. XVI быуаттың 50-се йылдарында ул 300 мең дисәтинә башҡорт ерен арзан ғына хаҡҡа һатып ала: бер дисәтинә ерҙең уртаса хаҡы тиндең үндан бер өлөшө генә тура килгән.

[2] Үгеҙ тиреһендәй генә ер һатып алыу мотивы — донъя фольклорында билдәле. Был мотив грек мифологияһында Карфагенды нигеҙләүсе Дидонаның хәйләкәрлеге хаҡында сюжет менән ауаздаш. Ул шулай уҡ Азия ҡитғаһы өсөн дә ят түгел.

[3] Байым — Әбйәлил районындағы ауыл.

238. **Баярҙың ер алғаны.** 1963 йылда хәҙерге Ишембай р-ны Ғүмәр ауылы Кәримов Рамазан Зәкир улынан (1905 йылғы) Т. Килмөхәмәтов менән Т. Йосопов яҙып алған. — БЛ, № 31; БХИ, РЛ, № 191; БНТ, ПЛ, № 228.

[1] Бүжә, Иҫкесәк — хәҙерге Ишембай районына ҡараған ауылдар.

Рус баярҙарының халыҡты алдап, башҡорт ерҙәренә эйә булыуҙары хаҡында риүәйәттәр байтаҡ. Шуларҙың ҡайһы берҙәре тураһында ҡарағыҙ: БЛ, 168—169-сы б.; 1940 йылда Али Карнай тарафынан яҙып алынған «Ыҫмаҡай» ҡартты нисек алдағандар?» исемле риүәйәттең нигеҙендә лә үгеҙ тиреһе ҙурлыҡ ер мотивы ята. — Ғилми архив. Ф. 3, оп. 32, д. 17, л. 279—280.

239. **Байҙарҙың заводсыларға ер һатҡаны.** 1965 йылда Белорет р-ны Ҡоҙашман ауылы Мөхөтдинов Зәйнулла Мөхөтдин улынан (1895 йылғы) Г. Шәйгәрҙәнова менән Б. Әхмәтшин яҙып алғандар. — Ск. Башк., 1969. С. 141—142; БХИ, РЛ, № 192.

240. **Шарлы урман.** 60-сы йылдар аҙағында Өфө ҡалаһында Ҡотләхмәт Вәлиәхмәтовтан (Әлшәй р-ны Маянған ауылынан) Ф. А. Нәҙершина яҙып алған. — Шәхси архивтан.

[1] Яйыҡһыбы — Мең ҡәбиләһенең бер тармағы.

[2] Шарлы урман — Әлшәй, Бәләбәй райондарындағы урман. Шарлы — һаҙлы тигәнде аңлата.

[3] Ҡайҡымбирҙе — Шарлы урман тирәһендәге йылға.

241. **Ыспрауник.** Ғафури р-нының Яҡтыкүл ауылында йәшәгән Вәлиулла Ҡоломбәтов яҙмаларынан алынып (Ғилми архив, ф. 3, оп. 12, д. 261), «Башҡортостан» гәзитендә «Ер һатҡанда» тигән исем менән баҫылған (1991, 28 авг.). Матбуғатҡа Фәнүзә Нәҙершина әҙерләгән. Риүәйәт ошо баҫма буйынса бирелде.

242. **Үтәгән.** Ғафури р-ны Яҡтыкүл ауылында яҙып алынған. — БЛ, № 32; БХИ, РЛ, № 193; БПЛ, № 138; БНТ, ПЛ, № 340.

[1] Иҫке Ҡыйышҡы — Башҡортостандың Ҡырмыҫҡалы районындағы ауыл.

[2] Каран — Ҡырмыҫҡалы районындағы ауыл. Рәсми исеме — Яңы Ҡыйышҡы.

Ғ. Хөсәйенов был легенда хаҡында «Үгеҙ тиреһе саҡлы ер (бер легенданың тамырҙарын юллап)» тигән парса яҙып сыҡты (Ғ. Хөсәйенов. Сәйәхәт дәфтәре. — Өфө, 1976, 42—49-сы б.). Бында үгеҙ тиреһе саҡлы ер һатыу мотивына бәйле башҡорт легендалары бөтә донъя фольклорындағы шул тип легендалар менән сағыштырып ҡарала.

Үтәгән ерҙәренең һатылыуы хаҡындағы мәғлүмәт үҙенең нигеҙе менән тарихи дөрөҫлөккә тап килә. Ғ. Хөсәйеновтың үрҙә телгә алынған хеҙмәтендә, мәҫәлән, түбәндәге бөлешмәләр килтерелә (улар Н. В. Ремезовтың «Очерки из жизни дикой Башкирии» тигән китабынан алынған): «1867 йылда Куликов фамилиялы икс сауҙагәргә 8 мең дисәтинә Үтәгән ере һатыла. Дисәтинәһе 5 һум 50 тин көмөштән. 1870 йылда Алексей Сафронов тигән берәү дүртәр һумдан 300 дисәтинә ер һатып ала. 1873 йылда Волков тигән бер баяр һәм Сергеев тигән мировой посредник бары берәр һумдан ғына һәр береһе 3 мең ярымшар дисәтинә ер алалар. Үтәгән ауылынан йыл ярымдан һуң, йәғни 1875 йыл башында, Мамаев тигән сауҙагәр дисәтинәһенә 70 тин көмөштән 700 дисәтинә ер эләктерә. Ете-һигеҙ йыл эсендә генә лә юҡ хаҡҡа 15 мең дисәтинә Үтәгән ере һатыла» («Сәйәхәт дәфтәре», 44-се б.).

**243. Морҙағол.** Белорет р-ны Әзекәй ауылы Ғирфан Йомағужиндан (1890 йылғы) Н. Ҡорбанов яҙып алған. — БЛ, № 34; БХИ, РЛ, № 194; БПЛ, № 139; БНТ, ПЛ, № 230.

[1] 1968 йылда Белорет р-ны Ҡаҙыш ауылында Х. Әғзәмов яҙып алған бер вариантта ваҡиғалар Салауат яуы баҫтырылып, башҡорт ерҙәрендә карательный отрядтар йөрөгән дәүергә ҡайтып ҡала.

Унда топонимик мәғлүмәттәр ҙә килтерелә. «Шәрбоҫтан менән Гөлбоҫтан күлдән сығып, аталарының кәүҙәһен ерләгәндәр ҙә тирә-яғын таш менән бурағандар. Һуңынан был тауҙы Морҙағол тауы тип, ә ҡыҙҙар төшөп ултырған күлде Шәрбоҫтан күле тип йөрөтә башлағандар» (БЛ, 80—81-се б.).

Был вариант, бер аҙ ҡыҫҡартылып, «Морҙагол тауы» тигән исем менән рус телендә лә баҫылып сыҡҡан. Был баҫмала Морҙағол Салауат отрядында көрәшеп йөрөгән батыр итеп телгә алына. (Ск. Башк., 1969. С. 101—102.)

1970 йылда Белорет р-ны Әзекәй ауылы Х. А. Хөббөтдиновҙан (1890 йылғы) БДУ талибәһе С. Баймөхәмәтова яҙып алған вариантта иһә Морҙағолдоң Е. Пугачев казактары тарафынан атып үлтерелеүе һүрәтләнә. Геройҙың Крәҫтиәндәр һуғышында ҡатнашыуы хаҡында бер ни ҙә әйтелмәй. Морҙағол бында килгән яуҙан йәшеренеп ҡалырға теләгән Ҡаҙыш ауылының ғәҙәти бер кешеһе итеп кенә телгә алына. Л. Г. Бараг традицион сюжет йүнәлешенең үҙгәреүен бер үк осорҙоң төрлө синыф ҡатламдары араһында төрлөсә трактовкала йөрөй алыу ихтималлығы менән бәйләй. (Материалы и исследования. С. 135—137.)

**244. Тимерсе Әмин менән Брагин турә.** 1965 йылда Баймаҡ р-ны Темәс ауылы Абдулла Урмантаевтан (1927 йылғы) Р. Сәлиев яҙып алған. — Ск. Башк., 1969. С. 124—125; БХИ, РЛ, № 195.

Тарихи документтарҙан күренеүенсә, тау эштәре буйынса эҙләнеүҙәр партияһы начальнигы Брагин башҡорттар тарафынан 1755 йылдың 15 майында үлтерелә. Ваҡиғалар стихиялы ихтилалдар характерын ала, ләкин аныҡ про-

грамманың булмауы, стихиялылыҡ ыңғай һөҙөмтәләргә алып килмәй. 1755 йылдың 22 майында яу баҫтырыу маҡсаты менән ебәрелгән карателдәр отряды Бөрйән волосына килеп еткәндә, бында инде ваҡиғалар тынған була. (Очерки, I. С. 196.)

[1] Талкаҫ — Башҡортостандың Баймаҡ районындағы күл.

[2] Серекүл — шул уҡ Баймаҡ районындағы күл исеме.

1963 йылда Баймаҡ районының Әмин ауылы Исҡужин Рәхмәтулла Әхмәтйән улынан (1884 йылғы) Б. Шәрипов яҙып алған вариант был китапта бирелгән тексҡа яҡын тора. Шәрипов яҙмаһында Әмин тимерсенең Брагинды хәйлә менән отоуы хаҡындағы мотив иғтибарға лайыҡ. Әминдән нисек тә булһа ҡотолоу юлын эҙләгән Брагин тимерсегә шундай шарт ҡуя: «Һин тимергә бик оҫтарҙың. Әйҙә, иртәгә тиклем тимерҙе ҡомламай ғына йәбештерә һуҡ». Әмин ҡарт аптырап ҡала. Уйлай торғас, хәйләһен табып, ҡатынына былай ти: «Иртәгә һин тимерлеккә кил. Мин һиңә киндер таҫтамалдың осона ҡом төйнәп ебәрермен. Һин, яурыныңдан аша һалып, бер осон ыуа-ыуа тор. Кәрәк саҡта мин, таҫтамалды тартып алып, утҡа ягырмын», — ти. (БЛ, № 36).

Таҫтамал менән булған эпизод риүәйәттең Баймаҡ р-ны Иҫән ауылында Б. Әхмәтшин яҙып алған вариантында ла осрай (Ск. Башк., 1969. С. 126).

**245. Сураш.** 1966 йылда Сибай ҡалаһында Хәмитов Сәйетбөрһан Байтүрә улынан (1891 йылғы) Б. Шәрипов яҙып алған. — БЛ, № 37; БХИ, РЛ, 196; БПЛ, № 141; БНТ, ПЛ, № 237.

[1] Күп кенә риүәйәттәрҙә Брагиндың башына етеүсе булып Әмин батыр иҫәпләнә, әммә был риүәйәттәге мәғлүмәт дөрөҫләккә ныҡ тап килә: академик И. И. Лепехин үҙенең яҙмаһында Брагинды үлтергән Сураш Мәргән менән осрашыуы хаҡында яҙа (Лепехин И. И. Продолжение дневных записок путешествия..., СПб., 1802. С. 110).

[2] Троицкий — Силәбе өлкәһендәге ҡала.

[3] Кустанай — Ҡаҙағстандағы ҡала һәм өлкә исеме.

**246. Кирәй Мәргән менән Брагин.** 1962 йылда Баймаҡ р-ны Икенсе Этҡол ауылы Сафа Байымовтан (1893 йылғы) С. Ниғмәтуллин яҙып алған. — Ск. Башк., 1969, № 79; БХИ, РЛ, 199; БЛ, 169-сы б. (ҡыҫҡартылған варианты); БНТ, ПЛ, № 239.

[1] «Кирәй Мәргән» тигән исем бында әкиәт традицияһы йоғонтоһонда («Кирәй Мәргән» исемле әкиәт киң билдәле) килеп ингән булһа кәрәк. Текстың үҙендә «Кирәй» тигән һүҙ юҡ. Дөрөҫө — Сураш Мәргән булырға тейеш. Алдағы аңлатманы ҡарағыҙ.

**247. Байбул старшина менән Брагин.** 1965 йылда Баймаҡ р-ны Иҫән ауылы Йәрмөхәмәтов Зөлҡәрнәй Әнәс улынан (1918 йылғы) Б. Әхмәтшин яҙып алған. — Ск. Башк., 1969. С. 127—128; БХИ, РЛ, № 197.

Вар.: БЛ, 169-сы б.

**248. Ҡәнифә юлы.** 1965 йылда Баймаҡ р-ны Темәс ауылы Сөләймәнов Нәжметдин Абдрахман улынан Б. Әхмәтшин яҙып алған. — Ск. Башк., 1969, № 82; БХИ, РЛ, № 200.

[1] Ысынлап та, Брагин үлтерелгәндән һуң күп тә үтмәй Ырымбурҙан Силәбегә илткән Исет трактына подполковник Исаковтың каратель отряды ебәрелә. Ырымбур губернаторы И. И. Неплюев Исаковҡа ошондай бойороҡ та яҙып ебәрә: «Яуызлыҡ ҡылыусыларҙы аҡылға ултыртыу, ә ҡалған башҡа диндәгеләрҙе ҡурҡытыу өсөн ... фетнәселәрҙең төйәктәрендәге нәҫел-ырыуҙарын табып, исемдәре генә тороп ҡалһа ла, йәлләп тормай, тамырҙарын ҡоротоорға кәрәк.

Ә был бурҙар өйөрөнә ҡатнашыуҙа шикле булғандар килеп сыҡҡан хәлдә, улдарын ҡулға алып, ҡаты ҡарауыл аҫтында бығаулы килеш бында, Ырымбурға, оҙатығыҙ». Болаға ҡатнашыусыларҙың бөтә туған-тыумасаларын ҡулға алып оҙатыуҙан башҡа, Неплюев Исаковҡа уларҙың мал-мөлкәтен конфискацияларға ҡуша. Бөрйән волосының үҙәгендә, «тыныслыҡты нығытыу» өсөн, ашығыс рәүештә Яңы Йылайыр ҡәлғәһен һалдыра башлайҙар. — Чулошников А. П. Восстание 1755 года в Башкирии. М.—Л., 1940. С. 71—73; Очерки, I. С. 196.

[2] Тамъян-Ҡатай иле — хәҙерге Белорет, Учалы райондары ере.

[3] «Ҡәнифә юлы» әҫәренең Ырымбур өлкәһе Ҡыуандыҡ р-ны Әптерәш (Ялсыбай) ауылының 72 йәшлек Байшәкүров Мөхөтдин Сәйфулла улынан яҙып алынған вариантында (Күгәрсен районының «Хеҙмәткә дан» гәзите, 1967, 21 сент.) былай тиелә: ҡаҙаҡтар Бөрйән ырыуының һылыу ҡыҙы Ҡәнифәне Яйыҡ буйында йәйләүҙә ятҡан саҡта ҡулга эләктереп, үҙ далаларына алып ҡасалар. ...Йылдар уҙа. Ҡәнифә бер ҡаҙаҡ батырының бисәһе булып китә. Тик Ҡәнифә бай ҡаҙаҡ тирмәһендәге тормошто күңеленә ятҡырмай. Көн дә тыуған яҡтарына ҡайтыу тураһында уйлай.

Бер көндө ҡаҙаҡ йәйләүҙәренә башҡорт ҡарты килеп сыға. Ҡәнифә үҙенең серен был ҡартҡа асып һала, ҡыҙға ҡарт ҡайтыу юлын өйрәтә. Яҙғы ташҡын ваҡыты булыуына ҡарамаҫтан, Ҡәнифә йылҡыларының тояғын сылатмайынса үҙ ырыуына ҡайтып инә.

Ошондай уҡ йөкмәткеле риүәйәт Башҡортостандың Хәйбулла р-ны Бүребай ауылында Б. Әхмәтшин тарафынан яҙып алынган һәм рус телендә баҫылып сыҡҡан. — Материалы и исследования. С. 128.

Ә бына риүәйәттең Баймаҡ р-ны II Этҡол ауылында Шәһәрғазы Ғәбдиевтән 1971 йылда Ҡ. Аралбаев яҙып алған вариантында ҡаҙаҡ далалары менән бәйләнешле ваҡиғалар юҡ. Ул варианттың йөкмәткеһе түбәндәгесә:

Үҫәргән ырыуынан Тамъян-Түңгәүер ырыуына Ҡәнифә исемле ҡыҙҙы кейәүгә биргәндәр. Ҡыҙ ата йортон һағынһа ла, кейәүе уны ҡунаҡҡа ла алып бармаған бер йүнһеҙ егет булған. Ҡәнифәнең ҡайныһы бер мискә ҡымыҙ, бер тәкә тейәп биргән дә, эргәһенә бер йәш улын ултыртып: «Бар, килен, юл тапһаң, бара алһаң, атайыңдарға бар, ҡунаҡ булып ҡайт», — тигән.

Ҡәнифә юлһыҙ туп-тура ҡиблаға ҡарап киткән. Гел йылға баштарын тура килтереп, бер генә ҙур һыуҙы ла сыҡмай килеп (хәҙерге Әбйәлил районы Ҡырҙас ауылы яғынан килеп), Ҡуштүбә[1], Сапсал башы, Көрән айғыр башы, Һаҙ башы, Ҡарағай үҙәк башы, Әселе башынан үтеп, Аҡморон башынан, Быҙаулыҡ[2] башынан, Сәлим ауылынан, Байым ауылынан (Ырымбур өлкәһенә ҡарай) Михаиловскийҙан үтеп, Ҡыуандыҡ (Ырымбур өлкәһе) яғына алып китә. Шунан һуң һәр йылдың йәйендә Ҡәнифә аталарына ҡунаҡҡа барып ҡайта торған булған. Ошо юл иң яҡшы юлдарҙан һаналып, Ирәндек бирьяғы, Һаҡмар буйы халыҡтары йөҙәр йылдар буйына шул юлдан йөрөнөләр. Хәҙер күп ерҙәре һөрөндәләр аҫтында ҡалып юғалһа ла, урыны менән юл бар әле. Беҙгә (Этҡолға) иң яҡын ере Түбиндан[3] Иҫән ауылы тапҡырына хәтлем машина юлы менән, артабан Мәмбәт, Ишмырҙа, Яманһаҙ, Матрай, Сәлим ауылдары аша үтеп ары китә. Ул борон-борондан бик тура юл һаналған. (Ғилми архив, ф. 3, оп. 63, д. 56, л. 86—89.)

---

[1] Ҡуштүбә — тау исеме.

[2] Сапсал, Көрән айғыр, Һаҙ башы, Ҡарағай үҙәк, Әселе, Аҡморон, Быҙаулыҡ — ваҡ йылғалар исеме.

[3] Тубин — Түбә поселогы (Баймаҡ районына ҡарай).

1965 йылда Баймаҡ р-ны Сәйғәфәр утарында (Баймаҡ совхозының «Комсомол» бүлексәһенә ҡарай) Сәмелкамал Сәйғәфәрованан М. Ҡаҙбәкова яҙып алған вариантта Ҡәнифә Шәмси утарында йәшәгән Усман тигән кешенең ҡыҙы, тиелә. Риүәйәт героиняның үлеме менән тамамлана. Ҡәнифәнең үҙенән 30 йәшкә оло булған ир ҡулында рәнйетеүҙәр, кәмһетеүҙәр кисереп йәшәүе, аҙаҡ тыуған ауылына ҡасып ҡайтыуы, атаһының мәрхәмәтһеҙлеге, ҡыҙҙың Һаҡмарға төшөп һәләк булыуы көүек ваҡиғалар һүрәтләнә был әҫәрҙә. — БДУ, БӘФК, ФФ, д. 1, л. 392—398.

Риүәйәттең 1966 йылда Баймаҡ р-ны Яңы Төрөкмән ауылында Л. Г. Бараг яҙып алған (рус телендә) вариантында Ҡәнифә Уралға яу менән килгән бер сит ил ханының ҡатыны итеп телгә алына. Яуҙа хан һәләк була, ә Ҡәнифә ғәскәр менән Верхне-Уралдан Орск йүнәлешендә сигенә. Шул юлды башҡорттар «Ҡәнифә юлы» тип атағандар, тиелә риүәйәттә. (Материалы и исследования. С. 128.)

Риүәйәттең Р. Алферов яҙып алған бер үҙенсәлекле варианты Б. Әхмәтшиндың «Башҡорт таусыларының ҡайһы бер легендалары» тигән мәҡәләһендә килтерелә («Ағиҙел», 1968, № 1, 116—117-се б.). Әҫәрҙең сюжеты Уралда алтындың барлыҡҡа килеүе менән бәйле.

**249. Брагин ташы.** 1952 йылда Баймаҡ р-ны Әмин ауылы Ғәтиәт Ғалиндан (1879 йылғы) Рәми Ғарипов яҙып алған. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 12, д. 237, л. 33—35; БХИ, РЛ, № 198; БПЛ, № 142; БНТ, ПЛ, № 238.

[1] Риүәйәттең 1941 йылда Баймаҡ р-ны Муллаҡай ауылы Усман Хәкимовтан Ә. Исламголов яҙып алған вариантында Брагин Әмин тимерсенең Алмабикә исемле ҡыҙын мыҫҡылларға уйлай. (Ғилми архив, ф. 3, оп. 12, д. 247, л. 101.) Риүәйәт һәм легендаларҙа факттар бутау (бигерәк тә деталдәрҙә) йыш осрай торған күренеш.

**250. Баймаҡ яғында ауылдарҙың ике исем алғаны.** 1965 йылда Баймаҡ районы Иҫән ауылы Йәрмөхәмәтов Зөлҡәрнәй Әнәс улынан (1918 йылғы) Б. Әхмәтшин яҙып алған. — Ск. Башк., 1969. С. 129—130; БХИ, РЛ, № 201; БНТ, ПЛ, № 241.

**251. Көпәш.** 1963 йылда Башҡортостандың Ейәнсура р-ны Ибрай ауылы Баймырҙа Ҡыҙрасовтан (1888 йылғы) И. Абизов яҙып алған. — БЛ, № 38; БХИ, РЛ, № 202; БПЛ, № 148; БНТ, ПЛ, № 221; Вар.: БЛ, 170-се б.

[1] Ырымбурға ҡәлғә булараҡ 1735 йылдың авгусында нигеҙ һалына. Ҡала 1743 йылда төҙөлөп бөтә. Йәмбәк хан — бында Мең ырыуының кенәзе Янбаҡты күҙ уңында тотола булһа кәрәк. Шәжәрәләр күрһәтеүенсә, Янбаҡты Иван IV заманында йәшәгән. Уның олатаһы Ҡәнзәфәр бей XVI быуаттың уртаһында Мең башҡорттарының ноғайҙарға ҡаршы көрәше менән етәкселек иткән Янбаҡты кенәз Мең башҡорттарының вәкилдәре менән бергә 1671 йылда Мәскәүгә Иван VI бара. (БШ, 18-се б.); БЛ, 170-се б.

[2] Ҡаруанһарайҙың рәсми рәүештә асылыу көнө — 1846 йылдың 30 авгусы.

**252. Суҡындырыу.** 1988 йылда Мишкә р-ның Оло Шаҙы ауылында уҡытыусы Фәтих Ситдиҡовтан Ф. А. Нәҙершина яҙып алған. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 92, д. 7, л. 51.

**253. Башҡорттарҙың суҡыныуҙан баш тартҡаны.** 1972 йылда Ауырғазы р-ның Мораҙым ауылында Ҡудашев Хөббөтдин (1917 йылғы) менән Мәүлетбикә Хөсәйен ҡыҙы Мырҙабаеванан (1915 йылғы) Әнүр Вахитов яҙып алған. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 65, д. 9, л. 90.

**254. Батырша менән Яныш.** 1973 йылда Балтас р-ны Юғары Ҡарыш ауылы Лотфрахман Мәүлетовтан (1891 йылғы) Ғ. Б. Хөсәйенов яҙып алған. — АЭМ, 1973. 543—545-се б.

[1] Батырша — тарихи шәхес. Уның ысын исеме — Абдулла Ғәли улы Алиев.

XVIII быуаттың уртаһында батша хөкүмәте башҡорт ерҙәрен талау сәйәсәтен көсәйтеү менән бер рәттән рус булмаған халыҡтарҙы көсләп христиан диненә күсереү буйынса ла ҙур әүҙемлек күрһәтә. 1755 йылда Батырша мулланың халыҡтарға өндәмә менән мөрәжәғәт итеүе нәҡ ана шул ваҡиғалар дәүеренә ҡайтып ҡала (Очерки, I. С. 191—192).

[2] Батыршаның заманында уҡымышлылығы менән дан алған мөҙәрис булыуын риүәйәт дөрөҫ тасуирлай. Билдәле булыуынса, Батыршаның төрмәнән аҡ батшаға яҙған биш-алты табаҡ күләмендәге (ҡулъяҙма 150—160 биттәр самаһында) ғәйәт ҙур хаты дәүләт архивтарында һаҡланған. Ғ. Хөсәйенов был хатты XVII быуат уртаһының ҡиммәтле бер ҡомартҡыһы, үткән замандың тарихын, халыҡтың көнкүрешен, уйҙарын һәм теләктәрен йәнле итеп хикәйәләгән ҙур әҙәби-тарихи әҫәр, социаль-философик трактат тип атай (ҡарағыҙ: «Ағиҙел», 1970, 10-сы һан, 95—104-се б.; Письмо Батырши императрице Елизавете Петровне. — Уфа, 1993. С. 6).

[3] Яныш — шулай уҡ тарихи шәхес. Был исем Батыршаның батшаға яҙған хатында ла осрай: «...Йыл ярым миҡдары Гәйнә иләндә Илеш мулла ауылында торҙом. Ғилемлектә лә дәхи... Исет провинцияһында Мөслим старшина ауылында тордом, дүрт йыл миҡдары. Андин соң үз еремә ҡайтып, Яныш командасында Ҡарыш ауылында тордом, алты йыл миҡдары» («Ағиҙел», 1970, № 10, 96-сы б.).

[4] Батырша 1762 йылдың 24 июлендә Шлиссельбург төрмәһендә бер үҙе баш күтәреп, тиңһеҙ алышта һәләк булған.

Рәсәй Фәндәр Академияһы Өфө ғилми үҙәгенең архивында Балтас районының Үрге Ҡарыш ауылында 88 йәшлек Хәсән Мәүлиевтан 1950 йылдарҙа Ғ. Үмеркәев тарафынан яҙып алынған «Батырша батыр яуы» исемле тағы бер риүәйәт һаҡлана (ф. 3, оп. 12, д. 271, л. 40—41). Риүәйәт ҡыҫҡа, схематик характерҙа. Төп мотив булып Батыршаның азатлыҡ көрәше тора. Яуга ҡушылыусы башҡорттарҙы йыртҡыстарса язалауҙар, башҡорт ауылдарын яндырыу хаҡында һөйләнелә. Текстағы Батыршаны аҫып үлтереү тураһындағы мәғлүмәт ысынбарлыҡҡа тура килмәй.

255. **Бүгәс яуы.** 1960 йылда Бөрйән р-ны Ҡотан ауылы Ғәли Ғәҙелшиндан (1900 йылғы) Н. Шонҡаров яҙып алған. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 23, д. 7, л. 70—71; БХИ, РЛ, № 204; БПЛ, № 145.

[1] Вознесенск баҡыр иретеү заводы 1755 йылда эшләй башлай. Е. Пугачев был заводҡа 1774 йылдың апрель уртаһында килә.

[2] Дубинск (Тубинск) — Баймаҡ районындағы Түбә приискыһы.

[3] Кананикольск баҡыр иретеү заводы — 1751 йылда Тула сауҙагәре И. П. Мосалов тарафынан һалдырыла.

[4] Бүгәстең «Өфө яғына юл тотоуы» тарихи дөрөҫлөккә тура килмәй. Е. Пугачев ғәскәрҙәренең был заводҡа тәүге һөжүме 1774 йылдың март башында булған. Тарихтан билдәле булыуынса, Өфөнө алыу Пугачевтың иң яҡын ярҙамсыларынан береһе Зарубин-Чикаға йөкмәтелгән була. Бында Бүгәс яуында ҡатнашыусы ғәскәрҙәр тураһында һүҙ барыуы ихтимал.

**256. Ҡыҙҡалатау.** 1940 йылда Башҡортостандың Краснокама р-ны Иҫке

Мышты ауылында Йомағужа р-ны хеҙмәткәре Ә. Исламғолов яҙып алған. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 12, д. 247, л. 131—138. Томға ошо архив тексы алынды. Риүәйәт бер аҙ ҡыҫҡартылып баҫылған: Усманов, 1945, 23—24-се б.; БХИ, РЛ, № 205; БПЛ, № 146.

[1] Петр батша — Е. И. Пугачев (1742—1775). Билдәле булыуынса, Пугачев үҙен үлемдән ҡотолоп ҡалған батша — Петр III тип иғлан итә.

[2] Әбей батша — императрица Екатерина II (1729—1796).

[3] Ҡыҙҡалатау — бында боронғо атамаthe килеп сығышын һуңғы дәүерҙәр ваҡиғаларына бәйләп аңлатыу күренеше күҙәтелә булһа кәрәк.

Ғилми әҙәбиәттән күренеүенсә, «Ҡыҙҙар тауҙары», «Ҡыҙҡалатау»ҙар ер йөҙөндә байтаҡ. Славян донъяһында ла киң билдәле булған бындай тауҙарҙың, ҡаласыҡтарҙың тарихын өйрәнгән академик Б. А. Рыбаков, мәҫәлән, археологик ҡаҙылмаларға таянып, уларҙың борон ҡатын-ҡыҙ раббыһына табыныу урыны булғанлыҡтары тураһында яҙа. Аҙағыраҡ, боронғо ҡараштар һәм уларға бәйле ритуалдар онотолғас, «Ҡыҙҙар тауҙары»нда һәр төрлө уйындар, байрамдар үткәрелер булған, тигән фекер әйтә. (Рыбаков Б. А. Язычество древних славян. — М.: Наука, 1981. С. 285—286.)

Башҡортостан ерендәге «Ҡыҙҡалатау»ҙар археологтар тарафынан әле яҡшылап өйрәнелмәгән. Әммә «Ҡыҙҙар тауы» тигән урындарҙың күплеге һәм ул тауҙарҙа элек-электән уйындар, байрамдар үткәрелеүен иҫкә алһаҡ, беҙҙәге атамаларҙың да, башҡа халыҡтарҙағы һымаҡ, борондан килеүе хаҡында фекер йөрөтөү мөмкинселеге тыуа.

**257. Петр батша менән Әбей батша һуғышҡаны.** 1940 йылда Краснокама р-ны Яңғыҙ Нарат ауылы Яҡуп бабайҙан (фамилияһы күрһәтелмәгән) Ә. Исламғолов яҙып алған. — Усманов, 1945, 23—64-се б. Ҡулъяҙмаһы: Ғилми архив, ф. 3, оп. 12, д. 247; БХИ, РЛ, № 206; БПЛ, № 147; БНТ, ПЛ, № 248.

**258. Петр батша тауы.** 1940 йылда Краснокама р-нында Ә. Исламғолов яҙып алған. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 12, д. 247, л. 135—136. Бер аҙ ҡыҫҡартылып баҫылған: Усманов, 1945, 64—65-се б. Был китапҡа архив тексы бирелде. — БХИ, РЛ, № 207; БНТ, ПЛ, № 249.

[1] Миңлебай тауы — Краснокама р-нының Иҫке Ҡабан, Таҡта аласыҡ ауылдары ултырған тау.

[2] Бурһыҡ ауылы — Башҡортостандың Илеш р-нына ҡарай.

[3] Сулман (йәки Сулманиҙел) — Ҡама йылғаһы.

**259. Бүгәсәү юлы.** Баҡалы р-ны Баҡалы ауылы Ф. Г. Демаковтан (1906 йылғы) С. Шәрипов яҙып алған. — Ск. Башк., 1969, л. 103; БХИ, РЛ, № 208.

[1] Нуғайбәк — Баҡалы районындағы ауыл.

[2] Бүрек менән ер ташыу — донъя халыҡтарының ижадында таралған традицион мотив.

**260. Бүгәс түбәсәйе.** 1968 йылда Белорет р-ны Тирлән ауылында Л. Г. Бараг яҙып алған. — Ск. Башк., 1969, № 103. «Бүгәсәү юлы», «Бүгәс түбәсәйе» исемле риүәйәттәр хаҡында ҡарағыҙ: // В кн.: «Участие народов в Крестьянской войне 1773—1775 гг.» — Уфа, 1974, с. 72—74.

**261. Бүгәс тауы.** 1963 йылда Учалы р-ны Миндәк ауылы Хажин Мөхәммәт Хажиәхмәт улынан (1893 йылғы) яҙып алынған. — Ск. Башк., 1969, № 35; БХИ, РЛ, № 210; БНТ, ПЛ, № 313.

[1] Науруз — Учалы районындағы ауыл исеме.

**262. Яу күргән мәсет.** 1964 йылда Бөрйән р-ны Ҡотан ауылы Алтынсурина

Яҡшыбикә Булат ҡыҙынан (1905 йылғы) Л. Г. Бараг һәм БДУ талибәһе С. Рәхимова яҙып алған. «Деревня Кутаново во время Пугачевского восстания» тигән исем менән баҫылған. — Ск. Башк., 1969, № 97; БХИ, РЛ, № 211; БНТ, ПЛ, № 246.

**263. Пугачев хазиналары.** 1961 йылда Йылайыр р-ны Березовка ауылында Сафин Әхмәт Хөсәйен улынан яҙып алынған. «Как кулак Гусев клад Пугачева возле устья речки Ямашлы откопал» тигән исем менән баҫылған. — Ск. Башк., 1969. С. 17; БХИ, РЛ, № 212.

[1] Мосалдар — Ҡананикольск заводының хужаһы И. П. Мосалов исеменә бәйле атама. Мосалов заводында эшләүсе крепостнойҙарҙы һәм уларҙың нәҫелдәрен мосалдар тип йөрөтәләр.

[2], [3] Шығрыҙ, Кузьминовка — Күгәрсен районындағы ауыл исемдәре.

**264. Салауат.** 1928 йылда элекке Бөрө өйәҙе Елдәк ауылы Филипп исемле балыҡсынан (1858 йылғы) Ғ. Вилданов яҙып алған. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 12, д. 234, л. 87—92; БХИ, РЛ, № 213; БПЛ, № 148; БНТ, ПЛ, № 253.

[1] Крәҫтиәндәр һуғышы баҫтырылғас, яу башлыҡтары, батырҙар хаҡында һөйләү, йырлау батша хөкүмәте тарафынан бик оҙаҡ ваҡыттар буйына тыйылған булған. Информатор был осраҡта шул иҫке ғәҙәт, иҫке традиция буйынса һаҡлыҡ күрһәтә.

[2] Арҙа халҡы — һөйләүсе башҡорттарҙы шулай тип атай. — Яҙып алыусы иҫкәрмәһе.

[3] Был осраҡта «ҡаҙаҡтар» тип аңларға кәрәк.

[4] Эҫемдән — Эҫем (Сим) йылғаһы буйынан.

[5] Хан — бында башлыҡ мәғәнәһендә. Үҫмерҙәрҙең хан һайлау уйынына бәйле эпизод. «Тамерлан» исемендәге ҡаҙаҡ риүәйәтенә оҡшаш. — ЕН, № 37. Был инде төрки халыҡтарында билдәле булған боронғораҡ мотивтың яңы дәүерҙә яңы шәхескә ҡушылыуы хаҡында һөйләй.

Салауаттың бала саҡтағы батырлыҡтары, физик көсө хаҡында риүәйәттәрҙе ҡарағыҙ: Материалы и исследования. С. 151—154.

[6] Е. И. Пугачев 1776 йылдың 10 ғинуарында язалана.

**265. Салауаттың бала сағы.** 1910—1920 йылдар араһында Ырымбур губернаһы Эҫкол волосы (Башҡортостандың хәҙерге Баймаҡ р-ны). Иҙрис ауылы Ғәбит сәсән Арғынбаевтан М. Буранғолов (1888—1966) яҙып алған. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 12, д. 445, л. 56—57; БХИ, РЛ, № 214; БПЛ, № 149; БНТ, ПЛ, № 258.

**266. Салауат батыр.** 1952 йылда Баймаҡ р-ны Әмин ауылы Галин Ғәтиәт Мәкәй улынан (1879 йылғы) Р. Ғарипов яҙып алған. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 12, д. 237, л. 28—31; БХИ, РЛ, № 215; БПЛ, № 151; БНТ, ПЛ, № 301.

[1] Ҡырмаһаҡал батша — рус түрәһенең дөйөмләштерелгән образы.

**267. Салауаттың ситтә йөрөп ҡайтыуы.** Салауат р-ны Ҡыҙырбаш ауылы Ғарифъян Солтановтан 1940 йылда Х. Хамматов яҙып алған. — Усманов, 42—43-сө б. Риүәйәт «Коммуна» гәзитендә лә баҫылып сыҡҡан. (1940, 25 сентябрь). — БХИ, РЛ, № 216; БПЛ, № 152; БНТ, ПЛ, № 261.

Тарихи документтар буйынса, Бүгәс яуы алдынан Салауаттың ситтә йөрөп ҡайтыуы билдәле түгел. Быны халыҡ аңында тыуған поэтик уйҙырма тип кенә ҡарарға кәрәк. Салауаттың ситтә йөрөгәндә Е. Пугачев менән осрашыу эпизоды Степан Злобиндың «Салауат Юлаев» романында ла урын алған, фольклорға был мотив, бәлки, роман аша ингәндер.

[1] Эҫем (Сим) заводы — 1760 йылда төҙөлгән.

[2] Батша ғәскәре — бында Е. Пугачев ғәскәре.

**268. Салауат телмәре.** Риүәйәттең кемдән, ҡасан яҙып алынғанлығы билдәле түгел. Бер нисә мәртәбә матбуғатта баҫылған. Тәү башлап «Башҡорттар араһында ҡолаҡтан ҡолаҡҡа ҡала килгән Салауаттың нотоғо» тигән исем менән 1922 йылда Стәрлетамаҡта «Башҡортостан шуралар йөмһүриәте мәғариф комиссарнаты янындағы ғилми-фәнни вә тарихи ойошманың хеҙмәте» тигән йыйынтыҡтың I киҫәгендә баҫылып сыҡҡан. Баҫырға Сәғит Мирасов әҙерләгән. Риүәйәттең руссаға тәржемәһе «Речь Салавата к башкирскому войску» тигән баш аҫтында А. Н. Лозанованың «Песни и сказания о Разине и Пугачеве» (М., 1935), «Пугачев в Среднем Поволжье и Заволжье» (Куйбышев, 1947) исемле йыйынтыҡтарында баҫылған. Артабан ошо уҡ тәржемә Ә. И. Харисовтың «Литературное наследие башкирского народа» китабында ла (Өфө, 1973) урын ала.

Был йыйынтыҡҡа Ә. Н. Усманов китабындағы («Салауат батыр», Өфө, 1945) текст алынды. — БХИ, РЛ, № 217.

[1] Бөрйән, Тамъян, Түңгәүер, Үҫәргән, Табын, Ҡатай, Юрматы, Ҡыпсаҡ илдәре — бында ырыуҙары мәғәнәһендә.

[2] Утыҙ һигеҙ йыл буйына тыныс тороу тиеүҙә был телмәрҙе һөйләп бирғүсе йәки яҙып алыусы хаталанған булырға тейеш. Батырша болаһынан Салауатҡа тиклем 38 йыл түгел, 15—16 йыл ғына үткән булған.

[3] Ур (Орь) — Ырымбур, Ҡаҙағстан территорияһындағы йылға.

[4] Салауаттың күмер киҫәген тотоп, ат менгән ирҙәргә мөрәжәғәте — яҙма әҙәбиәттә киң таралған поэтик деталь.

Риүәйәттең ҡобайыр формаһында яҙып алынған варианттары ла бар (Ғилми архив. Ф. 3, оп. 12, д. 445, л. 204—205).

**269. Салауат менән Пугачевтың дуҫлашҡаны.** 1961 йылда Йылайыр р-ны Березовка ауылында Күгәрсен р-ны Бикбулат ауылы колхозсыһы Сафин Әхмәт Хөсәйен улынан (1916 йылғы) яҙып алынған. — Ск. Башк., 1969, № 84; БХИ, РЛ, № 218; БПЛ, № 153; БНТ, ПЛ, № 264.

[1] Тарихи әҙәбиәттән билдәле булыуынса, һикһән һыбайлынан торған башҡорт отрядын Юлай Аҙналин улы Салауат етәкселегендә Стәрлетамаҡ пристаненә 1773 йылдың ноябрь айында ебәрә. Стәрлетамаҡта башҡорт һәм мишәрҙәрҙән 1270 кешеле отряд төҙөлөп, Салауат етәкселегендә батша генералы Карҙың ғәскәрен тулыландырыу маҡсатында Ырымбурға табан ебәрелә. Ләкин Салауат бойороҡто үтәмәй. Ырымбурға ергә 70 саҡрым ер ҡалғас, ул үҙенә тапшырылған ғәскәре менән Е. Пугачевҡа барып ҡушыла.

[2] Шайтан-Көҙәй волосы старшинаһы Юлай Аҙналиндың Е. Пугачевҡа ярҙамға ғәскәр ебәреүе хаҡында 1971 йылда Салауат районының Ҡалмаҡлар ауылы Сәләхетдин Ғирфановтан (1890 йылғы) Б. Әхмәтшин яҙып алған бер риүәйәттә лә телгә алына. — Материалы и исследования. С. 150.

**270. Салауат менән Ҡараһаҡал.** 1966 йылда Ейәнсура р-ны Ҡыҙыл Яр ауылы Үтәгәнов Ҡорбанғәле Сағындыҡ улынан (милләте — ҡаҙаҡ, 1891 йылғы) Әхмәт Сөләймәнов яҙып алған. — БЛ, № 39; БХИ, РЛ, № 219; БНТ, ПЛ, № 280.

[1] Ҡараһаҡал хаҡында 235-се риүәйәтте һәм уның аңлатмаһын ҡарағыҙ.

**271. Салауат менән Балтас.** 1973 йылда Балтас р-ны Иҫке Балтас ауылы Сәлимйән Әхтәриевтән (1898 йылғы) Ғ. Б. Хөсәйенов яҙып алған. — АЭМ, 1973, 546—551-се б.; БХИ, РЛ, № 220; БПЛ, № 155; БНТ, ПЛ, № 299.

[1] Архив материалдарына ҡарағанда, Башҡортостандың Балтас р-нында

Балтас һәм Салауат хаҡында риүәйәттәр шаҡтай киң таралған. Был йәһәттән элекке журналист Ғ. Үмеркәев материалдары иғтибарға лайыҡ. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, риүәйәттәр фрагментар характерҙа, уларҙың яҙылыу сифаты ла хәҙерге талаптарға яуап биреп бөтмәй. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, Үмеркәев яҙмалары Ғайса Хөсәйенов яҙып алған вариантҡа ҡайһы бер деталдәр өҫтәүе, асыҡлыҡтар индереүҙәре менән әһәмиәтле.

Мәҫәлән, Балтас р-ны Илекәй ауылы Фәйзрахман Вәлиәхмәтовтан Ғ. Үмеркәев яҙып алған бер вариантта Балтасовтарҙың социаль хәле, байлығы, ер сиктәре хаҡында мәғлүмәттәр бар. «...Уларҙың (Балтасовтарҙың) ерҙәренең бер сиге Мишкә районындағы Рәфәнде ауылынан, икенсе сиге Асҡын районының Ҡаҙансы ауылынан,ә өсөнсө сиге Тәтешле районындағы Шәрип ауылынан торған... Барлыҡ ауылдарҙың халыҡтары Ҡолой Балтасовтарға ҡол сифатында хеҙмәт иткәндәр». — Ғилми архив. ф. 3, оп. 12, д. 271, л. 12—23.

Балтас р-ны Имән ауылы Ғата Саҙрисламовтан (55 йәшлек, мәктәп директоры) яҙып алынған вариантта Ҡолой Балтасовтың үҙ ерҙәрен киңәйтеү юлында төрлө саралар ҡылыуы, хатта алдау-хәйләнән дә тартынмауы сағылдырыла:

«Ҡомһоҙ Ҡолой ерҙе бер төрлө лә итеп ала алмағас, хәйләгә керешкән. Һаҡлыҡ менән бик йәшертен рәүештә Уннартүбә ерҙәренең бер урынына соҡор ҡаҙытҡан. Шуның эсенә үҙенең яҡын ҡорҙаштарынан береһен алып төшөргән. Соҡорҙоң бер урынына бәләкәй генә тишек ҡуйып, өҫтөн сирәм менән ҡаплатып ҡуйған. Быны бер кем дә белмәгән.

Ҡолой шунан һуң, Уннартүбә, Борай, Маныш ҡарттарҙы саҡыртып алған да: «Уннартүбә биләгән ер минеке, — тигән, ышанмаһағыҙ ер өҫтөнә барып ҡарағыҙ. Ергә ятып «был ер кемдеке?» тип һорарһығыҙ. Ер үҙе әйтер», — тип ышандырған. Был «мөғжизә»гә бары ла күнгәндәр. Ҡолаҡтарын ергә ҡуйып, «Ер кемдеке?» — тип һораған кешеләргә Ҡолой өйрәтеп ҡуйған ер аҫтындағы кеше: «Ар йылғаһының һул яғы, Ҡарыш йылғаһының буйҙары, Яҡшый ауылы тарлауы тауҙарынан Танып йылғаһына ҡәҙәре Ҡолой ере!» — тип ҡысҡырған.

Был ғәжәп тауышты айырыуса Маныш алпауыты яҡлаған. Ни өсөн тиһәң, был алпауыттың ерҙәре Ҡолойҙоҡо менән ыҙандаш булған, Ҡолой уға бынын өсөн үҙенең биләмәһенән бүлеп ер биргән.

Шулай итеп, Уннартүбә биләп килгән бай урман, ер-һыуҙар Ҡолой Балтасовтыҡы булып ҡалған. Шуның һуңында Ҡолой ергә хужа булып, Ар һыуының һул яғына сығып ултыра. Иҫке ауыл (хәҙер Илекәй ауылы) һәм Ҡолой (хәҙерге Балтас) ауылдары барлыҡҡа килә. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 12, д. 271, л. 33—39.

[2] Прусактар менән һуғыш — бында Пруссия менән ете йыллыҡ һуғыш (1756—1763) күҙ уңында тотола.

[3] Балтас ауылы Йыһангиров Гатуфтан Ғ. Үмеркәев яҙып алған вариантта Илекәй ҡарт үҙенең васыятын түбәндәге мотив менән дәлилләй: Ҡолой мине ғүмерем ахырына иҫәфа килтертте, ҡәберемдә лә тыныслыҡ бирмәҫ, мин үлгәс, Ар йылғаһы аръяғына сығарып күмерһегеҙ». — Ғилми архив. Ф. 3, оп. 12, д. 271, л. 16—17.

[4] Ҡарыш — Балтас р-нындағы йылға.

[5] Балтас р-ны Нөркә ауылында йәшәүсе 58 йәшлек Харис Латиповтан Ғ. Үмеркәев яҙып алған бер вариантта Мусаның фамилияһы ла аталған: «Ҡәҙермәтов». (Ғилми архив. Ф. 3, оп. 12, д. 271.)

[6] Салауат Сим заводын 1774 йылдың 23 майында ала.

[7] Е. Пугачев Ҡазанға 1774 йылдың июнь аҙағында юл тота.

**272. Салауаттың Әй буйында булғаны.** 1981 йылда Мәсетле р-ны Йонос ауылы Ҡазеева Йәүһәрә Самбаш ҡыҙынан (1930 йылғы) Бәрйән Байымов яҙып алған. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 73, д. 69.

**273. Салауат һәм урманда йәшәгән ҡарт.** 1940 йылда Салауат р-ны Әлкә ауылы Хәлил Ғәлимуллиндан (53 йәшлек) Х. Хамматов яҙып алған. — Усманов, 1945, 48-се б.; БХИ, РЛ, № 221; БПЛ, № 156; БНТ, ПЛ, № 279.

[1] Ун икеләп бүре үлтереү мотивы 1971 йылда Ҡыйғы р-ны Үрге Ҡыйғы ауылы Фәйрушина Менәүәрә Мөсәлим ҡыҙынан (1904 йылғы) БДУ талибәһе яҙып алған «Салауат тураһында» тигән бер риүәйәттә лә телгә алына (Материалы и исследования. С. 154).

**274. Салауат Яланғас тауында.** Балтас р-ны «Ленин бүләге» исемендәге колхоз ағзаһы Шәрип Бикҡужиндан (75 йәшлек) Ғ. Үмеркәев яҙып алған. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 12, д. 271, л. 56—58; БХИ, РЛ, № 222.

[1] Яңы Тәпәреш — Балтас районындағы ауыл.

**275. Салауат батыр штабы.** 1940 йылда Мәсетле р-ны Оло Аҡа ауылы Ҡаһарман Хәсәновтан Сәләх Ҡулибай яҙып алған. — Усманов, 1945, 45-се б. — БХИ, РЛ, № 223; БПЛ, № 157; БНТ, ПЛ, № 267.

[1] Красноуфимск ҡалаһына Салауат ике меңлек ғәскәр менән 1774 йылдың мартында килеп инә. — Очерки, I. С. 238.

[2] Пугасин — Е. Пугачев.

**276. Салауат батырҙың дары склады.** Паспортын алдағы аңлатманан ҡарағыҙ; БХИ, РЛ, № 224; БПЛ, № 158; БНТ, ПЛ, № 268.

**277. Салауат бик ҡеүәтле булған.** 1940 йылда Салауат р-ны Әлкә ауылы Хәлил Ғәлимуллиндан (53 йәшлек) Х. Хамматов яҙып алған. — Усманов, 1945, 46-сы б.; БХИ, РЛ, № 225; БПЛ, № 159; БНТ, ПЛ, № 273.

**278. Салауат батыр мәргән булған.** 1938 йылда Салауат р-ны Ҡыҙырбаш ауылы Ғарифйән Солтановтан Баязит Бикбай яҙып алған. — Усманов, 1945, 46—47-се б.; БХИ, РЛ, № 226; БПЛ, № 160; БНТ, ПЛ, № 272.

**279. Салауаттың байҙарға уҫал булғаны.** 1941 йылда Ҡыйғы р-ны Ҡыйғы ауылы 70 йәшлек Мәғәфүр Баһауетдин улынан (фамилияһы күрһәтелмәгән) Ә. Усманов яҙып алған. — Усманов, 1945, 47-се б.; БХИ, РЛ № 227; БПЛ, № 161; БНТ, ПЛ, № 270.

Салауаттың байҙарға, заводчиктарға мөнәсәбәте хаҡында тағы ҡарағыҙ. Материалы и исследования. 152, 155-се б.

**280. Салауат приказы.** 1938 йылда Салауат р-ны Ахун ауылы Мөхәррәм Лоҡмановтан Баязит Бикбай яҙып алған. — Усманов, 1945, 48-се б.; БХИ, РЛ, № 228; БПЛ, № 162; БНТ, ПЛ, № 271.

**281. Салауаттың рус ҡыҙын алғаны.** 1940 йылда Мәсетле р-ны Оло Аҡа ауылы Ҡаһарман Хәсәновтан С. Ҡулибай яҙып алған. — Усманов, 1945, 50—51-се б.: БХИ, РЛ, № 229; БПЛ, № 163; БНТ, ПЛ, № 294. Вар.: БНТ, ПЛ, № 283.

[1] «Салауат рус ҡыҙын алған» мотивы Степан Злобиндың «Салауат Юлаев» романы һәм шул уҡ исемдәге кинофильм йоғонтоһонда таралған булырға тейеш. Тарихи документтарҙан күренеүенсә, Салауаттың өс ҡатыны булған. Улар балалары менән бергә батыр ҡулға алынғанға тиклем үк аманат (заложник) сифатында Өфөгә килтерелгәндәр. Бер ҡатыны улы менән ҡала коменданты С. С. Мясоедов ҡарамағында булған, икенсе ҡатынын генерал Ф. Ю. Фрейман, өсөнсөһөн урындағы түрә, офицерҙар алған. — Гвоздикова. С. 189. Салауат ғаиләһенең артабанғы яҙмышы хаҡында билдәле түгел. Фольклор матери-

алдарына карағанда, батырҙың катындарының исеме: Әминә, Зөләйха, Гөлбәзир (Гөлнәзирә). Салауаттың өс катыны булыуы тураһында йырҙа ла әйтелә:

Салауаттың кейгәне —
Кыҙыл да түгел, һары буҙ.
Салауаттың һөйгәне —
Икәүһе еңгә, береһе кыҙ.

(Ғилми архив. Ф. 3, оп. 12, д. 275, л. 12.)

Салауаттың рус кыҙын алыуы тураһында тарихи документтар билдәле түгел.

282. **Салауат улы.** 1940 йылда Салауат р-ны Кыҙырбаш ауылы Ғарифйән Солтановтан Х. Хамматов яҙып алған. — Усманов, 1945, 51—52-се б.; БХИ, РЛ, № 230.

283. **Салауат улы Хәсән.** Салауат р-ны Кыҙырбаш ауылы карттарынан Баязит Бикбай яҙып алған. — Усманов, 1945, 52-се б.; **БХИ, РЛ, № 231.**

[1] Колбак — Кыйғы районындағы ауыл. Салауаттың рус кыҙына өйләнеүе һәм унан тыуған ир бала хакындағы риүәйәттәрҙең башка варианттарын карағыҙ: Материалы и исследования. С. 163; Ск. Башк., 1975. С. 138—139; БПЛ, № 165; БНТ, ПЛ, № 295.

284. **Салауат катыны.** 1949 йылда Кыйғы р-ны Аҫылғужа ауылы Иддисамов Вәли Иддисам улынан (1894 йылғы) Ғ. Ғәлиев менән Х. Сафин яҙып алғандар. — Ғилми архив. Ф. 3, оп. 12, д. 236, л. 56; **БХИ, РЛ, № 232; БПЛ, № 166;** БНТ, ПЛ, № 284.

[1] Халык — бында ырыу, нәҫел мәғәнәһендә.

285. **Салауаттың тотолғаны.** 1940 йылда Салауат р-ны Әлкә ауылы Хәлил Ғәлимуллиндан Х. Хамматов яҙып алған. — Усманов, 1945, 52—53-сө б.; БХИ, РЛ, № 233; БПЛ, № 168; БНТ, ПЛ, № 298.

[1] Шағанай — Салауат районындағы ауыл.

[2] Салауаттың яуҙашы Пугай улы старшинаһы Кинйә Арыҫлановтың кулға алыныуы тарихи документтар менән раҫланмай. «Кинйә хәйлә менән Салауатты коткарырға тырыша» мотивы Степан Злобиндың «Салауат Юлаев» романы йогонтоһонда барлыкка килгән булырға тейеш.

286. **Салауаттың котолғаны** (вариант). Салауат р-ны Әлкә ауылы Ғәрифйән Вилдановтан Баязит Бикбай яҙып алған. — Усманов, 1945, 53—54-се б.; БХИ, РЛ, № 234; Вар.: Материалы и исследования. С. 163—166.

[1] Малаяҙ — хәҙерге Салауат районының үҙәге.

[2] Тарихи документтарҙан билдәле булыуынса, Салауат Юлаев 1774 йылдың 25 ноябрендә хәҙерге Салауат р-нының Каратау урманында подполковник Аршеневский ебәргән поручик Лесковский отряды тарафынан тотолоп, башта Аршеневскийға, аҙак Казанға, йәшерен комиссия карамағына ебәрелә (Очерки, I. С. 251).

287. **Салауат ғаиләһенең һәләкәте.** 1938 йылда Салауат р-ны Ахун ауылы Мөхәррәм Локмановтан Баязит Бикбай яҙып алған. — Усманов, 1945, 54-се б.; БХИ, РЛ, № 235; Вар.: Материалы и исследования. С. 160—163.

[1] 281-се һанлы риүәйәттең аңлатмаһын карағыҙ.

288. **Иилектән тауҙарҙа гәлсәр күп?** **Кругляшова, 119-сы б. 1953 йылда** Белорет калаһында В. Каракoвский тарафынан яҙып алынған. Төп нөсхәһе Си-

ләбе крайҙы өйрәнеү музейында һаҡлана, тиелгән. — БХИ, РЛ, № 236; БПЛ, № 169; БНТ, ПЛ, № 300.

**289. Элек Салауат тураһында йырлатмайҙар ине.** Хәтирә 1940 йылда Салауат р-ны Ҡыҙырбаш ауылы Ғәрифйән Солтановтан Х. Хамматов яҙып алған. — Усманов, 1945, 41—42-се б.; БХИ, РЛ, № 237: БПЛ, № 170; БНТ, ПЛ, № 324.

**290. Салауаттың ҡылысы менән суҡмары.** Балтас р-ны милиция бүлеге хеҙмәткәре Нурисламовтан Ғ. Үмеркәев яҙып алған. — Ғилми архив. Ф. 3, оп. 12, д. 271, л. 9; БХИ, РЛ, № 238; БПЛ, № 173; БНТ, ПЛ, № 306.

**291. Салауат ҡамсыһы.** Балтас р-ны Балтас ауылы Харис Мифтәховтан Ғ. Үмеркәев яҙып алған. — Ғилми архив. Ф. 3, оп. 12, д. 271, л. 10; БХИ, РЛ, № 239; БПЛ, № 174; БНТ, ПЛ, № 308.

**292. Салауат эйәре.** Балтас р-ны Нөркә ауылы Хөсәйен Суфияновтан Ғ. Үмеркәев яҙып алған. — Ғилми архив. Ф. 3, оп. 12, д. 271, л. 11—12; БХИ, РЛ, № 240; БПЛ, № 175; БНТ, ПЛ, № 307.

**293. Пугач менән Салауат юлы.** Саҡмағош р-ны 1-се урта мәктәбендә ил өйрәнеү музейын ойоштороған уҡытыусы Г. Воробьевтың «Салауат юлы» һәм «Салауат ҡайыны» тигән яҙма материалдарынан һәм үҙе өҫтәп әйткәндәрҙән 1973 йылда Ғ. Хөсәйенов берләштереп, ҡағыҙға теркәгән. — АЭМ, 1973, 552—553-сө б.; БХИ, РЛ, № 241.

[1] Базы — Саҡмағош районындағы бәләкәй йылға.

[2] Салауат Юлаевтың Бөрө, Дүртөйлө, Саҡмағош яҡтары ауылдары аша Ҡазанға яу походы тарихи дөрөҫлөккә тура килмәй. Мәғлүм булыуынса, Е. Пугачевтың Ҡазанға походында башҡорт яусылары менән Кинйә Арыҫланов ҡатнаша. Ә Салауат Юлаев иһә, Оса ҡәлғәһен алғанда яраланғандан һуң, дауаланыу өсөн үҙ йорт-илендә ҡала һәм, Пугачев Ҡазанға киткәс, яңынан ғәскәр туплап, Бөрө ҡалаһын яулап ала, Елдәк ҡәлғәһендә ығына. Ул Бөрөнән ары Дүртөйлә, Саҡмағош яҡтарына үҙенә һуғышсылар йыйыу өсөн сапҡындарын ғына ебәргән булырға тейеш. Был тирәләрҙән Салауат ғәскәренә бик күп кеше ҡушыла. Риүәйәттә шул турала һүҙ барыуы ихтимал. (Яҙып алыусы иҫкәрмәһе.)

**294. Салауат күпере.** 1961 йылда Йылайыр р-ны Березовка ауылында Күгәрсен р-ны Бикбулат ауылы Сафин Әхмәт Хөсәйен улынан (1916 йылғы) яҙып алынған. — Ск. Башк., 1969, № 10; БХИ, РЛ, № 242; БНТ, ПЛ, № 317.

[1] Һүрәм — Күгәрсен районындағы ауыл исеме.

Салауат күпере тигән урын Башҡортостандың Ҡыйғы районында бар. (Материалы и исследования. С. 167.)

**295. Салауат мәмерйәһе.** Силәбе өлкәһенең Усть-Катав ҡалаһында яҙып алынған. — Ск. Башк., 1969. С. 104; БХИ, РЛ, № 243.

**296. Бүгәс менән Салауат ташы.** 1960 йылда Белорет р-ны Исмаҡай ауылы Мостафа Йосоповтан (1900 йылғы, әшсе) Р. Асҡарова яҙып алған. — Ск. Башк., 1969, № 34; БХИ, РЛ № 244; БНТ, ПЛ, № 312.

**297. Ҡәшмәр тауы. Шәһиттәр ҡыраһы.** Ҡыйғы р-ны Үрге Ҡыйғы ауылы Хәйрулла Динмөхәмәт улы Ҡолмөхәмәтовтан (1904 йылғы) Р. Шәкүров яҙып алған. — Ғилми архив. Ф. 3, оп. 63, д. 56, л. 1«а»; БХИ, РЛ, № 245.

[1] Бригадир — хәҙерге генерал дәрәжәһенә тура килә. Салауат Юлаевтың 1774 йылда Е. Пугачев менән осрашыуы, Ҡәшмәр тауындағы һуғыш БДУ талиптары яҙып алған бер риүәйәттә лә сағылыш алған. (Материалы и исследования. С. 158.)

**298. Салауат ауылы.** 1965 йылда Әбйәлил р-ны Асҡар ауылы Мирхәйҙәров Мөғәллим Шәйхаттар улынан (1900 йылғы) Н. Шонҡаров яҙып алған. — **Ғилми архив. Ф.** 3, оп. 47, д. 3, л. 21; БХИ, РЛ, № 246.

[1] Ҡ ы р ҡ т ы — Әбйәлил районындағы тау.

Риүәйәттә телгә алынған Троицк тирәһендәге һуғыштар, тарихи документтарҙан күренеүенсә, 1774 йылдың май айына тура килә. (Очерки, I. С. 242—243.)

Риүәйәт 1969 йылда шул уҡ М. Мирхәйҙәровтан БДУ талибәһе И. Иәһүҙина тарафынан да яҙып алынған. Риүәйәт тексында хәҙерге Салауат ауылы «Элек Кинйәкәй исемендә» йөрөгән, Пугачев яуынан һуң Салауат хөрмәтенә ауылды йәшерен рәүештә Салауат ауылы тип йөрөткәндәр», — тигән юлдар иғтибарға лайыҡ. (Материалы и исследования. С. 171.)

**299. Уҡлы ҡая.** Ғафури р-ны Яҡтыкүл ауылында Вәлиулла сәсән Ҡоломбәтов яҙып алған. — **Ғилми архив.** Ф. 3, оп. 12. д. 261; БХИ, РЛ, № 247.

**300. Хаҡҡый түрә.** Туймазы р-нының Собханғол ауылында Ғайса Хөсәйенов яҙып алған. — АЭМ, 1985.

[1] Ө ҫ ә н — Ыҡ йылғаһының уң ҡушылдығы. Туймазы, Бәләбәй районларына ҡарай.

[2] Б о ғ а с а у — Пугачев.

**301. Муллаян.** 1972 йылда Ауырғазы р-ны Төрөмбәт ауылы Мәһәҙи Назаровтан (1894 йылғы) Ф. Нәҙершина яҙып алған. — Риүәйәт яҙып алыусының шәхси архивында һаҡлана. — БХИ, РЛ, № 248; БПЛ, № 181; БНТ, ПЛ, № 325.

**302. Ҡара сәүкә (Ямғырсы).** 1963 йылда Әбйәлил р-ны Күсем ауылы Хәйретдин Ҡарағужиндан Б. Шәрипов менән В. Әхмәҙиев яҙып алған. — БЛ, № 40; БХИ, РЛ, № 249; БПЛ, № 182; БНТ, ПЛ, № 326.

[1] Иван һәм Яков Твердышевтар — Сембер сауҙагәрҙәре, XVIII быуаттың икенсе яртыһында башҡорт ерҙәрен аяуһыҙ талап, Воскресенск, Эҫем һ. б. заводтар һалдыралар.

[2] Темәс, Мөхәммәт, Салауат, Ниязғол — хәҙерге Әбйәлил районына ҡараған ауылдар (БЛ, 171).

[3] Риүәйәттең Әбйәлил р-ны Асҡар ауылы Мирхәйҙәров Мөғәллим Шәйхаттар улынан Н. Шонҡаров яҙып алған вариантында ваҡиғаларҙың ваҡыты конкретлаштырылмай. Унда Ямғырсы тигән батырҙың Күбәләк-Тиләү, Тамъян, Түңгәүер һәм Ҡатай башҡорттарын берләштереп, башҡорт ерҙәрен талаусыларға ҡаршы һуғышыуы хаҡында һөйләнә. Баш күтәреүселәр Уралтауҙың көн битендәге Ирәндек, Ҡырҡты, Өркәк, Бәләкәй Ирәндек һәм Йыйыҡ йылғаһы менән Һаҡмар араһындағы ерҙәрҙе һаҡлап көрәшкәндәр, — тиелә риүәйәттә. Хикәйә топонимик мәғлүмәт биреү менән тамамлана: «Хәҙерге көндә лә Ниязғол ауылының ҡаршыһындағы Ҡырҡтылағы ике бейек ҡая «Ямғырсы батыр ташы» тип атала. Бының эргәһендә Осҡонташ, Һандыҡташ тигән бейек таштар бар. — Ғилми архив. Ф. 3, оп. 47, д. 3, л. 178.

**303. Салауат ғәскәрендә мариҙар.** 1941 йылда Ҡыйғы р-ны Ҡыйғы ауылы 70 йәшлек Мәғәфүр Баһаутдин улынан Ә. Усманов яҙып алған. — У с м а н о в, 1945, 60—61-се б.; БХИ, РЛ, № 250; БПЛ, № 180; БНТ, ПЛ, № 275.

[1] Ҡ а т а у, Ү ҙ ә н, Л а ҡ л ы, Й ы л а н л ы, В а к и р, Ҡ а р а б а ш  ш а р ы — Башҡортостандың Ҡыйғы һәм Салауат райондарындағы йылға, тау һәм ауыл исемдәре.

**304. Юлҡай менән Бәшәрғол.** 1940 йылда Ғафури р-ны Яктыкүл ауылы Ҡоломбәтов Вәли Фазулла улы Еҙем һыуы башҡорттарынан яҙып алған. — Ғилми архив. Ф. 3, оп. 12, д. 261. Риүәйәттең ҡыҫҡартылған, әҙәби яҡтан ныҡ ҡына эшкәртелгән тексы баҫылған: Усманов, 55—58-се б.; тулы тексы: БХИ, РЛ, № 251; БПЛ, № 179; БНТ, ПЛ, № 276.

[1] Басарҡол — риүәйәттең йөкмәткеһенә ҡарағанда, Салауат районындағы тау.

[2] Е. Пугачевтың 1774 йыл 28 июль Манифесы тураһында һүҙ бара (КВ. С. 217, 218).

[3] Соколовка — бындай исемдә ауылдар күп. Ихтимал, Стәрлетамаҡ районына ҡараған ауыл күҙ уңында тотолалыр бында.

[4] Иҫке Ҡыйышҡы — хәҙерге Ҡырмыҫҡалы районына ҡараған ауыл.

[5] Чесноковка — Өфө районындағы ауыл исеме. Крәҫтиәндәр һуғышы осоронда бында Зарубин Чика етәкселегендә икенсе хәрби штаб (лагерь) торған.

[6] Е. Пугачев 1774 йылдың 14 сентябрендә ҡулға алына.

**305. Ҡаранай батыр менән арандары.** 1975 йылда Стәрлебаш р-ны Ҡаранай ауылы Ниғмәтйән Байбулдин (1894 йылгы) менән Алламорат Ҡотлобаев (1888 йылғы) бабайҙарҙан Ғ. Хөсәйенов яҙып алған. — АЭМ, 1975, 255—257-се б.; БХИ, РЛ, № 252; БПЛ, № 183; БНТ, ПЛ, № 252.

[1] Ҡаранай Моратов — Нуғай юлы Бөрйән волосы йөҙ башы (сотник), походный старшина, Е. И. Пугачевтың полковнигы, 1773—1774 йылдарҙа Крәҫтиәндәр һуғышының атаҡлы башлыҡтарының береһе.

[2] Бында атаман В. И. Торнов (Персианинов) менән бергә Ҡаранай Моратовтың 1774 йылда Минзәлә йүнәлешендә Кама буйҙарында Пугачев ғәскәрҙәре менән етәкселек итеү ваҡиғалары сағылып уҙа булһа кәрәк.

[3] Ҡасай (Ҡасҡын) батыр — Нуғай юлы Тамъян волосы башҡорто, походный старшина. Крәҫтиәндәр һуғышы батыры Ҡасҡын Самаров булырға тейеш. Ул Ҡаранай Моратов менән бер тирәләрҙә — Бөгөлсән, Стәрлетамаҡ, Өфө яҡтарында йәнәш һәм бергә һуғышҡан.

[4] Мораҙым — Нуғай юлы Меркет Мең волосы старшинаһы Мораҙым Сәйетмәмбәтов.

[5] Ҡаранай батырҙың яуҙа үлеүе тарихи хаҡиҡәткә тура килмәй.

Тарихтан мәғлүм булыуынса, Ҡаранай Моратов 1774 йылдың ноябрендә И. Л. Тимашев етәкселегендә каратель отряды тарафынан ҡулға алына һәм Ҡазанға йәшерен комиссия ҡарамағына оҙатыла. Уны 1775 йылдың ғинуарында Мәскәүҙә Е. И. Пугачевты һәм уның иң яҡын арандарын язалау тамашаһын ҡарарға алып барғандар. Шунан Ҡазанга кире ҡайтарғандар. Артабан Ҡаранай батырҙың яҙмышы билдәле түгел.

[6] Ырысай батыр тураһында документтарҙа мәғлүмәттәр осрамай. Тәтер һыуы буйында, Ырысай батыр һуғышып йөрөгән ерҙәрҙә, атап әйткәндә, Тәтер-Арслан ауылында башҡорт осонда күп осраған Ырысаевтар фамилияһы шул батыр исеменә бәйле түгелме икән, тигән фекер тыуҙыра. Тәтер-Арслан ауылынан Рысаевтар үҙҙәре лә фамилияһын элекке яуҙарҙа ҙур батырлыҡтар күрһәткән Ырысай бабайҙан килә тип раҫлайҙар.

[7] «Пугач батша бүләк иткән тун» мотивы иғтибарҙы тарта. Ул, ирекһеҙҙән, А. С. Пушкиндың «Капитан ҡыҙы» повесында Пугачевҡа бүләк ителгән ҡуян тунды иҫкә төшөрә. Ә повестың бер вариантында Пугачевҡа тунды башҡорт бүләк итә. Тимәк, Пугачевҡа кемдең дә булһа тун бүләк итеүе йәки, киреһенсә,

Пугачевтың үҙенең туп бүләк итеүе булған хәл, шунан легендар теҫ алып киткән мотив булыуы бик ихтимал. (Яҙып алыусы иҫкәрмәләре.) Батшаның туп бүләк итеү мотивы ошо китапҡа индерелгән «Салиха туны» исемле риүәйәттә лә бар.

**306. Илекәй килененең зирәклеге.** 1963 йылда Учалы р-ны Ҡаҙанғол ауылы Мостафин Әхмәҙин Мостафа улынан (1872 йылғы) Б. Әхмәтшин яҙып алған.— Ск. Башк., 1969, № 130; БХИ, РЛ, № 253.

**307. Иҫәкәй менән Деңкә.** 1964 йылда Әлшәй р-ны Буранғол ауылы 78 йәшлек Абдрахман Әбделмәновтан Мөхтәр Сәғитов яҙып алған.— Ғилми архив. Ф. 3, оп. 47, д. 1, л. 70; БХИ, РЛ, № 254; БНТ, ПЛ, № 328.

[1] Сураҡай — Әлшәй районына ҡараған ауыл.

**308. Икенсе әрме.** 1911 йылда Ырымбур өлкәһе Новосергеевка р-ны Мерәҫ ауылында йәшәүсе Шәйех ҡурайсынан М. Буранғолова яҙып алған.— Башҡорт атлылары. 11—18-се б.; Ҡулъяҙмаһы — ғилми архив. Ф. 3, оп. 12, д. 219, л. 31—38; БХИ, РЛ, № 255; БПЛ, № 184; БНТ, ПЛ, № 330.

[1] Риүәйәттең йыр текстары баҫылған: БХИ, Йырҙар, I, 75—77-се б.

**309. Ҡаһым түрә.** 1922 йылда элекке Тамъян-Ҡатай кантоны Ҡубәләк-Тиләү волосы (хәҙерге Учалы р-ны) Ишкен ауылы Мөхәмәтйән Фәхрисламовтан яҙып алынған. «Аймаҡ» журналы, 1928, № 1. Усманов, 1944, 19—24-се б.; БХИ, РЛ, № 256; БПЛ, № 185; БНТ, ПЛ, № 331.

**310. Ҡаһым түрә** (вариант). 1966 йылда Стәрлебаш р-ны Ҡаҙаҡбаев Алтынбай Йәнғужа улынан (1879 йылғы) Фәүзиә Рәхимғолова яҙып алған.— БЛ, № 41; БПЛ, № 186; БНТ, ПЛ, № 332. Тарихи дөрөҫлөктө сағылдырыу яғынан был вариант айырыуса әһәмиәтле.

[1] Ә. Әсфәндиәровтың тикшеренеү һөҙөмтәләренән күренеүенсә, Ҡаһым түрә — тарихи шәхес. Фамилияһы — Мырҙашев, исеме — Ҡасим; элекке Стәрлетамаҡ өйәҙенең Айыусы ауылында тыуған, Юрматы ырыуы башҡорто. 1811 йылда Ҡасимға 33 йәш булған. Ватан һуғышына сотник дәрәжәһендә киткән, 1813 йылда һәләк булған. Тарихсының әйтеүенсә, башҡорт полктарында командирҙар булып ғәҙәттә рус хәрбиҙәре торған, башҡа милләт вәкилдәре, шул иҫәптән башҡорттар, командир ярҙамсылары булып хеҙмәт иткән. Улар ҙа ҡайһы ваҡыт тарихи документтарҙа командир булараҡ теркәлгән. Ҡаһым түрә риүәйәттәрҙең, йырҙарҙың һәр ҡайһыһында командир дәрәжәһендә һүрәтләнә.

Тарихи документтар буйынса, Ҡаһым түрәнең атаһы Мырҙаш Туйсин, Мырҙаштың атаһы, риүәйәттә әйтелгәнсә, Ҡаҙаҡбай түгел, ә Туйсы (Туйсин фамилияһы унан килә), Ҡаһым түрәнең улы — Хәбибулла Ҡасимов, Хәбибулланың улы Йәноҙаҡ (риүәйәттә Йондоҙаҡ).— СБ, 1986, 4 февраль. Юрматы башҡорттарынан Ишембай р-ны Ураҙбай ауылы Б. Х. Ғүмәровтан (1897 йылғы) Н. Т. Зарипов яҙып алған вариантта Ҡасим түрә башҡорттарҙы Парижға саҡлы алып барған ҡаһарман итеп һүрәтләнә. Батшанан ер һорағас, тегеһе, был беҙгә ҡаршы сығыр, тип, Гаврилов тигән майорҙан ағыулап үлтертә.— Ғилми архив. Ф. 3, оп. 65, д. 3.

Риүәйәттең 1965 йылда Баймаҡ ҡалаһында йәшәүсе Вахитов Мәғәвиә Ғибат улынан (1905 йылғы) Б. Шәрипов яҙып алған вариантында (БЛ, 90-сы б.) башҡорттарҙың рустар менән бергәләп француздарҙың башҡалаһы Парижға инеүе һүрәтләнә. Рус батшаһының башҡорттарҙан ҡәнәғәт булыуы, Ҡаһым түрәгә полковник исеме биреләүе телгә алына. Батшаның: «Тағы һеҙгә нимә кәрәк?» — тигән һорауына башҡорттар: «Беҙҙе ҡаҙаҡ ыҙаламаһын ине», — тиҙәр.

«Шунан эленйә еренә — Яйыҡ буйына казачий ауылдары һалалар»*, — тиелә риүәйәттә.

Был вариантта Ҡаһым түрәнең фажиғәле үлеме түбәндәгесә аңлатыла: «Батшаның бер майоры, көнсөлләккә килеп, Ҡаһым түрәгә ағыу эсереп ебәрә. Шунда ул үлеп ҡала».

Ҡаһым түрә хаҡындағы йыр менән тамамлана. Йыр текстарын варианттары менән ҡарағыҙ: БХИ, Йырҙар. I, 84—88-се б.

1929 йылда яҙып алынған бер вариантта Ҡаһым түрә Силәбе яғы башҡорто, тиелә. «Ҡаһым түрәнең дәрәжәгә менеүенә сәмләнеп, Владимир ҡалаһында ағыу эсереп үлтергәндәр», — тигән юлдар бар. — Ғилми архив. Ф. 3, оп. 12, д. 275, л. 30. Ошо уҡ төпләмдә (л. 33—35) риүәйәттең бөтөнләй икенсе йүнәлештәге версияһы бар. Бында рустарҙың башҡорттарҙы суҡындырыу ниәтендә ауылдарға тәреләр килтереүе, халыҡтың ҡаршы сығыуы (тәреләрҙе яндырыу, һыуға ташлауҙар), Ҡаһым түрә тигән кантон хәҙрәттең ҡораллы көс туплап, батша ғәскәрҙәренә ҡаршы сығыуы, уның ҡаһарманлығы, яҡын иптәшенең, урыҫ түрәләренә һатылып, Ҡаһымды тотоп биреүе, төрмәгә ябылған Ҡаһымды аҫып үлтерергә тигән ҡарар сығарылыуы, урыҫтар ҡулынан үлмәҫ өсөн, Ҡаһым түрәнең ағыу эсеп үлеүе тураһында һөйләнелә.

**311. Абдрахман Аҡйегет.** 1947 йылда Ҡырмыҫҡалы р-ны Үтәгән ауылы Исмәғил Байымовтан Ғайса Хөсәйенов яҙып алған. — СБ, 1962, 5 октябрь. Ғ. Хөсәйеновтың «Легендаға күскән ҡаһарманлыҡ» тигән мәҡәләһендә. — БХИ, РЛ, № 257; БПЛ, № 187; БНТ, ПЛ, № 334.

[1] Риүәйәттең революцияға тиклем Үтәгән ауылында Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев яҙып алған бер варианты Ә. Усмановтың «1812 йылғы Ватан һуғышында башҡорт атлылары» тигән йыйынтығында (Өфө, 1944, 34—35-се б.) баҫылып сыҡҡан. Бында ла Абдрахман Аҡйегетовтың французлар менән һуғышта күрһәткән ҡаһарманлыҡтары телгә алына. Риүәйәттә геройҙың шәхесен характерлауҙы түбәндәге юлдар бар: «Аҡйегетов француз кампанияһының ҡаһарманы булған. Бер ваҡыт уның тарафынан француз ғәскәренең ротаһы ҡыйратылғас, адъютант: «Әгәр һин грамоталы булһаң, хәҙер генерал булыр инең инде», — тигән.

**312. Йәнһары батыр.** — Бессонов, с. 340; БПЛ, № 188; БХИ, РЛ, № 258; БНТ, ПЛ, № 335.

**313. Йәнтүрә хикәйәһе.** — Усманов, 1944, 26—33-сө б. Рус сәйәхәтсеһе Зефиров яҙмаһы. Тәү башлап 1847 йылда «Оренбургские губернские ведомости» (№ 47) журналында баҫылған. Зефировтың Йәнтүрә менән булған осрашыуы, уның менән һунарға сығыуы, мәжлестә башҡорт ҡурайын тыңлауы хаҡындағы иҫтәлектәрен ҡарағыҙ: Усманов, 1944, 26—28, 31—33-сө б.

Риүәйәттең Мөхәммәтша Буранғолов ҡулы менән яҙылған тәржемә тексы һаҡлана: Ғилми архив. ф. 3, оп. 32, д. 17, л. 218—222. — БХИ, РЛ, 359; БПЛ, № 189; БНТ, ПЛ, № 336.

[1] Дрезден — Германиялағы ҡала.

**314. Әрме.** Йылайыр р-ны ҡурайсыларынан уҡытыусы Ә. Моратов яҙып алған. — СБ. 1971, 13 июль; БХИ, РЛ, № 260; БПЛ, № 190; БНТ, ПЛ, № 391.

[1] Баймаҡ районының Иҫәнбәт ауылында Ғ. Сөләймәнов тарафынан яҙып алынған бер вариантта ваҡиғалар Иван Грозный батшалыҡ иткән дәүерҙәргә

---

* Бында анахронизм күренешенә тап булабыҙ. Сик буйҙарына казачий ауылдар төҙөү 1812 йылғы Ватан һуғышы дәүеренән алдараҡ башланған.

барып тоташа. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 12, д. 269, л. 27—28. Баҫылған: БХИ, Йырҙар, I, 346-сы б.

[1] 1910 йылда хәҙерге Башҡортостандың Ҡөйөргәҙе р-ны Бабалар ауылында Ғиниәт Биҡкужиндан М. Буранголов яҙып алған вариант нигеҙҙә сиреү хеҙмәтенең ауырлығын һүрәтләүгә ҡоролған. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 12, д. 251, л. 17—18; оп. 12, д. 228, л. 44—45. Баҫылган: БХИ, Йырҙар, I, 347-се б.

**315. Перовскийҙың үлем яҙаһынан ҡотолғаны.** 1963 йылда Ырымбур өлкәһе Һунарсы ауылы Ҡотлобаев Миңнеәхмәт Бикмөхәмәт улынан (1877 йылғы) **Й. Солтанов яҙып алған. — БЛ, № 44; БХИ, РЛ, № 261; БПЛ, № 191; БНТ, ПЛ, № 337.**

[1] Д у ң г ы ҙ л а у к у л е — Ырымбур өлкәһендә.

[2], [3] Ҡ о л с о м, һ а ҙ — Ырымбур өлкәһендәге ауыл исемдәре.

**316. Аман.** 1966 йылда Ейәнсура р-ны Үрге Муйнаҡ ауылы Әбделғужин Абдулла Ишмулла улынан Ҡ. Үҙәнбаев яҙып алған. — БЛ, № 59; БХИ, РЛ, № 262; БПЛ, № 192; БНТ, ПЛ, № 338.

[1] Эңгерсе уяҙы, шулай уҡ риүәйәттә телгә алынған башҡа ер-һыу, ауыл исемдәре Ейәнсура районына ҡараган урындар.

**317. Байыҡ сәсән.** 1977 йылда Салауат р-ны Арҡауыл ауылы Миһранова Хәйерниса Хәйерислам ҡыҙынан (1905 йылғы, иҫкесә яҡшы уҡыған) Ф. Нәҙершина яҙып алған. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 73, д. 25, л. 56; БХИ, РЛ, № 263; БПЛ, № 194; БНТ, ПЛ, № 364.

[1] Сәфәрғәле — Хәйерниса инәйҙең ҡайныһы. Байыҡ сәсән һәм уның улы хаҡында информатор ошо Сәфәрғәле ҡарттан ишеткән. Сәфәргәле ҡарт 1926 йылда 88 йәшендә донъя ҡуйған.

«Ҡайным Байыҡ сәсән тураһында күп һөйләй торғайны ла бит кешеләргә. Мин, ни, яулыҡ араһынан ғына ҡарап йөрөгәс, ҡолаҡҡа салынғаны ғына хәтерҙә ҡалған», — ти информатор. Байыҡ сәсән тураһындағы ҡобайырҙы ҡарағыҙ: БХИ, Эпос, 3, 82—91-се б.

**318. Буранбай.** М. Буранголов яҙып алған. — БҠ, 1971, № 11, 12—13-сө б. Матбуғатҡа, «Башҡорт боронғо көйҙәре тарихы» тигән йыйынтыҡтан алып (төҙөүсеһе М. Буранғолов. — Өфө, 1940, 41—45-се б., наборҙан үткән дана), Рәмиғ Ғарипов әҙерләп биргән; БХИ, РЛ, № 264; БПЛ, № 196; БНТ, ПЛ, № 345.

[1] Т и м а ш е в (Т и м а ш е в Н. Н.) — Ырымбур губернаһының эре помещигы. Уның Ырымбур өйәҙендә генә 156 мең дисәтинә ере булған (Очерки, I. С. 56).

[2] Ҡайһы бер яҙмаларҙа Буранбайҙы уҡырға Буранғолдоң улы Ҡаһарман кантон ебәрә. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 12, д. 445, л. 242.

Риүәйәттең «Буранбай-Ялан Йәркәй» исеме менән баҫылып сыҡҡан варианты (БЛ, № 51) төп йөкмәткеһе менән был китапта бирелгән вариантҡа тап килә, тик унда сюжет схематик характерҙа.

«Буранбайҙың яҙмышы» исемендә сыҡҡан (СБ, 1969, 31 ғинуар) вариантта Алыҫ Ҡөнсығышҡа ебәрелгән Буранбайҙың һөргөндән ҡасыу эпизоды ентекләп һөйләнә.

Риүәйәттең М. Буранголов яҙып алған тағы бер тексы бар. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 12, д. 219, л. 175—179. Уның ҡыҫҡаса йөкмәткеһе баҫылған; БХИ, Йырҙар. I, 339-сы б.

М. Буранғоловтың ҡайһы бер яҙмаларында Буранбайҙың сәсән, йырсы булыуы хаҡында мәғлүмәттәр бар: «Буранбай йырлағанда кешеләр иҫтәре китеп тыңлаған, ит тураn ултырғандар ҡулын киҫкән, һыуҙан ҡайтып килгән ҡыҙҙар

һыуын түккән, бала имеҙгән ҡатындар, балаһын осорған, ауыҙына ҡапҡан ашын төшөргән; һуғышып ятҡан кешеләр, бер-береһенә һуғырға ҡулын күтәреп ынтылған килеш, ҡатып ҡалғандар. Хатта ауырыуҙар ҙа ауырыуын онотоп, ырғып тороп ултырған. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 12, д. 445, л. 242. Быңдай һүрәтләү «Ҡиссаи Йософ» әҫәрендәге Йософтоң матурлығын тасуирлаған юлдарҙы хәтерләтә.

**319. Буранбай** (вариант). 1959 йылда Ҡырмыҫҡалы р-ны Юлыҡ ауылы Зәйнулла Ғабдуллиндан (1894 йылғы) яҙып алынған. — БЛ, № 52; БХИ, РЛ, № 265; БПЛ, № 197; БНТ, ПЛ, № 246.

[1] Буранбайҙың ысын исемен дә, тыуған яҡтарын да риүәйәттәр төрлөсә хәбәрләй: берәүҙәрҙә ул Йәркәй, икенсеһендә — Уралбай, өсөнсөһөндә — Ибраһим; бер осраҡта ул Туҡ-Соран буйы егете, икенсе осраҡта — Һаҡмар буйыныҡы (БЛ, 173-сө б.). Данлыҡлы шәхестәрҙе үҙ төйәгенә бәйләп, үҙ ырыуы кешеһе итеп күрһәтергә тырышыу — фольклорҙа йыш осрай торған күренеш. Сюжеттарҙа факттар бутау, анахронизмдар билдәле урын алһа ла, риүәйәт ерлегенең тарихта булған ваҡиғалар менән бәйле булыуы шик тыуҙырмай.

**320. Буранбай** (вариант). 1982 йылда Баймаҡ р-ны Буранбай ауылында А. З. Буранбаевтан Әхмәр Үтәбаев яҙып алып, Ф. А. Нәҙершинаға тапшырған. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 73, д. 72, л. 91; БНТ, ПЛ, № 347.

[1] Был варианттағы күпселек мәғлүмәттәр тарихи дөрөҫлөккә тап килә. Архив материалдарына ҡарағанда, Буранбайҙың фамилияһы — Һөйөндөков, атаһының исеме Ҡотос, фамилияға күскәс — Ҡотосов (риүәйәттәрҙә Ҡотдосов); үҙған быуаттың тәүге сирегендә бында дистанция начальнигы булып эшләгән, аҙаҡ 6-сы кантонда (хәҙерге Баймаҡ р-нының Иҫке Сибай ауылында); ябай ғаиләнән булһа ла, үҙ заманы өсөн гилемле кеше булған, төрки һәм урыҫ телдәрендә яҙышҡан.

1811 йылда кантон башлығы Аҡкол Биктимеров менән Ырымбур помещигы (отставкалағы прапорщик) Соколов әрмегә китергә тейеш кешеләрҙән «һалдат хеҙмәтегеҙҙе еңеләйтеү өсөн» тигән булып, дистанция начальнигы булып эшләгән Буранбайҙан аҡса йыйҙырталар, йыйылған аҡсаны үҙҙәре тотонop, бәләһен Буранбай менән йорт старшинаһы Ибраһимға ябалар. 1812 йылғы һуғыш башланыу сәбәпле тикшереү эштәре туҡталып тора, тик 1816 йылда ғына Ырымбур суд палатаһы төп ғәйеплеләр итеп Биктимеров менән Соколовты таный, Буранбай менән Ибраһимды иһә законһыҙ һалым йыйыуға ризалыҡ биреүҙә ғәйепләп, 1820 йылда һөргөнгә ебәрәләр. Шул уҡ йылдың 24 июлендә улар һөргөндән ҡаса. Артабанғы яҙмыштары билдәле түгел. Архив материалдарында Буранбайҙың туғандары тураһында ла мәғлүмәттәр бар: ҡатыны — Тутыйғош, улы — Нәүширбан, туғаны — Зөлҡәрнәй (СБ, 1983, 3 ноябрь). Дөрөҫлөгө яғынан «Буранбай бәйете» лә иғтибарға лайыҡ. — БХИ, Бәйеттәр, 58—59-сы б.

**321. Ишмырҙа.** 1963 йылда Ишембай р-ны Ғүмәр ауылы Кәримов Рамазан Закир улы менән Ғәббәсов Әхмәт Әхмәтша улынан Т. Килмөхәмәтов менән Т. Йосопов яҙып алған. — БЛ, № 45; БХИ, РЛ, № 266; БПЛ, № 198; БНТ, ПЛ, № 348.

[1] Иҫәкәй — Ишембай районындағы ауыл.

[2] Оҫҡонлотау (Оҫҡонтау) — Ишембай районының Ишәй ауылы эргәһендә.

Ишембай районында киң таралған сюжет. Башҡа варианттары хаҡында ҡарағыҙ: БЛ, 94, 172-се б.

1920—1930 йылдар тирәһендә М. Буранғолов яҙып алған бер яҙмаһан күренеүенсә, Ишмырҙаның түрәләргә ҡаршы баш күтәреп йөрөүе 1882 йылдарға тура килә. Риүәйәттә геройҙың йыраусы булыуы ла һыҙыҡ өҫтөнә алына (Ғилми архив, ф. 3, оп. 12, д. 292, л. 36).

322. Баяс. Баймаҡ районында Хизбулла Мөхәмәтҡолов менән Ильяс Мәғәфүровтан ҡурайсы К. Дияров яҙып алған. — СБ, 1971, 29 июнь; БХИ, РЛ, № 267; БПЛ, № 199; БНТ, ПЛ, № 349. Вар.: Ғилми архив, ф. 3, оп. 12, д. 269; БНТ, ПЛ, № 350.

[1], [2] Күсей, Басай — Баймаҡ районындағы ауылдар.

323. Ҡамал ҡаҫҡын. 1965 йылда Белорет р-ны Ҡоҙашман ауылы Мөхөтдинов Зәйнулла Мөхөтдин улынан Б. Әхмәтшин яҙып алған. — Ск. Башк., 1969, № 123; БХИ, РЛ, № 268; БНТ, ПЛ, № 353.

324. Бейеш батыр. Баймаҡ р-нынан К. Дияров яҙып ебәргән. — СБ, 1969, 26 июнь; БХИ, РЛ, № 269; БНТ, ПЛ, № 352.

[1] Ғата Сөләймәнов яҙып алған бер вариантта рус эшсеһенең фамилияһы — Синзов. Ул Ҡана заводында (Йылайыр районының Ҡананикольск ауылына ҡарай) эшләгән. Насар ҡарағандары өсөн бер завод түрәһен үлтереп ҡасып киткән икән, тиелә. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 12, д. 269, л. 50—52.

325. Бейеш (вариант). 1941 йылда Баймаҡ р-ны Муллаҡай ауылы Усман Хәкимовтан Б. Ильясов яҙып алған. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 12, д. 247, л. 211—216; БХИ, РЛ, № 270; БПЛ, № 200; БНТ, ПЛ, № 351.

[1] Батшаны коронациялау хөрмәтенә уҙғарылған майҙанға тотҡондо килтереү, уның көрәштә еңеп сығыу мотивы «Мөбәрәк» исемле риүәйәттә лә бар. — БЛ, № 48; БНТ, ПЛ, № 431.

[2] Бейеш тураһындағы риүәйәттәр Баймаҡ, Әбйәлил яҡтарында бик киң таралған. Ҡаҫҡындың батырлығы, ҡылған эштәре күп төрлө варианттарҙа һөйләнелеп йөрөй.

Мәҫәлән, 1941 йылда шул уҡ Усман Хәкимовтан яҙылып алынған бер риүәйәттә Бейештең урыҫ байы менән осрашыуы, улар араһындағы алыш, теш һурыу эпизоды бик ентекләп һөйләнә.

Бай, түрәләрҙең Бейештән ҡурҡыуы был вариантта ҡат-ҡат телгә алына. Был йәһәттән айырыуса түбәндәге юлдар характерлы: «Бейеш ҡараҡ байҙарҙың ҙур-ҙур таш лавкаларын (кибеттәрен) аҡтарып инеп, үҙенә кәрәк булған нәмәне алып йөрөгән. Лавка тотоусы байҙар ҡарауылсыларға: «Әгәр Бейеш килһә, һис ҡаршылыҡ күрһәтмәгеҙ, өйгә инеп, үҙебеҙҙе һуйып китмәһен», — тип, алдан әйтеп ҡуя торған булғандар. Бейеш лавкаға килгәндә, ҡарауылсылар йәшенеп ҡалыр булған». Риүәйәттәге: «Бейеш бәһлеүән 1860 йылдарҙа Урал урмандарында ҡасып йөрөгән», тигән мәғлүмәт иғтибарға лайыҡ. Бында Бейеш Ҡабаҡкүл ауылы кешеһе итеп телгә алына. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 12, д. 247, л. 208.

1963 йылда Әбйәлил р-ны Асҡар ауылы Һиҙиәт Сәғәҙәтовтан (1895 йылғы) Н. Хәмитов менән Ә. Сөләймәнов яҙып алған бер вариантта (БЛ, № 56) Бейештең күп ерҙәрҙә йөрөгәнлеге әйтелә. Күп йөрөһә лә, Бейеш ярлыларға теймәгән. Күберәк байҙарҙы, купец, помещиктарҙы талар булған, тиелә. «Бынан тыш Бейеш исеменә бәйле урындар хәҙер Әбйәлилдә лә, Бөрйән яғында ла, Ырымбур яҡтарында ла бар», — тигән мәғлүмәт иғтибарға лайыҡ. Был текста Бейештең Стәрле яғына килеп сығыуы, унда уға теш ҡайраған рус байының батырҙы эҙәрләүе хаҡында һөйләнелә. Теш һурыу мотивы был вариантта ла телгә алына.

1963 йылда Әбйәлил р-ны Салауат ауылы Йосоп Аҫылғужиндан (1880 йылғы) Н. Хәмитов яҙып алған вариант түбәндәгесә: «Бейеш батыр Ҡыҙыл буйындағы Ҡусҡар ауылы егете булған. Үҙенең көсөн һәр урында күрһәтеп йөрөгән. Белорет заводында байҙың ике арғымағы бар икән. Байға: «Һинең арғымағыңды Бейеш урлап китер әле»,— тигәндәр. «Урлар, урламай ни!» — тигән бай. Бейеш батыр төнөн килеп тә еткән, ти. Байҙың имениеһы ҡойма менән уратып алынған булған. Бейеш һарай ҡыйығындағы трансаһын ипләп кенә ҡутарған да, аттарҙы бәйләп, күтәреп кенә алған да сыҡҡан. Шунан аттарҙың береһенә атланып ала ла, байҙың тәҙрәһенә килеп: «Прощай, барин!» — тип ҡысҡырып киткән, ти.

Бейеш, ҡараҡ тиһәләр ҙә, ҡараҡ булмаған. Намыҫланып, һынар өсөн генә ат урлар булған ул» (БЛ, № 57).

Риүәйәттең 1930 йылдарҙа М. Буранголов тарафынан яҙып алынған варианты ла нигеҙҙә ошо сюжетҡа тап килә. (Ғилми архив, ф. 3, оп. 12, д. 275, л. 79—81.)

1970 йылда Башҡортостандың Белорет р-ны Усманғәли ауылы Галин Саҙретдин Ислам улынан (1918 йылғы) Н. Д. Шоңҡаров яҙып алған вариантта Бейештең таҫыллылығы түбәндәге эпизод аша һүрәтләнә: «Аҡкөсөк (хәҙерге Сермән ауылы) старшинаһы Бейеште саҡыра.

— Һин данлыҡлы бур, әгәр булдыра алһаң, минең аҫтағы кейеҙҙе урла, — ти.

— Була ул, — ти ҙә килер көнөн билдәләп әйтеп китә Бейеш.

Старшина үҙенең тирмәһендә йәйрәп ята. Тирә-яҡҡа һаҡсылар, уҫал эттәр ҡуя. Бейеш килә, эттәргә берәм-берәм һөйәк ташлай, улар шуға әүрәп Бейеште үткәрәләр. Һаҡсылар Бейеш килгәнен күрәләр, ипләп кенә ҡарауыллап торалар. Бейеш бер ҙә эскә кермәй, тик тирмәнең икенсе яғынан килеп, кейеҙҙе тишә лә ырғаҡ кейҙереп ат муйынына бәйләп ҡуя. Шунан атына һикереп менеп сабып сыға ла китә. Кейеҙ һөйрәлеп китә лә бара.

Иртәгеһен Бейеш кейеҙҙе старшинаға килтереп бирә.

Был вариантта Бейеш Белорет р-ны Тамъян-Ҡатай кантоны Верхне-Урал өйәҙе Ырымбур губернаһы кешеһе була тиелә. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 70, д. 1, л. 47—48.

1975 йылда Баймаҡ р-ны Йәнйегет ауылында Көнһылыу Әбделмөкминова яҙып алған вариантта Бейештең ғәҙелһеҙлекте йәштән үк күреп үҫкәнлеге телгә алына. Был сюжет буйынса, Бейеш Гөльямал исемле ҡыҙ өсөн бай малайы Харис менән бәрелешкә инә һәм байҙар тарафынан Себергә ебәрелә (БДУ, БӘФҠ, ФФ, д. 1, л. 508—524).

Бейеш батырҙың ҡайһылыр бер кантондың управляющийы менән булған бәрелеше тураһында йыр текстарын ҡарағыҙ: БХИ, Йырҙар, I, 110—112, 340-сы б.

**326. Юркә-Юныс.** Курган өлкәһенең Сафакүл р-ны Атйетәр ауылында М. Нурмөхәмәтов яҙып алған. — СБ, 1969, 23 ғинуар; БХИ, РЛ, № 271; БНТ, ПЛ, № 356.

[1] Аҡйүн — Атйетәр ауылы эргәһендәге ялан исеме.

[2] Юркә — был исем халыҡта төрлөсә аңлатып йөрөтөлә: 1) Юныстың русса исеме «Юрка» һүҙенән «Йүркә»; 2) Юныстың етеҙлеге, йылғырлығы өсөн «юркий» һүҙенән алынған тигән аңлатыу. Вар.: БХИ, Йырҙар, I, 115—116, 341-се б.

**327. Ғәҙебәк Насир.** Ырымбур өлкәһенең Төйлөгән р-ны Аллабирҙе ауы-

лында укытыусы-пенсионер Хәбибйән Баяновтан Ф. Абдуллин яҙып алған. — СБ, 1969, 5 октябрь; БХИ, РЛ, № 272; БНТ, ПЛ, № 357.

[1], [2], [3] Ташлы йылғаһы, Үрге һәм Түбәнге Себенле, Алмалы ауылдары — хәҙерге Ырымбур өлкәһенә ҡараған урын исемдәре.

[4] Юшатыр — хәҙерге Күмертау районындағы йылға.

Риүәйәттең икенсе бер варианты буйынса, кантон түрәләре Fәҙебәк Насирҙы хәйлә менән тоталар; Бикҡол ауылы (Ырымбур өлкәһе Октябрьск районында) сауҙагәре Мәжит тигән кешене ялған ҡасҡын яһап урманға ебәрәләр. Ул Fәҙебәк Насирҙарға килеп ҡушыла, уның менән бергә йөрөй һәм аҙаҡ, бер яйын табып, Fәҙебәк Насирҙы кантон түрәләренә тотоп бирә. Ҡасҡынды Себергә ебәрәләр. — Fилми архив, ф. 3, оп. 12, д. 275, л. 108. Риүәйәттең йыр текстарының варианттарын ҡарағыҙ: БХИ. Йырҙар, I, 117—118-се б.

**328. Ҡыҙырынташ — Ибли йорто.** 1962 йылда Әлшәй р-ны Ташлы ауылы Fариф Fарифуллиндан (1878 йылғы) М. Кәримов яҙып алған. — БЛ, № 53; БХИ, РЛ, № 273; БПЛ, № 203; БНТ, ПЛ, № 358.

[1] Яйыҡһыбы — Меңле ырыуының бер тармағы.

[2] Шафран — Әлшәй районындағы курорт поселогы.

[3] Сураҡай — Әлшәй районына ҡараған йылға исеме.

**329. Иҫтем.** 1965 йылда Стәрлебаш р-ны Табылды ауылы Хөббикужа Дауытованан Рәшиҙә Солтанова яҙып алған. — БЛ, № 49; БХИ, РЛ, № 274; БПЛ, № 204; БНТ, ПЛ, № 359.

**330. Йәнәле.** 1963 йылда Әбйәлил р-ны Ҡырҙас ауылы Сөләймәнов Насир һәм Сөләймәнов Вәсих олатайҙарҙан Н. Хәмитов менән Ә. Сөләймәнов яҙып алғандар. — БЛ, № 50.

[1] Амударъя — Урта Азиялағы йылға.

**331. Айсыуаҡ мажаралары.** 1964 йылда Бөрйән р-ны Ҡотан ауылы Алтынсурина Яҡшыбикә Булат ҡыҙынан (1905 йылғы) Р. Һиҙиәтуллина яҙып алған.— Ск. Башк., 1969, № 125; БХИ, РЛ, № 276; БНТ, ПЛ, № 355.

Яҡшыбикә Алтынсурина Айсыуаҡ ҡасҡындың өйәнсәре. Айсыуаҡ XIX быуат аҙаҡтарында тирә-яҡҡа даны сыҡҡан ҡасҡын һәм ат ҡарағы була тип күрһәтелә.

**332. Хажи карт.** 1959 йылда Әбйәлил р-ны Хәлил ауылы Шириязлан Әтекәевтән яҙып алынған. — БЛ, № 61; БХИ, РЛ, № 275; БПЛ, № 208; БНТ, ПЛ, № 363.

**333. Аҡмулла.** 1965 йылда Әбйәлил р-ны Асҡар ауылында М. Ш. Мирхәйҙәровтан (1900 йылғы) яҙып алынған. — Fилми архив, ф. 3, оп. 61, д. 1, л. 415; БПЛ, № 210; БНТ, ПЛ, № 366.

[1] Хәлил — Әбйәлил районындағы ауыл.

[2] Шафиҡ Тамъяни (Әминев) — башҡорт сәсәне (1858—1936).

[3] Аҡмулланың ҡәбере Силәбе өлкәһендәге Мейәс ҡалаһы зыяратында.

## ТОРМОШ-КӨНКҮРЕШ РИҮӘЙӘТТӘРЕ

**334. Үткән ғүмер.** Баймаҡ р-нынан Сафа Fәлимов яҙып ебәргән. Ырҙың тарихын ул 1923 йыл Темәс ауылында Әбүбәкер Хөсәйеновтан яҙып алған. — СБ, 1969, 28 сентябрь; БХИ, РЛ, № 277; БПЛ, № 212: БНТ, ПЛ, № 368.

[1] Тамъян-Ҡатай ырыуы (кантоны) хәҙерге Белорет, Учалы райондарының ерҙәре.

[2] Ҡанатын йәйеп йоҡлап ятҡан толпарҙың күҙ тейеүҙән үлеүе риүәйәт-легендаларҙа йыш осрай торған традицион мотив.

335. **Тархан ҡыҙы менән Йософ китабы.** 1959 йылда Өфө ҡалаһында йәшәүсе уҡытыусы-пенсионер Вазифа Хөсәйеновананан яҙып алынған. Вазифа Хөсәйенова был әкиәткә тартым легенданы үҙенең ирe Ғәлимйән Суфияр улы Хөсәйеновтан ишеткән. Был сюжет Башҡортостандың Балтас районында таралған булған. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 12, д. 348, 1—5-се б.

«Йософ вә Зөләйха» (йәки «Ҡиссаи Йософ», «Йософ китабы») — Ҡол Ғәли (XIII б.) поэмаһы, төрки донъяһында киң билдәле романтик сюжет. Поэма тураһында ҡарағыҙ: Харисов Әхнәф. Башҡорт халҡының әҙәби мирасы, XVIII—XIX быуаттар. — Өфө, 1965, 190—193; Хөсәйенов Ғ. Ҡол Ғәли. «Ҡиссаи Йософ» // Башҡорт әҙәбиәте тарихы, 6 томда, I том. — Өфө, 1990, 99—127.

[1] Мысыр — Египет. Бында ҙур ҡала мәғәнәһендә булыуы ла мөмкин.

336. **Уҙаман апай.** 1971 йылда Бөрйән р-ны Аҫҡар ауылы Самат Ғәбиҙуллиндан (1940 йылғы) Н. Шонҡаров яҙып алған. Информатор риүәйәтте шул ауылда йәшәгән Харрасов Минһажетдиндан ишеткән. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 65, д. 7, л. 150—151; БХИ, РЛ, № 279; БПЛ, № 214; БНТ, ПЛ, № 370.

337. **Әүәҙбикә.** Миәкә р-ны Илсеғол ауылы Хәмиҙулла Вәлиевтән яҙып алынған — БЛ, № 71; БХИ, РЛ, № 280; БПЛ, № 215; БНТ, ПЛ, № 371.

[1] Хәҙерге Миәкә р-ны, Миәкә совхозының 4-се фермаһы урынлашҡан урын.

338. **Алтынсәс.** 1966 йылда Ейәнсура р-ны Үтәғол ауылы Мотаһар Бирҙеғоловтан (1891 йылғы) И. Буләков менән Г. Әйүпова яҙып алғандар. — БЛ, № 73; БХИ, РЛ, № 281; БПЛ, № 216; БНТ, ПЛ, № 372.

339. **Әлебай менән ҡатыны.** 1968 йылда Ырымбур өлкәһенең Ҡыуандыҡ р-ны Оло Сурай ауылынан Сафагәрәй Килдебаевтан* Ә. Биишев яҙып алған.— БК, 1972, № 1, 14—16-сы б.; БПЛ, № 217; БНТ, ПЛ, № 373; БХИ, РЛ, № 282; БПЛ, № 217; БНТ, ПЛ, № 373.

[1] Алыш кәрәкме, атыш кәрәкме? — башҡорт халыҡ әкиәттәрендә йыш осрай торған традицион мөрәжәғәт формулаһы.

[2] Оҡшаш йөкмәткеле риүәйәттәр шаҡтай киң таралған. 1959 йылда Курган өлкәһенең Әлмән р-ны Аҫҡар ауылы Яманаев Латиф Яманай улынан (1878 йылғы) Н. Шонҡаров яҙып алған вариантта ун ҡаҙаҡ башҡорт далаларына барымтаға килеп, мал ғына түгел, бер башҡорттоң Татлыбикә исемле ҡатынын да алып киткәндәр. Тегенең ирен ҡанға батырып туҡмап, башын күрһәтеп кенә ергә күмеп ҡалдырғандар, тиелә. Күмгән еренән тартып сығарырға ла, аҙаҡ ҡаҙаҡ менән алышҡанда аралашырға ла башҡортҡа этс ярҙам итә. «Ҡайтҡас ире Татлыбикәнс ишек төбөнә, этте түргә ултыртып ҡуйған да: атҡа, ҡатынға ышанма, эткә ышан, — тигән һүҙ бына ҡайҙан килә икән, тип әйткән», ти. (Ғилми архив, ф. 3, оп. 21, д. 2, л. 13—14).

1972 йылда Әлшәй р-ны Маянған ауылы 79 йәшлек Хәмҙә Рамазановтан Ә. Вахитов яҙып алған вариантта ошондай әһәмиәтле деталь бар: ҡаҙаҡ байы менән көрәштә Дүртөйлө тигән башҡорт, хәлс бөтә башлағас, ярҙам һорап, бисәһенә өндәшә. Бисәһе: «Мине малға һатып алдың бит. Мал хөкөмөндә мин. Кем көслө — шупыҡы», — тип, тик тора икән». (Ғилми архив, ф. 3, оп. 65, д. 9, л. 49—95.)

---

* Журналда информаторҙың фамилияһы «Килдейәров» тип, хата баҫылған.

«Ҡатынға ышанғансы, эткә ышан» мотивы 1975 йылда шул уҡ Әлшәй районында яҙып алынған «Иҫке йорт» исемле риүәйәттә лә урын ала. (БДУ, БӘФК, ФФ, д. 1, л. 571—573.)

**340. Ғәйшә.** 1988 йылда Ырымбур өлкәһенең Ҡыуандыҡ р-ны Аҡсура ауылы Ишбирҙе Тойғоновтан Ә. Биишев яҙып алған. — БҠ, 1972, № 1, 16—17-се б.; БХИ, РЛ, № 283; БПЛ, № 218; БНТ, ПЛ, № 374.

**341. Ғилмияза.** М. Буранғолов яҙып алған. — БҠ, 1968, № 6, 19—20-се б. Тәү башлап 1939 йыл «Октябрь» («Ағиҙел») журналында баҫылған, № 7, 36—38-се б.; БХИ, РЛ, № 284: БПЛ, № 219; БНТ, ПЛ, № 375.

[1] Иҫке бей менән Бикбау бей — тарихи шәхестәр. Шәжәрәләрҙән күренеүенсә, 1552 йылда Иван Грозный Ҡазанды алғас, Үҫәргән ырыуынан Бикбау менән, Бөрйән ырыуынан Иҫке бей менән, Ҡыпсаҡтан Ҡараҡужаҡ кенәз, Тамьяндан Шәғәли Шаҡман кенәз — «Мәзкүр дүрт билар Ҡазан шәһәренә барыб Иван Грузныйға мәғлүм улдылар...» (БШ, 71-се б.).

**342. Ғилмияза** (в а р и а н т). Сибай ҡалаһынан Әминә Хәсәйенова яҙып ебәргән. — СБ, 1968, 17 октябрь. — БХИ, РЛ, № 285; БНТ, ПЛ, № 376.

[1] Э т ҡ а р а — йыр тарихына ҡарағанда, Таһир ауылы янындағы тау, варианты — «Атҡарағай». «Тауҙың башында яңғыҙ ғына ҡарағай үҫеп ултыра. Ситтән ҡараһаң, ошо ҡарағай атҡа оҡшай. Шуға күрә «Атҡарағай» тигән исем биргәндәр» (БЛ, 131-се б.).

Был вариантта Ҡыҙрас исемле бер бай ҡарт Ғилмиязаның атаһы менән «ни нәмәгәлер үсләшкән» тигән мәғлүмәт бар. Атаһы үлеп киткәс, «конон ҡыҙынан алам» тип, Ҡыҙрас Ғилмиязаны бер юлаусы ҡаҙаҡҡа һатып ебәргән»,— тиелә.

Бер нисә йыл үткәс, Таһир ауылынан бер кеше Ғилмияза йәшәгән ауылға барып сыға. Мәжлестә Ғилмиязаның йырынан башҡорт ҡыҙы икәнлеген таный ҙа, ауылына ҡайтып һөйләй. Ғилмиязаның тыуған еренә ҡайтыуы хаҡында был яҙмала бер ни ҙә әйтелмәй.

1930 йылдар тирәһендә Баймаҡ р-ны Түбә рудниғында Х. Хамматов яҙып алған бер вариантта Ғилмиязаны урлап алып китеп, «бер йыраҡтағы баярға һатыусы кеше — татар сауҙагәре булған», тип әйтелә. (Ғилми архив, ф. 3, оп. 12, д. 293, л. 20—21.)

**343. Таштуғай.** Хәйбулла р-ны Турат ауылында М. Буранғолов тарафынан яҙып алынған. — БҠ, 1968, № 5, 12—13-сө б. Тәү башлап 1939 йыл «Октябрь» журналында (№ 4, 19—23-сө б.) баҫылған; БХИ, РЛ, № 236; БПЛ, № 220; БНТ, ПЛ, № 377.

[1] А б у л х а и р — Кесе Жуз ҡаҙаҡ ханы (1693—1748).

[2] Т а ш т у ғ а й — хәҙерге Хәйбулла р-ны Мәмбәт һәм Турат ауылдары янында Таналыҡ йылғаһы буйындағы туғай.

Ҡайһы бер варианттарҙа Бөрйән яғынан Таштуғайға килен булып төшкән ҡыҙ ят ерҙе ерһенмәй, аҡылға бер төрлө ирен яратмай. Килененең моңһоуланғанын ҡайныһы һиҙә. «Һинә беҙ был баланы, бәйле ҡолондай, интектереп тотабыҙ, ҡайтарырға кәрәк, үҙ тиңен табып алһын», — ти ул ҡарсығына (БЛ, 132, 133-сө б.).

Көнһылыу — Байғубәк мөхәббәте был варианттарҙа бөтөнләй телгә алынмай.

Риүәйәттең 1930 йылдар тирәһендә яҙып алынған бер варианты «Башҡорт легендалары» китабында баҫылған вариантҡа (132—133-сө б.) яҡын. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 12, д. 275, л. 122—124.

1970 йылдарҙа Хәйбулла районының Аҡъяр ауылында яҙып алынған вариантта ла төп мотив булып ҡыҙҙың сит ерҙе ерһенмәүе, байғош кейәүен яратмауы тора (БДУ, БӘФҠ, ФФ, д. 113, л. 91—93).

**344. Һуңғы йыр (Байрамбикә).** 1935 йылда Белорет районында З. Шәһәр яҙып алған. — Башҡорт халыҡ әкиәттәре. — Өфө, 1939 йыл, 39—51-се б. Ҡулъяҙмаһы: — Ғилми архив, ф. 3, оп. 12, д. 295, л. 44—63. Ошо әҫәр нигеҙендә З. Шәһәрҙең роман яҙғаны билдәле (баҫылмай ҡалған) — БХИ, РЛ, № 287. Риүәйәт-легенданың бер вариантын Ғ. Сөләймәнов яҙып алған, «Байрамбикә фажиғәһе» тигән исем менән «Совет Башҡортостаны» гәзитендә баҫтырып сығарған (1971 йыл, 17 февраль). Бында Байрамбикәнең намыҫын тапаусы батша чиновнигының исеме Гарольд тип күрһәтелә. З. Шәһәр тарафынан әҫәрҙең ныҡ эшкәртелгән булыуы күҙгә бәрелә.

Риүәйәт рус телендә 1936, 1937 йылдарҙа донъяға сыҡҡан. (Белорецкий рабочий, 1936, № 17, 22, 23, 24, 26, 27; ж. «Народное творчество», 1937, № 6. С. 51—58.)

**345. Зөлхизә. М.** Буранғолов яҙып алған. — БҠ, 1968, № 9, 22—23-сө б. Матбуғатҡа «Башҡорт боронғо көйҙәрс тарихы» тигән йыйынтыҡтан алып (типография йыйылмаһы үткән дана. Төҙөүсеһе — М. Буранғолов. — Өфө, 1940, 86—90-сы б., Рәсәй Фәндәр Академияһы Өфө ғилми үҙәгенең китапханаһы. — Инв. 2512). Журналга Рәми Ғарипов әҙерләп биргән, БХИ, РЛ, № 288; БПЛ, № 222; БНТ, ПЛ, № 379.

Риүәйәттең Баймаҡ р-ны Әпек ауылында 110 йәшлек Ҡолмөхәмәт олатайҙан Н. Иҙелбай яҙып алган варианты сюжет үҫеше яғынан был китапҡа бирелгән вариантҡа яҡын тора. Айырма исемдәрҙә һәм айырым деталдәрҙә. Бала саҡтан үк йәрәшелгән егет менән ҡыҙҙың ҡауыша алмауына был вариантта егеттен үлеүе сәбәп була. (Ғилми архив, ф. 3, оп. 12, д. 275, л. 127—134.)

Ҡайһы бер риүәйәттәрҙә Зөлхизә йәштән үк һөйөп йөрөгән егеттең исеме — Арыҫлан, икенселәрендә — Азамат. Ҡарағыҙ: БХИ, Йырҙар, I, 368-се б.

**346. Уралбай.** Әбйәлил р-ны Байым ауылы Галина Гөлйөҙөм Хәбибулла ҡыҙынан (1922 йылғы) яҙып алынган. — БЛ, № 68; БХИ, РЛ, № 289; БПЛ, № 225; БНТ, ПЛ, № 382.

**347. Көнһылыу.** 1959 йылда Мәсетле р-ны Һабанаҡ ауылы Әбелғәлим Ғариповтан (1930 йылғы) Ш. Бәширов яҙып алған. — БЛ, № 170; БХИ, РЛ, № 290; Ск. Башк., 1969, № 79 (ҡыҫҡартылган); БНТ, ПЛ, № 396.

[1] Салйыгут — хәҙерге Мәсетле районына ҡараған ауыл.

**348. Ҡарайгыр.** 1962 йылда Иглин р-ны Иҫке Күл ауылы Зәйнетдин Зәйнисвтән (1866 йылғы) Бәҙретдинов яҙып алған. — БЛ, № 76; БХИ, РЛ, № 291; БПЛ, № 226; БНТ, ПЛ, № 383.

**349. Аҡ ҡарсыға (Яйыҡ).** Баймаҡ р-ны Ғәбдрәшит ауылы Мөхәтдин бабайҙан (фамилияһы күрһәтелмәгән) Ғ. Сөләймәнов яҙып алған. — СБ, 1969, 2 декабрь; БХИ, РЛ, № 292; БПЛ, № 227; БНТ, ПЛ, № 384.

[1] Сыуаш тауы — Баймаҡ районындагы тау.

Риүәйәттең 1930 йылдарҙа М. Буранғолов яҙып алған варианты ла нигеҙҙә был китапта бирелгән сюжетҡа яҡын, тик унда ҡыҙҙың һунарсыға булған мөхәббәте хаҡында бер ни ҙә әйтелмәй. (Ғилми архив, ф. 3, оп. 12, д. 292, л. 56—57.)

**350. Мәхүбә.** Баймаҡ районында Ғата Сөләймәнов яҙып алған. — СБ, 1971, 19 май; БХИ, РЛ, № 293; БПЛ, № 228; БНТ, ПЛ, № 387.

[1] Саукатау, Курғаҙа, Һарыйылға, Карғалы, Себенле йылғалары — Ырымбур өлкәһенә ҡараған урындар.

**351. Ҡалды.** Элек Бөрйән р-ны Исламбай ауылында, хәҙер Сибай ҡалаһында йәшәүсе пенсионер Кәлимулла Ғүмәровтан Ғ. Сөләймәнов яҙып алған.— СБ, 1973, 5 август; БХИ, РЛ, № 294; БПЛ, № 229; БНТ, ПЛ, № 388.

**352. Аҫылкүл.** — «Асылыкуль (Башкирская легенда)» тигән исем менән И. Старков баҫтырып сығарған. — «Огни Востока», 1926, № 2. — С. 11. Риүәйәт бик ныҡ эшкәртелгән, әҙәбиләштерелгән; БХИ, РЛ, № 295.

**353. Тағанташ.** 1967 йылда Баймаҡ р-ны Һәүәнәк совхозының Комсомол бүлексәһендә А. Камалов яҙып алған. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 63, д. 56, л. 73; БХИ, РЛ, № 296; БПЛ, № 230; БНТ, ПЛ, № 392.

**354. Ҡумыҙ.** 1972 йылда Ғафури р-ны Ҡауарҙы ауылы Гөлсөм Мансуровананан Р. Сөләймәнов яҙып алған. Ҡумыҙҙың төҙөлөшө, «Бикбау көйө»нөң ноталары бирелгән. — БК, 1973, № 6, 22—23-сө б.; БХИ, РЛ, № 297; БПЛ. № 231; БНТ, ПЛ, № 390.

**355. Ынйыкай менән Юлдыкай.** Бөрйән р-ны Ҡотан ауылы Ырыҫбаев Ғинийәт Ғиззәтулла улынан (1908 йылғы) М. Сәғитов яҙып алған. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 65, д. 7, л. 155; БХИ, РЛ, № 298; БПЛ, № 232; БНТ, ПЛ, № 386.

[1] Туй баҡҡандар — туй тәрбиәләгәндәр, ҡарағандар. Риүәйәттең фажиғәле ваҡиғаға бәйле вариантын ҡарағыҙ: БХИ, 1954, 298-се б.; БХИ, Йырҙар, I, 1974, 372-се б.

**356. Ашҡаҙар.** М. Буранғолов яҙып алған. — «Шура» журналы, 1915, № 13, 413—415-се б.; БХИ, РЛ, № 299; БПЛ, № 233; БНТ, ПЛ, № 393.

Риүәйәттең башҡа варианттары нигеҙҙә был китапҡа ингән сюжетҡа яҡын тора. Айырма деталдәргә ҡайтып ҡала: бер осраҡта һунарсының исеме — Камали (Ғилми архив, ф. 3, оп. 12, д. 293, л. 149—151); икенсе осраҡта — Мәрҙән (Ғилми архив, ф. 3, оп. 12, д. 275, л. 153—159).

**357. Ҡарасай.** Баймаҡ р-нының Бәләкәй Төрөкмән ауылында Хәсәнов Фәхретдин Аллабирҙе улынан Һ. Шәйҙуллин яҙып алған. — БДУ, БӘФК, ФФ, д. 112, л. 58.

**358. Ҡарасәс.** З. Иғдәүләтов тарафынан яҙып алынған. — СБ, 1968, 4 декабрь; БХИ, РЛ, № 300; БПЛ, № 234; БНТ, ПЛ, № 394.

[1] Текстка «Ҡыуғынсылар йыры» аҙаҡ индерелгән булырға тейеш. Риүәйәттең 1968 йылда Ишембай р-ны Аҙнай ауылы 80 йәшлек Ғүмәр Ғәлиәскәровтан Ә. Вахитов яҙып алған вариантында «Ҡыуғынсылар йыры» юҡ. Был вариантта Йомағужа районы егете Байғужа һал ағыҙырға атаһы менән сығып китә. Ҡарасәстең быға бер ҙә ризалығы булмай: «Эшкә китеүеңә бер күңелем тартмай. Төштәрем дә боларып тора», — ти ул. Байғужа китә. Берҙән бер көн килене сәй эсеп ултырғанда, ҡәйнәһенә төш һөйләй: «Төшөмдә шуны күрҙем. Тиктәҫтән донъя ҡараңғыланып китеп, дауыл ҡупты. Шул саҡ беҙҙең йорт эргәһендә үҫеп ултырған оҙон ҡарағас ағасы төбө-тамыры менән аҡтарылып йығылды ла ҡап-ҡара бураға әйләнде. Шул бураға дауылдан ҡасып барып ышыҡланайым тип, йүгереп барып ҡараһам, бура эсендә әлеге ағастың күмере янып ята...

— Ҡарасәс килен, бик насар төш күргән икәнһең, бер кемгә лә һөйләмә, яҡшыға юрайыҡ та ҡуйайыҡ, — тип, яһалған сәйҙәрен дә эсеп бөтмәй таралышып китәләр.

Был ваҡиғанан һуң күп тә үтмәй, ҡайныһы яман хәбәр алып ҡайта...»

Артабан ваҡиғалар был китапта бирелгән варианттағыса тиерлек. (Ғилми архив, ф. 3, оп. 65, д. 3, л. 440—443.)

Риүәйәт «тәрритләү» менән «диңгелдәү» өлгөләрен һаҡлауы менән айырыуса әһәмиәтле. Ижадтың был төрө боронғоға ҡарай, әммә был текста һуңғы дәүер йоғонтоһо көслө.

359. **Кәмилә.** 1966 йылда Белорет р-ны Бирҙеғол ауылы Ҡунаҡбай Яҡшыдәүләтовтан (1883 йылғы) Х. Хажин яҙып алған. — БЛ, № 75; БХИ, РЛ, № 301; БПЛ, № 235; БНТ, ПЛ, № 395.

360. **Көнһылыу яҙмышы.** Ишембай р-ны Ҡанаҡай ауылы Нәсихә Баймөхәмәтованан (1901 йылғы) Л. Ғафаров яҙып алған. — БДУ, БӘФК, ФФ, д. 1, л. 108—112; БХИ, РЛ, № 302; БПЛ, № 236.

361. **Сабира (Еҙ үксә).** 1976 йылда Баймаҡ р-ның Ниғмәт ауылынан К. Дияров яҙып ебәргән. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 63, д. 57, л. 25—26; БХИ, РЛ, № 303; БПЛ, № 237; БНТ, ПЛ, № 397.

362. **Юлғотло.** Баймаҡ р-ны Темәс ауылы йырсыһы Әхмәҙулла Кәримов менән Баймаҡ һунарсыһы Йыһанур Йәнтилиндан Ғ. Сөләймәнов яҙып алған. СБ, 1971, 26 июль; БХИ, РЛ, № 304 (ҡыҫҡартып бирелде); БПЛ, № 238; БНТ, ПЛ, № 398.

Вар.: Ғилми архив, ф. 3, оп. 47, д. 3, л. 176. Баҫылған: БХИ, Йырҙар, I, 354-се б.

363. **Тоҡан батыр.** XX быуаттың башында элекке Тамъян-Ҡатай кантонында А. Г. Бессонов тарафынан яҙып алынған. — Б е с с о н о в. С. 342; БХИ, РЛ, № 305; БПЛ, № 239; БНТ, ПЛ, № 399.

[1] К о л о й — Мөхәммәтҡолой Кучуков 5-се кантонда (хәҙерге Силәбе өлкәһенең Арғаяш р-ны Ҡолой ауылы) 1800—1825 йылдарҙа башлыҡ булып торған. Үҙенән һуң кантонлығын улы Абдуллаға тапшыра. Ҡолой кантон тураһындағы йыр һәм тарихи мәғлүмәттәрҙе ҡарағыҙ: БХИ, Йырҙар, I, 90—91, 329-сы б.

364. **Кинйәбай.** 1965 йылда Әлшәй р-ны Ҡармыш ауылы Ғатаулла Ғәлимовтан К. Зиятдинов яҙып алған. — БЛ, № 67; БХИ, РЛ, № 306; БНТ, ПЛ, № 400.

365. **Аласабыр.** 1945 йылда Башҡортостандың Ғафури р-ны Тайыш ауылында Мирсаяф Сәйфуллиндан Ж. Ҡейекбаев яҙып алған. — БХИ, 1959, 214—216-сы б.; БХИ, РЛ, № 307; БПЛ, № 240; БНТ, ПЛ, № 401.

[1] О л о И ҙ е л — Волга.

[2] Ҡ ә л с е р Т а б ы н — хәҙерге Ғафури районы.

366. **Саптар юрға.** Ғәлим Хисамов яҙып алған. — СБ, 1971, 21 август; БХИ, РЛ, № 308; БПЛ, № 241; БНТ, ПЛ, № 402. Вар.: Ғилми архив, ф. 3, оп. 12, д. 269 (Ғата Сөләймәнов яҙмаһы).

367. **Ҡуңыр буға.** 1971 йылда Баймаҡ р-ны Байым ауылы Минзифа Галинанан Ҡ. Аралбаев яҙып алған. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 63, д. 56, л. 90; БХИ, РЛ, № 309; БПЛ, № 242.

Халыҡ араһында ошо уҡ исемле эпик поэма ла киң билдәле (БХИ, Эпос, I, 265—296-сы б.).

[1] Ҡәнифә юлы тураһындағы риүәйәттәрҙе был китаптың 197—198-се биттәренән ҡарағыҙ.

368. **Йәноҙаҡ батыр.** Б е с с о н о в. С. 341; БХИ, РЛ, № 310; БНТ, ПЛ, № 411.

369. **Йәҙһәр туғайы.** Б е с с о н о в. С. 339; БХИ, РЛ, № 311.

370. **Салиха туны.** Хәйбулла р-ны Аҡъяр ауылы Мөхәмәҙи Ҡәйеповтан

Ҡ. Аралбаев яҙып алған. Ғилми архив, ф. 3, оп. 63, д. 56, л. 107—108; **БХИ, РЛ**, № 313; БПЛ, № 244; БНТ, ПЛ, № 407.

**371. Йәйәүле Мәхмүт.** Баймаҡ р-ны ҡарттары һөйләүе буйынса К. Дияров яҙып алған. — СБ, 1966, 15—16 июль; БХИ, РЛ, № 314; БПЛ, № 245; БНТ, ПЛ, № 409.

[1] Риүәйәттә халыҡтың «яҡшы батша» хаҡындағы утопик хыялдары сағылған.

Әҫәрҙең икенсе варианты «Бүртә ат» тигән исем менән баҫылған. — **БЛ**, № 60. Был вариант буйынса, Мәхмүт батшаға Сибай кантон өҫтөнән шикәйәт биреү маҡсаты менән бара.

372. **Абдулла һалдат менән Николай батша.** 1965 йылда Баймак р-ны Түбә рудникгында йәшәүсе фельдшер Ф. Ф. Убаповтан (1883 йылғы) Б. Әхмәтшин яҙып алған. — Ск. Башк., 1969. С. 152; БХИ, РЛ, № 315.

**373. Аскын алтыны.** Учалы р-ны Туңғатар ауылы Абдулла Йәрмөхәмәтовтан яҙып алынған. Ҡасан, кем тарафынан яҙып алыныуы күрһәтелмәгән. — **БЛ**, № 85; БХИ, РЛ, № 316; БПЛ, № 247; БНТ, ПЛ, № 412.

**374. Етлекмәгән алтын.** 1965 йылда Баймаҡ р-ны Иҫән ауылы Мөхәмәтов Зөлҡәрнәй Әнәс улынан Б. Әхмәтшин яҙып алған. — Ск. Башк., 1969, № 11; БХИ, РЛ, № 317; БНТ, ПЛ, № 418.

**375. Таш билбау.** Р. Алферов яҙмаларынан. («Уральские сказы») Ж. Кейекбаев тәржемәһе // **Октябрь, 1948. № 10.** 22—23-сө б.; **БХИ, РЛ, № 318.**

**376. Алтын ташы.** 1965 йылда Учалы р-ны Миндәк поселогында йәшәүсе Байгазин Нәжип Ғәбделлатип улынан (1906 йылғы) Б. Әхмәтшин яҙып алған. — Ск. башк., 1969, № 110; **БХИ, РЛ, № 319; БНТ, ПЛ, № 419.**

**377. Сибай яткылығы.** 1965 йылда Сибай ҡалаһында Б. Әхмәтшин яҙып алған. — Ск. Башк., 1969. С. 147.

[1] Кабанов — Көньяҡ Урал тау промышленносы акционер йәмғиәтенең директор-распорядителе (Информатор иҫкәрмәһе).

**378. Магнитка.** М. Моталовтың «Әкиәт һәм хәҡиҡәт» исемле мәҡәләһенән алынды. — СБ, 1966, 15 июль; БХИ, РЛ, № 321; БПЛ, № 248; БНТ, **ПЛ**, № 413.

[1] Әтәстау (Отасы) — Силәбе өлкәһендәге «Магнит» тауының башҡортса исеме. Башҡа төрки телдәрендә «аташ» тип йөрөтәләр.

**379. Ҡорто күп тә, балы юҡ.** Белорет ҡалаһында Р. Алферов яҙып алған. — Ск. Башк., 1969. С. 150; БХИ, РЛ, № 322; БПЛ, № 243; БНТ, ПЛ, № 404.

[1] Иҙелбаш заводы — элек халыҡ телендә Белорет заводын шулай тип йөрөткәндәр.

**380. Әлйән таяғы.** Р. Алферов яҙмаларынан. («Уральские сказы»). Ж. Кейекбаев тәржемәһендә «Октябрь» журналында (1948, № 10, 47—48-се б.) баҫылған. Текст нык әҙәбиләштерелгән.



## ҺҮҘЛЕК

*Балуан (һөйл.)* — пәһлеүән.

*Барымта* — көслөк менән мал йәки башҡа берәй нәмәне баҫып алыу, экономик үс алыу йолаһы.

*Бата уҡыу* — фатиха ҡылыу.

*Бетеү (боронғо төркисә битиг)* — яҙма, яҙыу тигән һүҙ.

*Бире заты* — бәрей, ен заты.

*Геуаһ (ф.)* — шаһит.

*Геуаһлыҡ* — таныҡлыҡ.

*Гәманлы* — йөклө.

*Гөслә* — музыка ҡоралы (гусли?).

*Ғарызнамә (ғәр.)* — мөрәжәғәт, өндәмә.

*Ғиззәт (ғәр.)* — хөрмәт.

*Ғисмәт (ғәр.)* — өлөш.

*Ғәреш (ғәр.)* — алла тәхете. Бында — күк.

*Дәрәуәшкә* (рус.: деревушка) — бәләкәй генә ауыл.

*Дәхи (һөйл.)* — тағы.

*Есаул (яҫауыл, яһауыл)* — казачий ғәскәрҙә офицер дәрәжәһе (пехотала капитан дәрәжәһенә тура килгән).

*Зафуф, зафаф (ф.)* — яңы ғына кейәүгә бирелгән ҡыҙҙы кейәү йортона оҙатыу.

*Иштәк (иҫтәк)* — ҡаҙаҡтарҙың ҡайһы бер ырыуҙары тарафынан башҡорттарға бирелгән атама.

*Йыраусылар* — элек үҙҙәре көй сығарып йырлаған йырсылар. Хәҙер: йырсы.

*Капик (рус.)* — копейка, тин.

*Кармалин* — шыма, ҡыҙыл буҫтау.

*Киһкә (һөйл.)* — киҫкә.

*Кордон (рус.)* — урман ҡарауылы.

*Кәмпер (ҡаҙ.)* — ҡарсыҡ.

*Кәтер* — каторга.

*Ҡол* — бында «ярлы» мәғәнәһендә.

*Ҡорған* — ныҕытма, ҡәлғә.

*Ҡусҡар* — тәкә.

*Ҡәрйә* — ауыл.

*Лопатский хеҙмәт заманы* — көрәк хеҙмәттең төп ҡоралы булған заманда, йәғни элекке заманда.

*Мөдәррис (ғәр.)* — мәҙрәсәлә дәрес биреүсе, өлкән уҡытыусы.

*Мәдих, мәдхиә (ғәр.)* — маҡтау.

*Мәжрүх булыу (ғәр.)* — яраланыу.

*Мәҡам, мәҡан тотоу (ғәр.)* — урынлашыу.

*Мәрке* — йүкә ҡабығынан эшләнгән ҙур күнәк.

*Мәлкүр*, дөрөҫө: *мәҙкүр (ғәр.)* — юғарыла әйтеп үтелгән, бында: бәйән ҡылайым мәғәнәһендә.

*Мәнсаб (ғәр.)* — билдәле урын, дәрәжә.

*Ноҡот һалыу* — ҡырҡ бер бөртөк ноҡот борсағын төрлөсә бүлгеләп күрәҙәлек ҡылыу (рус.: гадать на бобах).

*Нөгәр, нәүкәр, нүгер (монг.)* — һуғышсы, хәрби хеҙмәтсе.

*Нуйын, нойон (монг.)* — феодал. XI быуатта, XII быуаттың беренсе яртыһында монголдарҙың күренекле ырыу башлыҡтары.

*Оһол* — һәләтлек.

*Пот-пәрәсәт (бот)* — мәжүсиҙәрҙә табына торған һын (идол).

*Рисуай итеү (фраз).* — мыҫҡыл итеү.

*Сумарт (һөйл.)* — йомарт.

*Сурыҡ (рус.)* — сорок, ҡырҡ.

*Тарай* — ҡамыш.

*Тарпан* — бында тоҡом (предок) мәғәнәһендә. «Әҙәм тарпаны — маймыл, ат тарпаны — болан» тигән мәҡәл дә бар.

*Тархан (монг.)* — ырыуҙаштары араһында өҫтөнлөк менән файҙаланып, яһаҡ түләүҙән ҡотҡарылған юғары ҡатлам кешеһе һәм шул кешенең нәҫелдән нәҫелгә күсә килгән дәрәжә исеме. Ерле һөйләштәге яңғырашы — *дархан.*

*Төркәй (торҡа)* — һуғышта кейә торған ҡорос баш кейеме.

*Тулғау әйтеү* — эпик әҫәрҙе һамаҡлап, көйләп әйтеү.

*Тура* — боронғо төрки телендә нығытма, крепость мәғәнәһен аңлата. Хәҙерге формаһы: Тора, Тораташ. Текста һүҙҙең боронғо формаһы (Тураташ) һаҡланылған. Бынан тыш, боронғо төркиҙәрҙә «тура» һүҙенең «тәңре» тигән мәғәнәһе лә бар.

*Тыу* — байраҡ.

*Тәмәүесыҡ* — сәпкә тәмеү (тоҫҡап бәреү) өсөн эшләнгән уҡ.

*Фалиж (ф.)* — паралич ауырыуы.

*Фиран туҙҙырыу* — пыран-заран туҙҙырыу, ҡыйратыу.

*Фискал* — бында язалаусы башкиҫәрҙәр мәғәнәһендә.

*Хибес, хәбес (ғәр.)* — төрмә.

*Хорунжий* — революцияға тиклем казачий ғәскәрҙә кесе офицер дәрәжәһе.

*Һарт* — үзбәк.

*Һиммәт (ғәр.)* — эшлекле, тырыш.

*Шимал* (ғәр.) — төньяҡ.

*Эленйә (рус.)* — линия, бында: сик.

*Эшкәлиге (рус.)* — шкалигы.

*Әкә (ҡаҙ.)* — атай.

*Ярымтыҡ (һөйл.)* — шүрәле.

# УКАЗАТЕЛЬ МОТИВОВ

## Мотивы преданий и легенд, возникших на основе древних представлений и верований

1. Землю сотворили утки, вынося ил со дна моря и слепляя из него острова и большую земную твердь — 1.

2. Земля стоит на огромной рыбе и быке — 2.

3. Луна и Уральские горы образовались из обломков лишнего солнца, сбитого метким стрелком — Урал-батыром — 3.

4. Пятна на Луне — две косули и волк, вечно гоняющиеся друг за другом — 5.

5. Пятна на Луне — девушка с коромыслом; или же — гонимая падчерица с коромыслом — 9, 10.

6. Млечный путь (Кош юлы — Дорога птиц) — звездная дорога, образовавшаяся из рассыпанных во время бури журавлиных перьев — 4.

7. Большая Медведица (Етегән йондоҙ — Семизвездие) — ковш великана (Алпа), или же — семь девушек-красавиц — 6, 7.

8. Зухра-йондоз (Венера) — женщина-красавица (с кольцом), поднятая на небо двумя ангелами — 8.

9. Раньше Солнце было ближе к Земле — 12.

10. Горы возникают из песка, глины, выпавшей из обуви великана (Алпа), а также в местах, где захоронены Алпы — 37, 38—40.

11. Подснежник (умырзая) — заклятая девушка, превращенная в цветок (или: проклятая отцом богатого жениха девушка) — 14

12. Первый медведь — человек, чудесно превращенный в медведя — 15.

13. Кукушка — девушка (женщина), обернувшаяся в птицу — 16, 17.

14. Кукушкины цветы — цветы, выросшие из крови погибшего на поле битвы батыра по имени Кэкук — 16.

15. Комар узнает, что самая вкусная кровь — у человека. Когда комар пытается сообщить об этом змее, ласточка отрывает у комара часть жала; змея прокусывает хвост ласточке — оттого у нее хвост раздвоенный — 18.

16. Пение журавлей — предзнаменование беды — 20.

17. Происхождение мелодии, связанной с «пением» журавлей — 20.

18. Оставленного на поле брани новорожденного ребенка вскормил грач—21.

19. Происхождение мелодии в честь новорожденного, которого вскормил грач — 21.

20. Спящего кота нельзя беспокоить: грех — 19.

21. Мухи распространены по всеми миру благодаря шайтану — 22.

22. Люди хитростью ловят водяного. С уходом водяного высыхает и озеро — 23.

23. Нарушение запрета убивать лебедей навлекает беду (умирает герой, его жена и дети) — 25.

24. Уничтожение человеком духов — хозяев, что живут на горном озере в облике двух уток, приводит к исчезновению горы и озера — 24.

25. За хвастовство батыр (силач) был наказан: хозяин горы посылает навстречу батыру медведя; в схватке оба превращаются в камни — 42.

26. Человек хитростью ловит шурале, который заездил его коня — 26.

27. Шурале предсказывает человеку будущее — 27.

28. Всевышний «раздаривает» народам праздники. Башкирский праздник — гости — 33.

29. Происхождение названия бурана связывается с именами двух погибших братьев во время мартовского бурана[1] — 31, 35.

30. Двенадцать лет, названных в честь разных животных, составляют один мусаль. Первый год в мусале — год мыши, ибо мышь первая увидела наступающий год — 13.

31. Происхождение названия бурана связывается с количеством погибших гостей во время мартовского бурана — 36.

32. Запрятывание кладов — 28—32.

33. Явление клада в облике различных живых существ — 30, 31.

34. Приношение жертвы духу-хозяину клада — 32.

35. Дух-хозяин клада «вступает» в добрые взаимоотношения с человеком при определенном условии. Мстит человеку при нарушении соглашения — 30.

36. Невозможность овладения кладом: клад охраняется небом, беркутами, змеем и пр. — 28—32.

### Прочие (сопутствующие) мотивы

37. Нападение врагов — 16, 20, 21.

38. Происхождение топонима, связанного с кровавым побоищем — 20.

39. Трагические ситуации, связанные с социальным неравенством возлюбленных — 14.

### Топонимические легенды и предания

40. Название озера связано с мифическим хозяином и с выводом его коней из подводного мира — 43.

41. Родник образовался там, где ударил копытом конь — 66.

42. Название косогора, камня связано с мифическим конем — крылатым тулпаром — 51.

43. Следы на камне — следы копыт крылатого коня-тулпара — 70.

44. Название камня связано с особым его свойством — «с ревом бросаться» на людей — 41.

45. Следы на камне — следы ног Мухаммета-пейгамбара и его сына — 53.

46. Местность названа по поводу встречи героя с мифическим существом (дау бэрейе) — 55.

47. Происхождение топонима связывается:

а) с кровавым побоищем. Брезгуя крови, озеро уходит (досл.: «улетает») и впадает в другое озеро — 61;

б) с событиями межродовых столкновений — 56—59;

в) с расхищением башкирских земель — 79;

г) с событиями Крестьянской войны 1773—1775 гг — 87, 90;

д) с именем исторической личности (Е. Пугачев) — 92, 191.

е) со свадебным обрядом — 106, 109, 110.

ж) с каким-нибудь событием, случаем — 63, 67, 89, 91, 97, 98, 102, 107, 108, 112, 114, 117, 118, 122.

---

[1] Предания о происхождении названия бурана включены в раздел условно. Этиологический мотив в них позднего происхождения.

48. Местности названы в память о погибших людях, о случившихся несчастьях — 66, 85, 100, 101, 110, 111.

49. Названия местности связываются с именами благородных разбойников, беглецов — 93, 95, 96.

50. Местности названы в память о погребенных людях — 62, 76, 77, 88, 111.

51. Происхождение топонима связывается с именем героя — 50, 66, 68, 72, 104, 105, 114.

52. Местности названы по характеру героя — 120.

53. Название по внешнему сходству вещей и явлений — 81, 100, 103, 116, 118.

54. Происхождение топонима связывается с названием имеющихся вещей и предметов в той или иной местности — 49, 79, 87, 90, 94.

55. Происхождение топонима связывается с качеством и характером предметов — 47, 119, 123.

56. Название местности происходит от некогда сказанных слов — 69, 73, 74, 113, 119.

57. Названия соотносятся с природными особенностями местности, растительностью. «Спор рек» — 46, 47, 48, 49, 119.

58. Происхождение каменных фигур. Свекровь проклинает невестку, ушедшую за водой, — та превращается в камень — 99.

## Сопутствующие мотивы

59. Великаны вырывают деревья с корнями — 37.

60. Сын великана кладет пахаря с лошадьми на ладонь и несет «червей» показать отцу — 37.

61. Святых хоронили на высоких горах — 54.

62. Обряд наречения именем, связанным с поверьем — 50.

63. Набеги (барымта и карымта), межродовые столкновения — 6, 63, 66, 68—73, 76, 77, 88.

64. Попытка насильственно выдать девушку замуж за богатого старика приводит к ее гибели — 103.

65. Закапывание клада — 114.

## Мотивы преданий и легенд, связанных с происхождением племен, родов и их названий

66. Происхождение этнонима «башҡорт» связывается с тотемным животным (волк): «баш» (головной — главный) и «корт» (волк), т. е. главным волком — 124, 125.

67. Происхождение этнонима «башкорт» от «кор башы», что в данном случае означает глава рода — 126.

68. Волк — предводитель. Место, где остановился или исчез волк, стало местом обитания башкир — 124, 125, 128, 132.

69. Место, облюбованное заблудившимися конями, стало местом обитания родового подразделения башкир — 133, 152.

70 Коркуд-ата — предводитель предков башкир — 127.

71. Волчица, медведь, жеребец, лебедь — родоначальники — 129, 135, 136, 144.

72. Шайтан, шурале (леший) — родоначальники — 137, 138, 139, 140.

73. Происхождение и название рода связано с мифическим хозяином земли — 142.

74. Происхождение этнонима «мишар» от «мышар» (рябина) — от родового дерева башкирского племени Усерген. Предками нынешних касимовских мишар (мещеряков) были усергенцы — 148.

75. Возникновение племени связывается с женитьбой героя на ханской дочери, забеременевшей от солнечных лучей — 149.

76. Происхождение названия рода (родового подразделения) связывается с именем первопоселенца (-цев) — 141, 143.

77. Происхождение рода (родового подразделения) и его названия связывается с характером деятельности первопоселенцев — 131, 145, 163.

78. Происхождение названия рода связывается с социальным положением его основателя — 134.

79. Происхождение родового подразделения связывается с ассимиляцией представителей других народов с башкирами — 148, 157, 158, 159, 160, 161.

80. Происхождение родового подразделения связывается с давним событием, случаем — 151, 153, 162, 164.

81. Название рода (родового подразделения) происходит от некогда сказанных слов — (изречений) — 130, 156, 158.

82. История расселения башкирских родов (родовых подразделений) — 132, 133, 147, 150, 151, 153, 154, 155.

83. Царь Иван Грозный раздает земельные грамоты послам башкирских родов — 152, 154, 155, 165.

84. Родословная башкирского племени Кыпсаков (фрагмент) — 140.

### Сопутствующие мотивы этногенетических преданий и легенд

85. Оленя заезживает волосатая старуха, хозяйка местности — 142.

86. Герой избивает чудовищную старуху — та превращается в красивую девушку, на которой он женится — 142.

87. Герой освобождает похищенное Солнце, которое спрятала старуха-убыр (или же: аждаха-дракон) в пещере; на рогах оленя переносит его на другой берег реки, где старуха-убыр теряет свою чародейскую силу — 143.

88. Происхождение названия поселения связывается с количеством братьев, впервые обосновавшихся в данной местности — 138, 166.

89. Происхождение названия курганов связывается с рассказами о состязании царя-девы (кыз батша) и царя-юноши (егет батша) — 133.

90. Происхождение топонима связывается с именем погребенного в данной местности легендарного батыра или святого — 156.

91. Упоминания о кровной мести и набегах (карымте и барымте) — 165.

92. Кровная месть между бурзянцами и кыпсаками — 146.

93. Участие башкир в Отечественной войне 1812 г. — 165.

94. Продажа земли «с бычью шкуру» тептярам — 165.

### Предания и легенды о происхождении селений

95. Деревни и села названы именами их основателей и первых жителей — 166, 174—177, 182—184, 186, 187, 200, 205—207.

96. Название селения объясняется количеством сыновей родоначальника — 166.

97. Происхождение топонима связано с родовой принадлежностью первопоселенцев — 188, 190, 194.

98. Названия деревень связываются с заселением края представителями других народов (народностей) — 172, 173, 182.

99. Происхождение названия деревни связывается с наличием возле него особого камня — 169.

100. Название связано с наличием специального сооружения (крепости) — 185.

101. Деревни названы именами первых основателей — название местности — 197.

102. Название селения связано с обычаем наречения детей особым именем — 170.

103. Происхождение названия селений связывается с каким-нибудь жизненным случаем — 177, 180, 195, 196, 201, 202, 203, 204, 207.

104. Названия деревень происходят от некогда сказанных слов — 168, 171, 191, 193, 205.

105. Деревня, где родился башкирский писатель и государственный деятель Афзал Тагиров — 208.

### Сопутствующие мотивы

106. Человек хитростью ловит лешего (шурале), который заездил его коня — 166.

107. Набеги. Барымта и карымта — 174, 175, 182, 184, 189.

108. Межродовые столкновения — 183.

109. Продажа земли «с бычью шкуру» — 185, 186.

### Мотивы собственно-исторических преданий

Эпоха Средневековья (до XVIII в.)

110. Принятие ислама древними башкирами — 209.

111. Ритуал избрания хана — 217.

112. Межплеменные распри. Кровная месть — карымта. Грабительские феодальные набеги (барымта) — 210, 219, 223—225, 227, 228, 230.

113. Воины-сородичи погибшего героя насыпают курган, доставляя для этого землю издалека, из своего родного края — 219.

114. Нашествие монголов. Вражеские войска уничтожают мирное население, захватывают в плен женщин. Батыры поднимают население на борьбу — 210—214.

115. Платеж податей (дани) Чингисхану — 213, 215.

116. Грамоты биям на пользование землей, выданные Чингисханом — 215.

117. Аксак Тимер (Тамерлан) посылает своих людей, переодетых нищими, в город («в народ»), чтобы узнать причину своих неудач — 216.

118. Сорок ногайских батыров выступают против войска калмыков, вторгшегося в страну — 220, 221.

119. Топонимы, происхождение которых связано с именами ногайских батыров — 220.

120. Кобланды-батыр одолевает Казан-хана — 222.

121. Женщина — предводитель войска — 218.

122. Башкирские послы у царя Ивана Грозного. Похищение одним из них царской ложки и тарелки — 232.

123. Ильсекай-хан, потомок Шагали Шакмана, наказывает сородича за неудачную шутку — 233.

### Первая половина XVIII столетия. События, непосредственно предшествующие Крестьянскому восстанию 1773—1775 гг.

124. Неудачная попытка насильственного крещения башкир — 252, 253.

125. Рост бунтарских настроений в башкирской народной среде — 234, 241, 254.

126. Предводители башкирских восстаний первой половины XVIII века: Акай-батыр, Карасакал, Батырша — 234, 235, 254.

127. Расхищение купцами-заводчиками башкирских земель. Продажа земли «с бычью шкуру» — 237, 238, 239, 242.

128. Продажа башкирами земли купцам-заводчикам за бесценок; подлог купцами документов на право владения землей — 239, 240.

129. Гибель жадного купца, пытавшегося обежать с восхода до заката солнца как можно большее пространство земли, чтобы получить его в собственность — 236.

130. Строительство на башкирской земле заводов, крепостей — 237, 243.

131. Стычка местного башкирского населения с казаками на юго-востоке Башкирии (в начале XVIII в.) — 243.

132. Начальник горноизыскательной партии Брагин, прибывший из Петербурга, заставляет местное население башкир бесплатно работать на него — 245, 246.

133. Свадьба: начальник Брагин пользуется правом первой ночи — 244, 245, 249.

134. Брагин приказывает местным жителям вычерпать воду из озера, чтобы найти оброненное им золотое кольцо. Мэргэн-батыр убивает его — 246.

135. Брагин принуждает кузнеца Амина выковать булатный меч — 249.

136. Кузнец Амин или Сураш-батыр стрелой из лука убивает Брагина — 245, 249.

137. Расправа карателей, мстящих за убийство Брагина, над местными жителями; чтобы избежать расправы, жители переименовывают свои селения — 246, 248—250.

138. Строительство г. Оренбурга вызывает опасения и недовольство местных жителей — 251.

140. Старик-башкир хитростью убивает гарнизонного начальника Ахмар-батыра, задумавшего покорить местное башкирское население правительственным войскам — 229.

### Крестьянская война 1773—1775 гг.

141. Сражение повстанцев с правительственными войсками — 256—258.

142. Повстанцы захватывают заводы — 256, 264.

143. Мстя мулле, пустившему слух, что за Петра III выдает себя самозванец, пугачевцы обстреливают мечеть — 262.

144. Царь Петр III (Пугачев) ведет свое войско на Казань — 256, 293.

145. Богатырство Салавата, его охотничьи подвиги, другие качества — 264, 265, 273, 277, 278.

146. Юный Салават отличился в столкновениях с царскими заводчиками — 267.

147. Башкирские аксакалы вручают меч Салавату — 266.

148. Речь Салавата. Клятва его с углем в руке — 268.

149. Салават приводит отряд башкир Пугачеву — 267, 269.

150. Салават — пугачевский бригадир — 269, 282, 297.

151. Салават — сэсэн (поэт-импровизатор) — 266.

152. Салавату в критической ситуации помогла природа — 81.

153. Население встречает повстанцев с хлебом и солью — 271, 272, 295.

154. Марийцы, чуваши, татары и др. в войсках Салавата — 256, 303, 304.

155. Старик, обитающий в лесу, дает золото Салавату — 273.

156. Места, где сражались повстанцы Пугачева и Салавата — 256, 257, 262, 274, 277, 282, 293, 297.

157. Противники восставших. Салават расправляется с баями — 279, 280.

158. Старшина Кулуй Балтачев доносит на Салавата — 271.

159. Поимка Салавата. Предательство «друга» — 285, 286.

160. Солдаты схватывают Салавата в его доме. Освободиться от цепей помогают дети Салавата — 266.

161. Правительственные войска по доносу недругов нападают на след Салавата и «берут» в лесу — 285.

162. Поражение восстания, расправа над повстанцами — 270, 288, 301, 302, 304, 306.

163. Хрусталь в горах — слезы народа по Салавату — 288.

164. Другие предводители восстания: Юлай Азналин, Кинзя Арсланов, Каранай Муратов — 269, 271, 282, 285, 293, 305.

165. Башкиры — рядовые участники крестьянского движения — 277, 300, 304, 306.

166. Пугачев дарит булатный меч Каранаю, шубу — Рысаю (брату Караная) — 305.

167. Семья Салавата — 282—284.

168. Салават оставляет сына от русской жены у старухи (старика) в Китах — 281.

169. Сын Салавата — кантонный начальник — 283.

170. Семья Салавата бросается в Белую, когда их везли в Уфу на допрос — 287.

171. Оружие и вещи Салавата — 290—292.

172. Клады Салавата и Пугачева — 263, 271, 303.

173. Топонимы, связанные с событиями Крестьянской войны и с именами их предводителей — 257—261, 271, 293—299.

174. Горка, насыпанная шапками пугачевцев — 259, 260.

175. Песни, прославляющие Салавата. Исполнителя песен о Салавате сажают в тюрьму — 289, 304.

176. Бунтарские настроения в башкирской народной среде после Крестьянской войны 1773—1775 гг. — 307.

### Отечественная война 1812 г., армейская служба

177. Старик-башкир дает растерявшемуся белому царю совет обратиться к башкирам, когда в Россию вторглось французское войско — 308.

178. Царь Александр обращается к башкирам с просьбой о военной помощи — 309.

179. Башкирские воины отправляются на Отечественную войну, народ провожает их песнями и кубаирами, сложенными в их честь, Урал-тау «благословляет» выступающих в поход — 308.

180. Пожар в Москве. Бегство Наполеона — 309.

181. Башкирские войска в Париже — 309.

182. Военачальники и батыры башкир — 309—312, 318.

183. Женщина-башкирка в бою с французами, ее храбрость — 313.

184. Царь Александр раздает чины отличившимся участникам войны и грамоты на пользование землей, приказывает поставить памятник в Петербурге — 309—312.

185. Исянгул-турэ (начальник) уговаривает казахов выделять солдат по примеру башкир на линейную службу — 226.

186. Генерал-губернатор Оренбурга Перовский хитростью избегает смертной казни (растроганный игрой башкирских кураистов царь отменяет приговор о смертной казни Перовского) — 315.

187. Солдат после 20-летней службы в царской армии возвращается домой дряхлым стариком — 314.

### Бунтари-беглецы, «благородные» разбойники, кантонные начальники, сэсэны

188. Преследуемый царскими властями казахский батыр скрывается среди башкир — 316.

189. Беглец скрывается среди других родов под чужим именем — 318.

190. «Благородный разбой»: беглец грабит богатых и раздает добытое добро бедным или же: грабит богатых, бедных не трогает — 321, 323—328.

191. Преследования бунтаря-беглеца; ссылка пойманного в Сибирь — 318—332.

192. Беглеца поддерживают односельчане — 321, 322, 326.

193. Беглец участвует в празднествах, устроенных в честь коронации царя Александра II — 325.

194. Социальное положение беглеца — 319, 324, 326.

195. Кантонные начальники — 318.

196. Стычка местного жителя с золотопромышленниками Рамиевыми — 332.

197. Сэсэны. Поэт-импровизатор Акмулла — 317, 318, 320, 333.

198. Топонимы, связанные с историческими событиями — 210, 219, 298.

199. История песен — 302, 310, 314, 318—327.

### Мотивы социально-бытовых преданий и легенд

200. Крылатого коня (тулпара), на котором приехал жених к невесте, сглазили девушки, и тулпар гибнет, свадьба расстраивается — 334.

201. Эпизоды свадебного обряда — 345, 346, 350, 355, 356.

202. Еще до рождения мальчика и девочки родители договариваются поженить их, когда они вырастут. Нарушение этого соглашения — 345.

203. Насильственная выдача замуж молодой девушки за богатого старика и трагическая ее смерть (убийство или самоубийство) — 345, 347.

204. Неудавшаяся попытка насильно выдать замуж девушку за богатого старика; ее побег со своим возлюбленным, их трагическая смерть — 346, 348.

205. Старый муж убивает свою молодую жену и ее возлюбленного — 347.

206. Молодая девушка предпочитает смерть, чем выходить замуж за старика или жить с ним — 346.

207. Лебеди на реке Ай — воплощение душ убитых возлюбленных молодых людей — 347.

208. Птица (белый ястреб) помогает невесте освободиться от нелюбимого жениха — 349.

209. Возлюбленный девушки убивает старика-жениха в день свадьбы. Побег молодых — 351.

210. Осуждая кровопролитие, связанное с насильственной выдачей замуж, камень (досл.: дом — камень) «улетает» на другое место — 347.

211. Хан, нарушив условия состязаний, пытается выдать свою дочь за сына богатого. Дочь предпочитает смерть — 352.

212. Отец-богач ставит трудное условие (задачу) жениху-бедняку, чтобы не выдать замуж свою дочь — 353.

213. Выданная замуж на чужбину девушка тоскует по Уралу и по покинутому там возлюбленному; узнав о гибели, кончает жизнь самоубийством — 343.

214. Брат (или отец) проигрывает в карты девушку, и она вынуждена стать женой нелюбимого человека — 349.

215. Неизвестный беглец с помощью коварной старухи похищает девушку; она кончает самоубийством — 359.

216. Похищенная во время набега (барымты) девушка или замужняя женщина увезена на чужбину — 338—342.

217. Девушка — меткий стрелок, воительница — 336.

218. Переодетая в мужскую одежду женщина, выдавая себя за мужчину, живет среди башкир племени Мин и дожидается мужа, попавшего в плен — 337.

219. Переодетая в мужскую одежду невеста отправляется к своему жениху, находящемуся на солдатской службе — 350.

220. Русский золотоискатель принимает мусульманскую веру во имя овладения девушкой-красавицей. Трагические события — 344.

221. Служитель культа (мулла) ставит трудные условия (задачу) во имя услужения русскому золотоискателю. Месть народа — 344.

222. Юноша во время охоты встречает двух девушек-красавиц; одну из них берет себе в жены — 362.

223. Капризная, разборчивая дочь тархана находит себе возлюбленного благодаря книге «Юсуф и Зулейха» — 335.

224. Молодые находят друг друга во время празднеств — 358.

225. Хорошая собака лучше плохой жены — 339.

226. Кураист пешком доходит до белого царя. Игрой на курае располагает его к себе: тот одаривает дорогой одеждой и конями — 371.

227. Солдат-башкир, прослуживший 25 лет, получает в благодарность от царя грамоту на пользование землей — 372.

228. Женщина-башкирка вылечивает кумысом государя Российской империи, тот дарит ей шубу — 370.

229. Башкир-пчеловод становится рабочим Белорецкого завода, но не выносит малооплачиваемой «огненной работы» и возвращается в родное селение к прежним занятиям — 379.

230. Случайное открытие месторождения полезных ископаемых в различных местах Башкирии — 373, 377, 378.

231. Строительство золотых приисков — 373, 374.

232. Старик-башкир разрешает взять русскому каторжанину «камень», который оказывается самородным золотом — 377.

233. Убийство старшиной и его прислужником старика-бедняка с целью овладения волшебным каменным поясом, где были обозначены полезные ископаемые Урала — 375.

234. Старик-великан при помощи своего волшебного посоха делает добро людям — 380.

235. Изъяснение «на русском языке» между башкиром и русским — 369.

236. Силач в единоборстве одолевает и убивает медведя — 368.

237. Празднества (йыйыны). Егеты, отличившиеся меткостью в стрельбе, силой в состязаниях, а также девушки, получившие первенство в поэтических состязаниях — 341, 344, 346, 352, 355, 358, 363—365.

238. Спор двух кантонных начальников — 363.

239. На скачках первое место занимает конь-тулпар башкира. Он отдает его казахам за табун коней и отару овец. С тех пор не стало тулпаров — 365.

240. История песен, мелодий — 334, 341—343, 345, 350, 351, 354, 356, 358, 359, 361, 362, 366, 367, 371.

241. Трудовые и игровые песни — 354, 358.

242. Происхождение топонимов — 339, 343, 347, 348, 351, 352, 355, 359.

243. Гибель героя от несчастного случая — 356, 357.

## ЙӨКМӘТКЕҺЕ


Риүәйәт һәм легендалар — халыҡ тарихы (*Фәнүзә Нәҙершина*) . 5

**I. Боронғо ырым-ышаныуҙар нигеҙендә барлыҡҡа килгән легенда һәм риүәйәттәр**

Ике үрҙәктең утрау яһағаны . 36
Үгеҙ мөгөҙөндәге ер . . . . 36
Ай менән Урал тауҙарының барлыҡҡа килгәне . . . . . 37
Ҡош юлы . . . . . . . . 37
Айҙағы ике януар . . . . 38
Етегән йондоҙ . . . . . 39
Етегән йондоҙ — ете ҡыҙ (*вариант*) . . . . . . . . 39
Зөһрә йондоҙ . . . . . . 39
Ай менән Зөһрә . . . . . 40
Зөһрә йондоҙ (*вариант*) . . . 41
Айҙағы ҡыҙ . . . . . . 41
Ҡояш ниңә юғары? . . . . 41
Мөсәлдең барлыҡҡа килгәне . 41
Умырзая . . . . . . . 42
Айыу тоҡомо . . . . . 43
Ҡәкүк . . . . . . . . 43
Ҡәкүк (*вариант*) . . . . . 44
Ҡарлуғастың ҡойроғо ниңә айыры? . . . . . . . . . 45
Бесәйҙе ниңә уятырға ярамай? . 45
Сыңрау торна . . . . . 45
Балаҡарға . . . . . . 47
Шайтан себендәре . . . . 49
Эйәле күл . . . . . . . 49
Йөгәмәш тауы . . . . . 50
Аҡҡошатҡантау . . . . . 51
Шүрәле ҡыуағы . . . . . 51
Ярымтыҡ . . . . . . . 51
Тау сере . . . . . . . 52
Аҡтау хазинаһы . . . . . 56
Нух ҡарт хазинаһы . . . . 56
Шыңмаң тауы . . . . . 57
Хазина . . . . . . . . 57
Тимергә тел килгәне . . . . 57
Башҡорт байрамы . . . . 58
Аҡман-Тоҡман бураны . . . 59
Аҡман-Тоҡман (*вариант*) . . 59
Бишҡунаҡ бураны . . . . 60

**II. Ер-һыу, тау-таш һәм башҡа урын атамаларына бәйле риүәйәт, легендалар**

Мүсектау . . . . . . . . 62
Алпа ҡомо-айырытау . . . 62
Алпамыша ҡәбере . . . . 63
Һанайһары менән Шайтанһары тауҙары . . . . . . 63
Үкерташ . . . . . . . 63
Батыр менән айыу таштары . . 63
Йылҡысыҡҡан күл . . . . 64
Йыланһөйрәгән үҙәге . . . . 64
Ҡариҙел . . . . . . . . 65
Ағиҙел менән Яйыҡ . . . . 66
Ағиҙел менән Ҡариҙел . . . 67
Ике Инйәрҙең бәхәсе . . . 67
Ҡалым . . . . . . . . 67
Ҡарагөсөк тауы . . . . . 68
Турат сағылы . . . . . 68
Ҡейәүташ . . . . . . . 70
Бәйғәмбәр ташы . . . . . 71
Ярыштау . . . . . . . 71
Тимербай түше . . . . . 72
Ҡурыуҙы . . . . . . . 72
Ҡараһыйыр яланы . . . . 72
Аҡһыйыр ташы . . . . . 73
Бей кисеүе . . . . . . 73
Ҡанъятҡан баҫыуы . . . . 73
Ҡанлыкүл . . . . . . . 73
Әүлиә тауы . . . . . . 74
Аҙан ташы . . . . . . 74
Ҡалатау . . . . . . . 74
Үлеклекүл . . . . . . . 75
Теләү үҙәге . . . . . . 75
Ҡолкөрәшкән тау . . . . . 75
Фатима туғайы . . . . . 76
Батмағош туғайы . . . . . 76
Толпарбаҫҡан таш . . . . 77
Аҡсатүбә . . . . . . . 77
Дөйөмбәт тауы . . . . . 78
Ырғыҙ . . . . . . . . 78
Ырғыҙ (*вариант*) . . . . . 79
Ҡалмаҡ ятҡан яланы . . . 80
Ҡырғыҙ айырыһы . . . . 81
Аҡын (Аҡҡашҡа) тауы . . . 81

Ҡарасйылға . . . . . . . 81
Яҡтыкүл . . . . . . . 82
Мауыҙлы күле . . . . . . 82
Биллеғылыс . . . . . . 82
Дүкәнһуйған тау . . . . . 83
Антон ҡаяһы . . . . . . 83
Антон ҡаяһы (вариант) . . . 84
Митрофан ташы . . . . . 84
Максим төбә . . . . . . 85
Уҡтау (Уҡлы ҡая) . . . . 86
Хәлил ҡәберлеге . . . . . 86
Даулы ҡыуаҡ . . . . . . 86
Йәҙрәле һаҙ . . . . . . 87
Ҡыҙҙар күле . . . . . . 87
Ар ташы . . . . . . . 88
Йәркәй тауы . . . . . . 88
Көмәс тауы . . . . . . 88
Барҙымса тауы. Ғәле барҙымсаһы . . . . . . . . 89
Атанғол йылғаһы (Атанғол уяһы) . . . . . . . . 89
Һандыҡташ йәки Исламғол ҡурай тартҡан таш . . . . 90
Туйтүбә . . . . . . . . 91
Тураташ . . . . . . . . 91
Һарыбашташ . . . . . . . 92
Инәсбикәташ . . . . . . . 92
Сәлимәҡасҡан таш, Кейәүсапҡан таш . . . . . . . . 93
Йөрәктау . . . . . . . . 93
Әлембикә йылғаһы . . . . 94
Йәүһәр ҡыуағы . . . . . 94
Сәфәртуй яланы . . . . . 95
Килен тауы . . . . . . 96
Шәкирә һаҙаҡ атҡан йәйләүе . 96
Йәнтаҫтарлаған тамағы . . . 96
Ҡоҙағыйүлгән ер . . . . . 96
Абыҙ үлеге . . . . . . . 97
Ҡыҙҙар юлы . . . . . . . 97
Ҡарабелгән туғайы . . . . 98
Сыуаҡбатҡан тау . . . . . 98
Туйенбәт тауы . . . . . 98
Таҡыя сусаҡ . . . . . . 99
Айғыр тауы . . . . . . . 99
Муйнаҡташ . . . . . . . 100
Туҡ йылғаһы . . . . . . 100
Ҡәбәнташ, йәки Байым ташы . 101
Мораҙым йылғаһы . . . . 101
Асылыкүл . . . . . . . . 101
Асылыкүл (вариант) . . . . 102

## III. Ырыу-ҡәбилә, аймаҡ-ара атамаларына ҡағылышлы риүәйәт һәм легендалар

«Башҡорт» һүҙе ҡайҙан килеп сыҡҡан? . . . . . . . 104
Башҡорт ҡайҙан килеп сыҡҡан? (вариант) . . . . . . . 104
«Башҡорт» һүҙенең килеп сыҡҡаны (вариант) . . . . 105
Башҡорттар ҡайҙан килгән? (вариант) . . . . . . . 106
Бүреле йылғаһы (вариант) . . 106
Бүреләр тоҡомо . . . . . 106
Бүреләр араһы . . . . . 107
Алып тоҡомо . . . . . . 107
Ете ырыу . . . . . . . 107
Башҡорттарҙың сығышы . . . 108
Байыулы ырыуы . . . . . 110
Әҙәм тарпаны . . . . . . 110
Айыу араһы . . . . . . 111
Шайтан ырыуы . . . . . 111
Шүрәле нәҫеле . . . . . 112
Ярымтыҡ араһы . . . . . 113
Бирелэр араһы . . . . . 113
Гәйнә ырыуы . . . . . . 114
Толбуйҙар . . . . . . . 114
Әйнә менән Гәйнә . . . . 115
Юрматы ҡәбиләһе . . . . 115
Юрматы, Тәлтем ырыуҙары . . 116
Бөрйән нәҫеле . . . . . . 116
Ҡыпсаҡтар . . . . . . . 117
Үҫәргәндәр . . . . . . . 117
Түңгәүер ҡәбиләһе . . . . 119
Табындар . . . . . . . . 119
Әйлеләр менән табындар . . . 120
Әйлеләр, мырҙалар, тырнаҡлылар . . . . . . . . 120
Урман-Көҙәйҙәр . . . . . 120
Тамъян ырыуы . . . . . 121
Күбәләк-Теләү ырыуы . . . 121
Күбәләк-Теләү нәҫеленең сығышы 122
Мәмбәт . . . . . . . . 124
Биресбаштар араһы . . . . 127
Ҡаҙаҡтар араһы . . . . . 128
Ҡалмаҡ ырыуы . . . . . 129
Мамыт . . . . . . . . 130
Йомран араһы . . . . . 130
Сысҡандар менән Тубалдар . . 130
Иҫән бабаның Таныш буйына күсеп килгәне . . . . . . 131
Башҡорт тарихы . . . . . 131

## IV. Ауыл тарихтары

Бишул . . . . . . . . . 134
Ямаш менән Йомаш ауылдары . 134
Һаҡтау ауылы . . . . . 136
Һыпташ . . . . . . . 136
Этимгән . . . . . . . 137
Учалы . . . . . . . . 137
Һарт Науруз ауылы . . . . 137
Һарт Әптерәш ауылы . . . 138
Мәмбәт ауылы тарихы . . . 138
Ғәлекәй ауылы . . . . . 139
Ҡыуат ауылы тарихы . . . 140
Таулыҡай ауылы . . . . . 140
Үрге һәм Түбәнге Ййыҡбай ауылдарының тарихы . . . . 140
Нигәмәт, Нуғай, Фәйзулла ауылдары . . . . . . . . 141
Убалар ауылы . . . . . . 142

Рәсүл ауылы . . . . . . . 142
Ҡашҡар . . . . . . . 143
Батыр ауылы . . . . . . . 143
Сәйетбаба менән Мырҙаҡай . . 143
Крепостной Йылайыр . . . . 144
Абласкин (Яуымбай) . . . 144
Нәби ауылының тарихы . . . 145
Ҡатай . . . . . . . . . 145
Ҡаңны-Төркәй ауылы . . . 146
Ҡаңны-Төркәй (икенсе версия) . 146
Ҡилкабыз . . . . . . . 147
Ҡаныҡай . . . . . . . 147
Ҡоръятмаҫ ауылы . . . . 148
Ҡыпсаҡ-Асҡар ауылы тарихы . 148
Ҡыпсаҡ-Асҡар ауылы (икенсе версия) . . . . . . . 149
Ҡыпсаҡ-Асҡар (өсөнсө версия) . 150
Ҡандра Әмин . . . . . . 150
Теләүле . . . . . . . 150
Юлыҡ ауылы . . . . . . 151
Мораҙым . . . . . . . 151
Сумар . . . . . . . . 152
Маянғап . . . . . . . 152
Отҡол (Дәүләкән) . . . . 152
Һыҙғы . . . . . . . . 153
Атингән ауылы . . . . . 153
Ибрай ауылы . . . . . . 154
Ҡейекбай (Баштирс) . . . . 154
Абдрахман ауылы . . . . 155
Әпсәләм ауылы . . . . . 155

## V. Тарихи риүәйәттәр

Болғарҙар менән башҡорттар . 158
Бөрйәндәр хан замандарында . 159
Биксура . . . . . . . 160
Бошман-Ҡыпсаҡ батыр . . . 161
Аҡман-Тоҡман . . . . . 162
Ҡыҙтораташ . . . . . . 164
Мөйтән . . . . . . . 164
Аҡһаҡ Тимер . . . . . . 165
Боғрахан (Ҡарахан) . . . . 166
Әбейхан ата . . . . . . 167
Бабсаҡ менән Күсәк бей . . . 168
Ҡарасай менән Ҡаҙы батыр . . 172
Ҡырҡ нуғай батыры . . . . 173
Ҡобланды батыр менән Ҡаҙанхан 174
Тәүәш . . . . . . . . 174
Баяс батыр . . . . . . 175
Бәндәбикә менән Ерәнсә сәсән . 176
Иҫәнғол менән Сәйет балуан . . 178
Өмбәт батыр . . . . . . 179
Тәкәғашҡа . . . . . . . 180
Муйнаҡ ҡарт . . . . . . 181
Ыҫмаил менән Дауыт . . . 183
Алдар-Шымай менән Зөһрә . . 184
Ҡоломбәт батыр . . . . . 185
Илсекәй вәҡиғаһы . . . . . 185
Аҡай батыр . . . . . . 186
Ҡарас менән Ҡараһаҡал . . . 187
Ер һатыу . . . . . . . 188
Байымдың ер һатҡаны . . . 188
Баярҙың ер алғаны . . . . 188
Байҙарҙың заводсыларға ер һатҡаны . . . . . . . 189
Шарлы урман . . . . . . 190
Ыспраувник (Ер һатҡанда) . . 190
Үтәгән . . . . . . . . 191
Морҙағол . . . . . . . 191
Тимерсе Әмин менән Брагин түрә 193
Сураш . . . . . . . . 194
Кирәй Мәргән менән Брагин . . 196
Байбул старшина менән Брагин . 197
Ҡәнифә юлы . . . . . . 197
Брагин ташы . . . . . . 199
Баймаҡ янында ауылдарҙың ике исем алғаны . . . . . 200
Көнәш . . . . . . . . 200
Суҡындырыу . . . . . . 201
Башҡорттарҙың суҡыныуҙан баш тартҡаны . . . . . . 201
Батырша менән Яныш . . . 202
Бүгәс яуы . . . . . . . 203
Ҡыҙҡалатау . . . . . . 204
Петр батша менән Әбей батша һуғышҡаны . . . . . . 205
Петр батша тауы . . . . . 205
Бүгәсәү юлы . . . . . . 206
Бүгәс түбәсәйе . . . . . 206
Бүгәс тауы . . . . . . 207
Яу күргән мәсет . . . . . 207
Пугачев хазиналары . . . . 207
Салауат . . . . . . . . 208
Салауаттың бала сағы . . . 209
Салауат батыр . . . . . 210
Салауаттың ситтә йөрөп ҡайтҡаны . . . . . . . . 212
Салауат телмәре . . . . . 212
Салауат менән Пугачевтың дуҫлашҡаны . . . . . . 214
Салауат менән Ҡараһаҡал . . 214
Салауат менән Балтас . . . 215
Салауаттың Әй буйында булғаны . . . . . . . . 218
Салауат һәм урманда йәшәгән ҡарт . . . . . . . . 219
Салауат Яланғас тауында . . 219
Салауат батыр штабы . . . 219
Салауат батырҙың дары склады 220
Салауат бик ҡеүәтле булған . 220
Салауат батыр мәргән булған . 220
Салауат байҙарға уҫал булған . 221
Салауат приказы . . . . . 221
Салауаттың рус ҡыҙын алғаны . 221
Салауат улы . . . . . . 222
Салауат улы Хәсән . . . . 223
Салауат ҡатыны . . . . . 223
Салауаттың тотолғаны . . . 223
Салауаттың тотолғаны (вариант) 224
Салауат ғаиләһенең һәләкәте . 224
Тауҙарҙа нилектән гәлсәр күп? . 224
Элек Салауат тураһында йырлатмайҙар ине . . . . . 225

Салауаттың ҡылысы менән суҡмары . . . . . . . 225
Салауат ҡамсыһы . . . . 225
Салауат эйәре . . . . . . 225
Пугач менән Салауат юлы . . 226
Салауат күпере . . . . . 226
Салауат мәмерйәһе . . . . 227
Бүгәс менән Салауат ташы . . 227
Ҡәшмәр тауы, Шәһиттәр ҡыраһы . . . . . . . . . 227
Салауат ауылы . . . . . 227
Уҡлы ҡая . . . . . . 228
Хаҡҡый түрә . . . . . . 228
Муллаян . . . . . . . . 229
Ҡара сәүкә (Ямғырсы) . . . 230
Салауат ғәскәрендә мариҙар . 231
Юлҡай менән Бәшәрғол . . . 232
Ҡаранай батыр менән ярандары 234
Иләкәй килененең зирәклеге . . 235
Исәкәй менән Деңкә . . . 236
Икенсе Әрме . . . . . . 236
Ҡаһым түрә . . . . . . 240
Ҡаһым түрә *(вариант)* . . . 242
Абдрахман Аҡйегет . . . . 243
Йәнһары батыр . . . . . 244
Йәнтүрә хикәйәһе . . . . . 245
Әрме . . . . . . . . . 246
Перовскийҙың үлем яҙаһынан ҡотолғаны . . . . . . 247
Аман . . . . . . . . . 248
Байыҡ сәсән . . . . . . . 249
Буранбай . . . . . . . . 249
Буранбай *(вариант)* . . . . 252
Буранбай *(вариант)* . . . . 254
Ишмырҙа . . . . . . . . 256
Баяс . . . . . . . . . 257
Ҡамал ҡасҡын . . . . . 258
Бейеш батыр . . . . . . . 259
Бейеш *(вариант)* . . . . . 261
Юркә-Юныс . . . . . . 264
Ғәҙебәк Насир . . . . . 265
Ҡыҙырын таш — Ибли йорто . 268
Исҭем . . . . . . . . . 269
Йәнәлс . . . . . . . . 269
Айсыуаҡ мажаралары . . . 270
Хажи ҡарт . . . . . . . 271
Аҡмулла . . . . . . . . 271

### VI. Тормош-көнкүреш риүәйәттәре

Үткән ғүмер . . . . . . . 274
Тархан ҡыҙы менән «Йософ китабы» . . . . . . . . 275
Уҙаман апай . . . . . . . 277
Әүәзбикә . . . . . . . . 277
Алтынсәс . . . . . . . . 278
Әлебай менән ҡатыны . . . 279
Ғәйшә . . . . . . . . . 281
Ғилмияза . . . . . . . . 283
Ғилмияза *(вариант)* . . . . 286
Таштуғай . . . . . . . . 287
Һуңғы йыр (Байрамбикә) . . 292
Зөлхизә . . . . . . . . 300
Уралбай . . . . . . . . 303
Көнһылыу . . . . . . . . 304
Ҡарайғыр . . . . . . . . 306
Аҡ ҡарсыға (Яйыҡ) . . . . 307
Мәхүбә . . . . . . . . 309
Ҡалды . . . . . . . . . 312
Асылкүл . . . . . . . . 314
Тағанташ . . . . . . . . 316
Ҡумыҙ . . . . . . . . . 317
Ыһйыҡай менән Юлдыҡай . . 318
Аҡҡаҙар . . . . . . . . 318
Ҡарасай . . . . . . . . 320
Ҡарасәс . . . . . . . . 320
Ҡәмилә . . . . . . . . 324
Көнһылыу яҙмышы . . . . 325
Сабира (Еҙ үксә) . . . . . 326
Юлготло . . . . . . . . 327
Тоҡан батыр . . . . . . . 328
Кинйәбай . . . . . . . . 328
Аласабыр . . . . . . . . 329
Саптар юрға . . . . . . . 332
Ҡуңыр буға . . . . . . . 332
Йәнозаҡ батыр . . . . . 333
Йәҙһәр туғайы . . . . . 333
Салиха туны . . . . . . . 334
Йәйәүле Мәхмүт . . . . . 335
Абдулла һалдат менән Николай батша . . . . . . . 338
Асҡын алтыны . . . . . 339
Етлекмәгән алтын . . . . 339
Таш билбау . . . . . . . 339
Алтын ташы . . . . . . . 341
Сибай ятҡылығы . . . . . 341
Магнитка . . . . . . . 342
Ҡорто күп тә, балы юҡ . . . 342
Әлйән таяғы . . . . . . 343
Шартлы ҡыҫҡартмалар . . . 345
Аңлатмалар . . . . . . 347
Һүҙлек . . . . . . . . 420
Мотивтар күрһәткесе (рус телендә) . . . . . . . . . 422
Һығымта . . . . . . . . 432

## ҺЫҒЫМТА

Халыҡтың тарихи хәтерен һаҡлау йәһәтенән фольклорҙа риүәйәт, легендалар, йыр-риүәйәттәр төп урынды биләй, сөнки уларҙың тәбиғәте күренештәрҙең, хәл-ваҡиғаларҙың килеп сығышын аңлатыуға ҡоролған.

Йөкмәткеләре яғынан риүәйәт, легендалар нигеҙҙә ике ҙур тармаҡҡа айырыла, ул — боронғо ышаныуҙар ерлегендә яралған мифологик легендалар һәм ижтимағи тормошто, көнкүреште сағылдырған риүәйәттәр.

Мифологик легендаларҙағы архаик мотивтарҙың байтағы (ерҙең, күк есемдәренең, ҡайһы бер ырыуҙарҙың барлыҡҡа килеүен аңлатҡандары) донъя халыҡтарының легендалары, мифтары менән ауаздаш. Оҡшаш архаик мотивтарҙың фольклорҙа киң сағылыуы рухи мәҙәниәтебеҙ тамырҙарының ни тиклем тәрәндә булып, дөйөм кешелек тарихы ерлегенә тығыҙ үрелгәнлеген күрһәтеп тора.

Ижтимағи йүнәлешле риүәйәт һәм легендалар төркөмөнә реаль нигеҙе асыҡ булған халыҡ хикәйәләре инә. Бындай хикәйәләрҙә тарихи ваҡиғалар, уларға бәйле шәхестәрҙең эшмәкәрлеге халыҡ аңлағанса яҡтыртыла. Тыуған ер һәм уны сит ил баҫҡынсыларынан һаҡлау, ил эсендәге ғәҙелһеҙлектәргә, милли һәм синфи иҙеүгә ҡаршы көрәш идеяларын сағылдырған риүәйәттәр тәрән мәғәнәле.

Тормош-көнкүреш риүәйәт, легендаларында халыҡтың йәшәү рәүеше, ғөрөф-ғәҙәттәре тураһында төрлө мәғлүмәттәр тупланған. Уларҙан күренеүенсә, феодаль-патриархаль мөнәсәбәттәр тыуҙырған йәшәү шарттары ҡатмарлы, геройҙарҙың яҙмышы ла еңелдән түгел.

Ҡыҫҡаһы, халыҡтың аң үҫешен, эстетик ҡараштарын, быуаттар төпкөлөнән килгән тарихын яҡтыртыу яғынан риүәйәт, легендалар әһәмиәттәрен һис ҡасан юғалтмай торған ҡиммәтле хазиналар ул.

# NETICE

Milletin tarihi özelliklerini koruma cihetiyle gelenek-göreneklerde (Folklarda) rivayet ve efsaneler, türküler-rivayetler önemli yer alırlar. Çünkü onların asıl özellikleri, hadiselerin meydana çıkışıyla sıkı ilişkilidir.

Ozellikleri yönüyle rivayetıer ve efsaneler ikiye ayrılır, birincisi eski adet ve inançların tesiri ile ortaya çıkan efsaneler ikincisi sosyal hayatı pratik hayatta gösteren rivayetler. Efsanevi eski motiflerin zenginliği (Yeryüzü ve gökyüzü isimleri bazı kavimlerin ortaya çıkışını anlatıyor.) Dünya milletleri efsaneleri ile efsanevi eserleri birbirine yakındır. Birbirine benzeyen eski motiflerin gelenek-görenekte geniş yayılmasının sebebi manevi zenginliklerin ne kadar derin ve insanlık tarihi ile de sıkı ilişkide olup büyük yer almasındandır.

Toplumla ilgili rivayet ve efsaneler, halkhikayeleri bölümüne girer. Böylece halk hikayelerinde tarihi vakıalar onlarla ilgili şahıslar, halkın anlayacağı biçimde açıklanmaktadır. Vatanı düşmandan koruma, memlekette olan adaletsizlikleri, milli, sınıf ayrılıkları olarak baskılara karşı mücadelerinden bahseden rivayetler derin mana içerirler.

Hayatta, içtimai rivayetlerde, masallarda halkın yaşantısı örf-adetleri hakkında çeşitli bilgiler toplanmıştır. Onlardan anlaşıldığına göre Feodal-Patriotizm (Vatanperverlik) ilişkileri ve kahramanlarının yaşayışları basit değildir.

Kısacası milletin ilmi gelişmelerini, incelik anlayışlarını, asırlar boyunca tarihi aydınlatan rivayetler, efsaneler önemlerini hiç bir zaman kaybetmeyen milli hazinelerdir.

## РЕЗЮМЕ

Предания и легенды — народные рассказы с исконной установкой на достоверность — представляют интерес как в познавательном, так и в эстетическом отношении. Их связь с действительностью проявляется в историзме и мировоззренческой направленности.

Мировоззренческий пласт башкирских легенд представлен сюжетами мифологического характера: космогоническими, этиологическими и отчасти — топонимическими, этногенетическими.

Мифологические легенды башкир проявляют различного рода сходства с мифами и легендами других народов. Целый ряд мотивов носит универсальный характер, национальное своеобразие выражается в сюжетике, реалиях. Наличие универсальных архаических мотивов и образов свидетельствует о том, что духовная культура предков башкир зародилась в глубокой древности и развивалась в русле общечеловеческой культуры.

Собственно исторические предания башкир отражают реальные события общественного значения в народном осмыслении. Тематически они разделяются на две основные группы: предания о борьбе с внешними врагами и предания о борьбе за социальную свободу.

Многочисленны предания, в которых повествуется о событиях, связанных со старинным бытовым укладом и обычаями башкир. Характеры героев проявляются здесь в драматических обстоятельствах, обусловленных феодально-патриархальными отношениями.

Собранные воедино и приведенные в определенную систему предания и легенды представляют как бы единое, крупноплановое, полисемантическое произведение, при изучении которого проливается свет на самые глубинные корни истории народа.

## SUMMARY

Folk tales and legends, with their original aim at verity and authenticity, are of great interest both from the cognitive and the aesthetic points of view. The fact they bear strong relation to reality is displayed in their historical and their attitudinal orientation.

The attitudinal layer of Bashkort legends is represented by different plots of a mythological character — cosmogonic, etiological and, partly, toponymic and ethnogenetic.

Bashkort mythological legends bear resemblance to other peoples myths and legends. The motif in many a case is universal in character, and the national colouring and peculiarities are to be found in the story-line and in realias. The presence of universal archaic motifs and images testifies to the fact that the spiritual oulture of the forefathers and ancestors of the Bashkorts is rooted in ancient times and has developed as part of human culture in general.

Historical legends proper narrate of real events as perceived and interpreted by the people. Thematically they fall into two main groups: legends which tell about the struggle for social freedom and legends which tell about fighting against their external enemies.

Legends are numerous in which it is narrated of the events as connected with the ancient social structure, tenor of life, customs and traditions of the Bashkorts. The protagonists of these legends display their character and individuality in dramatic circumstances of life as called forth by the existing feudal and patriarchal relationships.

Tales and legends, brought together and arranged in a definite system, present a single whole, a large-scale polysemantic entity the study of which helps to understand the most deeply-rooted history of the people

*«Башҡорт халыҡ ижады» йыйынтығы*
*Рәсәй Фәндәр академияһы*
*Өфө ғилми үҙәге*
*«Почет Билдәһе» орденлы*
*Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында*
*әҙерләнде һәм институттың*
*ғилми советы тарафынан баҫырға раҫланды*

Литературно-художественное издание

# БАШКИРСКОЕ НАРОДНОЕ ТВОРЧЕСТВО

## Том II

## Предания и легенды

(на башкирском языке)

Рәссамдары *А. А. Костин, Р. Р. Нигмәтуллин*
Биҙәлеш мөхәррире *А. Р. Мөхтәруллин*
Техник мөхәррире *З. Ғ. Сыңғыҙова*
Корректорҙары *Ә. З. Хажиева, З. Ф. Ҡунафина*

ИБ № 5294

**Йыйырға бирелде 20.06.96. Баҫырға ҡул ҡуйылды 06.12.96. Ҡағыҙ форматы 60×90 1/16. Тип. ҡағыҙы № 2. Әҙәби гарнитура. Ҡалҡыу ысул менән баҫылды. Шартлы баҫма таб. 27,5+0,25 форз.+0,5 йәбештермә. Шартлы буяу отт. 30,0. Иҫәп-баҫма таб. 30,12+0,45 форз.+0,43 йәбештермә. Тиражы 7000 дана. Заказ № 253. Хаҡы ирекле.**

**Башҡортостан «Китап» нәшриәте. 450001, Өфө, Левченко урамы, 4а.**
**Өфө полиграфия комбинаты. 450001, Өфө, Октябрь проспекты, 2.**